Д.З. Аллабирҙин

Бөрйәнем-йәнтөйәгем

Райондың ер-һыу атамалары

2016

Проект етәксеһе:
Аллабирҙин Дамир Зиннәт улы –
Бөрйән районының
тыуған якты өйрәнеүселәр рәйесе

Редакция коллегияһы:
Шәрипов Р. Б. – Бөрйән районының Мәғариф бүлеге начальнигы, Хәрби-патриотик ойошмаһы етәксеһе
Монасипова Г.М. – Иҫке Собханғол мәктәбе укытыусыһы
Аллабирҙина Х.А. – Ғәлиәкбәр мәктәбе уҡытыусыһы
Ишемғужина В.Ә. -

Рецензенттар:
Н.М.Ҡалмантаев - тарих фәндәре докторы, доцент
И.Н.Байназаров - тарих фәндәре докторы, доцент.

Проект етәксеһе китапты нәшер итеүгә булышлыҡ иткән Бөрйән районы ауылдарының ер-һыу атамалары мәҡәләләрен йыйыусы, туплаусы Бөрйән районының “Таң” гәзите хеҙмәткәрҙәре Баһауетдинова Таңһылыу Сәйфетдин ҡыҙы менән Ғарифуллина Айһылыу Рәжәп ҡыҙына, мәҡәлә авторҙарына, уларҙың информаторҙарына, яҙып алыусыларына һәм етәкселәренә, тарих һәм тел уҡытыусыларына рәхмәтен белдерә.

Был китапта Бөрйән районының ауылдар биләмәләренең ер-һыу атамалары – ғәйәт киң төбәктә барған тарихи ваҡиғалар: ауыл, утар, йәйләү, ҡышлау, көҙләү урындары, тау, йылға, шишмә, уйһыулыҡ, болон, ялан, туғай, урман, сабын исемдәре бирелеп онотола барған атамаларҙың бер өлөшө генә яҙылған. Уларҙы һанай китһәң бик күптәр, том-том китап сығарырлыҡ. Китап тарихи факттарға, быға тиклем баҫылып сыҡҡан һәм архив материалдарына, информаторҙар мәғлүмәттәренә нигеҙләнгән. Уның фәнни – танып белеү, тәрбиәүи әһәмиәте бар. Китап киң ҡатлам уҡыусыларға, тыуған яҡ тарихы мәҙәниәте менән ҡыҙыҡһыныусыларға тәғәйенләнгән.

Күсереп баҫҡанда китапҡа һылтаныу мотлаҡ.

Бөрйән районының картаһы



Бөрйән иле

Бишек яһай, әйҙә маһай,
Бөрйән иле - үрсер ил.
Ауыл һайын туйҙар бара,
Ышанмаһаң – күрсе кил.
Билен бөгөп бармаһа ла,
Бөрйән бит ул - бөтмәҫ ил.
Үҙенән ҙур хыялы бар,
Хыялы ил – үлмәҫ ил.

Ирек Кинйәбулатов

Бөрйәнем

Самат Ғәбиҙуллин

Швейцария тиҙәр Бөрйәнемде
Һәм «икенсе» тип тә ҡуялар.
Ошо «икенсе»не ишеткәндә
Йөрәгемдә дауыл ҡуҙғала.
Әле лә аҙ түгел тауҙарымда
«Швейцария» эҙләп йөрөгәндәр.
Берүк, заман, шундай әҙәмдәрҙе
Алыҫ йөрөт әле Бөрйәндән.
Мең йылдарҙы һалып баш аҫтына,
Тарих серем итә Шүлгәндә.
Ә ниндәйҙер ғилем әһелдәре
Каповаңы* эҙләп килгәндәр.
Бында – Бөрйән!
Әле уҡылмаған
Эпопея һәр бер һуҡмағы.
– Экзотика! – тимә,
шул тарихты
Булдыра алһаң, уҡы туҡталып.
Тауҙары таш түгел,
уҡмашҡандар
Әсе тирҙән, ҡандан,
күҙ йәштән.
Монарланып ятҡан Юрматауҙың
Һәр киртләсе – изге бер кәштә.
Мәсем менән Баҙал күкрәгенә
Уйылып ҡалған Һәүбән эҙҙәре.
(Һуҡмаҡтағы һәр бер даға эҙен
Мин үбергә әҙер теҙләнеп.)
«Швейцария» тиҙәр.
Юҡ, Бөрйән был –
Оло Уралымдан бер саҡҡы.
Шул саҡҡыны күрә алһа ғына
Ултыртыр ул түргә ҡунаҡты.

1974, 1992

«...башҡорт халҡының сәсәге үҫәргән, түңгәүер, бөрйән халыҡтарылыр. Былар араһында иң сафы бөрйәндәрҙер».

Әхмәтзәки Вәлиди

Йөрәгем

Ҡәҙим Аралбай

Ҡайҙа икән минең теге ваҡыттағы йөрәгем –
Турат тауы текәһенә йүгереп менеп йөрөгәнем,
Ҡыр(ы)ҡ ата бабаларын арбаған-өйрәткәнем,
Белем-ғилем даръяһында балыҡ кеүек йөҙгәнем, —
Ҡайҙа икән шул саҡтағы йөрәгем, ау, йөрәгем?!

Ҡайҙа икән минең теге ваҡыттағы йөрәгем –
Ҡурыуҙы, Баҙал тауына "ыһ" ти итмәй менгәнем,
Бөрйән урмандары аша йәйәү яңғыҙ йөрөгәнем,
Яҙғы ташҡын Ағиҙелде балам менән үткәнем, —
Ҡайҙа икән шул саҡтағы йөрәгем, ау, йөрәгем?!

Ҡайҙа икән минең теге ваҡыттағы йөрәгем –
Ҡәләмдәш ағайҙар менән яғалашҡан мәлдәрем,
Өйрәнеп тә, өйрәтеп тә, йөкмәп Союз ғәмдәрен,
Бәғзе эйәрҙәш дуҫтарҙың ишетеп әр-һөрәнен, —
Ҡайҙа икән шул саҡтағы йөрәгем, ау, йөрәгем?!

Ҡайҙа икән минең теге ваҡыттағы йөрәгем –
Янғантауға елеп менгән бер таяҡһыҙ-терәүһеҙ,
Сәғәт кеүек тигеҙ һуҡҡан, хилафлыҡтан көйрәүһеҙ,
Ут ҡараштарға баш эймәй, хис-тойғоға өнәүһеҙ, —
Ҡайҙа икән шул саҡтағы йөрәгем, ау, йөрәгем?!

Юҡ теге саҡтағы йөрәк. Ул туҙған да тетелгән,
Ҡаны китаптарға һеңгән, ҡағыҙ кеүек өтөлгән.
Нахаҡ һүҙҙәр-уктар менән яраланып бөтөлгән,
Замандың ут-ялҡынында сатнаған да кителгән...
Сыҙарһың тағы күпмегә, йөрәгем, ау, йөрәгем?!

1999

Географик атамалар — тыуған еребеҙҙең йөҙәр генә түгел, ә күп меңәр йылдар буйы быуындан быуынға, телдән телгә тапшырыла килгән хәтер хазинаһы. Был байлыҡты йыйыу һәм ғилми нигеҙҙә өйрәнеү эше һәр ваҡыт көнүҙәк булып ҡала. Ә инде көндәлек ҡулланылыш, тел мәҙәниәте йәһәтенән ҡарағанда, ер-һыу атамаһының дөрөҫ яҙылышы айырыуса әһәмиәтле.

Топонимия мираҫыбыҙҙы өйрәнәйек, тикшерәйек, кәҙерләп һаҡлайыҡ!

Рәшит ШӘКҮР.

Бөрйәнем

С. Ғәләүетдинов
Ғ. Дәүләтбирҙин һүҙҙәр көйө,

Сал тауҙарым, үҙәндәрем
Һаҡлай тарих, ер йәмен.
Гүзәлдәрҙән-гүзәлһең һин,
Моңдар иле – Бөрйәнем.
Килегеҙ, дуҫтар, килегеҙ
Мөғжизәле Бөрйәнгә.
Халҡымдың бай йолаһы бар –
Оло хөрмәт килгәнгә.

Ағиҙел йылғаһы

Ҡаһарманлыҡҡа тиң

Ер-атамалары фәнни телдә топономика тип атала. Икенсе төрлө әйткәндә, “ерҙең хәтер китабы”. Ысынлап та шулай икән? Исемдәрҙе былай ғына ҡушмайҙармы? Юҡ, һәр атама үҙе тарих, үҙе бер хәтер.

Ер-һыу атамаларын йыйыу, киләһе быуынға, киләһе быуынға еткереү оло һәм ҡатмарлы эш китапҡа меңдән бер өлөшө генә һыйған. Беҙҙең тарихи һәм мәҙәни хазинабыҙ төпһөҙ. Был изге эшкә баймаҡтар ҙа, бөрйәндәр ҙә тотондо, хазиналарыбыҙ өлгөләрен ҡәҙерләп йыйып, китап кимәленә еткереп, исем туйҙарын үткәрергә яҙһын.

“Баймаҡ районының ер-һыу атамалары” китабының авторы,
Баймаҡ ҡалаһында йәшәүсе Ә.З.Сәйғәфәров

Мәсем, Баҙал тауҙары

Иртәнсәкәй тороп юлға сыҡтым,
Һаҡмар буйы йоморо юл менән.
Килә торғас йырҙап әйҙем,
Етмеш ике төрлө уй менән.

Һандуғасҡай һайрай үҙ еребеҙҙә,
Беҙ йөрөйбөҙ кеше иләндә.
Аҡ йомортҡа кеүек тәгәрләтеп,
Ризыҡ йөрөтә беҙҙе күп илгә.

Мәсем менән Баҙал бейегенән,
Күренеп кенә ята күп ерҙәр,
Ашап ҡына эсмәй, уйнап-көлмәй,
Үкенеп кенә йөрөй күп ирҙәр.

Мәсем менән Баҙал артынан,
Дөһөрләтеп киттек мал менән,
Сәскә кеүек үткән ғүмерҙәрҙе
Аңғартайыҡ һеҙгә йыр менән.

Мәсемдәргә сығып йәйләгәндә
Малға рәхәт күләгә саңдары,
Йәмлә халыҡҡа ишетелгән
Беҙҙең Баҙал дандары.

Мәсем менән Баҙал сәскәһе,
Хушбуйҙарҙан еҫте еҫтерә.
Көндөҙҙәрҙә мәжлес ҡорорҙар ине,
Уйын-көлкө булды кистәре.

Бәйгеләрҙә тотоп сабырҙар ине
Мәсем өҫтәрендә ат менән.
Мәсемдәргә сығып йәйләгәндә
Күрешәләр ине ят менән.

Бөрйән районы, Иҫке Мөсәт ауылы 74 йәшлек Ғүмәрова Рәбиғанан 1957 йылдың 12 авгусында БДУ-ның III курс студенты Сәғитов Мөхтәр яҙып алған.

Авторҙан

Һеҙ ҡулға алған китап Бөрйән районы биләмәләрендәге ер-һыу атамалары һәм уларҙың барлыҡҡа килеү тарихы тураһындағы легендаларҙы һәм һүрәтләмәләрҙе үҙ эсенә ала.

Бөрйән иле – сал тарихлы ил. Башҡорт халҡының эпик ҡомартҡылары ошо гүзәл төбәктә һаҡланып ҡалған. Бөрйәнде күрмәгән – Башҡортостанды белмәгән, тиҙәр. Бөрйән – бик боронғо ер. Уның боронғолоғон башҡорт халҡының мәшһүр “Урал батыр”, “Аҡбуҙат”, “Бабсаҡ менән Күсәк” эпостары дәлилләй.

«Бөрйән – ул Башҡортостандың йөҙөк ҡашы», – тигән Әхмәтзәки Вәлиди. Ҡайҙа аяҡ баҫма, Бөрйәндең һәр ташы, һәр һуҡмағы, гүйә, тарих һөйләй. Ошондай хоҙур тәбиғәтле ерҙә тыуып үҫеп, районыбыҙҙың данын республика кимәленә күтәргән арҙаҡлы шәхестәребеҙ менән беҙ хаҡлы рәүештә ғорурлана алабыҙ.

“Бөрйән” һүҙенең килеп сығышы тураһында нимә беләһегеҙ? Имеш, бер ир кеше аҙашып йөрөй торғас, урман төпкөлөндә биш бүрегә тап була. Бүреләр был кешегә теймәйҙәр. Кешенең дә улар эргәһенән киткеһе килмәй, сөнки башҡа йән эйәһе юҡ, имеш. Биш ҡорт менән бер йән шулай йәшәй башлайҙар. Күпмелер ваҡыттан һуң, бүреләр ҡатын кешене табып алып ҡайталар. Ир менән ҡатын ғаилә ҡора. Уларҙың балалары тыуып, үҫеп тарала тора. Иҙрис исемлеһе бер урынға, Ҡолсораһы – икенсе, башҡалары шулай уҡ үҙҙәре оҡшаған ергә урынлашалар.

Бөрйән ерендәге ауыл атамалары шул балаларҙың исемдәре икән. Бөрйән һүҙенең килеп сығышы “бер йән”гә барып тоташа, ә милләттәре “бишҡорт”тан тора - бара башҡортҡа әүерелгән.

Бөрйән районы биләмәһе буйынса ҙур ғына булһа ла ундағы ауыл һәм халыҡ һаны ыҡсым: **34 ауылда 18 115** кеше йәшәй. Ҡыпсаҡтар, бөрйән, түңгәүерҙәр, тамъяндар ҙа борондан уҡ ошо ерҙе төйәкләп татыу, етеш донъя көтә.

Бөрйәндәр ауылдары Ағиҙел, Оло һәм Кесе Нөгөш, Үҙән, Ҡана, Һәүәнәк, Алағуян, Майғашлы, Ҡурғашлы, Көргәҫ йылғаһы, Бетерә туғайҙары буйлап төйәкләнеп йәшәй.

Мораҙым (Аратау), Байназар, Ҡурғашлы, Нәби (Ҡуян), Яңы Монасип (Мишәр), Иҫке Монасип (Һарт), Тимер, Иҫке Собханғол (Алағуян тамағы), Ағиҙел ҡасабаһы, Ишдәүләт (Ябаҡ), Кейекбай (Баштире), Ҡотан, Ырғыҙлы ауылдары Ағиҙел туғайҙарын төбәк иткән. Брәтәк, Ғәлиәкбәр, Үрге Нөгөш (Ямаш) ауылдары Нөгөш йылғаһын һыулай. Мәһәҙи ауылы Мәмбәтһыпы йылғаһы, Аҫҡар ауылы Бәләкәй Нөгөш, Яңы Мөсәт (Берлек) ауылы Алағуян йылғаһын, Байғаҙылар Һәүәнәк, Ҡурғашлы ауылы Ҡурғашлы йылғаһын, Мәндәғол Майғашлы, Кейекбай Көргәҫ, Иҫке Аҡбулат Ямашлы һәм Үлебар йылғалары, Һарғая ауылы Һарғая, Иҫке Мөсәт - Саҡмағош йылғаһы һыуын һыулай.

Алдар батырҙың ауылын үҙ эсенә алған Әтек ауыл биләмәһе Ҡана йылғаһын, Яңы Усман - Бетерә йылғаһын һыулай. Был ауылдарҙың барлыҡҡа килеүенә ҡарата төрлө ҡараш йәшәй. Быуат ярымдан алып 6 быуатҡа тиклем йәш биргәндәр бар. Владимир өлкәһендә асылған юғары мәҙәниәтле цивилизацияның 35 мең йыл элек йәшәүен, Шүлгәнташ мәмерйәһендәге палеолит осорондағы, йәки 14 мең йыл элекке, таштағы һүрәттәрҙе һәм башҡа факттарҙы иҫәпкә алғанда, Бөрйән районы биләмәһендә 14 мең йыл элек тә ауылдар булыуы ла ихтимал.

Бөрйәндәр иһә әлеге ерҙәрҙе яулай һәм үҙләштерә килеп, төрлө ырыуҙарҙы берләштереүгә өлгәшкәндәр, Мәсем тауы уларҙың төп йыйын урыны булғандыр, тигән фекер бар.

Күп һанлы дошмандарҙан һаҡланыу өсөн дә уңайлы булған таулы-урманлы Бөрйән ере. Һан һәм көс туплай килә урман бөрйәндәре көньяҡҡа ҡарай күсә башлай һәм яңы ерҙәрҙе үҙләштереүҙе дауам иткәндәр.

Әлеге тау исемен телгә алғас, ғөмүмән, ер-һыу атамалары йәки топонимдар хаҡында әйтмәй үтеү мөмкин түгел.

Улар тулыһынса тиерлек боронғо төрки йәки боронғо башҡорт топонимдарына ҡайтып ҡала. Шул уҡ ваҡытта сит ил топонимдары ла осрай. Мәҫәлән, рус исемдәре: Пороховушка, Лысая тауы, Пугачев тауы, Дегтярка, Вознесенск баҡыр иретеү заводы, Волков утары, Антон ҡаяһы һ.б. Немец исемдәре: Фистер юлы - юлды төҙөткән немец кешеһенең исеме бирелгән уға. Юл заводтан башланып, тау-урман йылғаларҙы киҫеп үтә һәм Өфө - Ырымбур трактына барып ҡушыла.

Фин-уғыр исемдәре: Нөркә тауы (манси телендә Нёр тауҙы аңлата. Коми - Норыс - ҡалҡыулыҡ.) Явал йылғаһы, Яв, явас - мордва телендә һыу аңлата.

Индоевропа, иран исемдәре лә осрай. Тәкәторман тигән һаҙмат урын бар Ырғыҙлыла. Һинд-европа нигеҙендә мана, мани - дымлы, һыулы тигәнде аңлата. Күреүебеҙсә, төрлө дәүерҙәрҙә төрлө халыҡ менән тығыҙ ҡатнашып йәшәгән бөрйәндәр.

Ер-һыу исемдәренең килеп сығыу тарихы, легендаһы бар. Был төбәк ысынлап та легенда, риүәйәттәр төбәге, халҡыбыҙҙың эшһүр эпостары тыуған ер.

“Урал батыр» эпосындағы Шүлгәндең исеме менән аталған данлыҡлы мәмерйә һаман да әле асылып бөтмәгән серҙәрен һаҡлай. 1959 йылдан алып ғалимдар уны өйрәнә, сит илдәрҙән дә килеп-китеп торалар, ләкин был тәбиғәт ҡомартҡыһының һандығы төпһөҙ кеүек. Мәмерйә тирәләй йылға, күлдәр, тауҙар һәм бөтмәҫ тау тишектәре үҙе бер мөғжизәле комплексты тәшкил итә. Уларҙы күрергә ынтылыусылар һаны йылдан-йыл арта. Былтыр, мәҫәлән, теркәлгәндәр һаны ғына ла 4 800-ҙән артып киткән.

Шүлгән мәмерйәһе тураһында күп яҙылды, был теманы тәфсирләү артыҡтыр. Шулай ҙа халҡыбыҙҙың аҫыл гәүһәрҙәре - «Урал батыр», «Аҡбуҙат», «Бабсаҡ һәм Күсәк» эпостары тарихи Бөрйән ерлегендә ижад ителгән тип әйтергә тулы нигеҙ бар. Ер-һыу атамалары тап ошоно дәлилләй. «Шүлгән» мәмерйәһенән 2 саҡрым ары өҫтәрәк урынлашҡан Ғәҙелгәрәй ауылынан Шүлгән исемле бәләкәй генә йылға ағып үтә лә, ауыл осонда ергә сума һәм юҡ була. Был урынды Сумған тип йөрөтәләр.

Шүлгән мәмерйәһен һуғарып үтеп тағы юҡҡа сыға һәм мәмерйәнең ауыҙында 86 метр тәрәнлектән урғылып килеп сыға ла 200 метр самаһы ағып барып Ағиҙелгә ҡушыла.

Сумғандан алыҫ түгел Йылҡысыҡҡан күле, нисәмә йылдар үҙгәрешһеҙ, серле тынлыҡта ҡалып, беҙҙең тормошто күҙәтә кеүек. Сысҡан һыртлы ала аттар шул күлдән сыҡҡан өйөрҙөң тоҡомон әле лә һаҡлай.

Тарыуал ҡарт исеме менән бәйле урындар ҙа етәһе. Тарыуал ауылы, йылғаһы, яланы бар. Ул яланда борон башҡорттарҙың ете ырыу йыйыны үтә торған булған. Һәм шуның иҫтәлегенә, 2006 йылда, унда ырыу тамғалары ырылған ҡарағас бағана ултыртылды.

Йылҡысыҡҡан күленән арыраҡ урынлашҡан кескәй генә Ығышма һәм Оло күлдәрҙең дә серҙәре етерлек. Күл уртаһындағы кескәй утрауҙың бер ярҙан икенсе ярға күсеп, йәки ығышып йәшәүенә нисә йыл, йәки нисә быуат үткәндер, берәү ҙә әйтә алмай. Ул утрауҙа ағастар ҙа үҫә торған, ығыша торған һәм мәле еткәс ҡартайып йығыла торған.

Оло күлгә килгәндә, Ҡазихан ағай Ишморатов һөйләүенсә, ул күл ҡороһа илдә ниндәйҙер оло ваҡиға булыр булған. Мәҫәлән, Граждандар һуғышы алдынан ҡорой был күл. 1941 йылда тағы ҡорой һәм 1945 йылда ғына һыулы күлгә әйләнә.

«Бабсаҡ менән Күсәк» эпосына бәйле урындар ҙа күп. Ҡарағөлөмбәт, Бабсаҡ ҡорғандары, Үлебар, Кужә, Буҡсорға йылғалары, Атайсал, Ҡараһыйыр, Бәләтар тауҙары һәм йылғалары, Ҡурыуҙы тауы, Бей кисеүе һ.б. Ошо иҫтәлекле урындарға уҡытыусы-эҙәрмән Марат Муллағолов тарафынан әлегә таш ҡуйып, унда башҡорт, рус, инглиз телендә тарихи урындың исеме яҙылған. Бабсаҡ ҡурғанына килгәндә, батырҙың вариҫы эшҡыуар Юлбариҫов Марс Хәбибулла улы уны сөгөн рәшәткә менән кәртәләтеп, мәрмәр обелиск әҙерләтте. Ҡорған бер нисә тапҡыр ҡаҙылған булған, тиҙәр ололар.

Эпоста ырыуҙарҙы берләштереүсе һәм беренсе дәүләтселеккә нигеҙ һалыусы Мәсем хан исеме лә Бөрйән еренә береккән. Алда әйтелеүенсә, районның иң бейек тауы - Мәсем - уның исеме менән йөрөтөлә. Былтыр Урал ағай Иманғолов, ҡайныһы Заһит Ишдәүләтов һөйләп

ҡалдырған легенда буйынса, Мәсем тауы башындағы ялпаҡ ҡаяны (ул ҡәлғәне лә хәтерләтеп ҡуя) Хандың ҡорғаны тип алып барып күрһәтте. Был урында ғалимдарыбыҙҙың үҙ һүҙен әйтеүе кәрәк булыр ине.

Ғөмүмән, район биләмәһе ер-һыу атамалары, легендалар һәм риүәйәттәргә бик бай. Уларҙы боронғо сәйәхәтселәр ҙә яҙып ҡалдырған. Шулай уҡ үҙебеҙҙең район ғалимдары Мөхтәр Мофаззал улы Сәғитов, Әхмәт Мөхәмәтвәли улы Сөләймәновтың был тәңгәлдә атҡарған эштәре баһалап бөткөһөҙ. Әхмәт Сөләймәновтың хеҙмәттәре башҡорт халыҡ ижадының күп томлыҡ баҫмаларында йыйып сығарылды һәм юғалып ҡалыуҙан ҡурсалап алып ҡалынды. Шулай ҙа был хазинаны сүпләп бөтөүе мөмкин микән? Һаман да бик күп йылға, шишмәләр, ялан һәм башҡа ер-һыу исемдәре, уларҙың легендалары беҙҙең иғтибарҙан ситтә ҡала һәм яйлап онотола бара, үкенескә күрә. Уларҙы белгән оло кешеләр ҙә кәмей инде. Был йәһәттән Әмир Зәкир улы Сәйғәфәровтың Баймаҡтың ер-һыу атамаларын йыйып китап итеп сығарыуы бик мөһим һәм сауаплы эш булды, тип әйтер инем. Беҙҙең районда ла был эш башланды, тип әйтергә булалыр. Материал яйлап йыйылды, уларҙы район гәзитендә баҫа барҙылар.

Бөрйән ерлегендә Мәсем тауы исемле тау һыҙаты, Мәсем ташы бар. Был Мәсем хандың Бөрйән ерлегенән икәнлеген дәлилләһә, ул батырҙың бик ҙур кәүҙәле булыуын да иҫбатлай, ахыры.

Районыбыҙ ҡобайыр, легенда, йолаларыбыҙҙа күренекле шәхестәрбеҙ менән бәйле топономик атамаларға бай. Әйтәйек, Шүлгәнташ мәмерйәһе, Ҡырғыҙ айыры, Алпамыша ҡорғаны, Тәтегәс яланы, Тарыуал яланы, Мәсем, Ҡыҙҙар, Аҡбейек, Баҙал тауҙары, Нөгөш йылғаһы һәм утары, Инсебикә, Антон ҡаялары.

Синфи тигеҙһеҙлек, ярлы-ябағаның хоҡуҡһыҙлығы һөҙөмтәһендә тормошта әленән-әле булып торған фажиғәле ваҡиғалар тыуҙырған Атайсал, Ҡыҙыл ер яландары - ғәскәр ҡырылып, күп ҡан түгелеп, ер өҫтө ҡыҙарып ятҡанлыктан аталып ҡалған (Күсәкбей менән Ҡарағөлөмбәт яуы).

«Бабсаҡ бей менән Ҡарағөлөмбәт бей»ҙең Бөрйән вөрсияһында Күсәк бей, Түрә хандың ҡаршы килеүенә ҡарамаҫтан, биленә ҡынлы бысаҡ тағып Ағиҙел буйлап, һораша-һораша Мәсем менән Баҙал тауҙары араһынан аҡҡан Күжә йылғаһы буйына китә. Ҡарағөлөмбәт бей шунда өс ҡатыны менән йәйләүҙә ятҡан була. Ул иһә Ҡарағөлөмбәт бейҙең йәйләүе булыуын асыҡлай. Шулай уҡ Ҡараһыйыр яланы ла бар.

Мәсем ташы, Әңгәмә тауы, Атайсал, Тәтегәс яланы, Таш мәсет тигән урындар, аталыштарынан уҡ аңлашылыуынса, йыйын урыны булған. Тарыуал (Атайсал) яланындағы Атайсал йыйыны үткәрелгән изге ерҙә тарихи хәтеребеҙгә һәйкәл - стелла асылды. Ул ете ырыуҙың тамғалы ағасын һынландыра. Бөрйән халҡы үҙенең үткән тарихын онотмай.

Һәр кешегә үҙе тыуып үҫкән төбәк хозур, ер – һыуы, тау – ташы, кешеләре яҡын һәм ғәзиз. Әүәле атай – олатайҙар балаларына ер – һыу атамаларын тәфсирләп һөйләп, аңдарына һеңдерер булған.

Тимер ауылы тирәһендә утар, йәйләү, болон, ялан – туғай, мәмерйәләр аталмашы ла тарих һөйләй, улар араһында кеше исемдәре менән аталғандары бихисап.

Билдәле ауыл исемдәренән Тимер ауылын – Ишкилде Тимеровтың атаһы – **Тимер** (1709 йылда тыуған), **Бикташ** ауылын – Бикташ Тойғонов (1758 йылғы), **Байғаҙы** ауылын - Байғаҙы Ҡунаҡбаев (1770 йылғы), **Аралбай** ауылын – Аралбай Мөхәмәтов (1766 йылғы) нигеҙләгән. Тимер ауылының төньяғында **Яҙҙауар** яланы бар. “Яҙ” һүҙе аҡланды аңлатһа, “уар” һүҙе төрөксөнән “ҡоролма” йәки “йорт” тигәнде аңлата. Аҡланлы йорт йәки яҙғы йорт тип тә әйтергә була. Тимер ауылы халҡының яҙғы осорҙа мал көтөү урыны булған ул. Аҡланды бейек, текә тау уратҡан. Урталыҡтағы ҡаялағы мәмерйәне **Ҡалҡаман** тиҙәр.

Ул тирәне Иҫәнғол, Иҫәнбай (Байғаҙы ауылында йәшәүсе Иҫәнбаевтар араһы), Ҡотлоғилденең (1722 йылғы) атаһы Ҡалҡаман ҡарт (1697 йылғы) төйәкләгән, ҡоролма ҡорған. Утар урыны әле лә беленә.

Ҡалмаҡай яланы тарихы былайыраҡ, Ишҡол Ҡалмаҡаевтың (1724 йылғы) атаһы Ҡалмаҡай тәүгеләрҙән булып утар нигеҙләгән. Ул аҙаҡ тимерҙәрҙең төп йәйләүенә әүрелә. **Ҡалмаҡай йылғаһы** ла бар. Йылға көнсығышҡа ҡарай уя буйлап **Үҙән** йылғаһына ҡоя.

Тимер арҡаһында Ҡарашай тигән урын Мансур, Йыйынбай, Һағынбай Ҡарашаевтарҙың атаһы **Ҡарашай** (1768 йылғы) хөрмәтенә исемләнгән. Йәйләү эргәһендәге ҡәберлек тә тарих һөйләй.

Артабан оло юлға сығыу йүнәлешендәге уяла Этаяҡ фермаһы бар. Ул Аралбайҙан **Этаяҡ** тигән кешенең мал көткән йәйләү урыны. Уның туғаны Моталлап улы Байгилде Моталлап улы Бикташҡа күсә. Ауыл тарҡалғас, Үтәғоловтар араһы Исламбайға, унан Ғәлиәкбәргә лә күсеп ултырғандар. Кесе Нөгөш буйындағы Баймырҙа утарын Алтынса Тәүлиндың (1780 йылғы) улы **Баймырҙа** барлыҡҡа килтерә. Алтынса Тимерҙән күсеп, Бикташ ауылын нигеҙләүселәрҙең береһе булған, ҡәбере лә шул ауылда. Билдәле артист Муллайән Һөйәрғоловтың атаһы Зыя дегет ҡайнатҡан Нөгөш буйындағы яланды **Зыя** баҙы тип исемләгәндәр.

Оло Нөгөш буйында Бикташ Тойғонов (1758 йылғы), хөрмәтенә Бикташ ауылы эргәһендә **Бикташ бөгөлө** тигән ер, ятыуы ла бар. **Көҫәпҡол утарын** Ишмөхәмәт Буранғоловтың (1747 йылғы) өйөне Көҫәпҡол (Көҫәпҡоловтар араһы) исеменә атағандар. Бикташ ауылының көньяғында **Көлгөзәр** тигән тау бар уны Ҡайынсуҡы менән уя айырып тора. Көлгөзәр менән Исламғол Бикмөхәмәтов яратышып, ошо тауҙа осрашып йөрөр булғандар. Шуға тауҙы ҡыҙҙың исеме менән атағандар.

Көләмбәт юлы Көләмбәт Ҡунаҡбаев (1786 йылғы) хөрмәтенә исемләгән. **Әбделғәзе** – Көҙөшлө йылғаһының ҡаршы ҡаяһы, мәмерйәһе лә бар. Йәй көнө болан, мал – тыуар иттәрен ҡараҡтар шул мәмерйәгә йәшергәндәр. Бикмөхәмәт, Әбделғәзе, Килмөхәмәт зәүрәт сотник Байғаҙы Ҡунаҡбаевтың ҡустылары була. Аталары, үрәтник Ҡунаҡбай Ҡарабаев. Аҙаҡ был ерҙәрҙе үҙһенмәй, Һәүәнәк йылғаһы буйына, Байғаҙы Ҡунаҡбаев янына күсеп **Байғаҙы ауылын** барлыҡҡа килтерә. 1909 йылғы Кәбир Иҫәнбаев мәрхүм дә был турала ишетә белгән. Рәүиз буйынса ла дөрөҫлөккә тап килә.

Тимер – Бикташ йүнәлешендәге Кесе Нөгөш, Шәре йылғаһы башындағы юлды **Тимер айыры** тиҙәр.

Тимер ауылы янында **Ҡарағол** тигән ер Ҡарағол Тимеров (1799 й.), Хөсәйен үҙәге, Ҡарашай, **Лоҡман** соҡоро (Лоҡман исемле кешенең аты төшөп киткәнгә әйткәндәр), **Йәнсалай** (Йәнғәле Баймырҙин һәм Сәләхетдин Ҡолдобаевтарҙың исеме менән бәйле) бар. Шулай уҡ **Яхъя күле**, Үҙән йылғаһы буйында **Яңыбай туғайы**, **Исмәғил туғайы һәм солоғо**, **Зәкир** солоғо тигән атамалар ҙә кеше тормоштары тураһында тарих һөйләй. Рәүиз материалдарынан күреүенсә, Байғаҙы ауылы янындағы ***Аҡсабикә яланы, Ҡыҙбикә тауы, Дәүләтбай туғайы, Ғәббәс, Ғаффар утарҙары, Байтулла яланы***ның атамалары ла кеше исемдәренән хасил булған. ***Ҡыҙҙар ташы, Ирҙәр ташы*** тигән атамаларҙың да үҙ тарихы бар.

Тимер ауылы янында Иҙел балыҡтарының да үҙ исемдәре бар. Мәҫәлән, Муллайән һәм Әҙәһәм ажауҙарын осратырға була. Колхоз осоронда хатта төрлө тоҡтар ҙа кеше исемдәрен йөрөтөр ине.

Тыуған төйәгебеҙҙәге атамаларҙы һаҡлау, уларҙың тарихтарын белеү беҙҙең рухи мәҙәниәтебеҙҙең айырылғыһыҙ өлөшө. Исем – атамаларҙа тыуған еребеҙҙең тарихы йәшәй, улар изге ҡомартҡы. Ә был ҡомартҡыларҙы киләһе быуындарға тапшырыу беҙҙең ҡулда. Кеше исемдәре бирелгән урындар шул кешеләргә тере һәйкәл булып, уларҙың абрыйын күтәрә, нәҫел – нәсәбенә мәртәбә.

Йәшәгән еребеҙҙең гүзәл тәбиғәтен тәләф итмәй һаҡлау, уны артабан байытыу, тағы ла күркәмләндереү эштәрен башҡарыу менән бер рәттән, ер-һыу атамаларының легендаларын да юғалтмай быуындан-быуынға тапшырыу фарыз.

Атамалар нимә һөйләй?

Һуңғы йылдарҙа ер - һыу атамаларына бәйле риүәйәттәр юҡҡа сығыу ҡурҡынысы аҫтына ҡалғанда, был темаға район гәзитендә рубрика асылыуы ҡыуанысл хәл. Күренекле публицист, шағир, телсе - ғалим Рәшит Шәкур һүҙҙәре менән әйткәндә: "Топонимика - халыҡ теленең, халыҡ тарихының бихисап серҙәрен һаҡлаусы тылсымлы донъя". Ысынлап та, бер ауыл тирәһендәге атамалар ғына халыҡ тарихы буйынса әллә күпме мәғлүмәт һаҡлай.

Борон-борондан кеше тау, йылға, ялан, ауылдарға исемдәр биргән. Ваҡыт үтеү менән тел дә үҙгәрә, ә атама тороп ҡала. Ҡайһы бер атама - һүҙҙәр ҡулланыштан сығып, архаизмға әйләнеп, икенсе һүҙҙәр менән алышынған. Ошо атамаларҙың мәғәнәһен асып, уға бәйле риүәйәттәрҙе яҙып, киләһе быуынға еткереү беҙҙең изге бурыс.

Беҙҙең атай-әсәйҙәрҙең һөйләшкән теле хәҙерге телдән ныҡ айырыла. "Күп һүҙҙәр онотолдо инде, - ти әсәйем, 83 йәшлек Асия Зекриә ҡыҙы. - Илленсе йылдарға тиклем кеше "ауыл" һүҙен ҡулланманы, "ыҙма" тип йөрөттөләр. Бесәндә, йәйләүҙә ятҡанда ла "ауылға ҡайтып киләбеҙ" тимәй, "ыҙмаға ҡайтып киләбеҙ", тип - әйтерҙәр ине. Ауылдарҙы ла боронғо исемдәре менән генә йөрөттөләр: Мораҙым Имес йә Алатау, Мәһәҙей – Түңгәүер, Яуымбай –Ҡайынөй, Ҡолғана - Тамъян, Килдеғол - Һарағы, Әбделмәмбәт - Үҙән, Иҫке Мөсәт-Саҡмағош, Кейекбай - Баштире, Яңы Монасип - Мишәр, Иҫке Монасип – Һарт. Бөрйәндәр менән ҡыпсаҡтарҙың да тел айырмаһы бар ине, хәҙер ул да бөттө. Бөтәһе лә дөйәм әҙәби телгә күстеләр.

Иҫке Монасип (Һарт) ауылының Ағиҙел аръяғында тау итәгендә урынлашҡан өлөшө Кепес тип йөрәтөлә Кепес-хәҙерге төрөк телендә тау бите, тау итәге мәғәнәһен аңлата. Һарт менән Мишәр араһындағы тау - Тәпәнәк. Тәпә - төрөк телендә «тау». Бөтә төрки халыҡтар бер тамырҙан. Ошо ике аңлатма ғына ҡасандыр беҙҙең телдәр бер, йәки бик яҡын булғанлығын дәлилләй.

Райондағы ауылдар икешәр исем менән йөрөтөлә. Мәҫәлән: Нәби – Ҡуян, аръяғы Байҡаш, Килдеғол – Һарағы, Әбделмәмбәт – Ҡыпсаҡ, Мораҙым – Аратау, Ғәҙелгәрәй – Шүлгән һ.б. Һәр береһенең үҙ тарихы, эргә-тирәһендәге тау-ташына хас атамаһы, уға ярашлы легендаһы бар.

Заман үҙгәрә, ваҡыт үтә тора атамалар ҙа яңыра, йә булмаһа икенселәре барлыҡҡа килә. Ғилман күпере (хакимиәт башлығы сағында ауылдар араһында йылға аша аҫылмалы күперҙәр төҙөткән), Рәмзи юлы (Иҫке Монасип ауылының аръяғы Кепес тип атала, шунан район үҙәгенә бара торған оло юлға туранан юл һалдырған), Дамир ҡотоғо, Риф күле исемдәренән үк аңлашылып тора. Тора-бара уларҙа тарихҡа инеп китер.

Ер-һыуҙың, йорт-илдең тарихы быуаттар төпкөлөнә тоташа. Уларҙың исеме - мәңгелек. Тик шул мәңгелекте боҙоусылар ҙа бар. Мәҫәлән, быуаттар буйы урындағы халыҡ телендә бер төрлө аталып та, аҙаҡ шул халыҡтың тормош-көнкүрешенә бәйле атаманы боҙоп, икенсе мәғәнәлә ят яңғыраш күрһәтергә тырышалар.

Был турала йә олаларға, йә тарихи документтарға таянып яҙырға мөмкин. Ҡайһыларының атаманы урыҫса атаған булып мәғәнәһен боҙа. Күпте белгән оло кешеләр ҙә әкренләп баҡыйлыҡҡа күсә бара, ҡайһы бер документтарҙың да теүәл һаҡланыуы икеле. Шунан китә лә инде ҡолаҡҡа ятмаҫ исем-атамалар. Мәҫәлән, даны сит илдәрҙә лә билдәле Шүлгәнташ мәмерйәһенең Капова исеме менән билдәләнеүен иҫләгәндә лә, башҡалары тураһында һүҙ ҙә юҡ. Етмәһә, урындағы халыҡ үҙе лә шул шауҡымға ҡушылып китә. Ғүмер баҡый ошонда донъя көткән ата-бабаларыбыҙ телендә беҙ уны Ташөй тип йөрөтәбеҙ.

Уны Бикйән сатлығы тип йөрөтәләр. Был тирәлә ауылдың байы Бикйән ҡарттың сабынлыҡтары булған. Ғөмүмән, бик күп ер-һыу атамалары сабынлыҡтар менән бәйле. Кем сапһа, ергә шуның исемен биргәндәр.

Заһир Дәүләтбирҙин

Бөрйәндәрҙең хужалығы һәм көнкүреше тураһында тарихи мәғлүмәттәр

Бөрйәндәр ярым күсмә тормош алып барған, мал-тыуар көтөп далаларҙы иңләгән[1]. Ә таулы–урманлы ерҙәрҙә умартасылыҡ һәм һунарсылыҡ менән шөғөлләнгәндәр. Игенселеккә килгәндә инде 1675 йылда Нуғай юлына сәйәхәт иткән сит ил кешеләре бына ни яҙған: бөтә башҡорттар ҙа ер һөрә, иген сәсә. Улар өйҙәр төҙөй.

Билдәле этнограф И.С.Руденко[2] Башҡортостанды “Умартасылыҡ иле” тип атаған. Бигерәк тә солоҡсолоҡ киң таралған булған. Солоҡ яһау өсөн йыуан ҡарт ағас һайланған. Солоҡҡа хужаның тамғаһы һуғылған.

П.Рычковтың яҙыуынса, башҡорттарҙың ҡайһы берҙәрендә 2000-гә тиклем солоҡ булған һәм уларҙан ҙур табыш алынған. И.Георги ҙа башҡорттарҙа 200-500-гә тиклем умарта булыуы хаҡында яҙып ҡалдырған.

Тарихи мәғлүмәттәр буйынса бөрйәндәр ҙур-ҙур йылҡы өйөрҙәре менән күсенеп йөрөгәндәр. Башлыса йылҡы малы тибендә тотолған. Бер урындан икенсе урынға күсенеп йөрөүҙең маҡсаты - малды ашатыу.

Бөрйәндәр йорт шарттарында малсылыҡ продукттарын һәм әйберҙәрен етештергәндәр. Улар башлыса ҡорот, эремсек, ҡымыҙ, май, ит етештергән һәм ҡулланған. Тиренән кейем, аҙыҡ һаҡлау өсөн һауыттар-турһыҡтар, ат кәрәк-яраҡтары йүгән, эйәр һ.б. эшләгәндәр.

Ҡатындар кесерткән һәм киндерҙән туҡыма туҡығандар.

Сәсән Ш.Әминевтың шиғырын килтерәйек.[3]

Ҡатындары еп иләгән, киндер һуҡҡан

Ирҙәре мохтаж түгел бүлек, тоҡҡа.

Хәҙерге йәш килендәр эшкинмәгән

Бешмәгән икмәк кеүек көлө юҡҡа.

Бында “бүлек” – полог (рус). иген һ.б. нәмәләр һалыр, иген һуҡҡанда түшәр өсөн тотонолған ҙур япма.

Тағы бер таҡмаҡты ла иҫкә алып китәйек.

Сания апай киндер туҡмай

Япраҡ менән биҙәкләп.

Һөйгәненә күлдәк итеп

Тегә микән нөгәттәп.

Киндер туҡыманы көл тоноғо менән ап-аҡ итеп йыуып, өҫтөнә йәшел япраҡтар һалып туҡмағандар. Япраҡтың биҙәге һеңеп ҡалған. Бигерәк тә биҙәкләү өсөн дегәнәк япрағы киң ҡулланылған. Дегәнәк япрағынан тешләп һәр төрлө биҙәктәр яһағандар. Хәҙерге заманда ҡайсы менән яңы йылда ҡар бөртөктәре киҫәбеҙ. Төрлө формала киҫелгән дегәнәк япрағын туҡымаға һалып туҡмап биҙәкләгәндәр.

Башҡорттарҙың көнкүрешендә һунар ҙа ҙур роль уйнаған. 1694 йылда батша исеменә яҙылған ялыуҙа былай тип яҙылған: башҡорт ерҙәрендә халыҡтың күбәйеүе арҡаһында һунарсылыҡ итергә мөмкинлек ҡалманы. Мышы, айыу, төлкө, һыуһар, тейен кәмегәндән-кәмей, балыҡ әҙәйә. Йылҡы өйөрө һәм мал көтөүе өсөн урын бик наҡыҫ, яһаҡ һәм башҡа һалымдар түләү өсөн мөмкинлектәр юҡ.

Хәҙерге Бөрйән районы биләмәһендә XIX быуатта Бөрйән волостары вәкилдәре менән бергә Ҡарағай-Ҡыпсаҡ һәм Тамъян ырыуҙары йәшәгән. Һуңынан Түңгәүер волосы кешеләре лә ҡушыла.

Ҡыпсаҡтар бик боронғо төрки ҡәбиләләренә ҡарай.[4] Шәжәрәләрҙән күренеүенсә, ҡыпсаҡтар Башҡортостанға көньяҡтан килгән. Көньяҡ Уралда ҡыпсаҡтар өс төркөмгә бүленгән: төньякта– ҡарағай һәм гәрәйҙәр, урта өлөштә - һыуындар, бошмандар, сәнкемдәр, көньяҡта – ҡара ҡыпсаҡтар. Бөрйән районы территорияһында ҡарағай-ҡыпсаҡтар йәшәй.

Ырыуҙың ағасы - ҡарағай, ҡошо - ҡарсыға, тамғаһы – даға, ораны- туҡсаба. Райондың Килдеғол, Әбделмәмбәт, Яуымбай, Байназар, Мораҙым, Ҡурғашлы, Нәби, Иҫке һәм Яңы Монасип, Тимер ауылдары ҡарағай –ҡыпсаҡ ырыуына инә. Түңгәүер ырыуына Мәһәҙей, Аҫҡар ауылдары инә.

Тарихи мәғлүмәттәр буйынса 1815 йылдарҙа Стәрлетамаҡ өйәҙенән 20 ғаиләне Бөрйән волосына күсерәләр. Хәҙерге Күгәрсен районында Смак, икенсе исеме Түңгәүер, тигән ауыл бар. Ошо күсеп килгән Түңгәүер волосы кешеләре Бөрйән районының Аҫҡар һәм Мәһәҙей ауылдарына нигеҙ һала. Ошо осорҙа Нөгөш йылғаһы буйында Бикташ ауылы барлыҡҡа килә.

Ауылға нигеҙ һалыусы 76 йәшлек Бикташ Тойғонов, уның Дилмөхәмәт, Юлмөхәмәт, Ҡужәхмәт, Хәжиәхмәт исемле улдары була. 1834 йылда ауылда 117 кеше, 1859 йылда - 124, 1920 йылда 185 кеше булған.

1843-1850 йылдаарҙа Монасип (Һарт) ауылы кешеләре Исламбай ауылына нигеҙ һала [5]. 1850 йылда ауылда 20 йорт, ә 1859 (X ревизия буйынса) 24 йорт булып, 120 кеше, ә 1920 йылғы иҫәп буйынса 205 кеше йәшәгән. 1979 йылда был ауылда 57 йорт булып 320 кеше йәшәһә, 2005 йылда 124 йортта 404 кеше йәшәй.

Исламбай ауылына нигеҙ һалыусы 1808 йылда тыуған Монасип (Һарт) ауылы кешеһе Исламбай Йомағужин була. Ул 1828-29 йылдарҙағы урыҫ-төрөк һуғышында ҡатнаша. Ошо уҡ һуғышта Ҡарағай-Ҡыпсаҡ волосы кешеләре Ниғмәтулла Аратов, Ҡәҙербай Хәлилов, Ишкенә Әйүпов, Мөхәмәҙрәхим Мөхәмәтғәлиндар ҙа ҡатнаша.

XIX быуат уртаһында бөрйән ерҙәрендә халыҡ һаны ныҡ арта, көтөүлек ерҙәре кәмей. Һөҙөмтәлә хужалыҡ итеү формалары ла үҙгәрә төшә. Тәбиғи шарттарҙан сығып урман промыслолары киң йәйелә башлай. Халыҡ ағас йыҡҡан, һал ағыҙған, дегет ҡайнатҡан.

XX быуат башында бөрйәндәр, нигеҙҙә, игенселек, малсылыҡ менән шөғөлләнеүгә күсә. Илдә Совет власе урынлаштырыу, граждандар һуғышы, 1921 йылҡы аслыкты үҙ елкәһендә татыған халыҡ төшөнкөлөккә бирелмәй, яҡты киләсәккә ышанып хужалыҡтарҙы тергеҙеү өсөн яңы ойошмаларға берләшә башлай. Районда иң беренсе кооперация 1924-1925 йылда Иҫке Собханғол ауылында асыла. ”Башпомгол” ярҙамында кустарсылыҡ эше лә йәнләнеп китә. Унда мискә, балта һабы сабыу, йүкә һыҙырыу, арҡан ишеү, һал ағыҙыу эштәре ойошторола.

Әлеге Бөрйән районы биләмәһендә Ҡарағай-Ҡыпсаҡ ырыуы кешеләре лә йәшәй. Был ырыуға Килдеғол, Әбделмәмбәт (Ҡыпсаҡ, Үҙән тигән исем менән дә йөрөтәләр), Яуымбай, Байназар, Мораҙым, Иҫке һәм Яңы Монасип, Нәби, Тимер ауылдары ҡарай.

Килдеғол ауылын 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашҡан Килдеғол Иглик улы Ибраһимов нигеҙләгән [6]. Килдеғол Рус Армияһының 15 полкында зауряд хорунжий булып хеҙмәт итә һәм Парижды алған өсөн көмөш миҙалға лайыҡ була. Улдары Сәйфулла, Әбделвәхит, Йәһүҙә һәм Ғәйнулла булған.

1859 йылғы перепись буйынса Килдеғолда 23 өйҙә 153 кеше, 1920 йылда 400 кеше иҫәпләнгән. Урындағы халыҡ ҡул бысҡыһы менән таҡта, транса ярған, дегет, күмер яҡҡан. Малсылыҡ, һунарсылыҡ, балыҡсылыҡ менән шөғөлләнгәндәр. Заманына күрә хәлле генә йәшәгәндәр. Ҡайһы бер хужалыҡтар десятиналап арпа, һоло, тарма, сәсмә сәскәндәр. Һалабаш, киндерҙән һуғылған туҡымалар, септә, ҡап һуғып, сабата үреп, арҡан ишеп, талдан кәрзин, һауыт-һаба, күреп үреп, дегет, һағыҙ ҡайнатып, мискә, ағас һауыт-һаба яһап, таҡта, транса ярып, ит, тере мал менән Хәлил, Мәғнит баҙарҙарына сыҡҡандар.

1921 йылғы аслыҡ ауылдың көнкүрешен ауырлаштырған. Урман үҙенең кейеге, әттеге, һарынаһы, емеш-еләге менән күптәрҙе үлем тырнағына бирмәй. Хужабикәләр еп иләй, туҡыма һуға, тарма орлоғо һуға, май, ҡорот етештерә. Йәй буйы малға бесән әҙерләнә.

1930 йылдың мартында республика күләмендәге кантондар һәм волостар бөтөрөлә, республикала 48 район, шул иҫәптән Бөрйән районы барлыҡҡа килә.

Бөрйән ерендә колхозлашыу, бергәләп эшләү системаһын урынлаштырыу ҙа ҙур көс талап итә.

1930 йылда Килдеғолда ла колхозлашыу башлана. Халыҡ колхозға малын бүлеп бирә. Искужин Фәйзулла, мәҫәлән, 7 ат тапшыра. Һыйыр малы, ваҡ мал туплана.

Колхозды башлап Һағынбаев Можаһитдин Шөғәйеп улы етәкләй. 1940 йылда колхоз “Молотов” исемен йөрөтә башлай. Аралбаев Нуриман председатель булып, Һағынбаев Фәйзрахман Яҡуп улы бригадир, Миндеғолов Әшрәф Сәғит улы ферма мөдире итеп тәғәйенләнә.

Ҡарағай-Ҡыпсаҡ ырыуы кешеләре һуңғараҡ тағы ла Бәләкәй Ҡыпсаҡ, Һарғая, Ҡурғашлы ауылдарына нигеҙ һала. Был XX быуат башында була.

Тарихи мәғлүмәттәр буйынса. Ҡарағай-Ҡыпсаҡ ырыуы кешеләре Бөрйән районына Әбйәлил районынан килгән кешеләрҙән таралған булып сыға.

Бөрйән ырыуының Баймаҡ районы кешеләре Әтек ауылын нигеҙләгән.

---

[1] Янгужин Р. Башҡорт ҡәбиләләре тарихынан. - Өфө: Башҡортостан “Китап” нәшриәте, 1995. 44-се бит.

[2] Руденко С.И.Башкиры: историко-этнографические очерки. М.-Л.,1955.

[3] Информатор Әминева М.Ғ., 1915 йылғы. Әбйәлил районы Әбделғәзе ауылы.

[5] Информатор Аллабирҙин Д.З., 1962 йылғы.

[6] Информатор Ямалова Б.Ф. 1924 йылғы. Әбйәлил районы Әбделғәзе ауылы.

Сәғитова Гәүһәр Афзал ҡыҙы

Бөрйән районы топонимдарының лексик-семантик классификацияһы

Топонимдар халыҡ тарихы, этник процестар менән тығыҙ бәйләнгән. Уларҙа ырыу, ҡәбилә, хатта ара исемдәре, халыҡтың шөғөлө, исемдәре, ер-һыуҙың үҙенсәлектәре, атама булып, нығынып ҡалған.

Ырыу-ҡәбилә, ара исеме менән: *Бөрйән районы*, Иҫке Монасип – *Һарт*, Әбделмәмбәт ауылын *Ҡыпсаҡ*, ҡәбилә исеме менән Үрге Нөгөш ауылын *Ямаш*, халыҡ исеме менән – *Ҡырғыҙ айыры* тип аталған топонимдар.

Һөнәргә, игенселеккә бәйле атамалар: *Һабансы*, *Игендек* (сабын), *Иген саттығы, Аштыҡ уяһы, Баҫыу яланы, Тирмән туғайы, Борсаҡһуҡҡан, Һөрөмбәт* һ.б.

Ҡортсолоҡҡа бәйле атамалар: *Ҡортсолоҡ, Күсоя, Ҡыусолоҡ, Зәкир солого* һ.б.

Урмансылыҡ һөнәренә бәйле атамалар: *Баҙ соҡоро, Баҙ яҡҡан соҡор, Транса юлы, Дегет яҡҡан соҡор, Скипидар заводы, Кордон туғайы, Паравай, Ҡарағай тауы, Ҡарағас мороно, Ҡарамалы һырты* һ.б.

Бесән сабыуға бәйле атамалар: *Ҡарағайсабын, Ҡырксүмәләтуғай, Суҡраҡты сабыны, Бишкүбә, Кәбәнташ, Һуғыш туғайы* һ.б.

Ағас исемен йөрөткән ер-һыу атамалары: *Баланйорт, Бешәлетау, Ҡарағас-йорт, Имәнйорт, Әрәмәйорт, Ҡарамалы, Ҡарурман, Сукмуйыл, Уҫағуй* һ.б.

Кеше исеме бирелгән ауылдар: *Ғәҙелгәрәй ауылы, Ғәлиәкбәр, Тимер, Нәбиулла, Шүлгән, Нөгөш, Мораҙым, Мөлөк утары* һ.б.

Кеше исеменән булған башҡа ер-һыу атамалары: *Сәфәр утары, Мәрйәкәй, Волков, Бәгиҙә тауы, Уралтау, Инсебикә, Аҡбулат ауылы, Мөлөк ташы, Үтәбикә, Сафия ташы, Бикташ, Бикташ бөгөлө, Кинйәбикә, Йәнгәрәй, Көлгизәр суҡыһы, Әмир суҡыһы, Ҡаҙиса, Ниғмәт ташы, Мәрзиә суҡыһы, Мөҙәй йылғаһы, Ғәйниә котого, Динислам тауы, Рабиға ташы* һ.б.

Кеше исеме бирелгән күл һәм шишмәләр: *Ғәйниә котого, Гәлбикә күле һәм шишмәһе, Фәткулла шишмәһе, Ырғыҙлы йылғаһы,*

Үлән исеме сағылған ер-һыу атамалары: *Аҫкараҡ яланы, Оҫконлоғыр, Андыҙ яланы, Киндерҙ(е)уй, Умырзая, Көртмәле тауы, Киндер ҡайыны* һ.б.

Хайуандары исеме менән аталған ер-һыуҙар: *Айыуҙы, Айыуатҡан, Йылҡысыҡҡан, Һарат уяһы, Кәзәтау, Күгат ташы, Ҡондоҙбай, Ат яткан, Сыбарайғыр, Эт тыҡрығы, Арыҡтай, Ҡырктейәк, Кәзә һуйған, Ҡарүгеҙ яланы* һ.б.

Ҡош-ҡорт исеме ҡушылған атамалар: *Коҙғонташ, Ҡоҙғон ояһы, Ҡарағошты, Өйрәкташ, Өйрәкле, Тауыҡ фермаһы* һ.б.

Бөжәк исемдәре булған ер-һыу атамалары: *Серәкәй, Ҡортсолоҡ, Тараҡантуғай.*

Тупраҡ, ҡаҙылма байлыҡ исемдәре булған атамалар: *Ҡурғашлы, Ҡыҙыл ер, Ташлы, Ташкыраз, Аҡбалсыҡ йылғаһы, Баҙраш тауы, Ҡаншал тауы* һ.б.

Бер объекттың икенсеһенә ҡарата нисек һәм ҡайҙа урынлашыуын белдергән атамалар: *Яңы Собханғол – Иҫке Собханғол, Яңы Мөсәт – Иҫке Мөсәт, Түбәнге ауыл, Аратау.*

Бүтән халыҡтарҙың күсеп килеүе йәки үҙ-ара мөнәсәбәттәре арҡаһында барлыҡҡа килгән атамалар: *Волков утары, Боғаса (Пугачев) тауы, Ҡырғыҙ айыры.*

Ҡушамат тағыуҙан, үсекләшеүҙән: *Япония* (Яңы Мөсәт), *Финляндия* (Баҙал биҫтәһе), *Ҡуян* (ҡуян һымаҡ), *Байкаш* (байҡау, күҙәтеү), *Кепес* (күҙ ҡабағы), (тау ҡабағы), *Афғанистан, Пакистан, Эт тыкрыгы* һ.б.

Объекттың төҙөлөш материалына бәйле: *Ташкүпер,Ташкыраз, Ағаскүпер* һ.б.

Тарихи ваҡиғалар сағылыш тапҡан атамалар: *Бабсаҡ бей ҡурғаны, Атайсал яланы, Батша котоғо, Ҡырғыҙ айыры, Мәсет тауы, Мәсемташ, Ҡыҙҙар тауы, Ҡараһыйыр тауы һәм яланы, Буксорға, Бәләтар, Күкәй, Бәләтау, Каншал, Хәҙрәт шыршыһы, Ветерандар аллеяһы* һ.б.

Ике исем йөрөткән топонимдар (рәсми һәм халыҡ телендәге): *Әбделмәмбәт – Ҡыпсаҡ, Игелек, Үҙән башы; Иҫке Монасип – Һарт; Яңы Монасип – Мишәр.*

Халыҡ телендә был атамаларҙың икеһе лә йәшәй, хатта район үҙәген ***Бөрйән*** тип атауҙы уңай күрә, ә рәсми исеме ***Иҫке Собханғол*** бик һирәк ҡулланыла.

“Ер-һыу атамалары донъяһында оҡшатыу, сағыштырыу, метафора, образлылыҡ ҙур урын алып тора. Был алымдар ярҙамында кеше тәбиғәтте йәнле итеп күҙ алдына баҫтырған. Йәнле итеп күҙ алдына килтереү топонимик лексиканың бик боронғо булыуына ишаралай: йылғаның, тауҙың өлөштәре, йылға ҡушылдыҡтары кеше тәненә, кейем өлөштәренә оҡшатып әйтелә”, – тип билдәләне үҙенең хеҙмәтендә Р. Шәкүр.

Ысынлап та, *буй, баш, арҡа, ҡултыҡ, һырт, аяҡ, ҡолаҡ* кеүек **кеше, хайуан тәненә ҡараған һүҙҙәр ярҙамында** бик күп атамалар бар: *Бүреле буйы, Аҫҡараҡ тамағы, Еләклетүбә, Елдәрка, Арка, Һыуыкколаҡ, Ҡыҙҙар ташы, Кейәүҙәр үҙәге, Этаяҡ, Мулла түше, Ҡалыу мороно, Алағуян башы, Ҡәйнә теле* (тёщин язык), *Юркин теле, Күл тамағы* һ.б.

Тикшерелгән материалдарҙа объекттың үҙенсәлегенә, мәҫәлән, тауышҡа оҡшатып, яһалған топонимдар бар. Уларға ***Шаңғырауыҡ ҡаяһы, Сыңғырлауыҡ мәмерйәһе, Батинкаташ, Ослоташ, Ҡыҙматаш, Иҙәнташ, Һандыкташ, Такыясусаҡ, Селтербикә йылғаһы, Ҡуҡрауыҡ йылғаһы*** һымаҡ атама йөрөткәндәре ҡарай. Шаңғырыуыҡ ҡаяһы эргәһендә саҡ ҡына тауыш та яңғырап тора, кире ҡайта. ***Ҡуҡрауыҡ йылғаһының*** Оло Нөгөшкә ҡойған ере бик текә, һыу күкрәү тауышы сығара. Күкрәүектән, әйтелешкә яраҡлаштырылып, ***Ҡуҡрауыҡҡа*** үҙгәртелгән.

Топонимия ла, тел һымаҡ уҡ, бик йәнле процесс – иҫкерә, дөрөҫөрәге онотола барып, урынына яңы атамалар яһала. Быға миҫал итеп, ауыл исемдәренең боронғоларын, рәсмиләштерелгәндәрен һәм халыҡ телендәге ***Финляндия*** һымаҡтарын индерергә мөмкин. Шул уҡ ваҡытта тәбиғәттәге, йәмғиәттәге үҙгәрештәр арҡаһында кире ҡайтарып булмай торған юғалтыу, иҫкереү (урман, сабынлыҡ, еләклектәрҙең юҡҡа сығыуы, йылға ҡороуы) күренештәре хас. Халыҡ телендә йыш ҡулланылғандары оҙаҡ йәшәй, ә кеше һирәк йөрөгән урын атамалары әҙ ҡулланылып, онотола бара. Шуның арҡаһында тел дә улар юғала. Мәҫәлән, ауылға яҡын булған ***Бергәзә аҡланы*** ҙур юл һалғанда юҡҡа сыҡты, ауыл эсендәге ***Ғәйниә котоғо*** бер нисә йыл аҡмай.

Эшкә әҙерлек барышында тыуған яҡты өйрәнгән, тарих уҡытыусыһы ***Дамир Зиннәт улы Аллабирҙиндың*** район китабына тип йыйған материалдары төп сығанаҡ булып торҙо. 510 атама

тупланды, лексик-семантик классификация яһалды, легендалары яҙып алынды һәм топонимдарының һүҙлеге төҙөлдө.

Мөхәмәтов Әбделвәхит Ғибат улы

Гүзәллектәр иле – Бөрйән ере

Бөрйән топонимикаһы һәм ауыл урамдары үҙенсәлектәре

Бында – Бөрйән!
Әле уҡылмаған
Эпопея һәр бер һуҡмағы.

Тыуған төйәгебеҙҙең ғәжәйеп гүзәл булыуы барыбыҙға ла мәғлүм. Ҡайҙа баҡма, урман да тау Бөрйәндә. Бер яҡтан бейек-бейек ҡаялар менән кәртәләнгән Ағиҙел, башҡа тарафтарҙа – тауҙар, тауҙар…

Һәр ауылдың үҙенә генә хас булған ғөрөф-ғәҙәттәре, шул ерҙә генә ҡуллана торған һүҙҙәре һәм бай тарихы бар. Бөрйән районының төп байлығы – тау, урман, тәбиғәт, матурлыҡ, хозурлыҡ. Бында һәр ағас, һәр таш, һәр ҡая тарих һөйләй. Шүлгәнташ мәмерйәһе, Инсебикә ҡаяһы, Йылҡысыҡҡан күле… Йыр һүҙҙәре менән әйткәндә, «хайран ҡалып ошо гүзәллеккә, донъяларҙы онотоп йөрөрлөк.» Юҡҡа ғына Мостай Кәрим Бөрйәнде икенсе Швейцарияға тиңләүселәргә: «Мин күп ерҙәрҙе күргән, күп илдәрҙе гизгән кешемен. Бөрйән - икенсе Швейцария түгел, Швейцария – икенсе Бөрйән!» - тимәгәндер.

Мең йылдарҙы һалып баш аҫтына,
Тарих серем итә Шүлгәндә…
Бында һәр бер үлән, һәр бер ағас
Моң сығара, барып ҡағылһаң…

«Был ерҙе Хоҙай һөҡланһындар, хайран ҡалһындар, ләззәт кисерһендәр, илһамланһындар, йәшәүгә ҡөҙрәт алһындар өсөн яралтҡан һымаҡ. Әкиәт иле, йәм иле! Шундай тынлыҡ, шундай хозурлыҡ! Ожмах ер, йәндәр йәнләнер ер… Шуға ла «изге урын»ға, хажға барған һымаҡ бараһың. Бында - тәүге кешеләр, ҡанбабалар йәшәгән Шүлгәнташ мәмерйәһе. Бында уларҙың мәңгелек ауазын, моңон ишеткәндәйһең, үлмәҫ рухын тойғандайһың. Был изге урын үҙенә тартып, саҡырып тора», - тип яҙғайны журналист С. Бәҙретдинов. Ә шағирә Лариса Абдуллина Бөрйәнде «ерҙәге ожмах» тип атаны. Эйе, ысынлап та, ерҙәге ожмах, йәннәт ул Бөрйән яҡтары. Шуға ла матурлыҡ яратыусы бик күптәрҙе үҙенә тарта, тип яҙҙы Минзилә Фәхретдинова.

Бөрйән ауылдары тарихи Башҡортостан биләмәләрендә урынлашҡан. Ауылдарҙың юҡҡа сығыуы башлыса кешеләрҙең икенсе урынға күсеүенә бәйле. Бер ауылдың икенсе торама менән ҡушылып китеү осраҡтары ла бик йыш, ул ваҡытта берәүһенең генә исеме һаҡланып ҡала.
Башҡорт ауылдары X -- XV быуаттарҙа ултыраҡ тормошҡа күсеү сәбәпле барлыҡҡа килгән тип аңлаталар. Тарих фәне ҡанундары буйынса ауылға нигеҙ һалыу йылын күрһәткән ниндәйҙер яҙма сығанаҡ булырға тейеш. Әгәр ундай сығанаҡ булмаһа, хөкүмәт тарафынан тәүге теркәү йылын күрһәтәләр. Күсеп килеүселәр төҙөгән ауылдарҙың тыуған йылын билдәләү ауырлыҡтар тыуҙырмай, сөнки күскенселәр башҡорттар менән ер буйынса килешеү төҙөгәндәр. Совет заманандығы ауылдар буйынса хөкүмәт ҡарарҙары бар. Ә башҡорт ауылдарына нигеҙ һалыу йылын билдәләү бик ауыр һәм теүәл йылы билдәле ауылдар бик аҙ. Шуның өсөн, башлыса ауылдарҙың тәүге теркәү йылын күрһәтәләр. Хөкүмәт тарафынан бындай тәүге теркәү 1795 йылғы 5-се ревизия иҫәп алыу ваҡытында булған.
Ауылдарҙың топонимикаһы.
Ауылдарҙың исемдәре башлыса ауылға нигеҙ һалыусының исеменән йәки ер-урындың, йылғаның атамаһынан алынған. Ауылдарҙың берәү генә түгел, бер нисә исемлеләре лә булған. Ауыл исеменә «Яңы», «Иҫке», «Оло», «Кесе», «Үрге», «Түбәнге», «Баш», «Тамаҡ» һымаҡ

өҫтәмәләр быңдай исемле ауыл булған осраҡта ҡулланыла. Әгәр бөгөн өҫтәмәле исемле ауыл булып, шундай уҡ исемле (әммә өҫтәмәһеҙ) ауыл булмаһа, быңдай ауылдың элек булыуы бик ихтимал. Башҡорт ихтилалдарынан һуң, башҡорттарҙы ауылдары менән икенсе урынға ҡыуып, был урынға күскенселәрҙе ултыртыу осраҡтары бик күп булған.

Төрлө райондарҙа ғына түгел, бер үк район эсендә лә исемдәре бер төрлө булған ауылдар бар.

Бөрйән районыңдағы ауыл урамдары тураһында ла һүҙ алып барайыҡ.

Октябрь Революцияһына бәйле урамдар: Октябрь урамы. Яңы урамдар исемдәре заводтарға бәйле: Кирбес урамы. Башҡорт халҡының милли батырҙары менән бәйле: С.Юлаев, М.Шайморатов, М.Гәрәев урамы. Косманавтарҙың исемелә мәңгеләштерелә: Ю. Гагарин урамы. Башҡорт яҙыусылары, Мәжит Ғафури - шағир, башҡорт совет әҙәбиәтенең классигы, БАССР-ҙың халыҡ шағиры (1923) урамдары барлыҡҡа килә. Шағир-мәғрифәтсе Мифтахетдин Аҡмулла, ғалим Әхмәтзәки Вәлиди исемдәре менән бәйле урамдар бар.

Чечен республикаһында контртеррористик операцияларҙың береһендә һәләк булған.Үлгәндән һуң "Батырлыҡ өсөн" ордены менән наградланған. Бөрйән ерендә йәшәгән, бәләкәй тыуған иленә тоғро хеҙмәт иткән һәм исемдәрен мәңгеләштерергә лайыҡлы шәхестәр: Илдар Ғәбитов урамы. Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан: Һибәт Ишкилдин, Әйүп Һатыбалов һ.б

Әбделмәмбәт ауылында: Бабсаҡ, С.Мөхәмәтҡолов, Тау, Урман, Дуҫлыҡ, Колхоз, Үҙән, Туғай урамдары.
Әтек ауылында: С.Юлаев, Урал, Дуҫлыҡ урамдары.
Аҫкар ауылында: Мәктәп, Сыуаҡай, Самат Ғәбиҙуллин, Зариф Әхмәҙуллин, Нөгөш урамы.

Агиҙел биҫтәһендә: Муса Гәрәев, Ҡыуғын урамы, Ағиҙел, Тау, Йәштәр урамы, Совет тыҡрығы, Ишдәүләт урамдары.
Бәләкәй Ҡыпсаҡ ауылында: Үҙән, Йәштәр урамы.

Баҙал биҫтәһендә: Баҙал, Дуҫлыҡ, Аҡмулла, Мәктәп, З.Вәлиди, Тыныслыҡ, Ҡайынтуш, Мәсем, М. Горький, Арғыҙма, Ҡарат, Наураз, Райман Ишбаев, Юнир Ғәзизов, Йылға аръяғы, Ағиҙел урамдары.
Байғаҙы ауылында: Урман, Ураҙы, С.Псянчин, Д.Баязитов, Тау урамы.
Байназар ауылында: Салауат Юлаев, Октябрь, Тау, Туғай, Йәштәр, З.Вәлиди, Бельская, Дуҫлыҡ, Мәктәп, Тыныслыҡ урамы.
Брәтәк ауылы алты урамдан тора: Салауат Юлаев, Нөгөш, Мәктәп, Йәштәр, Ҡаран, Тау.
Ғәҙелгәрәй ауылында: Шүлгән, Заповедник, Морат туғай, Антон урамдары
Ғәлиәкбәр ауылында Үҙәк урам, Илдар Ғәбитов, Аратау, Йәштәр урамы.
Кейекбай ауылында: С.Юлаев, Мәктәп урамдары.
Килдегол ауылында: Ғәбитов, Йәштәр урамы.

Ҡолгана ауылында: С.Юлаев, Мөхәмәтйәнов, М. Мортазин, Шаҡман урамдары
Ҡотан ауылында: С.Юлаев, Тирәкле, Туйбаға урамдары.
Ҡурғашлы ауылында: Ю.Гагарин, М.Гәрәев, М.Шайморатов, Мәктәп, Урал, Ялануй.
Иҫке Собхангол ауылы бик ҙур. Матур урамдары бар, һәр урамы бер исемде йөрөтә Салауат Юлаев, Мөхтәр Сәғитов, Ленин, Матросов, Һибәт Ишкилдин, Октябрьск, Урал, Күл урамы, Кирбес, Мунса, Тыныслыҡ, Шишмә тыҡрығы, Совхоз, Ҡыҙыл - Таш, Мәжит Ғәфүри һәм башҡалар.
Иҫке Мөсәт ауылында: Саҡмағош
Исламбай ауылында: Хәмит Хәйбуллин, Шәүәли, Шәйек, Сыбайялан, Урман, урамдары.
Мәксүт ауылында: Мәктәп урамы.

Мәндәгол ауылында: Ағиҙел, Иҙел урамдары
Мәһәҙи ауылында: Зәки Вәлиди, С.Юлаев, Ш.Мөхәмәтйәнов урамдары.

Иҫке Монасип ауылында: С.Юлаев, Г. Ихсанов, Ослотау, Ағиҙел, Кепес, Суҡтал.
Нәби ауылында: Әйүп Һатыбалов, Моронташ, Ағиҙел, Ильяс Рәхмәтуллин, Ҡайынтуғай
Үрге Нөгөш ауылында: Нөгөш урамы.

Тимер ауылында: Салауат Юлаев, Ағиҙел урамдары.
Һарғая ауылында: Үҙәк, Башарт урамдары.

Ырғыҙлы ауылында: Е.Пугачев, Рылов, Заповедник, Тыныслыҡ, Кинйә Арыҫланов урамдары.

Яңы Усман ауылында: С.Юлаев, Т.Күсимов, Бетерә, Муса Мортазин, Зәки Вәлиди, М.Шайморатов, Йәүгәзе.
Яңы Мөсәт ауылында: Зәки Вәлиди, Алағуян урамы
Янһары ауылында: Ағиҙел, Дуҫлыҡ, Тыныслыҡ, Мәктәп, Йәштәр, Йылға аръяғы.
Яңы Монасип ауылында: Ауылдың төп урамы данлыҡлы ауылдашыбыҙ М. Сәғитов исемен йөрөтә, Ағиҙел, Дуҫлыҡ, Ҡаратау урамдары бар.

Яуымбай ауылында: Салауат Юлаев, Мәктәп урамдары бар.

Беҙҙе Һибәт Ишкильдин урамы исеме ҡыҙыҡһындырҙы. Урамыбыҙға бушҡа ғына Һибәт Ишкилдин исеме бирелмәүен асыҡлағыбыҙ килде. Ишкилдин Һибәт Ваһап улы 1914 йылда Мәндәғол ауылында тыуған. Уның атаһы урта хәлле уҡымышлы кеше булған. Тәүге белемде Һибәт өйҙә мәҙрәсә бөткән ағаһынан ала, унан һуң крәҫтиән йәштәр мәктәбендә уҡый. Уҡымышлы, белемле Һибәтте (1932-1934 йй.) Әтек ауыл советына секретарь итеп тәғәйәнләйҙәр.

1937 йылға тиклем район мәғариф бүлегендә белемһеҙлекте бөтөрөү буйынса инспектор була.
1939 йылға тиклем Һибәт Ишкильдин совет армияһында хеҙмәт итә, япон самурайҙарына ҡаршы һуғыша. 1940-1941 йылдарҙа «Марс» колхозының етәксеһе, Иҫке Собханғол ауылының секретары була. Һуғыштың тәүге мәлдәрендә Мәскәүҙә фельдшерлыҡ курстарында уҡый, лейтенант дәрәжәһендә Ленинград фронтына ебәрелә, полк командиры була.
Ҡыйыу һуғыша. Тыуған илебеҙ уны оло батырлыҡтары өсөн Ленин ордены, 2 тапҡыр Ҡыҙыл Йондоҙ ордены менән бүләкләнә. 1946 йылда район һаулыҡ һаҡлау етәксеһе булып тәғәйәнләнә. Һаулығы насарайыу сәбәпле, 1947 йылда эшен ташларға мәжбүр була. Һуғышта алған яраларынан, 3 йыл ҡаты ауырығандан һуң, 1951 йылда донъя ҡуя. Уның ҡәберенә стела ҡуйылған. Һибәт Ишкилдин урамында 53 хужалыҡ, уның исемен аҡларҙай кешеләр йәшәгән һәм йәшәй. Беҙ улар менән ғорурланабыҙ. Ирек Фәсхетдин улы Зарипов, хаҡлы ялдағы уҡытыусылар Валиева Асия Йәмил ҡыҙы, Сәғитова Фәнүзә Әхәт ҡыҙы, уның ҡыҙы йырсы Венера Юлгильдина, актер, мәрхүм Ғаяз Алтыншин, оҙаҡ йылдар типографияла эшләп хаҡлы ялдағы Һөйөшөва Мөкәрәмә инәй һәм башҡалар.
Һибәт Ишкильдин урамы йылдан – йыл матурлана, ҙурая. Урамдарын сәскәләр биҙәй, кешеләре матур йәшәй, беҙ яҡшы уҡырға тырышабыҙ. Урамыбыҙ - үҙен йәлләмәй, күп һуғыштарҙа ҡатнашҡан батыр исеме мәңгеләштерелгән, - ти әңгәмәсебеҙ Әминә Шәкирова менән Екатерина Тенькова.

Ватанға булған һөйөү тыуған ергә, уның тәбиғәтенә, иҫтәлекле урындарына, кешеләренә булған хөрмәттән башлана. Мәҙәниәтле кешене уның Тыуған иленең үткәненә, ата-бабалары тарихына булған ҡарашы буйынса танырға мөмкин. Халҡыңдың үткәнен белеп кенә, уның хәҙерге торошо хаҡында һүҙ йөрөтөргә мөмкин.

Ер-һыу атамалары араһында кеше исемдәренә бәйлеләре

Шәкүров Р.З хеҙмәтендә был проблема ентекле яҡтыртыла.[2] Мәҫәлән, Яңы Монасип һәм Иҫке Монасип аулдарына төшкән юлдан **Рәмзи юлы** айырылып китә. Элек Ағиҙел аша күперҙәр юҡ саҡта "Ҡыҙыл таң" колхозы рәисе Рахманғолов Рәмзи Иҫке Монасип ауылының Кепес ауылына элекке Транса юлы буйлап тау башы буйлап юл һалдыра.Сөнки яҙғы ташҡында Иҫке Монасип ауылының Ағиҙел йылғаһы аръяғында ҡалыусы өлөшөюлһыҙ бикләнеп ятып ҡалыусан булған. Был юл **Рәмзи юлы** булып ҡала. Иҫке Монасип һәм Яңы Монасип ауылдары араһына шул замандың колхоз рәйесе Сәфәрғәлин Ғилман аҫмалы күпер һалдыра. Бөгөн ул **Ғилман күпере** булып танылған.

Яңы Монасип ауылынан Шәкирә исемле әбей кешеләргә әйтмәй генә барып бер ерҙән аҡ балсыҡ ҡаҙып алып ҡайта икән. Кеше барыбер ҡарсыҡтың серен сисә. Башҡалар ҙа барып шәкирә әбейҙең соҡоронан аҡ балсыҡ ала башлағандар. Тик ул ерҙең исеме **Шәкирә әбей соҡоро** булып ҡала.

Риф исемле йәш тракторсы юлдан тракторы менән шыуып китеп юл янындағы батҡаҡлы соҡорға төшә, тракторҙы сығаралар, тик әлеге һыулы соҡор **Риф күле** исемен йөрөтә.

Уразбикә исемле ҡатын яҙға бесән еткерә алмай, тау буйының ҡарын көрәп юл һалып һыйырын ашатҡан. Ул Яңы Монасип ауылы янындағы ер **Уразбикә юлы** исемен йөрөтә. [1]

Волков - сабын сапҡан урыҫ исеме;
Ниғмәткин - сабын эйәһе исеме менән;
Хәйретдин - сабын;
Йәмилә түбәһе;
Урыҫ юлы. Ҡыпсаҡ һәм Яңы Монасип ауылдары аша Әүжән урыҫтары баҙарға йөрөгән.
Мәрйәкәй – сабын;
Калатуй – Филатов фамилиялы ер-һыу өйрәнеүсе исеменә бәйле Нәби ауылы янындағы тау;
Капал өйө - Капалов фамилиялы урыҫ өйө;
Хәсән утары -Һәүәнәк ташы аҫтында утар булған. Тәүге йәшәгән хужаһы исеме менән. Хәҙер утар юҡ, ялан исеме.

[1] Информатор Сәғитова З.Х. 1928 йылғы, Яңы Монасип ауылы.
[2] Шакуров Р.З. Башкирские топонимы от личных имен. Башкирский языковедческий сборник.-Уфа, 1975.

Сәгитова Гәүһәр Афзал ҡыҙы

Бөрйән районы халҡында ат культы,
уларҙың ауыҙ-тел ижадында һәм
райондың топонимикаһында сағылышы

Урманлы – таулы ер булараҡ бөрйәнлеләргә малсылыҡ иң ҡулай кәсептәрҙән һаналған. Халыҡтың иң яратып тәрбиәләгән малы йылҡы булған. "Урал батыр", "Аҡбуҙат" эпостарына бәйле ер-һыу атамалары, Шүлгәнташ мәмерйәһендәге таш быуат дәүеренең ат һүрәттәре лә киң билдәле.

Урындағы халыҡ атһыҙ йәшәмәҫкә тырышҡан, кемдер бер ат тотһа, хәллерәктәр күберәк ат тотҡан. Ат башҡорттоң тоғро юлдашы, айырылмаҫ дуҫы булған.

Аттың исемен ҡушып йырҙар йырлағандар, таҡмаҡтар, легендалар, әкиәттәр һөйләгәндәр.[1]

Ерән атҡа менеп, еләндәр кейеп
Йөрөһәң ине Уралды буйлатып.
Ағай-эне, дуҫ-иш ултырһаң ине
Уйнап-көлөп,ҡурайҙар уйнатып.
Турысай ҙа атым, эй елмәйҙер,
Был ғүмерҙәр ике килмәйҙер.
Был ғүмерҙең ике килмәгәнен
Фәһемһеҙ ҙә ирҙәр белмәйҙер.

Алтын ғына эйәр атҡа тейәр,
Ат эйәһе белмәҫ ат беләр.
Ҡыҙ балаҡайҙарҙың ҡәҙерҙәрен
Ата-инә күрмәҫ, ят күрәр.
Атҡынайым килә сылбырын һөйрәп,
Етәлмаммы йәйәү йүгерһәм.
Мәхрүм күңелдәрем асылып китә
Һеҙ дуҫ-иштәремде бер күрһәм.

Етегән дә етәү, Өлкәр бишәү,
Һарат менән Буҙат тик икәү.
Еңгәләрем етәү, ҡоҙасам бишәү,
Һөйгән йәрем генә тик икәү.

Атты телгә алған такмактар ҙа йырлана Бөрйәндә.

Атым да юҡ, арбам да юҡ,
Автомобиль алмаһам.

Һеҙҙе барып күрә алмайым,
Хаттар яҙып һалмаһам.

Ағиҙелде кисеп сыҡтым
Аҡ бәкәлле ат менән.
Ара йыраҡ, яна йөрәк,
Һөйләшербеҙ хат менән.

Аттар килә атлап-атлап,
Алдағыһы тирләгән.
Кешегә биргән бәхетте
Хоҙай миңә бирмәгән.

Һалҡын шишмә буръяғында
Аттар эсерһәң ине.
Йәнең һөйгән йәрең менән
Ғүмер кисерһәң ине.

Аттарым, йүгәндәрем,
Ҡыҙыл бөрлөгәндәрем.
Иҫтәреңә төшәр әле
Бергә йөрөгәндәрең.

Бәпәй һикерткәндә лә атты телгә алалар.

Атай миңә ат бирҙе
Эйәрлә лә сап тине.
Ҡайҙа матур ҡыҙ күренһә
Ҡосаҡла ла ят тине.

Түти,түти, түтия.
Минең улым сутия (судья).
Еккән аты күк бейә,
Арты тәртәгә тейә.

Ҡыҙым-ҡыҙым, ҡыҙ кеше.
Ҡыҙыма килер йөҙ кеше.
Йөҙ кешегә бирмәмен.
Алама тунлы, ала атлы
Алып китер бер кеше.

Апһын-әзе татыу булһа аш етер, ағай – эне татыу булһа - ат етер, тигән мәҡәлде лә иҫкә алып үтәйек.

Атҡа бәйле ырымдар, дауалау саралары ла йәшәгән Бөрйән халҡында. Һуңғы ваҡыттарҙа ла бағана башына теүәл көйө бешереп таҙаланған аттың баш һөйәген элеп ҡуялар. Маҡсат: йортто, кәртә-ҡураны, мал-тыуарҙы зыяндаштан һаҡлау.

Йылан саҡҡан кешене эркеткә туғылған ат тире эсергәндәр. Ат тире һөртөлгән сыбыртҡы менән һуҡһаң йылан шунда уҡ үлә икән. Ауыҙының ситтәре иҙелгән кешегә аттың ауыҙлығын тешләтеп кешнәткәндәр.

Төндә бәүел тотмаған баланы өс мәртәбә тирле ҡамыт аша үткәргәндәр.

Эпилепсия менән сирләгән кешеләрҙе лә тирләмәгән ҡамыт аша өс мәртәбә үткәргәндәр.

Сабып килгән ат ҡаршыһына сабый баланы, ауырыуҙан хәлһеҙләнгән, йәш балалы, йә йөклө ҡатындарға ҡаршы сығыу тыйылған, елпеү һуғылып сирләп китеү ҡурҡынысы бар тип һаналған.

Үҙ тормошонда атҡа шул тиклем ҙур урын биргән халыҡ, һүҙһеҙ, ер-һыу атамаларына уның исемен ҡушҡан.

Яңы Монасип ауылынан Исламбай ауылына киткән юлда Буҙбейә яланы бар. Иҫке Монасип ауылы янында **Атъяткан тауы**, Урал тауҙарына ҡарай Һәүәнәк ташы аҫтында **Ҡашҡат яланы**, Тимер ауылынан Ағиҙел йылғыһы аҡкан түбән оста **Сыбарайғыр** шаршыһы, Ҡолғана ауылынан алыҫ түгел **Ҡолағашҡа яланы.**[2]

Башҡорттар борон-борондан йылҡы һәм башҡа малдарын көтөп. Яҙ йәйләүгә күсеп, ҡыш ҡышлауға әйләнеп ҡайтҡан. Бигерәк тә Көньяҡ Урал төбәгендә йәшәүсе Тал һәм Иҙәш Ҡусҡары, Ярлыҡап, Рысҡужа (элекке исеме Суван), Ҡаҙмаш, Ҡолоҡас ауылдары урман тартып хәҙерге Бөрйән районы биләмәләрендә йәйләр булғандар. Ҡолғана ауылына яҡын иркен яландарға, асыҡ урындарға күсеп килгән һәм көҙгә тиклем йәшәгән. Ҡолғана ауылынан 9 саҡрымда ятҡан **"Ҡолағашҡа"** асығын шул замандарҙан **Суван Ҡолағашҡаһы** тип, ә Ҡаҙмаштар ултыраҡ иткән ерҙе **Ҡаҙмаш Ҡолағашҡаһы** тип йөрөтәләр. Ундағы зыяраттарға 200 йылдан ашыу. Ул дәүерҙә йәйләүҙә мәрхүм булып ҡалғандар урынында уҡ ерләнгән.

Һарғая йылғаһы башында **Ҡолоҡай** [3] тигән урын бар. Был урында ҡарағас ағастары күп. Элегерәк кеше ҡарағас һағыҙы йыйып кәсеп иткән.

Ҡарағастың ҡабығын әрсеп ҡаҙанда ҡайнатҡандар. Ағас таптары һыу төбөнә төшөп ятҡан. Ҡарағас һағыҙы һыу һыуынғас уның өҫтөнә туңған. Төймә ҙурлығы итеп 1 сәйнәм, 2 сәйнәмлек итеп бүлеп һалғандар. Баҙарға алып барып игенгә, сәйгә, онға алыштырыр булғандар.

Бер тапҡыр билдәле Шафиҡ сәсән Әминев шул Ҡолоҡайға барып сыҡҡан. Ҡолғана ауылының һағыҙ йыйыусылары Ҡағы заводынан барып сыҡҡан бер зәғиф һары тайҙы һуйып, бешереп, ит ашап ултыралар икән былар.

Сәсәнде табынға саҡырғас инәлтмәгән, йырын сығара һалып ашарға ултырған.

Һарғая башы Ҡолоҡай,

Тәңрем биргән һары тай.

Һары тайҙы ашамаһаң

Һағыҙыңа пропадай.

Ритатай, ритатай, ритатай.

Ауыл осонда йәшәүсе Иҙрис мулла "Харам"-тип ашамай икән урыҫ малын. Сәсән уға ла йыр сығара һалған.

Ауыл башы Иҙрис,

Тырнаҡтары еҙ көмрөс.

Һары тайҙы ашамаһаң

Ҡоротоңдо иҙеп эс.

Ритатай, ритатай, ритатай.

Бәләкәй Ҡыпсаҡ ауылынан Килдеғол ауылына аша төшкән тау Алаша булһа, Хәмит ауылына төшә торған текә тау Шаҡарған тип атала. Сөнки арбаның тәгәрмәсен шаҡармай төшөп булмай.

Байназар ауылынан алыҫ түгел **Ҡарайғыр яланы**;

Брәтәк ауылы янында **Сыбайялан** (сыбай ҡашҡа тип нәҙек оҙон, маңлайынан моронона тиклем ҡашҡаны әйткәндәр).

Сыбай ҙа ғына ҡашҡа баҫма ташҡа

Юлһыҙ ғына ерҙе үткәндә.

Ҡайҙа ла ғына барһаң дуҫ-иш булһын,

Дуҫ-иш кәрәк донъя көткәндә.

Яландың исеме оҙонса формаһына бәйле **Сыбай** булып ҡалған.

Ат аткан ялан.[4] Ике дуҫ һунарсы һунарға сыҡҡан. Буран көндө болан алырға уйлағандар. Аттарын саналарындағы бесәнгә ҡушып. Саңғыларын кейеп сығып киткәндәр. Йөрөп-йөрөп үҙҙәренең юлдарының башына килеп сыҡҡандарын аңғармағандар. Ниндәйҙер хайуандың ҡыбырлағанын шәйләп береће атырға мылтығын тоҫҡаған, икенсеһе теге хайуандың үҙҙәренең аты икәнен танып ҡалған да "Ат! Ат!"- ти икән. Тегеһе атып та ебәргән. Үҙҙәренең атын атҡанын белгәс атты атыусы асыулана икән "Башҡорт түгел икәнһең. "Ат бит,"- тип әйтә белмәнеңме?"- ти икән.

Ат баткан яланы;

Һарыбейә;

Бөрйән халҡы һыйыр, һарыҡ, кәзә, хатта сусҡа аҫыраған. Бик күп кенә микротопонимдар уларҙың исеме менән бәйле.

Һыйыршыуған тауы;

Һыйыр төбәге туғайы;

Тарғыл – һыйырҙың төҫө, ала ла түгел, ҡара ла түгел, бысраҡ һөрткән һымаҡ;

Ак һыйыр яланы;

Ҡыҙыл Һыйыр сабыны;

Кәзә ташы – Килдеғол ауылы янында;

Кәзә тау – Брәтәк йылғаһы буйында;

Суска – Яңы Монасип һәм Тимер ауылдары араһында (50-60 йылдарҙа сусҡа фермаһы булған).

Бөрйән районында ҡырағай йәнлектәр һәм ҡош-корт исеменә бәйле топонимдарҙы ла осратырға була, сөнки Бөрйән районы һәр төрлө урман кейегенә, ҡошона бай .Ер-һыу атамаларында ла ул сағылмай ҡалмай.

---

[1] Информатор Ямалова Б.Ф. 1924 йылғы. Әбйәлил районы Әбделғәзе ауылы.

[2] Информатор Ғәләүетдинов С.Ә. 1951 йылғы, Ҡолғана ауылы.

[3] Информатор Ямалов А.Ғ.1925 йылғы,Әбйәлил районы Әбделғәзе ауылы.

[4] Информатор Ямалова Б.Ф. 1924 йылғы. Әбйәлил районы Әбделғәзе ауылы.

Сәғитова Гәүһәр Афзал ҡыҙы

Уртаҡлыҡ исемдәрҙән күскән
Бөрйән районы топонимикаһы өлгөләре

Арал (Нәби аралы, Кепес аралы) - арал;
Ара-
Асыҡ-Арҡа (Тимер арҡаһы, Үлек арҡаһы) – арҡа;
Айҙама (Байназар ауылында) – айҙама;
Әрәмә-
Баҫыу-
Билтер (Нәби ауылы янында ҡалҡыу) –билтер;
Болаҡ-
Ер-
Йырын –
Игендек-
Ҡабаҡ-
Ҡайынлыҡ-
Ҡарағайлыҡ-
Ҡыуаҡлыҡ-
Ҡул-
Ҡыҫыҡ-
Остановка-
Оло юл-
Сағыл-
Сатра (Нәби сатраһы, Урал Сатраһы)- сатра;
Сауҡалыҡ-
Соҡор-
Сусаҡ (Яңы Монасип янында тау)-сусаҡ;
Тау-
Таш-
Түбә-
Түш –
Төбәк-
Төп-
Уба-
Ур-
Уҫаҡлыҡ

Утар
Ултырыш-
Уя-
Үҙәк-
Үр-
Үткәл-
Һике-
Һырт-
Шырлыҡ-
Ыстан-
Яр-
Ялан-
Ям (күмер, дегет яҡҡан соҡорҙар) -
Юкәлек-
Йәйләү-
Кардон-

-өй

Ташөй (мәмерйә);
Ҡайынөй (Яуымбай ауылының исеме);

-бикә

Сыуаҡбикә;
Сылтырбикә;

Сәғитова Ғәүһәр Афзал ҡыҙы

Бөрйән районының фаунаһы

һәм уға бәйле топонимдар

Бөрйән районы территорияһының күпселек өлөшөн урман алып тора.

Республика биләмәһендә йәшәүсе йәнлектәрҙең күпселеге бында йәшәй. Юғалып барыусы йәнлек һәм үҫемлек төрҙәрен һаҡлау маҡсатында башҡорт дәүләт заповеднигы ойошторолған.

Кеше менән йәнәшә тиерлек йәшәүсе ҡырағай хайуандар: айыу, бүре, төлкө, ҡуян, тейен, терпе, болан, мышы, марал, илек, ҡабан. Кеше күҙенә салынмайыраҡ йәшәргә тырышыусы йәнлектәр кеш, һыуһар, һеләүһен, шәшке. Уларҙы оҫта һунарсылар ғына аулап алыусан.

Топонимдарҙа күбеһе кешегә осрай–осрай йөрөгән ҡыр йәнлектәре исеме таралған. Күрәһең, кеше теге был йәнлектең төйәк иткән ерен, йә уның кеше менән осрашыу ваҡиғаһын мәңгеләштергән.

Айыуҙы (йылға); Был йылға Яңы Монасип менән Нәби ауылдары араһында. Ул бөгөн дә айыу төйәге булып һанала.

Айыусапҡан (асыҡ). [1]

1935 йылда “Ҡолғана” колхозы колхозсылары бесән әҙерләргә Өмбәт яланына бара. Ике колхозсы ауылға ризыҡ алып килергә һыбай ҡайтырға сыға. Шул саҡ һаҙлыҡта ҡатын-ҡыҙҙар тауышы сыға. Был яҡтарҙа айыу һәр саҡ күп була.Ҡатын – ҡыҙҙар ҙа шул турала һөйләшәләр. Әлеге ике һыбайлы был ҡыҙ-ҡырҡынды мәрәкә итмәксе була. Толоптарының киреһен кейеп айыу тауышы сығарып аунай башлайҙар. Ҡатын-ҡыҙҙар ҡурҡып ҡасып ҡайталар. ”Ат ҙурлыҡ айыу беҙҙең алдан ғына сабып үтте”- тиҙәр икән. Ошо ваҡиғанан һуң Өмбәт яланы ситендәге асыҡ **Айыусапҡан асығы** тип атала башлай.

Айыу исеме менән Бөрйән урмандарында Бөйөк Ватан һуғышынан һуң кеше ашаусы аҡтүш айыуҙың килеп сығыуы, уның кешеләрҙе тәләфләүе менән бәйле микротопонимдар бар. Шуларҙың иң билдәлеләре булып түбәндәгеләр тора: [2]

Ҡыҙҙарҙы айыу ашаған ер;

Ҡуян малайын айыу ашаған ер;

Сайырсы ҡыҙҙарҙы айыу ашаған ер;

“Ҡыҙҙарҙы айыу ашаған ер” Бөрйән районында берҙән-бер булған автомобиль трассаһынан Яңы Монасип ауылына төшөп барған юлда Ҡаҙна уяһында.

Был хәл 1948 йылдың йәйендә була. Иҫке Монасип ауылынан ике һауынсы ҡыҙ иртән томанда Һарт Кәлтәгәүе фермаһынан өйгә ҡайтып барғандар. Уларға айыу тап булып. Икеһен дә талап ташлай. Өҙгөләп арҡа иттәрен ашай.

Уларҙан һуң шул уҡ юлдан ҡайтып барыусы ҡатын юл буйында “Ниндәй кеше ит йөкләп ята икән?”- тип йүгереп үтеп китә. Артынса килгән ҡатын туҡтап, иғтибар итһә, теге ҡыҙҙарҙы танып ҡала. Бик ныҡ тәләфләнгән булһа ла, береһе хәлен аңлата. Айыуҙың яҡында ғына ултырыуын, ҡабат-ҡабат әйләнеп килеп, тешләп китеүен әйтә. “Йәһәтерәк ҡас, атайымдарға әйт, һыу килтерһендәр”- ти ул.

Ауыл араһы байтаҡ. Йәйәүле кеше ҡайтып әйтеп, ирҙәр ат егеп килгәнсә, ҡыҙҙарҙың береһе йән биргән була. Икенсеһе ауыр яралы, ярым ашалған була. Ул ҡайтып йән бирә.

Ҡыҙҙарҙы айыу ашаған ерҙән бөгөн дә яңғыҙ үтеүе шомло.

Шул уҡ айыу күрше Нәби (Ҡуян) ауылына 10 йәшлек улы менән Ҡыҙылъярҙан бесәндән ҡайтып килеүсе ҡатынға тап була. Әсә кеше баланы ағас башына мендерә. Үҙе икенсеһенә мenә. Айыу ағас башына менеп малайҙы һөйрәп төшөрөп әсәһенең күҙе алдында ашай. Ҡатындың сәсе ап-аҡ була. **Ҡуян малайын айыу ашаған ер** булып халыҡ хәтерендә ҡала.

Был кеше ашаусы айыу шом һалып урмандарҙа оҙаҡ йөрөй, кешеләргә осрап тора. Урман артеле асылып, сайырсылыҡ көсәйгәс Талпаҡ тигән ерҙә ҡыҙҙар сайыр йыя сыға. Эште иртүк башлайҙар, сөнки воронкаларға сайыр таң атҡанса тулып тора, оҙаҡлаһаң ергә аға. Исрафлаған өсөн яуап бирергә кәрәк.

Шул саҡ әлеге айыу ҡыҙҙарҙың береһен эләктереп ала. Ҡыҙыҡай күпме ҡысҡырмаһын, ялбармаһын ҡоралһыҙ кешеләр ярҙам итә алмайҙар, ҡарап тороп ашаталар. Шунан һуң ғына районның иң яҡшы 50 һунарсыһын ҡоралландырып, урманды һөҙә башлайҙар һәм аҡтүш айыуҙы атып алалар. Был урын **Сайырсы ҡыҙҙарҙы айыу ашаған ер** булып китә.

Фәжиғә урындарын кешеләр иҫләп йәштәргә күрһәтә йөрөйҙәр.

Бүреҡырған (ялан);

Бүреле буйы;

Бүре түбө;

Ҡарағошто;

Ҡарсығайылға;

Ҡоҙғонташ;

Өкөташы;

Ҡоҙғон ҡаяһы;

Ҡуян ауылы (Нәби)

Алағуян

Бөрйән районы микротопонимикаһы башлыса халыҡтың кәсебенә, хайуандарға, үҫемлектәргә, бөжәктәргә бәйле.

Игенселеккә бәйле атамалар:

Һабансы;

Игендек (сабын);

Иген саттығы;

Аштыҡ уяһы;

Баҫыу яланы;

Тирмән туғайы;

Арышбашы.

Ҡортсолоҡҡа бәйле атамалар;

Ҡортсолоҡ;

Ҡыусолоҡ.

Урмансылыҡҡа бәйле атамалар:

Шыуҙырғыс (тауҙан Ағиҙелгә ағас шыуҙырғандар)

Трансакеләт (трансалар һаҡланған ер);

Эстакада (ағас тейәгән ер)

Транса юлы;

Туҙтабан йылғаһы;

Баҙ соҡоро;

Баҙ яҡҡан соҡор;

Дегет яҡҡан соҡор.

Малсылыкҡа бәйле атамалар:

Силос соҡоро;

Сусҡа;

Күкбесән;

Ҡарағайсабын;

Ҡырҡсүмәләтуғай;

Бишкүбә;

Быҙауүлгән;

Кәбәнташ.

- **сабын**

Ҡарағайсабын;

Суҡраҡты сабыны.

Йыйыусылыкҡа бәйле атамалар:

Һарналы;

Муйылтүбә;

Сейәле түбә;

Еләктүбә.

Бик күп ер-һыу атамаларында ағас исеме бар:

Баланйорт (Аралбай ауылы яғында);

Ҡарағас йорт (Ғәлиәкбәр юлы буйында);

Имәнйорт (Ғәлиәкбәр юлы буйында);

Муйылтүбә;

Ҡарағайсабын;

Уçаҡ ҡышлау;

Йүкәле туғай;

Энәлек;

Ҡарағастыбейек;

Суҡмуйыл-һикеһе;

Ҡаланҡарағай.

Ҡалынуçаҡ (Ғәлиәкбәр юлы буйында)

Бөжәк исемдәре булған ер-һыу атамалары:

Серәкәй;

Ҡортсолоҡ;

Ҡыусолоҡ.

Киндер эшкәртеү менән бәйле атамалар:

Этаяҡ тармалығы;

Киндерҙе уй (Иçке Монасип ауыуылында, Туҡмаҡтан ары);

Борғоса йылғаһы.

Ҡош-ҡорттка бәйле микротопонимдар:

Ыласын;

Ҡарсығайылға;

Ҡоҙғонташ;

Өкө ташы.

[1] Информатор Ғәләүетдинов С.Ә. 1951 йылғы, Ҡолғана ауылы.

[2] Информатор Сәғитова З.Х.. 1928 йылғы, Яңы Монасип ауылы.

Сәгитова Гәүһәр Афзал ҡыҙы

Бөрйән районы топонимикаһында гидронимдар, оронимдар, ойконимдар һәм микротопонимдар

“Topos”-грекса “урын”, “onoma”- “исем” тигәнде аңлата. Тимәк, топоним – урын исеме, йәғни, географик атама тигән һүҙ. Ә инде топонимия – берәй илдең, өлкәнең, райондың, төбәктең географик атамалар йыйылмаһы. Атамалар донъяһын, топонимияны өйрәнеүсе фән тармағы топонимика тип атала. Дөйөм алғанда “топонимика – ул географик атамалар тураһында тәғлимәт”[1]

“Географик исемдәрҙең, йәғни урын, ауыл, ҡала, күл, һыу, тау, урман һ.б. атамаларҙың барлыҡҡа килеүе һәм тарихи үҙгәрештәре тураһындағы фән топонимика тип атала”[2]

Топонимияның төрҙәрен асыҡлап китәйек.

1. Гидронимдар йәки гидронимия.

Гидроним (гидро-һыу) йылға, күл, һаҙлыҡ, туғай, шишмә, ҡоҙоҡ, шәре һ.б. атамалары.

2. Оронимия, ороним – тау, тау теҙмәһе, һырт, ҡая, түбә, арҡа, йәки иреһенсә, тигеҙлек, уйһыулыҡ, соҡор, тарлауыҡ, уя һымаҡ орографик объекттарҙың, ҡоро ер өҫтөндәге рельеф объекттары атамаларының йыйылмаһы.

3. Микротопонимия. Микро – “бәләкәй, ваҡ” тигән һүҙ. Микротопонимия – көтөүлек, сәсеүлек, һыулау, төбәк, соҡор-саҡыр, уба, түбә, ваҡ һаҙлыҡ, күл-күләүек, шишмә, ҡойо кеүек бер йәки бер нисә ауыл араһында ғына билдәле булған ер-һыу атамалары.

4. Ойконимия. Ойконим –халыҡ йәшәгән урындарҙың (утар, йорт, йәйләү, ауыл, ҡала) атамаһы.

Гидронимдар

Арал (Нәби аралы, Кепес аралы)- арал;

Айҙама (Байназар ауылында) – айҙама;

Әрәмә-

Болаҡ-

Йырын –

Ҡул-

Төп-

-туғай

Имес төбө туғайы

Ҡарағайтуғай;

Ҡаршытуғай;

Ҡайынтуғай;

Тирмән туғайы (Туғайҙа тирмән булған);

Ҡырҡсүмәләтуғай (40 күбә бесән төшкән);

Күперауыҙтуғай (Күпер ауыҙындағы туғай);

Йүкәле туғай;

-йылға

Ҡарағаййылға;

Ҡарсығайылға;
Яманйылға;
Арҡырыййылға;
Яланйылға;
Ҡомйылға (Янһары ауылы янында)
Ҡаранйылға;
Борғоса йылғаһы;
Күрпә йылғаһы;
Әпсәләр йылғаһы.

-кисеү

Сатра кисеүе;
Йәйпе кисеүе:
Тәрәнкисеү;
Текәморон кисеүе;
Яланайыр кисеүе;
Йәүгәзе кисеүе;
Иҫәнбирҙе кисеүе;
Алаша тамағы кисеүе;
Сәңгелде кисеүе;
Айыуҙы кисеүе;

-тамаҡ

Үҙән тамағы ;
Бетерә тамағы;
Оҙонсал тамағы;
Өстамаҡ;
Алаша тамағы;

-колаҡ

Һыуыҡколаҡ (Айыуҙы йылғаһының башы)

-күпер

Бейеккүпер (Аралбай)
Ғилман күпере (Иҫке Монасип)
Беренсе күпер (Иҫке Собханғолда);
Кепес күпере (Иҫке Монасип)
Ҡуян күпере (Нәби)
Оҙонсал күпере (Килдеғолға етәрәк).

Ойконимдар.

Йәйләүҙәр урыны, йорттар

Урал тауҙары үҙенең мул үләне менән малсыларҙы һәр саҡ ҡыҙыҡһындырған. Борон-борондан бында башҡорттар йәйләр булған.

Урал тауҙары йәйләүгә Иҙәш һәм Тал Ҡусҡары ауыл халҡын да һыйындырған. Хәйретдин йорто тигән урында үҙенең аласыбар аттары менән билдәле Бейеш батырҙың туғаны Хәйретдин бай йәйләгән. Был байҙың малы күсенгәндә өйөрҙөң аҙағы Ҡусҡарҙан сыҡҡанда унын башы Ҡаҙмаш ауылында булған. Малдың теүәллеген белер өсөн уларҙы бер асыҡҡа өйөргәндәр. Асыҡ тулһа мал теүәл булған.

Борон ҡалмык баҫҡынсылары халыҡтың малын ҡыуып алып китеп ыҙалатҡан. [3] Шулай бер йәйләү халҡы баҫҡынсыларҙан ҡасып йәйләү урынын алмаштыра. Ир-егеттәр Кәркәбар, Тарбаҡ, Үҙән буйындағы шырлыҡтарҙа баҫҡынсыларҙы аңдырға булалар. Ҡатындарға утты төш мәлендә генә яғырға ҡушыла. Сөнки был ваҡытта төтөн ҡырға таралмай.

Ырыу батыры Сура ҡатыны Йәмиләгә яҡындағы тау түбәһенә менеп тирә-яҡты, баҫҡынсыларҙы күҙәтергә ҡуша. Ул тауҙы ***Ҡарауылтүбә*** тип атайҙар. Тирмә янынан аҡҡан, әсәләр һыу алған йылғаны Әсәләр йылғаһы, беҙҙеңсәрәк ***Әпсәләр йылғаһы*** тип атағандар.

Баҫҡынсылар күп осраҡта ҡәберҙәрен бында тапҡандар ***Ҡаҙағүлгән*** яланында шундай ҡәберлектәр күп булған. ***Үлек арҡаһы, Татар үлеге*** атамалары ла шул турала һөйләй.

Сәркә йорт [4] исемле йәйләү урыны ла оҙаҡ йылдар кешенең йәшәү урыны булған. Ундағы зыяраттың ҙур һәм боронғо булыуы шул турала һөйләй. 1925 йылғы Ямалов Афзал һөйләүенсә был йортто кеше урап үтергә тырышҡан. Сөнки һуңға ҡалған юлсыларҙы бире баҫтырыр булған.

Шулай малай саҡта, иптәшем Харис менән Сәркә йорт аша үтергә тура килде. Харис һуҡыр ине. Алыҫта ағас башында ут күренде. Ат тирләне, ауырлыҡ менән атлай. Мин утҡа мылтыҡ менән атам. Ул сәсрәп китә лә, йыйналып тағы алғараҡ барып ултыра. Харис ни булды тип һорай, мин уны ҡурҡытмаҫ өсөн әйтмәйем. Үҙем атты теҙгененән алдым, Харисты һыбай ултырттым. Үҙем түштәрҙе асып доға уҡый башланым. Мәскәй әбей Ҡаҙағүлгәнгә тиклем оҙата килде. Ниһәйәт Крутой Лог кардонына килдек.

Әмәлгә ярағандай, Кәлимулла апам унда булып сыҡты. “Йә, нисек килеп еттегеҙ?”- тип аптыраны ул. Беҙҙе өшкөрҙө. Сығып атта өшкөрөп, арҡаһын һыпырып, һелкендереп тәрбиәләп инде”.

Биреле йорт тигән йәйләүҙең дә исеме үҙе һөйләп тора.

Баланйорт (Аралбай ауылы яғында);

Ҡарағас йорт;

Имәнйорт.

Килдеғол (Һарағы) ауылы халҡы яҙ йәйләүгә ***Яҙғыйортҡа*** күсенгән[5].

Көҙгә ҡарай мал һимергәс ***Ҡыҙҙаргиткән*** йәйләүенә килгәндәр. Ҡыҙҙаргиткән йәйләүендә еткән ҡыҙҙарҙы кейәүгә оҙатҡандар, килен алғандар. Унан һуң ***Көҙгөйортҡа*** килгәндөр. Ҡар яуыуға ауылға ҡайтҡандар.

Иҫке Монасип ауылынан алыҫ түгел ***Туҡмаҡ*** һәм ***Ҡуралыйорт*** тигән урындар бар. Улар бер-береһенә теркәлеп ята.

Яңы Мөсәт Ғәлиәкбәр юлы буйында **Илешйорт, Имәнйорт, Ҡарағасйорт, Уртайорт** тигән урындар бар. Бикташ ауылынан төньяҡлап **Көҙгөйорт, Яҙғыйорт, Шәйекйорт** йәйләүҙәре бар [8].

Революцияға тиклем үк әле Ҡолғана ауылынан 7 саҡрым алыҫлыҡта –Үҙән йылғаһы буйында Ҡаҙмаш ауылынан килгән Рауил, Билал исемле эшҡыуарҙар эш асҡан [7]. Улар соҡор ҡаҙып күмер үртәгән. Был соҡорҙар Баҙ соҡоро йә баҙ яҡҡан соҡор, дегет яҡҡан соҡор тип атала. Ҡарағай утыны күмерен Ҡағы заводына тапшырған. Ҡайын туҙынан дегет ҡайнатып, ҡул бысҡыһы менән транса, таҡта ярып, ылау-ылау итеп тейәп борон-борондан дан тотҡан Хәлил баҙарына сығарып һатҡандар.

Дегет алыр өсөн ағас үртәүселәр табандарына һәр саҡ ҡаты туҙ бәйләп йөрөр булған, сөнки ул аяҡ кейемен ҡоро тотҡан, бысратмаған. Таймаған да. Ана шуға ла инде бында эшләүселәр яҡындағы бәләкәй генә йылғаны **Туҙтабан йылғаһы** тип йөрөткән.

Ҡаҙмаш ауылы кәсепселәре төйәк иткән урында 20-30-ға яҡын йорт булып киткән. Уны Ҡаҙмаш утары тип атағандар.

Оронимдар. Уларҙы күп өлөшө тау, таш, туғай, ҡая, уя, морон һәм башҡа исемдәргә эйәреп килә.

Кеһәле уй;

Аштыҡ уяһы;

Шәреле уяһы (Йыл әйләнәһенә шәре булып йәйелеп шишмә аға);

Масаҡ уяһы;

Йыландыуй;

Ҡаҙна уяһы (Яңы Монасипҡа төшкән юл буйында);

Мәсет уяһы;

Тәрәнуй.

---

[1] Мурзаев Э.М. Очерки топонимики.М.,1975. С.25.

[2] Попов А.И.Географические названия: Введение в топонимику.М.-Л.,1965, С.7.

[3] Информатор Ғәләүетдинов С.Ә.1951 йылғы,Ҡолғана ауылы

[4] Информатор Ямалов А.Ғ.1925 йылғы, Әбйәлил районы Әбделғәзе ауылы.

[5] Информатор Илсеғолова Н.Ф. 1916 йылғы, Килдеғол ауылы.

[6] Информатор Хөсәйенова Ғ.И.,1919 йылғы, Иҫке Монасип ауылы.

[7] Информатор Ғәләүетдинов С.Ә., 1951 йылғы, Ҡолғана ауылы.

[8] Информатор Аллабирҙин Д.З., 1962 йылғы, Тимер ауылы.

Сәғитова Гәүһәр Афзал ҡыҙы

Атам-әсәм һиндә ғүмер иткән
Сал Уралым, йәмле Ағиҙел.
Онотмабыҙ һине бер ваҡытта
Тыуған ауылым, тыуған еребеҙ.

Мөғжизәләр иле - Бөрйәнем

Бөрйән иле – сал тарихлы ил. Бөрйән районы, БР-ҙың көньяҡ-көнсығышында, Башҡортостан (Көньяҡ) Уралының үҙәк өлөшөндә урынлашҡан. Бөрйән — таулы район. Алыҫ дәүерҙәрҙә ырыу бейҙәрен буйһондороп йәшәгән Мәсем хан исемен алған Мәсем тауы – иң бейек түбәле мәғрур тау. Мәсем тауының иң юғары ҡаяһы Ҡыҙҙар тауы. Ҡоҙған ҡаяһы ла был тауҙа урынлашҡан. Баҙал, Ураҙы, Ҡалыу, Крака, Юрматау, Атайсал, Ҡурыуҙы, Аҡбейек, Әрҙәкле, Ҡаншал, Ҡыҙҙар тауҙары райондың даны булып тора. (Әбделмәмбәт ауылы (Ҡыпсаҡ) яғындағы мөһабәт тауҙар). Ағиҙел, Ҡана, Оло һәм Кесе Нөгөш, Алағуян, Ҡурғашлы, Һәүәнәк, Майғашлы, Ырғыҙлы йылғаһы, Бетерә туғайҙары буйҙары, Шүлгән мәмерйәһе, Йылҡысыҡҡан күле, Бабсаҡ бей ҡәбере, Атайсал, Мәсем тауҙары, Тарыуал яланы, Антон, Ҡарағол, Кәмәше, Инсебикә ҡаяһы һ.б. Күсәкбей Ҡарағөләмбәтте ҡара һыйырға атландырып үткән - Ҡара һыйыр юлы, ер-һыу һәм ауыл атамалары, ауыл исемдәре хаҡында был китапта риүәйәттәр тупланған. Уларҙың һәр береһе – үҙе бер мөғжизә, мауыҡтырғыс хикәйә.

Эйе, тыуған ауыл, тыуған яҡтар һәр кешегә иң изге, иң ҡәҙерле нәмә. Атай-олатайҙар һөйләгән ер-һыу атамаһылары сабый саҡтан уҡ һәр кемдең күңеленә һеңгән. Легенда, риүәйәттәр төбәге, халҡыбыҙҙың эшһүр эпостары тыуған ер.

Районыбыҙҙың ҡап уртаһынан бүлеп сафтан - сафы Ағиҙел аға, ян-яҡлап легендаларға бай тауҙар теҙмәһе уратып алған, мәғрур ҡаялар. Ауылдың, тирә-яктын тарихын белмәй тороп, беҙ уның изгеләрҙән-изге, матурҙарҙан-матур, яҡындарҙан-яҡын икәнлеген белеп бөтмәйәсәкбеҙ. Кешелә күпме хәтер, шул хәтлем кешелеклелек! Шуға күрә беҙ уның тураһындағы легендалар менән ҡыҙыҡһынырға, өйрәнергә тейешбеҙ. Ошо атамаларҙың мәғәнәһен асып, уға бәйле риүәйәттәрҙе яҙып, киләһе быуынға еткереү беҙҙең изге бурыс.

Ағиҙел (йылға) - Ағиҙел, Башҡортостандағы иң ҙур йылға һәм төп һыу юлы. Кама йылғаһының һул яҡ ҡушылдығы. Уралтау итәгенән башлана. Оҙонлоғо — 1420 км, бассейнының майҙаны — 141900 **км 2.** Көмөштәй аҡ был йылға Ирәмәлтау тирәһенән баш ала. Белорет, Бөрйән ерҙәренән Урал тауҙары, ҡаялар араһынан аға. Уң ҡушылдығы Нөгөштө юлдаш итеп китә биргәс, иркен туғайлыҡтарға барып сығыр ерҙәрҙә үҙәне йәйлап киңәйә. Боронғо төрки халыҡтарында Иҙел «һыу, йылға» тигәнде аңлата. Ағиҙелдең русса «Белая» тигән аты башҡортсанан туры күсермә: 1627 йылда сыҡҡан «Ҙур һыҙма китабы»нда һәм башҡа тарихи яҙмаларҙа Ағиҙел "Белая Воложка" тип атала.

Урал тауҙары. Урал, Европа менән Азия сиктәрендә яткан таулы физик-географик ил, меридиональ йүнәлештә Кар диңгеҙенән Ҡазағстан далаларына тиклем һуҙылған ер. Оҙонлоғо 2000 км. Киңлеге 40-60 км, урыны менән 100 км-га етә.

Мәсем — Бөрйән районында урынлашҡан Көньяҡ уралдың тау массивы. Бейеклеге 1040,3 м. 1000 метрға еткән Көньяҡ Уралдың көньяҡ сигендәге тау һырты, Бөрйән районының иң бейек нөктәһе. Мәсем Аҡбуҙат Аҡбуҙат эпосының персонажы. Эпоста ырыуҙарҙы берләштереүсе һәм беренсе дәүләтселеккә нигеҙ һалыусы Мәсем хан исеме лә Бөрйән еренә береккән.

Алда әйтелеүенсә, райондың иң бейек тауы Мәсем - унының исеме менән йөрөтөлә. Былтыр Урал ағай Иманғолов, ҡайныһы Заһит Ишдәүләтов һөйләп ҡалдырған легенда буйынса, Мәсем тауы башындағы ялпаҡ ҡаяны, ул ҡәлғәне лә хәтерләтеп ҡуя, Хандың зыяраты тип алып барып күрһәткән.

Ҡыҙҙар тауы - Бөрйән районында урынлашҡан Көньяҡ уралдың тау массивы. Бейеклеге 1040,3 м. 1000 метрға еткән Көньяҡ Уралдың көньяҡ сигендәге тау һырты, Бөрйән районының иң бейек нөктәһе. Мәсем тауының тау сусағы 20*6 м, тау һыртынан бейеклеге 8 м ҡалҡып сығып, өҫтө йәйелеп өҫтәлдәй тигеҙ урын. Мәсем тауы йәйләүҙәрҙәренә күскән урындарҙан ҡыҙҙар йыйылып ошо тау ҡаяһына менеп төрлө уйын уйнар булғандар.

Таш мәсет - Бөрйән районында урынлашҡан Көньяҡ уралдың тау массивы. Бейеклеге 1040,3 м. 1000 метрға еткән Көньяҡ Уралдың көньяҡ сигендәге тау һырты, Бөрйән районының иң бейек нөктәһе. Ҡыҙҙар тауының көньяғынан 30 м алыҫлыҡтағы ергә еңеп ҡалҡып торған тәбиғи ай формаһындағы таштар, был урынға тирә яҡ йәйләүҙәрҙән ураҙа айҙарында аят, доға ҡылған урын. Ошондай урын Үрге Нөгөш ауылының көнбайыш-төньяғында 6 саҡрым, Ғәлиәкбәр ауылының көньбайышында 16 саҡрым алыҫлыҡта ла бар. Йәй осоро йәйләүҙәрҙән, сабынлыҡтарҙан ураҙа айҙарында халыҡ йыйылып Таш мәсеттә табынған урын.

Шүлгәнташ мәмерйәһе. Еребеҙҙең күкрәге киң: баһалап бөткөһөҙ хазиналар, беҙгә билдәле булмаған әллә күпме серле урындар, тәбиғәт байлыҡтарын һаҡлай ул үҙендә. Бынан меңәр йылдар элек таш быуаты дәүеренән боронғо рәссамдарҙың төшөргән һүрәттәре бөгөнгәсә юғалтыуһыҙ һаҡланған Бөрйән районында урынлашҡан Шүлгәнташ мәмерйәһе лә тәбиғәттең ғәжәйеп күренеше, ҡабатланмаҫ мөғжизәһе. Был ғәйәт ҙур бушлыҡ ҡасандыр тәүтормош кешеләренең изге табыныр урындары булған. Ҡөҙрәтле ташкеләт уларҙы дошмандарынан, һыуыҡтан һаҡлаған. Археологик эҙләнеү эштәре алып барылыу һөҙөмтәһендә бында радиоуглерод ысулы менән усаҡтарҙың 14 - 15 мең йылдар элек күмерләнеп янып ятҡанлығы асыҡланған. Ер аҫты докъяһының һәм төпһөҙ бушлыҡтарҙың беҙгә асылмаған байтаҡ серҙәре барҙыр әле. Шуның өсөн дә ул бөгөн - ғалимдарҙың иғтибар үҙәгендә.

Йылкысыккан күле. Легендаларҙың бер варианты буйынса, үҫәргән ырыуы кешеһе беҙҙең яҡка мал урларға килә. Ҡайтҡас, урлап тапҡан малының сығышын ошолай аңлата: «Күл тирәләй йөрөгәндә эт эйәрткән бер кеше килеп сыҡты ла ни эшләүем менән ҡыҙыҡһынды. Мин был яҡҡа кейек ауларға килеүемде әйткәс, ул: "Һин, егет, ҡош-ҡортҡа зыян итмә, ҡайтып кит. Бының өсөн күп мал бирәм, тик артыңа әйләнеп ҡарама", – тине. Шунан миңә ат бирҙе лә атланып сабырға ҡушты. Шау-шыу ишетеп, мин артҡа боролоп ҡараным. Шул ваҡыт малдың күлдән сыҡмағаны кире сумды, ҡороға сыҡҡандары эйәрҙе". Ысынында иһә, малдар урланған булһа ла, егет һөйләгән версия буйынса, күлгә Йылҡысыҡҡан тигән исем йәбешеп ҡала.

Ҡолғилде баш.—ҡол + килде; Ҡолгилдин фамилияһы бар.

Ҡолғана баш.—ҡол + ғына (иркәләү ялғауы; был төр ялғау менән яһалған *Биккенә, Ишке*
Кулгана баш. — ҡул+гана

Ҡолғона монг. — сысҡан (боронғо 12 йылдан торған мөсәл хисабында 1-се йылдың атамаһы; бәлки, ошо сысҡан йылында тыуған балаға ҡушылған исемдер. Ҡолғона тигән ауыл исеме бар)

Ҡолгана (Ҡалгаһау ауылы). 1773-1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышынан һуң Салауат Юлаев, Е.Пугачевтың отрядтарын эҙәрлекләүҙәр башланғас, Стәрлебаш районынан Оло Сытырман ауылынан егерме ике йәшлек Әлибаев Торһай исемле кеше ҡасып ошо яҡтарға юғылып донъя көтөп йәшәй башлаған. Унан Байғаҙы улы тыуып ишле ғаиләнән Байғазиндар нәҫеле таралған.

Ҡаҙнабикә утары һәм йылғаһы. Ҡолғана ауылынан төньяҡ-көнсығышында дүрт саҡрым алыҫлыкта Ялтыран ауылына етмәҫ элек утар булған. Ошо йәйләүҙә оҙаҡ йылдар Биккининдар йәйләгән. Сөлмәндең ҡыҙҙары Зөлхиә, Ҡаҙнабикә, унын улы Әксән (Көҙәндә йәшәй), икенсе улы Йомағилде ҡыҙы Миңниса, улы Исламғол, унын улы Ильяс Ишбаевтың (Ғәлиәкбәрҙә йәшәне) ата-олаталары төйәкләгән утар булған. Ҡаҙнабикә ҡатын исеменән утарҙы һәм йылғаны шулай атайҙар.

Ҡолғилде. Оло Кәбәс ауылынан төньяғында урынлашҡан бейек тауҙы атайҙар. Ҡолғилде даны таралған, шәп һунарсы була, һунарға гел яңғыҙы йөрөр булған. Бер мәл айыуға һунарға барып өңөнән сығарып һөңгөһө менән сәнсә. Ярһыған айыу һөңгө һабын һындырып һунарсыға йәбешә. Сос, етеҙ һунарсы яртылаш ҡалған һөңгөһөн ала һалып айыуға йәнә сәнсеп үлтерә. Хәлһеҙ һунарсы өс көн һәм кис айыу өңөндә йоҡлай. Ауылдаштары өсөнсө көн табып ауылға алып ҡайталар. Данлыҡлы һунарсының нәҫелдәре Байғазин Миңлеәхмәт ағайҙың (1932 йылғы) әсәһе Гөлмәҙинә яҡлап атаһы Сәйфулланың унын атаһы Ҡолғилде булған да инде. Ҡолғананың улы Ҡолғилде ятҡан айыу өңө тауы унын иҫтәлегенә Ҡолғилде тип йөрөтөлә.
Аҡбулат баш., фарс. — аҡ+бу-лат (ҡорос һымаҡ ныҡ булһын тип ҡушылған) Иҫке һәм Яңы Аҡбулат ауыл исемдәре.
Аҡбейек – Яңы Мөсәт, Әбделмәмбәт ауылдары янындағы тау исеме.
Арал – Тимер ауылы янындағы утрау.
Аралбай – ауыл, есаул Аралбай Мөхәмәтов тигән кеше исеменән, антропоним.
Бабсак баш. — Күсәкбей эпосында баба һүҙе менән яһалған герой исеме. Бабсаҡ ҡорғаны бар.
Үрек йылғаһы көнбайыштан-көнсығышҡа ҡарай аға. Ул Зәк-Ишмәт ауылы эргәһенән башлана ла Юшатыр йылғаһына барып ҡоя. Ғәлиәкбәр ауылынан төньяҡтан-көньяҡ аҡҡан Нөгөш ҡушылдығы.
Ә инде атаманың барлыҡҡа килеүе тураһында яҙыусы-ғалим Рәшит Шәкүр Башҡортостандың гидронимияһында киң таралған ата-бабаларыбыҙҙың боронғо төрки теленең Орхон-Йәнәсәй яҙмаларынан килгән «уғуҙ-һыу» тигән һүҙ икәнен асыҡлаған.
Әбделмәмбәт – ауыл, Әбделмәмбәт антропонимынан.

Әрәмә йорт - Ғәлиәкбәр ауылынан төньяҡлап 4-сы саҡрымындағы Нөгөш йылғаһының уң яғында утар булған урынды әрәмә ҡаплап торғанға атала.

Бикташ – утар, Бикташ антронимынан.

Волков – утар, урыҫ телендәге волк һүҙенән. Ойконим.

Ғәлиәкбәр соҡоро – Бәләкәй Нөгөш йылғаһы ҡабағы янындағы соҡор.

Егәйен – Оло Нөгөш йылғаһына Ғәлиәкбәр ауылының түбән янындағы һул ҡушылдығы.

Иҫке Ыҙма – элекке ыҙма, ауыл.

Оҙонуй – Ғәлиәкбәр ауылына түбән Оло Нөгөш йылғаһына яғына ҡарай уйпат (уйһыу) урын. Ороним.

Ҡабыҡкүпер – йүкә ағасынан һалынған күперҙе шулай атағандар.

Ҡаран – йылғы, Оло Нөгөш йылғаһы ҡушылдығы.

Ҡараһебә – элекке утар, Ҡараһебә гидронимынан.

Ҡалыу – Ғәлиәкбәр ауылы янындағы тау исеме.

Ҡолғана (Ҡалғаһау) – ауыл, Ҡалғаһау гидронимы һәм Ҡолғана антронимынан. Хәҙерге ваҡытта ауыл тарҡалған.

Ҡыҙылташ – тау, ҡыҙыл төҫ һүҙенән.

Ҡыҫкауй– Ғәлиәкбәр ауылына түбән Оло Нөгөш йылғаһына яғына ҡарай уйпат (уйһыу) урын. Ороним.

Ҡырғыҙ айыры – Ғәлиәкбәр ауылының көньяғындағы Егәйен йылғана Ҡырғыҙ айыры йылғыһы уң ҡушылдығы.

Ҡырғыҙ айыры – Ғәлиәкбәрҙен көньяғында 5-се саҡрымында урынлашҡан ҡорған. Баҫҡынсылар ҡарымтаға килеп, улар менән һуғышҡан тәбиғи урын.

Ҡомйылға – шишмә, Ағиҙелдең Янһары ауылы янындағы үҙ ҡушылдығы.

Кесе Нөгөш – йылға, Оло Нөгөш йылғаһының Ғәлиәкбәр ауылы янындағы һул ҡушылдығы.

Дөйә муйын - Ғәлиәкбәр ауылынан төньяҡ- көнсығыш яҡлап 5 саҡрымындағы атама. Йәнгәрәй тауының көньяғындағы ике түбәһе дөйәнең үркәсенә һәм муйынына оҡшап торған ер шулай атала.

Ямаш – Үрге Нөгөш ауылының ауылының рәсми булмаған исеме.

Үрек – Оло Нөгөш йылғаһының Кәшәлә ауылы янындағы уң ҡушылдығы.

Мөлөк –Үрге Нөгөш ауылынан төньяҡ - көнбайыш яҡлап 6 саҡрымындағы элекке утары, кеше исеме. Мөлөк антронимынан.

Моразым – Ғәлиәкбәр ауылынан көнсығышта, дүрт саҡрым, элекке утар, кеше исеме. Мораҙым антронимынан.

Уралтау – тау, Урал оронимынан һәм антронимынан.

Такыясусаккүл – Ғәлиәкбәр ауылына көнсығыш яҡлап Оло Нөгөш йылғаһынан ары тау янындағы күл.

Ташҡыраҙ – тау, ташлы ҡыр һүҙенән. Ғәлиәкбәрҙән көнсығыш – көньяғында оло юл уҙа.

Тимер – ауыл, Тимер антропонимынан**.**

Тирмән – Боһондо йылғаһын быуып бойҙай тартырға ҡулайлаштырған тирмән урыны.

Тәрән кисеү һаҙлығы – һаҙлыҡ, Оло Нөгөш йылғыһының уң яҡлап урынлашҡан туғай.

Түбәнге Нөгөш – ауыл, хәҙер ваҡытта ауыл бөткән.

Саңлы – кескәй йылға, Кесе Нөгөш йылғаһының һул ҡушылдығы.

Түбәләс – Үргә Нөгөш янындағы бейек булмағын ҡалҡыулыҡ, түбә.

Үшә – Үрге Нөгөш ауылының элекке утарҙары. Аръғы һәм бирге үшә. Һаҙлы тартымыраҡ оҙон үләнле уйһыу ерҙәге ялан.

Күҙәнбәт - кескәй йылға, Ағиҙел йылғаһының уң ҡушылдығы, гидроним һәм антронимдан.

Күжә – Оло Нөгөш йылғаһының һул ҡушылдығы, гидроним һәм антронимдан.

Кәбәнтау – Кәбәнгә оҡшап торған ҡая, Мәндәғол, Үрге Нөгөш ауылдары янында ялан, ҡая.

Кәбәнташ – Үрге Нөгөш ауылы яғындағы таш ҡая, кәбәнгә оҡшаш булғанлыҡтан килеп сыҡҡан һүҙ.

Күжәүник йылғаһы – Кесе Нөгөш йылғаһының уң ҡушылдығы, гидроним.

Кәлтәгәү – “кәлтә” ҡыҫка тигәнде аңлата. Аҡбейек аръяғындағы ялан, йылғаһы тура ғына аҡмай боролошло, бөгөмлө йылға.

Кәмбрәк – Оло Нөгөш йылғаһының уң ҡушылдығы, гидроним.

Кәмәтау – Бөрйән районының Ағиҙел йылғаһындағы тау, йылғаның боролошона ҡарап Кәмә-тау әйтелгән.

Күкйылға, күк йылға – Ғәлиәкбәр ауылы янында Оло Нөгөш йылғаһының һул ҡушылдығы, гидроним.

Кәшәлә – Кәшәнә һүҙенән, Кәшәлә ауылы янындағы Оло Нөгөш йылғаһының уң ҡушылдығы.

Кәрҙек – Кесе Нөгөш йылғаһының һул ҡушылдығы, гидроним.

Кәшкил – Кәшкил, “Ҡушкил” антронимдан.

Аллабирҙин Дамир Зиннәт улы

Топонимдар һүҙлеге

А

Абалай – Ғәлиәкбәр ауылында, йылға, Бикташ утарының көнсығыш яҡлап ялан исеме. Эт абалап өрөүенән аталған.
Абыҙгилде – Ғәлиәкбәр ауылында ҡая. Абыҙ (түрә) килде.
Ағиҙел – Бөрйән районы аша аҡҡан йылға.
Ағиҙел ҡасабаһы – Иҫке Собханғол ауылы эргәһендә, ойконим.
Аҙау – Яңы Монасип, антропонимдан, бесәнлек.
Айбикә тауы – Аҫҡар ауылында, антропонимдан, ороним.
Айғыр ҡороҡмаған – Байғаҙы ауылында, ялан.
Айыуала – Оло Нөгөш йылғаһы буйындағы ялан, йылға.
Айыуатҡан – Тимер ауылында, ялан, ҡая.
Айыусапҡан – Ҡолғана ауылына ҡарай, ялан.
Айыуҙы – Яңы Монасип, Ағиҙел йылғаһының уң ҡушылдығы, гидроним.
Айһылыу – Ғәлиәкбәр ауылында, сабынлыҡ.
Аҡбалсыҡ йылғаһы – Ғәлиәкбәр ауылында, йылға.
Аҡбейек – Бөрйән районында тау, ороним.
Аҡҡашҡа тауы – Ғәҙелгәрәй ауылында, ороним.
Аҡһыйыр яланы – Брәтәк ауылында, ялан.
Аҡбулат – Бөрйән районында ауыл, ойконим, антропонимдан, ҡушма һүҙ.
Аҡтау – Әтек ауылында, Тимер ауылында ороним, ҡушма һүҙ.
Аҡсабикә – Байғаҙы ауылы янындағы ялан.
Аҡташ – Яуымбай ауылында, ороним.
Алағуян – Бөрйән районында, гидроним.
Алағуян башы – Бөрйән районында, гидроним.
Алағуян тамағы – Ағиҙел йылғаһының уң ҡушылдығы.
Аллабирҙе – Аҫҡар ауылындағы ҡалҡыулыҡ.
Алпамыша ҡәберҙеге – Исламбай ауылы эргәһендәге Йәйпе яғындағы ҡәберлек.
Андыҙ яланы – Яңы Монасип
Арал – Тимер ауылы менән Иҫке Монасип ауылы араһындағы Ағиҙел йылғаһының икегә айырылып аҡҡан урыны.
Аралғыр – Яуымбай ауылында, ороним.
Аралбай (бөткән ауыл) – ойконим, антропонимдан.
Аралғыр – Яуымбай ауылында, гидроним, Ҡайнөй йылғаһы ҡушылдығы.
Арал тауы – Үрге Нөгөш (Ямаш) ауылының түбәнге кисеүенән аҫтараҡ ҡаршы тау.
Аратау – Ғәлиәкбәр ауылында, ороним.
Арҡыры йылға – Яуымбай ауылында, гидроним.
Арыҡтай – Ғәлиәкбәр ауылында, йылға, гидроним ялан.
Арыҫлан ҡарт соҡоро – Яңы Мөсәт ауылына ҡарай, антропонимдан.
Артыштытау – Үрге Нөгөш ауылы эргәһендә, ороним.
Аҫ(һ)ҡар – ойконим, антропонимдан.
Аҫҡараҡ – Ғәлиәкбәр ауылында, гидроним.
Аҫҡараҡ тамағы – Ғәлиәкбәр ауылында, йылға. Аҡһырғаҡ – үлән исеменән.
Атаман – Яңы Мөсәт, заводтың хужаһы Атаманов ерләнгән.
Атайсал – Ғәҙелгәрәй ауылы, ялан, тау исеме.
Аттылар һәм йәйәүҙеләр һуҡмағы – Ғәлиәкбәр ауылында, дромоним.
Атъятҡан – Иҫке Монасип ауылы янында, уя.
Афғанистан – Ғәлиәкбәр ауылында, тыҡрыҡҡа ҡушамат, ил исеменән.
Аштыҡ уяһы – Яңы Монасип, тары сәскән ер.
Аһылы (Асалы) – Ғәлиәкбәр ауылында йылға, гидроним, тау,

Б

Бабсаҡ ҡәберҙеге – Бөрйән районында ҡурған, антропонимдан.
Байғаҙы – ойконим, антропонимдан.
Байтулла – Байғаҙы ауылы янында, антропонимдан.

Баланйорт – Аралбай ауылы яғында, утар урыны.
Байғотоҡ – Әтек ауылы янында, гидроним.
Бажай – Аҫҡар ауылына ҡарай, ике бажа иҫтәлегенә аталған.
Баҙал (катай һуғышкан тау) – ороним.
Баҙ тауы – Кесе Нөгөш буйынан Исламбайға киткән яҡта дегет ҡайнатҡан урын, ороним.
Баҙ яҡкан соҡор – ҡара: Баҙ тауы.
Баҙъялан – Оло Нөгөш йылғаһы буйындағы яла. Яуымбай ауылы
Баҙраш – Үрге Нөгөш ауылынан аҫта, тау, йылға,
Баҡкол – атропропонимдан, Исламбай ауылы эргәһендә йылға, ялан.
Байҡаш – ойконим, Нәби ауылының бер өлөшө.
Баймырҙа – Оло Нөгөш йылғаһы буйындағы ялан, антропонимдан.
Байназар – ойконим, антропонимдан.
Балаган – Тимер ауылында.
Барлыбай – Үрге Нөгөш ауылы янында, ороним.
Ба(о)тинкаташ – Ғәлиәкбәр ауылында, йылға эсендәге ҙур таш.
Батша ҡотоғо – Ғәлиәкбәр ауылында, йылға.
Башҡорт утары – Ғәлиәкбәр ауылында, ялан.
Башмаҡшыуған – Үрге Нөгөш ауылында, ороним.
Бейгилде – Бейгилде яланы элекке “Ҡыҙыл таң” колхозының ҡымыҙ фермаһы янында.
Бейеккүпер – Аралбай ауылы эргәһендә.
Бесәй ташы – Янһары ауылында, ороним.
Бесәй ояһы – Нәби ауылында тау битләүе.
Беренсе күпер – Иҫке Собханғолда.
Бәргәзә – Ғәлиәкбәр ауылында, аҡлан.
Бәләтар тауы – Аралбай (бөткән ауыл) эргәһендәге тау, ороним, бәләгә тарыным һүҙенән.
Болаҡ – Яңы Монасип ауылы янында, гидроним, болаҡ бәләкәй йылғаны аңлата.
Берлек – Яңы Мөсәт ауылы икенсе исеме, артель ваҡытында бирелгән рәсми булмаған атамаһы.
Бертеш – Килдеғол ауылында, ороним.
Бешәлетау – Әтек ауылында, йәш ҡарағайлыҡ урманы.
Бетерә – Үҙән йылғаһының һул ҡушылдығы, гидроним.
Бикташ – Ғәлиәкбәр, Исламбай ауылдары араһындағы йылға, бөткән ауыл, элекке исеме – Шәйек (гидроним) тамағы, антропоним.
Билтер тауы – Нәби ауылында, ороним, билтер аяҡтың бер өлөшө.
Бирелейорт – Килдеғол ауылы эргәһендә, ялан, Муйылтүбәнән бейек булмаған ҡалҡыулыҡ аша ята.
Боғасы (Бүгәсәү) – Ырғыҙлы ауылында, ороним, антропонимдан, Пугачев һүҙе фонетик яҡтан үҙгәргән.
Болаҡ – шишмә һүҙенән, гидроним
Борсакһуккан – Әтек ауылы янында, ялан.
Боһондо – Тимер ауылында йылға, гидроним, Ағиҙелдең уң ҡушылдығы.
Бохмаш – Иҫке Монасип ауылы янында, Ағиҙел йылғаһы буйындағы ялан, йыуаш, әҙ һөйләп, боҫоңҡорап йәшәгән кешеләр ҡушаматынан.
Бөрйән – район исеме, этнонимдан.
Бөрйән йылғаһы – Тимер ауылы янындағы Боһондо йылғаһының уң ҡушылдығы.
Бөрйән юлы – Ғәлиәкбәр ауылында, дромоним, ҡушма һүҙ.
Бурама тауы – Яуымбай ауылында, ороним, ҡушма һүҙ.
Бурташ – Яуымбай ауылында, ороним, ҡушма һүҙ.
Бүтәү тауы – Ҡотан ауылы янында, ороним, Пугачев тауы тип тә йөрөтөлгән.
Бүләкбикә таш йәки Бүләкбикә ҡаяһы – Яңы Монасип ауылында, ороним, антропонимдан.
Бүләкташ – Нәби ауылында, ороним.
Бүре төбө – Тимер ауылы янында, урманлыҡ.
Бүрәнәшыуған – Үрге Нөгөш ауылында, ороним.

Бүтәгәле – Ғәлиәкбәр ауылы янында тау һырты, үлән исеменән (русса мятлик).
Брәтәк – Брәтәк ауылында, ойконим, гидроним, бер итәк һүҙенән.
Быҙау үлгән – Аралбай ауылы эргәһендә “Ҡыҙыл таң” колхозының быҙауы үлеменә бәйле.
Бәштин – Брәтәк ауылында, ойконим, биш тин һүҙенән.
Бәгиҙә тауы (Ҡаршытау) –Байғаҙы ауылында, ороним.
Бәйет тауы – Әтек ауылына ҡарай, ороним.
Бәләтар – Яңы Мөсәт ауылына ҡарай, дромоним, бәләгә тарыным һүҙенә бәйле.
Бәләкәй – Үрге Нөгөш эргәһендәге тау, ороним.
Бәләкәй Аҡбейек – Яуымбай ауылында, ороним.
Бәләкәй Ҡыҙылташ – Яуымбай ауылында, ороним.
Бәләкәй Ҡыпсаҡ – ойконим, рәсми атамаһы Кардон, Капаловтың утары булған.
Бәләкәй Салажы – Әтек ауылы эргәһендә, гидроним, ялан.
Бәләкәй Соңғор – Нәби ауылынан көнбайышта урынлашҡан.
Бәләкәй Шәйек – Исламбай ауылында, гидроним, ҡушма һүҙ.
Бәлә тауы – Брәтәк ауылына ҡарай, ороним.
В
Ветерандар аллеяһы – Ғәлиәкбәр ауылында, дримоним.
Волков йәйләүе – Брәтәк ауылында.
Вышка – Тимер ауылының үр яғындағы Осло тау һыртындағы электр ҡоролма.
Вика – Вика Мәндәғол ауылында ялан, тәүге атамаһы – Ульяғол сабынлығы, тора-бара атамаһы үҙгәргән.
Ғ
Ғилман күпере – Яңы Монасип ауылында, ҡушма һүҙ, антропонимдан.
Ғаффар утары – Байғаҙы ауылы янында, антропонимдан.
Ғүмәр ыҙмаһы – Ғәлиәкбәр ауылында, ялан, антропонимдан.
Ғәббәс утары – Байғаҙы ауылы янында, антропонимдан.
Ғәбит уяһы – Ғәлиәкбәр ауылында, ҡушма һүҙ, антропонимдан.
Ғәзиз тауы – Үрге Нөгөш ауылында, ороним, антропонимдан.
Ғәҙелгәрәй – ойконим, антропонимдан, икенсе исеме Шүлгән.
Ғәйниә ҡотого – Ғәлиәкбәр ауылында, гидроним, антропонимдан.
Ғәле тауы –Янһары ауылына ҡарай, ороним, антропонимдан.
Ғәлиәкбәр – ойконим, антропонимдан.
Ғәлиәкбәр соҡоро – Ғәлиәкбәр ауылында, антропонимдан.
Ғәлийән үҙәге – Аралбай ауылы эргәһендә, антропонимдан.
Д
Дегет тауы – Яңы Монасип ауылы эргәһендә, ороним.
Дегәнәк – Яуымбай ауылында, ороним, үсемлек исеменән.
Дәүләтбай туғайы – Байғаҙы ауылы янында, антропонимдан.
Динислам тауы – Үрге Нөгөш ауылында, ороним, антропонимдан.
Е
Егәйен – Ғәлиәкбәр ауылында, гидроним, Нөгөш йылғаһының уң ҡушылдығы.
Елдәрҡа – Нәби ауылында ялан, елле һәм арҡа һүҙҙәренән яһалған, елле, ҙур, бейек тау башында.
Еләктетүбә – Нәби ауылында, ороним.
Етмәҫ – Ғәлиәкбәр һәм Исламбай ауылы араһында, ялан, ҡылымдан яһалған.
З
Завод – Яңы Мөсәт ауылы спирт, скипидар, дегет ҡайнатыу өсөн завод.
Зөбәйҙә карандаһы – Янһары ауылында, гидроним, антропонимдан, бәләкәй шишмә.
Зыя баҙы – антропонимдан, Нөгөш буйындағы ялан.
Зыярат тауы – Ғәлиәкбәр ауылында, ороним.
Зәкир солого – Тимер ауылында, антропонимдан.
Зәмзәбикә шишмәһе – Яңы Мөсәт ауылында, гидроним, антропонимдан.
И
Иҙәнташ – Ғәлиәкбәр ауылында, йылға эсендәге таш.

Имес төбө – Нәби ауылында.
Имес туғайы – Нәби ауылынан ХХ быуат башында Имес туғайында Ҡурғашлы ауылы барлыҡҡа килгән.
Имәнйорт – Ғәлиәкбәр ауылында, йылға.
Инсебикә – Яңы Собханғол ауылында, ороним, антропонимдан.
Исмәгил – Үҙән йылғаһы буйындағы ялан, антропонимдан.
Исламбай – ойконим, антропонимдан.
Иштәүләт (Ябаҡ) – ойконим, антропонимдан.
Ишбулды баҙы – Яңы Монасип ауылына ҡарай, антропонимдан.
Иҫке Монасип – ойконим, антропонимдан.
Иҫке Мөсәт – ойконим, антропонимдан.
Иҫке Собханғол – ойконим, антропонимдан.
Иҫке Тарыуал (бөткән ауыл) – ойконим, антропонимдан.
Иҫкеҙма – Ғәлиәкбәр ауылында, ауылдың тәүге урыны.
Иҫәнбикә һаҙы – Исламбай ауылына ҡарай, антропонимдан.
Иҫәнғазы (Күскәрбәк) – ойконим (бөткән ауыл), антропонимдан.

Й

Йосоп түше – Байназар ауылында, антропонимдан.
Йыландуй – Яңы Монасип ауылы янында, йылан күп булған уйһыу ер.
Йылҡысыҡҡан – гидроним, Ғәҙелгәрәй ауылы эргәһендәге күл.
Йүкәле туғай – Тимер ауылы эргәһендә, ялан.
Йәйпе – Исламбай ауылында, ялан, йылға, ҡылымдан яһалған.
Йәйпегир – Яуымбай ауылында, ороним.
Йәмилә сабыны – Яңы Монасип ауылына ҡарай, антропонимдан.
Йәнсалай ҡотоғо – Тимер ауылында, антропонимдан.
Йәнгәрәй – Ғәлиәкбәр ауылында, ороним, антропонимдан.
Йәнһыуалған – Әтек ауылына ҡарай, ялан.
Йәнһөйәр – Ғәлиәкбәр ауылында, ялан.
Йәүгәҙе – гидроним, Нәби ауылының һул яғында, Байҡашта, Яуғаҙы һүҙе фонетик яҡтан үҙгәргән.

К

Кардон туғайы – Ғәлиәкбәр ауылында, йылға, ҡылымдан яһалған.
Капал өйө – Кардон ауылындағы Капаловтың йорто урыны.
Кейәүҙәр үҙәге – Яңы Монасип ауылында.
Кейекбай – ойконим, антропонимдан.
Кедр урманы – Килдеғол ауылы эргәһендәге урманлыҡ.
Кесе Нөгөш – Бөрйән районында, йылға.
Кесе Нөгөш тамағы – Ғәлиәкбәр ауылында.
Кепес – ойконим, Иҫке Монасип ауылының бер өлөшө, күҙ ҡабағы тигәндән алынған.
Килдеғол (Һарағы)– ойконим, антропонимдан.
Клатуй – Нәби ауылында, антропонимдан, Филатов йәки Клатуй тауы.
Киндерҙ(е)уй – Иҫке Монасип ауылында.
Кинйәбикә – Ғәлиәкбәр ауылы эргәһендә, сабынлыҡ.
Кинйәш тауы – Аҫҡар ауылындағы тау, ороним, антропонимдан, Кинйәш әбей иҫтәлегенә.
Күгат ташы – Ғәлиәкбәр ауылы эргәһендә, ҡая.
Күгәүедле яланы, йылғаһы – Исламбай ауылына ҡарай, гидроним.
Күкәй тауы – Брәтәк ауылында, ороним.
Күсоя – Ғәлиәкбәр ауылында, ороним.
Күкбесән – Тимер ауылы эргәһендә, ялан
Күл тамағы – Ғәлиәкбәр ауылында, гидроним.
Күркәтау – Әтек ауылына ҡарай, ойконим.
Күтәрмәле яланы – Исламбай эргәһендәге тау башындағы ялан.
Күперҙе йылғаһы – Нәби ауылында, гидроним.
Күскәрбәк – Иҫәнғаҙы һүҙен ҡара, антропонимдан.

Күктәкә – Нәби ауылында, ороним.
Күкьятыу – 1. Ғәлиәкбәр ауылынан өҫтә, гидроним.
2. Брәтәк ауылы эргәһендә Брәтәк йылғаһының Оло Нөгөшкә ҡойған ере.
Күс юлы – Яңы Монасип ауылы янында, дромоним, күсеү һүҙенән.
Костёр тауы – Тимер ауылы эргәһендә, Аҡтауҙың сусағы, байрам көндәре костёр яғалар, ороним.
Көҙгөйорт – Бикташ ауылы эргәһендәге боронғо йәйләү, ялан.
Көлгөҙәр – Бикташ ауылының көнъяғында тау, ороним.
Көләбә – ялан, йәйләү исеме, Бикташ ауылына ҡарай.
Көләмбәт юлы – Бикташ ауылы эргәһендәге юл, дромоним, антропоним-дан.
Көнтеймәҫ – Яуымбай ауылында, ороним.
Көтөүсе яланы – Тимер ауылында, ҡылымдан яһалған.
Көрәй тауы – Ҡотан ауылында, ороним.
Көрәште – Килдеғолда, ороним.
Көртмәле тауы – Байназар ауылында тау, ороним.
Кәбәнғарағай – Ғәлиәкбәр ауылында, аҡлан.
Кәбәнташ – Ағиҙел йылғаһы ҙур таш, ороним,
Кәзәтау – Ғәлиәкбәр ауылында, ороним.
Кәзә ташы – Ғәлиәкбәр ауылында, ороним.
Кәлтәгәү – ялан, гидронимдан.
Кәмә сығышы – Тимер ауылы эргәһендә, гидроним
Кәмәше – Тимер ауылы эргәһендә, кәмә сығышынан ҡыҫҡартылған.
Кәртәле – Күжә йылғаһы буйында ялан, йылға.
Кәртәле ялан – Күжә йылғаһы буйында ялан.
Кәртәташ – Ғәлиәкбәр Ҡолғана (Ҡалғаһау) ауылына барған юл, кәртә һымаҡ тау һыртынан һуҙылған ҡая, ороним.
Ҡ
Ҡаҙна уяһы – Яңы Монасип ауылына ҡарай.
Ҡайраҡлы – Күжә йылғаһы буйында ялан, йылға.
Ҡайынсуҡы –Бикташ ауылының көнъяғында ороним.
Ҡаҡсыр – Яңы Монасип ауылында, ороним,
Ҡайынтуғай – Нәби ауылының һул яғында, Байҡашта.
Ҡалыу – Ғәлиәкбәр ауылында, ороним, ҡылымдан яһалған.
Ҡарабейә – Яңы Собханғол ауылында, ялан.
Ҡарағайсабын – Ғәлиәкбәр, Яңы Монасип ауылдарында.
Ҡаран – гидроним, Ғәлиәкбәр ауылына ҡарай.
Ҡарас йылғаһы – Яңы Мөсәт ауылына ҡарай, гидроним, антропонимдан,
Ҡарасәс исемле ҡатын исеменән.
Ҡарабешә – Ғәлиәкбәр ауылында, ялан.
Ҡарағошто – йылға, ялан, Бөрйән – Исламбай юлы ҡап уртаһында урындашған.
Ҡарағол – Тимер ауылы эргәһендә, ялан, ҡая, антропонимдан.
Ҡаратау – Тимер ауылында, ороним.
Ҡараңғуй – Килдеғол ауылынан Һарағы йылғаһы буйындағы ялан, Үргеҙма
тип тә йөрөтөлә.
Ҡараһыйыр – Тимер ауылына ҡарай, ороним
Ҡараһөбә – Исламбай ауылы эргәһендә, гидроним.
Ҡарасура ҡәбере – Яуымбай ауылы эргәһендә, антропонимдан, Бабай үлеге тип тә йөрөтөлә.
Ҡартөй – Яуымбай ауылында.
Ҡаршытау – Яуымбай, Үрге Нөгөш, Байғаҙы ауылында, ороним.
Ҡаршы туғай – Янһары ауылында.
Ҡасыу юлы (Ҡасыюл) – Тимер ауылында, ороним, дромоним.
Ҡатайғошҡан (Ҡатай һуғышҡан) – Яңы Мөсәт ауылына ҡарай, ороним, этнонимдан.
Ҡалыу, Ҡалыу ташы – Ғәлиәкбәр ауылы эргәһендә, тау һырты, таш.
Ҡалмаҡай – Тимер ауылында, ороним, ялан, этнонимдан.

Ҡана – Ағиҙел йылғаһының һул ҡушылдығы, гидроним.
Ҡалҡаман – Тимер ауылында, ороним, антропонимдан.
Ҡалғаһау – Ғәлиәкбәр ауылында, йылға, ялан, ҡылымдан (ҡалған һау).
Ҡамышаҡ – Яуымбай, Иҫке Монасип ауылдарында, гидроним.
Ҡарағасйорт – Ғәлиәкбәр ауылы янында, ялан, йылға.
Ҡарайғыр – Яуымбай ауылында, ялан.
Ҡаран – Ғәлиәкбәр ауылына ҡарай, гидроним,
Ҡаныш – Үрге Нөгөш ауылы эргәһендә, гидроним, антропонимдан.
Ҡанышай – Үрге Нөгөш ауылы эргәһендә, гидроним, антропонимдан.
Ҡандыбил – Байғаҙы ауылына ҡарай, гидроним, йәйләү.
Ҡаншал – Килдеғол ауылында, ҡан төҫөндәге тау, ороним.
Ҡоҙаш – Яуымбай ауылында, антропонимдан.
Ҡоҙғонташ – Яңы Монасип ауылында, ороним, ҡоҙғон ояһы бар.
Ҡабырсаҡты морон – Яңы Монасип ауылында, ҡабырсаҡ йыйылып ятҡан ҡомлоҡ бар.
Ҡоҙғон ҡаяһы – Яңы Монасип ауылында, ороним.
Ҡойонсоҡ шишмәһе – Яңы Собханғол ауылы эргәһендә, ҡойо – бысраҡ тигән һүҙ.
Ҡортсолоҡ – Тимер ауылында, аҡлан.
Ҡолғана – ойконим.
Ҡолош үҙәге – Яуымбай ауылында, антропонимдан.
Ҡоръятмаҫ – Яңы Монасип ауылы, гидроним, ҡоро ятмаҫ һүҙбәйләнешенән.
Ҡомйылға – Яңы Собханғол ауылында, гидроним.
Ҡотан – ойконим.
Ҡотоҡай баҙы – Брәтәк ауылында, гидроним, антропонимдан.
Ҡотто Булат түше – Яңы Собханғол ауылындағы тауҙа, антропонимдан.
Ҡужан шишмәһе – Нәби ауылында, гидроним.
Ҡунаҡбай ҡотоғо – Яңы Монасип ауылына ҡарай, гидроним, антропонимдан.
Ҡумырт кисеү – Исламбай ауылына ҡарай.
Ҡукрауыҡ – Ғәлиәкбәр ауылында, гидроним, Нөгөш йылғаһының уң ҡушылдығы.
Ҡурғашлы – ойконим, гидронимдан.
Ҡурыуҙы – Байназар ауылында, ороним.
Ҡурпытуғай – Әтек ауылына ҡарай, ялан.
Ҡусҡарбаҡ – Иҫәнғаҙы (бөткән) ауылының икенсе атамаһы, ойконим, антропонимдан.
Ҡушйылға – гидроним, Ғәҙелгәрәй ауылы янында, Оло Нөгөш йылғаһының һул ҡушылдығы.
Ҡуян ауылы – ойконим, ҡушамат тағыуҙан Нәби ауылының халыҡ телендәге атамаһы.
Ҡыҙҙарҙы айыу ашаған ер – Яңы Монасип ауылына ҡарай.
Ҡыҙҙар тауы – Яңы Мөсәт ауылына ҡарай, ороним.
Ҡыҙбикә мороно – Байғаҙы ауылы янындағы тауҙа.
Ҡыҙылташ – Ғәлиәкбәр ауылында, ялан.
Ҡыҙүлгән – Ғәлиәкбәр ауылы янында, ялан, ҡылымдан яһалған.
Ҡыҙматаш – Ғәлиәкбәр ауылында, йылға эсендәге таш.
Ҡыҙыл ер – Яңы Мөсәт ауылына ҡарай, Бөрйән ырыуы Ҡыпсаҡ ырыуы менән һуғышҡан ер ҡан-ҡойоштан һуң ер ҡанға ҡыҙыл төҫтә ҡала, ялан.
Ҡыҙылъяр – Яңы Монасип ауылы янында, балсығы ҡыҙыл булып, ямғыр яуғанда Иҙелгә йыуылып төшә.
Ҡыҙылташ – Яуымбай ауылына ҡарай, ороним.
Ҡыуғарағай – Ғәлиәкбәр ауылында, ялан.
Ҡырғыҙ айыры – Ғәлиәкбәр ауылында, йылға, этнонимдан.
Ҡырташ – Байназар ауылына ҡарай, ороним.
Ҡырын ер – Нәби ауылына ҡарай, дромоним.
Ҡыҫҡуй – Ғәлиәкбәр ауылында.
Ҡыпсаҡ – рәсми телдәге Әбделмәмбәт ауылының халыҡ телендәге исеме, этнонимдан.
Ҡыҫыҡ – ойконим, гидронимдан, Кесе Нөгөш буйындағы бөткән ауыл.
Ҡыярат тауы – Тимер ауылында, ороним, ҡылымдан (ҡыйратыу).
Ҡыяюл – Тимер ауылына ҡарай, дромоним.

Л
Лапшин утары – Брәтәк ауылына ҡарай, йәйләү, антропонимдан, Нөгөш-йорт атамаһы менән дә йөрөтөлә.
М
Маҙалы **–** Аҫҡар ауылы янында тау һырты, ороним, маҙа, ыҙа һүҙенән алынған.
Майғойған – Яуымбай ауылында, ороним, ҡушма һүҙ.
Майсергән **–** Тимер, Яңы Мөсәт ауылдарына ҡарай, ялан.
Масаҡ **–** Иҫке Монасип ауылында, ороним, башаҡ – диалектта масаҡ.
Маяҡ **–** Ғәлиәкбәр ауылына ҡарай, Ҡалыу тауы башында булған.
Маяҡ түбәһе – Килдеғол ауылына ҡарай.
Мерәҫ киткән юл **–** Әтек ауылына ҡарай, дромоним, ялан, антропонимдан**.**
Мораҙым **–** ойконим, антропонимдан, икенсе исеме Аратау.
Мортаҙа яланы **–** Янһары ауылына ҡарай, антропонимдан, ялан.
Монасип **–** ойконим, антропонимдан.
Мишәр (Яңы Монасип ауылының икенсе атамаһы) – ойконим, этнонимдан.
Муйыдлы төбәк (Муйылтүбә) – Килдеғол ауылына ҡарай, ялан.
Муйылды туғай –Үрге Нөгөш ауылына ҡарай, Оло Нөгөш буйында.
Муйылтөп **–** Ғәлиәкбәр ауылы янында, ялан.
Муллатуғай **–** Ғәлиәкбәр ауылында, антропонимдан.
Мусағәле **–** Әтек ауылына ҡарай, гидроним, антропонимдан.
Мулла түше **–** Нәби ауылына ҡарай, йәйләү, антропонимдан.
Мөзәй **–** Ғәлиәкбәр ауылы эргәһендә, ҡабаҡ, йылға.
Мөсәт **–** ойконим, антропонимдан.
Мәйгәште **–** Иҫке Монасип ауылы янында, гидроним, ороним, мағаш – бейек тау.
Мәксүт **–** ойконим, антропонимдан.
Мәндәғол **–** ойконим, антропонимдан, ғул – уйһыулыҡтағы үҙән.
Мәрйәкәй **–** Яңы Монасип ауылына ҡарай, ялан.
Мәрхәм күле **–** Әтек ауылына ҡарай, гидроним, антропонимдан**.**
Мәсем **-** ороним, антропонимдан.
Мәсет тауы **–** Ғәлиәкбәр ауылында, ороним.
Мәсет уяһы **–** Ғәлиәкбәр ауылында, ороним.
Мәтәл **–** Килдеғол ауылына ҡарай, гидроним, мәте һүҙенән.
Мәһәҙи **–** ойконим, антропонимдан.
Н
Ноҡот тауы **–** Әтек ауылына ҡарай, ороним.
Ниғмәт ташы **–** Ғәлиәкбәр ауылынан Нөгөш йылғаһы буйлап өҫтә.
Нөгөш **–** Бөрйән районында йылға, Ағиҙел йылғаһының уң ҡушылдығы.
Нөгөшйорт **–** Брәтәк ауылына ҡарай, йәйләү, Лапшин утары тип тә атала**.**
Нәби **–** ойконим, антропонимдан**.**
О
Оҙонуй **–** Ғәлиәкбәр ауылында, уя.
Оҙонсал **–** Килдеғол ауылына етәрәк ялан.
Оҙон ялан **–** Кесе Нөгөш буйындағы ҙур ялан**.**
Ологор **–** Яуымбай ауылында, ороним.
Ологыҙылташ **–** Яуымбай ауылында, ороним.
Олотау **–** Яуымбай ауылында, ороним, оло һәм тау һүҙҙәренән яһалған.
Ослотау **–** Иҫке Монасип ауылы янында, Тимер ауылының үр яҡлап Ағиҙел аръяғындағы осло тау ороним.
Ослоташ **–** Ғәлиәкбәр ауылы эргәһендә, йылға эсендәге ҙур таш.
Оло күл **–** гидроним, Ғәҙелгәрәй ауылында.
Оло Нөгөш **–** Ғәлиәкбәр ауылынан аға, гидроним, антропонимдан.
Оло Салажы **–** Әтек ауылы эргәһендә, гидроним, ялан**.**
Оло Соңғор **–** Нәби ауылына ҡарай, ауылдан көнбайышта урынлашҡан.
Был урын соҡорло.

Оҫҡон туғай **–** Тимер ауылының эргәһендә, үлән исеменән, ҡушма һүҙ.
Оһҡондоғор **–** Үрге Нөгөш ауылы менән Кәшәле ауылы араһында Кәрлек һәм Арғы Үшә йылғалары уртаһында оһҡондо түбә.

Ө

Өлкән Аҡбейек – Яуымбай ауылында, ороним.
Өйрәкте – Мәндәғол ауылы етәрәк, Ағиҙел йылғаһы буйындағы ҡая.
Өйрәкташ –Үрге Нөгөш ауылы янында, Нөгөш йылғаһы буйында ҡая, ороним.
Өйрөлтмәк – Иҫке Собханғол ауылы эргәһендә, Ағиҙел йылғаһы эсендә.
Өкө ҡаяһы – Яуымбай ауылында, ороним.
Өкө ояһы – Яуымбай ауылында, ороним.
Өкөташ – Яуымбай ауылында ороним.
Өсуй – Яңы Собханғол ауылына ҡарай.
Өстамаҡ – Брәтәк ауылына ҡарай, гидроним.
Өмөкамал төбәге – Килдеғол ауылына ҡарай, ялан, антропонимдан.
Өмөткән – Яуымбай ауылында, ороним, өмә иткән һүҙенән.
Өмөткән яланы – Яуымбай ауылы, өмә иткән һүҙҙәренән.
Өс туған ҡаяһы – Ағиҙел йылғаһы буйында, ороним.
Өсөйлө – Ғәлиәкбәр ауылының бер өлөшө [1]

Э

Эйәрташ - Ғәлиәкбәр ауылында, Суҡмуйыл янында һыу инеү урыны, Нөгөш йылғаһындағы таш, ороним.

Мөхәмәтов Әбделвәхит Ғибат улы

Солоҡ

Аҫҡар ауыл биләмәһенә ҡараған ер-һыу атамалары

Аҫҡар ауылы

Бөрйән районының Аҫҡар биләмәһе Иҫке Собханғол ауылынан төьяҡ-көнбайыш йүнәлешентә илле саҡрым самаһы алыҫлыҡта, Бөрйән менән Белорет районы сигендә урынлашҡан. Ауыл Юрматау менән Бажай тауҙарына һыйынып, Кесе Нөгөш йылғаһының үрге ағымында Нөгөшкә Оҙон ялан йылғаһы ҡушылған ерҙә ултыра. Ҡасандыр хәҙерге ауыл ултырған урынға мал көтөү өсөн Аҫҡар ҡарт килеп ултырған булған (уның ҡайҙан килеүе билдәһеҙ).

Уның улдарының исеме билдәле: Арҫланғол (1743—1828), уның балалары Ишбай (уның улы Яҡшығол), Аралбай, Узбәкбай, Теүәлбай. Икенсе улы Таңатар Аҫҡаров, 1761 г., старшинаның ярҙамсыһы булып хеҙмәт иткән, уның улдары Дәүләткилде, Күсәй, Ырыҫбай, Игебай. Улар ошонда уҡ өй һалып донъя көтә башлағандар һәм уларҙан Аҫҡар ауылы йәйелеп киткән. Ошо уҡ ауылда тағы бер Аҫҡар йәшәгән - Аҫҡар Көлсөков (улы Мөхәмәтйәр). Тик ул сағыштырмаса йәш булып, Аҫҡар ауылына нигеҙ һалыусы була алмай, сөнки Арҫланғол менән Таңатар Аҫҡаровтарҙан күпкә кесе була.

Бөрйән районының Аҫҡар ауылы менән Әбйәлил районының Аҫҡар ауылдарының алыҫ булһа ла ҡан-кәрҙәшлектәре бар. Ике ауылда ла "Түмәй" һәм "Аптыраҡ" араларының булыуы быны тағы бер тапҡыр иҫбатлай. Икеһенең дә тамғаһы – ай, ағасы – ерек, ҡошо – һайыҫҡан.

1816 йылда Аҫҡарҙа 20 өй, 1859 йылда - 58, 1920 йылда иһә - 93 өй иҫәпләнә. Йәшәгән кешеләре йылына ҡарап; 140, 302 һәм 479.

Бөтә 53 ғаилә лә XIX быуаттың 40-сы йылдарында йәйләүгә сығып булғандар. Уларҙың 147 йылҡы малы, 119 һыйыры, 45 һарығы и 15 кәзәһе була. Ҡортсолоҡ (9 умарта) һәм солоҡсолоҡ (4 солоҡ) менән дә булышалар.

1812 йылғы Бөйөк Ватан һуғышында Аҫҡарҙан Алиғол Юлдашев, Итбай Йылыҡбаев, Илсеғол Юлдашбаев, Нәҙерғол Зиянбирҙин ҡатнашып хәрби миҙалдарға лайыҡ булалар.

Ауылдың иң ҙур, гөрләп торған ваҡыты 1910 - 1913 йылдарға тура килеп, ауыл 60-лап хужалыҡтан торған. Ул заманда ауылда Әптелғәле Шахморатов тигән бай йәшәгән. Уның 40-50-ләп йылҡыһы, 15-20-ләп һыйыр малы һәм 100-150 баш кәзә-һарыҡтары булған. Байҙар бесән эшләтеү өсөн 5-6 малай тотор булғандар. Ауыл халҡы ҡыш көнө ағас ҡырҡҡан, йәйен дегет эшләгән һәм кустарсылыҡ эштәре менән шөғөлләнгән.

Ауыл ҡаршыһындағы бәләкәй ҡалҡыулыҡты ***Аллабирҙе*** тип йөрөтәләр. Аллабирҙе заманында данлыҡлы ҡурайсы булған. Ошо ҡалҡыулыҡҡа уның өйө, хужалығы булған. Кистәрен өйөндә ҡурай уйнаған, ҡурай моңо асыҡ тәҙрәнән бөтә ауылға ишетелеп торған.

Ҡарттар Аллабирҙе ҡурайсының оҙаҡ йәшәүен бәйән итәләр. Унның үлемен башҡорт халҡының "кәкүк ауылға, кеше ҡаралтыһына яҡын килһә – насарға" тигән юрауға бәйләп һөйләйҙәр. Көндәгесә Аллабирҙе ҡурайсы өйө эргәһендә ҡурай уйнап ултырғанда, өй янындағы ҡайынға кәкүк килеп ултырып саҡыра башлай. Аллабирҙе кәкүкте ҡурҡытып осороп ебәреү

өсөн таш һелтәп ебәрә, әммә таш ҡошҡа барып тейә һәм уның үле кәүҙәһе ҡурайсының алдына килеп төшә. Аллабирҙе: “Ай, харап иттем, былай булғас, мин дә оҙаҡ йәшәмәм инде”,- тип хафалана һәм ысынлап та, ошо уҡ йылдың көҙөндә ауырып вафат була.

Ауыл ҡаршыһындағы икенсе ҡалҡыулыҡты ***“Кинйәш”*** тауы тип атайҙар. Был тау башында Кинйәш әбейҙең аласығы булған, ул шунда ғүмер иткән.

Ауылда Ишбирҙе исемле 80 йәшлек ҡурайсы ҡарт йәшәгән (1910-1912 йылдарҙа). Ҡарт һәр кемдең һорауын ҡәнәғәтләндереп ҡурай уйнаған. Уның елкәһендә баш ҙурлыҡ ороһо булып, уны айырым шәл менән урап йөрөткән. Әүжәндән килгән урыҫтар уны өгөтләп дауаханаға ебәрәләр. Үрге Әүжән дауаханаһында уның ороһон ҡырҡалар, һуңынан уны үлсәп ҡараһалар - ул биш ҡаҙаҡ (2 кг) тартҡан була. Дауаханала ятҡан ваҡытында Ишбирҙе ҡарттың ҡурай уйнауын табиптар ҙа һоҡланып тыңлағандар һәм уға Мәскәүҙән ҡыҫҡа ғына ағас ҡурай алдыртып бүләк иткәндәр.

Ауылдың бәләкәйләнеүенә һәм халыҡтың кәмеүенә 1918-1919 йылдағы көслө тиф ауырыуы, һуғыш һәм 1921 йылғы йотлоҡ сәбәпсе булған.

1918 йылғы тиф ауырыуы ваҡытында кешеләр күпләп ҡырылған. Йүнле медицина ярҙамы ла булмаған. 1921 йылғы аслыҡ ауылдың көнкүрешен бик ныҡ ауырлаштырған. Урман үҙенең кейеге, эттек, һарынаһы, емеш-еләге менән күптәрҙе үлем тырнағына бирмәй. Шулай ҙа ғаиләһе менән ҡырылғандар була. Йотлоҡ йылында кеше ашаусылар ҙа осраған. Аҫҡарҙа былдай хәлдәр булмаған.

Ҡайһы бер һуғыштар ауыл тирәһендә лә булып үткән. Әле аҡтар, әле ҡыҙылдар килеп ауылды алғандар, власть тиҙ генә алмашынып торған. Ауылды халыҡты талап көн күргән бандиттар ҙа килеп баҫҡандар. Улар ауыл кешеләренең малдарын, ҡаралдыларын тартып алып киткәндәр. Бер нисә кеше бандиттар ҡулынан үлтерелгәс, ауыл кешеләре икенсе яҡтарға ҡасырға мәжбүр булған. Ҡайһылары “Шәйек йортҡа” (йәйләүгә), ҡайһы берҙәре Өмөтбай яғына, өсөнсөләре ялан яҡтарына сығып киткәндәр.

1918-1920 йылдарҙа ауылда уезнай мулла булып сығышы менән Әрмет ауылы кешеһе Абдулла тигән мулла йәшәгән. Ул заманында батша армияһында хеҙмәт иткән һәм унтер офицер дәрәжәһендә булған. Мулланың бик башлы, иҫәп-хисапҡа оҫта икәнен белеп ҡалған ҡыҙылдар: “Беҙгә лә белемле кеше кәрәк”,- тип уны үҙҙәре менән алып киткәндәр. Һуңынан уны Әүжән яғында атып үлтергәндәр тигән фараз йөрөй, сөнки ул кире ауылға әйләнеп ҡайтмай.

1922 йылға тиклем Шахморат бай Ҡурғашлы тигән ергә мал көтөү өсөн яҡшы урын эҙләп барған. Уның менән бергә ауылдаштары ла күсеп барып ултырғандар. Бөтәһе 10 хужалыҡ ауыл булып ултырған.

Хәҙерге ***“Ҡурғашлы” яланы*** ла бынан 35 йыл тирәһе элек 25-ләгән хужалыҡтан торған булған, тик һуңынан бындағы кешеләр ҙә Брәтәккә һәм Аҫҡарға күсенеп китеп бөткәндәр. Бының сәбәбе - көҙҙөң бер көнөндә ауылға ут төртөп китәләр һәм ул көл-күмергә әйләнә. Был ваҡытта ауыл (Ҡурғашлы) кешеләре Ҡарағай йортта йәйләүҙә булғанға үҙҙәре иҫән ҡалалар.

1919-1920 йылдарҙа көнсығыштан Дутов атлы атаман үҙенең ғәскәре менән килеп сыға һәм әйләнештә уның аҡсалары йөрөй башлаған. Был аҡса насар ҡағыҙҙан, унда эт һүрәте төшөрөлгән була. Хәҙерге Брәтәк ауылы ултырған урында элек ***Ятол*** (ҡулға алынғандарҙы тотоу өсөн төрмә) кеүек нәмә лә булған. [2]

Аралар тарихы

Түмәйҙәр һәм Сыуаштар араһының тарихы. Илмәмбәт менән Теләүембәт бер туғандар булған. Илмәмбәттең ҡатыны сыуаш ҡыҙы йә сыуаштар ҙа йәшәгән башҡорт ҡыҙы булырға тейеш. Шул килендән таралған затты “сыуаштар” тип атай башлағандар. Ғәбиҙуллиндәр “сыуаштар” араһына инә.

Түмәйҙәрҙәрҙең тарихы. Теләүембәт ҡатынды Башҡортостандың ҡайһылыр төбәгендәге түмәйҙәр араһынан алған булырға тейеш. Ул килендән таралғандар “Түмәйҙәр” тип аталған.

Түмәйҙәрҙәрҙең икенсе бер легендаһы ла бар. Был юлы түмәй һүҙенең мәғәнәһе “килде-киттеле”, “алйотораҡ” тигәнде аңлата.

Легендала әйтелгәнсә, солоҡ карарға барғанда бер ҡарт ике батман алып бара. Батман - эсе ҡыуыш йүкәнән төпләп эшләнгән һауыт. Солоҡтоң балы әҙерәк булып сыға. Бер батман буш ҡалғас, тигеҙләп артмаҡлау өсөн, икенсе батманына таш һалып ала. Быны күргән кешеләр, көлөп, ошо хәлдән һуң уларҙың затын “түмәйҙәр” тип йөрөтә башлайҙар.

Шулай итеп, легендалар аша ауылыбыҙҙа йор һүҙле, тормош ауырлыҡтарына бирешмәҫкә тырышып, үҙ етешһеҙлектәренән үҙҙәре көлә алырҙай кешеләр йәшәгән, тип әйтә алабыҙ.

Ауыл аралары. Ауылыбыҙ тураһында ҡыҙыҡлы легендалар бар

Һунарға барғанда ауылдаштарыбыҙ урманда үлеп ятҡан мышыға юлығалар. Мышы өҫтөндәге һайыҫҡанды күреп, Аҫҡар олатай:

- О, ниндәй көслө, батыр ҡош. Етмәһә, үҙе матур ҙа, - тип һоҡлана. Ул мышыны ошо ҡош йыҡҡандыр, тип уйлай. Шулай итеп, “матур” һәм “көслө” ҡош ырыуыбыҙҙың ҡошона әйләнә.

Был хәлгә аптырап, ауыҙҙарын йомалмай торғандарын “аптыраҡтар”, ғәжәпләнеүҙән күҙҙәре түңәрәкләнгәндәрен, өкөгә оҡшатып ***“упайҙар”*** тип атағандар. Әле лә туғай урамын “аптыраҡтар”, йырын аръяғы урамды “упайҙар” араһы тип йөрөтәләр. Ғәлиуллиндәр, Кәлимуллиндәр ***“аптыраҡта”*** араһына инә.

Тауҙар, ҡая, түбә, суҡы (ҡая ҡалдығы) атамалары

Айбикә тауы һәм йылғаһы. Бажай тауы аръяғында, Брәтәк йылғаһы аша ятҡан тау. Ошо тауҙа Айбикә исемле ҡыҙ аҙашып үлә. Урманда йөрөгәндә кемдәрҙер ҡыҙҙың һөйәктәренә барып сығалар ҙа сәс толомдарынан таныйҙар. Ә яҡындары барып күмеп ҡайталар. [13,14]

Бажай тауы. Бынан бик күп йылдар элек бер әбей менән бабай йәшәгән. Улар бик ярлы көн күргәндәр - ашарға ризыҡтары, кейер кейемдәре булмаған. Бабай бик йәштән үк һунарсылыҡ менән шөғөлләнгән, үҙенә күрә данлыҡлы һунарсы булған. Улар төпләнгән тирәләге тәбиғәт януарҙарға бай булған һәм бабай урмандан табышһыҙ ҡайтмаған. Әбей менән бабай шулай итеп донъя көткәндәр. Уларҙың ике ҡыҙҙары булған. Улар үҫеп еткәс, уларға бер үк көндә ике яусы килгән. Бабай менән әбей быға шатланып риза булғандар, ярлы йәшәһәләрҙә, шартына килтереп туй үткәргәндәр, бөтә ауыл халҡын һыйлағандар. Шул көндән башлап улар бергәләп бик килешеп йәшәй башлағандар. Бабай һаман шул кәсебе менән шөғөлләнгән һәм бөтә ғаиләне туйындырған. Хәҙер инде бабай ҙа ҡартая башлаған, йыш ҡына табышһыҙ ҡайтҡан көндәре лә күп булған. Бер көндө ул кейәүҙәрен саҡырып: “Хәҙер мин ҡартайҙым инде, күҙҙәрем күрмәй башланы, һунарға йөрөү көндән көн ауырлаша, шулай ҙа нисек булһала көн күрер кәрәк бит. Мин ғүмер буйына алып йөрөгән һунар ҡорамалдарын һеҙгә тапшырам, хәҙер һеҙ һунарға йөрөй башларһығыҙ»,- тигән. Кейәүҙәре бабайҙың ҡоралдарын алып һунарға сығып китәләр, ләкин юлдары уңмай, бик бойоғошоп ҡайталар. Ҡайнылары: “Тәүге көндә минең менән дә шундай хәл булды, аҙаҡ өйрәнеп киттем, бойоҡмағыҙ, өйрәнерһегеҙ һәм бына тигән һунарсылар булырһығыҙ”,- тигән, был юлы икеһенә лә айырым йөрөргә кәңәш биргән. Шунан алып ике бажа айырым йөрөгәндәр. Гел бер ерҙә осрашып, бергә ҡайтырға һүҙ ҡуйышҡандар. Улар йәшәгән ауыл эргәһендә бейек, ҡош-ҡортҡа бай тау булған. Ике бажа бергәләп шул тауҙан күп табыш алып ҡайтҡандар. Берҙән - бер осрашырға тейешле урында, кесе бажаһы оло бажаһын эй көткән, ти, эй көткән ти, ләкин оло бажаһы һаман килмәгән. Тамам аптырағас, кесе бажаһы урман яңғыратып: “Бажа!!!”- тип ҡысҡырып, оло бажаһын эҙләп киткән. Быны кешеләр ҙә ишеткән һәм исемһеҙ тау “Бажай” тип атап йөрөткәндәр. [4]

Әбей тауы. Элек-электән башҡорт халҡы йәшәгән ерендә күпләп мал үрсеткән. 20-30-лап һарыҡ-кәзә көткән. Ауыл янындағы тауҙағы үлән йәм-йәшел балаҫ кеүек түшәлеп ятҡан. Унда

бала-саға, байрамдарҙа ла сығар булғандар. Көҙ әбей сыуағына ла, ауыл матурлығын күрер өсөн шундағы бейек, ҙур тауға сығар булғанға,”Әбей тауы” тип йөрөтөлә.

Сыуаҡай тауы. Элек беҙҙең ауыл кеше үтеп сыҡҡыһыҙ ҡара урман булған. Урман йәнлек-кейектәргә, ҡоштарға бай, ә Нөгөш йылғаһы кисеп сыҡҡыһыҙ йылға булған. Ауыл кешеләре лә малсылыҡ, һунарсылыҡ менән донъя күргән. Бер заман насар һауа шарттары кешеләрҙе һәм малдарҙы бик йонсотҡан. Был һалҡын көҙ ваҡыты булған, әсе төньяҡ елдәре иҫкән, ҡар ҡатыш ямғыр яуа башлаған. Кешеләр йәйләүҙән ҡайтышлай арыуҙан, һалҡындан йонсоп, ошонда ғына туҡтап ҡышҡылыҡҡа төпләнергә һүҙ ҡуйышҡандар. Көслө күҙ асҡыһыҙ бурандар башланған, ә кешеләр мүкләмәй генә өйҙәр күтәргәндәр. Күпләп мал ҡырылған, кешеләр аслыҡтан йонсоғандар. Ниһәйәт аяуһыҙ ҡыш үтеп киткән, көнсығыш тау битләүенән көлөп яҙ ҡояшы сыҡҡан. Быны күргән кешеләр эй ҡыуанғандар, эй шатланғандар. «Сыуаҡ көн килде, сыуаҡ ай килде», - тип ҡысҡырғандар. Шунан бирле был тауҙы “Сыуаҡай” тауы тип йөрөтә башлағандар.

Төлкөосҡан. Эүәлерәк ауыл тирәләге ҡаяла йыуа үҫкән. Йыуа яҙ сәскә атҡан осор, әллә ҡайҙан уҡ матур булып күренеп ултырған. Бер ваҡыт ҡаяла төлкө күргән бала-сағалар уны баҫтыра башлай. Ә төлкө алайһа, былай ҙа ҡаса торғас, баҫымға түҙә алмай, ҡаянан осп төшкән. Шунан алып “Төлкөосҡан” ҡаяһы тип йөрөтә башлағандар. [3]

Ейәнбай йәки Яуымбай түбәһе. Мәстүрә тауы һәм Ҡарағай тауҙары ҡушылған урында бер тау түбәһе алып тора. Сафа олатайҙың ейәне ҡыуанһа ла йәки бошоноп китһә лә, һәр ваҡыт шул түбәгә менер булған. Күңелен асҡан, йырлаған, уй-кисерештәренән арынып ҡайтыр булған. Ошоға ҡарап “Ейәнбай” түбәһе тип йөрөткәндәр, уны халыҡ икенсе төрлө “Яуымбай” тип тә йөрөтә.

Юрматау. Беҙҙең яҡта була был хәл. Бер ярлы ғына кешенең ҡыҙы матур булып үҫеп еткән. Ул бөтә ҡыҙҙар менән еләккә йөрөгән, бейә һауған, ҡымыҙ бешкән. Бер ниндәй ҡайғыһыҙ йөрөгән ваҡытта, бер ярлы ғына егеткә ғашиҡ булған, ти. Егеттә уны яратҡан. Ләкин атаһы үҙенең ҡыҙына бай кейәү һайлаған һәм ҡыҙҙы көсләп уға бирергә булған. Туй көнө килеп еткән. Егет менән ҡыҙ ҡасып китергә вәғәҙәләшкән була. Туй барған ваҡытта улар ҡасып китәләр. Ҡыҙҙың һөйгән егете менән ҡасып киткәнен белгәс, уларҙы ҡыуа төшәләр. Бик күп барғас, бейек тауға үрләгәндә бер кешегә тап булалар: “Бер егет менән ҡыҙҙы осратманыңмы?”- тип һорайҙар. “Күрҙем, улар әле генә был тауҙы юрмалап менеп киттеләр”,- тигән үткенсе. Был һүҙ ҡыҙыҡ тойолған, тауға шул исем бирелгән.

Бәләтар тауы. Ҡайны менән кейәү ары саптылар, икенсе түбәгә менгәс, ҡулды маңлайға ҡуйып ҡарап торғанда ҡайны кеше: “Тик торғанда бәлә тарыны ла баһа,”- тип көрһөндө,-ти.

Кукәй тауы. Эҙләүселәр ары сабалар, Бер ни тиклем ваҡыт үткәс, өсөнсө тау башында тағы бер юлсы осраны, ти. Ҡыуғынсылар уға баяғы һорауҙы биргәндәр. “Улар был тауҙы кукәй һымаҡ тәгәрәп төшөп киттеләр”,- тип яуап бирә юлсы.

Бәлә тауы. Былар ары сабалар, дүртенсе тауҙы менеп барғанда, ҡайны кеше үҙ алдына: “Бына бәлә, бәлә”,- тип ҡабатлай.

Ҡалыу тауы. Бишенсе тауға менә башланылар, ти. Аттары аҡ күбеккә батҡан һыбайлылар, тау башына менеп, тирә-яҡҡа күҙ һалалар, тик берәүҙә күренмәй,- ти. “Ҡалыу ошо булалыр инде”,- тип әйтте ти кейәү кеше, аптырағас. Улар ҡыуып етеүҙән өмөт өҙөп, арыған аттарын кирегә борғандар.

Күреүебеҙсә, был легенда биш тау атамаһын үҙ эсенә алған: Юрматау, Бәләтар, Күкәй тауы, Бәлә һәм Ҡалыу тауҙары. [4]

Муллаосҡан тауы. Аҫҡар ауылы менән Ҡыҫыҡ фермаһы (элекке) араһында Мулла осҡан тигән тау бар. Революциянан алда һәм һуңғараҡ та был тирәләге башҡорт халҡы йәй көнө йәйләүгә күсә торған булған. Халыҡ бөтә мал-тыуарын, әйберҙәрен алған. Ул ваҡытта Ҡыҫыҡ утары ауыл булған. Ҡыҫыҡ халҡы Шәйек йылғаһы буйына йәйләүгә күскән. Йәйләүҙән Ҡыҫыҡҡа ҡышлау өсөн мулла Һибәт тә күскән. Мулла мөлкәте тейәлгән аты менән тауҙыы төшкәндә аттары алып ҡаса. Был тау оҙон, текә. Мулланы ултыртып килгән арба ағасҡа һуғыла һәм уның аяғы һына. Шул ваҡыттан һуң был тауҙы Мулла осҡан тауы тип атайҙар.[4]

Муллаосҡантау. Шәйекйортта йәйләүҙә булып, Ҡыҫыҡҡа ауылына ҡышлау өсөн ҡайтып барғанда була был хәл. Ибраһимов Әмир ағайҙың олатаһы Һибәт мулла мөлкәте тейәлгән аты менән тауҙы төшкәндә, аттары алып ҡаса. Был тау оҙон һәм текә. Арба ағасҡа һуғылып, мулланың аяғы һына. Тауҙы шул ваҡыттан бирле Мулла осҡан тауы тип йөрөтәләр. [22]

Умырзая тауы - ауылдың көнсығышында, Сыуаҡай менән Ҡырҡтейәк араһында ята. Ҡырҡтейәктән шул исемле йылға айырып тора. Тауҙа умырзая сәскәһе - күк умырзая- үҫә.

Урта түбә - Сыуаҡайҙың артында бәләкәй, ләкин бейек кенә булып ҡалҡып торған түбә шул исемде йөрөтә. [20]

Мәрзиә сукыһы - Урта түбәнең көньяҡтағы текә өлөшө ҡаяһы – Мәрзиә суҡыһы тип атала. [20]

Суҡыташ - Нөгөш йылғаһы менән оҙон ялан йылғалары һыу айырғысы. Был тауҙың (убаның) ҡаялы өлөшө Суҡыташ тип атала.

Зәлифә тауы (Зәлип тауы) - Суҡыташтың түбәнәйеп Нөгөшкә барып төртөлгән мороно. [20], [23].

Ҡарағас мороно. Хәҙер Аҫҡарҙың эргә-тирәһендә ҡарағас ағасы Маҙарыла ғына осрай. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, Сөмкә йылғаһы менән Кәзә һуйған араһындағы морондо Ҡарағас тип йөрөтәләр. Бында борон ҡарағаслыҡ булған. Ә хәҙер бер генә ҡарағасты ла осратырмын тимә, уны күптән ҡырҡып бөткәндәр. Ҡырҡҡандар ҙа Йәйпе кисеүенә ташып, Нөгөш йылғаһы буйлап һал итеп ағыҙғандар. Ауыл тирәһендә өй бурарлыҡ ағас ҡалмай. Шуға ла мәсет бурағанда етмәгән ағасты Кәрҙектән ташыйҙар. [12,17]

Ҡарамалы һырты. Көләбә яғынан Бажайға килеп тоташҡан һырт шулай атала. [12]

Инсебикә мороно - был морон Шәйекйорт яғынан Бажайға тоташа. [12]

Аҡ түбә. Бажай тауындағы түбә. Ул элегерәк бейек булып ҡалҡып торған. Түбәнең аҡ ташы аяҙ көндә ялтырап күренеп торған. [12]

Рудка тауы. Ҡасый яланы менән Юрматау араһында Әүжәндә тимер иретеү заводы булғанда был тауҙа тимер рудаһы табалар. Бер ни тиклем, Юрматау аша төшөп, был тауҙан руда ташыйҙар. Аҙаҡ алыҫ булғанға, руда ташыуҙы туҡтаталар. Тауҙа әле лә

шул саҡта руда алған тәрән соҡорҙар бар. Руда һүҙенән тауҙа, эргәһенен аҡкан йылға ла Рудка тип атала башлаған. [12]

Ҡырҡтейәк. Аҫҡарҙың төньяҡ-көнсығышындағы тауҙың исеме. Ул Нөгөштөң һул ярынан башланып Юрматауға барып тоташа. Уның төньяғынан һәм көньяғынан бәләкәй йылғалар ағып Нөгөшкә ҡоялар. Шул йылғалар Ҡырҡтейәкте Ҡоҙған ояһы менән Умырзаянан айырып тора. Ҡырҡтейәктә көтөү йөрәтәләр. Бола заманда ҡасҡындар тауҙа мал урлап һуйғандар. Малды салғас, тиреһен тунау өсөн тейәккә аҫалар. Шундай тейәктәр тауҙа күп осраған. Шуға ла тауҙы Ҡырҡтейәк тип атағандар. [12,20]

Әмир суҡыһы. Бажай тауы түбәһендәге ҡаты таштарҙан торған ҡалкыу урын – ҡая ҡалдығы. Аҫҡар яғынан барғанда юлдың уң яғында. Ауылдан дүрт км самаһы алыҫлыҡта. 1943 йылда ике ҡыҙ береһе Юлмөхәмәтова Сәкинә апай урманға утынға баралар. Ҡустылары Әмир ҙә уларға эйәрә. Бер заман көслө ел сыға, боҙ ҡатыш ямғыр яуа башлай. Апайҙары ҡустыларын ҡайтарып ебәрәләр, ләкин малай аҙаша. Йөрөй торғас, Бажай тауындағы бер ҡая эргәһенә килеп сыға. Һәм шунда ятып үлә. Ҡыҙҙар ҡайтып ҡустылары ҡайтмағанын белгәс, ауыл халҡы ҡулға ҡул тотоношоп тигәндәй баланы эҙләп ҡарайҙар. Өс көн эҙләп тә таба алмайҙар. Үлән үҫеп, ҡымыҙлыҡ буйға еткәс, кешеләр Бажай суҡыһына ҡымыҙлыҡҡа баралар. Шул ваҡытта Әмирҙең һөйәктәрен (һөлдәһен) табып Бажай суҡыһы эргәһенә күмгәндәр. Шунан бирле ул Әмир суҡыһы тип йөрөтөлә [18].

Ҡарағай тауы – Мәстүрә тауына тоташып, Оҙон ялан һәм Тумарлыҡ йылғалары менән сикләнә. Тауҙа борондан ҡалған өс солоҡ бар. Борон был тауҙа ҡарағай урманы булғанға шаһит булып ултыралар был мөһабәт ҡарағайҙар.

Йыянбай түбәһе - Ҡарағай тауының түбәһен шулай йөрөтәләр. Унда Йыянбай исемле кеше бесән сапҡан. Һуңынан Ибраһимов Әмир бабай үҙе, артабан уның нәҫелдәре саба. Әйтеп йөрөтөү өсөн хәҙер Яуымбай түбәһе тиҙәр ҙә ҡуялар.[5, 19].

Мәстүрә тауы. Аҫҡар ауылының төньяҡ-көнбайышында күренеп торған матур тау атала. Ҡасандыр ауыл байы Сафа ҡарт йәрминкәгә китеп, татар яҡтарынан бер тотам ғына нескә битле, һылыу татар ҡыҙын кәләш итеп алып ҡайта. Эшкә тилбер, егәрле татар ҡыҙҙын ауыл халҡы бик тиҙ үҙ итә. Ауылда тәүгеләрҙән булып Мәстүрә килен туптырҙатып кәртүк, йәшелсә үҫтерә. Тау битендә Сафа байҙың өйөнөң генә йәме булмай, ә бөтә ауылдың күрке була ул. Эргәһендәге тауҙағы еләк-емеште йыйып һәр төрлө ҡайнатма әҙерләй. Һәр саҡ бөхтә кейенеп йөрөгән Мәстүрә үҙ кеше булып, ауылда ғүмер кисерә. Уның хөрмәтенә уларҙың өйө урынлашҡан тауҙы Мәстүрә тауы тип атайҙар.

Ғәбиҙә үҙәге. Ялан исеме. Унда Ғәбиҙә исемле ҡатын бесән сапҡан. Уның үр яғында Ҡаран яланы [17, 21].

Сыбарташ - Бажайҙың Маҙарыға тоташып торған урыны Сыбарташ тип йөрөтөлә. [12]

Бөркөт ояһы - Сыбарташ эргәһендәге йырын аръяғы Бөркөт ояһы тип атала. [12]

Маҙары - Бажай менән Юрматау араһы Маҙары тип атала. Дөрөҫөрәге Сыбарташтан ары Маҙары ята. Маҙарыла бик сетерекле урын. Унда аҙашмаған кеше һирәктер. Маҙарыла әүлиә зыяраты бар, тиҙәр. Өлкәндәр ҡәберлектең баш яғы түбәндә, ә өс яҡтан ағас менән ерәтелгән, тип һөйләй торғайнылар. [12]

Күл

Гөлбикә күле һәм шишмәһе. Сафа олатайҙың тәүге ҡатынының исеме Гөлбикә булған. Ул киндер үҫтереп, ҡул көсө менән эшкәрткән. Өйө эргәһендәге бәләкәй генә күлгә киндерҙе серетереп һалған, “талҡыла” бер аҙ йомшартып, ағастан эшләнгән килелә төйөп, йомшартып, сүп-сарынан таҙартып, ҙур тараҡта тарап, еп иләгән. Уны туҡыу станогында һуғып киндерҙән

туҡыма һуҡҡандар. Киндер сереткән күл Гөлбикә әбей иҫтәлегенә “Гөлбикә” күле тип, ә шишмәһе “Гөлбикә” шишмәһе тип йөрөтөлә.

Ялан, туғайҙар

Ҡарүгеҙ яланы (I вариант). Сөмкә яланынан төньяҡта үҙәк аша Бажай тауының итәгендә Ҡара үгеҙ яланы ята. Яланда ашап йөрөгән үгеҙгә айыу ташлана. Ҙур ҡара үгеҙ айыу менән алыша башлай һәм айыуҙы йыуан ағасҡа мөгөҙө менән ысҡындырмаҫлыҡ итеп ҡыҫтай. Айыу ни тиклем тешләп талаһала үгеҙ уны теҙләүенән ысҡындырмай. Айыу ҙа, үгеҙ ҙә тубығына тиклем һаҙға бата, ләкин үгеҙ ысҡындырмай. Ялан “Ҡара үгеҙ” тип атала, ә халыҡ телендә “Ҡарүгеҙ” тип йөрөтөлә. [11]

Ҡарамүгеҙ яланы (II вариант). Ауылдан ике саҡрым алыҫлыҡта Кәзә һуйған яланыныиың уң яғында (төньяҡта) ятҡан ҙур ғына ялан шулай атала. Бик борон замандарҙа бер байҙың иҫ китмәле ҙур, зәһәр, ут сәсеп торған үгеҙе булған. Үҙе ҙур, етмәһә ҡап-ҡара төҫтә булған. Бала-сағаның, бисә-сәсәнең генә түгел, хатта осраһа, ирҙәрҙең дә ҡотон алған. Берҙән-бер көндө, ни ғәләмәттәндер, был үгеҙ юҡ булған. Ул ваҡытта ауыл ҡуйы урман менән уратып алынған булған. Өс көн, өс төн эҙләп арманһыҙ булған көтөүселәр, дүртенсе көндө генә ошо асыҡ ерҙә ҡара үгеҙҙең үле кәүҙәһен барып табалар. Ней күҙҙәре менән күрһендәр, үгеҙҙән биш-алты аҙым самаһы ҙур айыуҙың ҡанға батҡан кәүҙәһе ята. Күрәһең алыш бик ҡаты барған: эргә-тирәләге сиҙәм аҡтарылып, тапалып бөткән булған. Шунан алып был яланды Ҡарүгеҙ тип атай башлағандар. Хәҙер был ялан һөрөнтө ергә әйләндерелеп, ҙурайған, сит-боттары кешенең сабынлығына әйләндерелгән.[9]

Сөмкә яланы - ялан Сөмкә йылғаһы эрәһендә, шуға ла икеһе бер исем менән аталған. Был ялан көнбайышҡа оҙон булып һуҙылып ята. Колхоз яландарҙы киңәйтеү өсөн, ағастарҙы төпләү һөҙөмтәһендә, күп яландар бер-береһенә тоташып бөткән. Шуға Сөмкә лә Йәғәфәр яланына тоташ.

Кәзә һуйған яланы Ҡаран яланынан уң яҡта, үҙәк аша ята. Аҙашып ҡалған кәзәләрҙе һуйып алып ҡайтҡан ер.[11]

Кәзә һуйған яланы (I вариант). Ҡара үгеҙ яланынан көньяҡҡа 300-400 метрҙар тирәһендә Кәзә һуйған яланы ята. Көҙ еткәс ҡапыл ауыр-ҡалын ҡар яуа. Ҡар бик ҡалын яуа, ҡырағай хайуандар ҡамалып ҡала. Бажай итәгендә тупланған кәзәләр ҡамауҙа ҡала. Бесәнгә юл һалып барыусы кешеләр уларҙы күреп ҡала һәм ҡар ҡамауында ҡалған ҡыр кәзәләрен һуйып алып ҡайталар. Был халыҡ араһында тиҙ тарала, яланға исемдә ҡушып ҡуялар, “Кәзә һуйған” тип йөрөтәләр. [11]

Кәзә һуйған (II вариант). Аҫҡар ауылының бер яланын Кәзә һуйған яланы тип йөрөтәләр. Унда беҙҙең ауылдың байтаҡ кешеһе бесән эшләй. Революциянан һуң, Совет власы урынлашҡас, кулактар урмандарҙа ҡасып йәшәгән. Ауыл кешеләренең кәзәләрен урлап, һуйып ашай башлағастар, был ялан Кәзә һуйған яланы тип исемләнә. Ул ерҙә күп төрлө ағастар үҫә. Мәҫәлән, ҡайын, миләш, имән, ҡарағай. Кәзә һуйғанға күрше генә Ҡарағүҙ яланы бар. [4]

Киндер ҡайыны. Сыуаҡай тауының көнбайыш битләүендә уйпат ҡына соҡор бар. Ошо ерҙә бер ҡайын үҫә. Кешеләр: “Киндер ҡайыны төбөндә ҡар бөтмәгән, тимәк әле урмандала ҡар күп икән”,- тиҙәр. Ауыл эргәһендәге иң һуңғы ҡар ошо тирәлә бөтә. Элек ошонда барып ҡарға тапап-тапап киндер ағарта торған булғандар. Шунан алып был ҡайынды “Киндер ҡайыны” тип йөрөтәләр.

Мәсет бураған ялан - Сөмкәнән һул яҡта бәләкәй генә асыҡлыҡ - яландар. Был урында 1910 йылдарҙа Аҫҡар ауылы өсөн мәсет бурағандар. [11]

Сыбатма яланы – Һарыҡ фермаһы яланынан артабан беренсе бәләкәй күперҙе сыҡҡас, юлдың һул яғында башланып, өйрөлөп Нөгөш йылғаһының уң ярына барып тоташҡан ялан шулай атала. Ялан тар һыҙат булып һуҙыла, уртаһында ағаслы "утрауҙар" осрай. Өйрөлөп, сыбалып ятҡанға ла яланға Сыбатма тип исем биргәндәр. [11]

Һарык фермаһы яланы - Исламбай яғына барғанда Ҡаран күперен сыҡҡас та Һарыҡ фермаһы яланы башлана. Ялан төньяҡҡа һарҡыу. Был яланда 1950-1960 йылдарҙа колхоздың һарыҡ фермаһы булған. [11]

Ат сапҡан ялан – был оҙон яланда борон ата-бабаларыбыҙ бәйгеләр ойоштороғандар, ат саптырғандар. Ат сапҡанды Оло ялан тип тә атайҙар. [11]

Ҡуяндар үҙәге - был ялан элегерәк ҡуян ауылы кешеләренә бесән сабыу өсөн бирелгән булған. Ялан үҙәкле. Шуға ла ялан ҡуяндар үҙәге тип аталған. [11]

Кәртүк яланы - Оло яланды үткәс, Ҡуяндар үҙәгенең һул яғындағы яланда колхоз дәүләткә һатыу өсөн картуф сәскән. Шул осорҙан башлап был яланды кәртүк яланы тип йөрөтәләр, ысынында ул ҡуяндар үҙәгенең бер өлөшө. [11]

Сельпо яланы – Кәртүк яланынан Нөгөшкә табан төшөп киткән ерҙә, Кәртүк яланынан һулда ҡала. Халыҡты хеҙмәтләндереү өсөн ауылда сельпо төҙөлә. Сельпоға хужалыҡ итеү өсөн 9 га ер бүлеп бирәләр. Сельпо был ерҙә Борай игене үҫтереп һатҡан. Сельпо тарҡатылған, ә яланды һаман да Сельпо яланы тип йөрөтәләр. [11]

Брәтәктәр тогы - Брәтәк ауылы Аҫҡар менән бер колхозға берләшкәс, Брәтәк ауылы колхозсылары был яландағы токта иген таратып, киптереп ятҡандар - эш бөткәнсе ҡайтмай эшләгәндәр. [11]

Салауаткин яланы – был яланда Үрге Әүжән урыҫы утары булған, йәғни, башҡорттар тарафынан урыҫҡа һатылған булған. Салауат исемле кеше һатҡанмы, әллә урыҫ башҡорттарҙы дөйөмләштереп Салауат тип атағандарҙырмы, билдәһеҙ. Ни булһа ла ялан - Салауат яланы - Салауаткин тип аталған. [11]

Шәйек - йылғаның һәм ул йылғаның һул яғындағы яландың - Бажай урманына тоташып торған күтәренкө генә яландың исеме - "Шәйек" һүҙенән килеп сыҡҡан. Ҡарағай ылыҫын йәйек тиҙәр. Был урында заманында ҡарағайлык булған. Әле лә ҡарағай үҫә үҫеүен, тик һирәгәйә бара. Шәйек - Исламбай һәм Ҡыҫыҡ ауылдары кешеләренең йәйләүе булған. [11]

Ҡотлобай - ялан исеме, Шәйекйорттан түбәндәрәк, Шәйек йылғаһының һул яҡ ярында, 9 га майҙанлы ялан. [11]

Брәтәкйорт. Аҫҡар ауылы кешеләренең боронғо йәйләүе. Ул Брәтәк йылғаһына яҡын, исемде шунан алған. Ялан аша Стәрлетамаҡ - Үрге Әүжән автомобиль алы үткән. Аҫҡар сыҡҡан оло юлда уға шунда тоташа. [12]

Ташлы яланы. Бажай тауы менән Айбикә тауҙары араһында Брәтәк йылғаһы буйында йәйрәп ята. Ташлы ла боронғо йәйләү. Ялан аша Айбикә йылғаһы ағып үтә лә Брәтәк йылғаһына ҡоя. Ташлыла элек аҫҡарҙарҙың һыйыр фермаһы була торғайны, әле брәтәктәр мал аҫырай. Делянка менән Брәтәк йылғаһы араһындағы ағаслыҡта, Аҫҡарҙан барғанда юлдың һул яғында, боронғо зыярат бар. Йәйләүҙә саҡта йоғошло ауырыуҙан бик күп кеше үлә, уларҙы шул зыяратка күмгәндәр [12,13,14].

Үлмәҫбай яланы. Нөгөш башындағы был ялан да кеше исеме менән аталған, һуңғы өс йылда унда, колхоз бейәләрен һауып ҡымыҙ эшләйҙәр. [11]

Хисмәт яланы. Хисмәт яланы кеше исеме менән атала. Хәҙерге ферма араһында Нөгөштөң һул яғында Мундай яланы йәйрәп ята.[20]

Үрге аласыҡ. Үлмәҫбайҙан бире, ауылдан ике-өс км алыҫлыкта Үрге аласыҡ яланы булған, хәҙер уны ағаслыҡ баҫҡан. [12]

Оҙон ялан. Аҫҡарҙың төньяғында, Оҙон ялан йылғаһы менән Бажай араһында, оҙон булып һуҙылып ятҡан ялан Оҙон ялан тип атала. Оҙон яландың көнсығышынан ағып үткәнгә йылға ялан исеме менән аталған. Оҙон ялан йылғаһы ауыл уртаһында Нөгөшкә ҡоя [13,14].

Һәйнәкәй - ялан исеме. Бажайҙағы межа менән Оҙон ялан араһында ята. Исеме ҡатын-ҡыҙ исеменән булғанға оҡшай. Ғәйниямал, Ғәйникамал исемдәренән бәлки алынғандыр. [12]

Шәкир сыбайы - борон Шәкир ҡарт бесән сапҡан нәҙек оҙон ялан шулай атала. [12]

Ҡаран туғайы. Ҡаран тауын төшкәс, Ҡаран йылғаһының һул яҡ яры буйлап, Нөгөш йылғаһына тиклем һуҙылған туғай Ҡаран туғайы тип атала [17], [21].

Ғиниәт туғайы. Ҡаран яланының төньяҡ-көнбайыш сите шулай атала. Был урында Мырҙабулатов Ғиниәт сабыны булған. ***Ҡараңғы туғай*** Ғиниәт туғайының төньяҡ-көнсығыш бирге осо шулай атала, сөнки ышыҡта ята. Көнсығышындағы ағастар ҡояш нурҙарын төшөрмәй [17], [21].

Сыбаялан. Исламбай менән Мүктәкте яланы араһындағы ялан. Ялан күтәренке ята. Тыныс көндә лә Сыбаяланда ел була, ти халыҡ [15], [20].

Ҡаршы ялан. Сыбаяланға ҡаршы ятҡанға шулай йөрөтөлә [15].

Һыусумған - ялан исеме, Ҡарабалыҡ йылғаһы ағып килә торғас, эзбизташлы тоҡомдар араһында юғала - сума.

Ҡаран башы – был исем менән Ҡаран яланының үрге осо йөрөтөлә [17].

Имән ялан – Атсапҡан менән Салауаткин араһында – Бажай аҫтында ятҡан ялан Имән ялан тип атала. Был ерҙә имәнле урын булған. Әүжән урыҫтары леспромхозы имәнде ҡырҡып, ярып, тәгәрмәс өсөн туғын бөккән. Имән дә бөткән. [11]

Оло ялан (Исламбайҙың Оло яланы). Салауаткиндан ары, юлдың уң яғындағы ялан ҙур һәм киң булғанға шулай атала. Ағастары төпләп, яландарҙы ҙурайтҡансы эргә тирәләге яландарҙан был ялан ҙурлығы менән айырылып торған. [11]

Ҡыйышбаш – Оло яландан һулда юл аша. Берәүҙәр был яландың ере ҡырын, ә икенселәр бында ҡыйыш башлы солоҡ үҫкән, шуға ялан Ҡыйышбаш тип атала тине. [11,15]

Урта ялан – Мүктәктенән уң яҡта, йырын аръяғында күренгән ялан шулай атала. Ул урман ҡуйынына һыйынған, урман уртаһында ята [15].

Ҡушмөгөҙ – Ҡуяндар үҙәге менән Салауаткин араһында ятҡан ялан шулай атала. Исемдәр оҡшатыу алымы менән әйтелгән [15].

Мүктәкте – Сыбаялан менән Урта ялан араһындағы йылғаны, үрҙе һәм яланды – өсөһөн дә Мүктәкте тип йөрөтәләр. Исемдәр мүк һүҙенән булырға тейеш, тиҙәр.

Ҡарағас. Аҫҡар ауылынан саҡрым ярым Ҡарағас тип аталған урын бар. Ҡасандыр был ерҙә күҙҙең яуын алырлыҡ һомғол ҡарағастар үҫкән. Әммә йылдар үтеү менән ҡайһы бер кешеләрҙең һаҡһыҙлығы, битарафлығы арҡаһында ҡарағастар юҡҡа сыҡҡан, әммә урын был исемен һаҡлап ҡалған.[11,21]

Мундай яланы. Бынан бик күп йылдар элек, борон тиһәк тә була, ошо Аҫҡар ауылында үтә лә бай бер кеше йәшәгән. Үтә лә һаран, етмәһә мыжыҡ та булған был. Меңләгән баш йылҡы һәм шунса һыйыр малы булған. Ҡарун байға ялсылары сыҙамаған. Бер генә лә буш тора белмәгән был әҙәм, ҡысҡырынып, эш ҡушып ҡына торған, шуға ла хеҙмәтселәре ҡасып китеп торғандар.

Шулай бер саҡ Исмәғил атлы егет эш эҙләп был тирәләргә килеп сыҡҡан. Был егеткә ун өс, ун дүрт йәш самаһы булып, етмәһә етем булған. Исмәғил, тамаҡ аҫырарлыҡ булһа ла эш табып булмаҫмы икән, тип өмөтләнеп йөрөгән.

Шулайтып ул теге һаран, мыжыҡ байға ялланып эшләй башлаған. Баш күтәрмәй эшләгән тыңлаусан Исмәғилде лә бай йыш ҡына туҡмап торған. Кистәрен, яңғыҙ ҡалғанда, егет айға ҡарап бәхет һораған.

Бер мәл байҙың һарыҡ көтөүе башы һуҡҡан яҡҡа сығып китеп юғалған. Әллә күпме ыҙа сигеп, йән тиргә батып, Исмәғил һарыҡ көтөүен табып алып ҡайтып килгәндә, әмәлгә ҡалғандай, яшыҡ ҡына аты бер ҡойоға бата башлай. Атының муйынына һырашҡан ялы бөткән ере генә күренеп ҡала. Был көмөрө булып сығып торған һөйәге муңда тип атала икән. Атын сығара алмай, батып үлгән аты ҡайғыһынан, ҡайтып етеп килгән ерҙә Исмәғил үҙе лә ҡойоға батып үлә. Шунан бирле аты батҡан ерҙе “Мундай яланы”, ә егет батҡан ҡойоно “Исмәғил ҡойоһо” тип атай халыҡ.[5]

Ҡойо, ҡотоҡ исемдәре

Исмәғил ҡойоho. Элегерәк Аҫҡар ауылында Исмәғил исемле бер кеше йәшәгән. Йәй көндәренең береһендә ул атын еккән дә ауыл осондағы йылға буйлап китеп барған. Был йылғаға төрлө яҡлап ер аҫтынан сыҡҡан шишмәләр ҡушыла. Ошондай бер шишмәнең эргәһендә тәрән ҡойо була. Исмәғил ҡарт бара торғас, аты шул ҡойоға бата башлай. Атын ҡотҡарам тип, ул үҙе лә бата. Шунан алып ауыл кешеләре был ҡойоно Исмәғил ҡойоһо тип атай.[5]

Исмәгил ҡойоhо ҡотоғо – Аҫҡарҙың көньяғында Нөгөш туғайының арғы һаҙлы урынында ер аҫтынан урғылып сыға. Ҡотоҡтоң һыуы ауыл эргәһендәге иң йомшаҡ һыулы тип иҫәпләнә. [18]

Гөлбикә ҡотоғо – Аҫҡарҙың төньяк-көнбайышында, Гөлбикә (һуңғы ваҡытта Мәстүрә тауы) тауы артында һаҙлыҡтың эргәһендәге бәләкәй генә күлде Гөлбикә күле тигәндәр. Эргә-тирәһендәге ағастарҙы төпләгәс, һаҙлыҡ кибә төшкән, күле кипкән. Шулай ҙа ҡойоһо (ҡотоғо) бар. Ҡотоҡтоң һыуы Упайҙар урамындағы тәрән морондан ағып, оҙон ялан йылғаһына ҡушыла. [18]

Фәрхиниса ҡотоғо. Ауылдың төньяғында, оҙон ялан йылғаһының һул яҡ ярына яҡын таҙа һыулы ҙур ғына ҡотоҡ (шишмә) бар. 1970 йылдарға тиклем ауылдың төнъяҡ осонда өйҙәр булманы. Фәрхиниса инәй ауылдың иң осонда йәшәне, теге ҡотоҡтан унан башҡа һыу алыусы булманы. Шуға ла уны Фәрхиниса (Һәркес) ҡотоғо тип йөрөтәләр. [20], [23].

Йылғалар

Ҡаран йылғаhы – Аҫҡарҙан Исламбайға барғанда осраған беренсе йылға Ҡаран тип атала. Беҙҙзең яҡта ҡышын да туңмай яткан инеште шулай атайҙар. Йылғалағы таштар ҙа ҡара төҫтә, бәлки, шуға ла Ҡаран тигәндәрҙер. Был йылғаның һыуы таҙа, йәйен һалҡын, ҡышын йылы. Йылға башланған урынға яҡын яланды Ҡаран башы яланы тип атағандар. Ҡаран көньяҡ-көнсығыштҡа табан ағып, Нөгөш йылғаһына барып ҡоя. Аҫҡар менән Ҡаран йылғаһы араһындағы тау Ҡаран тауы тип атала. [12]

Ҡаран башы. Был исем менән Ҡаран яланының үрге осо йөрөтөлә. [21]

Сөмкә йылғаhы - Аҫҡарҙың көньяк-көнбайышында бәләкәй генә бер йылға аға. Ул Ҡарандың һул ҡушылдығы. Йылға йырҙаһы урыны-урыны менән киңәйә һәм бер аҙ тәрәнәйә. Шундай урындарҙы ”сөмкә” тиҙәр. Ундай сөм, сөмкә урындар йыш осрағанға йылға Сөмкә тип атала ла инде. Һуңғы ваҡытта уны Сумка тип атай башланылар, ләкин был исем дөрөҫ түгел, йылғаның исеме - Сөмкә.[11]

Ҡомйылға - яландарға эргәһенән ағыусы йылға исеме бирелгән. Йылға Нөгөштөң уң ҡушылдығы. Йылға тамағындағы ялан Ҡомйылға тамағы исемен йөрөтә. [12]

Күсей – йылға һәм ялан исеме - Шәйектән юғарыраҡ Брәтәкйортҡа киткән якта. Исеме ир кеше исеменән алынған. [11]

Сар ҡаҙған йылғаhы. Аҫҡарҙан барғанда Хисмәт яланының бирге сите буйлап аҡҡан йылға Нөгөшкә ҡоя. Йылға ташы сар эшләү өсөн ҡулланғандар. Ҡомташтыр, күрәһең. [11]

Рудка тауы һәм йылғаhы – йылға Юрматауҙың көнбайышынан ағып төшә лә Ҡасый йылғаһына ҡоя. [12]

Ҡасый яланы һәм йылғаhы - Айса ямынан ары тау башында, көнбайыштан көньяҡҡа “Г” хәрефе рәүешендә һуҙылып ята. Исемде ирҙәр исеменән алған: Ҡасыймы, Ҡасиммылыр булғандыр, тиҙәр. Йылғаһы яландың арғы осонан аға, Нөгөшкә ҡушыла. [11]

Ҡырктейәк йылғаhы. Юрматауҙың көнбайыш битләүендеге Саҙрый зыяраты тип аталған түбәнән башланып, Ҡырҡтейәктең көньяғынан ағып килеп, Нөгөшкә ҡоя. [12]

Ҡышлауыр йылғаhы. Ҡырҡтейәккә яҡын башлана ла көньяк-көнбайыш йүнәлештә ағып, Урта түбәнең аръяғынан ағып үтеп, хәҙерге ферма артында Нөгөшкә ҡоя. Исеме ҡышлау һүҙенән килеп сыға. [12]

Тумарлык йылғаһы. Бажайҙан ағып төшөп ауылдың төньяҡ осонда Оҙон ялан йылғаһына ундан килеп ҡушылған бәләкәй генә йылғаның исеме Тумарлыҡ. Ул йылғаның эргә-тирәһе батҡыл, һаҙлыҡлы, күтерле. Йылғаға исемде эргәһендәге ерҙең формаһына ҡарап биргәндәр. Ул йылға эргәһендәге һаҙлыкта әленән-әле мал-тыуар батҡан. Шунда бер үгеҙ батҡанда үкергән тауышы ауылға ишетелеп торған. Шуға уны Үгеҙ үкергән йылғаһы тип тә йөрөткәндәр. [12]

Үлмәҫбай йылғаһы. Нөгөш башындағы ялан да кеше исеме менән аталған, хәҙер колхоз бейәләре тотоп, ферма барлыҡҡа килгән урын. [12]

Сабынлыктар

Ниса сабыны. Нөгөштөң уң яры буйлап Исмәғил ҡотоғонан алып түбәнгә, Ниса сабыны һуҙылған [23].

Бәлхиә сабыны. Ҡаран туғайына ҡаршы Нөгөш аръяғындағы туғай шулай атала. Төләмбәтова Бәлхиә сабынлығы булған [23].

Сәләх сабыны. Аҫҡарҙан Бәләкәй Брәтәккә сыҡҡан оло юлдың уң яғында бер ялан бар. Ауыл ҙурайғандан алып һабантуйҙар шунда үткәрелә. Шуға ла уны һабантуй яланы тип атай башланылар. Ә боронораҡ Шәмситдинов Сәләх исемле ҡарттың сабыны булған. Яланы сабыны - Нөгөш башына яҡын, йылғаныһының уң яры буйлап, йылға аръяғын текә үк кенә оҙон морон йүнәлешендә һуҙылған күбәлек ялан бар. Уны Нөгөш башы тип тә йөрөтәләр, Атау сабыны тип аталған, сөнки Күрәҙәләр араһынан булған бер Бретәк ауылының Атаулла исемле кешеһенең сабынлығы булған. [12]

Зыярат

Әүлиә ере. Маҙарыла ерләнгән Әүлиә дин әһеле: кем булған, ҡайһы яҡ кешеһе булған, төрлө имеш-мимештәр әле булһа ла тынмай.

Эрвәлутсиәгә (октябрь революцияһына) тиклем булған хәл Ырымбур яҡтарынан бер мосафир әүлиә, мәғрифәтсе ауылдан-ауылға йөрөгән. Бикташ ауылынан Ҡурғашлы ауылына (икеһе лә юҡ) барырға сыҡҡан. Аҙашып ошо Маҙарыға килеп сыҡҡан һәм бәләкәй генә яланда үлемен осрата. Уландары килеп, халыҡ ҡуҙғышып әүлиәне эҙләп табалар. Әүлиәне бер кеше үлгән яланға ерләп ҡуйған була. Уландары, был ер кеше аяҡ аҫты тип, һөлдәләрен алып, ҙур ғына ташлыҡты соҡоп, шунда яңынан ерләп ҡуялар, урының билдәләп ҙур ғына таш та ҡуялар. Ул таш әле лә бар. Маҙарыға мал-тыуар эҙләп барып сыҡҡан кешеләр һөйләүенсә, йәки шул ергә юғылыусылар әйтеүенсә Әүлиә ҡәбере тирәһендә ғәжәп хәлдәр булғылаштырғылай икән. Улар аҙашып, шул тирәлә өйрөлөп, бер урынға урап килә лә сығалар икән. Аҙашып ҡаңғырып, баштары әйләнеп, ҡайтыу юлын саҡ табалар, имеш. Маҙаһыҙлап, мәңгелек йоҡоһон бүлеп йөрөүҙе, күрәһең, хәҙрәт яратмай.

Шулайтып, Маҙарының тарихы туранан-тура Әүлиә хәҙрәт исеме менән тығыҙ бәйләнгән.[8]

Юл, урын исемдәре

Икмәк юлы. Аҫҡарҙан Байназар ауылына Юрматау аша тура юл аталған. Был юлдан Аҫҡар халҡы Әбйәлил, Темәс яҡтарына баҙарға йөрөгән. Үҙҙәре ағастан эшләнгән әйберҙәр, бал алып барғандар ҙа иген-икмәк тейәп ҡайтҡандар. Шуға “Икмәк юлы” тигән исем биргәндәр [16].

Мейес. Аҫҡар ауылынан ике саҡырым алыҫлыкта, Брәтәккә киткән боронғо юлда Оҙон яландың арғы осонда йылға аша яткан урынды, Мейес тип атайҙар. Үрге Әүжәндә тимер иретеү заводы бар саҡта мейестә ағас яғып күмер әҙерләгәндәр. Әҙер күмерҙе заводҡа ташығандар. [10,11,12,13,14]

Айса ямы - Хисмәт менән Ҡасый яландары араһындағы тауҙың төньяҡ һәм көнсығыш яғында. Батҡыл урынды сыҡҡас та (юлдың уң яғында ауылдан барғанда) Айса ҡарттың дегет ҡайната

торған баҙы булған. Ҡарт бесәнде лә шул тирәләге яландарҙа әҙерләгән, бына шуға был ялан Айса ямы тип аталған. Яма-соҡор, баҙ соҡоро. [20]

Ғибәҙәй баҙы. Аптыраҡтар ҡотоғо сыҡҡан текә ярҙа Ғәле ҡарттың (Ғәлиуллиндарҙың олатаһы) дегет ҡайната торған баҙы булған. Ғәле ҡарттың улдары Фәхрислам, Әбдрахман, Динислам да унда дегет ҡайната. Улар донъя ҡуйғас, Ғибәҙетдин дегет ҡайнатыу менән шөғөлләнә. Хәҙер баҙ соҡоро беленмәй, фермаға юл һалынған. [20]

Ғариф ҡабағы - Ҡаран йылғаһы Нөгөшкә ҡойған урындағы кисеүгә ҡаршы ятҡан, тау битләүендәге, Зәйниғәбдинов Ғариф исемле бабай ошо ҡабаҡҡа утын ала килә. Юл ҡапыл боролған ерҙә ҡапыл атлы кеше килеп сыға.Тирмәнсенең телһеҙ малайы ҡайтып барған була. Бабай ҡышҡы юлда борола алмай ҡала, ә малай күрмәйенсә бабайҙы төрттөрөп китә: сана тәртәһе һыҙырыл үтә. Бабай шул зәғифләнеүенән төҙәлә алмай үлеп китә. [11]

Япраҡлыбаш - Маҙары менән Юрматау ҡушылған урын Япраҡлыбаш тип атала. Был яҙғыһын ағастар иң тәүҙә (иң иртә) япраҡ ярған урын. [12]

Ерән ат урманы - Бажайҙагы Аҡ түбәнән оло юлға (Аҫҡар менән Бәләкәй Брәтәк юлы) табан һуҙылып ятҡан һырт Ерән ат урманы тип атала. [11]

Мөҙәрис күпере - Исламбай юлында, Салауаткин менән Мүктәкте араһында, һаҙлыҡлы, бик алама бер урын була йәйәү йөрөүселәр был батҡылдан биҙрәп бөткән була.1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышында йөрөгән сағында Ишмурҙин Мөҙәрис Исламбай ауылы кешеһе һуғыштан иҫән-һау ҡайтһам, шул батҡылға күпер һалыр инем тип үҙ-үҙенә һүҙ бирә. Бәхетенә күрә, иҫән ҡала. Ауылына ҡайтҡас, 1946 йылдың йәйендә, вәғәзәһен үтәй: күпер һала һәм һаҙлыҡҡа ағас түшәй. Был - күперҙе Мөҙәрис күпере тип йөрөтә башлайзар. Әлбиттә, күпере хәҙер юҡҡа сыҡҡан. Иҫән булһа һалыр ине лә ул. Шулай ҙа өлкәндәр был урынды Мөҙәрис күпере тип йөрөтә [15], [18], [20].

Ҡыҙылъяр – Нөгөш буйындағы текә яр. Был яр ҡыҙыл балсыҡлы, шуға ла Ҡыҙылъяр тип атала. [12]

Ҡыҫыҡ ауылы

Бикташ ауылының утар – йәйләүе була. Аҫҡар ауылынан 12 саҡрым алыҫлыҡта, Шәйекйорт йүнәлешендә, борон Ҡыҫыҡ исемле ауыл булған. Был ауыл ике йылға араһында, тағы ла ике тау араһында ҡыҫылып ултырғанға бирелгән. Эргәһендә Оло Шәйек һәм Күгәүен йылғалары аға. Ә уң яғындағы бейек тау Әңгәмә тауы тип атала.

Әңгәмә тауы (1 вариант). Ололар шул тауға күтәрелеп әңгәмәләшеп ултырыр булғандар.

Әңгәмә тауы (2 вариант). Юҡҡа ғына Ҡыҫыҡ ауылы эргәһендә ҙур, бейек һырт өҫтө Әңгәмә тауы тип аталған. Әүәле аҡһаҡалдар ошо тауға йыйылышып әңгәмә ҡорғандар: донъяуи мәсьәләләрҙе хәл иткәндәр, кәңәш-төңәш итешеп, әңгәмәләшер булғандар. Шул сәбәпле был тау Әңгәмә тауы тип аталып йөрөтөлә.

[1] Ғүмәров Вәли Ғәле улы.

[2] Мәғлүмәт Миләүшә Ҡасимова тарафынан Мөхәмәткилде Сөләймәновтың 1953 йылғы яҙмаларынан алынды.

[3] Шакирова Зәлифә Вәдүт ҡыҙы башланғыс кластар уҡытыусыһы ер-һыу атамаларыбыҙ тарихын атайым Ғәбизуллин Вәдүт Абдулхаҡ улынан яҙып алдым.

[4] Мырҙабулатова Бикә Ғиниәт ҡыҙынан башҡорт теле уҡытыусыһы Ғәйшә Мырҙабулатова яҙып алған.

[5] (Ғәбиҙуллин Самат Абделәхәт улынан башҡорт теле уҡытыусыһы Ғәйшә Мырҙабулатова яҙып алған.

[7] Ғәлиуллин Әбделҡадир Абдрахман улынан (1931 йылғы) Хәмитова Таңһылыу Әғзәм ҡыҙы яҙып алған.

[8] Ишмырҙина Рәбиға Фәхрислам ҡыҙынан (1924 йылғы) Хәмитова Таңһылыу Әғзәм ҡыҙы яҙып алған.

[9] Ғәбиҙуллин Вәдүт Әбделхаҡ улынан (1937 й.) Хәмитова Таңһылыу Әғзәм ҡыҙы яҙып алған.

[10] Кинйәбаев Мөхәмәт Ишмөхәмәт улынан (1931 йылғы) Хәмитова Таңһылыу Әғзәм ҡыҙы яҙып алған.

Аҫҡар мәктәбе ер-һыу атамалары тураһында мәғлүмәт биреүселәр исемлеге:

[11] Ғәбиҙуллин Вәдүт Әбделхай улы,

[12] Ғәлиуллин Әбделкадир Әбдрахман улы,

[13,14] Ғәйнуллина Фәриҙә Хәләфетдин ҡыҙы һәм Ғәйнуллина Мөниә Хәләфетдин ҡыҙы,

[15] Ғәниев Дамир Мансур улы,

[16] Кинйәбаев Мөхәмәт Ишмөхәмәт улы,

[17] Кинйәбаев Нурғәле Мөхәмәт улы,

[18] Ибраһимов Әмир Ғизмитдин улы,

[19] Әхмәҙуллина Рәбиға Зариф ҡыҙы,

[20] Ишмырзина Рәбиға Фәхрислам ҡыҙы,

[21] Фәтхетдинов Сәғит Ғәле улы,

[22] Фәтхетдинова Зәйтүнә Мазһар ҡыҙы,

[23] Теләмбәтова Нафиға Зиннәт ҡыҙы.

Аҫҡар ауылы ер-һыу атамаһы альбомын төҙөүсе укытыусы Билалова Флүрә Мөҙәрис ҡыҙы.

Брәтәк ауылы

Брәтәк ауылы Бөрйән районының төнъяғында өс район – Бөрйән, Белорет, Ишембай – Брәтәк йылғаһының Нөгөшкә ҡойған урынында урынлашҡан сиктәрендә урынлашҡан. Ауылдың төнъяғында Ҡоҙаш - Нөгөшкә, көнсығышта Ҡурғашлы – Брәтәк йылғаһына ҡушыла. Брәтәк йылғаһының тамағын ***Күкятыу*** тиҙәр. Заманында уға дилбегә буйламаған, унда ат йөҙҙөргәндәр. Брәтәк күперенән тороп баштүбән һикереп һыу ингәндәр. Ҡуйы урман ауылға терәлеп үк тора. Ләкин төҙөлөш өсөн ағас табыу ауырлашты. Ауылды ***Бәштин, Әрҙәкле, Кәзәтау, Айыу оңо, Айбикә, Юрматау тауҙары*** уратып алған. Урманда, *Башҡортостан* урмандарына хас, бөтә төр ағастарҙа үҫә. Мүк менән ҡапланған ҡарағай урманында күк һәм ҡыҙыл көртмәле үҫә. Ләкин ул яҡлауға мохтаж, ҡарағай урманы аяуһыҙ ҡырҡыла. Шулай уҡ донъяла һирәк осраған һары һәм күк умырзая, ыйыы сәскәһе, кәкүк ситеге беҙҙә бар. Урманда бөтә төр йәнлектәр: шәшке, һуҫар, ҡама, йәтсә, ҡондоҙ һәм башҡа йәнлектәр бар. Ҙур ҡырмырҫҡа өйөмдәре урманды йәмләй. Ауылда халыҡ күпләп мал тота, һуңғы ваҡытта йылҡы малы күбәйҙе. Йәштәр ата-бабаларҙан ҡалған йоланы тергеҙеп күпләп солоҡ ябалар, ҡорт аҫырайҙар. Өй һайын балта оҫталары йәшәй тиһәк тә хата булмаҫ, йылдан-йыл береһе – береһенән матурыраҡ йорттар ҡалҡып сыға. Ауыл алты урамдан тора: Салауат Юлаев, Нөгөш, Мәктәп, Йәштәр, Ҡаран, Тау. Барлығы 127 йортта 441 кеше йәшәй. Һөрөнтө ерҙәр булмау сәбәпле, халыҡ башлыса картуф һәм башҡа төр йәшелсә-емеш үҫтереп көн итә.

Ауыл тарихын өйрәнеүҙең иң ҙур ҡимммәттәренең береһе булып халыҡтың ырыу составы тора. Башҡорт ырыуҙарының этник тарихын өйрәнгәндә шәжәрәләр ҙур роль уйнай. Шәжәрәне һәр ырыу төҙөгән. Бындай шәжәрәләргә ауылдың барлыҡ ир еңесенән булған кешеләре ингән. Сөнки һәр ир кешенең аҫабалыҡ хоҡуғы билдәләгән был шәжәрәләр, һәм ер ир затына бүленгән. Брәтәк ауылы аҫаба Ҡарағай - Ҡыпсаҡ ырыуы ерҙәрендә урынлашҡан. Бөрйән ырыуы ерҙәре Оло Нөгөш башына тиклем ерҙе биләй. Көнсығышта Тамъян - Түнгәүер ерҙәре. Тарих белгесе Рим Зәйниғәбитдин улы Янғужиндын раҫлауынса, XIV быуатта күсеп ултырыусы ҡатайҙар тамъяндар менән аралаша. Һөҙөмтәлә теле, мәҙәниәте уртаҡҡа әйләнә. Инйәр буйы ҡатайҙарын Инйәр ҡатайҙары тип йөрөтәләр. Ошо ҡатайҙар менән тамьян-түңгәүерҙәр сиктәш булған. Сик билдәләгән ваҡыттағы тарихи мәғлүмәттәр һаҡланып ҡалған. Ҡунҡаҙай халыҡ телендә ваҡыт үтеү менән үҙгәртелгән, шымартылған. Ә ул ”Күн, ҡатай!”- булыуы мөмкин. Йәнәһе, ҡатайҙарҙан ризалыҡ алғандар тамъяндар. Икенсе версияһы: күн үлсәү бирәмеге булып торған. Шуға ***Кунҡатай*** булған.

Һуңынан район административ бүленеш мәлендә район сиктәрен ошо билдәләмәләр аша үткәрәләр. Ырыу ерен билдәләүсе сик бағанаһы ***“Аҡ бағана”*** тип йөрөтөлгән. Бөрйән

районының сиге Брәтәк аша үтмәгән. Нөгөштөң уң яғы юрматыларҙың Ҡыпсаҡ тармағына ҡараған Гәрәй (Кирәй) ырыуы ерҙәренә керә. Шәжәрәләрҙә куренеүенсә, ҡыпсаҡтар Башҡортостанға көньяҡтан килгән. XIII-XIV быуаттарҙа ҡыпсаҡтар тотош Урал алдына һәм Ағиҙел менән Ыҡ йылғаһы араһына килеп ултырған. Артабан, Ағиҙелде аша сығып, уның үрге ағымына нығынғандар. XVII-XVIII быуаттарҙа ҡыпсаҡтар Ағиҙелдең үрге ағымында, Һаҡмарҙың көнъяғында күпләп йәшәгәндәр.

Уларҙың ауылдары Дим тамағында ла, Туҡ, Соран, Ырғыҙ һәм Кәмәлек буйҙарында йәйелеп ултырған. Көньяҡ Уралда ҡыпсаҡтар төп өс төркөмгә бүленгән: төньяҡта – ҡарағайҙар һәм гәрәйҙәр, урта өлөштә – һыуындар, бошмандар, сәңкемдәр, көньяҡта ҡарағай - ҡыпсаҡтарҙың төп йәшәү урыны булып Башҡортостандың көньяҡ-көнбайыш һәм көньяҡ райондары тора. Ҡыпсаҡтарҙың тамғалары Тимер ауылы архив материалдарына ҡарағанда, Ҡарағай - Ҡыпсаҡ ырыуына ҡараған Тимер ҡарттың улы Ҡыуаҫыл Исламбай ауылына нигеҙ ҡора. Бикташ ауылына ла Тимерҙән килеп йәшәй башлайҙар. Ҡыуаҫҡолдан Мырҙағоловтар тарала. Көләбә, Ҡыҫыҡҡа ла тимерҙәр 1834 йылдарҙа нигеҙ ҡора. Ә Брәтәк ауылына Исламбайҙан күсеп ултырылар. Ауылға тәүге күсеп ултырыусылар, Исламбайҙан 5 кеше – Дауыт, Нәби, Хисмәт, Аҫҡарҙан 1 мулла, Әрҙәкле моронона нигеҙ ҡоралар. Шәжәрәлә күренеүенсә, Тимер – Ҡыуаҫҡол – Мырҙағол – Дауыт – Ғиниәт – Низам. Низам бабай аҙаҡ, атаһы үлгәс, Ҡыҫыҡҡа күсә.

Брәтәк ауылының тәүге исеме ***Ятап*** була. Ауыл аша үткән тотҡондарҙы тотоу өсөн махсус рәүештә төрмә эшләгән булған. Тотоп оҙатыу өсөн тотҡондарҙы этап менән ҡыуғандар. Ятып ял итеү өсөн генә эшләнгән төрмә булғас, ***ятаҡ*** тип йөрөтөлөүе лә мөмкин. Этап та, ятаҡ та бер үк ваҡиғаларға барып тоташа. Шуға ике исем дә дөрөҫ һымаҡ: Этап – Ятап, Ятаҡ – Ятап. Ошо исем менән 20-се быуат башына тиклем атап йөрөтөлә. Аҙаҡ ауылға йылға исеме бирелә. Документтарҙа ошолай теркәлә.

Брәтәк ауылы Белорет – Стәрлетамаҡ трактында урынлашҡан. Был бик боронғо юл. Был юл халыҡ телендә ***"Екатерина юлы"*** тип тә йөрөтөлә. Юл һалыу тарихы Әүжән-Петровск заводы менән бәйле булырға тейеш. Берг-Коллегияның 1753 йылдың 16 ноябрендәге указына ярашлы Әүжән йылғаһы буйында купец К. Матвеев тарафынан заводҡа нигеҙ һалына. 1755 йылда завод эшләй башлай. Ҡағы заводы 1769 йылда Е.Н. Демидов тарафынан төҙөтөлә. Егәҙе ауылы һәм заводы 1890 йылда барлыҡҡа килә. 1774 йылдың 17 октябрендә полковник А.Т. Соколов-Хлопуша, 1774 апрелендә Емельян Пугачев үҙе килә. Завод артиллерия бомбалары эшләй башлай. 1774 йылдың декабрь баштарында Салауат Юлаев етәкселегендә башҡорт отряды була. Белорет – Стәрлетамаҡ тракты иң тура юл булғас, Брәтәк аша Пугачевтың да, Салауаттың да үтеүе ихтимал. Был юл башҡорттарҙың борондан уҡ төп сауҙа, ырыу-ара аралашыу юлы булып та тора. Ауылға яҡын һәм ауыл аша үткән юлдар берәү генә түгел – улар бик күп. Ләкин хәҙер уларҙы ағас ҡаплаған. ***Исраҡ юлы*** Оло Ялан башынан үтә. Бер осо менән Иҙел башына сыҡһа, икенсе осо ошо юл буйында йәшәгән ауылдарҙы тоташтыра. Исраҡ юлын Мүскә ауылы аша үткән өлөшөн ***Барый юлы*** тип тә йөрөткәндәр. Икенсе төрлө ***Бур юлы*** тип тә атағандар, сөнки ат ҡараҡтары ошо юлдан урланған малды ҡыуғандар. Табын юлы Әүжәндән ***Тайбаҫҡан яланы*** аша (урыҫтар атамаһы Казенный) Усулкаға сыҡҡан. Христиандар ошо юл менән Әүжәндән Усулкаға ғибәҙәт ҡылырға йөрөгәндәр. Шулай уҡ сауҙа ла иткәндәр. Һуңынан Брәтәк, Аҫҡар, Ташлы, Ҡурғашлы ауылдары аша Егәҙегә күмер ташығандар. Был юл Брәтәк-Волков аша Ҡуңҡаҙайға, Мүскә-Егәҙегә сыҡҡан. Ошо юлды хатта Бөйөк Ватан һуғышында, аҙаҡҡы осорҙа ла ҡулланғандар. Ишле менән Тукан араһында ***Һарыялан*** тип аталған тимер юл станцияһы булған. Ауыл сауҙа итер өсөн иң уңайлы ерҙә урынлашҡан. Берҙән, ике ҙур йылға ҡушылған урында урынлашҡан. Йылғалар үҙе транспорт ролен үтәгән. Йылғалар һал ағыҙыр өсөн мул һыулы булған, балыҡ мыжғып торған. Ҡуйы урман хужалыҡ итеү өсөн бик тә уңайлы булған. Шуға ла халыҡ күпләп күсеп ултырған. Башҡорттар Әүжән, Ҡағы, Ҡотҡор, Үҙән заводтары төҙөлгәс, күсенә башлаған да инде. [1]

Брэтэк ауылының килеп сығыу бәйле легенда

Беҙҙең халыҡта ер-һыу атамаһының килеп сығыуына бәйле легендалар бик күп. Брэтэк һүҙенең килеп сығыуын халыҡ ошолай һөйләй.

Элгәре Аҫҡар ҡарт хәҙерге Әбйәлил районы элекке Түңгәүер волосында йәшәгән. Уландары үҫкәс, ул яңы ергә күсеп ултырырға булған. Ер һайлағанда "Һайыҫҡан шыҡырыҡлаған урында әрәмә булыр. Әрәмә булған ерҙә һыу булыр"- тип киҫәткән улдарын ул. Бара торғас, күрәләр, бер урында һайыҫҡандар туй ҡора, ти. Барһалар, ысынлап та, әрәмәлек менән ҡапланған ике йылға ҡушылып ағып ята икән. Аҫҡар ҡарт: "Ауылға, урынды ошонда һайлайбыҙ,"- тигән. Ишле ғаилә бер ауыл булып төпләнгән. Йылғаларға Кесе Нөгөш һәм Оҙон ялан тип исем биргәндәр, ауыл Аҫҡар тип аталған. Уларҙың ҡошо – һайыҫҡан, ағасы – ерек, тамғаһы – ай булған.

Бер көндө Аҫҡар ҡарттың Арыҫланғол исемле улының Айбикә исемле ҡыҙы шартыйға киткәндән ғәйеп була. Тау һыртында шартый бик уңған була. Ҡыҙҙар шул яҡҡа киткән була. Ҡараһалар, Айбикә юҡ. Ҡайтып әйткәндәр. Эҙләргә һыбайлылар сыҡҡан, бөтә ерҙе иңләп һөҙөп сыҡҡандар, үҙҙәре ҡысҡырғандар. Шулай эҙләй торғас, тау йылғаға килеп терәлгән. Ағай-эне кәңәшләшеп, йылға буйын эҙләгәндәр. Бара торғас, (күрәләр) йылға ситендәге тамырға эләгеп торған сепрәк күргәндәр. Был Айбикәнең күлдәк итәге булған. Һыбайлылар йылға түбәненә сапҡандар һәм оло һыуға килеп сыҡҡандар. Был оло һыу Оло Нөгөш икән. Эҙләүселәр шул урында туҡтағандар, Айбикәнең бер итәге генә тороп ҡалды,"- тип уфтанған атаһы. Ошо дәүерҙән алып Айбикәнең күлдәк итәге табылған ***"Бер итәк йылғаһы"*** тип атағандар, һуңынан Бритэк – ***Брэтэк*** тип ҡалыплашҡан.

Айбикә юғалған тауҙы Айбикә тауы тип атағандар. Һуңынан Брэтэк йылғаһы тамағына Ташлы, Ҡурғашлы, Бикташ, Аҫҡар ауылдарынан ҡайһы бер ғаиләләр күсеп ултырғандар. Ауылға йылға исемен ҡушҡандар. Ошо дәүерҙән бирле ауылды Брэтэк тиҙәр. Шулай итеп, Брэтэк ауылына нигеҙ һалыусылар булып Дауыт, Нәби, Хисмәт бер туғандар Көмөшбай һәм Алтынбай булған. Бөтәһе алты өй. Береһенең йорто хәҙерге Фәхрийәнов Ғилфандың баҡса тирәһендә, икенсеһе Ғәләметдинов Рәшиттең әлеге йәшәгән урынында була. Брэтэк ауылы тарихын яҙғанда күрше ауыл тарихтарын да иҫәпкә алырға кәрәк. Сөнки күсеп ултырыусыларҙың күбеһе Аҫҡар Тамъян-Түңгәүер сығышлы. Аҫҡар ауылының өс йәйләүе булған, аҙаҡ өсөһө лә ҡышлауға әйләнгән: Ташлы, Ҡурғашлы, Ҡарағай йорт (Бәләкәй Брэтэк). Брэтэк йылғаһының башына урынлашҡан. (Ташлы, Ҡурғашлы) Ташлы ауылына нигеҙ һалыусы Шахморат исемле кеше булған. Әхмәҙуллиндәр тамыры шул кешегә барып тоташа. Шахмораттың улы Айнулланан Ғәйнуллиндар тарала. Шахмораттың өсөнсө улы Фәхритдин. Фәхритдиндән Фәхрийәновтар, Айнулланың улы Ғәләметдиновтар тарала. Урыҫтар Ташлы ауылын "Шахмораткин" тип йөрөткәндәр. Ташлы ауылының иң бай кешеләре Хәсән ҡарт, Әхмәҙи ҡарт булған. 200-250 –шәр баш йылҡы тотҡандар. "Бер осо кәртәлә булһа, икенсе осо Сауҡа тамағында булған йылҡыларының. Революциянан һуң Ташлы ауылы кешеләре күпләп Брэтэккә күсеп ултыралар. Ситдиков Ғибәҙәй Ташлыла йәтим булыу сәбәпле Һатлыҡ исемле байҙа малайлыҡта йөрөй. Бай уны ағас юнырға, солоҡ ябырға өйрәтә, аҙаҡ был Ғибәҙәйҙең төп кәсебенә әйләнә. Уның бер туған ҡустыһы 1914 йылғы һуғышта һәләк була. Ғибәҙәй Сәхибә исемле ҡыҙға өйләнгәс, Брэтэккә күсә. Уның бер кәзәһе генә була. Күрәһең, ауыл да ярлыһы ла, байы ла булған. Ошо осорҙа Фәхрийәнов Ҡотлоғәлләмкүсеп килә. Ул Шәрғиә исемле ҡыҙға өйләнеп, Йәрмөхәмәтова Фәниә өйө урынында йәшәй.

XX быуат башында Әүжән, Ҡотҡар, Ҡағы заводтары ябыла. Урыҫтар мал аҫрауға, йәшелсә үҫтереүгә тотоналар. Урыҫтар төрлө юлдар менән башҡорт ерҙәренә күсеп ултыралар. Быуат башында Волков йәйләүендә генә лә 24 урыҫ балаганы булған. Үҙ ерҙәренән мәхрүм ҡалған башҡорттар ауылда әҙселектә ҡалалар брэтэк ауылында был осорҙа 18 урыҫ йәшәгән йорт һәм 8 башҡорт йәшәгән йорт була.

Башҡорттар һунарсылыҡ, малсылыҡ, солоҡсолоҡ менән шөғөлләнгәндәр. Мәғлүм булыуынса башҡорт бер көндө 2-3 солоҡто (аҫылынған килеш) үрҙә баҫып соҡой алған. Бер ағаста хатта икешәр солоҡ япҡандар. Солоҡҡа менер өсөн баҫҡыстар уйылған, баҫҡыс эшләнгәндәр. Башҡорттар шулай уҡ дегет ҡайнатҡандар. Ҡайын туҙынан таҙа дегет, сайырҙан сайыр дегете алғандар. Таҙа дегеткә һорау ҙур булған. Мейесте ҡаҙ йоморҡаһы һымаҡ эшләгәндәр. Аҫтағы тишектән дегет ағып сығып, улаҡ буйлап мискәгә төшкән. Туҙ ҙа, сайыр ҙа ваҡлап ултыртылып тығыҙлап тултырыла. Тишеге 7-8 см, мейестең тәрәнлеге 3 метр, киңлеге 2,5 -3 метр. Туҙ, сайыр ни саҡлы ваҡ булһа, дегете шунса күп сыҡҡан. Шулай уҡ башҡорттар күмер яҡҡандар һәм үрҙә әйтелгәнсә, Егәҙегә сығарып һатҡандар. Урыҫтар башҡорттарҙың аҫабалыҡ хоҡуғын һаҡлаусы ер-һыу атамаларын белгәндәр, тик үҙҙәренсә үҙгәрткәндәр: ***Дауыткин, Әминкин, Хисмәткин.*** Пешетков Осип Нөгөш күпере эргәһендә утар булып ултыра, аҙаҡ Брәтәккә күсеп ултыра, магазин тота.

Башланып киткән граждандар һуғышы ауыл тыныслығын боҙа. Брәтәк ауылы, ***Ҡарағай йорт*** тирәһендә ҡаты һуғыштар була. Ул ултырған урынды халыҡ әлеге ваҡытта ***Үҫем*** ултырышы тип йөрөтә Ауылды йә ҡыҙылдар, йә аҡтар баҫып ала. 1918 йылдың 3 авгусында Блюхер етәселегендәге 10 меңлек партизандар армияһы ҡыҙылдарға ҡушылыр өсөн үҙенең “атаҡлы” рейдына сыға. Рейд аҡтҡр тылынан Белорет – Үҙән – Ҡағы – Үрге Әүжән – Брәтәк – Ҡолғона – Маҡар – Богоявлин – Иглин – Көнгөр маршрутында үтә. Уларҙың тәртипһеҙ күсенеүен Башҡорт армияһы күҙәтә бара һәм Өфөгә үткәрмәй. 1918 йылдың 5 авгусында Брәтәк ауылында туҡтай. Аҡтар менән көслө һуғыш була. Уның тарихын ауыл эргәһендәге окоп-траншеялар һәм әлеге ваҡытта ла табылған мылтыҡ-ҡоралдар, боеприпастар һөйләй. Блюхерға йәнәшә Муса Мортазин үҙенең бригадаһы менән килә. Ул әгәр ҙә Блюхер башҡорт ауылына тейһә, уны тар-мар итергә тейеш булған. Муса Мортазинды 1937 йылда ҡулға алынғас: “Әгәр мин Блюхерға ҡаршы булһам, унан бер нәмә лә ҡалмаҫ ине. Ҡыҙылдарға ҡушылырғамы, юҡмы тигән һорау борсоно мине,”- тигән. 1918 йылдың декабрендә Яңы Һәйет ауылына ҡыҙылдар килә. Ауыл халҡы аҙыҡ-түлекте кәртә-ҡура тирәһенә йыйып бөтә. Ләкин ҡыҙылдар китергә ашыҡмай. Һәр йортҡа 9-12-шәр урынлашып ҡышлайҙар. Гөлмәнүәр инәй һөйләгәндән: “Бесән наҡыҫ булыу сәбәпле, аттар сапсынып, ҡар аҫтынан бер батман май ҡаҙып сығара. Шунан башлана ауылды талау. Байтаҡ ирҙәр атып үлтерелә. Һыу эсергә алып барған һыйырҙың башына һуғалар ҙа һуйып ашайҙар. Хәлдән тайған халыҡ ***Нөгөш йорт***ҡа (Лапшин) ҡаса. Быға үс итеп, ҡыҙылдар Һәйет һәм Ҡоҙаш ауылдарына үрт (пожар) һалалар. Брәтәктә урыҫтарҙың күпләп йәшәүе уны һәләкәттән ҡотҡара. Ауылдарҙың бер аҡтар, бер ҡыҙылдар ҡулына күсеүе халыҡты шул шарттарға яраҡлаштырға өйрәтә. Һөйләүҙәргә ҡарағанда, Аҫҡар ауылының Иманай исемле кешеһе аҡтарҙы аҡ папаха, ҡыҙылдарҙы буденовка кейеп ҡаршылай. Ауыл кешеләрен юл күрһәтергә, ылауға алып китәләр. Был кешеләр эҙһеҙ юғалған. 16 йәшлек Фәтҡулла Аҫҡар аша Бөрйәнгә юл күрһәтә китә. Атын алып ҡайтып, үҙен ҡайтаралар. Фатирҙа яткан ҡыҙылдар киткәндә фатир хужаларын атып киткәндәр. Брәтәк ауылы, Ҡарағай йорт тирәһендә ҡаты һуғыш була. Аҙаҡ кешеләр, патрондар ямғыр урынына шыптырлап яуа ине, тип һөйләгәндәр. Халыҡ өй баҙына ҡасып һаҡланған.

Граждандар һуғышынан һуң ауыл халҡы элекке кәсептәренә тотонған. 1930 йылда ауылда “1 Май” колхозы ойошторола. Селеверстов Петр уның тәүге председателе була. Ул һуғышта үлеп ҡала. Икешәр һыйырлының бер һыйырын, ә аттарҙың бөтәһен дә колхозға алалар. Ҡоҙош ауылы кешеләрен Брәтәккә күсерәләр һәм колхозға инәләр: Ғәлләметдинов Мөхәмәтғәле менән Хәлфетдин бер туғандар, Атауллин Атаулла, Атауллин Мөхәммәтғәле, Ҡәйепҡолов Кираметдин. Ташлынан Брәтәккә күсерелеүселәр: Ситдиков Вәли, Ғөзәйер, Әбүзәр Зөлҡәрнәй улдары, Ситдиков Ғибәҙетдин балалары менән – Зиннур, Хәлфетдин (ауылдың тәүге һатыусыһы, һуғышта үлә), Әхмәтзата, Ғызмитдин. Ғызмитдин тәүҙә Ҡурғашлыға, аҙаҡ Брәтәккә күсә. Брәтәктән колхозға инеүселәр: Йәрмөхәмәтов Әлмөхәмәт, Халиков Хаким, Хөснөтдинов Мостафа әбейе Кәримә менән. Оло Ялан, Хисмәткин, Аҡһыйыр яландарында арыш, һоло, тары сәскәндәр. Нөгөш башында арыш сәсәләр. 47 эҫкерт арыш була.

1933 йылда раскулачивание башлана. Коретников Федот, Пешетков Осип, Петренконың өйҙәрен, колхоз хужа булып, торг менән колсхозсылырға һата.

Брәтәк Киров колхозының бригадаһы була. 1937 йылда КТФ (конно-товарная фабрика) төҙөлә. Ат һарайы 10*100 ҙурлыкта, 100-ҙән артык ат була. 3 йортта күсеп килеп йәшәйҙәр: Фәхрийәнов Ҡотлоғәлләм ғаиләһе менән, Харрасов Кираметдин ҡатыны Гөлмәҙинә, балалары Әхмәт, Ҡауый, Мәҙинә менән Аҫҡарҙан күсә, Йәрмөхәмәтов Дәүләтғәле ҡатыны Нәбиуллина Кинйәбикә менән, Шакиров Абдрахман ҡатыны Ғәлиә, балалары менән. Бер өй бүлмәле була. Берәүһендә Сафин Әптрәкип, икенсеһендә Шәмсетдинов Сәләхетдин йәшәй. Райондан килеп аттарға тамға һуғыла. Бөйөк Ватан һуғышы башланғанға тиклем Брәтәктә 29 хужалыҡ иҫәпләнә.

Бөйөк Ватан һуғышы осоронда башҡорт атлы дивизияһына аттарҙы алып китәләр. 15-әрләп 3-4 мәртәбә алалар. 1941 йылда ошондағы атты менеп Ситдиков Ғөзәйер ҙә һуғышҡа китә. 1947 йылда ауылға ҡайталар. Сөнки ауыл урманлы ерҙә булғас, малсылыҡ ҡына файҙалы булмай. Брәтәккә һәр төр малдың өсөнсө өлөшө тейә, тик бейә малы бирелмәй. Брәтәктә “1 Май” промартеле төҙөлә. Беренсе председателе Яңы Мөсәт кешеһе Ҡасҡынбаев Ғыззитдин була. Ул ҡап һуғырға өйрәтә. Бер станда 2-шәрләп 25-шәр ҡапты бер көндә һуғалар. 1948 йылда Йәғәфәров Ниғмәт производство мөдире булып килә. Ҡапты өйҙә, избенкала һуғалар, 5-шәрен бергә тегеп, атҡа 100 бәйләм тейәп ташыйҙар. Ҡапты Находка портына оҙаталар. Шул уҡ ваҡытта пряж боралар. Пряжды виноград бәйләргә Урта Азияға, Малдоваға ебәрәләр. 3-сө председатель булып 1950 йылда Ибраһимов Әмир, 4-сеһе Шәйәхмәтов Зиннур 1954-1955 йылдарҙа Әбйәлил районынан килә. 1953 йылда Халитов Әптрәхим бухгалтер булып килә. 5-се председатель 1955-1956 йылдар Өфөнән Шәмсетдинов, 6-сыһы Мәксүт кешеһе 1956 йыл Нәҙершин Ғиниәт, 7-сеһе 1956-1958 й.й. Федоров Николай, 8-се председатель 1958 йылда Халитов Әптрәхим һайлана. Артелдә бүрәнә лә ҡырҡалар. Ағас ҡырҡырға Хәсәнов Ғәлиәхмәт, Шакиров Абдрахман, Фәхрийәнов Ҡотлоғәлләм, Йәғәфәров Ниғмәт урманда ятып йөрөгәндәр. 1951 йылға тиклем таҡтаны станға һалып ҡул менән бысалар. 1951 йылда Ишембайҙан пилорама килтерәләр. Механик Зарипов Рәхимйән төҙөп ултырта. Ҡул менән көнөнә 5 кубометр таҡта бысылһа, хәҙер эштәр еңеләйә. Тәүге машинистар Юлдашева Сәлимә, Гаврилов Иван була. Сәфиуллин Әбделхәй 1955-1956 йылдарҙа Өфөлә уҡып право алып ҡайта. 1962 йылда У-5 двигателе ултыртыла. 1-се машинист Әрмет кешеһе, һуңынан Фәхрийәнов Ғилман була. 1954 йылда генератор менән локомобиль аша ауылға беренсе электр уты бирелә. Ҡап һуғыр өсөн 1956-1957 йылдарҙа мастерская төҙөлә. 1947-1953 йылдарҙа Ситдикова Зәкиә бухгалтер була, аҙаҡ кассир итеп күсерелә. Һалабаш һалғас, бесән башлана. 25 һыйыр була. Өлкән һауынсы Кинйәбикә инәй.

1960 йылда “1 Май” промартеле 200 мең һум табыш менән көсләп Фрунзе исемендәге колхозға ҡушыла. 1956 йылға тиклем Фрунзелә председатель булып Ғәбитов Әхмәҙулла эшләй. 1956 йылда Киров менән Фрунзе ҡушыла. Председателе Ғәбитов була. 1960 йылда 3 ауыл бер колхозға берләшкәс, Ишембай районынан Туҡтамышев Әнүәр председатель булып килә. 1962 йылдың февраль айында Хәлитов Әптрәхимде председатель итеп һайлайҙар. Аҫҡар һәм Исламбайҙа 135 һауын һыйыры була. Аҫҡар фермаһы Ташлыла, Исламбайҙыҡы – Көләбәлә, ә 1964 йылда Брәтәк өсөн Волков фермаһы төҙөлә. Липецк өлкәһенән 50-ләләп тоҡомло тана, Көйөргәҙе районы Таймаҫ совхозынан 40-50 семинталь тоҡомло таналар алына. Тәүге йылы 4 группа, 15-шәр баш һыйыр менән, була. Брәтәктә бригадир Атауллин Хафиз була. Колхоз булғас та әле 1-2 йыл һалабаш һалалар, йүкә килеш һатып кәсеп итәләр. Ферманың тәүге мөдире Йәғәфәров Яхья, тәүге һауынсылары Гөлмөһөр Ноғоманова, Ситдикова Ғәффә, Зәкиә, Фәхрийәнова Ғилмияза, Мәстүрә. Йәғәфәрова Таһира – сепараторсы була. Ҡыҫыкта тоҡомло таналар көтөлә. Мал күбәйгәс 120 баш тирәһе резерв булдырыла. 1977-1978 йылдарҙа 1300-1400 тонна ит тапшырыла. Мал ауырлығы 440 кг тирәһе була. Һөт һауыу буйынса 1-се урын өсөн 1969 йылда БАССР-ҙың 50 йыллығына, малсылыҡтағы уңыштар өсөн 1968 йылда мәңгелеккә ҡыҙыл Байраҡтар бирелә. Әлеге көндә район музейында һаҡлана. Таҡта бысыу эше дауам итә. Мәҫәлән, 1962 йылда бер йылда 1200 кубометр таҡта бысалар. 1976 йылда ауылға даими тәъмин итеүсе электр уты килә. Колхоздың иң тәүге машинаһында Бөрйән районының беренсе шоферы Ғүмәров Хажғәле эшләй. Ул 1947 йылда ауылда йәшәй башлай. Иң тәүге тракторсылар Сәғитов Факил, Өмөтбаев Мөхәммәт, Фәхрийәнов Ғилман 1956 йылда эшләйҙәр. 1964 йылда

Брәтәктә лесхоз асыла, лесничийы Жаринов була. Брәтәк ауылы йөк ташыр өсөн уңайлы урында урынлашҡан. 1946 йылда һыйыр менән он ташый башлайҙар. Зариповтарҙың избенкаһы склад була. 1951 йылда Атауллин Хафиздың төҙөлөп бөтмәгән өйөнә һалалар. 1953 йылда база төҙөлә, мөдире Ҡасҡынбаев Ғызетдин. Аттар менән Брәтәктән Стәрлетамаҡҡа Маҡарҙа бер генә ашатып барып инәләр. Ғәлиәкбәргә йөктө һаллап ташыйҙар. 1953 йылда йөктө машина менән килтерә башлайҙар. Тәүге мәҙәниәт йорто Брәтәк күпереенең аръяғына төҙөлә. Клуб мөдире Кәримова Роза. Аҙаҡ Осип ҡарттың йорто ла клуб булып тора. 1974 йылда шул урынға яңыһы төҙөлә. Тәүге тауышһыҙ фильмды 1947 йылда Ишбаев күрһәтә. 1949-1950 йылдарҙа Слепов Василий эшләй. "Тауышлы" фильмды 1954-1958 йылдарҙа Маликов Мөжәүир күрһәтә. 1958 йылдарҙа газопровод торбалары ауыл янынан үтә. Икенсеһе "Бохара-Урал" 60-сы йылдың урталарында һалына. [1]

Брәтәк утары

Брәтәк утары 1917 йыл ихтилалға тиклем Ырымбур губернаһы Орск өйәҙенең Ҡарағай – Ҡыпсаҡ волосына инә. 1900 йылда унда 13 йортта 58 кеше йәшәй. Өйәҙ ҡалаһына тиклем 353, волость идаралығына 123 саҡрым була. 1900 йылда полиция волость һәм станица идаралыҡтан йыйылған мәғлүмәттәр буйынса Ырымбур губерняһы ауылдары исемлегенән, 70 –се бит.

Революциянан һуң Брәтәк утары Тамьян-Ҡатай кантонының Тамьян- Түңгәүер волосына инә. 1920 йылда унда ни бары 6 ғына өй була, 27 кеше йәшәй, күбеһе урыҫтар. 1925 йылға хужалыҡтар һаны 12-гә етә.

Башҡортостан ауылдары, III бүлек, Башреспублика, 1926 йыл.

1926 йылғы халыҡ һанын алыуҙа Брәтәк утарында 18 хужалыҡ, 88 кеше, шул иҫәптән 43 ир-ат, 45 ҡатын-ҡыҙ теркәлә.

1989 йылғы халыҡ һанын алыу буйынса Брәтәк ауылында 380 кеше, 1999 йылдың 1 ғинуарына 466 кеше йәшәй, бөтәһе лә тиерлек башҡорттар. [2]

Брәтәк ауылы тирәһендәге ер-һыу атамалары

Ятап. Брәтәк ауылының тәүге исеме Ятап була. Сөнки ауыл аша үткән тотҡондарҙы тотоу өсөн махсус рәүештә төрмә эшләгән булған. Тотоп оҙатыу өсөн тотҡондарҙы этап менән ҡыуғандар. Ятып ял итеү өсөн генә эшләнгән төрмә булғас, Ятаҡ тип йөрөтөлөүе лә мөмкин. Этап та, Ятаҡ та, бер үк ваҡығаларға барып тоташа. Шуға ике исем дә дөрөҫ һымаҡ: Этап-Ятап, Ятаҡ- Ятап. Ошо исем менән ауыл егерменсе быуат башына тиклем атап йөрөтөлә. Аҙаҡ ауылға йылға исеме бирелә. Документтарҙа ошолай теркәлә.

Йылға, шишмә исемдәре

Брәтәк (Берәтәк) йылғаһы – "Әтәк"- "Итак"- тау итәге тигәнде аңлата. Йылға ҡайһылыр тауҙың бер итәгенән башланып ағалыр, тиҙәр. Исем аҙаҡ үҙгәрә биргән "Брәтәк" тип йөрөтөлә башлаған. Брәтәк йылғаһы Оло Нөгөшкә ҡоя шул урында барлыҡҡа килгән ауыл йылға исеменән Брәтәк тип атала.

Тау, ҡая исемдәре

Әрҙәкле тауы (I вариант). Борон-борон заманда йәмле Нөгөш һәм Брәтәк буйҙарында йәшәгән, ти, бер ауылымдың ҡарт инәйе. Ҡартайып бөтһә лә бик егәрле, етеҙ булған, ти. Эште еренә еткереп эшләүе, уйлап ҡына һөйләүе, татлы телле, изгелекле булыуы менән йәштәргә өлгө булған. Был инәйҙең насар яғы ла булған икән, тик быны берәү ҙә белмәгән. Инәй усал булған.

Бер көн берҙән бер бөртөк һарығын урманға сығарып ебәргән. Бер ҡауым ваҡыт үткәс, артынан эҙләргә сығып киткән. Тап ошо ваҡытта ауылдан бер бабай ҡапҡан һалған. Ҙур айыу өсөн булған икән. Һарыҡтын зыңҡылдап ҡысҡырыуына, әбей йүгереп килеп еткән. Ҡараһа, ни күҙе менән күрһен - һарыҡ ҡапҡанда тора. Бабай ысҡындырайым тиһә, ҡарсыҡ:

- Кәрәкмәй миңә ундай һарыҡ, - ти. Ә үҙе хихылдап көлә лә көлә, ти. – Йә, ҙур булдымы айыуың? Тап үҙеңә оҡшаған, яуыз, булмаған нәмәмде ҡоротоп йөрөйһөң бында, ошо тирәлә айыу йөрөй тиһеңме, лутсы ана өй башыңа һал, төндә бал урларға менер ул, - тип илап та ебәрҙе, ти.
– Ғәфү ит, инәй, белмәнем шул, - ти ҡарт һунарсы.
– Белмәнем шул, әйтеүе рәхәт, ә бына һинеке шунда ятһа, һин минең башты ярыр инең, ә мин наҙанмын, ғүмерҙә урманда йөрөтмәгән һарыҡты сығарып, - тип шыңшыны, тағы әллә нимә нығырланы, ләкин бер нәмә лә аңлашылманы.

– Ярай инәй, бер һарыҡ бирермен, минең өсәү бит, - тип һалды ҡарт, ләкин инәй әрләүен дауам итеп.
– Кәрәкмәй, бер тин ине, кәрәкмәй, үҙең аҫра ҡороҡҡас… - тине лә шымып ҡалды, әҙерәк көс йыйып алғас:

- Бар ҡайт!- тип асыулы ҡараны. Бабаҡай ҡайтыу юлына ыңғайланы, ә үҙе:
- Әрҙәтте бит, әрҙәтте, тип һарыҡты әрләй, ти. Шунан "Әрҙәтте" һаҡау ғына була, лутсы "Әрҙәкле" тип әйтәйек тигәндәр.

Тау Әрҙәкле исемен алған, ә теге инәй яратҡан һарығын аҫраған. Һарыҡ та күп көттөртмәгән. Бер ни ваҡыт үткәс, инәйгә ике бәләкәс бәрәс тә биргән.

Бына шулай ул һарыҡтың нәҫелдәре әле лә бар, ти. Улар Әрҙәкле тауының легендалары булып, ер аҫтында йәшәй тип уйлайҙар.

Әрҙәкле (II вариант). Борон-борон заманда йәшәгән ти һунарсы ҡарт. Ул ауылда бүреләр малға тейгәс, ҡарт үҙенең кәрәкле әйберҙәрен тотоп урманға бүрегә тәпе ҡорорға киткән. Икенсе көнөнә килеп ҡараһа тәпегә һыйыр эләккән. Был һыйыр яңғыҙы ғына көн иткән әбейҙең берҙә-бер һыйыры була. Әбей быны нык әрләп, ҡарғай. Ҡарт "Әрҙәтте бит, Әрҙәтте," – тип ҡайтып китә өйөнә.

Шунан һуң халыҡ телендә был тау "Әрҙәкле" тип йөрөтә башлайҙар.

Күкәй һәм Бәлә тауҙары. Борон заманда, әлеге Лапшин, элекке ***Нөгөшйорт*** йәйләүендә була был хәл.

Бер бай өсөнсө ҡатынлыҡҡа йәш кәләш алып ҡайта. Ул дала яғынан була. Йәш кәләш беҙҙең яҡҡа өйрәнә алмай, тыуған яғын һағынып көндән-көн һарғая башлай.

Берҙән-бер көндө ул байҙың өйөрөнән иң яҡшы айғырын менеп ҡасырға була. Был эште бай һиҙеп ҡала һәм артынан ҡыуа төшә. Беренсе тауҙы йәш ҡатын сабып төшөп китә. Кәләшенең шәп итеп сабып барғанын күреп бай: "Күкәй һымаҡ тәгәрәп төшөп китте", - тип әйтә. Һәм был тау "Күкәй" тип атала башлай. Икенсе тауға етәрәк байҙың аты һөрөнөп йығыла. "Бына бәлә", - тип ҡайғыра ул. Был тау "Бәлә" тип атала башлай.

Ҡотоҡай баҙы. Бәштин яҡлап та, Әрҙәкле яҡлап та барғанда бер тауҙы осратырға мөмкин. Был тауҙы Ҡотоҡай баҙы тип йөрөтәләр. Хәҙер инде мәрхүм Ҡотлоғәләм бабай дегет ҡайнатыу өсөн, әлбиттә, дегет соҡоро, баҙы кәрәк. Ҡотлоғәләм бабай ҙа дегет ҡайнатыу өсөн уңайлы, тыныс ошо тауҙы һайлай. Был тауҙа баҙ ҡаҙып, ошо шөғөлөн дауам итә. Ҡотлоғәләм бабай үлеп китһә лә, уның исеме тороп ҡала. Исемһеҙ тауға Ҡотоҡай баҙы тип исем бирелә. Ә тауҙағы дегет баҙы әле лә бар.

Айбикә тауы һәм Брәтәк йылгаһы. Был хәл Аҫҡар ауылында була - йәмле йәй айының бер көнөндә ҡыҙҙар үҙҙәре генә йыйылып, шартый йыйырға китәләр. Улар барасаҡ тау алыҫ ҡына, бер ун саҡырым була. Барып еткәнсе улар арыйҙар, ләкин ҡып-ҡыҙыл, ҙур шартыйҙарҙы күргәс, улар кемуҙарҙан шартый йыйырға тотоналар. Улар араһында Айбикә исемле бер бәләкәй ҡыҙ ҙа була. Ул шартый күберәк ерҙе эҙләп, башҡаларынан ситкәрәк китә. Улар шартыйҙы оҙаҡ ҡына йыялар. Һауыттары тулғас, бер урынға йыйыла башлайҙар. Бөтәһе лә йыйылып бөткәс, араларында Айбикә юҡ икәнен һиҙеп ҡалалар һәм уны эҙләй башлайҙар. Уларҙың эҙләмәгән ере ҡалмай, ләкин Айбикәне таба алмайҙар. Ауылға ҡайтып, атаһына-әсәһенә, туғандарына белдерәләр. Улар аттарын менеп Айбикәне эҙләргә китәләр. Эҙләйҙәр-эҙләйҙәр, ләкин табалмайҙар. Бары тик йылға буйында ғына уның бер ботаҡҡа эләгеп йыртылып ҡалған бер итәген генә күргәндәр. Айбикә һыуға батҡан! Туғандары ҡайғырышып ауылға ҡайтып китәләр.

Ошо ваҡиғанан һуң был тауҙы “Айбикә”, ә йылғаһын “Бер итәк” тип йөрөтә башлайҙар. Аҙаҡтан был йылғаның ярына кешеләр килеп ултыра башлайҙар. Бында бәләкәй генә ауыл барлыҡҡа килә. Уны ла “Бер итәк” тип атайҙар. Урыҫтар килгәс, был ауылдың исемен әйтә алмай бер булалар. Улар бары тик – Бритяк тип кенә әйтергә өйрәнәләр. Был исем Брәтәк тигән һүҙгә оҡшап ҡына тора. шуның өсөн башҡорттар “Бер итәк” тигән исемде ҡыҫҡартып “Брәтәк” тип йөрөтә башлағандар. Йылғаның да ауылдың да исеме “Брәтәк” булыуы бөтә ауыл халкына оҡшаған.

Ҡолғиҙәр тауы. Әүәле заманда ярлыларҙың да ярлыһы бер ғаилә йәшәгән, ти. Уларҙың Ҡолғиҙәр исемле ҡыҙҙары ла булған. Үҫәһен үҫеп буй еткергәс, уны ҡартлас кеше һоратырға килгән. Ярлылыҡтан интеккән ата-әсәһе ҡыҙҙы малға алмаштырмаҡсы була. Күпме өгөтләмәһендәр, ҡыҙ риза булмай, ер-һыу илап сығып ҡаса һәм бейек тау башынан түбән ташлана. Ошонан бирле был тауҙы Ҡолғиҙәр тауы тип йөрөтәләр.

Бәштин тауы. Борон заманда йәшәгән ти бер ярлы ғына кеше. Уның өйө лә, ғаиләһе лә булмаған, ул көн һайын байҙарға бил бөккән.

Бер заман ул байға хеҙмәт итеп аҡса булһа ла эшләйем тип эшкә киткән. Бер ай тырышып эшләгәндән һуң бай уға биш тин аҡса биргән. Был мәлдә биш тингә әллә күпме аҙыҡ-түлек алырға булған. Ярлы кешенең ҡыуанысының сиге булмаған. Аҡсаһын кеҫәһенә һалып тау башына менеп киткән. Ҡурай һыҙғыртып төшәйем тип тау башына менеп киткән. Ҡурай янына яҡынлашҡас инде ҡурайҙы ҡырҡып алам тигән арала кеҫәһенән аҡсаһы төшөп китә. Аҡсаһын эҙләп-эҙләп ҡарай, ләкин таба алмай. Таба алмағас, ҡайтып күрше – күләнгә лә әйткән. Улар ҙа эҙләп ҡарағандар, барыбер таба алмағандар.

Ошонан һуң был тауҙы “Биш тин” тип йөрөтә башлағандар, һуңынан “Бәштин” тауына әйләнә.

Төлкөташ. Элегерәк Төлкөсура исемле бер кеше йәшәгән. ул үҙенең мәргәнлеге, оҫталығы менән дан ҡаҙанған. Бигерәк тә уның атына бөтөн кеше һоҡланған. Был аттың исеме Саптар була. Төлкөсура Саптарҙа ғына ултырғанда укты мәргән ата, ат ярыштарында беренсе килә тигән имеш-мимештәр ҙә йөрөгән. Уның атын сит-яҡтарҙан һорап килеүселәрҙә, һатып алырға теләүселәр ҙә етерлек булған. Тик Төлкөсура бәләкәйҙән менеп йөрөгән, үҙе ҡараған атын бер кемгә лә байына ла, ярлыһына ла биргеһе килмәгән.

Бер ваҡыт Йомабай исемле бай үҙ ғәскәре менән Төлкөсураның атын алырға килә тигән шомло хәбәр таралған. Быны белеп Төлкөсура аты менән урманға ҡасҡан. Тик бай ғәскәре уны уны ҡыуып етеп килгән. Төлкөсура аты менән яҡындағы ҡаянан ырғый. Ошонан алып был ҡая Төлкөсура исеме менән атала башлай. Һуңынан Төлкөсура “Төлкөташҡа” ҡалыплашҡан.[2]

Йылғалар

Өстамак. Әүәле бер ауылда йәшәгән ти әбей менән бабай. Булған ти бер матур, етеҙ, аҡыллы, таһыллы улдары.

Шулай бер көндә ауылға ажддаһа эйәләгән тигән хәбәр таралған. Егет өҙмәй ҙә ҡуймай: "Үҙем алышҡа барам", ти икән. Тик атаһы менән әсәһе улдарын бындай үлемесле алышҡа һис кенә лә ебәргеһе килмәгән.

Өс көн, өс төн үткән. Халыҡ һиҙмәй ҙә ҡалған – аждаһа ауылға ябырылған, кешеләрҙе ҡыра башлаған. Бер заман егет ялмауыҙ аждаһа менән алышҡа сыҡҡан һәм теге мәлғүндең өс башын өҙә сапҡан. Аждаһаның кәүҙәһе ауыл уртаһына барып ята. Унын ҡырҡылған муйындарынан һыу бөркөлөп тора икән. Һыу менән бергә аждаһа йотҡан кешеләр ҙә килеп сығалар халыҡ егетте маҡтап күккә сөйәләр.

Үлгән аждаһа кәүҙәһе матур тауға әйләнә. Һыу бөркөлгән ерҙән "Өстамаҡ" йылғаһы ағып сыға. [1].

Екатерина күпере йәки "Әбей батша" юлы

Екатеринаның таулы-ташлы, ҡара урмандар эсенән, йөҙҙәрсә саҡрымдарға һуҙылған юл һалдырыуы ла Башҡортостан байлығын күберәк файҙаланыу маҡсатында эшләнелә. Урындағы эҙәрмәндәр һөйләүенсә, "Әбей батша" юлындағы күперҙәрҙе мәңгелек итеп эшләттергән. Мәҫәлән, Бөрйән районының Брәтәк ауылы эргәһендәге Нөгөш йылғаһы аша һалынған күпер иҫкергәс, яңыһы төҙәлә. Юлсылар, ҙур-ҙур таштарҙы уҡмаштырып төҙөлгән стеналарҙың өс быуат ваҡыт үтеүгә ҡарамаҫтан, һин дә мин тороуына хайран ҡала. Таштарҙы айырылғыҙ кимәлдә тотоу өсөн ниндәйерәк иҙелмә ҡулланыуҙарын фаразлап баш ваталар, һәм белгестәр менән стеналар ныҡлығын ентекле тикшергәндән һуң, күпер балкалары емерелмәҫ мәңгелек стеналарға тоташтырылып, уртанан заманса тимерҙән эшләнгән терәүес ҡорама ғына ҡуйыла...

Һәр нәмәгә ҡарата һаҡсыл ҡараш булғанда ғына беҙ ата-бабалар мираҫ итеп ҡалдырған серле, үҙенсәлекле төҙөлөшлө, күптәр күңелендә ҡыҙыҡһыныу уятҡан, айырыуса әһәмиәтле ҡомартҡыларҙы һаҡлап, йәш быуынға тапшыра алаҫаҡбыҙ [2].

Ялан, туғай исемд әре

Брәтәк йылғаһы буйындағы яландар исемлеге

Фәйҙә һәм Һәтирә. Ҙур яландың яртыһын Фәйҙә, яртыһын Һәтирә бесән сапҡан сабынлыҡтары булған, антропонимдан.

Картуф яланы. "Колхоз" осоро картуф сәскән баҫыу, ороним.

Таллыҡ. (йылғаһы буйлығы тал үҫә), гидроним.

Тәрән соҡор. йылға аръяғы "Колхоз" сабынлығы.

Нәбейкин сабынлығы һәм "Нәбейкин" йылғаһы. Антропонимдан, гидроним.

КТФ ат фермаһы. Утар ултырышы.

"Ногайсыра" йылғаһы. Гидроним.

"Фәниә" сабыны. Фәниә исемле ҡатындың сабыны булған, антропонимдан.

"Сыбаъялан" - боронғо Киров колхоз сабынлыҡтары. Ноғайсыра йылғаһының уң яҡ яланы.

Тәлғәт сабыны. Тәлғәт исеме менән бәйле. Сабынлыҡ, антропонимдан.

Мәрхәбә һәм А.Ғайфулла сабыны. Линия буйында урынлашҡан сабынлыҡтар, антропонимдан.

"Мелигин" утары. Брәтәк ауылы утары.

Әнеүәр сабыны. Әнеүәр исеме менән бәйле. Сабынлыҡ, антропонимдан.

Сафа утары һәм "Сафа" йылғаһы. Сафа исемле ир-ат мал көткән утар, антропонимдан. гидроним.

Ғәбдин яланы. Колхоз сабынлығы, антропонимдан

Мәрхәбә һәм Ғайфулла сабыны. Мәрхәбә һәм Ғайфулла сабыны, антропонимдан.

“Колхоз” сабынлығы. Брәтәк йылғаһының уң яғы кисеү ауыҙы.

“Түңәрәк” ялан. Ялан түңәрәк формаһында булғанға әйтелгән. Колхоз сабынлығы.

“Оло” ялан. Колхоз сабынлығы.

Ишбулды сабынлығы. Ишбулды исеме менән бәйле. Сабынлыҡ, антропонимдан.

Ташлы яланы. Ялан ташлы булғанға әйтелгән, ороним.

“Сауҡа” яланы һәм йылғаһы. Колхоз сабынлығы, гидроним. [1].

Аҡһыйыр яланы. Борон беҙҙең яҡтарҙа бик күп йылҡы, һыйыр малы тотҡан бер бай йәшәгән. Үҙенең байлығы менән генә түгел, усаллығы, һаранлығы, мәкерлеге менән дә даны тирә-яҡтарға таралған кеше булған ти ул.

Байҙың, иҫәбе-һаны булмаған эре малын көтөргә көтөүселәр ҙә кәрәк булған. Ләкин көтөүселәр байҙың ғазаплауҙарына түҙмәй ҡасып торғандар. Бай әленән - әле көтөүсе эҙләргә мәжбүр булған, әммә таба алмаған. Шулай ҙа алыҫтан – Баймаҡ яҡтарынан төҫкә – башҡа һылыу, эшкә тилбер йәш кенә егетте көтөүсе итеп алып ҡайтҡан.

Егет яңы ергә бик тиҙ өйрәнгән һәм ихлас күңелдән мал көткән.

Көн артынан көн үткән. Бер көндө егет көтөүҙе яланға алып сығыр алдынан бер һыйырҙың тулмауына иғтибар иткән. Нindәй һыйыр бит әле?.. Ҡомһоҙ байҙың иң яратҡан, берҙән – бер аҡ һыйыры икән! Егет быға бик ҡайғырған. Бер көн эҙләгән, ике көн эҙләгән, өсөнсө көндө лә эҙләп – эҙләп табалмағас, аҡ һыйырҙың юғалыуы тураһында байға әйткән. Бай бик асыуланған һәм: “Әгәр ҙә – мәгәр ошо ике – өс көн эсендә һыйырҙы тапмаһаң язалатып үлтерәм һине!”- тигән. Егет ике көн эҙләгәс кенә һыйырҙы ялан ситендә үле килеш табып алған. Һыйырының үле килеш табылыуына бай (уға) ышанмаған һәм үҙ – күҙҙәре менән күрергә теләгән.

Үле ятҡан аҡ һыйырын күргәс, бай: “Эй, аҡ һыйырым, аҡ һыйырым!”- тип ҡысҡырып илап ебәргән.

Был ваҡиғанан һуң егет үҙенең тыуған яҡтарына ҡасып ҡайтып киткән. Ә был хәл иһә халыҡ телендә “Һыйыр өсөн илаған бай” тип оҙаҡ йылдар буйына лаҡап итеп һөйләнелгән. Ә һыйыр ятып үлгән ялан ауылдан өс саҡрым алыҫлыҡта “Аҡһыйыр” яланы тип йөрөтөлә башлаған.

Күгәүенле яланы. Элекке ваҡытта Исламбай халҡын күгәүендәр баҫып йонсотҡан. Исламбай халҡы күгәүендәргә ҡаршы һуғыш асҡан. Был һуғыш Ҡыҫыҡ ауылының эргәһендәге бер яланда булған. Ҡайһыныһы суҡмар, уҡ – ян, һөнгө, күҫәк тотоп һуғышырға сыҡҡандар. Был һуғыш ваҡытында Исламбай кешеләренең башлығына ҙур бер күгәүен килеп ҡунған. Теге башлығы күгәүенде осормаҫ өсөн, икенсе берәүһенә бармағы менән ымлап күрһәткән. Ул уғың менән был күгәүенде атып үлтер тип аңлатҡан. Теге кеше күпте уйлап тормаған уҡ менән атҡанда: ”Һеҙҙән дә берәү, беҙҙән дә берәү”- тип әйткән. Шунан бирле Исламбай халҡын күгәүендәр тип, ә һуғыш булған яланды “Күгәүенле” яланы тип йөрөтә башлағандар. [1].

[1]. Тарих уҡытыусыһы Ғүмәров Вәли Ғәле улы 1951 йылғы.
[2]. Р.З Ширғәзин БР Үҙәк дәүләт тарих архивы директоры. Аллабирҙин Дамир Зиннәт улы әҙерләне.

[1]. Ғүмәров Вәли Ғәле улы.

Исламбай ауылы

Хәҙерге Бөрйән районы биләмәһендә XIX быуатта Ҡарағай-Ҡыпсаҡ һәм Бөрйән волостәре вәкилдәре йәшәгән. Һуңынан Түңгәүер волосы кешеләре лә ҡушыла. Тарихи мәғлүмәттәр буйынса 1815 йылдарҙа Стәрлетамаҡ өйәҙенән 20 ғаиләне Бөрйән волосына күсерәләр (сәбәбе билдәһеҙ). Хәҙерге Күгәрсен районында Смак, икенсе исеме Түңгәүер, тигән ауыл бар. Ошо күсеп килгән Түңгәүер волосы кешеләре Бөрйән районының Аҫҡар һәм Мәһәҙей ауылдарына нигеҙ һала.

Ошо осорҙа Нөгөш йылғаһы буйында Бикташ ауылы барлыҡҡа килә. Ауылға нигеҙ һалыусы 76 йәшлек Бикташ Тойғонов, уның Дилмөхәмәт, Юлмөхәмәт, Күжәхмәт, Хәжиәхмәт исемле улдары була. 1834 йылда ауылда 117 кеше, 1859 йылда - 124, 1920 йылда 185 кеше була. Бикташ ауылы йәше буйынса Исламбай ауылынан олораҡ.

1843-1850 йылдарҙа Монасип (Һарт) ауылы кешеләре Исламбай ауылына нигеҙ һала. Ауылдың икенсе исеме - Һарт. 1850 йылда ауылда 20 йорт була, ә 1859 йылда (X ревизия буйынса) 24 йорт булып, 420 кеше, ә 1920 йылғы иҫәп буйынса 205 кеше йәшәгән. 59 йылдан һуң, 1979 йылда, ауылда 57 йорт булып, 320 кеше йәшәһә, 2005 йылға 124 йортта 404 кеше йәшәй.

Исламбай ауылына нигеҙ һалыусы 1808 йылда тыуған Монасип (Һарт) ауылы кешеһе Исламбай Йомағужин була. Уның Кәлимулла исемле улы була. Исламбай Йомағужин 1828-1829 йылдарҙағы урыҫ-төрөк һуғышында ҡатнаша. Ошо уҡ һуғышта Ҡарағай-Ҡыпсаҡ волосы кешеләре Ниғмәтулла Аратов, Ҡәҙербай Хәлилов, Ишкенә Әйүпов, Мөхәмәҙрәхим Мөхәмәтғәлиндар ҙа ҡатнаша. Ҡарағай-Ҡыпсаҡ ырыуы кешеләре һуңғараҡ тағы ла Бәләкәй Ҡыпсаҡ, Һарғая, Ҡурғашлы ауылдарына нигеҙ һала. Был XX быуат башында була.

Ауыл төҙәлөп, заманына ярашлы үҙ үҫешен алған ваҡытта, бөтә илде ялмап алған аслыҡ (1921-22 йылдар) был ауыл тормошона ла ҙур яфа килтерә. Был аслыҡ йылдарынан һуңғы мәғлүмәттәр буйынса, Исламбай ауылында ни бары 14 кенә хужалыҡ ҡалып, унда 69 кеше була (хәтергә төшөрәйек: 1920 йылдағы иҫәп буйынса ауылда 205 кеше йәшәгән). Шул йылдарҙа аслыҡҡа ҡушылған тиф ауырыуы ла күп кешеләрҙең ғүмерен өҙә.

1925-1926 йылдарға ауыл аяҡҡа баҫа башлай. 1925 йылда ауылда хужалыҡтар һаны 24-кә етә. Ғаиләләр ишәйә. Мәҫәлән, архив мәғлүмәттәре буйынса 1926 йылда ауылда Әхмәтйәнов Һиҙиәттең ғаиләһендә 4, Әхмәтйәнов Абдулланың - 5, Шәрәфитдинов Зиннәттең - 11, Бирҙеғолов Сәхиулланың - 4, Йомағужин Насибулланың - 3, Хәйбуллин Зәкериәнең - 5, Хәйбуллин Әбделғәниҙең - 9, Йомағужин Сәмиғулланың - 4, Аратов Шәғәйептең - 4, Ниғмәтуллин Шәүәлиҙең - 4, Яхин Ғәбәйттең 6 кешенән торған ғаиләләре була.

1930 йылдың мартында республика күләмендәге кантондар һәм волостар бөтөрөлә, республикала 48 район, шул иҫәптән, Бөрйән районы барлыҡҡа килә.

Бөгөнгө көндә Исламбай ауылында 124 хужалыҡ булып, 404 кеше йәшәй.[1]

Тау

Ҡараһөбә. Туй ваҡыттарында ат менән һөбә алып ҡасыш булған. Берәүҙең аты сабып барышлай ярһып менеп киткән тауҙы "Ҡара һөбә" тауы һәм йылғаһы тип йөрөтә башлағандар [2].

Ҡараһөбә утары һәм йылғаһы. Исламбай ауылының көньяҡлап Кесе Нөгөш йылға һул ҡушылдығы йылғаһы. Тимер ауылының ҡышлау урыны һәм йылғаһы шулай атала. Ҡойоп яуған көслө ямғырҙарҙан һуң, йылға ҡара, бысраҡланып оҙаҡ ҡына аға. Ҡара һибеп ямғыр яуғанда йылға ташып аҡҡан ҡараһөбә ти, халыҡ. [5]

Йылға, күл, кисеү

Арыҡтай. Исламбай менән Ғәлиәкбәр ауылы араһында Арыҡтай исемле йылға бар.

… Бер егеткә кәләш әйттерә барғандар. Аттары арыҡ ҡына бер тай булған. Бара торғас тайҙың хәле бөткән. Бер йылға буйында туҡтап, ашатып, эсереп алғандар. Ләкин тайҙың хәле бик мөшкөл, артабан баралмайса йән биргән. Бына шунан йылғаға Арыҡтай тип исем биргәндәр.[4]

Шәүәли кисеүе. Исламбай ауылында үткән быуатта Шәүәли тигән мулла йәшәгән. Ул бик белемле, хатта унда гипноз һәләте лә булған. Шәйек йылғаһы аръяғынан тауҙан ул өй нигеҙенә таш алып йылға аша сыҡҡан урынды Шәүәли кисеүе тип йөрөтәләр.

Мортас күле. Ислам байҙың бик күп ваҡ малы булған. Мортас исемле көтөүсеһе көслө буран ваҡытында 40 баш тәкәһе менән аҙашып китә. Күҙ асҡыһыҙ ел була. Бахыр көтөүсе малдарынан күҙ яҙлыҡтырмай бара ла бара. Ахырҙа һарыҡтары артынан бер ҙур соҡорға (күлгә) барып төшөп һәләк булалар.

Көтөүсе малдарын ташлап китер ине – хужаһынан ҡурҡҡан. Ошо ваҡиғанан һуң көтөүсе менән бергә батып үлгән күлде "Мортас күле", "40 тәкә күле" тип йөрөтә башлағандар, ти. Исламбай ауылынан 3 саҡырым алыҫта ята.

Сүлдәй ярҙан өйрәктәр
Селәүсендәр, ҡом – таш
Түп – түңәрәк соҡорҙа
Йәйрәп ята Мортас.

Ҡумырт кисеү. Батҡаҡ, һаҙлыҡ кеүек кисеү. Аҫты ҡумырыҡ-батҡыл булғанға шул исем менән атап йөрөткәндәр.

Яландар

Туҡмаҡ яланы. "Туҡмаҡ яланы" Исламбай ауылынан 9-10 километр алыҫлыҡта йәйрәп ята. Бында ҡыҙыл китапҡа ингән һирәк осрай торған Бажат үләне лә үҫә.

Әлеге ваҡытта был ялан сабынлыҡ итеп файҙаланыла.элек унның ҡомон кирбес һуғыр өсөн алғандар.

… Бер ирҙең ҡатыны үлгәс, икенсе берәүҙе ҡатынлыҡҡа алып ҡайта. Тәүге әсәнән ҡыҙ бала ҡала. Ләкин был әсә үгәй ҡыҙҙы һыйҙырмай башлай. Иренә уны урманға алып барып ташларға бойора. Шулай итеп, ата кеше үҙенең берҙән-бер ҡыҙында һаҡлап ҡала алмай күрәһең, ул да ҡаты бәғерле булғандыр инде.

Утын әҙерләргә барған кеше булып, теге ир арбаһына ҡыҙын да ултыртып ала. -"Һин ошонда көтөп ултырып тор. Ә мин утын ҡырҡа һалайым. Яҡында ғына булырмын ҡурма, балта тауышы ишетелеп торор"- ти ҙә ата кеше ҡасып ҡайтып китә. Бахыр ҡыҙ ултыра-ултыра. Балта тауышы һаман туҡтамай, ти. Инде ҡараңғы төшә башлай. Атаһын көтөп ала алмағас, бисара

ҡыҙыҡай балта тауышы сыҡҡан яҡҡа ыңғайлай. Ни күҙе менән күрһен ике ағас араһына бәйләнгән туҡмаҡ ел ыңғайына тегеләй ҙә, былай ҙа һуғылып, “Тук та, тук” килә, -ти. Ҡыҙ ҡысҡырып та, йүгергеләп тә ҡараған, ләкин килеүсе булмаған.

Бына шулай бер ни гонаһһыҙ бала яуыздар ҡулынан һәләк булған. Ә был яланды “Туҡмаҡ яланы” тип йөрөтә башлағандар.[2]

Үр яланы. Бер бабай йөк тейәп ҡайтып килгәндә аты арып туҡтаған. “Гел үр тарта”,- тигән. Шунан алып был ерҙе “Үр яланы”-тип йөрөтә башлағандар.

Һаһыҡ йәки Һаҫыҡ яланы. Борон берәү ҡапҡан һалып киткән, ул ҡапҡанға болан эләккән. Ләкин ҡапҡанын ваҡытында барып ҡарамай теге болан сереп һаһый (һаҫый) башлаған. Был ваҡиға халыҡтың теленә инмәй ҡалмаған…

Бөрйән Исламбай юлында Аҡбейек тауын төшкәс тә, Һаһыҡ тигән ялан шунан килеп сыҡҡан.

Ҡарабалыҡ яланы. Был яландың ситендә генә “Һыусумған” исемле бәләкәй генә күл бар. Унда ҡара төҫтә балыҡтар булған. Бына ошо балыҡтар яланға исем биреүселәр ҙә инде.

Сабаялан. Бөрйән ерлегендә ҙур-ҙур яландарҙы шулай атап йөрөткәндәр. Ысынында иһә рәхәтләнеп кеше бесән саба алған, икенсенән, ат атланып ялан буйлатып атта ла сабырға була.

Хәлимә (Һәлимә) яланы. Исламбай ауылында Хәлимә исемле хәлле генә тол ҡатын йәшәгән. Бола осоро үҙ малдары менә бер яланға барып сығып төйәкләнә. Шунан алып был ялан уның исеме менән мәңгеләштерелә.

Тарихи, иҫтәлекле урындар

Атсапҡан. Исламбайҙар һабантуйҙарында ваҡытында Нөгөш йылғаһына тиклем аралыҡта ат саптырған юлды шулай атағандар.

Урыҫкилгән (I вариант). Исламбайҙан 3 километр түбәндә, Көләбә күпере эргәһендәге ерҙе Урыҫкилгән тип йөрөтәләр. Элек бында урыҫтар йәйләр булғандар. Хәҙер шунан аҡҡан йылғаны ла Урыҫйән тип йөрөйҙәр.

Урыҫкилгән (II вариант). Исламбай ауылынан өс саҡрым түбәндә, Көләбә күпере эргәһендә Урыҫкилгән тип йөрөтөлгән урын бар. Урыҫтар яңы ерҙәр эҙләп килгәндәр бит инде. Был яҡта башҡорттар йәшәгәнлеген белгәнгә күрә кире боролғандар. Шуға ла был Урыҫкилгән йылға һәм яланы тип йөрөтәләр.

Танасыҡҡан. Кесе Нөгөш аръяғында, 7-8 км. Исламбайҙан тана бата, шулай ҙа нисек тә булһа үҙе сыға башлай. Ҡаран ғына ҡоҙоғо бар.

Ҡарабалыҡ. Элек тәрән бер күл ине. Утау утарлыҡ бала-сағаның муйынына тиклем етер булған эргәһендә теҙелеп ултырған ҡарағайлыҡ ине. Улар хәҙер ҡороған. шишмәһе лә юҡҡа сыҡҡан. Ата-бабалар ошо күлдән беҙгә тиклем ҡара балыҡтар тотоп ашағандар.[2]

Сәғит баҙы. Был ауыл осондағы баҙҙа Сәғит исемле кеше дегет ҡайнатҡан. Сайыр менән туҙ ҡатышмаһнан сыҡҡан дегетте шушмек тип йөрөткәндәр. Таҙа дегет туҙҙан ғына ҡайнатылған. Унышын дарыу өсөн дә ҡулланғандар.

Иҫәнбикә һаҙы. Көләбәнән йәйәүләп Иҫәнбикә исемле әбей Исламбайға ҡайтырға сыға. Юл буйлап бара торғас, икенсе юлға табан боролоңҡорап аҙашып һаҙлыҡҡа барып сыға. Һаҙға ҡарап аптырауға ҡалған хәлһеҙ Иҫәнбикә шунда йығыла. Шуға ла һаҙлыҡ уның исеме менән йөрөтө лә инде. [3]

Йәйпе. Исламбай ауылы халҡының район үҙәгенә барған төп юлында Кесе Нөгөш йылғаһы ағып Оло Нөгөшкә илтә. Был урында әүәле Нөгөш ауылы ла булған. Кесе Нөгөш йылғаһына арҡыры күпер һалынған. Күперҙе сығыу менән оло ялан тау итәгендә күренә һәм үргә уҡ йәйелә. Ошо ҙур аҡлан, туғай йәйелеп ятҡанлыҡтан әйткәндәр ҙә инде, Йәйпе тип. Кисеүҙе лә Йәйпе кисеүе тип йөрөтәләр. Бында колхоз осоро Монасип ауылының фермаһы ла булды.

Тимер ауылынан Ағзам бабай менән Разия инәй Алтынбаевтар оҙаҡ йылдар ферма ҡарауылсыһы булып эшләнеләр.[5]

[1] Самат Аратов Шөгәйеп улы әҙерләне.
[2] 1911 йылғы Әхмәтйәнова Хөлъямалдан яҙып алынды.

[3] Кульчиков Өмөкамал инәйҙән мәғлүмәт алынды.

[4] Кульчикова Нуриянан Кульчиков Фидан яҙып алған. Етәксеһе Кульчикова Дилә Рафаэль ҡыҙы.

[5] Аллабирҙин Дамир Зиннәт улы әҙерләне.

Әтек ауыл биләмәһенә ҡараған ер-һыу атамалары

Әтек ауылы

Беҙ, Әтек ауылы кешеләре, Алдар батыр вариҫтары булыуыбыҙ менән хаҡлы рәүештә ғорурланабыҙ, сөнки ул беҙҙең генә ғорурлығыбыҙ түгел, ә бөтә Рәсәй ғорурлығы булған шәхес. Уның тураһында күп кенә тарихи легендалар, риүәйәттәр һаҡланған, әммә ваҡытында тейешле иғтибар булмау сәбәпле, уның тураһында документаль мәғлүмәттәр юҡ, уның тарихын белеүселәр күптән был донъянан киткән. Ысынбарлыҡҡа тап килгән ошондай мәғлүмәттәрҙең береһе Әтек ауылының күренекле шәхестәренең береһе Айытбаев Йомағужа бабай хәтирәләренән килә. Ул 1883 йылда тыуып, 83 йәшендә донъя ҡуя.

Хәҙерге Әтек ауылының тәүге урыны Ғәҙәмшин Шәмсетдин ҡортсолоғо урынлашҡан урындан саҡ ҡына үндараҡ ***Ишегалды*** тауы аҫтында булған, Ҡана йылғаһының Ағиҙелгә ҡойған урынынан 1,5 – 2 км үрҙәрәк. Ошо урында тау йылғаһы ***Байғотоҡ*** Ҡанаға ҡоя. Был урындар Ҡана йылғаһы үҙәненә ҡараған аҡланда урынлашҡан, Ағиҙелдән иҫкән көслө ел бер ниндәй ҡаршылыҡһыҙ үтеп инә, һәр саҡ көслө ел. Шул да сәбәп булғандыр, көслө янғын һөҙөмтәһендә ауыл тулыһынса янып юҡҡа сыҡҡан.

Хәҙерге Әтек ауылы урынынан саҡ ҡына өҫтә, ***Салажы йылғаһы*** тамағында бөрйән ырыуы исемен йөрөткән Алдар ауылы урынлашҡан булған.Алдар Иҫәкәевте батша хөкүмәте яуыз рәүештә 1740 йылда Минзәләлә язалап үлтерткәс, батша хөкүмәтенең йәшерен бойороғо була. Ул Алдар ауылын бөтә кешеләре менән юҡ итеү. Тарихта уның тураһында бер мәғлүмәт тә ҡалырға тейеш түгел тип иҫәпләнгән. Был яуызлыҡты аҫтыртын рәүештә ауылға төрлө яҡтан ут төртөп, бөтә кешеләре менән яндырып, бойомға ашыралар. Ауыл ғына түгел, уның эргә тирәһе көслө утялҡыны аҫтында ҡала. Был янғынды янған йөҙйәшәр ҡарағас төптәренең күпләп һаҡланыуы ла дөрөҫләйҙер. Алдар ауылы тулыһынса юҡ ителгән.

Янғындан һуң Әтек халҡы хәҙерге урында төпләнә. Был урындар төньяҡ елдәренән Кәкүкле урманы менән ышанyслы һаҡланған була (70-се йылдарҙа был урман тулыһынса юҡҡа сығарылып, һөрөнтө ерҙәргә әүерелдерелә).

Ауылдың ***тәүге зыяраты*** колхоз осоронда трактор һабандары менән һөрөлөп сәсеүлек ерҙәренә әйләндереп бөтөрөлдө.

Элек ат ауырыһа, шул зыяратты түңәрәтеп йөрөтөр булғандар. Ҡатындар бәпәйләй алмаһалар ҙа шул зыяратты уратып алып йөрөгәндәр, сөнки ул ҡәберлектә изгеләр ҡәберлеге тип һанағандар.

Һуңлап булһа ла күренекле шәхес – Алдар батыр үҙе йәшәгән төйәгенә әйләнеп ҡайтты. Был эште районның күренекле эҙәрмәндәренең береһе Муллағолов Марат Ғизетдин улы атҡарып сыҡты. Ул ҙур тырышлыҡ менән Алдар Иҫәкәевкә бюст эшләтте. Бюсты Байназар мәктәбе уҡытыусыһы Ильяс Муллағолов эшләне. Уны Әтек мәктәбе баҡсаһында урынлаштырҙылар, эргәһендә крайҙы һәм тарихты өйрәнеү музейы бар, музейҙа Алдар батырға арналған материалдар ҙа туплана.[2]

Һәр ауылдың үҙ зыялылары булған кеүек, Әтек ауылының да зыялылары булған. Шуларҙың икәүһенә генә туҡталып китәйек.

Беренсеһе. Әтек ауылының үткәне Алдар батыр Иҫәкәйевкә* барып тоташа. Алдар батырҙың кем булыуын һәр ҡыҙыҡһынған кеше беләләр. Ул Рәсәй геройына лайыҡ кеше. Тик уның тыуып үҫкән ауылы

тураһында аныҡ ҡына фекер юҡ. Алдар Иҫәкәйев ауылына ҡағылышлы мәғлүмәттәрҙе бер саҡ Иҫәнғазы ауылы аҡһаҡалы Иҫәнғазин Вәлиулла Шаһивәли улы һөйләгәйне. Ул бабай 1893 йылда тыуып, 93 йәшендә донъя ҡуя. Уның менән аралашҡан кеше бабайҙың зирәклегенә, шул тиклем хәтерле булыуына, үткән ваҡиғаларҙы күп белеүенә иғтибар итмәй ҡалмағандыр. Заманына күрә уның яҡшы грамотаға эйә булыуы ла билдәле. Уның ғәрәп, рус телдәрендә иркен генә уҡый, яҙа һәм һөйләшә белеүе ошо хаҡта һөйләй. Дини яҡтан да бик яҡшы ғына белемле була. Юғары уҡыу йортонда уҡыған студенттар, фәнни диссертация өҫтөндә эшләүселәр Вәлиулла бабайҙың тупһаһын күп тапаны. Вәлиулла бабай һөйләүе буйынса Алдар батыр ауылы хәҙерге Әтек ауылы урынында булған, ә Әтек ауылының боронғо ата-бабалары әлеге көндә хужалыҡтың умарталығы урынлашҡан урында була. Был урын Ҡана йылғаһы буйлап әлеге Әтек ауылынан 3 саҡырым түбәндә урынлашҡан. Был ике ауыл яраһында ҡалын ғына ҡарағай урманы була. Ул урманға халыҡ **«Кәкүкле урманы»** тип исем ҡуша. Элекке Әтек ауылы Ағиҙелгә яҡын ғына урынлашҡан. Иҙел үҙәне буйлап һәр ваҡыт иҫеүсе көслө елдәрҙең бер тармағы Ҡана йылғаһы буйлап йылға тамағынан үргә табан иҫә. Ә урман аша иҫкән елдең көсө бөтә һәм Алдар ауылы был елдәрҙән азат була. 1740 йылда Алдар Иҫәкәйевте Миңзәләлә язалап үлтергәс, батша указы сыға. Указда Алдар тураһында бөтә мәғлүмәттәр, шулай уҡ Алдар ауылы тотош халҡы менән юҡ ителергә тейеш, тип иғлан ителә. Ошо яуыз эште тормошҡа ашырыу өсөн бөтә оҫталығын һалыусылар тарафынан ауыл тотош халҡы менән яндырыла. Шул ваҡиғанан һуң Әтек ауылы кешеләре үҙ ауылдарын ташлап, Алдар ауылына килеп урынлашалар. Был ваҡиғалар сама менән 1745-1750 йылдар осорона тура килә. Ошо уҡ мәғлүмәтте Әтек ауылы аҡһаҡалы Айытбаев Йомағужа бабай ҙа бәйән иткәйне. Әтек ауылы менән Алдар ауылы тураһында башҡа легендалар ҙа бар, әммә үрҙә әйтеп үтелгәне ысынбарлыҡҡа тап килә. Шулай булғас, Алдар Иҫәкәйевте Әтек ауылы кешеһе тип хаҡлы рәүештә әйтә алабыҙ. Әтек ауылы Алдар ауылы менән бергә ике ҙур янғынға дусар булған, һуңғыһы -1982 йылда.[1]

* ***Алдар*** монг. — данлы.

[1] Информатор Айытбаев Йомағужа бабай (1883 й.) хәтирәләренән, 83 йәшендә донъя ҡуя. ***Фәйзулла Абдрахманов*** *яҙып алған.*

[2] Зәйнуллина Камила (1909 йылғы) ейәнсәре Г.Иманғолова тарафынан Азалия Баймөхәмәтова яҙған.

Алдар батыр төйәге

Мәсем - Ирәндек араһы,
Нисә икән саҡ(ы)рым?..
Бөрйәндәр * көткәндәр шунда
Алдар батыр аттарын.
Ике тауҙың ҡуйынында
Иркен йөрөгән аттары.
Унда-бында һибелгәндер
Алдар батыр утары.
Ишле булған йылҡылары,
Һигеҙ мең булған һаны.
Һимеҙ булған йылҡылары,
Алыҫтан булған таныр.
Ҡышын тибенгә аттарҙы
Тауҙарға әйҙәгәндәр.
Ә йәйгеһен бейәләрҙе
Ҡымыҙға бәйләгәндәр.
Иҫәнгилдин булған Алдар,

Иҫәкәй ҙә тигәндәр.
Дошмандары таптырғанда,
Эҙ йәшерә белгәндәр.
Ирәндек- Баймаҡ яғында,
Ә сал Мәсем - Бөрйәндә.
Был тауҙарҙа донъя йәме,
Был тауҙар барса йәмдә.
Бөрйән ырыуынан Алдар,
Баш эйгән уға халыҡ.
Батша ҡулынан алған ул
Ике тапкыр тарханлыҡ.
Мәсем - Ирәндек араһы,
Әллә күпме саҡ(ы)рым.
Ырыуҙаштар көткән унда.
Алдар батыр аттарын.
Көн иткәндәр төбәк биләп,
Татыу торған бөрйәндәр.
Татыулыҡта илдең ҡото
Икәнлекте белгәндәр.
Атайсалда** ҡор йыйғандар,
Тирә-яҡтан килгәндәр.
Беҙҙең олуғ ил ағабыҙ,
Алдар батыр тигәндәр.
Мәсем, Ирәндек тауҙары
Батыр рухын һаҡлайҙыр.
Бөрйәндәр ҙә, баймаҡтарҙа
Һүҙемде кире ҡаҡмайҙыр,
Һәм ҡыуаныс, һәр ҡайһыһы/,
Беҙҙең бөйөк шәхес тиеп,
Башҡорт улын атайҙыр,
Ау, халҡым улын атайҙыр!..

*ырыу
** ете ырыу стелаһы ҡуйылған боронғо ырыуҙар йыйыны уҙғарылған ялан.

Мөнир Фәйзуллин.

Колоннаның авторы - рәссам Рәмил Иманғолов, ырып- юныусы - Мөхәррәм Вәхитов.

Төп бағана - 9 метрлыҡ колонна Баҙал итәгендәге 300 йыллыҡ ҡарағастан эшләнгән. Ҡолас етмәҫлек бағананың ер өҫтөндәге өлөшө - 7 метр, был да үҙенә күрә символлаштырыу: ете ырыу берлеге, 7 – изге һан. Ҡыҫҡа бағаналар (улар ҙа етәү), баймаҡ короу - механика заводында ҡорос һәм суйындан эшләнгән, уларҙы тоташтырыусы сылбырҙар ҙа Баймаҡтан.

Ете ырыу союзының, милләтебеҙҙең ҡакшамаҫ берҙәмлеген символлаштырыусы тамғалы ағас – символик колонна сүрәтендә баҫып, ғаләмдең үҙен сәләмләй төҫлө.

Юҡ, онотмаған башҡорт үҙенең тарихын, онотмаҫ та. Ошо изге эште ниәттән ысынбарлыҡ иткән улдары бөтмәһә, киләсәге лә өмөтлө, якты булыр уның.

Атайсал

Тарих белә: нисәлер йыл
Шанлы йылдар үткәнен.
Ҡайһы ерҙә, ҡайһы йылда,
Ниндәй йыйын үткәнен.
Тарих иҫләй: ете ырыу
Йыйынға йыйылғанын.
Аҡһаҡалдар йыйылышып,
Оло кәңәш ҡорғанын.
Тарыуал тигән яланға.
Был йыйынды ҡорғандар,
Килгән һәр бер аҡһаҡал,
Тамға ҡуйған имәнгә.
Оло ялан ситендә
Имән ағасы үҫкән.
Халыҡ уны хөрмәтләп,
Изге имән – тип әйткән.
Ырыу ағасы – имәнгә
Таҫма, тәңкәләр таҡкан.
Ошо имән янында,
Ырыу бергә ойошҡан.
Дошман яуы ябырылғанда
Көслө оран яңғыраған.
Ете ырыу бер булып,
Оло яуҙар ҡайтарған.
Ете ырыу һалған тамға
Изгелек булып ҡалған.
Ата – бабаның үткәне
Тарихҡа һеңеп ҡалған.
Ошо изге урынды,
Йәндәй күреп һаҡлайыҡ!
Шанлы тарих үткәненә,
Тоғро булып ҡалайыҡ!

Сөләймәнова Рәшиҙә Ғиләж ҡыҙы

Әтек ауылының ер-һыу атамалары

Күлдәр

Хисам күле. Ҡана йылғаһы ярында урынлашҡан. Хисам исемле ҡарт гел ошо күлдә өйрәк тотҡан. Яр буйында урынлашҡан ниғмәттәрҙе-муйыл, ҡомалаҡ йыйған, балыҡ тотҡан.

Мәрхәм күле. Ҡасандыр Мәрхәм исемле балыҡсы йәшәгән. Уның ғаиләһе булмаған. Гел ошо күлдә балыҡ тотоп шуның менән туҡланып йәшәгән. Халыҡ шуның өсөндөр ул күлгә Мәрхәм исеме биргән. Хәҙер балыҡсы кешене Мәрхәм тиҙәр.

Ялан – туғайҙар, туғайлыҡтар

Тарауыл яланы. Элек-электән башҡорттарҙың Урал тауы өсөн ҡанлы дауҙары күп булған. Дошмандар көнтыуыштан да, төшлөк яғынан да ябырылыр булған. Ҙур яу килгәндә, башҡорт ырыуҙары, бер-берeһенә оран бирешеп, ғәскәр туплап яу ҡайтарыр булғандар.

Беҙҙең яҡтың ете ырыуы: бөрйән, ҡыпсаҡ, түңгәүер, юрматы, тамъян, ҡатай, үҫәргәндәр – бер булып ойошоп йәшәгән, бергә - бергә яу ҡайтарған. Һәр ырыуҙың башында бей торған. Ошо бейҙәр барыһы ла Мәсем тигән ханға буйһонған. Мәсем хандың йәйләүе хәҙерге Бөрйән ерендәге Мәсем тауы яланында булған, ти. Мәсем хан вафат булғас, уны бик ҡәҙерләп Ҡана йылғаһы тамағында ерләгәндәр.

“Борон заманда, иген сәсмәгән, бесән сапмаған, олатайҙар малдарына гел сәскә утлатып, үреш, ҡышлыҡ тибен эҙләп, ырыу-ырыу эркелешеп, ер-һыу өсөн бер-бере менән талашып, Уралды-төйәк итеү өсөн бер ырыу икенсе ырыуға көйәҫ-көйәҫ яу асып, бер-беренең йәйләүен баҫып, мал-тыуарын, бала-сағаһын, ҡатын-ҡыҙын талап йәшәгән саҡта, аранан аҡыллылар сығып, яусылар араһында һүҙ асҡандар: “Азаматтар, ырыу башҡа булһа ла, бауыр бер бит. Ошо янъяллашыуҙы туҡтатҡанда ла арыу булмаҫмы икән?” – тигәндәр, ти.

Яусылар һөңгөһөн ергә сәнсеп, һөйләүсене ауыҙы менән йоторҙай булып, керпек ҡаҡмай тыңлап торғандар. Ҡайһылары ауыҙына үлән ҡабып, башын түбән эйеп, уйлап ултырғандар, ти. Һөйләүсенән һүҙ сыҡҡан, һүҙгә эйәреп һүҙ киткән. Бары ла аҡыллы һүҙен хуп күреп, яулашыуҙы ташларға булғас, үҙе – баш, үҙе түш булып йөрөгән аҡһаҡалдар араһында шау-шыу киткән; үҙ-ара даулашып, һәр ҡайһы аҡһаҡал үҙе морон төрткән ханына барып, кәңәш-төңәш иткән, ярҙам һораған, ти. Хандар ашыҡмаған, элеккесә йәшәй биргән. Аҡһаҡалдарҙың эше был яҡ менән дә сыҡмағас, аптырағандар. Һаман көслө ырыу көсһөҙ ырыуҙы талап, былай тороу ярамаҫ, бер ҙә булмаһа, Мәскәү батшаһына барып ҡарайыҡ, тип һүҙ берләштергәндәр, ти.

Ерле ерендә кәңәш итеп, тағы ла ырыу аҡһаҡалдары бер ергә йыйылып һөйләшкәндәр. Аҙаҡ сиктә бөтә ырыу аҡһаҡалдары араһынан Бөрйәнден Иҫке бей, Ҡыпсаҡтың Ҡужаҡ, Тамъяндың Шағәле тигән кешеләрен батшаға ебәрергә булғандар, ти.

…Илселәр ҡайтып, халыҡ менән һөйләшеп бөтөүгә, батша кешеләре лә килеп еткән, ти. Батша ебәргән нәсәлниктәр килгәс, ат - хат еткән ерҙән ете ырыу халҡын **Тарыуал яланына** йыйғандар. Йыйында ырыу - ырыу яҡлашып, батырҙар көрәшкән, сәсәндәр әйтешкән, ҡурайсылар ҡурай уйнаған, йырсылар йырлаған. Аҡһаҡалдар, байҙар ат саптырған, уйын-көлкө яһап, көн уҙғарғандар, ти”.

Урындағы ҡарттарҙың һөйләүенсә, ырыу башлыҡтары Тарыуал яланына бергәләшеп имән бағана ултыртып, уға үҙҙәренең ырыу тамғаларын һуғып сыға. Был тамға ырыуҙарҙың үҙ-ара татыу, бер төптән булыуын аңлатҡан. Ул изге имән тип йөрөтөлгән. Изге имән бик оҙаҡ йәшәгән.

Әлеге ваҡытта Тарыуал яланындағы имән бағана һаҡланмаған. [1]

Ҡана туғайы. Әлеге Әтек ауылы ултырған туғайлыҡтар элек Ҡана йылғаһы үҙәне булған, ваҡыт үтеү менән йылға үҙенең үҙәнен үҙгәртә барған һәм ул ерҙәр әкренләп кенә тупраҡ һәм үҫемлектәр менән ҡаплана килгән.

Йәнһыуалган. Йәнһыуалған яланы ауылдың һул яғынан 6 километр алыҫлыкта яткан тау башы яланы. Элек кешеләр уңайлыраҡ ер эҙләп ултырғандар. Ҡасандыр бында 3-4 ғаилә килеп ултырып, йәшәй башлаған. Тик ниндәйҙер сәбәп менән бер көндө бөтә булған йән эйәләре үлеп бөтә. Шуның өсөн шул исемде биргәндәр, имеш.

Тарбай яланы. Тарбай яланы хәҙерге Әтек - Үркәс юлы эсендә урынлашкан, ауылдан 8 километр алыҫлыкта. Элекке осорҙа ергә ҡарата һәр кешенең үҙ өлөшө булған. Ошо ланға тары сәскәндә, һәр саҡ мул уңыш биргән. Шул сәбәпле ошо исемде биргәндәр, имеш.

Мәрәҫ киткән яланы. Боронғо легендаларҙан һакланып ҡалыуынса Күскәрбәк-Иҫәнғазы ауылында Атанғол тигән бай йәшәгән. Ике ҡатыны булһа ла балалары булмаған. Шул сәбәпле Әтек ауылынан Мерәҫ исемле малайҙы аҫырауға (уллыҡҡа) алған. Бер ваҡыт бай Орск өйәҙе яғына юлға сыҡҡан ваҡытта серге (ыңғырсаҡҡа түшәр өсөн алтын – көмөш менән биҙәлеп эшләнгән түшәк) табып алған һәм был сергене үҙенә алған. Ваҡыт үтеү менән сергенең Атанғол байҙа булыуы тураһында халыҡ араһында һүҙ таралған, һәм һүҙ губерна чиновниктарына ла барып еткән. Оҙаҡламай серге эше буйынса тикшереү эштәре башланған. Әлбиттә, Атанғол бай сергенең фажиғәгә килтереүен белмәгән. Сергене табып алыуы тураһында тынған. Һуңынан губерна тикшеренеүселәре тарафынан тентеү үткәргәндә, серге Атанғол байҙа табылған. Шаһиттарҙың күрһәтеүе буйынса, был сергенең хужаһы (Орск чиновнигы) үлтерелеп, таланған булған, ә серге үлтереүселәр тарафынан ташлап ҡалдырылған. Губерна тикшеренеүселәре был сергенең фажиғәһендә Атанғол байҙың ҡатнашыуын белдергәндәр һәм эш буйынса яуаплыҡҡа тарттырылыуын әйткәндәр. Атанғол бай эштең асылына төшөнгәс, эштең нимә менән бөтәсәген аңлап, яҡлаусылар яллай башлаған. Һәм был попечителдәр – (суд коллегияһы, предварительный суд) яҡлаусылар эштең ауырлығын, ҙурлығын баһалап, Атанғол байҙан һалым түләү талап иткәндәр. Тикшереү эштәре оҙаҡҡа һуҙылыу сәбәпле һәм ҙур суммала сығымдар талап иткәнлектән, Атанғол бай һуңынан бөтөнләй бөлгән: өйөр – өйөр йылҡылары һәм башҡа малдары был сығымдарға етмәгән. Ошондай эштәрҙе күреп үҫкән Мерәҫте аҫырауҙан Атанғол бай баш тартҡан. Мерәҫ Әтеккә йәйләү яланына («Мерәҫ киткән» тип йөрөтөлгән ялаға) ҡайтып киткән. Үҙенең етемлеген Мерәҫ, артабан йәшәүенең ауырлығын һиҙенепме, ҡырға сығып киткән. Ауыл халҡы малайҙы оноҡҡандарынса эҙләгәндәр. Ләкин малай табылмаған, ғәйеп булған. Күп йылдар үткәс, Мерәҫ ҡаҙаҡ ҡыҙына өйләнеп, ҡатыны менән Әтеккә ҡайтып төшкән. Мерәҫ менән ҡатынынан таралған аралыҡты шул ваҡыттан алып «инә ҡаҙаҡтар» араһы тип йөрөтә башлағандар. (Хәҙерге Мерәҫовтар, Сирбаевтар Мерәҫ нәҫелдәре булалар). «Мерәҫ киткән» яланының ҡиссаһы ла ошонан ҡалған. Олатайым һөйләүе буйынса, боронғо ҡарттар табып алған нәмәне үҙләштереүҙе оҡшатмағандар һәм был турала кешегә һөйләүҙе мотлаҡ тип уйлағандар.

Күскәрбәк Атанғол байҙың табып алған сергегә байлығы ла етмәгән, тип тә әйтә торған булғандар. Был легенда 1927 йылғы олатайым Зәки Зәкир улы Баймөхәмәтов тарафынан 1940 йылдың 15 июнендә яҙып алынған булған, үкенескә ҡаршы ауылдағы 1982 йылдың 20 июнендәге көслө ҙур янғын ваҡытында яҙмалары бөтөнләйгә юҡҡа сыҡҡан, әммә олатайымдың хәтерендә һакланған.

Иҫәнгилдина Резеда 1990 йылдың 13 февралендә яҙып алдым.

Яулык киҫкән. Борон – борон заманда бер бай йәшәгән. Ул кәйеф – сафа, мәжлес ойоштороp булған. Ҡунаҡҡа йөрөүҙе йәки саҡырып ҡурай моңо тыңларға яратҡан. Бер мәл байрам ваҡыты килеп еткән. Был байрамға тирә-яҡтан да кешеләр килгән. Шул ваҡыт бай былай тип әйткән: «Кем дә кем, күҙ бәйләп, яулыҡ ҡырҡа, шул кешегә байлыҡ бирәм». Ниндәй генә оҫталар ярышмаһын, барыбер эштәре килеп сыҡмаған. Шул саҡ бер ярлы егете: «Мин ҡырҡып ҡарайым әле яулыҡты», - тигән. Һәм ул, күҙен бәйләп, аты менән сабып барып, яулыҡты ҡырҡҡан. Шул ваҡыттан алып был урынды «Яулыҡ киҫкән» ер тип йөрөтәләр.

Түбәйорт яланы. Түбәйорт яланы Әтек ауылынан 14 км алыҫлыкта яҫы ғына тау түбәһе яланы. Ауыл халҡы элек йәйләүгә бер ни тиклем ваҡыт ошо ялаға күсеп, йәйләү өсөн йорттар төҙөп, шунда йәшәгәндәр. Исеме шуға ярашлы.

Борсаҡ һыҡҡан. Борсаҡ һыҡҡан яланы Әтек - Иҫке Србханғол юлы эсендә, ауылдан 6 километр алыҫлыҡта. Бер кеше үҙ өлөшөнә тейгән шо урында ашлыҡ сәскән. Йыл һайын боҙ яуып, уңыш ашлығын юҡҡа сығарған. Шунан боҙҙо борсаҡ тип, Борсаҡ һыҡҡан тип атап йөрөтә башлағандар.
Ҡара һыйыр яланы. Ҡара һыйыр яланы Әтек менән Иҫке Тарыуал ауылы юлы эсендә урынлашҡан, ауылдан 7 км алыҫлыҡта. «Бабсаҡ менән Күсәк бей» эпосында Ҡарағөлөмбәттең үҙ атаһы түгел икәнлеген, атаһы Бабсаҡ батырҙың ҡара эсле Ҡарағөлөмбәт уғынан йәне ҡыйылғанлығын белгән Күсәк, ата ҡонон ҡайтармаҡ булып, юҡҡа сыға. Ҡыпсаҡ илендә йөрөп, батырҙар йыйып, ир ҡорона тулғас, хәйерсе булып кейенеп Ҡарағөлөмбәт йәйләүенә килә. Уның ҡаты ойотҡанды өскә бүлеп, ике өлөшөн ашап сығыуынан да Ҡарағөлөмбәт һеркелдәп ҡуя. Йәмилә, әсәһе, бер ни ҙә һиҙмәй. Күсәк ғәскәре үгәй атаһын тар-мар итә. Бөрйәндәрҙән бер йәнде лә һау ҡалдырмаҫҡа ҡарар иткән Күсәк, мин Ҡарағөлөмбәт нәҫеленән түгел, тип инәлгәс кенә 13 йәшлек бер ҡыҙҙы иҫән ҡалдыра. Ошонан (бер йәндән) район исеме Бөрйән килеп сыға ла инде. Күсәк еңелгән Ҡарағөлөмбәтте шыр яланғас ҡалдырып, танауынан тишеп бау үткәреп, ҡара һыйырға арты менән атландырып (Ҡара һыйыр яланының исеме лә - ошонан), Ҡыпсаҡ ырыуына юл тотҡан, уны Ҡыпсаҡ ауылдарында мәсхәрәләп йөрөткән. Атайсал яланын үткәндә Күсәккә Ҡарағөлөмбәт инәлә икән: «Ыҙалатма, атай, сал да ҡуй!» - тип. Ошонан яланға Атайсал исеме йәбешеп ҡалған. Ә үгәй атаһынан үҙенә атай тип көсләп әйттергән Күсәк. Был да үҙенә күрә мәсхәрәләү, кәмләүҙең бер юлы булған...

Ҡарасәс яланы. Ҡарасәс яланы Әтек-Иҫке Собханғол юлы эсендә. Ауылдан 8 километр алыҫлыҡта ята. Ҡарасәс исемле ҡыҙ була. Атаһы һуғышҡа китә. Ҡыҙ әсәһе менән генә ҡала. Ул шундай матур, сибәр була. Күп тә үтмәй, әсәһе биҙ менән ауырып үлеп китә. Ҡыҙ яңғыҙы ҡала. Атаһы кешеләрҙе бик яратҡан була. Ләкин һуғыштан атаһының үлеүе тураһында ҡара ҡағыҙ килә. Ҡыҙ ҙа кеше йәнле була, уларға ярҙам итә, ләкин уның йәшәгеһе килмәй. Урманға барып, исем – фамилияһын яҙа ла аҫылынып үлә. Ул урынға «Ҡарасәс аҫылынған” ер тип исем бирәләр. Ә һуңынан ҡыҫҡартып, «Ҡарасәс» тип кенә йөрөтәләр.

Түбәйорт яланы. Түбәйорт яланы Әтек ауылынан 14 километр алыҫлыҡта урынлашҡан яҫы ғына тау түбәһе яланы. Ауыл халҡы элек йәйләүгә бер ни тиклем ваҡыт ошо яланға күсеп, йәйләү өсөн йорттар төҙөп, шунда йәшәгәндәр. Исеме шуға ярашлы.
Ҡана яланы. Ҡана яланы Әтек менән Мәндәғол ауылы араһында - тау башында урынлашҡан.
Ҡурпы туғай. Ҡурпы туғай Ҡана йылғаһы тамағының ҡаршы яғында урынлашҡан Ағиҙел ярының уң яғында, йәй көнө үләнен бесән итеп йыйып алып бөткәс, көҙ көнөнә оҙон һәм ҡуйы булып ҡурпы үләне үҫә икән йыл һайын.
Күс юлы. Элек ауыл халҡы йәйләүҙәргә йөрөгәндә, ошо тау бите аша үткән юлдан күсенеп китә торған булған. Ауыл халҡы икегә бүленеп, ике урынға күскән тигән фараз бар. Ауылдың уртаһында мәсет булған, Мәсеттең үр яры Түбәйорт тигән ергә, ә түбән яғы Бәләкәй Салажы яланына күскәндәр. Тарихи мәғлүмәттәр буйынса Баймаҡ районы II Этҡол ауылы кешеләре Әтек ауылына нигеҙ һалыусылар булып, ошо юлдан күсенеп килеп ултырғандар.

Тауҙар, түбәлектәр, тау юл-һуҡмаҡтары.

Атайсал тауы *(1 вариант). К*үсәк бей үҫеп еткәс, атаһы өсөн бөрйәндәрҙән үс ала башлай. Бөрйән бейе Ҡарағөлөмбәтте ҡулға төшөрә, нык яҙалай. Үҙ ырыуы яғына алып ҡайтырға сыға. Ҡарағөлөмбәт тыуған ерҙәренән айырылғыһы килмәй. Артабанғы ҡаты яҙалауҙарҙан һәм мәсхәрләүҙәрҙән бер юлы ҡотолорға теләп, дошманынан үлем һорай. Үҙен кесегә ҡуйып: "Атай, ошо ерҙә мине сал да ҡуй!", - тип үтенгән. Ошо һүҙҙәрҙе әйткән тауҙы “Атайсал тауы” тип йөрөтәләр. Тау башындағы ҙур яланды “Атайсал яланы” тип атайҙар.

Атайсал тауы *(2 вариант).* Аталлы-уллы ике кеше текә тауҙан егелгән ат менән төшөп киләләр икән, ә тау бик текә. Күрәһең, матау (тышау) һалмағандарҙыр, ат йөктө тоторға көсө

етмәй, һөрөнөп ҡолап китә. Арттан эткән йөк ҡамыт менән атты һыҡҡан. Ат үлеп бара ти. Малай: “Атай, сал! Үлеп бара бит!", - тип ҡысҡырған. Атайсал шунан ҡалған тиҙәр.

Ноҡот тауы. Тау яланғас, ағас юҡ, тәбиғәттә һирәк осрай торған ҡарағай сәтләүек - ноҡот күпләп үҫә торғайны. Ял көндәре алһыу сәскә атып, тау бите матур төҫ ала ине. Ауылда кәзә-һарыҡ күп булып үрсегәс, ноҡот бөтөнләй бөттө, тау исемендә генә тороп ҡалды.
Хәҙрәт юлы. Бөрйән районы Әтек ауылында беренселерҙән булып Баймаҡ районы 2-се Этҡол ауылының Хәлил исемле байы мәсет төҙөтә. Етем ҡалған Мөхәмәтшәриф исемле малай йәй көндәре Хәлил байҙын малын көтә, ә ҡыш уҡый. Малай биҡ отҡор булып сыға, Хәлил бай, артабан уҡыуын дауам иттереү өсөн, Мөхөмәтшәрифте Бохараға уҡырға ебәрә. Унда уҡып, хәҙрәт дәрәжәһе алып ҡайтҡас, Хәлил Әтек ауылында мәсет төҙөтә һәм Мөхәметшәрифте хәҙрәт итеп алып килә. Мөхәмәтшәриф хәҙрәт тирә-йүнгә йөрөгәндә, ошо тау битенән үткән һуҡмаҡ буйлап йөрөр булған.
Өкөй йәки ташөй. Ҡана йылғаһы буйында урынлашҡан был тауҙын йылға ситендә генә өң һымаҡ ҙур таш соҡоро бар, шуға уны өй тип атағандар. Быны тураҙа шундай легенда йөрөй. Алдар батыр йәшәгән ауылдың бер һунарсыһы ошо өң эргәһендә таш башында ултырған аталы-инәле ике йән эйәһенең атаһын атып үлтергән. Ә тере ҡалғаны сәстәрен биленә тиклем төшөрөп, тубыҡланып ултырып, илай-илай кеше нәҫелен ҡарғай икән. Шунан күп тә үтмәй, Алдар ауылы кешеләре тулыһынса үлеп бөтәләр, имеш.
Шыуҙырғыс. Элек кешеләр ағасты сортаментка турап, ат менән тау башынан аҫҡа табан шыуҙырып, тәгәрәтеп төшөргәндәр. Шыуҙырыу өсөн билдәле бер киңлектә тау башынан аҫтына тиклем ағасын ҡырҡып сыҡҡандар. Шунан һуң, йылға ярына төшөрөп, һал менән түбән яҡҡа, ялан яҡтарына алып барып һатып, үҙҙәренә кәрәк-яраҡ алып ҡайтып көн күргәндәр.
Сейәлетау. Тау бите ҡарағай урманы менән ҡапланған, араһында сейәлек күп булған. Тик көслө янғын булыу сәбәпле, тау битендәге ҡарағай урманы менән сейә ҡыуаҡтары бөтөнләйе менән янып бөткән. Хәҙер яланғас тау булып ҡалған, ер еләге була, ә сейә юҡ.
Әбейүлгән тауы. Тау емеш-еләккә, йыуаға бик бай булған. Яҙ көнө бер әбей асығып, тауҙа йыуа йыйып ашап йөрөгәндә, серле рәүештә бер таш өҫтөндә ултырған килеш үлә. Шунан ҡалған исем тиҙәр.
Артышлытау. Тау бите аҫтан башына тиклем түшәлеп үҫкән артыш ҡыуаҡлығы менән ҡапланған.
Ҡыҙҙар ҡарауылы. Легендалар буйынса ҡайҙандыр килгән кеше ауыл ҡыҙҙарын йыйып алып китә имеш, тигән һүҙ тарала. Йәшерен рәүештә, халыҡ үҙҙәренең ҡыҙҙарын белендермәй генә ошо тау ҡуйынына йәшереп тотҡан. Ашау–эсеү өсөн алмашлап, һиҙҙермәй генә аҙыҡ ташығандар һәм ҡыҙҙарҙы алмашлап ҡарауыллағандар.
Туҡмаҡ. Ауыл халҡы ошо тау аша һуҡмаҡ юлдан Иҫке Собханғолға, Ябаҡҡа, Маҙалыға йөрөгәндәр. Тау яланғас. Нисектер, халыҡ уны Туҡмаҡтау тип атай.
Кәзәтау. Тау ауылдың түбәнге осонда урынлашҡан. Ауыл кәзәләре шул тау итәген төйәк итә торған булғандар.
Тирмән тауы. Был тауға һыйынып ҡына ҙур булмаған йылға аға. Ул Ҡана йылғаһына һул яҡтан килеп ҡушыла. 1930 йылдарҙа ошо йылғаның Ҡана ҡушылған урынын быуып,   һыу тирмәне төҙөйҙәр. Был ошо тирәләге иң ҙур тирмәндәрҙең береһе була. Тирмәнсе булып, үҙенең оҫталығы менән тирә-яҡҡа дан ҡаҙанған Миңлеғолов Ғиниәт тигән кеше эшләй. Тирмән һуғыш башланыр алдынан туҡтай, сөнки тирмәнсе Монасип ауылы тирмәнен төҙәтеү эшендә, аңғармаҫтан, тирмән ташына йығылып, ауыр яранан үлеп китә.
Ҡыя юл. Әтек ауылы кешеләре иҫке Тарыуал, Тәтегәс, Ырғыҙлы яҡтарына йөрөгәндә ошо тау битенән ҡыялатып ҡына юл ҡаҙып сыҡҡандар. Тора-бара ул ҙур юлға әүерелә.
Ҡаҙғантау. Кананикольский менән бәйләнеш тотоу өсөн берҙән-бер юл ошо тау аша үткән. Кананикольскийҙа баҡыр иретеү заводында баҡыр иретеп, арба-саналарға тейәп, ошо юлдан Иҙелгә ташығандар. Унда, һалдар эшләп, баҡырҙы тейәп, Иҙел буйлап түбән ағыҙғандар. Ырымбурҙан генерал губернатор килеп, Ырғыҙлы яғына, Кананикольскийгә бара тип, урындағы властар, халыҡты йыйып сығарып юлды ҡаҙҙырып төҙәткәндәр. Шунан ҡалған инде ул тау исеме.

Бешәлетау. Тау бите ҡуйы ҡарағай ағас менән ҡапланған булған. Элек көслө янғын булып, урман янып бөткән. Хәҙер бөтөнләйе менән ҡарағай ағасы ҡалмаған, тик исеме генә халыҡ телендә ҡалған.

Һимеҙтай. Тәүге исеме телдән телгә күсеп килеп еткән. Мөғлүмәттәр буйынса, Әтек ауылында Рәхмәтулла исемле бай булған. Ул Ғәрәбстанға хажға барған. Шуның өсөн Рәхмәтулла хажи тип йөрөткәндәр. Ул бик күп ат тотҡан. Яҙ һәм көҙ көндәре уның аттары ошо тау битендәге ҡарағайлыҡ урманында йөрөгәндәр. Көндәрҙең береһендә уның бер аты тауҙан шыуып үлә. Бының өсөн бай ат ҡараусы ялсыһын: "Һинең йүнһеҙлегең арҡаһында ниндәй һимеҙ тайым әрәм булды, - тип әрләгән.

Ослотау. Конус - пирамидаға оҡшап, башҡа тауҙарҙан үҙенең ослайып сығып торған түбәһе менән айырыла.

Бәйет тауы. Ямғыр яумағанда, йә оҙаҡ ямғыр яуһа, ауыл халҡы йыйылып сығып, ошо тау битләүендә теләк теләп, төрлө доғалар уҡып, аллаға ялбарғандар.

Ташморон – ауылдың уң осонда урынлашҡан. Элек–электән тәбиғәттең төрлө һынауҙарына бирешмәй үҙ көндәрен кисергән. Урыны йылғаға һыйынып, морон формаһында алға сығып тора.

Суҡҡарағас – Ташморон тауының дауамы булараҡ, уға тоташып тора. Был тауҙың битләүе тотошлайы менән ҡарағас ағасы менән ҡапланған, араһында йыуан, оҙонлоғо 25 – 30 м еткән 15 – 20 – ләп солоҡ ҡарағастар була торғайны. Уларҙың күбеһен йәшен атҡан, йә ҡартайып ҡолап бөттөләр, ә ғәҙәти ҡарағастар әле лә ауылдың йәме булып ултыралар.

Аҡтау – Суҡҡарағас тауының дауамы булып тора. Тауҙың үҙәк өлөшө һәм башы яланғас, ҡырҙан, ысынлап та, ағарып торған кеүек, ҡыш көнө бигерәк тә исеменә тап килә. [3]

Аҡбикә тауы – Аҡбикә тауы тип бушҡа ғына әйтмәйҙәр икән. Борон бер ҡарттың Аҡбикә исемле ҡыҙы була. Үҙенә ун икенсе ҡатынлыҡҡа һоратып, Аҡбикәгә бер бай килә. Аҡбикә байҙы яратмай һәм ҡасып китә. Бай белеп ҡала һәм артынан ҡыуа сыға. Аҡбикәне ҡыуып етеп, тотоп алһа, ул таш һынға әйләнгән, ти. Шунан башлап Аҡбикә тауы тип атала. [2]

Йылғалар

Ҡана. Ҡана йылғаһының, уң ҡушылдыҡтары Оло Салажы, Бәләкәй Салажы, Мусағәле, Байғотоҡ, Туҡмаҡ. Һул ҡушылдығы - Сапа йылғаһының тарихы билдәле түгел. Тик шундай имеш-мимештәр йөрөй. Алдар батыр сығышы менән Бөрйән ырыуынан булған. Ике тапҡыр тархан исеме алғас, уның ер-һыуҙары сикһеҙ күп булған, Ул үлгәс, ҡайҙандыр уның ҡыҙы килеп: 'Минең атайымдың 32 Мусағәле, 42 Салажы йылғаһы булған. Шулар ҡайҙа? " - тип таптырып йөрөгән, имеш.

Шишмәләр

Әлмәс ҡотоғо *(шишмәһе)* – ауыл эргәһендәге тау аҫтынан ғына сылтырап сығып ята. Ул шишмәне һәр саҡ Әлмөхәмәт исемле ҡарт таҙалап, тәрбиәләп торған. Аҙаҡ үҙе лә йортон шул шишмә эргәһенә төҙөгән. Шунда йәшәгән. Шуға күрә халыҡ шишмәне «Әлмәс ҡотоғо» тип йөрөтә башлаған.

Тумарлыҡ шишмәһе - еректәрҙән торған бәләкәй өйкөм урманда, тирә – яғында – һаҙлыҡ, сәсле түмәр үҫкән. Кешеләр унда барырға ҡурҡҡандар. Аждаһа, йылан бар, йәнәһе. Ысынлап та, төрлө йыландар күп булған, һаҙлыҡлы урын булғанға. Хәҙер һаҙлығы ла, сәсле түмәре лә кәмегән. Шишмәне, Иҫәнғазы ауылынан күсеп килгәс, Алғазин Хаммат бабай тәрбиәләп тота. Тирә – яғын кәртәләп, торба ҡуя. Кеше эсеү өсөн һыуҙы шунан ала. Әлеге көндә ул кәртәләгән ерҙә ағастар имен үҫә, ә кәртәләнмәй ҡалған ерендәге ағастар бөтөп бара. [3]

Мусағәле – йылғаһына ла исем күптән бирелгән. Элек бер ҡатын булған. Уның Муса һәм Ғәли исемле улдары булған. Ире ауырып үлеп киткән булған. Малайҙарына ни бары 5 кенә йәш булған. Малайҙарын көтөргә хәле булмаған. Һыу буйына барып, ике малайын тоҡҡа һала ла

һыуға ағыҙа, ә үҙенә бысаҡ сәнсә. Малайҙарҙың исемдәрен йылғаға бирәләр. Был йылға әлеге ваҡытта ла ағып ята. [2]

Мәмерйә

Сыңғырауыҡ – Тарауыл яланының төньяҡ-көнбайыш яғында инеү урыны туп- тура аҫҡа төш мәйерйә. Һәр хәлдә ауыҙынан таш, аҡса ырғытҡанда ла таштан-ташҡа һуғылып оҙаҡ яңғырап сыңғырлап төшкәнгә аталышы ла “Сыңғырауыҙ” һуңынан “Сыңғырауыҡ” тип йөрөтөлә башлай. [3]

[1] Йылайыр районының Ҡыҙҙарбиргән ауылында йәшәүсе 1924 йылғы Ишбулатова Ғылмикамал Зариф ҡыҙы хәтерләүҙәренән Иҫке Тарыуал ауылының оло быуын аҡһаҡалы-ағаһы Ишбулатов Уйылдан Ялалетдин улы һөйләп ҡалдырғандарҙы яҙып алды.

[2] Зәйнуллина Камила (1909 йылғы) ейәнсәре Г.Иманғолова тарафынан Азалия Баймөхәмәтова яҙған.

[3] Был легенда 1927 йылғы олатайым Зәки Зәкир улы Баймөхәмәтов тарафынан 1940 йылдың 15 июнендә яҙып алынған булған, үкенескә ҡаршы ауылдағы 1982 йылдың 20 июнендәге көслө ҙур янғын ваҡытында яҙмалары бөтөнләйгә юҡҡа сыҡкан, әммә олатайымдың хәтерендә һаҡланған. Мин, Иҫәнгилдина Резеда 1990 йылдың 13 февралендә яҙып алдым.

Етәксеһе: Башҡорт теле һәм әҙәбиәте укытыусыһы Ғәҙәмшина Рәйсә Ғәриф ҡыҙы.

Байғаҙы ауыл биләмәһенә ҡараған ер-һыу атамалары

Байғаҙы ауылы

Ырымбур губернаһы Верхний Урал өйәҙе етенсе башҡорт кантонлығы Ҡарағай Ҡыпсаҡ олоҫы командаһы ун беренсе йорт старшинаһы Ҡунаҡбай Ҡарабаев тимерҙәрҙең бер өлөшөн 1844 йылдар тирәһендә Байғаҙы ауылына күсерә. Зәүрәт-сотник Байғаҙы Ҡунаҡбаев (1770-1853) Ҡунаҡбай Ҡарабаевтың улы. Ул Һәүәнәк буйында ауыл нигеҙләй һәм уға үҙ исемен ҡуша. Байғаҙы ғәр. — еңеүсе тигәндә аңлата.   1816 йылғы рәүиздә (урыҫса-ревизская сказка. Архив, 696, 518-се биттәр) Тимерҙә Ҡунаҡбай Ҡарабаевтың улы Байғаҙы, Бикмөхәмәт, Килмөхәмәттәр йәшәгән.

1850 йылдарғы рәүиздә Байғаҙы ауылы барлыҡҡа килгәс, ун икенсе ихатаны йәғни хужалыҡты 80 йәшлек Байғаҙы Ҡунаҡбаев етәкләй. Был мәлдә уның 74 йәшлек беренсе ҡатыны Сәғиләнән 29 йәшлек Аллағол исемле улы, Тәңребирҙе исемле 6 йәшлек ейәне, икенсе ҡатыны булған 46 йәшлек Нәзифәнән уландары Шаһимырҙан (1834-1837), Шаһигәрәй (1834-1837), ун өсөнсө ихатала дүртенсе улы беренсе ҡатынынан Шәрәфетдин (1802 йылғы 42 йәш), ҡатыны Зәлифә - 43 йәш, ҡыҙы Динә, уландары Баһауетдин (1831 йыл), Зәйнәғетдин (1835 йыл), Мөхәмәтдин (1846), икенсе ҡатыны Зөбәйләнән (25 йәш) улы Рыҫҡол (1842) йәшәй.

Ун дүртенсе ихитала бишенсе улы Ишмырҙа (1803), ҡатыны Фатима (38 йәш), уландары Хөббөтдин (19 йәш), Ғәйнетдин (17 йәш), Ҡаһарман (6 йәш), Ибраһим (2 йәш) йәшәй.

Байғаҙы Ҡунаҡбаевтың ағаһы Бикмөхәмәттең (1754 йылғы) Килдеғол, Ишҡол, Исламғол, Юныс, Юлдыбай, икенсе ағаһы Әбделғазынан (1769 йылғы) Псәнчи (ейәне Дәүләтбирҙе), Абдулла, Солтанша, икенсе улы Ғөбәйтулла, Ғәбиҙулла, Мөхәмәтша тыуа.

Тимерҙән Байғаҙыға 102 ир-ат заты, 85 ҡатын-ҡыҙ заты, йәмғеһе 34 хужалыҡ күсеп ултырған.

Шулай итеп, байғаҙыларҙың шәжәрә ағасын, ботаҡ-япраҡтарын, тамырҙарын дауам итеүсе фамилиялар: Баһауетдинов, Баймөхәмәтов, Баязитов, Псәнчин, Ишҡолов, Ҡаһарманов, Исәнбаев, Көмөшбаев, Кирәев һ.б.

1859 йылда ауылда 220 кеше йәшәй, 1920 йылда халыҡ һаны икеләтә артып, 478 кеше булған. Ихаталар һаны кәмей, сөнки аслыҡ, һуғыш йылдары. Уларҙың 116 аты, 52 һыйыры, 47 һарығы, 14 кәзәһе, 14 солоғо исәпкә алынған. Әлбиттә, солоҡтарының барыһын да күрһәтмәгәндәр.

1834 йылдарҙа Тимер ауылында 664 кеше булған. Был йылдарҙа урыҫтарҙың башҡорт ерҙәрен талау, көсләк, алдау, осһоҙ хаҡҡа һатып алыу юлы менән эш итеүе дауам иткән. Янау, ҡурҡытыу юлы менән башҡорттарҙы ошо бөлдөргөс алыш-бирештәргә күндергәндәр. «Артыҡ» биләнгән ер майҙандарын тартып алдырмау маҡсатында, ерҙәрен һаҡлап, Тимер халҡыла Байғаҙы, Аралбай, Бикташ ауылдары һәм башҡа утарҙарға күсеп ултырғандар. Зәүрәт-сотник Байғаҙы Ҡунаҡбаев Бикташ ауылы янында Ҡыҫыҡ, Көләбә, Ураһай һәм башҡа утарҙар

барлыҡҡа килтергән. Был яҡтарҙы байтаҡтары үҙһенмәй икенсе урындарға күсенгән. Бер өлөшө Һәүәнәк йылғаһы буйын Иҫке ыҙманы үҙ итеп, тағы яңынан хәҙерге Байғаҙы ауылы төбәкләнеп килеп ултырғандар.

Рядовой Хәйбулла Ташбулатов, Рәсүл Ишкилдиндар Напалеонға ҡаршы һуғышҡан. Ниғмәтулла Юлъяҡшин 1812 йылғы һуғышта 15-се полк составында ике көмөш миҙалға, Байғаҙы Ҡунаҡбаев хәрби орденға лайыҡ булған. Ауыл аҡһаҡалы Юлдаш Дауытов 1781 йылда 69 йәшендә үлгән. Зәүрәт есаул Өмөтҡол Ишмөхәмәтов, үрәтник башлығы Дәүләткилде Кулунаев (уларҙан Йомағужиндар таралған), Ишҡол, Исламғол Баймөхәмәтовтар, Итҡара, Ниғмәтулла Юлъяҡшиндарҙың да ауылды тергеҙеүгә өлөшө ҙур булған.

Байғаҙылар Һәүәнәк һыуын һыулаған, йәйләүҙәр булдырған. Ауылда төп шөғөл малсылыҡ булған. Игенселек өсөн уңайлы ерҙәр аҙ булғас, климат шарттары ла ҡырыҫ булғас, иген аҙ сәселгән. Улар 16 бот ужым бойҙайы, 320 бот бойҙай сәскәндәр. Эшсән, белемле кешеләре менән бай ул байғаҙылар. [1]

Байғаҙы ауылының ер-һыу атамалары

Тауҙар

Ураҙы (1 вариант). Борон-борондан ауыл халҡы ағас эше менән шөғөлләнгән һәм кәсеп иткән. Ағас саналар яһағандар, дуға бөккәндәр, һалабаш һалғандар, һәнәк-тырма эшләгәндәр һәм ошо әйберҙәрҙе ялан яҡтарына алып барып тоҙ, шәкәр, шырпы, иген кеүек кәрәкле аҙыҡ-түлек, көнкүреш кәрәк–яраҡтарына алыштырғандар. Улар ат егеп, йә сана, йә арба менән йөрөгәндәр. Ауылды сығып күптә китмәгәндәр уларға бейек тау үрен менергә кәрәк булған. Әлбиттә, ауыр йөктө һөрәүе аттарға ауыр булған, шунлыҡтан, ылаусылар был тау үрен һәр ваҡыт йәйәү менгәндәр. Уларҙың хәле бөткән. Тау үре, үр аҙымы хәлде ала, тип, әйтер булғандар. Был тауҙы Үр аҙымы, тора-бара Ураҙы тип йөрөтә башлағандар. Был тау ауылдан 2 км алыҫлыҡта урынлашҡан.

Ураҙы (2 вариант). Борон бер байҙың бик матур, бик көслө һәм бик тә аҡыллы ялсыһы, көтөүсеһе булған. Ураҙғол исемле булған ул. Ул бәләкәйҙән етем ҡалып, һәр төрлө йәберҙе үҙ елкәһедә татып үҫкән, шуға ла ул көсһөҙҙәрҙе яҡлаусы, тәбиғәте менән ғәҙел булған, ярлыларҙың һәм кәмһетелгәндәрҙең яҡлаусыһы булған.

Эшкә тилбер булһа ла, тура һүҙле булыуы байға оҡшамаған. Нисек тә Ураҙғолдан ҡотолмаҡсы булған. Бер ваҡыт байҙың байтаҡ аты юғалған. Бай быны Ураҙғолдан күргән: имеш, ул аттарҙы ялан яғына оҙатышырға ярҙамлашкан, үҙе лә буш ҡалмаған. Һалдаттар саҡырған, Ураҙғолдо төрмәгә бикләргә ҡушҡан. Шундай ҙур нахаҡтан егет бик ғәрләнгән һәм үҙен тоторға килгән һалдаттарҙан ҡасҡан. Ауылдан ситтә бейек ҡаяға йәшенгән. Һалдаттар эҙенә төшкәс, һуңғы уғы бөткәнсе алышҡан, улар яҡынлашҡас ҡаянан осҡан. Шунан халыҡ был ҡаяны Ураҙғол, йылдар үткәс Ураҙы тип йөрөтә башлағандар.

Ураҙы (3 вариант). Борон Бөрйән районы Байғаҙы ауылында тирә-яҡҡа даны таралған бай йәшәгән. Уны ауылдаштары Хафиз бай тип йөрөткәндәр. Уның көтөү-көтөү малдары, ҡуйҙары, йылҡылары икһеҙ-сикһеҙ яландары, далаларҙы тултырып йөрөгән. Хафиз байҙың бер көтөүсеһе ауылдан Ураҙғол исемле булған. Хафиз бай ауылдаштарының хөрмәтен ҡаҙанған егетте күрә алмаған. Уны үлтереп ҡотолмаҡсы булған. Үҙенең ялсыларынан Ураҙғолдоң көтөүенән иң яҡшы бер нисә йылҡыны урлатҡан һәм уларҙы таптыртҡан. Әлбиттә, егет эҙләһә лә йылҡыларҙы таба алмаған. Ә бай үҙ сиратында егетте үлтерергә ҡушҡан. Ураҙғол байҙың ялсыларынан ҡасып ауылдың иң бейек тауына ҡарай йүгергән. Ялсылар артынан ҡыуа төшкәндәр. Тота алмағас, тау итәгенә ата башлағандар. Ураҙғол ҡасып ҡотола алмаҫын һиҙеп бейек ҡаянан: “Дошмандан атылып үлгәнсе, тыуған ҡаямдан һикерәм!”- тип ҡысҡырған һәм ҡаянан һикереп үлгән. Шунан һуң был ҡаяны уның хөрмәтенә Ураҙғол тип йөрөтә башлағандар. Быуындан-быуынға күсә килеп хәҙер был тау Ураҙы тип еңеләйтеп йөрөтөлә. [2]

Бәгиҙә тауы (Ҡаршытау). Уның элекке исеме - Бәғиҙә тауы. Уны хәҙер кеше Ҡаршытау тей ҙә ҡуя. Бәғиҙә исемле ҡатын йәшәгән, күпләп мал көткән. Яҙ башынан йәйләүгә сығып йәйләгән, ә көҙгә ошо Ҡаршытау башына көҙләргә күсеп ҡайтҡан. Һәм тау уның исеме менән Бәғиҙә тауы тип аталған.

Үтәйәмбәт. Байғаҙы ауылы халҡы борон-борондан һунарсылыҡ менән шөғөлләнгән. Үтәйәмбәт исемле бик шәп һунарсы йәшәгән ауылда, саңғыла шәп йөрөгән, боландарҙы, илектәрҙе саңғы менән баҫтырып тотҡан. Яҙ башында Үтәйәмбәт һунарҙа болан баҫтырып килгәндә болан артынан тауҙан шыуып китә. Тау текә булғанлыҡтан ҡар менән ҡуша аҫҡа шыуа. Һунарсы бер нисек тә ҡотола алмай, шунда үлә. Һунарсы үҙе үлһә лә ошо тауҙа исеме мәңгелләштерелә. Был текә тауҙы һәм аҫтағы туғайҙы шунан алып “Үтәйәмбәт” тип йөрөтә башлайҙар.

Кончал. Ауыл эргәһендә маймылға оҡшаған тау бар. Халыҡ уны Кончал тип йөрөтә. Аҡтар менән ҡыҙылдар һуғышы ваҡытында, көслө алыш ошо тау янында була. Аҡтарҙың һуңғы һалдатын ошо ҡаянан осорғандар, “аҡтарҙы кончали” тигәндәр. Шунан Кончал тип йөрөтөлә башлаған. (“Ҡан шол”- ҡан һүҙен аңлатыуы ла мөмкин).

Түгелмә. Байғаҙы ауылын көнсығыштан ҡалҡан кеүек ҡаплап торған тауҙың исемен “Түгелмә” тип йөрөтәләр. Ололар ул тауҙың исемен ошолай итеп бәйән итә. Элек-электән ошо тауҙа емерелеп көртмәле уңған. Йылдың-йылы унда ҡатын-ҡыҙҙар көртмәле йыйырға йөрөгәндәр һәм силәктәрен тултырып көртмәле йыйғандар. Тауҙан төшкәндә “Түгелмә-түгелмә,”- тип төшкәндәр. Шунан “Түгелмә” тауы барлыҡҡа килгән.

Яуғасты (1 вариант). Беҙҙең ауылда Ураҙы тауы рәтенән Яуғасты тигән тау ҙа бар. Ураҙхан иленә ҡаҙаҡтар ябырылғас, Байтума үҙенең һуғышсылары менән уларға ҡаршы сыға. Ҡаты бәрелештән һуң ҡаҙаҡтар ҡаса башлай. Уларҙы ошо тауҙар аша баҫтырып ебәрәләр. Ошо еңеүҙән һуң был тауҙы “Яуғасты” тип йөрөтә башлайҙар.

Яуғасты (2 вариант). Граждандар һуғышы шауҡымы Байғаҙы ауылын да урап үтмәгән. Бер ҡаты алыш барғанда аҡтар ҡаршы тауҙа, ә ҡыҙылдар һыртта ятып атышҡандар. Аҡтар еңелә башлаған. Улар Ураҙы тауының үрге осона сығып ҡасҡандар. Былар ҡасҡан юлды Яуғасты тип әйткәндәр.

Сейәле морон. Сейәле морон Ҡолсорат утарынан дүрт саҡрым алыҫлыҡта ята. Был тау тирә-яҡтан урман менән ҡапланған һәм уның мороно ҡаялы тау. Был моронда сәйә уңа, шуға ла Сейәле морон тип атайҙар.

Берторон. Байғаҙы һәм Тимер ауылдары араһында Үҙән буйында был морон. Шул морон һүҙенән сыҡҡан да инде ошо исем. Һәүәнәк менән Үҙән араһында ята ул. Үтәйәмбәт тауынан ҡараһаң морон бик асыҡ күренә. Бер морон тигән һүҙ тора-бара Берторон булып ҡалған.

Түбә. Ауылдың түбәнге осондағы тауҙы Түбә тиҙәр. Тауҙың сусағында ғына асыҡлыҡ, ә эргә тирәһе ағаслыҡ. Шул асыҡ урын әйтелә лә инде Түбә тип.

Ҡыҙылғолаҡ. Башҡорт телендә ер-һыу атамалары кеше ағзалары атамаһы менән тап килә. Иғтибар итәйек: түбә, уя, морон, түш һ.б Байғаҙынан Монасип ауылына сығып киткәндә бәләкәй генә тау бар, үҙе оҙон һуҙылып киткән. Был уя тамағын халыҡ Ҡыҙылҡолаҡ буйы тип йөрөтә. Оҡшатыу ҡарағанда ла ҡолаҡ һымаҡ, ә ҡыҙылы емеш-еләккә бай ҡып-ҡыҙыл йәйелеп ятыуына шулай атайҙар.

Баҙ һырты. Ауыл халҡы электән кустарсылыҡ менән шөғөлләнгән. Әлеге беҙҙең “Баҙ һырты” тигән урындың атамаһы былайыраҡ килеп сыҡҡан. Ауыл кешеләре ҡайын ағасының туҙын һыҙырып, тәрән баҙ ҡаҙып, шунда ҡайын туҙын ҡайнатып дегет эшләгәндәр һәм ялан яҡтарына сығарып игенгә алмаштырғандар. Дегет ҡайнатып баҙ ҡаҙыған ерҙе “Баҙ һырты” тип йөрөтә башлағандар. Хәҙер йәштәр урамы урынлашҡан урын Аҙанғол йылғаһын аша сыҡҡас башлана.

Йылғалар

Сәңгелдәк. Сәңгелдәк йылғаһы ауылға ингән ерҙә. Йылға тирәләп баҫыуҙар, бәләкәй-бәләкәй генә сабынлыҡтар йәйелеп ята. Бесән ваҡытында һәм арыш урғанда ҡатын-ҡыҙҙар күпселекте тәшкил иткән. Эшкә үҙҙәре менән һәр ваҡыт бала-сағаларын алып йөрөгәндәр. Йәш балалы ҡатындар ҙа эштән ситтә ҡалмағандар, сәңгелдәктәрендә алып килгәндәр. Сәңгелдәктәрҙе йылға буйындағы әрәмәгә элгәндәр ҙә көнө буйы эш менән булғандар. Йыл һайын был күренеш ҡабатланған. Шуға ла был “Сәңгелдәк” йылғаһы тип атағандар.

Һәүәнәк йылғаһы. Байғаҙы ауылы Һәүәнәк йылғаһы буйында урынлашҡан. Һәүәнәк йылғаһының исеме “һеүән” тигән һүҙҙән килеп сыҡҡан. Нимә ул һеүән? Ул көслө, ҡаты ағымлы йылға тигәнде аңлата. Бынан тыш балыҡ тотоу өсөн һеүән (нурҙа) һалғандар. Ул бер ҡатлы йәки талдан үрелгән булған. Һәүәнәк йылғаһының таштары ла бик эре.

Күрән. Борон 1939 йылдарҙа Сыбар йылғаһы буйында бик матур туғайҙар булған унда йәйләү өсөн малдары һәм ғаиләләре менән күсеп йөрөр булғандар. Сөнки бында йәйләү өсөн уңайлы урын була. Эргәлә генә сыбар йылғаһы ағып ята, малдарға тукланыу өсөн туғайҙары ла бик күп. Бындағы Сыбар йылғаһы бик үҙенсәлекле ул бер килеп сыға йәки кире ер аҫтына инеп китә. Был йылға юғалып киткән урында дымлы бер нисә туғайҙа күрән үләне үҫә. Шунлыҡтан был йылғаны һуңғараҡ Күрән йылғаһы тип атайҙар.
Селде йылға. Был йылға Һәүәнәктең түбән яғында, ауылдан дүрт саҡрым алыҫлыҡта ята. Ул Һәүәнәккә ҡушыла, Ҡарағай туғай менән Бәләкәй туғай уртаһында тауҙан ағып төшә. Тирә-яҡтан тауҙар уратҡан, ә йылға буйы ҡуйы әрәмәләк. Был һаҙматта һәр ваҡыт селе күп булған һәм әле лә бар. Селе күп булған ерҙе шулай атағандар.

Әбей тоноғо. Аслыҡ Байғаҙы ауылын да ситләп үтмәгән. 1921 йылда күп халыҡ аслыҡтан ҡырыла. Яҙ етә. Аслыҡтан халыҡ төрлө үлән: һарына, йыуа, ҡаҡы һәм башҡалар менән туҡлана һәр береһе һәр яҡҡа сығып китеп эҙләнә торған булғандар. Ауылдан бер әбей балаларына аҙыҡ эҙләп сыҡҡан һәм Һәүәнәк аша сығырға булған. Яҙғы ташҡын осоро булғас Һәүәнәк бик ныҡ ташҡан була һәм ул кисеү аша сығып барғанда ташҡын әбейҙе алып китә. Ул ағып барып бер тоноҡҡа тамырға эләгеп тора. Күпмелер ваҡыт уҙғас, һыу ҡайтҡас әбейҙе табып алалар һәм шул тоноҡто “Әбей тоноғо” тип йөрөтәләр.

Хәким тоноғо. Башҡорт халҡы элек балыҡсылыҡ менән дә шөғөлләнгән. Байғаҙы ауылынан Хәким исемле кеше бер мәлдә балыҡ мәскәүләп торғанда, мәскәүе нимәгәлер эләгә. Һыуға төшөп ысҡындырам тиһә, өйөрөлтмәк үҙен өрөлтөп алып китә. Өйрөлә торғас һыу төбөнә китә. Шунан алып Хәким тоноғо булып ҡалған да инде. Хәҙер балаларҙың яратҡан һыу инеү урыны.

Айғыр ҡороҡмаған. Бер байҙың бик шәп һәм матур айғыры булған. Айғырҙы тотоп өйрәтергә мәл етә. Уға ҡороҡ ташларға булалар, тәүҙә ташлаған ҡороҡ уға эләкмәй. Айғыр сабып сығып китә, урмандар аша үтеп бер яланға барып сыға. Уны баҫтырып киләләр. Килеүселәрҙең тырышлыҡтары бушҡа булмай, айғырҙы тотоп алалар. Шул ваҡыттан бирле был ерҙе “Айғыр ҡороҡмаған” тип йөрөтәләр.

Сукҡарағас. Ауылдан саҡрым ярым алыҫлыҡта матур бер урын бар. Уны “Сукҡарағас” тип йөрөтәләр. Элек унда йыуан 2 ҡарағас үҫкән шунан исем барлыҡҡа килгән. Халыҡ уны “Сукҡарағас” тип йөрөтә лә ҡуя, ә ысын исеме “Сук ҡарағас”. [3]

Яландар, туғайҙар, утарҙар

Арғынбай. Элек башҡорт йәйләүҙән йәйләүгә күсеп көн иткән. Арғынбай исемле кеше ауылдан алыҫ булмаған яланға килеп йәйләгән. Йәй буйы һыйыр, һарыҡ, йылҡы көткән, бесән эшләгән. Тора-бара был яланды Арғынбай тип йөрөтә башлағандар.

Аҡбейек. Бындай атамалы ер һәр ауылда ла бар тиерлек. Бейек урында урынлашҡан иң ҙур яланды Аҡбейек тип йөрөтәләр. Совхоздың төп малдарға төп бесән алған яланы. Байғаҙыла ла Аҡбйек икәү: береһе алыҫта көньяҡта леспромхоз ағасын ҡырҡып бөттө, вышка ултыра торғайны.

Таһир ыҙмаһы. Ошо яланда Таһир исемле ҡарт иген, тары сскән, бесән әҙерләгән. Ул бик бай булған тиҙәр. Аслыҡ йылдарында ла ыҙа сикмәгән. Таһир ҡарт үлгәндән һуң исеме ошо яланға ҡалған.

Игенбар. Ауыл халҡы тәү башлап ерҙе үгеҙҙәр ярҙамында эшкәрткән. Ауылдан 8-9 саҡрым алыҫлыҡта, Һәүәнәк буйында түбәндә бер яланға иген сәскәндәр, ере бик ундырышлы була. Берәү килеп игендең сыҡҡанмы, юҡмы икәнлеген тикшереп ҡайтҡан. Шунан ауылдаштарына Игенбар тип һөйләгән. “Үрнәк” совхозы Байғаҙы бригадаһы ла ошо яланға иген сәскән. Һуңғы 1990 йылдағы ташҡын был яланды иген сәсерлек итмәгән, бик ныҡ йырғыслаған. Хәҙерге осор тик сабынлыҡ булып ҡалған.

Саңды. Ауылдан ике-өс саҡрымлыҡта Уразы буйында “Саңды” тигән урын бар. Был урында халыҡ борондан йылҡы көткән. Йәйге эҫе көндәрҙә тау битләүен саңдауға әйләндергәнгә күрә Саңды тип йөрөтөлә. Саңдау - мал туплана торған ер атала.

Бирелэр. Темәс яғына киткән яҡта. ауылдан дүрт саҡрым алыҫлыҡта Бирелэр тигән ер бар. Ауыл кешеләре бында ятып бесән эшләгәндәр. Ҡатындары, балалары менән ҡыуышлап ятыр булалар. Бер ваҡыт иртәнге ысыҡта эште ыратып ҡалыу өсөн ирҙәр таң менән эшкә киткәндәр. Ҡатындар ҡыуышта сәй әҙерләгән. Шул ваҡыт яҡында ғына даһыр-доһор арба, йылҡы ҡыуған тауыштар, ҡысҡырыш-илаш ишелгән. Ҡурҡыуға ҡалған ҡатындар ирҙәр яғына йүгергәндәр. Ирҙәр килһә -бер ни юҡ. Бире күскән тигәндәр. Ошо яланға ла исем шулай Бирелэр тип бирелгән.

Һәүәнәк тамағы. Берторон менән йәнәш ятҡан туғай шулай атала, сөнки ошо урында Һәүәнәк йылғаһы Үҙән йылғаһына ҡойған урын, шуның өсөн Һәүәнәк тамағы тип атала. Хәҙерге көндә сабынлыҡ.

Ғәббәс утары. Ауылдан ун һигеҙ саҡрым Оло йылға буйында Ғәббәс утары урынлашҡан. Темәстән Ғәббәс исемле кеше ошо ергә килеп утарҙа ятып бесән эшләгән. Бесән ташырға ауыр, алыҫ та булғанға күрә малдарын да ҡышлауға килтергән. Әле лә, шөкөр был урында мал көтәләр.

Ишкенә. Шул уҡ Оло йылға буйында Ишкенә тигән ер ҙә бар. Ишкенә исмле кеше дегет ҡайнатып үҙе эҫе баҙға төшөп китеп янып үлгән. Шунан был урын Ишкенә буйы тип йөрөтөлә.

Ат башы. Башҡорт электән йәйләүҙәрҙә йәйләгән. Йәйләүҙә һәр ара айырым ултырған. Күпләп йылҡы көткәндәр. Һәр ара үҙҙәренең аласыҡ тирәһенә ҡарғыш, күҙ теймәген өсөн ат башы һөлдәһен элеп ҡуйғандар.

Таҙғаҡ. Ҡолғананан Ҡорман Шәйхисламов, Кордон Капалов, Байғаҙынан техник Эткарин Йомағужа Һәүәнәк башы яғына ер ҡарарға китеп барғандар:

- Был нимә тигән ер? – тигән Шәйхисламов.
- Таҙғаҡ, - тигән Йомағужа. (айыу ата торған таҙғаҡ).
- Таҙһаҡ алда – тигән дә Шәйхисламов, Йомағужаның ҡолағына һуҡҡанда ебәргән. Тегеһе аптырағас: "Таҙҙы һаҡ" - тинең бит тигән. (Байғаҙылар араһын таҙ, тип йөрөткәндәр). [5]

[1] Аллабирҙин Дамир Зиннәт улы (1962 йылғы) әҙерләне.

[2] (3-сө варианттың информаторы Ишморатова Айгөл) .

[3] Баязитова Фәриҙә Сафиулла ҡыҙы (1919 йылғы) башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Баязитова Рәйлә Ғәзизйән ҡыҙы 1989 йылда яҙып алды. 2005 йыл.

[4] тарих уҡытыусыһы Денисламов Радик Зекрия улы әҙерләне.

[5] Баязитова Рәйлә Ғәзизйән ҡыҙынан (1932 йылғы) хеҙмәт ветераны Сабитов Яхъя Фазулла улы яҙып алды.

Яңы Усман (Тарыуал) ауылы

Усман ауылына нигеҙҙе 1786 йылдарҙа Әтек ауылы кешеләре һалған. Туғыҙ йылдан бында 13 өй булып, 35 ир-егет, 33 ҡатын-ҡыҙ йәшәгән булған.

Иҫке Усман ауылы Ырғыҙлы йылғаһында торған Вознесенский баҡыр иретеү заводы ерендә урынлашҡан. Әтек ауылынан 1814 йылда тағы ла 15 ғаилә яңы ауылға килеп ултыра. 64 йылдан Иҫке Усманда инде 37 өй булып, 115 ир-егет һәм 110 ҡатын-ҡыҙ йәшәгән. 1920 йылдағы халыҡ иҫәбен алыу ике ауылдың мәғлүмәтен яҙып ҡалдыра: Иҫке Усманда 27 ихата булып, унда 162 кеше йәшәй, ә Яңы Усман ауылында иһә 49 ихата булып, халҡы 262 тиклем етә. Ауылда мәсет булып, унда Сибайҙан килгән Әйүп Тәүәдилов тигән кеше ахун булып тора.

Хәҙерге таралған фамилияларҙың башында торған бер-нисә нәҫел тамырын әйтеп китәйек. Улар Утәбай Әбдрашитов, Урмантай Юлдашбаев, Таңатар Ирғәлин, Ишҡоҙа Илбулов, Илназар Байтерәков. Халыҡ малсылыҡ менән булышҡан. 34 ихатаға 155 йылҡы, 101 һыйыр , 22 һарыҡ, 27 кәзә иҫәпләнгән. Башҡорттарҙың йылҡы малына өҫтөнлөк биреүе тәбиғи хәл. Игенселек менән дә булышҡандар. 190 кешегә деревни 1842 йылда 4 сирек (32 бот) ужым игене сәселгән булған.

Ауылдың ике кешеһе - Яхья Кинйәбаев һәм Сәпей Аҡкөсөков 1806-1807 йылдарҙа Франция менән барған һуғыштарҙа ҡатнашҡандар. Генерал М.И. Платов корпусындағы дүрт башҡорт

полкы Пруссия һәм Польша ерҙәрендәге хәрби хәрәкәттәрҙә ҡатнашҡандар. Был турала1810 йылда Петербург һәм Лондонда сыҡҡан китаптарында Дон казагы П. Чуйкевич һәм инглиз офицеры Роберт Витьсон яҙып ҡалдырған. Икенсе авторҙың әйтеүе буйынса, дошман менән алышта үҙенсәлекле кейемдәрҙә 1500 башҡорт ҡатнаша. Беренсе Бөйөк Ватан һуғышында Яңы Усман ауылынан Йайыҡбай Яныбаев менән Ишмырҙа Үтәғолов ҡатнаша. Икеһе лә икешәр көмөш миҙал менән бүләкләнәләр.

1840 йылдар башында Иҫке Усман ҙур ғына мәсетле ауыл була. Яҡшығол ауылы менән бергә бер мәхәллә булып йәшәйҙәр (бер мәсеткә ҡарайҙар). Тап шул осорҙа Ҡыҙҙар биргән, Үркәс, Имәнйорт һәм Ҡарағай йылға тирәләрендәге ерҙәрҙе урыҫ байҙары, урман промышлинниктәре баҫып ала, утарҙар һала башлай һәм Иҫке Усман халҡын бик ныҡ ҡыҫырыҡлай.

Иҫке Усман кешеләре күсеп ултырыу өсөн яңы ер эҙләй башлай. Улар Бетерә буйын, хәҙерге Яңы Усман ауылы урынын бик оҡшаталар. Тик был ерҙәрҙе боронғо Икенсе Бөрйән волосына ҡараған Темәс, Иҙрис, Ҡолсора, Муллаҡай, Байым һәм Этҡол ауылдарының байҙары биләгән. Ауыл һалырға рөхсәт һорап Орск өйәҙенә һәм Ырымбур губернаторына ҡағыҙ ебәрәләр һәм уларҙың үтенесе бик тиҙ ҡәнәғәтләндерелә.

1842 йылдың май- июнь айҙарында Яңы Усман ауылы өсөн ер үлсәп бирергә землемерҙар килә. Ер бүлеү башланғас та ялан яғы байҙары бик ныҡ хәрәмләшә. Яңы ер алырға теләүселәр землемерҙың шул байҙарға һатылғанлығын, уларҙы яҡлашырға тырышыуын аңғарып ҡалалар. Бешәке Туғай тигән урында ғауға сыға, һуғышып китәләр. Землемерҙы туҡмайҙар, әммә ул ҡасып ҡотола. Яңы Усман кешеләре Юлмөхәмәтов Сәйфетдин менән Мәжитов Ҡорман 16 айға төрмәгә ябыла.

1843 йылда Яңы Усман кешеләренә Бетерә буйынан ер биреү мәсьәләһе ҡәтғи рәүештә хәл ителә.

1844 йылда Ҡолсарин Юлмөхәмәт 4 улы, Нарынбаев Әбйәлил 2 улы, Нарынбаев Әбдрәхим 2 улы, Ишморатов Йосоп 3 улы һәм Бикбулатов 3 улы менән килеп өйҙәр һала башлайҙар, шулай итеп Яңы Усман ауылына нигеҙ һалына. [1]

Күсеп ултырыусылар тәүге йылда уҡ ер һөрөп яртышар дисәтинә арпа сәсәләр. Ул шул тиклем уңа, бар тирә- яҡ хайран ҡала.

Ауыл йылдан-йыл ҙурая бара. Халҡы күрше – тирә ауылдарҙың кешеләре менән аралаша, туғанлаша башлай.

Яңы Усман ауылы кешеләре бергенә яу-ғәрәсәттән дә ситтә ҡалмай. Мәжитов Солтан, Әбдрәшитов Әһел, Малабаев Шәриф, Ҡолсарин Абдрахман һәм Урмантаев Фәттәхтәр Япон һуғышында ҡатнаша. Беренсе донъя һуғышына 32 кеше китеп 12- һе ятып ҡала, 1941- 1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышына 33 кеше алынып, 19-ы ҡайта алмай, ә 9 кеше ҡайтҡас вафат була.

Тәүҙәрәк ауылда мәсет булмай, ундағылар Әтек мәсетенә ҡарай. Тик 1885 йылда ғына мәсет һалына һәм указлы мулла ҡуйыла. Исанғазы ауылы менән бер мәхәллә булып йәшәйҙәр.

Борон Һаҡмар буйында йәшәгән кешеләр Яңы Усман тирәһен ерҙең кендеге тип атағандар. Сөнки ул яҡ донъя көтөү, айырыуса мал аҫырау өсөн бик уңайлы булған. Атай- олатайҙар, мал көтөүҙән тыш, дегет ҡайнатып, йәнлек аулап һәм ағас ҡырҡып һаллап кәсеп иткән.

1928 йылдың сентябрь – октябрь айҙарында 6-7 хужалыҡтан торған артель ойошторолған. Унда иң ярлылар һәм етемдәр берләшкән. Шул уҡ йылда комсомол ячейкаһы төҙөлә. Артель председателе лә, комсомол секретары ла Малабаев Муса ине. Артель әкренләп ҙурая бара һәм 1936 йылда бөтәһе лә колхозға инеп бөтә.

Яңы Усманда егерменсе йылдарҙа - 51, 1929-1940 йылдарҙа 35-38 хужалыҡ булған..

Бөгөнгө Яңы Усман Бөрйән совхозының комплекслы бригадаһы.

Төп хужалыҡ йүнәлеше – малсылыҡ. Халҡы мул тормошта йәшәй. Ҙур – ҙур итеп һалынған матур өйҙәрҙә, барыһы ла етеш, заманса мебель һәм башҡа кәрәк-яраҡ. Һигеҙ йыллыҡ мәктәп асылды, үҙ магазины, медпукнкты бар.

150 йылдан ашыу тарихы булған Яңы Усман ауылы һаманда ҙурая һәм матурлана, һөнәрле һәм дәртле йәштәр донъя теҙгенен үҙ ҡулдарында ныҡ тота, тип 1994 йылдарҙа яҙып ҡалдырған һуғыш һәм хеҙмәт ветераны Ә. Әбдрәшитов.

Быйыл 2015 йылда Бөрйән районының 85 йыллығын байрам итергә әҙерләнгәндә, Яңы Усман ауылына күҙ һалһаҡ, унда әлеге ваҡытта 110 хужалыҡта 480 кеше йәшәй. Хужалыҡтарҙа һыйыр малдары 316 баш, шуның 115-е һыйырҙар, аттар 73 баш, кәзә- һарыҡтар 399 баш, бал ҡорттары 54, ҡош-ҡорт 888 баш. Ауылда йылдан йыл техника һаны ла арта, әле еңел машиналар 65, йөк машиналары 5, тракторҙар 18. Уҡыуға, белемгә ынтылған йәштәр күп, юғары уҡыу йортонда уҡыусы студенттар 13, урта махсус уҡыу йортонда уҡыусылар 11. Яңы Усман төп урта белем биреү мәктәбендә 84 уҡыусы уҡый. 1985 йылда Яңы Усман 8 йыллыҡ мәктәбендә 1985 йылда тәүге сығарылыш булды. Заманса мәктәп 1997 йылда төҙөлдө., Мәҙәниәт йорто, балалар баҡсаһы, фельдшер-акушер пункты урынлашҡан ике ҡатлы бина 2000 йылдың 28 октябрендә сафҡа инде.

Урамдарға асфальт түшәлгән. Ауылға ингән ерҙә 2010 йылдың 9 сентябрендә Кульсарин Шәрәфулла төҙөткән мәсет асылды.

Ауылда төп дөйөм белем биреү мәктәбе - 9 синыф, балалар баҡсаһы, фельдшер акушер пункты, мәҙәниәт йорто, Үрнәк ауыл хужалығы предприятиеһы, 3 шәхси пилорама, 5 эшҡыуарҙың магазины эшләй. Үрнәк ауыл хужалығы предприятиеһы 1990 йылда Бөрйән совхозынан бүленеп сығып ойошҡан хужалыҡ. Бөрйән совхозы 1969 йылда барлыҡҡа килгән.

Яңы Усман ауылында дәртле, тырыш, намыҫсан халыҡ йәшәй. Берeһенән береһе яҡшыраҡ итеп донъя көтәләр.

2009 йылдың 1 ғинуарына Яңы Усманда 479 кеше йәшәй.

Хәҙерге заманда Тарыуал яланы пай ерҙәренә бүлгеләнеп, халыҡҡа таратып бирелде. **Ҡана туғайы, Ҡана яланы, Маҙалы, Ҡарасәс һәм Бәләкәй Салажы яландары, Оло Салажы, Бәләкәй һәм Ҙур Этүлгән**, башҡа эреле ваҡлы яландар күптән инде беҙҙең элекке ерҙәр генә булып һаналалар.

Бетерә йылғаһы сыҡҡан ерҙән алып тамағына хәтлем ялан да ялан. Шуның өсөн ялан яҡ кешеләре беҙҙең яҡҡа килеп йәйләгән. **Әсебар, Салажы һәм Ҡаралар түше, Тюлькин, Буҙбейә, Кәпәс** ҡарағай яландарында ҡәберлектәре булды. Тик ***Кәпәс ҡарағай, Буҙбейә, Тюлькин*** яландарындағы ҡәберлектәр һөрөлөп, тигеҙләнеп бөттө. Унда әле лә аҙан ҡысҡырыу өсөн эшләнгән ағастар бар. Ағасты ботап, иң осондағы ике ботаҡты ай шикелле итеп ҡырҡҡандар һәм шунда намаҙ уҡығандар. Әсебар, Ҡаралар, Темәс түштәрендә Муллаҡай, Ҡолсора һәи Иҙрис ауылдары, Тюлькин, Салажы яландарында 2-се Эткол, Ниғмәт ауылдары кешеләре, үҙебеҙҙең ауылдыҡылар Ҡыҙыл балыҡ, Кәшкур тигән яландарҙа йәйләгән. Ҡыҙыл балыҡ йәйләүендә Бетерә аша бейек тау ҡалҡып тора. Ошо тау башына ҡыҙҙар менеп сәй эскәндәр, йырлашып, бейешеп күңел асҡандар. Ә Кәшкүр яланы бейек урында урынлашҡан, аяҙҙа унан Мәсем тауҙары күренә. Яландың ҡаршыһында, йылға аша - Һандыҡташ. Бейеклеге — 1,5 м, өҫтө тип-тигеҙ ине, ҡатын - ҡыҙҙар һыйыр һауа сыҡкан мәлдә Бейеш ҡараҡ ошо

Һандыҡташҡа ултырып ҡурай тартыр булған. Указлы мулла булмаһа ла, ауылға ике бүлмәле мәсет төҙөйҙәр. Ололар Сирғәле Йосопов, Ҡорбан Мәзитов аҙан ҡысҡырып, ауыл халҡын мәсеткә йәлеп итеп йөрөгәндәр. Совет власы башланғас, мәсетте мәктәп итәләр. 1936 йылдарҙа коллектив хужалыҡтар ойошторола башлай. Яңы Усман, Иҫке Собханғол, Мәндәғол һәм Ишдәүләт ауылдары бергә берләшеп, «Марс» колхозы төҙөлә. Бер нисә йыл бергә эшләгәндән һуң, Яңы Усман ауылы "Марс" колхозынан айырылып, «Үрнәк» колхозы төҙөлә. Уның тәүге рәйесе булып Муса Малабаев һайлана. Мусаны район гәзитенә эшкә алғас, Динислам Бикбулатовты тәғәйенләйҙәр.

Ул ваҡытта партия ойошмаһы булмай, комсомол ойошмаһы төҙөлөп, уның секретаре Сабит Хәкимов була. Бөйөк Ватан һуғышы башланып китә һәм Динислам Бикбулатов һуғышҡа алына. Ғилман Һағынбаев, Фәйзулла Ҡолһарин, Рәүеф Ҡыямов, Нуретдин Көҫәпҡоловтар һуғыш йылдарында бер-бер артлы рәйес була. Һуғыштан һуң Насырйән Ишморатов, Зәкир Маликов, Насретдин Малабаев, Сабит Хәкимов, Ярулла Баязитов, Шәмсиә Ишбаевалар эшләй. Һуғыштан алда колхозды алға ебәреү өсөн төрлө саралар күрелә. Ауылдың түбәнге яғында Бетерә йылғаһы буйлап 500 метр канау ҡаҙып, тирмән ҡорола. Был тирмән һыу ярҙамында эшләгән. Һуғыш осоронда тирмәнде ялан яғына игенгә алыштыралар. Һуғыш осоронда һабанға һыйыр егеп ер һөрҙөләр, иген сәстеләр. Беҙ 7-8 йәштән иген утауға йөрөнөк. Ул ваҡытга йәшелсә ултырта торғайнылар, кәбеҫтә, кишер сәсеп, көҙгөһөн эшләгән көнөңә ҡарап бүлеп бирҙеләр.

Йәшелсә, игенде ҡул менән сәсеүҙе һуғыштан алда агроном курсында уҡып ҡайтҡан Әбделғазы Ишморатов башҡарҙы. Ул һуғыштан һуң бик күп кешене үлемдән ҡотҡарып алып ҡалды. Район тарафынан болан атыуға рөхсәт бирелә. Әбделғәҙы болан алып, уның итен ауыл халҡына тараттылар. Һуғыш ваҡытында һарыҡсылыҡта яҡшы эшләп, Сәжидә Әбдрәшитова Почет билдәһе орденына лайыҡ булды. Стәрлетамаҡта бер йыллыҡ етәкселәр әҙерләй торған курсты бөтөп, Зәйнәғәле Ҡолһарин рәйес булып эш башланы. Колхозды алға ебәреү өсөн эштең төрлөһөн эшләне, Бәләкәй генә электродвигатель табып, ЗИД моторы менән әйләндереп, ауылға ут та ебәреп ҡараны. Сусҡаға һарай төҙөттө, ул хәҙерге ваҡытта иген келәте булып хеҙмәт итә. Дүрт ҡарағай түшендә 4 төркөм (60) һыйырға һарай төҙөттө. "Үрнәк" колхозын Әтек ауылына берләштереп, «Алға» колхозы төҙөнөләр. Рәйесе - Баһауетдин Бикбулатов, урынбаҫары - Зәйнәғәле Ҡолһарин, партбюро секретаре итеп Мостафа Кужәбаев һайланды. Колхоз кәнсәһе Әтектә булды. Ул осорҙа колхоз алға табан йүнәлеш ала башланы. Унан һуң Әтек менән Яңы Усман бер-береһенә алыҫ булыу сәбәпле, айырылырға тура килде. Етәксеһе булып Исмәғиҙәм Рәхмәтуллин һайланды. Ике ауылға ике бригадир булды. Партбюро секретары булып Теләмбәтов тигән иптәш эшләне. 1969 йылдың ғинуар айынан яңы төҙөлгән "Бөрйән" совхозына ҡуштылар. "Бөрйән" совхозының «Үрнәк» бүлексәһе булдыҡ. Унан һуң 1976 йылдың май айынан "Бөрйән" совхозының үҙ аллы бригадаһы булып ҡалдыҡ. 1990 йылдың декабрь айында "Бөрйән" совхозы икегә бүленеп, Байғаҙы менән Яңы Усман ауылы бергә ҡушылып, «Үрнәк» совхозы булдырылды, етәксе итеп Тимерғәле Ямғурсин һайланды. Элеккесә ике бригада булып ҡалды.

Яңы Усман ауылы уңғандары күп булды, механизаторҙар Иҙелбай Малабаев, Йәғәфөр Ҡаһарманов, Рәхимйән Ишморатов, Тәлғәт Мәжитов, Булат Малабаев, Зиннәт Мәжитовтар малсылыҡта Камила Мәжитова өлкән һауынсы булып бик яҡшы эшләне. 17-18 литр һөттөн 1 кг иретелгән май алып, район буйынса беренсе урында килде. Ғәфүр Әхмәтов, Ғәлимйән Бикбулатов, Йәүҙәт Мәжитовтар мал ҡарауҙа яҡшы эшләнеләр.

Һауынсылар - Сәкинә Мәжитова, Ғәйниямал Бикмырҙина, Ғәйшә Өмөтҡолова, Мәрхәбә Бикбулатова, Сания Йосопова, Хәтирә Ҡунаҡбаевалар бик яҡшы күрһәткестәргә өлгәште. Быҙау ҡарауҙа Салауат Ишморатов ҡатыны Фәйрүзә менән бик тырышып эшләнеләр. 120-130 быҙауҙан ай һайын һигеҙ йөҙ, бер килограмға тиклем артым алдылар, быҙау үлтереүгә юл ҡуйманылар.

Мал торлаҡтары эшләүҙә һәм мал аҙығы етештереүҙә Шәкир Ишморатов, малсылыҡта Ҡәнзәфәр Ҡаһарманов, Зәйнулла Моталовтар намыҫлы хеҙмәт итте. Сенаж һалыуҙа йөҙҙөн ашыу кеше, балалар йөрөй торғайны. Ошо юғарыла исемдәре аталған иптәштәрҙең яҡшы

эшләүе сәбәпле, Яңы Усман бригадаһы район буйынса алдынғылар иҫәбендә килде. Бригадала мал һаны, йылҡы менән бергә, 750-800 башҡа етә торғайны. Иткә тапшырыу өсөн ике- өс гурт ҡыуылды. Машина менән дә алып киттеләр.

Ауылдан республика кимәлендә танылған шәхестәр сыҡты. Хәлфетдин һәм Зәһирә Ишморатовтарҙың балалары уҡып сығып, төрлө урында эшләп йөрөйҙәр. Араларынан Ишморатов Хәләф Хәлфетдин улы премьер-министр урынбаҫары вазифаһына тиклем күтәрелеп, ауылына ҙур ярҙам күрһәтте. Кирбестән мәктәп, клуб төҙөттө һәм урамға асфальт түшәтте. Әле лә ярҙам итеп тора.

Ауыл үҫә, матурая, йәштәр матур-матур ҙур өйҙәр төҙөй. Бик күп йәштәр ҡалаларҙа юғары белем алып йөрөй. Халыҡ иркен йәшәй. Шөкөр, ауылыбыҙҙың киләсәге өмөтлө.

Рәшит Хәкимов, хеҙмәт ветераны.

Яңы Усман ауылы эргәһендәге ер-һыу атамалары

Тауҙар

Ҡаршытау. Ауылдың ҡаршыһында ятҡан тау - Ҡаршытау. Исеме есеменә тап килә. Ҡаршытау ауылды төньяҡтың һыуыҡ елдәренән һаҡлай.

Иртыуған тауы. Яңы Тарыуалдан район үҙәге Иҫке Собханғолға туранан барғанда бик текә булған Иртыуған исемле тауҙы төшөргә тура килә. 1932 йылда Әбдрәшитов Әйүп Әҙелмырҙа (1907 йылғы) улының ҡатыны бер нисә ауылдаш ҡатын менән Иҫке Собханғолға барып, йомоштарын йомошлағас, Тарыуалға ҡайтырға сыға. Ләкин ҡайтып өлгөрә алмай... Ошо тауҙа уның ир балаһы донъяға килә... Ир бала тыуа. Һәм шул көндән башлап тауҙы Иртыуған тип йөрөтә башлағандар ҙа инде.

Хәйер, был тау ошо атаманы ҡасандан бирле йөрөткәнен белгеһе килеүселәр Ағиҙел ҡасабаһындағы Әбдрәшитов Зөбәйергә мөрәжәғәт итә ала. Уға нисә йәш булһа, Иртыуған атамаһының барлыҡҡа килеүенә лә шул тиклем үк ваҡыт үткән булыр. Сөнки Иртыуғанда тыуған бала - Зөбәйер ағай үҙе була инде.

Бетерәнең һул ҡушылдығы булған был йылғала ҡыҙылсалар бик күп. Шул ҡыҙылбалыҡтарҙың күплеге йылғаға ла атама булып киткән. Ысынлап та, был шулай. Әгәр, мәҫәлән был йылғанан 10 балыҡ тотһаң, уның яртыһынан күберәге - ҡыҙылса, ә ҡалғандары бәрҙе, сабаҡ кеүек балыҡтар булыр.

Ылаш тауы. Бетерәнең уң яғындағы был туғайҙа бесәнсе өсөн бик уңайлы: ҡояшҡа ҡаршы ятҡан, был асыҡ урын әллә ниндәй баҡуйынды ла ыҙалатмай ғына киптереп бирә. Башҡорттар ҡорот-фәләнде тиҙерәк киптерер булһалар, ылашҡа һалалар. Ә был ялан бесәнде ылаштағылай киптерә, шуға үҙен дә “Ылаш” тиҙәр.

Эйәрташ. Ауылдың көнсығышында бер тау бар. Уның төньяҡ - көнбайыш яғы бик текә. Уның башында эйәргә оҡшаған бер таш булған, ҡайһы саҡта Тарыуал малайҙары уға ултырып үҙҙәрен атта сабып бара тип хис итеп туйғанса уйнар булғандар. Хәҙер ул таш юҡ. Эйәрташтың ул ташын эргәләге Бетерә йылғаһының юлсыларҙы ыҙалата торған батҡағыраҡ бер еренә трактор ярҙамында эттереп ҡолатып төшөргәндәр. Эйәргә оҡшаған ташы ҡолатылыуға өс тиҫтәгә яҡын йыл үтһә лә, ул һаман да Эйәрташ.

Шүрәле тауҙары. Тарыуалдан ҡапма-ҡаршы йүнәлеш менән көнсығышҡа һәм көнбайышҡа табан 10-15 саҡрым ер китһәң, Шүрәле тигән тауҙар булып, йәғни, уларҙың береһе - Ишей юлында, икенсеһе Иҫке Собханғолға ураҮ юлдан барғанда осрай. Шыр урман менән ҡапланған ҡая-ташлы был ерҙәр үткенселәр күңеленә шом һалғанға улар ошо атамаларҙы ҡабул иткән. Иҫке Собханғол яғындағыһының эргәһендәге ялан да шул атамаға эйә. Ололар һөйләүенсә, был

тирәләрҙә шүрәлеләр ҙә осраштырған, ҡайһы бер юлаусылар уларҙың йәмһеҙ тауыштарынан да ишеткеләгән, имеш.

Маяҡ - Тарыуал эргәһендәге иң бейек тау. Элек тирә-яҡты ут-янғындан һаҡлау маҡсатында унда ла вышка төҙөгәндәр. Улар маяҡ һымаҡ әллә ҡайҙан күренеп торғандар, шул оҡшашлыҡ тауҙың “Маяҡ” тип аталыуына тигеҙ булған. [2]

Йылғалар

Бетерә йылғаһы. Баймаҡ районының Һәүәнәк утары тирәһенән башланып, Тарыуал ауылына тейеп, үҙ һыуҙарын Үҙәнгә ҡойоп, унан бергәләп Ағиҙелгә ҡушылырға теләп ағып ятҡан Бетерә йылғаһы...

Башҡорт телендә ’’Бетерә” тигән һүҙ юҡ. Был атама ’’бөтөрә” тигәндән, бер нәмәнең бөтөүенә бәйле рәүештә килеп сыҡҡан.

Элек-электән байҙар был йылғның һыуын һал ағыҙыуҙа киң ҡулланғандар. Һал ағыҙған осорҙа байҙарҙың аҡсаларының кәменкерәүен күрергә тура килгән, сөнки был эшкә бик күп эшсе ҡулы кәрәк. Күрәһең, шунлыҡтан, йәғни, күмәк кешегә күп аҡса түләргә тура килгәнлектән, байҙар аҡсаға ҡыҫынҡылыҡ тойған- дарҙыр.

Шуға ла: ’’Бөтөрә! Байҙың аҡсаһын бөтөрә!” - тигән һүҙҙәр халыҡ тарафынан йыш ҡабатланып бара торғас бер аҙ үҙгәртелеп, Бетерә тигән йылға исеме булып тороп ҡалған.

Фәнни күҙлектән ҡарағанда, уны үҙенең буйындағы Бетек тауына бәйләп, Бетек рәһе, йәғни, Бетек йылғаһы тиергә була, сөнки ”рә” йылға тигәнде аңлата. Бетек + рә = Бетерә.

Беләү йылғаһы. Тарыуалдың көнсығышындағы Беләү йылғаһы - Бетерәнең һул яҡ ҡушылдығы. Элек унан балта, салғы, бысаҡ үткерләр өсөн беләү ташы ала торған булғандар. Беләү ташына бай булғанға был йылғаны “Беләү йылғаһы” тип атағандар. Уның эргәһендәге ҙур яландыла шул исем менән йөрөтәләр. Уң яҡтағы ялан – “Беләү яланы”.

Хәҙер унан бер ҙә беләү ташы алған кеше күренмәй. Хәйер, хәҙер заманы ла башҡа шул. Магазиндарҙан хәҙер игәүен дә, ҡайрағын да, яныуысын да, сарын табырға була.

Турыйылға. Тарыуалдың түбән яғында Бетерәнең уң яҡ ҡушылдыҡтарының береһе-Турыйылға. Ләкин уны элегерәк Туры юрға йылғаһы тип йөрөткәндәр, сөнки был йылға тирәһе бер юрғаның ере булған, йәғни гел генә тип әйтерлек, шул тирәлә йөрөгән. Ваҡыт үтеү менән “Туры юрға йылғаһы” атамаһы ’’Турыйылға” ғына булып киткән, сөнки халыҡ һәр саҡ ҡыҫҡарты- лыуы Кирәй Мэрәндең ’’Фирүҙә тауы”н хәтерләтә. Уның да юғарыла әйтелгән әҫәрендә “Фирүҙә илаған тау” тигән атама һуңынан “Илаҡ тау” менән алмашына.

“Исеменә күрә есеме” тигәндәй, был урынға атамаһы бик тап килеп тора. Сөнки ул тирә-яҡтан ҡуйы урманлы текә тауҙар менән уратылып алынғанлыҡтан, ҡояш һуңыраҡ ҡалҡа, иртә байый, дөрөҫөрәге ҡояш нурҙары һуңыраҡ төшә, иртәрәк ышаҡлана. Икенсенән, бында тирә-яҡта күпселек ҡарағай ағастары үҫә.

Ә ҡарағай, шыршы урмандарында, белеүебеҙсә, ҡараңғыраҡ була. Шулай итеп, бында башҡа урындарға сағаштырғанда ҡараңғылыҡ оҙағыраҡ була, һәм йәйләү урыны һәр ваҡыт ышыҡ, күләгәлә булғанға был урын шундай атама йөрөтөргә мәжбүр булған.

Каркабар. Каркабар йылғаһы - Бетерәнең уң яҡ ҡушылдығы. Каркабар ’’Һаҙлығы бар” тигәнде аңлата. Был йылғаның буйында, ысынлап та, һаҙлыҡтар бар. Тимәк, боронғоса ’’Каркабар” - хәҙергәсә “Һаҙлыҡ бар”.

Суҫка йылғаһы. Был йылға Тарыуал - Ишей юлының урта торошонда. Ул тирәлә элек ялан яҡтарынан: Этҡол, Байым ауылдарынан килеп йәйләр булғандар.

Бер ваҡыт был йылға буйлап уның башынан Ҡана яҡтарынан, аҙашып бер суҫка килеп сыға. Ул Ҡана урыҫтарыныҡы булғандыр инде. Белеүебеҙсә, мосолман халыҡтары, шул иҫәптән башҡорттар ҙа, суҫканы харам мал тигәндәр. Шуға күрә, йәйләүҙәгеләр, йәндәре көйөп, был

аҙашып килеп сыҡҡан сусҡаны баҫтырып туҡмап үлтерәләр. Ә сусҡа буйлап килгән йылғаның үҙен Сусҡа йылғаһы тип йөрөтә башлағандар.

Буҙарған йылғаһы. Иҫке Собханғолдан Яңы Усман ауылына барғанда Бетерә йылғаһына "Буҙарған йылғаһы" ҡоя. Быҙау баш, Айырыу баш, Туғаш яландары бар. [2]

Тарихи, иҫтәлекле урындар

Ҡыяюл. Ауыл эргәһендәге был юл бик ҡурҡыныс: бер яҡта - текә тау, икенсе яғында - текә ярлы Бетерә. Юлы бик ҡыя булғанға уны Ҡыяюл тиҙәр.

Ҡыйрат. Әсебарға Тарыуалдан барғанда бер тау бите лә, уның аша һалынған юл да шулай атала. Ул да бик ҡыя ҡырын. Хатта хәҙерге көндә уны көслө тракторҙар менән әллә нисә тапҡыр йүнәтеү, һөҙәгәйтеү маҡсатын да һөрҙөргәндән һуң да унан үтеүе ҡурҡыныс: ҡыя. Техниканды ҡыйратыуы бик мөмкин. Исеме лә шуны иҫкәртә.

Ҡырылғануһаҡ урманы. Һуғышҡа тиклем 1930 йылдарҙа көслө ел-дауыл ваҡытында ул урман да бик күп уҫаҡ ҡырыла. Был хәлдән һуңғы күренеш арҡаһында урманға Ҡырылғануһаҡ атамаһы бирелә. Тарыуалдар уҫаҡты уһаҡ тип әйтәләр.

Әсебар утары. Әселектән түбәнерәк Әсебар утары урынлашҡан. Әселектең яҡынлығы уның ошо атаманы ҡабул итеүенә килтергән. Әселек уға бик яҡын, бер саҡрымға ла етмәй, шунлыҡтан Әселек уныҡы һанала. "Уның әселеге бар," -тигәндән ҡыҫҡартып ''Әсебар" тип кенә әйткәндәр, һәм был атама Әсебар булып нығынған. Был тирәгә яҡын Оло Әсебар, Ҡырын Әсебар тигән ерҙәрҙән Әсебар йылғаһы ағып ята.

Айғарағай. Әсебар эргәһендәге бер ҡарағайға шул атама бирелгән. Ысынлап та, уның иң өҫтәге бер ботағы ай шикелле бөгөлөп тора. Борон йәйләүҙәге кешеләр уны мәсет урынына ла файҙаланғандар, йәғни, дине кешеләр ул ағасты изгеләштергәндәр.

Дүртҡарағай яланы. Әсебар утарына барғанда ошо исемдәге ялан буйлап үтергә тура килә. Был исемдең ниңә бирелеүен сит кеше лә аңлай ала, сөнки яландың ситендәрәк әрәмә янында бейек тә, йыуан да булып дүрт ҡарағай үҫеп ултыра. Ана шул мөһәбәт йөҙйәшәр дүрт ҡарағай, үҙҙәре үҫкән яланға Дүртҡарағай исеме бирелеүгә сәбәпсе булып, ирәйешеп үҫеп ултыралар.

Алтығарағай. Иҫке Собханғолға туранан барғанда үтергә тура килгән бер урындың да Алтығарағай атамаһы менән йөрөтөлөүе Дүртҡарағайҙыҡы кеүек: ситтәге бүтән ағастарҙан айырылып, бейегерәктә, йыуаныраҡ та булып бик мөһәбәт алты ҡарағай үҫкән был ерҙә. Үкенескә ҡаршы, уларҙың бер нисәһе урындағы халыҡ тарафынан утынға, башҡа кәрәк-яраҡҡа ҡырҡып алынған, ләкин элек нисек әйтһәләр, өйрәнгәнсәме, әллә мейегә "Алтығарағай" булып һеңгәнгәме, был ер һаман да Алтығарағай атамаһы менән йөрөтөлә.[2]

[1] Иҫке Тарыуал ауылының оло быуын аҡһаҡалы-ағаһы Ишбулатов Уйылдан Ялалетдин улы һөйләп ҡалдырғандарҙы Йылайыр районының Ҡыҙҙар биргән ауылында йәшәүсе 1924 йылғы Ишбулатова Ғылмикамал Зариф ҡыҙы хәтерләүҙәренән яҙып алынды.

[2] Информаторы Әбдрәшитов Әйүп Ғәҙелмырҙа улынан (1907 йылғы) яҙып алынған.
Мәжитова Вәзимә Ишбулды ҡыҙы тарафынан 1973 йылда яҙып алынды.
Байғаҙы ауыл Советы. Май 2005.

Байназар ауыл биләмәһенә ҡараған ер-һыу атамалары

Байназар ауылы

Байназар ауылы Бөрйән районының ҡарағай-ҡыпсаҡ ырыуын ауылдары араһында иң ҙуры һәм йәше буйынса иң боронғо ауылдарының береһе. “Башҡорт шәжәрәләре”нән күребеҙсә, Күҫәкбей Ҡараҡоломбәтте Ҡурыуҙы тауында язалап, атаһының ҡонон алғас, тауҙан Ҡараһыйыр (йәки “бей”) кисеүе” ярында урынлашҡан ауылға, йәғни киләсәктә Байназар исемен йөрөтәсәк ауылға төшә, “…уны үҙ йортона әйләндерә, …бөтә йортҡа үҙе хужа була…”.

Ауыл Ағиҙел йылғаһының ике яҡ ярына урынлашҡан. Ауылды береһенән-береһе матур тауҙар, йылғалар, шишмәләр уратып алған, үҙ сиратында уларҙың һәр береһенең легендаһы бар. Ауылдың үр яғынан Ағиҙелгә Бешәке һәм Кәлтәгәү йылғалары ҡойһа, түбән яғынан Ҡурғашлы йылғаһы килеп ҡушыла.

Һәр төбәктең үҙенә генә хас булған тарихы, үткәне һәм киләсәге булған кеүек Байназар ауылының да бай тарихы, илебеҙ һәм халҡыбыҙ алдында күрһәткән ҡаҙаныштары, яулаған еңеүҙәре бар.

Бик борондан ихлс күңелле илһөйәр һәм эшһөйәр ҡарағай-ғыпсаҡ ырыуы башҡорттары йәшәгән. Халыҡ малсылыҡ, беренсе сиратта йылҡысылыҡ менән шөғөлләнгән. Бынан тыш, солоҡ ҡорто ҡараған, һунарсылыҡ, балыҡсылыҡ һәм һөнәрселек менән көн күргән, аҙ яғып (ағас күмере әҙерләп) уны йәйләүҙәргә яҡында ғына ятҡан Үрге һәм Түбәнге Әүжән заводтарына һатҡандар. Үртәлгән күмерҙе муйыл, ҡарама, һирәк осраҡта тал сыбыҡтарына ситән кеүек үрелгән һәм эш санаһына йәки арбаһына ултыртылған, һәм “күрек” тип аталған ҡулайламаға – ҙур һауытҡа тейәп ташығандар. Ағас күмерендә иретелгән тимер үҙенең юғары сифатлы булыуы менән айырылып торған. Шулай уҡ һалабаш һалғандар, септә һуҡҡандар, арҡан ишкәндәр, ағас әҙерләп ҡыуғын ҡыуғандар, туғын бөккәндәр, уларҙы игенгә һәм башҡа кәрәк-яраҡтарға алыштарғандар. Бының өсөн улар йыл һайын Темәс, ҡыҙыл Мәсет һәм башҡа йәрминкәләргә йөрөгәндәр. Иртә яҙ менән өйөр-өйөр малдарын алып ауыл халҡы йәйләүҙәргә күскән, унда көҙҙөң һуңғы көндәренә тиклем йәшәгән.

Байназарҙарҙың күпселек йәйләүҙәре Ағиҙелдең уң ҡушылдығы булған Кәлтәгәү йылғаһы буйында урынлашһа, ауылдан иң алыҫта ятҡан йәйләүҙәр Кесе Нөгөш йылғаһы буйында булған.

Кәлтәгәү йылғаһы тамағында урынлашҡан “Кәлтәгәү тамағы”, унан үргә “Оҙон туғай”, “Үтәнәк”, артабан “Көһәш” кеүек бәләкәй йәйләүҙәрҙе иртә яҙ менән файҙаланғандар. Унан һуң “Урыҫ көрөгө (күрегe)”, “Иҙәле”, “Ҡайынйорт”, “Ҡыҙылъяр”, “Аҡташ” йәйләүҙәре- кәлтәгәү йылғаһының иң матур туғайҙарында урынлашҡан, ә тау битләүҙәре һәм уларҙың һырты ҡуйы ҡарағай урманы менән ҡапланһа, урмандағы ҡалын мүк араһындағы көртмәле емештәре емерелеп үҫкән.

Исламбай һәм Аҫҡар ауылдарына яҡын Кесе Нөгөш йылғаһы буйында “Йәйге кисеү”, (икенсе исеме “Байназар ултырышы”), шулай уҡ “Танасыҡҡан” тауы битләүендә “Танасыҡҡан” йәйләүе урынлашҡан. Кесе Нөгөштән түбәнгә табан Ғәлиәкбәр ауылы йүнәлешендә урынлашҡан Оло Нөгөш йылғаһы үре буйында “Ғүмәр утары” Байназар ауылының иң алыҫта ятҡан йәйләүе була. Иҙелдең һул яҡ ҡушылдыҡы булған Бешәке йылғаһының “Үтә тишек” мәмерйәһенә ҡаршы ятҡан туғайында Хәбир утары булған.

Заманы өсөн мөһим сауҙа юлдарының ҡайһы ерҙәре Байназар ауылы аша үткән. Мәҫәлән, “Урыҫ юлы”, йәки “Ҡаҙна юлы” тип аталған юл Үрге һәм Түбәнге Әүжән, Ҡағы һәм Үҙән ҡасабаларындағы тимер етештереү заводтарын Темәс һәм Ҡыҙыл Мәсет (хәҙерге Мораҡ) ауылдарындағы йәрминкәләр менән тоташтырған. Байназарҙар “һыу юлы”нан, йәғни Ағиҙел буйлап Стәрлетамаҡ ҡалаһына тиклем һал ағыҙып та кәсеп иткәндәр. Шулай уҡ “тоҙ юлы”, “ҡышҡы юл”, йәки “сана юлы” тип аталғандары ла булған.

Байназарҙар Рәсәй алып барған бөтә һуғыш хәрәкәттәрендә лә ҡатнашалар. Граждандар һуғышы осорондааyыл бер ҡыҙылдар, бер аҡтар ҡулына күсә, уларҙың һәр береһе халыҡтан аттар, йә аҙыҡ-түлек талап итә, халыҡты йәберләйҙәр.

Граждандар һуғышы тамамланыуға илгә икенсе афәт килә. 1921-1922 һөҙөмтәһендә Байназар ауылы халҡы ҡот осҡос юғалтыуҙар кисерә. Әгәр ҙә 1920 йылда Байназар ауылында бөтәһе 1152 кеше йәшәһә, 1926 йылға ни бары 464 кеше ҡала.

1922 йылда хәҙерге Байназар участка дауаханаһы урынлашҡан урында ауыл мәсете янында мәҙрәсә асыла. Уны указлы мулла Әбделвәхит хәҙрәт Салауатов асһа, хәлфәлек эшен Шәкир Исәнғазин башҡара. 1924 йылда ошо мәҙрәсә бинаһында Байназарҙа беренсе баҫҡыслы тәүге совет мәктәбе ойошторола. Мәктәпте ойоштороусы, уның тәүге уҡытыусыһы һәм мөдире Ырымбур педтехникумын тамамлап килгән Ғаяз Ҡәҙерғолов була. Тәүге уҡыу йылында мәктәпкә ни бары 12 ир бала йәлеп ителә, ҡыҙ балалар уҡырға килмәй. 1925 йылда балалар һаны артыу сәбәпле мәктпкә яңы уҡытыусылар йәлеп ителә.

Мәктәп 1934 йыла ете йыллыҡҡа әйләнә һәм яңы бинаға күсә, 1936 йылда тәүге сығарылышын яһай.

Хәҙерге көндә Байназарҙа күпләп шәхси йорттар төҙөлә, 440 урынлыҡ Байназар урта мәктәп, 160 урынлыҡ мәктәп яны интернаты биналары, 250 урынлыҡ ауыл мәҙәниәт йорто, ике ҡатлы ауыл Советы һәм колхоз идараһы, Ағиҙел аша күпер төҙөлдө.

Ауылда 454 хужалыҡ иҫәпләнеп, унда бөтәһе 1503 кеше йәшәй. Ауылда балалар баҡсаһы, дауахана, аптека, мәҙәниәт йорто, мәсет, почта бүлексәһе һәм башҡа ойошмалар бар.

Байназар ауылы ер-һыу атамалары

Тауҙар, ҡаялар, түбәләр

Ҡурыуҙы. Торатауҙа Торағол исемле хан йәшәгән. Уның батыры Бабсаҡбей була. Бөрйән районында Мәсем тауы бар. Унда Мәсемхан йәшәгән. Уның батыры Ҡарағөлөмбәтбей була. Мәсемхандың малын бер януар ҡыра икән. Йәнлек ауларға киткән һәр бер кеше юғала ла ҡуя, ҡайтмай, ти. Мәсемхан Торағол ханға мөрәжәғәт итә. Торағол Бабсаҡ бейҙе ярҙамға ебәрә. Бабсаҡ менән Ҡарағөлөмбәттең ғәскәре был йәнлек ятҡан Һандыҡташты уратып ала. Ошо ваҡыт Ҡарағөлөмбәт Бабсаҡҡа атырға ҡуша һәм йәнлекте Бабсаҡ үлтерә. Бик көнсөл Ҡарағөлөмбәт Бабсаҡты үлтерә. Бер ни тиклем ваҡыттан Бабсаҡ бей ҡатынынан бер ир бала донъяға килә. Малай бик көслө, батыр булып үҫә. Кешеләрҙән атаһы менән булған хәлде ишетә, әсәһенән һөйләтә һәм Күсәкбей (малайҙың исеме шулай була) атаһының ҡонон ҡайтарырға була.

Ҡарағөлөмбәтте табып, уның ҡулын бәйләп, башына ҡаҙан ҡаплап, ҡара һыйырға атландырып Байназар ауылындағы бейек тауға мендерә. Ҡаҙанға һалып Ҡарағөлөмбәтте ҡура. Тауға Ҡурыуҙы исеме бирелә. [9]

Осло тау – Науразбай тауы (1 вариант). Науразбай ҡарт (Көшөлдәрҙең олаталары) яҙ етеү менән боҙ китер алдынан йылҡыларын Ағиҙел арьяғына ҡыуып сығарғандар. Йылҡылар көнсығышҡа табан Кәлтәгәү йылғаһына тиклемге урын биләп йөрөр булған. Тауын Мәхмүт мулланың бер кәбән бесәне тип атап йөрөткәндәр. Тауҙың кәбәнгә оҡшап торғанын Науразбай тауы тип йөрөтәләр.

Науразбай тауы (2 вариант). Борон Кәлтәгәү йылғаһы буйында Науразбай исемле бабай йәшәгән. Ул бик бай булып, күп мал аҫраған. Йәй көнө бесәнде күп эшләй алмаған, шуға ҡышын бесәне бөтә башлаһа, былай тип әйтер булған: “Минең әле бер кәбән бесәнем бар!”

Ә бабай үҙе малдарын яҙ көндәрендә иң тәүҙә ҡарҙан әрселгән эргәһендәге тауға ебәрер булған. Ҡышын был тауға Науразбай ҡарт һунарға йөрөгән. Үҙе үлгәс, тауҙы уның исеме менән атағандар. [8]

Бәләкәй Келәтбар. Ағиҙелдең уң яғындағы тау. Хәйбә инәйҙәр ултырған өй тәңгәлендә таштар эре, келәткә оҡшаған.

Сар арҡаһы. Был таулыҡта сар ташы булғанға, уның өҫкө битләүен Сар арҡаһы тип йөрөтәләр.

Ҡыҙырым тау. Ҡурыуҙы тауының түбәнге дауамы, ауылды уратып алған тау теҙмәһен Ҡыҙырым тау тигәндәр.

Ҡайраҡты тауы, Ҡайраҡты шишмәһе. Ҡайраҡ алғандар ҡайраҡҡа эшкенгән таштар күп булғанға күрә шулай аталған да инде. Янында шишмәһе лә бар, уны ла Ҡайраҡты шишмәһе, тиҙәр. [1]

Ҡанһәпәр тауы. Ҡояш байығандан һуң шул тау өҫтөндә ҡайһы ваҡыт болот ҡыҙыл шаршау һымаҡ торған. Болоттоң был төҫтә тороуы халыҡҡа хәүеф тыуҙырған, оло бәлә-ҡаза килерен көткәндәр. Ул ябырылмаһын өсөн, йыйылып, аллаға именлек һорап табынғандар. Шуға ул тауҙы Ҡанһәпәр тип атағандар һәм уға бағышлап таҡмаҡ-әйтеүҙәр сығарғандар:

Дәжжәл ҡалҡһа, шунан ҡалҡыр;
Яңғыҙ күҙе маңлай уртаһында булыр.

Көһәш тауы. Боронғо заманда Көһәшҡол исемле бер ҡарт йәшәгән ти. Ул оҫта һунарсы булған. Берҙән-бер көндө ауылды һыу баҫҡан. Көһәшҡол ҡарт әбейе менән һыу баҫыуҙан ҡурҡып Оҙон туғай байына, Ағиҙелдең аръяғына күсеп киткән була. Бер ваҡыт уларҙың аҡ һыйыры юғала. Әбей һыйырын юллап ауылға йүнәлә. Һыйыр боҙ аша сығып киткән була. Һыйыр артынан юллап, боҙ аша сығып барғанда әбей боҙ аҫтына китә. Әбейе лә, һыйыр ла ҡайтмағас, Көһәшҡол ҡарт яңғыҙ тороп ҡалған. Ул йәшәгән тауҙы “Көһәш тауы” тигәндәр.

Мөхәмәт тауы. Гөлйемеш ҡаяһының үръяғындағы тауҙы Мөхәмәт тауы тип йөрөткәндәр. Ошо тау итәгендә ул тары сәскән, һуңынан бесәнлек булған. Мөхәмәт бабайҙың балалары Салауатова Ғәйшә, Науразбаева Мәрзиә, Науразбаев Сәфәр. [1]

Бәләкәй шыуҙырғыс. Күгәрсен ҡаяһы эргәһендәге тауҙы Бәләкәй шыуҙырғыс тип йөрөтәләр. Ул бик текә, ағас шыуҙырырға уңайлы, ләкин алыҫыраҡ. Элек башҡорттар ағас менән кәсеп иткәндәр. Ағасты ҡырҡалар, һыуға төшөрәләр һәм йылғаның боҙо киткәс, һаллап ялан яҡтарына алып барып һатҡандар. Әлбиттә, туғай аша Иҙелгә тиклем ағасты аттар менән ташығандар, был ырамлы булмаған. Шуның өсөн был шыуҙырғысты аҙ файҙаланғандар, шуға күрә Бәләкәй шыуҙырғыс тип атала.

Оло шыуҙырғыс. Ул бәләкәйенә ҡарағанда текәрәк тә, Иҙелгә лә яҡын. Шуның өсөн күберәк ошо шыуҙырғыстан халыҡ файҙаланған. Шуның өсөн уны Оло шыуҙырғыс тип атағандар.

Шар тауы. Шар түгел, ә Сар арҡаһы. Сар яһай торған ташлы урын булған. Халыҡ уны сар яланы тип атай башлаған. Тора-бара сар һүҙен шар һүҙе алмаштыра һәм Шар тауы булып ҡала.

Олотау. Бешәке йылғаһының һул яғында бейек тау бар. Уның итәгендә колхоздың сабыны була торғайны. Был тауҙың икенсе исеме «Муллин гора», йәки «Мулла тауы» тиҙәр. [5]

Өстәкә. Байназар һәм Мораҙым ауылдары араһында Бешәке йылғаһы Ағиҙел йылғаһына ҡушылған ерҙә, хәҙерге баҫманы үткәс, ҙур бер ҡаяны боролоп үткән ерҙе «Өстәкә» тип йөрөтәләр. Борон был урындан үтеп булмаған, ҡая булған. Мораҙым ауылы балалары мәктәпкә таған менән сығыр булғандар. Шуға күрә, Байназар ауылында ауыл советы рәйесе булып Ҡарамышев Фаяз, ауыл советы секретаре Зәйнуллин Әхмәт етәкселегендә ошо ҡаяны Әүжән леспромхозында эшләүсе Маликов Хәмзәнең звеноһы шартлатып юл һала. Өс көн ошо урынды тәртипкә килтереү өсөн, халыҡ эшкә сыға. Эре-эре таштарҙы Иҙел буйына ташлайҙар. Өмәлә Мораҙым ауылы кешеһе Тулыбаев Мөҙәрис звеноһы ла ҡатнаша. Өмә ваҡытында өс тәкә һуялар. Шунан алып был урынды «Өстәкә» тип йөрөтәләр. [11]

Күгәрсен ҡаяһы. Был ҡая ауылдың уң яғында урынлашҡан. Йәй көнө бында бигерәк тә матур. Ағиҙел йылғаһына терәлеп тиерлек ултырған был ҡаяға һоҡланмаған кеше юҡтыр... Күгәрсен ҡаяһы. Ни өсөн исеме шулай һуң?
Элек, йәғни боронораҡ, бында, ошо ҡаяның уйымында, күгәрсендәр үҙҙәренә тыныслыҡ табып, ғүмер иткәндәр. Ләкин, ауылға электр уты һәм хәҙерге заман яңылыҡтары килеп ингәс, улар икенсе ергә киткәндәр. Бәлки, улар әллә ни алыҫ бармай ауылда ҡалғандарҙыр.. Әммә хәҙер ул ҡаяның исеме Күгәрсен булып ҡалған инде. [10]

Төлкөосҡан ҡаяһы. Борон бер һунарсыға юлында төлкө осраған. Һунарсы уны атып алыу өсөн баҫтырып киткән. Оҙаҡ ҡыуа торғас, төлкө бер ҡая янына килеп еткән. Ҡая башына килеп терәлгәс, башҡа сараһы ҡалмаған төлкө бахыр ҡаянан түбәнгә осҡан. Шунан бирле ҡая Төлкөосҡан ҡаяһы тип йөрөтөлә. [6]

Үтә тишек ҡаяһы. Тау-ҡая тапҡырында Ҡәлтәгәүҙең уң яғынан Ҡарағаслы тигән бейек тау бар. Ул тауҙа гел ҡарағас үҫә. Ә һул яғынан Үтә тишек ҡаяһы ултыра. Ул уңдан да, һулдан да үтә күренеп тора. [7]

Тирмән ҡаяһы. Тирмән ҡаяһы Бешәкенең ағиҙелгә ҡойған ерендә. Был ҡаяның эргәһендә, бешәке йылғаһы буйында һыу тирмәне ҡорғандар. 1918-1919 йылдарҙа Әбделвәхит исемле ҡарт Хабаровскиҙән бер урыҫты алып килеп он тарттыртҡан. Был тирмәндә Апанас исемле урыҫ та эшләгән. Ул Быков Николайҙың атаһы булған.

Ҡарағаслы түбәһе. Был урын Мораҙымға киткән юл буйында, Бешәке йылғаһының һул яғындағы бейек тау. Яҙ көнө Ағиҙел йылғаһы ташһа, кешеләр Ҡарағаслы түбәһе итәгенән аша төшөп йөрөйҙәр.

Сейә морон. Үгеҙһөҙгән шишмәһенең ҡаршыһында Сейә морон тигән урын бар. Был урындың сейәһе йылда уңа торғайны, тип һөйләйҙәр. Бер мәлде йәй көнө Сейә моронда йөрөгән кәзәләрҙе айыу өркөтә. Бер кәзәне йығып та ебәрә. Кәзәне ашағас, айыу һыуһап, Иҙелгә һыу эсергә төшә. Был айыуҙы күреп ҡалған кешеләр Мансуров Исрафил ағайға барып әйтәләр. Ләкин айыуҙың юлына төшә алмайҙар. [2]

Суҡы башы. Келәтбар үҙәгенең уң яғында ослайып, сурайып торған ҡая таш тора. Был ташты Суҡы ташы тип йөрөтәләр. Яҙ башы менән ошо тирәләге урындар ҡарҙан әрселһә, ваҡ малдар тауға менеп үлән уртлай башлайҙар.

Гөлйемеш суҡыһы. Бер хәлле генә кешенең Гөлйемеш исемле ҡыҙы була. Ул аҡылға бер төрлөрәк булған. Күңелен күтәрер өсөн ҡая ташҡа баҫып, Иҙелгә ҡарап торор булған. Бер ваҡыт башындағы ҡыҙыл яулығы осоп китеп, ҡая ҡуйынында үҫеп ултырған ҡарағай ботағына барып эленеп тора. Ошо яулыҡты алырға маташҡанда, Гөлемеш ҡаянан осоп һәләк була. Уның хөрмәтенә ҡаяға ҡыҙың исемен биргәндәр. Гөлйемеш – Алтынбаева Ғәйшә Әбделғәлим ҡыҙының өләсәһе булған.

Сафа суҡыһы. Борон, имеш, ошо ҡаяға ултырып бер сал ҡарт ҡурай тарҡкан. Шунан алып был ҡаяны “Сафа суҡыһы” тип атағандар.

Фатима ташы. Был таш Оҙон туғай буйында ята. Шунан ул ошо ташҡа ултырып илап сеңләгән һәм был ташты Фатима ташы тигәндәр.

Йылғалар, шишмәләр, кисеү

Кәлтәгәү йылғаһы (1 вариант). Кәлтәгәү йылғаһының исеме “кәлтә” һүҙенән килеп сыҡҡан. Кәлтә икенсе төрлө һикәлтә тигәнде аңлата. Йылғанаң тауышы ла келтелдәп кенә аҡҡан тауыш ығарып ята.

Кәлтәгәү йылғаһы буйында Сысканғолдоң нәҫеле Науразбай ҡарт йәшәгән. Науразбаевтар көшөлдәр араһына ҡарай.

Кәлтәгәү йылғаһы (2 вариант). Ағиҙелгә уң яҡтан ҡойоусы был йылғаға исемде боронғо йәйләүгә күсеп килеүсе кешеләр ҡушҡан. [7]

Бешәке йылғаһы. Был йылға түңгәүер ырыуына ҡарай. Ул Элгәләү артында, Яңы йорт тигән урындан башлана. Исеме “бешәлек” тигән һүҙҙән алынған. Бешәлек (бешә) - йәш ҡарағайлыҡ тигәнде аңлата.

Бешәке тамағы. Бешәкенең Ағиҙелгә ҡойған урыны-ауыл халҡының борон-борондан һабантуйҙар үткәргән урыны була. Хәҙер ҙә был урын ауыл халҡының яратып ял иткән урыны.

Ҡайын өй (Ҡәйнөй) йылғаһы. Ҡәйнөй йылғаһы Яуымбай ауылы аша үтеп, Батман ҡолағының түбән яғында Бешәкегә килеп ҡоя. Ҡәйнөй йылғаһында батша балығы - бағры һәм бәрҙе балыҡтары бар.

Үгеҙһөҙгән урыны, шишмәһе. Ҡурыуҙы тауының һул яҡ битләүендә Үгеҙ һөҙгән шишмәһе бар. Был шишмәнең тарихы былайыраҡ: борон башҡорттар бер урындан икенсе урынға күсеп йәшәгәндәр. Бер ваҡыт ике үгеҙ һөҙөшә башлайҙар. Үкерә-үкерә ҡара үгеҙ ерҙе һөҙөп торғанда был урындан һыу килеп сыҡҡан. Шунан алып был урынды Үгеҙһөҙгән, йәғни Үгеҙһөҙгән шишмәһе тип атағандар. Шишмә яҙғы айҙарҙа мул һыулы булһа ла, йәй көнө ҡорой. Борон был шишмә ҡоромаған. [1]

Еректе йылғаһы. Бәләкәй иген буйлап килеп, Бешәкегә тешкән ерҙә Еректе йылғаһы юлды аша ағып төшә лә Бешәкегә килеп ҡоя. Йылғаның башында ереклек үҫә.

Урыҫ Курыбы йылғаһы. Борон был ерҙә урыҫтар ситән үргән. Башҡорттар шулай тип исем биргәндәр. Был йылға Кәлтәгәү йылғаһына килеп ҡушыла. [7]

Тарағы йылғаһы. Имеш, Бөрйәндәрҙең атаһын Ҡырыуҙы тауында ҡурғас, баҫмасылар ошо йылғаға төшөп таралышып киткәндәр. Таралып киткән саҡта улар уның һөйәктәрен йылға башына ырғытҡандар. Шунан алып был йылғаны Тарғынды һуңынан Тарағы тип йөрөтә башлағандар.

Ҡайраҡлы шишмәһе. Ағиҙелдең арғы яғында, Оло шыуҙырғыстың һул яғында үҙәк китә, шул үҙәктән йылға ағып сыға. Был йылға буйындағы ташты ҡайраҡ өсөн ҡулланғандар.

Аҙнаш котоғо. Бешәке йылғаһының һул яғында Бәләкәй игенгә шишмә сығып ята. Уның улағы ла бар. Был шишмәне Аҙнағол ҡарт соҡоған тиҙәр. Бәлки Аҙанғолдор, әммә исемен ҡыҫҡартып Аҙнаш ҡотоғо тип йөрөтәләр [5]

Тәрән уя. Ҡурыуҙы тауының һул яҡ үҙәгендә тәрән уя ята. Был уянан шишмә урғылып сыҡҡан. Шишмәнең һыуы бик тәмле. Яҙ көнө ауылдың әбейҙәре самауырҙарын алып сығып, ошо урында сәй эсеп ҡайтыр булғандар. Шишмәнең һыуы ҡоролоҡ йылы ҡорой.

Бей кисеүе. Бей кисеүе – Байназар ауылында больница тапҡырындағы кисеү. Элек бөрйән менән ҡыпсаҡтар яу тотҡандар. Шул яуҙа ҡыпсаҡ батыры Күсәкбей, бөрйәндәрҙе ҡыйратып, ырыу башы Ҡарағөләмбәтте ҡулға алған да, мыҫҡыл йөҙөнән ҡара танаға ултыртып, Байназарға ошо кисеү аша алып ҡайтҡан. Шунан бирле кисеүҙе “Бей кисеүе” тип йөрөтә башлағандар.

Урыҫ ҡурығы (круг). Имеш, ошо йылға буйында урыҫтар тәгәрмәс яһағандар. Шунлыҡтан башҡорттар был йылғаны «Урыҫ ҡурығы» тип атағандар.

Ҡыҙылъяр. Ағиҙел аръяғында, Истамкиндар яғынан Ҡыҙылъярға сығып китәһең. Был урында ҡып-ҡыҙыл балсыҡ сығып ята, саҡ ҡына ямғыр яуһа ла машиналар йөрөй алмай, балсыҡ иҙелеп ята. [5]

Яландар, туғайҙар

Тарағы яланы. Имеш, бөрйәндәрҙең атаһын Ҡурыуҙы тауында ҡурғас, баҫмасылар ошо йылғаға төшөп таралып киткәндәр. Таралып киткән саҡта, Ҡарағөләмбәттең һөйәктәрен йылға башына ырғытҡандар. Шунан алып был йылғаны “Тарағы йылғаһы” тип йөрөтөр булғандар. [9]

Ҡарайғыр яланы. Был яландың тарихы былайыраҡ. Яланда ике айғыр талашып китәләр. Улар тешләшеп торған ерҙә ҡушылып үҫкән ҡайын була. Шунан береһе муйынынан аҫылынып, сүгәләп, артына ултыра төшә. Ат тора алмай аҙаплана л шунда үлә. Шунан алып был ялан “Ҡараайғыр” яланы тип атала.

Кәкерсән яланы. Борон был урында Корсаков исемле урыҫ бесән сапҡан. Был урын Бешәкенән үрҙә, тау башында.

Көһәш туғайы. Ул туғайҙа бик борон Көһәшҡол тигән бай ҡарт малдарын көтөп ятҡан. Шуға был ергә Көһәш туғайы тип исем биргәндәр. [1]

Сабынлыҡтар

Низам сабыны. Был урында Низаметдин исемле ҡарт бесән сапҡан. Низам сабыны Яуымбай менән Байназар араһындағы арҡала урынлашҡан (Ҡурыуҙы тауының арҡаһы).

Һимеҙ тартай. Байназар менән Яуымбай араһында, юл буйында, Бабай үлегенең һул яғында ята.

Салауат сабыны. Сабындың исеме Салауат исемле кешегә бәйләнгән. Был сабында Ҡурыуҙы арҡалығында урынлашҡан. [3]

Төрлө ер-һыу атамалары (соҡорҙар, үҙәктәр, иҫтәлекле, тарихи урындар)

Супаҡ соҡоро. Батман ҡолағының өҫ яғында Юшалый тигән урында бер ҙур ғына үҙәк булған. Унда бесән гел уңған. Ошо соҡорҙа бер туған ағалы-ҡустылы Собханғол (Зәйнуллина Һәҙиә инәйҙең олатаһы) һәм Собханғәле Байназаровтар бесән эшләгәндәр. Шунан алып уларҙың исемдәрен ҡыҫҡартыпмы, ҡушаматы буйынсамы, "Супаҡ соҡоро" тип йөрөткәндәр.

Йәрмәш соҡоро. Йәрмәш соҡоро – тәрән, ҡараңғы үҙәк. Был соҡорҙо Йәрмөхәмәт исемле кешенең исеме менән атағандар. Кешенең исемен ҡайһы берҙә тулыһынса әйтмәйҙәр, шунлыҡтан Йәрмәш тигәндәр.

Ҡандыбил. Бик борон ошо урында башҡорт халҡының малдары тибендә йөрөгән. Ә ҡаҙаҡтар уларҙың малдарын ҡыуып алып китер булғандар, ҡайһы саҡта һылыу-һылыу башҡорт ҡыҙҙарын да урлаған саҡтар ҙа булғылаған. Ә башҡорттарҙы был күренеш бик ныҡ ялҡытҡан. Бер мәл башҡорттар менән ҡаҙаҡтар арһында ҡан ҡойошло һуғыш булған. Бик күп ир-егеттәр үҙҙәрен ҡорбан иткән ошо һуғышта. Ошо ваҡиғанан алып был яланды "Ҡандыбил" тип атағандар. Бөгөнгө көндә "Ҡандыбил" йәйләүендә Байназар фермаһы йәйләй.

Келәтбар үҙәге. Борон ошо бер ҡая тишегенә байҙар байлығын йәшерә торған булғандар. Улар был ҡая ҡыуышлығын Келәтбар тип йөрөтә торған булғандар. Был үҙәк хәҙер таштары шыуып, кешеләрҙең йөрөгән һуҡмағына әйләнде.

Вәдүт балаганы. Был урында Вәдүт исемле ҡарттың балаганы булған. Шунан алып был урын Вәдүт балаганы тип атала.

Бабай үлеге. Бабай үлеге ҡалҡыулығы Байназар менән Яуымбай араһында урынлашҡан. Был урында Ҡарасуриндар араһынан булған ҡарасура исемле ҡарт ерләнгән. Ҡарасура ҡарт Байназарҙан ҡайтып килгән саҡта, юлда үлеп ҡала. Үлер алдынан ул: "Мине ошо урында ерләгеҙ, ике ауылдың аҙан тауышын ишетеп ятайым", тип әйткән булған. Һуңынан бер ҡәберлекте Яуымбай ауылы кешеһе Назаров Ҡотлоғәләм бабай тимер рәшәткә менән кәртәләтеп, эргәһенә ҡарағай ағасы ултырта.

Айсуҡан. Оло инә айыу һыу эсергә Иҙелгә балаларын эйәртеп төшкән. Һуңынан үҙе үрҙәге үҙәктән, ә балалары икенсе үҙәктән сығып киткәндәр.

Бурташ. Был урында бурташ табылған була. Таш ыуалып тора. Борон был таш менән тире иләгәндәр. Элегерәк колхоздың тана-торполарын ошонда көтә торғайнылар.

Йылан ояһы (Йылан үҙәге). Был әрәмә лә йылан күп була. Бигерәк тә туҙбаш йыландар. Йыландар ошо урында ҡауышҡандар. Шуға бынан үтеүе ҡурҡыныс булған. Элегерәк, хатта аждаһа йыландар ҙа булғылаған, тип һөйләйҙәр. Бер мәлде Салауатова Фәтхиә инәй аршин оҙонлоҡ йылан күрә, ләкин уға был йыландың бер осо ғына булыуын әйтәләр. Бөгөнгө көндә халыҡта йылан ояһынан болот сыҡһа ямғыр яуа, тигән һынамыш та йәшәй. [4]

Әбей үҙәге. Кәлтәгәү йылғаһының уң яғында Әбей тауы бар. Был тауҙа сейә күп була. Ауылдың әбейҙәре был тауҙа сейә тиргәндәр. Бында айыу ҙа була, шуға бала - сағалар әллә ни йөрөмәгәндәр.

Шыршы үҙәге. Бында үҫеп ултырған йыуан ҡарағас йылғаға ҡолаған. Шуға был үҙәкте «Шыршы үҙәге» тип атайҙар.

Сейәле тау биләне. Тау биләненең һул яғында сейә ағасы ҡыуаҡтары бар. Ул Науразбай тауына килеп ҡушыла. Унда сейә ағастары бик күп булғанға Сейәле тау биләне тип йөрөтөлә.

Зөлхәм муйыллығы. Кәлтәгәү тамағының ҡаршы битләүҙә, Иҙелдең уң ярында Зөлхәм муйыллығы тигән урын бар. Был урында Зөлхәмиҙә исемле ҡатындың сабынлығы була. Зөлхәмиҙә Әбделғәлимдең ҡатыны була. Был урында ул кәртүк тә, тары ла сәскән булған. Ауылдың ҡатындарын ҡушып кәртүген утатҡан. Эргәһендәге муйылын үҙе генә тиргән, кешенән тирҙермәгән.

Батман ҡолағы. Ҡурыуҙы тауының артында Батман ҡолағы тигән урын бар. Был урында батмандың (ағас һауыт) ҡапҡасымы, ҡолағымы төшөп ҡалған. Батман менән ҡатыҡ алып йөрөткәндәр, ҡатыҡтан айран бешеп бесәнселәргә эсергәндәр.

Ҡаратал. Байназар менән Яуымбай ауылы араһындағы бер үҙәктә ҡуйы таллыҡ булған (хәҙерге оло юлдың уң яғында). Шуға «Ҡаратал» үҙәге тип атағандар.

[1] Алтынбаева Ғәйшә - 82 йәш, Чуракова Фәрхиә яҙып алды.

[2] Мәғлүмәт Миндеғолова Мәрхәбә Хәйривара ҡыҙынан алынды.

[3] Мәғлүмәт 2005 йылда Науразбаев Баязит Хәмит улынан алынды.

[4] Әхмәтова Гүзәл Зиннәт ҡыҙы әҙерләгән.

[5] Салауатов Зиннур Моталлип улынан Әхмәтова Гүзәл Зиннәт ҡыҙы яҙып алды.

[6] Байназарова Зәйтүнә инәйҙән 2000 йылда яҙып алынды.
[7] Салауатова Хәнифә инәйҙән яҙып алынды.
[8] Науразбаев Зәйнулла Хәмит улынан 1995 йылда яҙып алынды.
[9] Әминева Бәҙрикамал инәйҙән яҙып алынды.
[10] 2000 йылда Асылбаева Фирҙәүес Алтынбаева Зәйтүнә инәйҙән яҙып алды.
[11] 2005 йылда Зәйнуллин Әхмәт Рәхмәт улышан Зәйнуллина Гүзәлиә яҙып алды.

Ҡурғашлы ауылының ер-һыу атамалары

Ҡурғашлы. Ҡурғашлы ауылы бик күп ололарҙың районның иң матур ауылдарының береһе булып ҡалған. Йәшел сиҙәм менән ҡапланған урамдар, ағастар араһында ултырған йыйнаҡ өйҙәр. Ҡурғашлы йылғаһы буйында һәр яҙын ап-аҡ сәскәгә төрөнгән муйылдар, аллы-гөллө сәскәгә күмелгән урман ситтәре, тау битләүҙәре ауылды йәмләндергән. Ауыл төҙөлә башлағас, боронғо йолаға тоғро ҡалып, һыулаған йылғаның исемен ауылға ҡушалар.

Ҡурғашбар. Йылғаның башында ҡурғаш бар, тиҙәр. “Ауылға геологтар килә. Ҡарт геолог Моталовтан лекция һөйләтәләр, йылғаның ошолай аталыуының сәбәбен һорайҙар. Ул ҡулындағы таштың береһен онтай һуға. Унан бармаҡ башы хәтле ҡурғаш сыға”,- тип һөйләй Мөфтәхетдинов Шәрәфетдин бабай.

Шәмәртау. Элекке оло юлға таш мороно сығып торған Байназар һәм Ҡурғашлы ауылдары араһындағы тау “Шәмәр тауы” тип атала. Был тауҙа үҫкән ағастар ҡышын буран, йәйен ямғыр яуыр булһа, шаулай, геүләй башлай. Тимәк, көндөң шәмәреүен (илаҡлауын) хәбәр итә.

Яланүй. Һаҡал туғайынан һуң яланлы тау битләүе “Яланүй” тип йөрөтөлә. Үй “үҙәк” тигәнде аңлата, был ерҙән үҙәк башланған ер булғанға, ошо исемде ҡушҡандарҙыр инде.

Еләктүбә тауы. Яланүйҙән Еләктүбә тауы башлана. Бында инде еләк күп булған. Хәҙер ҙә еләк бешкән саҡта, тауҙағы юлдан үткәндә, еләктең хуш еҫтәренә башың әйләнә.

Биреле күл шишмәһе. Имес туғайының көнбайыш-төньяғында, Елдеарҡаның имән, йүкә, ҡайын, ҡарағай менән ҡапланған битләүенең аҫтынан, эре-эре таштар араһынан терегөмөштәй һыулы кескәй генә шишмә слтырап ағып сыға ла, күптә бармай, һаҙлыҡҡа ҡоя. “Һаҙлыҡ” тигәнен ҡарағусҡыл олонло ҡайындар, бөҙрә талдар, иркенлектә түшен киргән еректәр, һәр көҙөн ҡыҙыл мәрйендәй емештәрен өлгөрткән баландар, телеңде йоторлоҡ һутлы емештәре менән кешеләрҙе туйындырған ҡарағат һәм гөлемештәр төйәк иткән булған. Яҙын, күп һыуҙар дарьяға әйләнгән саҡта, был һаҙлыҡ күл булып китә. Ағастар уның эсендә йөҙөп йөрөгән кеүек. Һуңғараҡ күл сәскә атҡандай тойола. Һыу йылынғас күлдең өҫтө һап-һары сәскәләр менән ҡаплана. Кистәрен тирә-яҡ һандуғас моңона күмелә. “Биреле күл шишмәһе” тип шуға атайҙар – был урын бик тынысһыҙ. Матур булыуына ҡарамаҫтан, шомло ла.

Елдеарҡа тауы. Унан Бөрйәнгә киткән юл үтә. Битләүендә Ҡурғашлының төп урамы урынлашҡан. Был тауҙың да исеме ике төрлө аңлатыла:

1. Байназаров Мөхәмәҙиә һәм Мөфтәхетдинов Шәрәфетдин бабайҙар һөйләүенсә, тау башында ел ныҡ көслө була, йәйге эҫе көндәрҙә аттар себен-серәкәйҙән ҡасып, ошо тау башына менәләр, шуға “Елле арҡа” (“ел” һүҙенән) тип аталған.

2. Шәмиғолов Муса бабай “Елдеарҡа” тип дәлилләй. Сөнки тау оҙон, ҙур, елде, артылаһың да артылаһың.

Имес туғайы. Был туғай исеме Имес кешеләре менән бәйле. Ҡурғашлының ҡарттары әйтеүенсә, был ер аратауҙарҙыҡы булған. Уларҙы аҡтар ҡыҫырыҡлағас, икенсе ергә күсергә булғандар. Байназар ауылы ололары, был туғайҙа күл яғында Имес араһы кешеләре йәшәгән, уларҙы көслөрәк ара кешеләре ҡыҫырыҡлағас, бер нисә ғаилә Байназарҙа ҡалған, күптәре Аратауға күскән, тип һөйләй. Туғайҙы “Имес төбө” тип тә йөрөтәләр.

Төпкөл. Ҡурғашлы мәктәбе урынлашҡан ялан осондағы иң төптә урынлашҡан бәләкәй генә аҡлан. Мәктәпкә яҡын урынлашҡас, унда йыл һайын мәктәп һабантуйы үткәрелә. Ысынлап та төпкөл булғанға шулай атағандарҙыр.

Аҡташ, Ҡараташ. Ҡурғашлы балаларының Ағиҙел йылғаһы буйында һыу ингән ерҙәрендә сумыу өсөн уңайлы булған тәрән урындар. Ҡурғашлы ауылынан Нәби ауылына сыға торған аҫылмалы күперҙән йөҙ метр тирәһе өҫтәрәк, Ағиҙелдең ҡырҡа боролоп аҡҡан урынында Ҡараташ һәм унан илле метр өҫтәрәк Аҡташ - тауҙың тумрайып сығып торған ике ҡаяһы.

Мораҙым ауылы

Мораҙым ауылы хәҙерге Бөрйән районына ҡараған ҡарағай – ҡыпсаҡ ырыуы ауылдарының береһе. Байназар ауылының үр яғында ете саҡрым алыҫлыкта урынлашҡан. Ауылды ололар ике исем менән дә йөртөтә: беренсе исеме Аратау, икенсе исеме Мораҙым. Мораҙым ауылына Байназар аыулынан иместәр араһынан булған Мораҙым Әлмөхәмәтов нигеҙ һалған. Унын өс улы була (Үлмәҫбай,Сөләймән, Насретдин. Аталары менән берлектә мең һигеҙ йөҙ ҡырҡ етенсе – мең һигеҙ йөҙ илленсе йылдарҙа күсеп ултыралар. Мең һигеҙ йөҙ илленсе йылдағы ревезия мәғлүмәттәренә ҡарағанда ун туғыҙ йорт иҫәпләнгән, ә мең туғыҙ йөҙ егерменсе йылдарға бөтөһе ҡырҡ биш йорт иҫәпләнгән.

Ауыл Ағиҙел йылғаһының һул ярында урынлашҡан. Ауыл ҡаҙан эсендә ултырған кеүек күренә, сөнки унын тирә яғынан тауҙар теҙмәһе, шишмәләр, ваҡ йылға уратып алған. Халыҡ уларҙың һәр береһенә легендаһына ярашлы исемдәр ҡушҡан. Ҡарағаслы бейек, Ҡырташ, Олотау, Әбей тауы, Күс юлы, Әреүәрҙе, Кәйкесә, Кәртәле уй, Аратау һәм башҡалары ауылды тирә яҡтан уратып алғанғалыр ҡаҙан эсендә ултырған кеүек күренә. Шуға ла халыҡ телендә ҡояш төшмәгән ауыл типтә ебәрәләр. Ауыл халҡы малсылыҡ, йылҡысылыҡ, солоҡсолоҡ, урмансылыҡ менән шөгөлләнеп көн күргән. Ул осорҙа игенселек менән бик һирәктәр генә шөгөлләнгән, сөнки яҙ башынан йәйләүгә Аҡташ һәм Баҫыу яландарына күсенә торған булғандар. Шуға ла буш ҡалған ерҙәренә киндер сәсеп киткәндәр. Ауыл халҡы кәсепселек менәндә шөгөлләнгән, ялланыпта эшләгән. Аҡташ яҡтарында революцияға тиклем тимер рудаһы һәм алтын ҡаҙыу эштәре менән шөгөлллләнәләр. Сығарылған руданы аҫтына ҡарағас ағастарын түшәп өйөп барғандар, унан тыш Әүжән заводына һатыу өсөн күпләп күмер яндырғандар. Ҡурғашты йылғаһы буйында әлегә тиклем ошо күмер ҡалдыҡтары өйөмдәре осраштыра. Оҙон ҡышта санаға егелгән атттар менән өйөлгән тимер рудаларын Әүжән заводына иретеп суйын ҡойор өсөн ташығандар. Иртә яҙҙан әҙер суйынды һалдар менән Ағиҙел йылғаһы буйлап Стәрле пристанына тиклем ағыҙғандар. Быға дәлил булып Мораҙым ауылы эргәһендә «Максим төбө» тигән урында бар. Ул легендала башҡорттарҙың ялланып, иретелгән суйынды һалдарға ағыҙып төшкән осоронда оло ташҡа бәрелеп һалдары селпрәмә килә. Ул суйындар әлелә Тулыбаев Яңыбай олатайға һаҡланып ҡалған.

Мораҙым менән Байназар ауылдары араһында Бешәке йылғаһында һыу тирмәне була. Революцияға тиклем халыҡтың көн итмеше башҡа ауыл халыҡтарыныҡынан әллә ни айырылып тормаған. Совет власын урынлаштырыуҙа Айытбаев Ҡотлоғәләм һ.б актив ҡатнашҡан. Егерме беренсе йылғы йотлыҡ та ауылды урап үтмәй.

Граждандар һуғышы осоронда ауыл бер аҡтар ҡулына бер ҡыҙылдар ҡулына күсә килә. Аҡ үҙәкте менгән саҡта һул яҡ Үҙәк зыярат үҙәге тип атала. Шунда әҫир төшкәндәрен атып киткәндәр, аҙаҡ ауыл халҡы сығып ерләп ҡуя.

Мораҙым ауылының ер-һыу атамалары

Мораҙым ауылы. Был ауылдың легендаһы шулай. Борон Мораҙым исемле ҡарт үҙенең әбейе менән урам буйлап йөрөп ятҡанда, улар бер эшселәр эшләгән урынға килеп сығалар.

Мораҙым ҡарт был урынды бик оҡшата һәм ошо ергә төйәкләнергә уйлай. Улар эшселәрҙән ерҙе бер әсмүх сәйгә, бер кәструл ҡоротҡа, бер ҡаҙыҡ майға һатып алалар ҙа ауыл нигеҙләп йәшәп киткәндәр. Мораҙым ҡарт исеме менән ауыл статус алған. [1]

Тауҙар, ҡаялар

Аратау (1 вариант). Беҙҙең ауылға иң беренсе булып аяуһыҙ һуғыш ваҡытында бер Имес тигән кеше ҡатыны менән ҡасып килеп йәшәй башлайҙар. Ауылға шул Имес тигән кешенең исемен биргәндәр тип һөйләй ололар. Унан һуң был ауылда һуғыш бөткәс Аратау тигән кеше килеп йәшәгән. Ул бик оҙаҡ тормош ҡороп, ҡартайғас уның исемен ошо ауылға йөрөтә башлаған. Аратау тигән кеше үлеп киткәс уның улы Мораҙым атаһының нигеҙен дауам итеп йәшәгән. Шулай атаһы ауыл исемен уға яҙҙыртҡан. Шулай ауыл Мораҙым булып ҡалған ауыл матурлана, йәмләнә төшкән. Әле лә ауылыбыҙ исемен Мораҙым тип кенә йөрөтәбеҙ. [2]

Аратау (1 вариант). Ауыл уртаһында икегә бүлеп бер тау тора. Унда төрлө ағастар ҙа үҫә. Тау урталыҡҡа торғанға ауылды ла Аратау тип тә йөрөтәләр. Икенсе вариантын да ошо урынға Аратау тигән кеше килеп өй нигеҙләгән. Өсөнсөнән: ауыл ҙурая килә тау урталыҡта ҡалған. Дүртенсенән: уны бөтә яҡтан тау ураҡкан булған, тауҙарға ҡушылып торған. Икенсенән Ағиҙел йылғаһы урап та аға. Юл төҙөүселәр тауҙы шартлатыу һөҙөмтәһендә был тау өс ҡырлы булып уртала ҡалған.

Көртмәле тауы. Был тауҙа элек көртмәле бик күп булған. Көртмәлегә олоһо ла, кесеһе лә йөрөгән. Шунлыҡтан был тауҙы Көртмәле тауы тип йөрөтә башлағандар.

Ҡарталой. Бер ваҡыт бер башҡорт (урыҫ) атын эҙләп ошо тауға килеп сыҡҡан. Шунда ул бер кешене осратып, “Ҡарка бар” тип һораған. Ул ҡара ат бармы тип, был тауҙы Ҡарталой тип йөрөтөлә башлаған. Элек кешеләр бесән сабып йөрөгәндә, улар эргәһенә бер урыҫ кеше килеп туҡтай. Ул урыҫ атын эҙләп йөрөгән була. урыҫ был кешеләрҙән “Карка бар” тигән. Ә теге кешеләр бар-бар тигәндәр. Шунан ҡалғанда инде “Ҡаркалой” исеме “Кәртәле уй”.

Ҡырташ. Был тау ауыл ҡаршыһында бөтә тауҙарҙан аша ҡарап тора. Уның таштары ҡырлы-ҡырлы, ҡырын, ҡыя торалар. Был тауҙа Башҡортостандың ҡыҙыл китабына индерелгән пион (“дөр-дөр”) сәскәһе үҫә. Таштары ҡырын, ҡыя булғанға “Ҡырташ” тип йөрөтәләр. Был ҡая ауылдан ҡырҙараҡ урынлашҡан, Ағиҙел аша ятҡан өсөн уны Ҡырҙа ятҡан ҡая таш тип йөрөткәндәр. Ә һуңынан Ҡырташ тип йрөтә башлағандар.

Баш ярашҡан. Был тау Ағиҙелдең арьяғында урынлашҡан. Әүәл был тауҙа ике ара ырыу Ҡыпсаҡ һәм Бөрйән ырыуҙары һуғышҡандар. Шулай күпләп ҡырыла торғас, Мәсем хан килеп ике яҡта һуғышмаҫҡа тип яраштырып киткән. Шунан ҡалған да инде ике яҡ ырыуҙың Баш ярашҡаны.

Сартылдаҡ. Ағиҙел арьяғында был тауҙа ла аҡтар менән ҡыҙылдар һуғыша. Ауылға ҡылыстарҙың сартылдауы ишетелеп у торған. Шуға ла был тау Сартылдаҡ булып ҡалған. [4]

Әбей тауы. Ауыл урталығындағы көнсығыш битләүҙәге тауға оло инәйҙәр ҡарға бутҡаһына йәш-елкенсәктәрҙе, бала-сағаларҙы эйәртеп алып сыҡҡандар. Биҙрәләр менән йәш-елкенсәктәр һыу сығарған. Ололар аш-һыу әҙерләгәндәр. Үҙ һөнәр-кәсеп бәйләм бәйләү кеүек эштәрҙе йәштәргә өйрәтеп, йырлап-бейеп күңел асҡандар. Сәй эскәндәр, бала-сағаларҙы һыйлағандар. Шуға Әбей тауы булып ҡалған. Хәҙерге ваҡытта был тауҙа ҙур мәктәп ауылға йәм өҫтәп балҡып тора, янында Бөйөк Ватан һуғышы яугирҙәренә памятник ҡуйылған.

Ҡарағаслы бейек. Ауыл эргәһендәге ҡаршы тау бейек тә, ҙур ғына. Тирә яғында ағаслыҡтар үҫә, күберәк ҡарағас ағасынан торған. Өҫкө өлөшөн дә аҡланы, ҡап урталығында ҡарағас

үҫкәнгә лә шулай аталған.

Акташ. Борон был таш ап-аҡ, ҙур һәм ҡаяға оҡшаған булған. Тора-бара ҡая ла ваҡланып эргә-тирәһе аҡ таш менән түшәлгән. Был ергә килһәң ҡапыл күҙ сағыла. Үҙе ап-аҡ ҡая таш булғанғалыр Аҡташ тип йөрөтөлә.

Ташморон. Көньяҡлап Мораҙым ауылына ингәс тә Аратау күренә. Ул тау Мораҙымды икегә бүлеп бераяғы Ағиҙелгә ҡарап торған яғынан бер морон һымаҡ тау һырты сығып тора.шуға ла инде был терәлеп трған ҡаяға Ташморон тип ҡушҡандар.

Олотау. Ауыл аҡһаҡалдары был тауҙы Олотау, тиҙәр. Тау берҙән бейек, тирә-яғындағы тауҙар тәпәш тә, шуғалыр Олотау исеме.

Ҡырташ. Мораҙым ауылы янында бер ҙур тау бар. Ағиҙел йылғаһын быуып тигәндәй күренеп тора. Бирьяҡтағыһы Аратау, ә арьяҡтағыһы Ҡырташ тип атағкандар. Уның бер яғында ағастар үҫә, икенсе яғында юҡ. Ситтән ҡараһаң яртылаш сәсен алдырған малайға ла оҡшаңҡырап ҡуя. Текә яғы ҡырлы таш булғанға ла Ҡырташ, тиҙәр.

Ҡыҙылташ ҡаяһы. Мораҙым ауылындағы был ҡая күпселек ҡыҙыл таштарҙан тора. Шуға ла уны Ҡыҙылташ тип атағандар. Унда ауыл халҡы йыуа йыйырға йөрөй. [3]

Йосоп түше. Элек һуғыш ваҡытында бер ҡарт һуғыштан ҡасып ошо тау битләүенә килеп ултырған. Утар һалған, уның эргәһенә башҡалар ҙа күсеп килеүселәр булған. Һуғыш бөткәс ҡарттар был тауҙы Йосоп түше тип атарға булғас, Йосоп риза булған. Шунан башлап был ер Йосоп түше тип йөрөтөлә башлаған. Һуғыш ваҡытында Йосоп ҡарт тау битләүенә йәшенә. Халыҡтан тере бер нисә кеше генә ҡала, улар тауҙан төшөп килгән саҡта Йосопто түше менән шыуышып китеп барған була, шул ваҡыттан алып был тауҙы Йосоп түше тип атай башлағандар.

Ырым ҡаяһы. Ауылда Рамазан исемле ҡарт йәшәгән. Ул яҙ етеү менән артышҡа барған. Ҡаяға менеп артыш йыйып, өҫтә үҫеп ултырған ағасҡа арҡанын бәйләп ҡаянан төшөр булған. Һәр йыл артышҡа ошо ҡаяға йөрөр булғанға күрә исеме ҡыҫҡартылып Ырым ҡаяһы булып ҡалған.

Күбәташ. Байназар яҡлап оло юл өҫтөндә ауылға яҡынлашҡан ерҙә күбәгә оҡшаған кеүек ҡаяташ тора. Был урын Күбәташ булыр.

Яландар, туғайҙар, сабынлыҡтар

Алешка йәки Әмрика. Башҡорт аҫаба ерҙәрен ҡҫырыҡлап урыҫтар килеп баҫып ултыра башлаған. Алешка исемлеһе күргән башҡорттар яланға ла уның исеме менән Алешка яланы, аҙағыраҡ баҫҡынсы кеше булараҡ Әмрикә тип әйткәндәр.

Айыу тапаған. Тирә яғын әрәмә ураҡкан һаҙмат урында ҙур булмаған сабынлыҡты йылда айыу тапай торған булған, шунлыҡтан Айыу тапаған тип исем ҡушылған.

Аҡбалсыҡ. Әпкә яланынан ары мейес аҡларға яраҡлы аҡ балсыҡ сыҡкан ер бар. Был яланды Аҡбалсыҡ яланы һәм Аҡбалсыҡ урманы, тиҙәр.

Иһем яланы. Башҡорт ерҙәрен урыҫтар тартып ала торғас, Иван исемлеһе лә үҙенә оҡшатҡан яланды баҫып алған. Һуңынан баҫҡынсы Иван ере Иһемгә әйләнгән.

Шамыр төбәге. Элек был ауылда кешеләр йәшәмәҫ борон Шаһым тигән кеше арьяҡҡа сығып

матур аҡланға өй һалған. Шунда донъя көтөп үлеп киткән. Шаһимырҙан исеме ҡыҫҡартылып был абыл аҡланға Шамыр төбәге, тиҙәр ҙә ҡуялар.

Мүңкә яланы. Һуғыш йылдары урыҫтар башҡорт ерҙәрен ҡыҫрыҡлау сәбәпле Мунка исемлеһе ошо яланға килгән, шуға уны Мүңкә яланы тип йөрөтәләр.

Сартылдыҡ, Башярышҡан, Айбикә яландары. Элекке дәүерҙә Мораҙым тигән ҡарт йәшәгән. Уларҙың ерҙәрен гел Әүжән урыҫтары баҫмаҡлап торған. Мал көтөргә уйлап та ҡуялар икән. Шулай урыҫтар менән бәхәс килеп сыға. Бәхәс ҡороу өсөн урыҫтар башҡорттарҙы бәләкәй аҡлансыҡҡа алып сығалар. Бәхәскә ингән ир-аттар килешмәй ҡоралға ҡорал тотоношоп һуғышып китәләр. Күҫәктәренен һынған тауыштары ауылға уҡ ишетелеп тора икән. Шунан был ерҙы Сартылдаҡ тип йөрөтә башлағандар. Мораҙым ҡарт урыҫтар менән тағы һөйләшмәк булып ҡарарға килә: “Етәр, былай ҙа ерҙәрҙе аҙ алманығыҙ, бүтән ер юҡ һеҙгә!”- тигән. Тағы китә ҡаты һуғыш, йәнә ауыл яңғырап торғас, ҡатын-ҡыҙҙар бала-сағаларын алып ирҙәре янына ярҙамға баралар. Өҫтәлмә көс килгәнен күреп ир-егеттәр ҡыҙып китеп урыҫтарҙың баштарын ярышҡансы дөмбәҫләйҙәр. Шунан был урын Башярышҡан тип аталып ҡалған. Урыҫтар ҡаса башлай. Уларҙы эҙәрлекләп ир-егеттәр, улар артынан ҡатын-ҡыҙ бала-сағалар һуҙылып китеп барғанда Айбикә исемле ҡатын-ҡыҙҙың (ул ауырлы көйө сыҡҡан була) тулғағы башлана. Тиҙ генә арала ҡатын-ҡыҙҙар йыйылып, кендек инәйгә йәшерәген ҡайтарып ебәрәләр. Ошо яланды яңғыратып бала донъяға килә. Ат егеп Айбикәне балаһы менән килеп алалар. Шунан башлап был оҙон яланды Айбикә яланы тип атай башлайҙар ҙа инде. [1]

Билдәле, иҫтәлекле, тарихи урындар

Суҡтал. Элек был ерҙә ҡуйы таллыҡ үҫкән. Ҡырташ менән Аратау араларында ла тал үҫкән һәм был ерҙе суҡтал тип атай башлағандар.

Зыярат үҙәге. Аҡтар менән ҡыҙылдар араһынды ҡыҙыу һуғыш барған. Ҡыҙылдарҙың барыһын ды ҡулға алып, аҡтар үҙәккә алып барып аталар. Улар күмелгән урын Зыярат үҙәге тип йөрөтөлә. [3]

Әүереүҙе. Йәй еләк осоронда кемдең генә өйҙә ултырғыһы килһен инде. Йәш әсә лә балаһын тотоп урманға еләк йыйырға барған. Еләк шул тиклем уңған, күп. Әсә балаһын әүрәтеп таш өҫтөнә ҡалдырған да, онотолоп еләк йыйған да йыйған. Иҫенә төшөп ҡалып барһа теге таш янында һаман да әүрәп йөрөй икән. Шунан был тауҙы “Әүерәүҙе”, һунынан “Әреүәрҙе” тип йөрөтә башлағандар. [4]

Ҡуңырүгеҙ. Ауылда әүәлерәк ҡуңыртөҫтәге үгеҙ булған. Яҙ көнө үгеҙ Иҙел аша сығып бейек тау һыртында ҡаялыҡта үлән ашап йөрөй торғас ҡаянан шыуып ҡая аҫтындағы тәрән һыуға барып төшкән. Шуға ла шул урындың исемен Ҡуңырүгеҙ йәки Ҡуңыргүҙ тип тә ҡуялар.

Ҡарағай туғай. Ауыл барлыҡҡа килгәндә арьяҡлап ҡарағай туғайлыҡ булған. Халыҡ ишәйеп, йорттар һала килә ағаслыҡ бөткән. Шул мәлдән алып Ҡарағай туғай булып ҡала килә. [5]

Хисам үҙәге. Хисам исемле кешенең сабынлығы үҙәк башында булған, йөрөр юлы үҙәк кенә булғанға күрә аталышы ла Хисам булып ҡалған.

Ҡараңғы үҙәк. Был үҙәк буйы шығырым ҡарағай ағасы үҫеп иртәнән кискә тиклем ҡояш нурҙарын ҡаплап торғанға күрә Ҡараңғы үҙәк булып ҡалған. Хәҙер ҡарағайҙар ҙа һирәгәйгән.

Кәмәтартҡан (1 вариант). Элек бер ҡарт баҫҡынсыларҙың артынан төшкән, ти. Ҡыуа килә йылғаға барып сыҡҡан. Ҡараһа йылғала кәмә ултыра. Йылға тауҙы уратып аға икән. Ҡарт кәмәне тартып тау аша тураға сыҡҡан, шунан ҡалған һүҙ ул – Кәмәтартҡан.

Кәмәтартҡан (2 вариант). Иҙел түбәнендә бер кеше балыҡ тоторға урыҫтар еренә барып сыҡҡас, уны күргән урыҫтар баҫтыра төшә. Ҡарт тегеләр етеп килгәс кәмәһен һөйрәп тау аша сығып кире ағып киткән.

Кәмәтартҡан (2 вариант). Был яҡтарҙа хәҙерге Әбйәлил районы Тал-Ҡусҡар ауылынан бик данлыҡлы башҡорт батыры Бейеш ҡасып йәшәгән. Уның яҙмышы тураһында легенда һәм йыр бар. Ҡасҡындың был тарафтарҙа йөрөгәнен белеп ҡалған батша яҡлы һалдаттар уның эҙенә төшкән. Бейеш батыр һыу юлы менән ҡасып бара ти. Тегеләр ҙә ҡыуалай икән. Ағиҙел йылғаһы бөгөл яһап аҡҡан бер урында Бейеш батыр кәмәһен һөйрәп (ата-бабалар һөйләүе буйынса ул бик көслө була), урманлы тау аша төшөп, баҫҡынсыларҙы һәптеюҡ артта ҡалдырып артабан Ағиҙел буйлап ағып киткән ти. Ағиҙел бөгөлөндәге иң тар урынды Кәмәтартҡан тиҙәр ҙә инде.

Һәйеткүлән. Әүәлерәк аслыҡ ваҡытында бер Һәйетҡол тигән ир йыуа эҙләп йөрөгән еренән үлеп ҡалған. Шунан алып быыл тауҙы Һәйетүлгән, Һәйеткүлән, Һәйетүлән тип тә ҡуялар.

[1] Айытбаева Хәҙисә Ҡотлоғәләм ҡыҙынан Алибаков Инсур яҙып алды.

[2] Моратшина Ләлә 6-сы синыфта уҡығанда яҙып алған.

[3] Моратшина Мәрйенбикә Ҡотлоғәлләм ҡыҙынан ейәнсәре Тулыбаева Айзилә яҙып алды.

[4] Мөхәмәтйәнов Абдраҙаҡ Даян улынан Мөхәмәтова Гөлфиә Зиннәт ҡыҙы яҙып алды.

[5] Сафин Әнеүәр Сафа улынан Әминева М.Х. яҙып алған.

Мәһәҙи ауылы

Түңгәүерҙең данлы тарихы

Атаҡлы ғалимыбыҙ, башҡорттарҙың тәүге тарихсыларынан булған Мөхәмәтсәлим Өмөтбаевтың: “Аҫаба башҡортҡа өс нәмәне белеү мотлаҡ: беренсеһе – үҙеңдең сығышыңды, йәғни үҙ ырыуыңды белеү; икенсеһе – йондоҙҙарҙы исемләп аңлатыу һәм өсөнсөһө – хандар тураһында риүәйәттәрҙе һәм өләңдәрҙе белеү” тигән.

Түңгәүер (йәки Тәңгәүер, Дүңгәүер) башҡорт халҡының бик боронғо һәм төп ырыуҙарының береһе. Тарихи сығанаҡтарҙан сығып әйткәндә, Үҫәргән, Түңгәүер, Бөрйән ырыуҙары Көньяҡ Уралда беҙҙең эраның VII быуатында уҡ билдәле булған.

Түңгәүер /Таңғауыр/ ырыуы шәжәрәлә уларҙың башбабаһы итеп яҙылған Ҡаңғырат – Ҡаңғы-ир-ат (йәғни Ҡаңғы ырыуының ир-аты, халҡы) тигән һүҙ ул; был иһә Түңгәүер ырыуының, Ҡыпсаҡ ырыуы һымаҡ уҡ, туп-тура – Ҡаңғынан, ә Ҡаңғы үҙе, өҫтәрәк күреүебеҙсә, Үҫәргәндән тармаҡланып сыҡҡан ырыуҙар икәнлеген иҫбатлай. Түңгәүерҙең (йәки Дүңгәүерҙең) туп-тура Ҡаңғы аша Үҫәргән дауамы икәнлеген ул ырыу исемен мифик Ата бүрегә бәйлелеге лә дөрөҫләй.

Башҡорт халҡының төп ырыуҙарының береһен тәшкил иткән Түңгәүер ҡәбиләһенең барлыҡҡа килеү тарихы боронғо Бөйөк Төрки Ҡағанатында (төркиҙәрҙең дәүләте, беҙҙең эраның VI-VIII б.б.) билдәле булған Тонгра ырыуына ла барып тоташа.

Боронғо риүәйәттәрҙә һөйләүенсә, түңгәүер башҡорттары үҙҙәренең килеп сығыу тамырҙарын боронғо төрки донъяһының оло дәүләте – Тәрки Ҡағанат ҡағаны (ханы) Күлтәгин менән дә бәйләйҙәр. Күлтәген VII быуат аҙағы VIII быуат баштарында Икенсе Төрки ҡағанатының ҡағаны булып торған. Орхон-Йәнәсәй йылғалары буйында Күлтәгин ҡаған хөрмәтенә ҡуйылған “бәңгү”(мәңге) ташта табылған. Н.М.Ядринцев (1842-1894) — Себерҙе өйрәнеүсе күренекле ғалим, боронғо төрки Орхон-Йәнәсәй ташъяҙмаларын асҡан кеше. Шулай итеп, Күлтәгин реаль тарихи шәхес булған.

Түңгәүерҙәрҙең килеп сығыуында ҡуңғрат ырыуының этник компонентының ҡыҫылышы ла бар. Шәжәрә буйынса, Түңгәүер бей Ҡуңғрат бейҙең улы тип күрһәтелә. Ҡуңғрат бейҙең ырыуы Сыңғыҙхан империяһы ваҡытында өҫтөнлөклө ырыуҙан һанала, ул Сыңғыҙхан династияһының барлыҡҡа килеүендә һәм нығыныуында билдәле бер роль уйнай. Сыңғыҙхандың ҡатыны, уның улдарының әсәһе Ҡуңғрат бейҙең ҡыҙы Бүртә була. Тимәк, Сыңғыҙхан династияһының хандары Түңгәүер бейгә туған булып сыға. Легендалар һәм архив документтары буйынса, түңгәүерҙәр борон бөрйәндәргә һәм әйләләргә туғанлыҡ ептәре менән бәйле булған.

Түңгәүер этнонимы (ырыу исеме) тарих таңында төрки һәм монгол ҡәбиләләренең бер ерҙәрәк йәшәгәнен дә күрһәтә. Мәҫәлән, монголдар араһында ла тангор, тангур атамалы ырыуҙар булыуы фәнгә билдәле. Ҡайһы бер түңгәүер риүәйәттәрендә уларҙың ата-бабалары итеп, Ҡуңғырат хандың улы Дингәүер күрһәтелә. Шулай итеп, боронғо Түңгәүер ырыуы, боронғо төркиҙәр донъяһынанда көн күреп, төрки ҡәбилә һаналған.

Түңгәүер ырыуының да бик боронғо замандарҙа ҡабул ителгән атрибуттары бар. Түңгәүерҙәрҙең ырыу ағасы – ерек, ҡошо – һайыҫҡан, тамғаһы – ярым ай, ораны – “Ҡуңғырат” булһа ла, ара-аймаҡтарҙың да үҙ тамғалары булған. Улар башҡорт ырыуҙары араһында беренселәрҙән булып ислам динен ҡабул итә.

«Күҫәк бей» башҡорт эпосында түңгәүерҙәрҙең ырыу башлығы Тимерҡотло бей Башҡорт ханлығын һаҡлап алып ҡалыу өсөн ике ҡәбилә араһында сыҡҡан ыҙғышты тыныс юл менән хәл итеүҙе яҡлап сыға.

Боронғо риүәйәттәрҙә түңгәүерҙең тәү йәшәгән ере итеп төрлө урындар күрһәтелә: Урман-Түңгәүерҙәр үҙҙәрен бик борон Һырдарья буйында йәшәгәнбеҙ тип иҫәпләй; шулай уҡ Алтай тауҙарын, Иртыш йылғаһы буйын ҡасандыр бик борон түңгәүерҙәр йәшәп киткән ер тип һанағандар.

Бөрйән, тамъян һәм үҫәргәндәр менән бер рәттән, Түңгәүер ырыуы ла «башҡорт» этнонимын тәү башлап йөрөтөүсе ҡәбилә. Улар бик ҙур ер биләмәләренә эйә була: көньяҡ һәм көнсығыш сиктәре Урал йылғаһының аръяғына, Арал диңгеҙе буйына тиклем, төньяҡ сиктәре Ағиҙел йылғаһы буйлап боронғо Башҡорт (Өфө) ҡалаһына ҡәҙәр барып еткән, көнбайышта Ыҡ йылғаһынан алып хәҙерге Башҡортостандың көнбайыш һәм Татарстандың көнсығыш территорияларына тиклем һуҙылған булған.

Түңгәүер ырыуы IX быуатта данлыҡлы Мәсем хан тарафынан берләштерелгән боронғо ун ике оло башҡорт ырыуы араһында телгә алына. Түңгәүерҙәр, башҡа башҡорт ырыуҙары кеүек, оҙон һәм ҡатмарлы юл үткән: сама менән беҙҙең эраның VII- VIII быуаттарында Бөгөлмә-Бәләбәй ҡалҡыулығында төпләнгән һәм IX быуатта Мәсем хан төҙөгән Башҡорт дәүләте составына ингән. XIII быуаттың беренсе яртыһында татар-монголдар ҡыҫым түҙә алмайынса түңгәүерҙәр Көньяҡ Урал алдына, ә һуңыраҡ бөгөнгө йәшәгән урындарына күсенә.

XVIII быуат аҙағында XIX быуат башында ялан түңгәүерҙәр 9-сы Башҡорт кантонына, Ырымбур губернаһының Ырымбур өйәҙенең Түңгәүер олоҫона инә. Ә урман түңгәүерҙәр 6-сы Башҡорт кантонына, Ырымбур губернаһының Верхнеурал өйәҙенең Түңгәүер олоҫона (Аҫҡар, Мәһәҙи ауылдары ла) ҡарай.

Түңгәүерҙәр араһынан сыҡҡан XIX быуат ғалимы, бер нисә хеҙмәт авторы, әүлиә, мөршид, Башҡортостанда ғына түгел, Урта Азия һәм Ҡаҙағстанға даны таралған Ғатаулла ишан Әбделмәликовтың даны беҙҙең көндәргә тиклем килеп еткән.

Түңгәүер ырыуы ла башҡа башҡорт ҡәбиләләре һымаҡ ырыу төркөмдәренә бүленгән булған. Көньяҡ-көнсығыш Башҡортостанда түңгәүерҙәр Урман-Түңгәүер һәм Ялан-Түңгәүер кеүек ике ҙур ырыуға бүленеүе билдәле. 1762 йылда рус ғалимы П.И.Рычков та был турала мәғлүмәттәр теркәп ҡалдырған. Был ике төркөм шулай уҡ бәләкәйерәк төркөмдәргә бүленгән. Көньяҡ-көнсығыш башҡорттарында был бүлем ара тип йөрөтөлгән.

Беҙҙең Бөрйән, Йылыйыр ерендә йәшәүсе түңгәүерҙәр Урман (йәки көньяҡ)-Түңгәүер ырыуына ҡарай. Улар бүре, күк мейе, суҡмар аяҡ, төрөй, теләнсе, юрмый, бур, ҡамғаҡ, ҡалмаҡ, тәзе, тырма һ.б. исемле араларға бүленгән. Мәһәҙи ауылы аралары: ҡалаҡбаш, сәрмә, үгеҙ, муҙый, сыйҡым, суҡмар, ҡалмаҡ, буҙыҡ. Аҫҡар ауылы аралары: аптрактар, упайлылар, сыуаштар, түмәйҙәр. Ауыл урамдарын да аралар менән әйтәләр.

Мәһәҙи түңгәүерен дә граждандар һуғышы ауылды урап үтмәй, яндырыла ла, яңынан тергеҙелә лә. [1]

Түңгәүер башҡорттары Наполеон францияһына ҡаршы һуғышта

Верхнеурал өйәҙенең Ҡарағай-Ҡыпсаҡ, Түңгәүер, Тамъян ырыуы башҡорттары ингән 6-сы кантонында 14-15-се полктар төҙөлә. 14-се башҡорт полкы (командиры майор Селезнев) (ЦГИА РБ ф. 2, оп. 1, д. д. 2181, 4020,14633) 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашҡандан һуң Лейпциг, Дрезденды, Гамбург, Эрфурт, Веймар, Франкфурт һ. б. ҡалаларын французлдарҙан таҙартып, оҙон һәм еңеүле юл үтеп Парижға барып инә. Был 1814 йылдың 19 мартында була. Дәһшәтле алыштарҙа 14-се башҡорт полктары ҡаһарманлыҡтары айырыуса маҡтауға лайыҡ була. Ватан һуғышының бөтә этаптарында үрнәк булырлыҡ ҡаһарманлыҡ күрһәтеп, Наполеонды Рәсәйҙән һәм Көнсығыш Европа илдәренән ҡыуып, Парижды алып, еңеү менән ҡайтҡан һалдаттар араһында Аҫҡар ауылынан: 1. Итбай Елекбаев, 2. Илсеғол Юлдашбаев, 3. Нәҙерғол Зыянбирҙин, 4. Аҫылғужа Мәскәүов, 5. Ғәҙелша Ҡазакбаев, 6. Имәнбай Батыршин. (Һуңғы өсәүһе Белорет районындағы Исмаҡай ауылын нигеҙләйҙәр).

Мәһәҙи егеттәре Әбүталип Сырлыбаев, Ишмырҙа Яулыбаев, Әбделғариф Әхмәров һәм Юлбирҙе Бөркөтов та була. “Парижды алған өсөн 19 март 1814 йыл” һәм “1812 йыл” исемле көмөш миҙалдар менән бүләкләнгәндәр. Шуныһы билдәле: 14-се полк составының 80 проценты яу яланында ятып ҡала, 99 кеше һәм 223 ат ҡына кире әйләнеп ҡайта. Мәһәҙей егете Баязит Ҡунаҡҡужин илдең Көньяҡ-Көнбайыш сиген һаҡлай, Бессарабияла хеҙмәт итә. [1]

Түңгәүер ерендәге кәсептәр һәм боронғо ҡомартҡылар

Бөрйән, ҡарағай-Ҡыпсаҡ һәм Түңгәүер волостары башҡорттары үҙҙәренең община ерҙәрен һаҡлап ҡалыу маҡсатында XVIII быуат аҙағында элекке утарҙарҙы ауылдарға әүерелдерә башлай. Ауылдар янында ла күпләп йәйләү, яҙлау, көҙләү урындары һәм утарҙар карта ла күренмәү сәбәпле Мәһәҙи ауылы статусы тарихта һуң күрһәтелә. Билгән территорияларының урман зонаһын үҙләштерә. Ауылда тик башҡорттар ғына йәшәй, малсылыҡ менән шөғөлләнә, тик ул да бөлөү осорон кисерә. Игенселек өсөн уңайлы ер ҙә, климатта булмай. Шуға күрә был волостарҙа йәшәүселәр күбеһенсә ағас эше, күмер яндырыу, дегет ҡайнатыу, аусылыҡ, умартасылыҡ менән көн күрә. Ҡомартҡылар исәбенә: ауыл боронғораҡ, Мәһәҙи зыяратында 1405 йылғы ҡәбер ташы табылыуы күп миҫалға дәлил. Мәһәҙиҙәр ауыл йыйыны уҙғарып үҙ ауылының тарихын өйрәнәләр, шәжәрәләрен яҙалар. [1]

Мәһәҙей Түңгәүере тарихынан

Мәһәҙи ауылы район үҙәгенән Иҫке Собханғолдан 44 саҡрым, Байназар ауыл советынан 15 саҡрым, Белорет тимер юлына 104 саҡрым.

Ағиҙелдең ҡушылдығы Мәмбәтһыпы йылғасығы буйында хозур тәбиғәт ҡосағында ултырған, бишенсе ревизия алдынан 1795 йыл, Мәһәҙи ауылы үсеп сыға. Тәүҙә кем килеп ултырғанлығы хаҡында мәғлүмәт юҡ. Ә бына уның улы Әхмәр Мәһәҙиев һәм ейәнсәре Рәхмәтулла, Әбделнасыр Әхмәровтар билдәле. Улы 1834 йылда 83 йәштә була. Ауыл 7 өйҙән (45 кеше) башлана.

1859 йылда – 7 йортта (37 ир–ат һәм 36 ҡатын-ҡыҙ), 95 ат, 58 һыйыр, 30 һарыҡ һәм кәзә тура килгән. 24 бот арыш һәм 232 бот яҙғы культуралар сәселгән. Шул уҡ осорҙа Сәйетбатал Әбделнасыровтар ғаиләһе өҫтәлгән. Насыровтар нәҫеле.

1920 йылда 71 йортта (365 кеше) өй иҫәпләнә. 1921-1922 йот йылдарында халыҡ нык ҡырыла. 1999 йыл 92 йортта 300 яҡын кеше йәшәй, 2002 йылда – 335, 2009 йылда – 348 кеше иҫәпләнә. [1]

R.S Һылтанмалар: 1. Түңгәүер (статьялар йыйынтығы) Өфө, “Китап”, В.М.Бәҙретдинов 2007 й. 2. Рәүиз әкиәттәре 1859 й. Өфө, ЦГИА Ф-И-138, оп.2, д.758, 566, 760, 261.

Мәһәҙей ауылы

Мәһәҙей ауылына тәү башлап 1795 йылда нигеҙ һалына. Ололар һөйләүенсә Мәһәҙи ауылы Ағиҙел ҡушылдығы Мәмбәт буйында урынлашҡан. Әлеге көндә был ҡушылдыҡты башҡорттар - Ылаҡты, урыҫтар – Ашкарка тип йөрөткәндәр. Ауыл ошо Мәмбәт (Ылаҡты, Ашкарка) йылғаһының үр яғында урынлашҡан булған. Ерҙәре матур, киң була башҡорттарҙың.

Сухов фамилиялы урыҫ башҡорттарҙан үгеҙ тиреһендәй генә ер һорай. “Әҙ генә һорай бит” тип ризалаша башҡорттар. Сухов иң ҙур үгеҙҙе һуйҙыра, тиреһен киреп,ҡайыш итеп иләтә. Ҡайышты еп нәҙеклек кенә итеп телгеләй һәм дүрт яҡлап һуҙып һала. Әбйәлил районы Суван ауылы һәм Мәһәҙи ауылы ерҙәре, Ҡайнөй (Яуымбайҙың элекке нигеҙе) ерҙәре шулай итеп Суховка һатыла. Ошолай мәкер-хәйләгә алданған башҡорт йорт-илен ташлап, икенсе урынға күсергә мәжбүр була. Мәмбәт йылғаһы башы Сухов ключкә (йылға башына) әйләнә. Бынан аҙаҡ әллә күпме башҡорт ерҙәре тартып алынған. Мәҫәлән: “1760 йылда Евдоким Демидов 90 мең һумға Үрге һәм Түбәнге Әүжән – Петровск заводтарын һатып ала.1769 йылда Ҡағы йылғаһында плотина төҙөй һәм Ҡағы заводында суйын иретә башлай.” Ошолай итеп башҡорттарҙың уңайлы ерҙәрен урыҫ байҙары баҫып алып ерле халыҡты ҡыҫырыҡлай башлай.

Беҙҙең Мәһәҙи ауылының өс урыны билдәле. Мәсетбар, Күҙгәнәк яланында һәм Сухов Ключ тирәһендә (Хәҙер Ҡағы фермаһы йәйләүе).

Үрге һәм Түбәнге Әүжән, Ҡағы, Ҡотҡор, Үҙән заводчиктары һәм байҙары тарафынан Түңгәүер һәм Ҡайнөй ауылдары туҙҙырылып, яндырылып бөткән.

Мәһәҙи ауылы Ағиҙелдең ҡушылдығы Мәмбәтһыпы йылғасығы буйында ултыра, халҡы түңгәүер ырыуына ҡарай. Ауылдағы аралар:ҡалаҡбаштар, сәрмәләр, үгеҙҙәр, муҙый, сыйҡым, суҡмар, ҡалмаҡ, боҙоҡ һ.б.

Тауҙар

Башарт тауы. Борон-борондан башҡорттар һунарсылыҡ, малсылыҡ һәм төрлө кәсеп менән шөғөлләнгән. Ул дәүерҙә йәшәгән кеше йылҡыны күпләп көткән. Ҡышын аттары, тай-тулаҡтары ҡар һай ерҙәрҙә, тауҙарҙа тибендә йөрөгән. Яҙ етеү менән Ҡыпсаҡ башҡорттары йәйләүҙәргә күсенгән. Ҡыпсаҡ малайҙары бәләкәйҙән уҡ атҡан, үҫеп буй еткәс, алғыр һунарсы булып киткәндәр. Ҡышҡы осорҙо алдан уйлап, күп кенә һунарсылар ит, аҙыҡ-түлекте мул итеп туплар өсөн, йыш ҡына ауыл, йәйләүҙәрҙе ҡалдырып, бер нисә көнгә кейек ауларға алыҫ Ҡыраҡа артына һунарға сыҡҡандар. Ә бала-саға, ҡарттар ауылдарҙа ҡалған булған.

Шулай бер мәлде был яҡтарға ҡырғыҙ һыбайлылары килеп, ауылдарҙы талап, яндырып, һылыу-һылыу ҡыҙҙарҙы урлап, көтөү-көтөү малдарын ҡыуып алып китә. Табыштан ҡайтҡан ҡыпсаҡтар яндырылған, таланған ауылдарҙы күреп хайран ҡала. Урланған мал-тыуар, һылыуҙарҙы юҡһынып, шул көндән асыу, үс-нәфрәт тотҡан ҡыпсаҡтар ҡарымтаға әҙерләнгән. Был ваҡиға Һарғая ауылының түбән яғында була. Үҙән буйында ҡыпсаҡтар, Шыртуғайҙа һәм Балайылғала яуымбайҙар урынлаша.

Был көндө таң менән ҡырғыҙ ҡаҙаҡтарының атаманы һамаҡтай-һамаҡтай, ҡулына суҡмар урынына йылҡы малының елек һөйәген тотоп, үҙенең һыбайлыларын дәртләндерә-дәртләндерә алдан елгән тиҙәр. Әллә ҡайҙан һамаҡлап килгән ҡырғыҙ атаманының иртәнге тынлыҡты бүлеп яңғыраған зәһәр тауышын ишетеп ҡалған ҡыпсаҡ батыры уғын төҙәп, тегенең ҡаҡ маңлайына атып ебәрә. Уҡ маңлайға тейеп, соңҡа һөйәгенән үтә сығып китә. Ошо ерҙә тиңһеҙ алыш башлана. Ҡыпсаҡ, Яуымбай кешеләре баҫҡынсы ҡырғыҙ ҡаҙаҡтарының байтағын ҡырып һала, иҫән ҡалғандарын ҡулға алалар. Ә теге атамандың, шулай уҡ башҡа баҫҡынсыларҙың киҫелгән баштарын алып, иҫән ҡалған һыбайлыларының ҡанъяғаларына бәйләп “Был яҡтарға яуыз уй менән килгәндәрҙе ошо яҙмыш көтәсәк!” — тип ҡайтарып ебәргәндәр. Бынан һуң да әле баҫҡынсылар төпкөлдәге ауылдарға аңғармаҫтан килеп китәләр. Әммә ҡыпсаҡтар менән Яуымбайҙарҙың берҙәмлеге баҫҡынсыларҙы киң урманлы был төбәккә башҡаса аяҡ баҫмаҫлыҡ итә. Ҡырғыҙ ҡаҙаҡктарының барымтаға йөрөүе ана шулай туҡтатыла.

Ошо ваҡиғанан һуң ҡырғыҙ һәм ҡыпсаҡтар айҡашҡан тау, йәғни баш тартып киткән тауҙы Башарт, йәки Башарт тауы, уның иңенән сыҡҡан йылғаны Башарт йылғаһы тип йөрөтәләр. [3]

Арҡа буйҙары. Беҙҙең ата-бабаларҙан ҡалған һүҙ тарихы ҡомарткыға бәрәбәр. Боронғолар емеш-еләк йыйыу, һунарсылыҡ итеү өсөн күсенеп йөрөгәндәр. Хәлһеҙҙәрҙе нәмәләрен йөкмәп алып төшкән. Был күренеш “арҡалап йөрөтөү” тип аталған. Хәҙер ҙә ололар һөйләшеүендә шундай һүҙбәйләнештәр осрай. Мәҫәлән “Атаһына арҡалана”, “Туғандарына арҡалана”. Был һүҙҙәрҙең мәғәнәһе кешенең ышаныслы таянысы, терәге, туғандары булыуын һүрәтләй. Ә беҙ ауылдың көнбайыш өлөшөндәге тау һырттарын Арҡа буйҙары тип йөрөтәбеҙ. Халыҡ был ерҙәрҙә аслыҡ мәлендә төрлө үләндәре менән туҡланған. Йылынырға утынын ташыған. Ҡыҫҡаһы, ошо тау буйҙарының байлығына таянып, арҡаланып көн күргән. [3]

Элгеләү тауы. Граждандар һуғышы ваҡытында барлыҡҡа килгән был атама. Һуғыш осоронда йыш ҡына ауыл халҡының мал-тыуарын, аҙыҡ-түлеген, хужалыҡта ҡулланылған йыһаздарын, биҙәнеү-төҙәнеү әйберҙәрен ҡурҡытып, йә булмаһа талап алып китә торған булғандар. Халыҡ бик ныҡ яфа сиккән. Хатта ауылды яндырыуға тиклем барып еткәндәр. Ауылды яндырыр һәм талар алдынан һәр кем үҙенең кәрәк-ярағын ошо тауға мендереп, ағастарға элеп йәшергәндәр.

Ошо ваҡиғаларҙан һуң был тауҙы Элгеләү тауы тип атап йөрөтә башлағандар.

Түбәләре ҡалай юғары,
Тауға баҫҡан шул
Элгеләү.
Дәртле ирҙәрҙең шул йолаһы –
Бейектәргә менеп көй көйләү.
Бейектәрҙә таш та ҡанатлы,
Ай бейек тә үр шул
Элгеләү.
Йәнгенәңә өҫтәр нур,яҡты
Бейектәргә менеп көй көйләү.
Көй көйләйем әле, көй ҡалыр,
Бер хәтерләр, бәлки,
Элгеләү.
Үҙе бер ғүмерҙер,бер дандыр
Бейектәргә менеп көй көйләү. [3]

Йылғалар

Мәмбәтһыпы йылғаһы. Мәмбәт исемле бер егет һунарсы булған. Бер көн һунарҙа оҙаҡ йөрөп, арып, хәл алырға туҡтаған, ергә ятып торған. Шулай ята торғас, ҡолағына шишмә сылтырап аҡҡан тауыш ишетелгән. Тора ла шул тауыш сыҡҡан тирәне ентекләберәк ҡарай, ҡуйы үлән араһында бәләкәй генә шишмә башына тап була. Тирә-йүнен таҙарта, шишмәгә артабан юл бирә. Шишмә егет ҡаҙған урындан тағы ла урғылып сығып, артып ағып китә. Элек бәләкәй йылғаларҙы һыпы тип йөрөткәндәр. Мәмбәт һыпыһы тип аталған Мәмбәтһыпы йылғаһы әлеге көндә Мәһәҙи ауылы һыулаған йылға, биш-алты саҡрым оҙонлоғо тирәһе, Бешәке йылғаһына ҡоя. [3]

Яландар, туғайҙар

Әптерәш яланы. 1918 йылдың йәйендә Блюхер рейды ваҡытында Каширинсылар отряды, ҡыҙыл сепрәктәр тағып, Мәһәҙиҙең Саптарат йәйләүенә килеп сығалар. Маликов Суфиян ҡарттың өйөр айғырын егеп, арбаһына затлы кәрәк–яраҡты тейәп, ауыл яғына юл тоталар. Күптә үтмәй улар киткән яҡтан ҡара төтөн күтәрелә. Ауыл яна. Ауылға килеп сыҡҡан юламан “Һеҙҙекеләр Саптараттың был яғында, таланып, аптыраштa ултыралар”, — тигән. Унда ла аптыраш, бында ла аптыраш. Шунан теге яланды Аптыраш тип йөрөтә башлағайҙар, ҡалын һуҙынҡылар нәҙеккә әйләнеп, Әптерәш булып китә. Хәҙер ялан Әптерәш яланы атамалы. [3]

Күҙгәнәк яланы. Элек ауылдар бәләкәй-бәләкәй булып төрлө ерҙә ултырған. Ҡағы менән Мәһәҙей ауылы араһында ла күп булған. Әүжән, Ҡағы рустары ауылдарҙы талап, яндырып йөрөгәндәр. Хәҙерге Күҙгәнәк яланында ла элек ауыл булған. Рустар ауылды үртәп, ҡапҡаларҙы, индектәрҙән һайғауҙарҙы алып ҡасҡандар. Шулай ҙа бер бөртөк кенә индек бағанаһы тороп ҡалған. Элек индек бағанаһын күзгәнәк тип йөрөткәндәр. Шунан бирле яланды “Күҙгәнәк” яланы тип йөрөткәндәр . Хәҙер унда иген баҫыуы, иген үҫтерәләр. [3]

Алтымөйөш яланы. Элек Мәһәҙи менән Ҡағы араһында ауылдар булған. Хәҙерге Алтымөйөш яланында бер ауыл булған, халыҡ йәшәгән. Ундағы халыҡты рустар бик ыҙалатҡан. Малдарын талап киткән. Халыҡ ҡаршы торған. Шулай бер көндө урыҫтар был ауылдың ерҙәрен баҫып алыр өсөн һөжүм иткән. Уларҙың малдарын алып, ауылдарын яндырғандар. Халыҡ урман төпкөлдәренә ҡасҡан. Ундағы өйҙәрҙән алты мөйөшлө өй генә ултырып ҡалған. Шунан башлап был тирәне Алтымөйөш яланы тип йөрөткәндәр. [3]

Иҫтәлекле, тарихи урындар

Ирек котоғо. Был хәл һуғыштан һуң булған. Заманалар ауыр. Аслыҡ яланғаслыҡ. Халыҡ трудоденьгә эшләгән ваҡыт. Эш нормаһын үтәһәң — аҙыҡ була, үтәмәй икәнһең — һорама. Ауылдың ҡатын-ҡыҙҙарына бигерәк тә ауыр булған. Сөнки ир-егеттәрҙең күбеһе һуғыштан әйләнеп ҡайтмаған, ҡул көсө етешмәй. Шулай бер ваҡыт эш өҫтөндә Хөснә өләсәй балаға ауырып китә һәм ир бала донъяға килә. Эргәлә генә ҡотоҡ. Тыуғас та шул ҡотоҡ һыуы менән баланы йыуалар. Балаға Ирек тип исем ҡушалар. Ә ҡотоғон "Ирек ҡотоғо" тип йөрөтә башлағандар. [3]

Ишмөхәмәт күпере. Элек был яланды урталай бүлеп, урғылып ағып ятҡан йылға булған. Ауыл халҡы шул йылға аша бесәнгә йөрөгән, утын ташыған. Күп ваҡыттарҙа унан аша сығып китә алмай ыҙалаған. Ауылдаштар араһынан Ишмөхәмәт исемле бер егет йылға аша матур күпер һалырға булған һәм матур күпер һалып та ҡуйған. Халыҡ ул күперҙән рәхәтләнеп йөрөй башлаған, Ишмөхәмәткә рәхмәттәр әйткән. Шунан башлап күперҙе Ишмөхәмәт күпере, ә яланды Ишмөхәмәт яланы тип йөрөтә башлағандар. Хәҙер күпер юҡ, йылғаһы бик бәләкәй булып ҡалған. [3]

Иҫкүлек (иҫке зыярат). Элек Мәһәҙи ауылының зыяраты ауылдың көнбайышында, тау башы яланының арғы осонда булған. Бер башҡорт муллаһын бар байлығы менән бергә ерләйҙәр. Күпмелер ваҡыттан һуң Мәһәҙиҙәрҙең береһе үлгәс, уны ерләргә алып баралар. Барһалар, ни күрһендәр, зыяраттағы ҡәберҙәр аҡтарылып ташланған була. Ауыл ирҙәре һөйләшеп, бөгөнгө төндә зыяратты ҡарауылларға булалар. Төндә ҡәбер аҡтарырға тип килгән урыҫтарҙы тоталар. Бик ҡаты алышалар. Мәһәҙиҙәр зыяратты ауыл эргәһендәге хәҙерге урынына күсерә. Йәштәр был урынды Иҫкезыярат тип атай, ололар телендә ул Иҫкүлектәр тип йөрөтөлә. [3]

Игәнәшкә. Әүжән урыҫы Игнатьев башҡорттарҙан арендаға ер алып, уны кәртәләп, балаган төҙөп, һарыҡ үрсетеп ятҡан урынды "Игнатьев" һүҙен башҡортлаштырып, ауыл халҡы Игәнәшкә тип атай. [3]

Бейеш һуҡмағы. Бейеш ҡараҡ тураһында үҙенә күрә бер тарих бар. Бейеш гел урыҫтарҙың иң шәп аттарын урлап йөрөгән. Урыҫтар уны гел баҫтырған, эҙләгән. Бейештең бер уңышһыҙ "һунарынан" һуң, урыҫтар уның эҙенә төшкән. Ул кәмәгә ултырып ҡасырға мәжбүр була, урыҫтар ҡыуа төшә. Бейештең кәмәһен Кәкретуғай буйында урыҫтар ҡыуып етә яҙып киләләр икән. Бейеш кәмәһен йөкләп, ҡая аша тураға менгән дә киткән. Урыҫтар урап барырға мәжбүр була. Улар биш саҡрым юл үткәнсе, Бейештең эҙҙәре лә һыуынған була. [3]

Мәскәй түбәһе. Был ерҙе элек-электән бик хәүефле урын тиҙәр. Сөнки унда үтә алмаҫлыҡ шырлыҡ урман булған, урмандарында ниндәй генә йән эйәләре йөрөмәгән: шүрәле, албаҫты, мәскәй. Кистәрен һәр саҡ был мәскәй ҡалҡып сыҡҡан. Ауыл халҡы ул ерҙәрҙә яңғыҙ ярым йөрөргә ҡурҡҡан, сөнки урманға сыҡҡан һәр кешегә күренмәйенсә ҡалмаған. Шуға күрә лә был ерҙе "Мәскәй түбәһе" тип йөрөткәндәр. [3]

Рәхим соҡоро. Был хәл 1964 йылдың апрель айында була. 1951 йылғы бер төркөм малайҙар 4 синыфты тамамлап барғанда (Насыров Рәхим, Хасанов Солтан, Мөхәмәтйәнов Юлай, Ишбулатов Фәрит) ауылдың көнъяғына ҡараған Элгеләү итәгендә, бульдозер юл эшләү өсөн ҡаҙған соҡор эргәһендә һыу сәсрәтеп уйнап йөрөп ятҡанда, аңғармаҫтан Насыров Рәхим шул соҡорға төшөп китә. Ул һыу аҫтын бер сумып, бер ҡалҡып сығып торғанын күргәс, малайҙар ҡаушап ҡала, улар араһынан Хасанов Солтан барыһынан да алда нимә булғанын аңлап өлгөрөп, тиҙ генә таяҡ һуҙа. Рәхим, шул таяҡҡа тотоноп сығып, ошо бәләнән ҡотолоп ҡала. Күл төбөндә уның һыңар кирзауай итеге ултырып ҡала, тап ошо ваҡиғанан һуң халыҡ был соҡорҙо Рәхим соҡоро тип атай башлай. [3]

Һалдат оҙатҡан ер. Ауылдың көнъяғында ятҡан Элгеләү һыртына ҡараған ерҙе, ауыл халҡы Һалдат оҙатған ер тип атап йөрөтә. Сөнки әрме сафтарына алынған егеттәрҙе, ауыл халҡы 1960-1980 йылдарҙа шул ергә барып, оҙата торған булған. Хәҙерге ваҡытта әрмегә ҡараш үҙгәргәнгәме, әллә оло юл ауылды урап үткәнгәме, был ергә хәҙер бик үк сығып оҙатып ҡалмайҙар. Шулай ҙа ҙур байрамдарҙа был ер ауыл йәштәренең яратҡан урыны һанала.

Яңыйорт. Мәһәҙи ауылынан сығып, Һарғая юлынан биш-алты саҡрым тирәһе барғас, һул яҡтан бер үҙәк буйлап өҫкә күтәреләһең. Ошо ер кислохромға бай. Утыҙынсы йылдарға тиклем ошо кислохромды сығарып, магнитҡа ат менән ташығандар. Килеп туҡтап, йоҡлап, тамаҡ ялғар өсөн йорт төҙөгәндәр. Ошо төҙөлгән яңы йорттар урын Яңы йорт атамаһын алған. Кислохромын әле халыҡ мунса ташына ала. Таш бик ҡыҙыу була. [2]

Сабатуй. Ҡолғана ауылы кешеһе Йыһанша бабай, Әүжәндән ике биҙрәләй картуф йөкмәп ҡайтып килгәндә урыҫтарға тап була. Уны бик ныҡ туҡмайҙар, усаҡ яғып, картуфын бешереп ашайҙар, бабайҙы ялан аяҡ ҡуҙҙа бейеткәндәр. Сабаталарын ағас башына мендереп элеп ҡуйғандар. Шул ваҡиғанан һуң был урын Сабата уяһы йәки Сабатуй тип атала башлаған. [2]

Симун. 1917 йылғы революцияға тиклем, унан һуңда әле башҡорттар үҙ ерҙәрен урыҫтарға арендаға биреп торғандар. Уңыштың ниндәйҙер өлөшөн ер хужаларына биреп тороу шарты менән Үрге Әүжәндән Семен исемле урыҫ ошо ерҙе файҙаланған, балаганы булған. Хәҙер ошо ерҙе ауыл халҡы Симун тип атай. [2]

Ишбулдина голова. Ҡорлаҡты мороно тигән ерҙә урыҫтар ергә талашып, Ишбулды атлы башҡортто туҡмап үлтерәләр. Башын өҙөп алып, ағас ботағына элеп ҡуялар. Йәнәһе, башҡа башҡорттар килеп, ергә талашып йөрөһә, уларҙы ла ошо яза көтә. Урыҫтар был ерҙе хәҙер Ишбулдинка тип атай. [2]

[1] Аллабирҙин Дамир Зиннәт улы.
[2] С. Ғәбдинурова.
[3] Айһылыу Ғарифуллина.

Ғәлиәкбәр ауыл биләмәһенә ҡараған ер-һыу атамалары

Ғәлиәкбәр ауыл биләмәһе ер-һыу атамаларына бай. Ниндәй генә атаманы алма, һәр береһенең үҙ тарихы бар. Был биләмәгә Ғәлиәкбәр, Үрге Нөгөш (Ямаш), тарҡалып юҡҡа сыҡҡан Оло Кәбәс, Ҡолғана (Ҡалғаһау), Түбәнге Нөгөш, Кәшәлә ауылдары ерҙәре ҡарай. Ғәлиәкбәр, Ҡолғана, Кәбәс атамалары ауылдарға нигеҙ һалыусы кеше исемдәренән барлыҡҡа килә. Халыҡ хәтере һәм Өфө Үҙәк архивы (рәүиз) сығанаҡтары ата-бабалар ҡушҡан атамалар онотолмаған икәнлеген раҫлай.

Ғәлиәкбәр ауылы

Ғәлиәкбәр ауылы Башҡортостаныбыҙҙың армыт-армыт мөһабәт тауҙары араһында, көмөштәй йылтырап ятҡан Нөгөш йылғаһы буйында, хоҙурлы тәбиғәттең ожмахтай күркәм урынында урынлашҡан. Ауылдың артында ғына ҡуйы урман менән ҡапланған Таҡыя Сусаҡ тауы теҙмәләре һаҡсылар һымаҡ баҫҡан. Әйтерһең дә, улар ғәлиәкбәрҙәрҙе ыжғыр елдәрҙән, буранлы ҡыштың әсе елдәренән һаҡлар өсөн кәртә итеп ҡуйылған. Икенсе яҡтан һөҙәк кенә, ары бейегәйә барған барған Ҡалыу тауҙары башлана.

Борон-борондан был төбәккә төйәкләнгән бөрйән һәм ҡарағай ҡыпсаҡ ырыуҙары ошо уңайлы урынды тиккә генә һайламаған. Бында урмансылыҡ менән шөғөлләнеү, мал, ҡортсолоҡ тотоу һәм ҡош-ҡорт аҫырау өсөн дә ифрат яйлы. Туғайҙары ла, көтөүлектәре лә, сабынлыҡтары ла етерлек был тирәнең.

Ауылдың ҡасан һәм нисек һалыныуына бәйле тарихтың ике варианты бар. Һәр хәлдә икеһе лә Баймаҡ районың Темәс ауылынан күсеп ултырған Ғәлиәкбәр Ғәбделмөкминов (1796 й.) тигән кешенең исеме менән бәйле.

Беренсе вариант. Нөгөш йылғаһы буйына хәҙерге Темәс ауылынан Монаш исемле кеше күсеп килә һәм утар һалып донъя көтә башлай. Күп итеп мал аҫырай, ҡортсолоҡ менән шөғөлләнә. Шунан күркәм төбәк Монаш янына уның башҡа ауылдаштарын да тарта. Ауыл әкренләп ҙурая, хәлле кешеләр ҙә ишәйә. Байыған һәр кем ауылға үҙенең исемен биреп ҡалдырырға тырышҡан һәм бер ваҡыт талаш-тартыш башланған. Айырыуса иң тәүҙә бында килгән Монаш ныҡ тырышҡан.

Берҙән-бер ваҡыт ул русса уҡый-яҙа белгән Ғәлиәкбәр исемле егетте эйәртеп Орскиға китә. Монаш түрәләр менән һөйләшеп, тегеләрҙе майлап-көйләп ауылға үҙенең исемен бирҙертеү тураһындағы таныҡманы эләктерергә тырыша. Үҙе уҡый-яҙа белмәгәс, ҡағыҙ тултырыуҙы Ғәлиәкбәргә ҡуша. Ә тегеһе, байҙың тома наҙанлығынан файҙаланып, таныҡмаға үҙ исемен

яҙҙыра. Был хаҡта Монаш ауылға ҡайтҡас ҡына һиҙә. Ошолай килеп сыҡҡан тиҙәр Ғәлиәкбәр ауылының исемен.

Икенсе вариант. Ауылдың барлыҡҡа килеүен хәтерләп, ауылдың оло кешеһе Ағзам Әминев (1933 йылғы) ошолайыраҡ һөйләй: Башҡорттар батша ҡыҫымына сыҙай алмай, ауыр һалымдар, бөлдөргөс һуғышыуҙар, йөҙәрләп, меңәрләп ауылдарҙы яндырыу, башҡорт халҡын аяуһыҙ яҙалау, талау, уларҙы ҡырыу сәбәпле, сараһыҙҙан, үҙҙәренә ирек эҙләп Темәстән Оло Нөгөш буйына Ярыу тамағына, улар батша шымсылары эҙерлекләй алмаһын өсөн, тау-таш, юлһыҙ яҡҡа ҡасып килеп ултырғандар. Оло Нөгөштән эскәрәк, Аҫҡараҡ йылғаһы тамағынан үргәрәк инеп (ул ерҙе хәҙер Иҫке Ыҙма тиҙәр), кешеләр ишәйә башлағас, Нөгөш ҡабағына сығып ултыра башлағандар.

XX быуат башында Ярыу утарынан (унда 10-11 йортта Әминевтар нәҫеле йәшәгән) Ғәлиәкбәр ауылына күсеп килгәндәр. Нөгөш йылғаһы ҡабағы, тау битләүе тотошлайы менән ағаслыҡ ҡаплаған булған. Ошо ағаслыҡты ҡырҡа килә ауыл ҙурая, урамдар барлыҡҡа килә.

Ә.З.Әсфәндийәров “Башҡортостандың ауылдар тарихы” китабында Ғәлиәкбәр ауылы 1850-1859 йылдар араһында барлыҡҡа килә тип яҙа.

1850 йылғы рәүиздә Ғәлиәкбәр Ғәбделмөкминов (1796 й.) 54 йәштә, ҡатындары Аҙнабикә 44 йәш, Йәмилә – 27 йәш тип күрһәтелә. Был ваҡытты беренсе ҡатынынан ҡыҙҙары Сәхипъямалға 9 йәш, Ғәйниямалға 5 йәш, икенсе ҡатынынан ҡыҙҙары Фатимаға 7 йәш, Латифаға 4 йәш, Мәхүпъямалға 3 йәш була.

Ике ҡатынына ла хөрмәт менән ҡараған һәм һәр береһенән бер ихатала өсәр ҡыҙ бала (1850 йылдарҙан һуң ир балалары була әле) үҫтергәндәр ағаһы Ҡәҙерғол Ғәбделмәнов (1792 йылғы) 1842 йылда 50 йәшендә үлә. Уларҙан Ҡәҙерғоловтар таралған.

Солтанғолов Аҙнабай, Йомағол (Ғәлиәкбәрҙә йәшәгән Баймөхәмәтовтар таралған), Ҡарағол нәҫелдәре 3-5 ихатала йәшәй. Темәс ауылында йәшәгән осорҙа Ҡарағол Солтанғолов (1791 йылғы) 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашып, 1814 йылда Парижғаса итеп, дан яулаған. Әлеге ваҡытта Әминев Ағзам Яхъя улы үҙ баҡсаһында тапҡан 1814 йылдарҙағы Ватан һуғышында бирелгән миҙал һаҡлана.

Бесәнсе Ҡолмөхәмәтов, Бикмөхәмәт, Арыҫланғол Бесәншиндәр атаһы, ике улдары менән 6-8 ихатаны тәшкил иткән.

Бейембәт Ҡайдайҡужин, Хисаметдин Ҡотлоғужин, Ҡобай, Кинйәбулат Таһировтар – 9-14 ихатала йәшәгән.

Ғәбит Нийәнсурин (1797 йылғы), Мәүлетбирҙе (1837 йылғы), Ишбулды (1808 йылғы), Әхмәт (1822 йылғы), Ғәбитовтар (1809 йылғы), Ишйәр (1811 й.), Дәүләтҡол Хәлитовтар (1820 й.) – туғандар 15-20 ихатаныы тәшкил иткән (хәҙер уларҙан Ғәлиәкбәрҙә, башҡа тарафтарҙа йәшәгән туғандары Ғәбитов, Хәлитов, Сәғитов, Әхмәтовтар таралған).

Йыһанша, Солтан Мөмәтҡужин, Кинйәғол Ырыҫҡужин, Ишмырҙа Мәһәҙиев, Игебай Йәнбәков, Мөхәмәтрәхим Япарғолов, Ғайса Шәриповтар нәҫеле 21-29 ихатаны тәшкил иткән. Баҙарғол Япарғолов 1850 йылда ике йортҡа, Зөлкәрнәй Ишемғоловтың нәҫеле 11-се йортҡа, йәғни тимерҙәр тәшкил иткән ауылдарға күсерелгән. Йәмғеһе 31 ихатала 58 ир ат, 56 ҡатын-ҡыҙ йәшәгән. Беҙҙең төбәк Ырымбур ғубернаһы Верхний Урал өйәҙенең, 7-се башҡорт Ҡарағай-Ҡыпсаҡ олоҫона ҡараған.

1850 йылғы рәүиздә Монаш байҙың үҙе һәм нәҫелдәре телгә алынмай, тимәк ауыл Ә.З.Әсфәндийәров билдәләгән йылдан алданыраҡ (1834 йылғы рәүиздә Ғәлиәкбәр ауылы телгә алынмай, картала күрһәтелмәй) барлыҡҡа килгән.

1859 йылда 25 өйҙә 148 кеше йәшәй. 1920 йылда ауыл икеләтә ҙурая 66 өйҙә 337 кеше йәшәгән. 1940 йылда 68 хужалыҡта 324 кеше йәшәһә, ауылдан икенсе урындарға Айҙәрбәков, Айгашкиндәр күскән. Алдағы рәүиздә телгә алынмаған фамилияларҙың күптәре икенсе урындарға күсә. Эргәләге күрше-тирә ауылдарҙан: Кәбәс, Ҡалғаһау (Ҡолғона), Кәшәле, Түбәнге, Үрге Нөгөш, Бикташ, Маҡар ауылы Ҡолғанаһынан Бөйөк Ватан һуғышынан алда, унан һуң да яңылары өҫтәлеп, Ғәлиәкбәр ауылы ҙурая.

Ғәлиәкбәр ҡарттың нәҫелдәрен дауам итеүсе улы Йәрмөхәмәт, уның улдары Вәлиәхмәт, Зәйнулла, уның улы Батыргәрәй (ҡыҙы Тамара Аллабирҙина Тимер ауылында йәшәй), уның ул һәм ҡыҙҙары, Йәрмөхәмәт ҡарттың ҡыҙҙары Мәхмүҙә, Бәлхийә (1898 йылғы), уның улдары Рәхмәт, Әхмәт (Әбделмәмбәт ауылында йәшәй), уның ҡыҙ һәм улдары Әпдрәхим бабайҙың ҡыҙ һәм улдары, Фатима инәйҙең ҡыҙы Әминә, уның улдары йәшәй. Ғәлиәкбәрҙең ағаһы Ҡәҙерғолдан улдары Әхмәтйән, уның ҡустыһы Мөхәмәтйән, улы Әхмәткирәй, уның улы Зәки (1922 йылғы) Ишембай районы Этҡол ауылында Ҡәҙерғоловтар таралған. Темәс ауылынан Бөрйәнгә, Тимер ауылына Ҡәҙерғоловтарҙың туғандары килеп ултырған.

Бөгөнгө көндә Ғәлиәкбәрҙә күбеһенсә Ғәбитовтар, Ҡаһармановтар, Сәғитовтар, Әминевтар, Аҫылғужиндар, Хәлитовтар, Сабитовтар, Ғәлиевтар, Толомғужиндар, Ишмөхәмәтовтар, Байғазиндар, Биккининдар, Исламбаевтар, Күлбаевтар һ.б нәҫел-нәсептәре йәшәй. Хәҙер инде улар затынан әллә күпме билдәле шәхес: уҡытыусы, нефтсе, урмансы, врачтар, ғалим һәм башҡа һөнәр кешеләре, зыялылар үҫеп сыҡҡан, бөтә республикаға таралған. 2004 йылда ауылда 125 хужалыҡта йәмғеһе 500 кеше йәшәй ине.

Эйе, күкһел тауҙар менән уратып алынған ҡаҙан һымаҡ ҡына ергә һыйынып ултырған Ғәлиәкбәр ауылы йылдан-йыл ҙурая, матурая. Асфальт түшәлгән урам буйлап береһенән-береһе күркәм йорттар теҙелгән. Ғәлиәкбәр ауылында тәү тапҡыр 1994 йылдың 17 июнендә “Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!” байрамы уҙғарылғайны. Халыҡ үҙенә йөкмәтелгән бурысты аңлай, әле күбеһе үҙ йорттарын күркәмләү эштәре менән мәғшүл. [1]

Ғәлиәкбәр ауылы тирәһендәге ер-һыу атамалары

Тауҙар, ҡаялар

Абызгилде тауы. Элек балалар еләккә йыйырға түгел, күберәк ашарға йөрөгән. Бер шулай еләктә йөрөгәндә, кис етеп, ҡайтырға ваҡыт еткән.

Бәләкәйҙәрҙе нисек алып ҡайтырға белмәй, олораҡтары йәшенеп: Абзый килде тип ҡысҡырған. Шунан балалар күмәкләшеп: абзый килде, абзый килде, тип ҡайтып киткәндәр. Абзый ул ағай була. Шунан алып был тау Абызгилде булып киткән. [6].

Таҡыясусаҡ. Ғәлиәкбәр ауылы ҡаршыһында бер тау бар. Ул башҡа ҡырын ғына һалып кейгән таҡыя һымаҡ тора. Шуға күрә был тауға халыҡ Таҡыясусаҡ тип исем ҡушҡан. Аҫтында күл дә бар. Унан аждаһа сыҡҡан имеш, тиҙәр. Бирерәк һыҙылып ҡына тауҙар урмандар аша аға-аға, ялан ерҙәргә килеп сыҡҡан матурҙарҙан да матурыраҡ, күркәмдәрҙән дә күркәмерәк йылға аға. Ул Нөгөш йылғаһы.

Ошо ерҙә тыуған һәр кеше өсөн яҡын да, ҡәҙерле лә Таҡыясусаҡ. Ололарҙың һөйләүенсә, элек әрме сафтарына киткән саҡтарында ауылдың ир-егеттәре Таҡыясусаҡҡа менеп, шунан киткәндәр.

Бөйөк Ватан һуғышына Ғәлиәкбәрҙән йөҙгә яҡын ир-егет яуға киткән. Һуғышҡа китеүселәр һуңғы тапҡыр Таҡыя сусаҡ башынан әйләнеп ҡарап:

Таҡыясусаҡ тауы бейек
Тора-тора мендем башына.
Исән-һауҙа ғына йөрөп ҡайтһам,
Тарих яҙыр инем ташына…- тип хушлашыу йырын яратҡан тауына бағышлаған. Үкенескә күрә, уларҙың яртыһы ғына кире әйләнеп ҡайта.

Башҡортостаныбыҙҙың бөйөк шәхесе Зәки Вәлиди үҙе ошо Таҡыясусаҡ башына менеп ҡурай тартҡан.

Таҡыя сусаҡ үҙенә бәйле бәйет шаһиты ла. Элегерәк шунда бер мәл Хажмөхәмәт тигән берәүҙең һыйырын айыу йыҡҡан. Халыҡ күмәкләшеп ҡыуа сыға, тик айыу ҡасып өлгөрә. Бер килгән еренә тағы килер, барыбер тоторбоҙ, тиҙәр. Бер ҡарт таҙғаҡ яһап, айыуҙы төнөн көтөп ята. Бер ваҡыт ҡап-ҡара нәмә яҡынлашып килә, ти. Борхота һуғып, был ҡарт һыҙма мылтыҡтан атып ебәрә. Мылтыҡ тауышын ауыл халҡы ишетеп ята. Иртәгеһенә ҡараһалар - атҡан нәмә айыу түгел, ҡара һыйыр булып сыға. Китә шунан ауыл буйлап мәрәкә һүҙ. Хатта таҡмаҡ сығарып та өлгөрәләр:

Һай, уңған да кеше икән
Айыу атып йыҡҡан бит.
Айыу тип атҡаны
Һыйыр булып сыҡҡан бит.

Бының кеүек хәл бер тапҡыр ғына булмай. Һуңғараҡ Садиҡ тигән ҡарт тураһында ла бер бәйет сығарғандар:

Таҡыя сусаҡ башында
Таҙғаҡ яһай өс егет
Иң олоһо-Садиҡ батыр
Итә йәштәргә өгөт.
Таҡыя сусаҡ башында
Айыу ятыр ерме ни?
Зәкәри менән Садиҡ
Айыу атыр ирме ни?
Таҡыя сусаҡ башында
Таҙғаҡ яһап яталар
Тура килһә һыйырҙы ла
Айыу тиеп аталар.
Ғәлиәкбәр «айыуының»
Үткер икән мөгөҙө,
Садиҡ ағай батыр булғас
Атып йыҡҡан бер үҙе. [2]

Әлеге көндә лә Таҡыясусаҡ ауылыбыҙҙың йәштәре өсөн яҡын да, ҡәҙерле лә тарихи урын булып тора. Йәштәр, ауылға ҡайтҡан арала Таҡыя сусаҡ башына менеп, ауылыбыҙҙың матурлығы менән һоҡланалар.

Шүлгән тауы йәки Нөгөш тауы. Ғәҙелгәрәй ауылы халҡы көньяҡлап Үрге Нөгөш ауылына шыр урманлы бейек тауҙан ҡайсаҡ ҡурҡмай техника – трактор менән ауылдың түбәнге кисеүенә килеп төшәләр. Ҡунаҡты оҙатҡанда ла шул тау аша оҙатҡанлар. Күпселек Шүлгән (Ғәҙелгәрәй) халҡы ошо юлдан йөрөү сәбәпле, был Нөгөш тауын Шүлгән тауы тип тә ебәрәләр. [1]

Ҡалыу тауы. Борон әбей менән бабай йәшәгән, ти. Уларҙың бик уңған һәм бик сибәр ҡыҙы булған, бөтә кеше уға һоҡланып туя алмаған. Бер ваҡыт ҡыҙҙы бер егет алып киткән. Бабай быны һиҙеп ҡалып,уларҙың артынан ҡыуа төшкән. Бейек һәм оҙон тауҙы артылғанда уның аты арыған. Бабай улай иткән, былай иткән, ләкин әмәлен таба алмаған. Бер ташҡа ултырған да: ошондалыр инде минең ҡыҙымдан ҡалыуым, тигән. Шунан башлап ошо тауҙы Ҡалыу тауы, бабай ултырған ташты Ҡалыу ташы тип йөрөтә башлағандар. [2]

Сөләйниә. Әүәлге халыҡ кәсебенең төп шөгөлө ағас эшкәртеп, һал сығарыу. Һалға үҙ етештергән әйберҙәрен: септә, арҡан, ҡап, батман, көбө кеүек ағастан эшләнгәндәрен дә баҙарға сығарғандар. Ҡыш әҙерләгән, етештергән әйберҙәрен Стәрлетамаҡ яғынан килгән Сөләймән исемле кеше Оло Нөгөш буйлап һал менән килгән саҡта Ғәлиәкбәр ауылының үрге осондағы һуңғы арҡыры ҡаяға төртөлә. Яҙғы ташҡын һалсыны шул урында һәләк итә. Ғәлиәкбәр халҡы ҡәҙерләп уны ауыл зыяратының ос ситенә генә ерләп ҡуя. Туғандары ла эҙләп килеп киткәндәр. Сөләймән һуғылған арҡыры ҡаяны сит –ят бахырҙы йәлләп, иркәләңкерәп ҡаяға Сөләйниә, тиҙәр. [1].

Йәнгәрәй тауы. Элек Ғәлиәкбәр ауылында Йәнгәрәй тигән һунарсы йәшәгән. Ул бик таҫыллы булған. Үҙ ғүмерендә Йәнгәрәй 70 айыу алған. Шул етмешенсе айыуын алғанда үҙе был донъя менән хушлаша.

Был хәл былай булған. Йәнгәрәй һыҙмаһын алып, Мулла туғайы тигән сабынлыҡ эргәһендәге текә һәм бейек тауға айыу һунарына китә. Бер ваҡыт ботаҡтарҙы һындыра баҫып, бик ҙур айыу килә ята ти. Йәнгәрәй һыҙмаһы менән атып ебәрә. Ләкин айыу үлмәй, яман үкереп, батыр һунарсыға ташлана. Икәүләшеп бик оҙаҡ алышалар. Үһһәренең тау ситенә еткәндәрен дә һиҙмәйҙәр, ти. Бына бер саҡ тегеләр икәүһе лә яҙа баҫып тау түбәненә тәгәрәйҙәр,

ти. Айыуҙа, һунарсы Йәнгәрәй ҙә йән бирәләр. Халыҡ Йәнгәрәйҙе табып, уның хөрмәтенә ошо тауҙы Йәнгәрәй тип йөрөтә башлайҙар. [1]

Үтәбикә ҡаяһы. Бер ҡарттың Үтәбикә исемле ҡыҙы булған. Шундай сибәр, егәрле ҡыҙға яусылар ҙә күп килгән. Ауылдың иң бай кешеһе Үтәш мулла ла яусы ебәргәс, Тайып ҡарт уйға ҡалған. Берҙән – бер ҡыҙын өсөнсө ҡатынлыҡҡа биргеһе лә килмәгән, үҙенең ҡартайған көнөндә бай булғыһы ла килгән. Байлыҡ яғы еңгән, Тайып ҡарт ризалығын биргән. Ә ҡыҙы Үтәбикә риза булмаған. Ҡарт йәмһеҙ муллаға өсөнсө ҡатынлыҡҡа барғыһы ла килмәгән. Әммә атай кеше ҡыҙының һүҙенә ҡарап тормаған.

Туй башланған көндә Үтәбикә урманға ҡасҡан һәм ҡая яғына килеп сыҡҡан да аҫҡа ташланып һәләк булған. Шул ҡаяны "Үтәбикә", тиҙәр.[3]

Мөҙәй төкөгән. Ғәлиәкбәрҙән түбәнерәк, биш-алты саҡрым тирәһе булыр Мөҙәй төкөгән – тигән бер текә ҡабаҡ бар. Ауылдың бер байының өс ҡатыны булған, иң кесеһе Мөҙәлифә исемле бер һылыу булған. Бай үҙенең шәп аттарын егеп эргәһенә Мөҙәлифә һылыуын ултыртып күрше ауылға ҡунаҡҡа китә. Юлда аттары нимәнәндер өркөп алып ҡаса һәм ҡабаҡты төшкәндә арба ауа. Мөҙәлифә арба ауғанда ағасҡа бәрелеп үлә. Шул ваҡыттан бирле был урынды Мөҙәй төкөгән тип йөрөтәләр. [1].

Ямаш тауы. Ғәлиәкбәр ауылынан Үрге Нөгөш (Ямаш) ауылы яғына күтәрелгән тауҙы Ямаш тауы тиҙәр. Ҡырҙан килеп, Үрге Нөгөшкә барыусыларға юлды аңлатҡансы, тауҙағы юлды күрһәтеүен дә етә. Үрге Нөгөштән үҙенән дә Шүлгән яғына сыҡҡан тауҙы Шүлгән тауы тиҙәр.

Йылғалар, шишмәләр, ҡотоҡ

Нөгөш йылғаһы. Нөгөш йылғаһы Белорет районында башланып Белорет, Бөрйән, Мәләүез райондары буйлап аға.Уның оҙонлоғо 250 км. Нөгөш буйы матурлығын һүрәтләргә һүҙ етмәй. Йәшел балаҫ кеүек туғайҙары, күккә олғашҡан ҡаялары сит кешеләрҙе лә ҡыҙыҡтыра. Яҙ һайын күп туристар Нөгөштән ағып төшәләр.

Нөгөш исеме ҡайҙан килеп сыҡҡан һуң? Халыҡта ике яуап йөрөй. Берехе-Урал батыр эпосына бәйле, Нөгөш - Уралдың улы. Икенсеһе- Нөгөш Ағиҙелгә ҡойған ерҙә мөйөш яһай. Ә мөйөштө элек нөгөш тигәндәр. [1].

Шәре йылғаһы. Тимер ауылы халҡы 1820 – 1830 йылдар араһында Бикташ ауылына нигеҙ һалғандан һуң Акбейек тауы аша үтеп, Кесе Нөгөш йылғаһы буйында ла Урасай, Баймырҙа, Баҡкол, Әсебар һ.б йәйләү һәм ҡышлауҙар барлыҡҡа килтергәндәр.

Кесе Нөгөшкә ҡойған Шәре йылғаһы буйлап Бикташ ауылына йөрөгәндәр. Йылға тап – таҙа, көмөштәй ялтырап ағып ята. Йылға буйлап Бикташ ауылына юл һалғас, артабан юл һаҙлы, батҡаҡлы, шәреле уя буйлап үткән. Юлды үтеүе лә ауырлаша барған. Шуға ла был уя йылға буйын Шәре тип йөрөтәләр. Шәре буйлап йөрөүе ауырлашһа ла, урау булһа ла, Кесе Нөгөш Оло Нөгөшкә саҡрым ер етмәс элек Саңлы Уяһы аша ла Бикташ ауылына юл һалыуҙары мәғлүм. Ғәлиәкбәрҙәр хәҙер сабынлыҡтарына барғанда ошо юл аша Шәре башына сығалар. [1]

Ярыу йылғаһы. Күжә йылғаһының һул ҡушылдығы. Ҡалын урмандар, тау үҙәне буйлап ағып, үҙенә юл ярып төшә. Шуның өсөн йылға “Ярыу” тип, ә Күжәгә ҡойған урыны “Ярыу тамағы” тип атала.

Батша ҡотого. Элек ил менән батша идара иткән. Яңы батша булған һайын, бөтә ил менән уны ҡотлап, туй үткәрә торған булғандар. Батшаның ир балаһы тыуһа, уны ла ҡотлап мәжлес ҡороп, байрам иткәндәр. Ғәлиәкбәр ауылының халҡы был йоланы йәй көндәрендә ауылдың һөҙөк тау битенән ағып ятҡан шишмә эргәһендә үткәрә торған булған, шуға уны “Батша ҡотоғо” тип атағандар.

Яландар, туғайҙар

Суктал. Үрге Нөгөш ауылынан көньяҡта, Мәксүт ауылы йүнәлешендә, һуҡмаҡ уялы яланға алып сыға. Ауылдан биш саҡрым тирәһе. Ошо яланда үҫкән дә инде сук тал. Халыҡ та үҙ исеме менән таллы, уялы яланға Суктал тип исем биргән. [1]

Һуғыш туғайы. Элек Оло Нөгөш буйҙары Ғәлиәкбәргә килеп етә яҙғансы Оло Кәбәс ауылы ерҙәре була. Ошо ауылдың бер байы өмә итеп бесән саптырырға була. Ләкин өмәселәр килеүгә Ғәлиәкбәр ауылы кешеләре теге байҙың сабынлығында бесән сабып йөрөйҙәр икән. Хәҙер ике арала ғауға ҡуба, ахырҙа, һуғышыуға барып етәләр. Кәбәс байҙың өмәселәре күберәк була, улар ғәлиәкбәрҙәрҙе тукмап, ҡурҡытып, ҡайһыларын ат ҡанъяғаһына бәйләп ҡайтаралар. Ошо ваҡиғанан һуң был урынды Һуғыш туғайы тип йөрөтәләр.

Арыҡтай утары. Борон бер бай йәшәгән. Униң йылҡы малы бик күп булған. Бер көн ул бесән сабырға өмәгә кеше ҡушҡан. Ул: “Һеҙ ҡайтыуға һимеҙ йылҡы әҙерләп ҡуйырмын”, - тип әйтеп ебәргән. Өмәселәр байҙың сабының сабып бөтөп ҡайтып киләләр икән, үҙ-ара: “Хәҙер майлы һурпа эсәбеҙ”,- тип ҡайтып ингәндәр, былар. Өмәселәрҙең уйлағандарының тап киреһе булған. Бай арыҡ ҡына тай һуйып ашатҡан. Өмәселәр байға көлөп теге яланға “Арыҡтай” тип исем ҡушҡандар шул ваҡыттан алып Арыҡтай исеме ҡалған. [3]

Арыҡтай. Боронораҡ бер бай йәшәгән. Ул йыл һыйын йәй еткәс үҙенең малына ашатыу өсөн, бесән сабырға өмә яһаған. Бер ваҡыт шулай бер яланда быға бесән сабалар икән. Бай үҙе лә бында икән. Ул бесәнселәренә: “Сабығыҙ әйҙә, тиҙерәк бөтһәгеҙ, үҙегеҙҙе һимеҙ тай менән һыйлармын, - тигән. Бесәнселәр уғата тырышып сабалар, ти. Бына сабып бөткәндәр, ти, былар. Беҙҙе тегендә һимеҙ аш көтә, тип иҫәрләнәләр икән. Ләкин өмөттәре аҡланмаған. Майлы ит урынына ябыҡ ҡына бер тайҙы һуйҙырып, аш бешерткән, ти, бай. Өмәселәрҙең бик йәндәре көйә. – Арыҡ тайындың итен үҙең аша, -тип ҡайтып китәләр. Шунан бирле был яланды Арыҡтай яланы тип йөрөтәләр. [1].

Ҡондоҙбай. Был урын Емеш үлеге яланына яҡын ғына. Тәбиғәте лә матур, һоҡланғыс. Урмандың күп өлөшөн ҡайын, уҫаҡ ағастары алып тора. Бына ошо урында Ҡондоҙбай тигән кеше бесән әҙерләгән. Уға, әлбиттә, ағас араһындағы ҡуйы үләнлек, был ерҙең емеш-еләккә бай булыуы оҡшаған. Оҙаҡ йылдар буйына бында бесән әҙерләгәнгә, был ер уның хөрмәтенә Ҡондоҙбай тип атала башлаған. [2]

Ауылдағы тарихи урындар

Ҡәберлектәр. Ғәлиәкбәр ауылының түбәнге осонда, хәҙерге ваҡытта ауылдың урта өлөшөндә, яҙлы – көҙлө ауылды урталай бүлеп Уҫағуй йылғаһы аға, әүәл был уяла уҫаҡ үҫкәнгә күрә шулай атағандар. Хәҙисә Ҡаһарманова инәй һөйләүенсә, әүәле ҡайыны, уҫаҡлығы булған ауыл осонда. 1921 йыл аслыҡ йылы бер ҡәберлеккә 10-лап кешене ерләгәндәр, унан башҡа бәләкәйерәк ҡәберлектәрҙә бар ине, тиҙәр ололар. Ауыл ҙурая килә, өйҙәр түбәнгә Нөгөш йылғаһына тиклем һуҙыла. Ҡәберлек урыны хәҙер бәләкәй генә тыҡырыҡ - һыу юлы булып ҡалды. Ауыл уртаһында зыярат тауына күтәрелгән тыҡырыҡтарҙа ла ҡәберлектәр була торғайны, тип хәтерләйҙәр, ололар быуындар. Был тарихи урындар һуңғы ваҡытта онотола килә. Бындай тарихи урындар һәр ауылдар янында ла бар.

1812 йылдарҙағы Ватан һуғышында Наполеон илбаҫарҙарына ҡаршы урыҫ халҡы менән бер сафта башҡорттар ҙа ҡатнаша. Бөтәһе 28 башҡорт полкы ойошторолоп, улар хәл иткес алыштарҙа ҡатнаша. Ғәлиәкбәр ауылынан Ҡарағол Солтанбаев был һуғыштан ике көмөш миҙал алып, иҫән-һау тыуған төбәгенә әйләнеп ҡайтҡан. Мәктәптең тарих уҡытыусыһы, эҙәрмән Дамир Аллабирҙин мәктәп ихатаһында 1812 йылғы Ватан һуғышы яугирҙарына иҫтәлекле һәйкәл ултыртыуҙы тормошҡа ашырҙы.

Граждандар һуғышы йылдарында беҙҙең ауыл аша аҡтар армияһы һәм Ҡыҙыл Армия частәре үткән һуғыш барған ваҡыттар ҙа һәләк булған -ҡыҙылармеецтар беҙҙең ауыл осондағы туғандар ҡәберлегенә ерләнгәндәр. Мәҫәлән: разведкаға килгән ике ҡыҙылармеецты аҡтар тотоп алып ауыл осона сығарып ҡылыс менән сапҡылап үлтергәндәр. Аҡтар киткәс, ауыл халҡы был ҡыҙылармеецтарҙы хөрмәтләп шул үлтерелгән урынға ерләгәндәр. Мәктәптең йәш эҙәрмәндәре, уҡытыусылар коллективы ошо тарихи урынға һәйкәл (штык формаһында) асты.

Ғәлиәкбәр соҡоро. Ғәлиәкбәр ауылынан көнсығыш яҡлап Кесе Нөгөш йылғаһы килеп, Оло Нөгөшкә ҡоя. Кесе Нөгөш йылғанын ҡырын тау битләүенән, (4 саҡрымда) ағаслыҡтар араһынан үткән саҡта Ғәлиәкбәр ҡарт һөрәтке еккән атынан тәкмәскән (тәгәрәп осҡан) ерҙе Ғәлиәкбәр соҡоро тиҙәр.

Рауза соҡоро. Ғәлиәкбәр ауылы менән Иҫке ыҙма яғы төньяҡ битләүендәге соҡорҙо атайҙар. Хәлитов Әндрәхим ағайҙың ҡатыны Рауза көйәнтәләп һыу ташыған һуҡмаҡты әйтәләр. Һуҡмаҡ хәҙер оло юлға әйләнгән.

Әҙһәм хәҙрәт шыршыһы. Ауыл ҙурая төшөү менән, уға "хужа" йәки "оло кеше" кәрәк була. Шул сәбәпле, Баймаҡ районынан Оло Күсей ауылынан Әҙһәм хәҙрәтте саҡырталар. Ауылға ул хужа була, бөтәһе лә уға бойһона. Гараждандар һуғышы барған саҡта, Башҡорт ғәскәрҙәре Советтар яғына күсер алдынан, Зәки Вәлиди Ғәлиәкбәргә килә. Ғәлиәкбәр ауылында өлкән йәштәге Әҙһәм мулла: "Бәләкәй сағында был тауҙарҙы солоҡ һәм йылҡы ҡарап гиҙә инең, хәҙер ҡыҙылдарҙы ҡыуып йөрөйһөң", - тине, тип телгә алып уҙа Әхмәтзәки Вәлиди Туған "Хәтирәләр" китабында (261-се бит).

Әҙһәм хәҙрәт үлгәндән һуң, уның ҡәберлеге тәрбиәләнеп, шыршы ултыртыла. Әрүахтар йортондағы был бейек, өлкән шыршы маяҡтай ҡалҡып үҫеп ултыра, тағы ла йөҙ йәшәр әле. Ғәлиәкбәр ауылында үгәй атай булыуына ҡарамаҫтан, Әҙһәм хәҙрәттең фамилияһын үҙ итеп, нәҫел-нәсәптәрен Ғүмәровтар дауам итә. [1]

Ғүмәр ыҙмаһы. Оло Кәбәс ауылының Ғүмәр исемле кешеһе бер байҙың йылҡы малдарын ҡышлатып яткан. Оло Нөгөш буйындағы был урынды мал ҡышлатыу өсөн бик уңайлы булған. Бесәнлеге лә, йылғаһы ла эргәлә генә. Ләкин элек – электән ен – пәрейҙәр булған, тип һөйләйҙәр.

Бер ваҡыт был көтөүсе малдарҙы һыуға асһа, ни күҙе менән күрһен, юлдың уртаһында бер йыуан солоҡ ағасы арҡыры ята икән. Был аптырауға төшә һәм үҙенең белгән доғаларын уҡып: “Минең һеҙгә бер ниндәй ҙә зыяным юҡ бит, был ағасығыҙҙы юлдан алығыҙ инде?” – тип үтенес менән һорай. Иртәгәһенә сыҡһа, солоҡ ағасы юлдан алып ташланған була. Бынан һуң да был кеше оҙаҡ йылдар мал ҡышлатып йәшәй. Ғүмәр Ыҙмаһы тигән исем шулай ҡалған. [1].

Ҡыҙүлгән. Илдә граждандар һуғышы барған осорҙа ауылдар бер-бер артлы аҡтар, ҡыҙылдар ҡулына күсә. Еткән ҡыҙҙарын һаҡлау маҡсатында Ғәҙелгәрәй, Түбәнге Нөгөш һәм Ғәлиәкбәр ауылдарынан Кужә йылғаһы буйында урман төпкөлөндә бер мәмерйәгә алып барып йәшерәләр. Һөйләшеп килешеү буйынса бер генә ҡарт уларға аҙыҡ-түлек алып барып йөрөй. Ни сәбәптәндер, ҡыҙҙарҙың, береһе ауырып үлеп ҡала. Ошонан һуң был ер “Ҡыҙүлгән” тип атала. [1]

Бәккән. Үрге Нөгөш (Ямаш) ауылының урынына элекке заманда бер кеше күсеп килгән. Ул Мораҡ кешеһе булған. Ул килеп ултырғас, туғандары ла күсеп килеп ултыралар. Ауыл ҙурая, етмешләп өй йорт барлыҡҡа килгән. Хатап менән Аҫылғужа хәҙерге Бәккән урынына утарлап сыҡҡандар. Унда Туңйорт яланына арпа сәскәндәр. Утарлаған урындарына исем эҙләгәндәр. Бер көндө бер бай Кәбәстән Ямашҡа китеп барғанда улар янында йоҡлап китергә булған. Иртән тороп утарлаған урындың матурлығына һоҡланып: “Үәт, Бәккән! Бәккән!”- тигән. Уны Аҫылғужа ишетеп ҡалған да Хатапҡа әйткән. Ул да был исемде ҡушырға ризалығын биргән һәм Бәккән тип исемләгәндәр. [1]

Туңйорт. Үрге Нөгөш (Ямаш) ауылының Бәккән йәйләүенән бер саҡрым көнбайыш яғында икенсе йәйләү урыны - Туңйорт. Был урында көҙгә табанураҡ күсеп килгәндәр һәм шунда аҡкан шишмә туңғансы көн иткәндәр. Ошоға бәйләп тә инде, йәйләү урынын “Туңйорт” тип атағандар. [1]

Сәмиға күпере. Һуғыштан алда, йәшлек осоронда, тормош ауырлыҡтарын байтаҡ кисерә Сәмиға инәй 15 йәше лә тулмаҫ элек сыҡкан ире йәшләй генә үлеп китә. Атайһыҙ-әсәһеҙ, ирһеҙ ҡалған йәш ҡатын 2-3 йәшлек улын эйәртеп күрше ауылға Рәхмәт тигән егеткә тағы тормошҡа сыға.

Коллектив хужалыҡ төҙөлә, тормош әкренләп булһа ла яйлана, көтмөгәндә ике улын ҡалдырып Рәхмәт ағай ҙа донъя ҡуя. Ә Сәмиға ике ирҙән өс бала менән тороп ҡала.

Тормош ауырлығына баш эймәгән, киләсәккә ышаныс менән йәшәгән Сәмиға инәй ихлас күңелдән промателда эшләй. Совет власында таяныс таба, бына тигән өс егет үҫтерә. Олоһо һәм кесеһенә кәләш тә алып бирә ул. Уландарының тормошона, бигерәк тә кесе улы Хәлилгә ҡарап ҡыуанып туя алмай беҙҙең инәй. Тик көтмәгән һуғыш тағын ауырлыҡтар, бөтә ил, бөтә халыҡ өсөн ҡайғы хәсрәт алып килә.

1940 йылдың июнь баштарында оҙон ғына таяҡ таянып Сәмиға инәй ауыл Советы йортона йүнәлә. Һаулыҡ һорашҡас:

“Улым, минең күршенең һыйыры башмағы менән Аҡһырғаҡ йылғаһында кисеү аҫтында ҡумырыҡҡа эләгеп үлгәйне бит. Йылға ла ныҡ ташҡайны шул. Йә, инде, ул бахыр итәк тулы бала менән ирһеҙ ҡалды, етмәһә үҙе сырхау. Бөгөн бер йотом аҡһыҙ”,- тип һүҙ башлай.

Инәйҙе яҡты йөҙ менән ҡаршы алған ауыл Советы председателе Йәнғәлин Тайып ағайҙың маңлай тирәләре йыйырылды, йоҡа ирендәре беленер-беленмәҫ кенә дерелдәп ҡуйҙы.

Үҙе бер низә әйтә алманы, инәй эргәһәнә килеп йәнәшә ултырҙы һәм үҙен тыныс тоторға тырышып:

– Мине һүтергә, аҡылға ултыртырға килдең инде, инәй, ә - тип ҡуйҙы.
– Бөгөн генә уңлап кеше килде, береһе лә көрлөктән түгел.

Инәй түҙмәне, тағы һүҙ башланы:

– Күршенең балаларын аҡһыҙ итмәйбеҙҙә ул. Бөтә күршеләр ҙә аға, һыйыр малдары һәләк була.

Ошо һәйләшеүҙән һуң аҙна үтә. Ауылдың үрьяҡ осонда Аҫҡараҡ йылғаһы янында кеше ҡайнаша. Берәүҙәр ағас һуға, әрсей. Һарһауығыраҡтар әҙер ағастарҙы һөйрәп тә, тәгәрәтеп тә күпер һала торған эргәгә яҡынайта. Сәмиға инәйҙең оло улы артель аты менән уҙарлыҡ имән ташый, күп урында аты менән бергә үҙе лә һөйрәшә. Әле урынынан алыҫ түгел ике өаҙанда Сәмиға инәй ҡуйҙырған һарыҡтың ите бешә. Проматель председателе ашҡа һалырға һоло ярмаһы килтерә. Тик ошо ваҡытта ап- аҡ сеенка оно тотоп Сәмиға инәй яҡынлаша.

- Ризығынан ашаған тиҙ ҡайтыр тиҙәр, Хәлилем иҫән генә булһын. Ә был он бөтәбеҙҙең ризыҡҡа яҙған икән. Шөкөр әле, шул хәтлем яуыз дошмандың башына еттегеҙ бит, - тип фронтивкалары мөрәжәгәт иткәндәй әйтеп ҡуя.

...Йәшләй генә һуғышта ҡатнашып, бер алғыла һылтыҡлап, уң ҡулын яуырынынан аҫып, күкрәгенә ирҙәрсә Ватан һуғышын, Ҡыҙыл йондоҙ орденын һәм күп миҙалдар тағып ҡайтҡан, Сәмиға күперенең тарихын һөйләй.

Аҙ һүҙле Мансур ағайҙың ошо мәлдә сәйен ергә ҡуйҙы ла, уң ҡулының һуҡ бармағын юғары күтәрҙе һәм:

– Һин Әбделхай ҡустым, һөйләгәс береһен дә ҡалдырма. Һыңар ҡул менән ағас әрсеүсе, бүрәнә һөйрәүсе, ашҡа һоло ярмаһы килтереүсе артель председателе кем ине? Мин! Тип һөйлә, - тип ҡуйҙы.

Абдулхай ағай йылмая бирҙе һәм етдиләнеп: “Кемдең ниндәй яҡшылыҡ эшләгәнен, ниндәй насарлыҡ ҡылғанын халыҡ күрә, дөрөҫ баһалай шул. Беҙ “Хәлил күпере” тип атарға тәкдим иткәйнек. Юҡ, халыҡ үҙенә хәл итте”, тип өҫтәне.

Хәҙер көндә юғарыла яҙған,Сәмиға инәйгә күпер һалыуҙа ярҙам иткән ветерандарыбыҙ Исламбай Шәрәфулла, Ғәбитов Мансур, Хәлитов Әбделхай, Байморатов Сәмигәрәй, Йәнгәлин Тайып бабайҙар арабыҙҙа юҡтар шулай ҙа башланғыс Сәмиға күпере кисеүенә бетон плита һалынған, эргәһендәге эре таштар юлдан ситкә алынған. Яҡшылыҡ ситтә ятып ҡалмай бит, ә хәҙер Сәмиға күпере халыҡ хәтерендә ҡалды. [5]

Ҡырғыҙ айыры. Ғәлиәкбәрҙең көньяғында бер ҡорған бар. Шул тирәлә борон ҡырғыҙҙар менән бөрйәндәр һуғышҡан, тиҙәр. Бер оло яуҙан һуң күп кенә дошман ҡырылған. Шул яуҙа үлгән баҫҡынсыларҙы ерләргә бөрйәндәр тупраҡ бирмәгән. Ҡырғыҙҙар тупраҡты мәрке менән дөйәләргә артмаҡлап үҙҙәренең яғынан килтерергә мәжбүр булғандар. Әлеге тупраҡты ташый торғас, шул түң – ҡорған барлыҡҡа килгән. Хәҙер ҙә уны Ҡырғыҙ айыры ҡорғаны тип йөрөтәләр.[3]

Саңды. Ауылдан ике-өс саҡрымлыҡта Уразы буйында “Саңды” тигән урын бар. Был урында халыҡ борондан йылҡы көткән. Йәйге эҫе көндәрҙә тау битләүен саңлауға әйләндергәнгә күрә Саңды тип йөрөтөлә. Саңдау - мал туплана торған ер атала.

Мораҙым. Ғәлиәкбәр ауылының көнсығышында өс саҡрым алыҫлыҡта Кесе Нөгөш йылғаһы буйында урынлашҡан тәүге туғайға, кисеүгә әйтелә. Әүәле халыҡ ара-нәсел булып йәйләүгә күскән урында Мораҙым ҡарт утарлаған өй нигеҙҙәре лә беленеп ята. Шуға Мораҙым кисеүе, туғайы тип йөрөтөлә. [1]

Ҡаҙиса. Кесе Нөгөш буйында Ғәлиәкбәр ауылының көнсығышында дүрт-биш саҡрым алыҫлыҡтағы утар урын Ҡаҙиса исемен йөрөтә. Исламбай ауылының “Фрунзе” колхозының көслө осорҙарында был урында бейә һауғандар. Уны Ҡаҙиса исемле ҡатын оҙаҡ йылда бейәләрҙе бәйләп, тотҡан, һауған урыны. Һуңынан ваҡ мал һимертеү йәйләүенә әйләнде.

Утарҙың кәртәләре әле лә беленә. [1]

Ярыу йылғаһы башы, тамағы һәм утары. Кесе Нөгөш йылғаһының уң ҡушылдығы. Ҡалын урмандар, тау үҙәне буйлап ағып, үҙенә юл ярып төшә. Шуның өсөн йылға “Ярыу” тип, ә Кесе Нөгөшкә ҡойған урыны “Ярыу тамағы” тип атала. Ярыу йылғаһы Биктимер тауы яҡлап көнсығыш-төньяҡҡа аға. Йылға ағымы башы “Ярыу башы” тип атала, мал көткән йәйләү урыны Ярыу утары тип йөрөтөлә.

Ҡаҙған юл. Иҫке Собханғол юлынан Ғәлиәкбәр ауылы биләмәһе аншлагына килеп етеп уҙа биргәс боролошло ҡабаҡ тау һырты буйлап юл өҫкә күтәрелә, тау һырты башлана. Әүәл ауыл халҡы ат арбаһы үтәрлек итеп ошо тау һыртын ҡаҙып сыҡҡанға күрә, тап ошо урынды Ҡаҙған юл тип йөрөтә башлай.[1]

[1] Аллабирҙин Дамир Зиннәт улы.

[2] 2005 йылда Күлбаев Әмир Тимерҡаҙыҡ улынан (1943 й.) Таңһылыу Күлбаева яҙып алған.

[3]1927 йылғы Ҡаһарманов Абдулхаҡ бабай һөйләгән.

[4] Олатаһы Ғәлиев Сабирҙан Әдилә Ишмөхәмәтова яҙып алған.

[5] Ҡаһарманов Абдулхаҡ Абдрахман улынан (1927 й.) Аллабирҙина Нәркәс яҙып алған.

[6] 2014 йылда өләсәһе Исламбаева Хөснәнән ейәне Күлбаев Сынтимер яҙып алды

Үрге Нөгөш (Ямаш) ауылы ер-һыу атамалары

Тауҙар, ҡаялар

Артыш тауы йәки Артышлытау. Үрге Нөгөш ауылының Нөгөш буйлап көньяҡ – көнбайыш битләүендә, Кәзә тауынан арыраҡ, тағы ла күгәреп бер тау күренә. Был тауҙарҙа артыш үҫә. Ямашлылар, ҡайсаҡ ошонан ваҡ – төйәк, ен – пәрей һуғылмаһын өсөн (өйҙөң ишек башына ла ҡуялар, бәлә – ҡаҙа урап үтһен өсөн дә) артыш алып ҡайтып файҙаланғандар. Артышты тап ошо артышлы тауҙан алалар ҙа инде.

Арал тауы. Үрге Нөгөш (Ямаш) ауылының түбәнге кисеүенән аҫтараҡ ҡаршы тауҙы Арал тауы тиҙәр. Был тирәлә йәйге осорҙа Нөгөш йылғаһы арал, йәғни утрау ҡалдырып, артабан тағы ҡушылып ағып ята. Шуға ла тауҙы Арал тип исемләгәндәр.

Аҡтау. Үрге һәм Түбәнге Нөгөш ауылдары (һуңғы ауыл хәҙер юҡ инде) араһында йылғаның уң яғындағы ялтырап торған, аҡ ташлы, яланғас (ағасһыҙ, һирәк үләнле, ташлы, ялтыр тау) тау әллә ҡайҙан күренә. “Исеменә – есеме” тигәндәй, халыҡ телендә аҡ ҡаялы ялтыр бейек тауҙы Аҡтау тиҙәр ҙә ҡуялар.

Ғәзиз тауы. Үрге Нөгөш (Ямаш) ауылы урынлашҡан битләү үрен бейек, ослораҡ тау бүлеп тора. был тауҙы Ғәзиз тауы тиҙәр. Тау яҡлап әүәл Ғәзиз тигән бай йәшәгән. Бикишев Әбдрәхимдең (1932 й.) олатаһы тап ошо Ғәзиз исемле бай булған. Үлер сағында өйөнә инеп үлмәгән, шул тауға менеп йән биргән. Шуға ла тауҙы уның хөрмәтенә Ғәзиз тауы тип йөрөтәләр. [1]

Урта тау. Үрге Нөгөш (Ямаш) ауылы аръяғы армыт – армыт тау теҙмәләренән тора, барын бергә Ҡаршытау тип тә йөрөтәләр. Түбәнге осон да Башмаҡ шыуған тауы торһа, үрҙәге бейегерәк тау теҙмәләре Барлыбай тауҙары ямаштарҙы ыжғыр ел – бурандарҙан ҡалҡан кеүек һаҡлап торһа, ошо ике тау аралығында урынлашҡан тауҙы Уртатау тип йөрөтәләр.

Кәзә тауы. Үрге Нөгөш ауылы яҡлап көньяҡ – көнбайышта үркәс - үркәс тау теҙмәләре күренә: Ғәзиз тауы, Бүренә шыуған тауы, уларҙан төпкәрәк Кәзә тауы, ауыл халҡының кәзәләре йәй буйы ошо текә тауҙан ҡайтмаҫ, үлән уртлар, йәйләр булған. Беренсенән, бүре – фәләндән боҫорлоҡ бейек тау буйлауы, икенсенән – ауылға яҡын. Халыҡҡа ла кәзәләр йөрөгәнлеге әллә ҡайҙан күренеп тора. Шуға ла аҡһыл, бейек ҡаялы тау теҙмәһен Кәзә тауы тип йөрөтәләр.

Ҡаршытау. Үрге Нөгөш (Ямаш) ауылы көмөштәй йылтырап ятҡан Нөгөш йылғаһы буйында, ожмахтай күркәм тәбиғәт ҡосағында урынлашҡан. Нөгөш йылғаһы яҡлап ҡуйы урман, бейек – бейек ҡаялы тауҙары, мүк менән ҡапланған тау теҙмәләрен Башмаҡ шыуған, Басир ҡаяһы, Барлыбай, Йылҡыбай, Урта тауҙарҙы күплектә Ҡаршытау тип йөрөтәләр.

Оҫҡонлоғор. Үрге Нөгөш ауылы менән Кәшәле ауылы (хәҙер Рәшит тигән бабай ғына ҡатыны менән йәшәй) араһында Кәрлек һәм арғы Үшә йылғалары уртаһында оҫҡонло түбә бар. Яҙ, бер аҙ үләндәр ҡалҡыу менән, Үрге Нөгөш, Түбәнге ауыл кешеләре ошо тауға оҫҡон йыйырға киләләр. Яҡын ауыл кешеләре, оҫҡонсолар тау түбәһендә осрашып, ял итеп, сәй эсеп, хәл – әхүәлдәрен һөйләп, оҫҡондоң күплегенә һоҡланып, үҙҙәре бер табын, ғор йыйған кеүек һөйләшеп, оҫҡон йыйып, ауылдарына таралышҡан. Ауылдағы кешеләр оҫҡондо күп алып ҡайтыуҙарына аптырап, ҡайҙан йыйҙығыҙ, тип һорағандар. Ҡайтыусылар, Оҫҡонлоҡырҙан тип яуаплағандар. Шулай итеп, түбәне Оҫҡонлоғор тип йөрөтә башлағандар. [1]

Өйрәк-Таш. Ғәлиәкбәр ауылының үргерәк осонан ҡараһаң ауылдың ҡап уртаһына ҡаршы иң өҫтәге сусағы башҡорттоң түбәтәйенә, таҡыяһына оҡшап тора, шуғалыр ҙа был Таҡыясусаҡ тип атала. Эйе, тап ошонда 1812-1814 йылдарҙағы Ватан һуғышынан һуң Ғәлиәкбәргә күсеп ултырған еңеп ҡайтыусы- лар байрамдарҙа тау сусағына менеп таҡыяларын өҫкә сөйөп уҡ менән атыр булғандар, тип тә һөйләп иҫкә алалар ололар. Нөгөштө кисеп, күл тамағынан сыҡҡан һуҡмаҡ буйлап арманһыҙ булып, лыс һыу булып тирләп, өп өҙөрлөк тә көсөн ҡалмайынса әлһерәп, ошо сусаҡҡа менеп, талып бүрәнәгә әйләнгән аяҡтарынды һуҙып ебәреп, көньяҡ-көнбайышҡа баҡһаң, алыҫта, 7- 8 саҡырым ерҙә, Ямаш ауылы яғында ғәжәп бер күренеш асыпа: унда көнбайышҡа ҡарап йомортҡа баҫып ултырған өйрәк силуэты һынлана Был ошо Өйрәк- Таш тауының һыҙатланышы ул.

Аяҙ, монарһыҙ көндәрҙә Өйрәк-Таш бигерәк тә ап-асыҡ күренә. Уның үҙенә бер айырым легендаһы ла бар. 1967 йылда Ҡанифа оләсәйгә эйәреп, Кәшәлә ауылына уның ҡыҙы Ғәрифә инәйем һәм кейәүе Ғиниәт бабайымдарға барған саҡта ишеткәйнем был легенданы, ошо ҡая аҫтында ике бер туған ағай-эне бәхәскә килә була. Ағалы-ҡустылы был икәүҙең бер ҡыҙға ғашиҡ булыуы алып килә булыр ошо бәхәс-фажиғәгә. Имеш, ҡыҙ үҙе ошо шартты ҡуйған. Бик булыр. Кәкре генә, йолҡош, туйтаңлап саҡ юртып йөрөгән бейә өсөн талашып, һыу һөлөгө һымаҡ айғырҙын зыярат тауы ҡаяһынан осҡанын үҙем күргәнем бар. Шуның һымаҡ кәкреләрҙән сыға бит ул ҡаза. Ағаһы, ошо ҡая сукыһына менеп баҫып ҡурай уйнай алам, ти. Ҡустыһы һинән булмай, тип бәхәс итә. Бәхәс ҡыҙа, шарт ҡуялар: ағай кеше ошо ҡая суҡыһына менеп баҫып ҡурай уйнай алһа, ҡустыһын һыҙма менән атып үлтерә, ҡыҙ уға ҡала әгәр менә алмаһа, ҡустыһы ағаһын атып үлтерә, ҡыҙ ҡустыға ҡала. Күрәһегеҙ, шарт башҡорт халҡында булмағанса бик ҡаты. Күп тапҡырҙар иҫтәрем китеп ҡарап торғаным бар: бик оҫта, таҫыллы бесәй һымаҡ сос булырға кәрәктер унда менеп баҫып тороу өсөн. Ә суҡы ҡаянан айырым, энә һымаҡ булып юғарыға 10-12 метрға сығып тора. Етмәһә, үҙе бик тар ғына. Географтар теле менән әйткәндә, эрозия, йәғни елдән ашалыу һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән суҡы ул.

Нисек менгәндер, ниндәй көстәр этәргәндер, әммә ағай кеше суҡыға менеп баҫып ҡурай уйнаған. Кире төшкәс ҡустыһын атып үлтергән, имеш, ысын булһа. Бик ҡыҙғаныс әлбиттә.

Йылғалар, шишмәләр

Бәккән йылғаһы. Үрге Нөгөш ауылының үрьяҡтан, төньяҡлап - көньяҡҡа Бәккән яланы яғынан Нөгөш йылғаһына ағып ята. Ауылдың үрьяҡ өлөшөндә йәшәгән халҡы әүәл ошо йылғаны һыулаған.

Соңгор тауы, үҙәге һәм йылғаһы. Үрге Нөгөш ауылынан төньяҡлап 4-се саҡрымындағы тау һәр яҡлап тәрән соҡор эсе булғанға шундай атама алған. Соңгор йылғаһы Бәккән йылғаһына ҡоя.

Ҡаныш. Үрге Нөгөш ауылы әүәл ҙур ғына ауыл булған. Нөгөш яры яҡлап Түбәләс битләүе менән ауыл араһында бәләкәй генә шишмә урғылып сыға ла, йәйелеп китеп, өйҙәр, баҡсалар янлап Нөгөш йылғаһына түбәнләй. Ҡаныш исемле әбей үҙ баҡсаһы артынан шишмәгә йөрөр булған. Берҙән – бер көн һыуға барғанда әбейҙең аяғы һаҙлы ергә убып, уның сығарлыҡ хәле лә, кеше саҡырырлыҡ тауышы ла булмаған. Шулай һаҙҙан сыға алмай, батып үлгән ул. Артабан яҙғы шишмәне Ҡаныш тип йөрөтә башлағандар.

Ҡалайылға. Үрге Нөгөш ауылынан төньяҡ – көнсығыш яҡлап бер саҡрым самаһы ерҙә Нөгөш йылғаһына ҡаршытау уяһынан бормалы-бормалы бейек тауҙар араһынан Ҡалайылға ҡоя. Ҡалайылғаның Нөгөшкә ҡойған тамағын ике яҡлап бейек, мөһабәт һәм ғорур ҡаялар ҡаплай, ситтәнерәк ҡараһаң, был ҡаялар ҡаланың бейек ҡатлы йорттарына ла оҡшап ҡуя. Шуға ла был бейек ҡаялы таулыҡ буйына Ҡалайылға тип исем биргәндәр.

Яландар, туғайҙар

Муйыллы туғай. Был туғай Ғәлиәкбәрҙән Нөгөш йылғаһы буйлап Үрге Нөгөш ауылына барғанда ауылға 3 саҡрым етмәҫ элек йылға ярынан һул яҡлап Нөгөш туғайлығында ҡала. Муйыл уңған йыл ямаштар ошо туғайҙа мул итеп муйыл тиреп, йыйып ҡалалар ҙа инде. Емеш-еләккә ҡайҙа ғына йөрөмәһендәр, әммә бындай мул муйыллы туғайҙы таба алмайҙар. Аҡланды шуға ла Муйыллы туғай тиҙәр.

Суҡтал. Үрге Нөгөш ауылынан көньяҡта, Мәҡсүт ауылы йүнәлешендә, һуҡмаҡ уялы яланға алып сыға. Ауылдан биш саҡрым тирәһе. Ошо яланда үҫкән дә инде суҡ тал. Халыҡ та үҙ исеме менән таллы, уялы яланға Суҡтал тип исем биргән.

Сафия ташы. Ямаш ауылынан бер ҡыҙ Оло Кәбәскә кейәүгә сыға. Уның ике ҡәйнәһе, бер ҡайны була. Сафияны ҡәйнәләре һыйғыҙмайҙар. Бер ваҡыт Сафия һыуға бара, ул көйәнтәһен биҙрәһе менән ергә ҡуя ла Ямаш ауылына ҡаса. Бәккән яланына еткәс артына әйләнеп ҡарай, ә артынан кейәүе ат менән баҫтырып килгән була. Сафия яр буйына йүгереп төшә лә таш ҡуйынына инеп ҡаса һәм кейәүе шул ваҡытта уны күрмәй үтеп китә. Кейәү ҡайны йортона барып етә. Сафия аталарына хәлде аңлатҡас, улар кейәүһәрен туҡмамаҡсы булалар, ләкин кейәүҙәре йылға буйлап ҡасып ҡайтып китә. Шунан бирле Сафия йәшенгән ташты Сафия ташы тип, ә кейәү ҡас ҡан йылға буйын Кейәү ҡасҡан йылға тип йөрөтәләр. [1]

Мөлөк утары. Борон Мөлөк тигән бай аттары менән дан тотҡан. ул үҙенең йылҡыларының иҫәбендә белмәгән, ти. Уның икенсе ауылға ат егеп китә торған булһа, хеҙмәтселәрен алдан ебәрә торған булған. Сөнки аттары күҙҙәренә аҡ-ҡара күренмәй саба һәм юлда нимә осрай шуны тапап китә торған булған. Шуға ла хеҙмәтселәре алдан иҫкәртергә сыҡҡандар, ти. Ҡыш аттарын һуғарырға сыҡһалар, уларҙың бер осо Нөгөштә мәкелә булһа, икенсе осо кәртәлә булыр ине, тиҙәр. Был утарҙа Мөлөк ҡарттан башҡа ғаилә йәшәй алмаған. Уның яҡын тирәһендә үҙ малдарынан башҡаларға урын булмаған. [1]

Мөлөк утары. Үрге Нөгөш (Ямаш) ауылынан төньяҡ-көнбайышында алты саҡрым алыҫлыҡта Мөлөк утары урынлашҡан. Мөлөк Үрге Нөгөш байы булып тирә-яҡҡа йылҡысылыҡ буйынса даны сыҡҡан бай кеше булған. Уның 200 йылҡыһы, 40 –лап һыйыр малы тотҡан. Был ҡышлау утарында әле лә һарай бағаналары һерәйеп ултыра. Бай йылҡы малдарын шунда ҡышлатҡан. Көҙ көнө хеҙмәтселәр уҫаҡ ағасынан ҡоймаға һарай күтәргәндәр. Уның өҫтөнә яҡын-тирәләге бесәнде тултырғандар. Унан ҡала йыла ағасын күп итеп ҡырҡып ҡар аҫтына ҡалдырғандар. Шулай күп йылҡыға етәрлек аҙыҡ әҙерләткән. Көҙгәсә тибендә булған, артабан бесән ашаған, һарай уҫағын кимергән. Ҡарҙар эрселә башлауға йыла ла күренгән. Йылҡылары йыла ашаған. Йәнә иртә яҙҙан тибенгә сыҡҡандар.

Мөләктөң ике ҡара айғыры булған. Стәрлетамаҡ яғына сығар булһа, үҙенең хеҙмәтселәре юлдан алдан аҙна элек Мөлөкбай юлға сығарын иҫкәртер булған. Айғыр аттары юлда торғандарҙы аямаған, көллөһөн дә тапап сығып киткән. Стәрлетамаҡтан көнөнә урап ҡайтып йөрөгән. Ул Әхмәр ауылына туҡтаған танышының ҡыҙын өсөнсө ҡатынлыҡҡа һоратып алыуын әйткән. Был саҡта Мөлөккә алтмыш йәш. Танышы күп уйлап тормай ҡара айғырыңды миңә бирһәң ҡыҙ һинеке, тигән. Шулай матур йәшәп ятҡан да ҡара айғыр сит-ят тарафтарҙа – ҡот китә мал-тыуарҙың. Яйлап ауырыуға йылҡы малы, мал-тыуары ҡалмай. Аслыҡ башлана. Ҡыҙҙы атаһы алып ҡайтып китә. Ҡарт өйөнә хәтле һата, тормошо хәйерселектә тамаҡ туйҙыра. Эргә-тирә эт, бесәй ҙә ҡалмай. Илдә революция башланған мәл. Шулай Мөлөк бай үлеп китә. Кинолағы һымаҡ "Байҙар ҙа илай", тигәндәре шулдыр инде. Оло Нөгөш буйында Мөлөктән башлап аҡҡан йылға Мөлөк йылғаһы, Мөлөк яландары бар. [3]

Вәкил соҡоро. Бәккән буйында Соңғор менән Бәккән йылғалары ҡушылған ерҙе Вәкил соҡоро, тиҙәр. Сабирйән ағай менән Сәбилә кәләше менән бесәнгә йөрөгән сағында малайы тыуған. Сабирйән ағай шулай кендек инәһе булған урынды Вәкил соҡоро тип йөрөтәләр.

Зарифа соҡоро. Үрге Нөгөштән көнбайышта дүрт саҡрым ерҙә Маңҡа йорт тигән йәйләүҙәре булған. Ошо йәйләүҙә бер төркөм бала-сағалар уйнап йөрөгәндә, яҙғы ташҡын йылғаға Зарифа тигәне ҡолап, ағып китеп батып үлгән. Ҡыҙ бала яҙа баҫҡан соҡорҙо уның иҫтәлегенә Зарифа соҡоро, тиҙәр. Хәҙер соҡор янында ҡарағай үҫә.

[1] Аллабирҙин Дамир Зиннәт улы.

[2] Аҫылғужин Рәсүл Уйылдан улынан (1938 йылғы)
Нәркәс Аллабирҙина яҙып алды.

[3] Ғәлиәкбәр ауылында йәшәүсе Әминев Фәрит Шәрифйән улынан
Нәркәс Аллабирҙина 2005 йылда яҙып алған.

Мөхәмәтова А.Ә., 8-се класс

Фәнни етәксеһе: Мөхәмәтов Ә.Ғ.

Топонимдар һүҙлеге

ЕР-ҺЫУ АТАМАЛАРЫ ТУРАҺЫНДАҒЫ ЛЕГЕНДАЛАР

Ҡаҙаҡтар борондан башҡорт еренә барымта менән килгән. Улар араһында һәр ваҡыт һуғыш булып торған. Беҙҙә лә ошо ваҡиғаларҙың өнһеҙ шаһиты бар.*Ҡырғыҙ айыры*тип атала ул ер.*Ҡаҙаҡтар*(халыҡ элек уларҙы*ҡырғыҙ*тип йөрөткән) менән тартҡылаш 18-се быуат баштарына тиклем дауам иткән. Шулай булғас, ауылым боронғо һәм мин ата-бабаларымдың үҙ ер-һыуын бирмәйенсә тиңһеҙ алышына ғорурланам.

Ҡырғыҙ айыры

Ғәлиәкбәрҙең көньяғында бер ҡурған бар. Борон ҡыпсаҡ ырыуы менән ҡырғыҙ ырыуы, ошо тирәлә туҡталып, тирмә ҡороп төпләнеп алғандар ҙа мал үрсетеп йәшәй башлағандар. Улар үҙ-ара дошман йәшәгәндәр. Бер ваҡыт ике ырыу араһында һуғыш сыҡҡан. Ҡыпсаҡ ырыуы көслөрәк булып, ҡырғыҙҙарҙы ҡырып һалғандар.Ҡырғыҙҙарҙы күмер өсөн ер кәрәк булған, ләкин ер ҡыпсаҡтарҙыҡы. Улар ер бирмәгәндәр. Ҡырғыҙҙар алыҫтан дөйә менән тупраҡ ташып, яҡташтарын күмеп ҡайтып киткәндәр. Ул урын әле лә бар. Сәфәр утарына киткәндә юлдың һул яғынан ҙур ғына ҡауҡыулыҡ булып күренеп тора. (*1998 йылда уҡыусылар яҙып килтерҙе. Был легенданың "Легендалар һәм риүәйәттәр" китабында Сабитов Хәмит Ибраһим улынан яҙып алынған варианты бар*).

Һөрөмбәт

*Аҫҡараҡ йылғаһының*Нөгөшкә ҡойған ере лә тәрән генә. Исеме шунан алынған.*Һөрөмбәт*ауыл уртаһында. Бында 1960 йылдарҙа туғайын һөрөп, тары сәскәндәр. Хәҙер был урын һай, һыу инмәһәләр ҙә, исемен халыҡ онотмай. Элегерәк хатта йәй көндәре лә ат йөҙҙөрөрлөк булған.

Күсоя

Ауылдың үрге осона сығып, Нөгөш йылғаһы аша һалынған күпер аша үткәс, текә тауға үреләһең. 1933 йылғы*Әминев Ағзам Яхъя*улы һөйләүенсә, ошо тауҙың битләүендә бер кешенең 100-ләп күсе булған һәм ҡорттары 200 батманға яҡын бал биргән. Шунан тороп ҡалған инде тауға үрелгәндәге текә уяның исеме —*Күсоя*.

Кордон туғайы

Ауылдың түбәнге осонда Нөгөш йылғаһын сыҡҡас та бер туғайҙа ҡасандыр кеше йәшәгәне беленеп торған урын бар. 1951 йылғы Аҫылғужин Минияр Әхмәҙулла улынан был урын тураһында һорашҡас, түбәндәгеләр асыҡланды.

Борон урман ҡарауылсылары ауылдан ситтә, үҙҙәренә беркетелгән биләмәлә, йәшәгәндәр һәм был урынды, урыҫтарға эйәреп,*кордон*тип йөрөтә башлағандар. Революциянан һуң да былдай хәл дауам иткән. Ололарҙың хәтерләүенсә, йорттары эстән дә, тыштан да сутланған булған. Бикбаев Ғаффар ағайҙың атаһы шул кордонда йәшәүен һәм шул йорттан уның Бөйөк Ватан һуғышына китеүен хәтерләй. Урман хужалығының Ғәлиәкбәр лесничествоһы асылғас, кордон бөтөрөлгән, ләкин халыҡтың теленә*Кордонтуғайы*булып хәтеренә һеңгән.

Паравай (паровой)

1930 йылдарҙа*Суҡмуйылдан*100 метр самаһы өҫтәрәк, яр буйында, дегет ҡайнатыр өсөн ҡоролма төҙөлә. Һыу буйына төҙөлөүенең сәбәбен һыуҙың күп кәрәк булыуы һәм янғын хәүефһеҙлеген һаҡлау менән аңлата ололар.

Дегет күп етештерелгән.*Күлбаев Әхмәт бабай*, ул саҡта бәләкәй булһа ла, дегеттең улаҡ буйлап сөбөрләп һауыттарға ағып торғанын һәм һаҡһыҙлығы арҡаһында бер эшсенең янып үлгәнен әле лә хәтерләй. Янғындан һуң эш туҡтатыла һәм ҡабат тергеҙелмәй. Иғтибар итеп ҡараһаң, әле булһа ла был ерҙә ҡасандыр ниндәйҙер ҡоролма булғанын һиҙеп була.

Һуғыш туғайы

Борон заманда Ғәлиәкбәр ауылында йәшәгән, ти бер бай. Уның малы бик күп булған. Һыу эсергәндә малының бер осо көртәһендә, икенсеһе һыуҙа булған, ти. Бай бер ваҡыт бесән сабырға үҙенең кешеләрен өмәгә ебәргән. Барһалар,*Кәбәс ауылындағы*бер бай ҙа үҙ кешеләрен бесән сабырға ебәргән булған. Ул да бик бай йәшәгән. Малы, көтөү-көтөү булып, яландарҙы тултырып йөрөгән. Бына яланда ике байҙың кешеләләре осрашҡандар һәм, сабынлыҡ өсөн талаш сығып, ике арала һуғыш башланған. Һуғыш бик оҙаҡ барған һәм Ғәлиәкбәр байының еңеүе менән тамамланған. Шунан башлап был туғайҙы*Һуғыш туғайы*тип йөрөтә башлағандар. Әле лә был туғай шул исем менән йөрөй. (*1998 йылда уҡыусылар башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Мөхәмәтов Вәхит Ғибат улы етәкселегендә яҙып килтерҙе.*)

Ырғыҙлы ауыл биләмәһенә ҡараған ер-һыу атамалары

Ырғыҙлы ауылы

Ырғыҙлы ауылын урталай бүлеп, шул исемле йылға аға. Ауылдың исеме ошо йылға исеменән алынған. Ырғыҙлы ул бер аҙ үҙгәртелгән “Ир ҡыҙлы”, йәки “Ырғыҙлы” тигән һүҙҙәрҙән алынған булырға кәрәк. Был һүҙҙәр рустарҙа яҡшыраҡ һаҡланған, улар йылғаны ла, ауылды ла Иргизлы тип атайҙар, ә оло йәштәге рустар иһә уларҙы Иргызлы тип йөрөтәләр ине.

Боронғо башҡорттарҙа ир һүҙе енесте генә түгел, рустарҙағы мужчина менән мужественный һүҙҙәре кеүек көслө, ғәйрәтле тигәнде лә аңлатҡан. Әйтәйек, “Салауат батыр ир ине”, “Һай, ир икәнһең!” тигән маҡтау һүҙҙәрен хәҙер ҙә ишетергә мөмкин. Шулай итеп, был йылғаның исеме көслө, ғәйрәтле ҡыҙ хөрмәтенә Ирғыҙлы тип аталыуы бик мөмкин.

XVIII быуатта Вознесенск заводы эшләй башлағанға тиклем үк бында аҫаба башҡорттар йәшәгән. Ситтәр килгәс, күптәре күсеп китергә мәжбүр булған.

Башҡорт ерендә, Ырғыҙлы йылғаһында төҙөлгән Вознесенск заводы 1756 йылдың 24 майында эшләй башлаһа ла, баҡыр рудаһы табылған Ялан Ташлы, Күкле Ташлы һәм Урман Ташлы йылғалары тирәһендәге ерҙәрҙе Карл Фон-Сиверсҡа 100 һумға һатыу тураһындағы купчий, 1756 йылдың 24 авгусында ғына төҙөлә. [1]

Баҡыр иретеү заводын ниңә фәҡәт ошонда төҙөргә кәрәк булған һуң? Баҡтиһәң, элек был сәнәғәттә төп яғыулыҡ утын булған икән. Бөрйән еренең урманға байлығын әйтеп тораһы түгел. Ә мәғдәнде Ырымбур далаларынан ташырға тура килгән.

1753 йылда төҙөлә башлаған завод өс йылдан файҙаланыуға тапшырылған. Был ваҡытта Ырғыҙлыла 150 йорт иҫәпләнгән, меңдән ашыу кеше йәшәгән. Сит милләт вәкилдәре төбәктә тап ошо осорҙа ныҡлы төпләнеп ҡалған.

Завод 1774 йылда, Крәҫтиәндәр һуғышы мәлендә, Емельян Пугачев ғәскәрҙәре тарафынан емерелеүгә дусар булған, әммә ауыл йәшәүен дауам иткән. Әлбиттә, элекке кеүек гөрләп тормаған, шулай ҙа халыҡ тыныс ҡына үҙ көнөн күргән.

Карл-Фон Сиверстән һатып алынған башҡорт ерҙәре һәм яндырылған заводтың тирә яғындағы урмандар ҡаҙна лесниктәре тарафынан һаҡлана башлайҙар. Ҡаҙна лесниктәренә лесничий етәкселек итә, уның йорто, элекке завод слободаһы урынына төҙөлә. Тәүҙә лесничий йортонан һәм алты лесник өйөнән башҡа бында өйҙәр булмай. Ул заманда үҫеп сығарға өлгөргән йәш ҡарағай урманы эсендәге был кордон, уның эргәһенән аҡкан, хәҙер быуаһы емерелгән йылға исеменән сығып, Ырғыҙлы кордоны тип йөрөтөлә башлай.

Кордондың ҡайһы йылда төҙөлөүе билдәһеҙ. Һуңғараҡ, был кордонға күсеп килеүсе рус ғаиләләренән ауыл барлыҡҡа килә. Был осорҙа заводтың кирбестән төҙөлгән бинаһының,мастерскойҙарҙың һәм башҡа ҡоромалдарҙың емеректәре бар ине әле тип һөйләйҙәр, әммә ауыл ҙурая барыу менән уларҙың кирбестәрен мейес сығарыу өсөн алып бөтөрәләр, ә барлыҡҡа килгән ауылды Ырғыҙлы ауылы тип йөрөтә башлайҙар.

Быуа Ырғыҙлы йылғаһында ғына түгел, уның завод быуаһына ҡойоусы ҡушылдығы Алтынбей йылғаһында ла булған. Оло кешеләр, Алтынбей йылғаһындағы быуаны, ошо ерҙәргә хужа итеп ебәрелгән лесничий, балыҡ үрсетеү өсөн төҙөткән тип һөйләйҙәр. Һүҙ юҡ, бәлки лесничий был әҙер быуаны завод яндырылғандан һуң ошо маҡсатта ҡулланғандыр, әммә быуаның ҙур ғына өйөмө булыуы менән балыҡ үрсетеү өсөн генә төҙөлгәнгә оҡшамай, ә быуанан алынған һыу улағының эҙҙәре һәм шул тирәләге яҡын төҙөлгән бик ҙур ҡоролмаларҙың нигеҙ соҡорҙары әлдә лә яҡшы беленә.

1773 йылдың октябрь айҙарында атаман Хлопушаның баш күтәргән крәҫтиәндәрҙән торған отряде заводты баҫып алғас, уның эше бөтөнләй туҡтап ҡала.

Вознесенск заводынан Хлопушаны отряде менән ҡыуып ебәреү өсөн Әүжәндәге Петровск заводы унда 300 кешенән торған ҡораллы крәҫтиән отряде ебәрә, әммә икенсе көнө заводҡа 300 баш күтәреүсе килеп Хлопуша отрядена ҡушыла.

1774 йылдың 22 мартында Татищев крепосы янындағы һуғыштан һуң Пугачёв ғәскәре менән сигенеп, дала аша Яйыҡ йылғаһына сығырға уйлай, әммә кире Һаҡмар ҡаласағына килә һәм 1774 йылдың 4 апрель көнө кенәз Голицын ғәскәре тарафынан ҡыйратыла. Ғәскәрҙәренең ҡалдығы менән сигенеп Пугачёв Ташлыға китә, унан Башҡортостанға старшина Кинйә Арыҫлановҡа, һуңғараҡ Вознесенск заводына килә. (Пугачёвщина” китабы, 2 том, 145-се бит Пугачёвты тоттороусы Творогов күрһәтмәләренән).

Оло кешеләрҙең һөйләүҙәренә ҡарағанда, Ырғыҙлылағы Вознесенск заводында Пугачев ғәскәрҙәренең ҡалдығы Хлопуша отрядена ҡушыла. Пугачев үҙен, үлтереүҙән ҡасып ҡотолған батшамын, тип иғлан итеп, заводтың ҡорал тоторлоҡ бөтә эшселәрен үҙенә хәрби хеҙмәткә ала. Уға ошо тирәләгеауылдарҙың башҡорттары ла ҡушылалар. Пугачев ғәскәре 1,5 мең һуғышсыға тиклем барып етә, шуға күрә уны эҙәрләп килеүсе Әбей батша ғәскәре Пугачев ғәскәренә һөжүм итергә баҙнат итмәйенсә, ҡайтыу яғына китә.

1774 йылдың апрель айында Вознесенск заводында ике тәүлек торғандан һуң, баш күтәргән крәҫтиәндәрҙең тәҡдиме буйынса Пугачев заводты яндырырға әмер бирә. Үҙе ғәскәре менән Иҙел үрендәге Демидовтың Әүжәндәге Петровск заводына китә.

Шулайтып, Ырғыҙлыла завод юҡҡа сыға. Ауыл үҙ тормошо менән йәшәй бирә. 19 быуатта уны “хутор” тип йөрөтәләр әле.

XX быуат башында, 1911 йылда ауылда тәүге мәктәп асыла. Бында Ырғыҙлынан ғына түгел, бар тирә-яҡтан балалар йөрөп уҡыйҙар. Ырғыҙлы башланғыс мәктәбенең тәүге уҡытыусылары Якушкин Петр Николаевич, Рассадников, Морозов Степан Петрович, Рылов Василий Аркадьевич булған.

20-се йылдарҙа Ырғыҙлыла 14 хужалыҡ булып, унда 85 кеше йәшәгән. годы. Был ваҡытта ауыл Кананикольск волосенә ҡараған.

Шанлы революция йылдары, болғанышлы граждандар һуғышы, тәүге комсомол ойошмалары, яңы тормошҡа агитация, коллективизация, кулак тип һаналғандарҙы һөргөнгә ҡыуыу – быларҙың барыһы ла Ырғыҙлыны урап үтмә, әлбиттә.

1930 йылда ауылда колхоз ойошторола. Беренсе председателе – Өфөнән килгән коммунист Шалахов тигән кеше була. Колхоз тәүҙә “Ҡыҙыл таң” исемле була, шунан “Пугачев” була.

Беренсе косүмсомол секретаре - Симонов Петр Васильевич.

Колхоздың партия ойошмаһы секретаре Солтанбаев Шәйәхмәт була.

1941 йылда һуғышҡа Ырғыҙлынан 98 ир-егет китә, шуларҙың 41 генә әйләнеп ҡайта.

Основной рабочей силой стали женщины, дети и старики. Работали с раннего утра дотемна, приходилось все делать вручную.

Һуғыштан һуңғы йылдарҙа бында урман эштәре бик көслө була. Бигерәк тә 40-50 йылдарҙа урман аяуһыҙ ҡырҡыла. Ырғыҙлыла бер йыл эсендә 20 мең кубометрға тиклем урман әҙерләнә. Илленсе йылдарҙа Ағиҙел буйлап йылына 550 мең кубометр урман һал менән ағыҙыла. Был йылдарҙа Ырғыҙлы ауылы ҙурая, эш эҙләп килеүселәр менән халыҡ һаны ныҡ арта.

1953-54 уҡыу йылында мәктәптә 120 уҡыусы уҡый, шуның 73 –рус милләтенән, башҡорттар-33, татарҙар – 12, сыуаштар – 2 була.

1950 йылда ауылда беренсе радио барлыҡҡа килә.

1951-52 йылдарҙа дауахана төҙөлә. Тәүге дауахана мөдире Хафизов Шакир Зариф улы була.

Был ваҡытта ауылда 600 кеше йәшәй.

1957 йылда Ырғыҙлыла Башҡорт дәүләт ҡурсаулығының филиалы асыла. Уның контораһы Ырғыҙлыла урынлаша.

1969 йылда халыҡ һаны 700-гә барып етә.

1986 йылда үҙаллы "Шүлгән-Таш" ҡурсаулығы барлыҡҡа килә. Ырғыҙлы ауылында 17 хеҙмәткәрҙән торған фәнни һәм экологик белем биреү бүлектәре эшләй башлай. Ҡурсаулыҡтың директоры булып Косарев Михаил Николаевич тәғәйенләнә.

1989 йылда Ағиҙел буйлап һуңғы һалды ағыҙалар. Ауыл халҡы өйрәнгән эш туҡтау менән, халыҡ ағымы ла әҙәйә. Кешеләр күпләп икенсе яҡтарға күсеп китә башлай. 1970-71 йылдарҙа әле мәктәптә 350 уҡыусы булһа, 1991-92 уҡыу йылында 83 уҡыусы тороп ҡала.

Хәҙерге ваҡытта ауылда 400 тирәһе кеше йәшәй. Йәш ғаиләләр Ырғыҙлыла төпләнәләр, күпләп мал тоталар, умарта ҡарайҙар. Матур һәм шанлы тарихлы ауылдың киләсәге лә өмөтлө.

Ырғыҙлы, Ҡотан, Мәксүт ауылы эргәһендәге ер-һыу атамалары

Шүлгән мәмерйәһенән Ағиҙел буйлап түбәндә, бер-береһенә терәлеп тигәндәй 3 ауыл урынлашҡан: Ырғыҙлы, Мәксүт, Ҡотан.

Ырғыҙлы - ***Ырғыҙлы*** һәм ***Айһөйәк*** исемле йылға буйында урынлашҡан башҡорт ауылы. Уның исемен төрлөсә аңлаталар. «Урал батыр»ҙың логик дауамын тәшкил иткән «Аҡбуҙат» эпосында Аҡбулат һәм Ырғыҙ бей телгә алына. Уларҙың биләмәләре хәҙерге Аҡбулат һәм Ырғыҙлы ауылдары тирәһенә ҡараған. Икенсе варианты Ир-ҡыҙ һүҙе аша аңлатыла. Сит ер баҫҡынсылары менән алышта оло ҡаһарманлыҡ күрһәтеп һәләк солтан ҡыҙҙы «Ир ҡыҙ!» тип баһалағандар. Уны ерләгән урында аҡҡан шишмәне Ир-ҡыҙ һыуы, тигәндәр. Башҡа варианттар ҙа бар.

Ошо Ырғыҙлы ауылына йәнәш Вознесенск баҡыр иретеү заводы төҙөлә. 1753 йылда граф Фон Сиверс төҙөтә уны. Был заводтың да тарихы бай. Хатта сенатор Державин да, ул беҙгә бөйөк рус шағиры А. С. Пушкиндың остазы булараҡ билдәле, был яҡтарҙа булып киткән, завод крепостнойҙарының батшаға яҙған ялыуын тикшереп ҡайтҡан.

Ырғыҙлы ауылы эргәһендәге тауҙар ***Боғасы, Ташморон, Ҡаҙануй, Ҡара кеше, Таштау, Лысая, Алтынбей, Ҡыйғас морон, Ҡарағай йылға, Төйтәләнде, Ырғыҙлы башы*** исемдәре менән атала.

Боғасы - үгеҙ һыртына оҡшап ятҡан тау булып, исемен дә шуға ҡушҡандар. Боронғо төрки телендә боға - үгеҙ, сын - тау һырты. Тауҙың түбәнге өлөшө Ҡайынтүш тип атала. Ҡыҙырым ҡайынлыҡ булғанға шулай атала ул. Пороховушка тигән исем менән дә йөрөтәләр. Уның легендаһы ошолай. Колчак армияһы тар-мар ителгәс, Ырғыҙлы буйында ят кешеләр күренә башлай. Улар урындағы халыҡ араһында Совет власына ҡаршы эш алып баралар. Ҡоралллы бәрелештәр ҙә булғылап ала. Был төркөмдө юҡ итеү маҡсаты менән төбәккә ҡыҙыл ғәскәр ебәрелә. Уларҙың ҡоралы, патрон, винтовкалар һаҡланған йәшниктәрҙе һаҡлау өсөн яртылаш ер ҡаҙып бура ултырталар.

Ҡорал склады тәрән соҡор менән уратып алына, тәүлек әйләнәһенә 7 ҡораллы армеец һаҡлай. Ҡарауыл вышкаһы, һалдаттарға казарма - ике бүлмәле өй һалып ҡуялар. Шунан ҡала ***Пороховушка*** тигән исем.

Лысая тауы хаҡында халыҡ араһында ошондай риүәйәт йөрөй. 1773-1775 йылдарҙағы крәҫтиән һуғышында Хлопуша етәкселегендәге ҙур отряд ошо тау башына килеп туҡтай һәм аҫта ятҡан баҡыр иретеү заводына туптарҙан атырға тотона. Завод һаҡсылары ҡыҫымға ҡаршы тора алмай һәм завод ҡапҡаларын асырға мәжбүр була.

Ҡара кеше тауы. Кинйә Арыҫланов исеме менән бәйле. Тимерйән Әсиғолов ағай һөйләүенсә, Кинйә Арыҫлановтың атаһы олпат кәүҙәле, көслө, ҡарағусҡыл йөҙлө кеше була. Ырғыҙлы яғына килгән ваҡытында вафат булып, ошо тау башында ерләнә.

Икенсе варианты ла бар. Имеш, Пугачевты эҙәрләп килгән батша карателдәре ҡара кейемдә булып, Боғасыға ҡаршы тау башында торғандар һәм уларҙың күплегенән, төҫөнән тауға шул исем йәбешеп ҡалған.

Боғасы тауына кире әйләнеп киләйек. Ҡайынтүш өҫтөндә бер бәләкәй уянан Боғасы башына һуҡмаҡ юл күтәрелә. Ҡотандар уны ҡыя юл тип йөрөтә. Элек ололар уны ***Тәтегәс уяһы***, тип йөрөткән. Тәтегәс исемле урындар күп осрай был төбәктә. Мәҫәлән, ***Тәтегәс ҡараны*** бар. Тәтегәс йылғаһы аға, ҡасандыр унда шул исемле ауыл да булған, тип һөйләйҙәр. Был исемдәрҙең килеп сығышын юрматы ырыуы башлығы Тәтегәс бей менән бәйләүселәр ҙә бар.

Ә Мәксүт ауылынан Мостафин Ғәҙелша ағай һөйләүенсә, был атамалар Әбйәлил яҡтарынан килеп урынлашҡан Мәксүт ҡарттан таралған. Мәксүт үҙе Вашаш йылғаһы буйына урынлашып, ауылға нигеҙ һала. Оло улы Тәтегәс бәләкәйерәк бер йылға үрендә нигеҙләнә. Ауылы ла, йылғаһы ла шул исемле булып китә. Ошо ерҙән саҡ ҡына үтеп китеп Йәнгәрәй исемле улы төпләнә. Был урын эле лә Йәнгәрәй, тип йөрөтөлә. Кесе улы Ыҫмайыл Иҙел туғайын һайлай. Был урын да әлегәсә шул исемен һаҡлаған. Билдәле ғалимыбыҙ Р. Ғ. Күзеевтың «Башҡорт халҡының килеп сығыуы» исемле хеҙмәтендә районыбыҙҙың Кейекбай, Аҡбулат, Әтек ауылдары менән бергә Мәксүттең дә бик боронғо ауыл булыуын билдәләп үтә. Уларҙың барлыҡҡа килеү ваҡытын XIV-XV быуат баштарына ҡайтарып ҡалдыра. Риүәйәттән сығып ҡарағанда, Мәксүт ҡарт уландарының ауылдарына ла шул осорҙа нигеҙ һалына.

Алда әйтелгәнсә, Мәксүт ҡарт Әбйәлил яҡтарынан килгән. Боронғо замандарҙа Әбйәлил яҡтарындағы ерҙәр Бөрйән, Тамъян, Түңгәүер, Ҡарағай Ҡыпсаҡ ырыуҙарына ҡараған. Бөрйәндәрҙең еренә Әбйәлил яҡтарындағы Бөрйән кешеләре күсеп килгәндер, тигән фекер бар.

Ырғыҙлы йылғаһына уң яҡтан Ерәнғонан, һулдан Айһөйәк йылғалары ҡушыла. ***Ерәнгонан*** - ҡәҙимге тау шишмәһе. Уның исеме бик боронғо. Ерән һәм ҡонан һүҙҙәренән алынып, ҡыҙғылт-һары төҫтәге 3 йәшлек бейә малы тигәнде аңлата. Ни өсөн улай аталғанын хәҙер белеүсе юҡ. Шулай ҙа, оло кешеләрҙең һөйләүе буйынса, Ерәнғонан тамағы ошо исемле ауыл ултырышы булған. Аҙаҡ ауыл күсеп, ***Ҡотан*** тип атала башлай. Ерәнғонандан бик алыҫ түгел ***Батран, Кәргәүле, Ҡарамалы, Ҡыңғыр, Айһөйәк, Яуал, Йәнгәрәй, Ыҫмайыл, Тирәктутай*** тигән урындар ҙа боронғо утар һәм ауыл урындары булған. Урыҫтар ҡыҫырыҡлай башлағас, улар юҡҡа сыға. Ерәнғонан туғайын һул яҡтан сикләп ятҡан тау армытының исеме иғтибарға лайыҡ. Пугачев тауы тиҙәр уны. Халыҡ хәтере уны ошолай аңлата. Пугачев Ырғыҙлы заводын емереп, һуғыш кәрәк-яраҡтарын баҫып алғас, ҡамалып ҡалыуҙан ҡурҡып, тиҙерәк заводтан сығып китмәксе була. Бының өсөн ул төп юлдарҙы һайламай, ә Ерәнғонан буйындағы бейек тау аша

йәшертен юл һалырға ҡуша. Бер көн, бер төн эсендә эшләп бирәләр юлды завод кешеләре. Шунан ҡала был исем. Был исемдең икенсе варианттары ла бар.

Вознесенск баҡыр иретеү заводы менән бәйле ер-һыу атамалары байтаҡ. Шуларҙың береһе - иретелгән баҡырҙы заводтан сығарыу өсөн төҙөлгән юл - ***Фистер юлы*** тип атала. Юлды төҙөткән немец кешеһенең исеме бирелгән уға. Юл заводтан башланып, тау-урман йылғаларҙы киҫеп үтә һәм Өфө-Ырымбур трактына барып ҡушыла. Күренеүенсә, был төбәктә ер-һыу атамаларын ике исем менән йөрөтәләр. Урындағы халыҡ ҡушҡан исем һәм аҙаҡ күсеп килгән урыҫтар биргән атама. Фистер юлы буйлап урынлашҡан ерҙәр ***Дегтярка, Арҡайка, Ташөй, Теткадрал*** һәм башҡа исемдәрҙе йөрөтә. Һуңғыһы, мәҫәлән, бер урыҫ ҡатынының малайы менән һыйыр эҙләгәндә айыуға тап булып, фажиғәгә осрауынан ҡалған. Был урындың тәүге исеме ***Ҡурай тартҡан урман*** булған.

Өс ауыл тирәһендәге ер-һыу атамалары бик күп, шуға бәйле тарихтары ла бай.

Антон ҡаяһы. Бынан бик күп йылдар элек ошо яҡтарға Антон тигән бер илгиҙәр килеп сыҡҡан. Берҙән-бер көн Ырғыҙлы ауылынан алыҫ түгел тәрән упҡын соҡор эргәһенән үтеп барғанда быны фуражкаһы төшөп китә. Фуражкаһы артынан тәрән соҡорға төшөп китә лә был кире сыға алмай. Ер аҫтынан юл бар икән, шул юл менән бара ла бара. Бара торғас, Ағиҙел буйындағы ҡаяның таш ҡыуышына килеп сыға. Ҡыуышты Антон бик оҡшата, шунда тороп ҡала.

Был бейек ҡаяны халыҡ уның исеме менән Антон ҡаяһы тип йөрөтә башлаған. Антон үҙе Ҡотан ауылы кешеләренә ут, аҙыҡ өсөн килеп йөрөгән. Үтеп барыусы һалсыларға ҡая тишегенән икмәк, сабата үреп ташлар булған. Яҡын-тирә ауыл башҡорттары менән ул дуҫ йәшәгән. Берәү ҙә уны рәнйетмәгән. Антондың ҡая ҡыуышына инә торған бер нисә юлы булған, тик уны әлегә тиклем бер кем дә белгәне юҡ. Кәрәк-яраҡты ул мәмерйәгә, арҡан ишеп, тәгәрмәс сығыр менән күтәртеп мендергән. Антон ҡаяһына ҡаршы һарығосҡан ҡаяһында уның аҙыҡ һаҡлай торған мәмерйәһе булған. Мәмерйәлә тоҙланған, ҡаҡланған ите, балығы, оно-моно һаҡланған. Антон үҙе ҡая ҡыуышында байтаҡ йәшәгәндән һуң ҡайҙалыр китеп юғалған.

Инсебикә, Ете ҡыҙ, Шүлгәнташ...

"Ағиҙелдең башланған яғындағы тәбиғәт матурлығы, байлығы менән хайран итә. Шуға ла, айырыуса йәйгеһен, туристар ифрат күп килә был төбәккә. Йәш спортсылар йылғала тәүге тәжрибә туплай: унда бигүк ҡатмарлы урындар юҡ. Районның Туризм һәм тирә-яҡты өйрәнеү үҙәге тәрбиәләнеүселәрен етәкселәре Зариф Йәрмөхәмәтов менән Резеда Хужина беренсе категориялы күп көнлөк һыу походына алып сыҡты. Маршрутҡа (уның дөйөм оҙонлоғо – 78 километр) Бөрйән районының Байназар, Иҫке Собханғол, Мәндәгол, Кейекбай, Аҡбулат һәм Ҡотан ауылдары инде.

Йөрөгән урындарыбыҙ төрлө легендаларға бай. Мәҫәлән, Иҫке Собханғол янындағы Инсебикә

ҡаяһы иң текә еренән аҫҡа ташланған ҡыҙ исемен йөрөтә. Уны атаһы яратҡан егетенә түгел, ә ҡарт һәм уҫал ҡартҡа ҡатынлыҡҡа бирергә уйлай. Ҡыҙ ҡаршы сыға, инәлә, ялбара. Унан, атаһының ҡатылығын күреп, өйҙән ҡасып китә һәм ҡаянан ташлана.
Ә Ете ҡыҙ ҡаяларына күтәрелһәң, яҡындағы тауҙар, ҡарағай урмандары, йәйрәп ятҡан болондар, Ағиҙел йылғаһындағы Түбәнге һәм Үрге Таллыҡ утрауҙарын күрергә була. Ағиҙелдең уң яҡ ярында Әкиәт мәмерйәһе урынлашҡан. Ҙур убала бәләкәй генә юл күренә. Ул айырым торған ике ҡарағайға төбәлә. Ошо ағастар эргәһендә өңгә оҡшаған мәмерйәгә инеү урыны бар.

Һуңғы туҡталыш – Шүлгәнташ. Бында балалар палеолит дәүерендә йәшәгән кешеләр тарафынан төшөрөлгән һүрәттәрҙе күрҙе, тәбиғәттең матурлығына һоҡланды. Кәмәлә йөҙөүҙе ойоштороған һәм үткәргән ваҡытта һыуҙа хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен үтәүгә ҙур иғтибар бирелде. Барлыҡ уҡыусылар, һыу маршруттарын үтеү талаптарына ярашлы, ҡотҡарыу жилеттары, каскалар менән тәьмин ителде. Ғөмүмән, сәйәхәт балалар өсөн ифрат файҙалы булды. Улар тыуған яҡты нығыраҡ өйрәнде, күңелдәрендә тәбиғәткә ҡарата һаҡсыллыҡ тойғо-һо ла нығынды".

Автор: **Р. ХУЖӘХМӘТОВА.**

Район: Күгәрсен районы.

"Митрошка ташы". XVIII быуаттың икенсе яртыһында, Ырғыҙлы ауылы эргәһендәге биләмәләр һатылғас, унда Көньяҡ Уралда тиңдәше булмаған бик ҙур баҡыр иретеү заводы төҙөлә. Заводтан алынған баҡырҙың сифаты бик яҡшы булғандыр, сөнки уның бер өлөшөн ылауҙар менән Екатеринбургҡа аҡса һуғыу өсөн оҙатҡандар. Икенсе өлөшөн баркаларға тейәп Ағиҙел, Кама йылғаларынан ағыҙып төшөрөп, ары Волга буйлап һөйрәп үрләтеп Мәскәүгә, ғали йәнәптәре йортона тиклем алып барғандар.

Баркаларҙы күпләп, карауан менән оҙатҡандар. Каруандың хужаһы, һәр барканың етәксеһе – лоцманы булған. Юлда баркаларҙың имен барып етеүе өсөн карауан хужаһы һәм лоцмандар яуаплы булған.

Мин барка лоцманы Митрошка йәки Митрофандың яҙмышы, йәки уның исеменә бәйле таш тураһында һөйләмәксемен.

Бөрйән ерендә, унан үрҙәрәк һәм түбәнерәк тә ташлы тарлауыҡтарҙан етеҙ ағымлы шаршылар яһап аға Ағиҙел. Был шаршыларҙа ташҡын һыуҙа күренмәй ултырған эре таштар бик күп. Шул таштарға һуғылып, йылға һыуы ҡаҙанда ҡайнаған кеүек ҡайнап, урғылып аға. Иҙел түбәнендә етеҙ шаршылы был тарлауыҡтарҙы барлыҡҡа килтереүсе ҡая ташлы тауҙар кинәт өҙөлөп, Ағиҙел ялан киңлектәренә килеп сыға.

Ташҡын һыу бала ярға төшкәс, "Ҡая ауыҙы" тип аталған ошо урында һуңғы етеҙ шаршының уртаһында тип әйтерлек ҙур ғына таш асыла. Уны "Митрошка ташы" тип йөрөтәләр.

Митрошка йәки Митрофан Брегколлегияның әмере буйынса мең яҡташы менән Ҡаҙан өйәҙенең мәжбүри рәүештә завод эштәренә ебәрелгән яһаҡ теләүсе крәҫтиән булған һәм заводчиктар оҙата торған каруандарҙың барка лоциаңы вазифаһын үтәй. Урта буйлы, йыуантаҡ, имән кеүек таҙа кәүҙәле, үтә ҡыҙыу холоҡло лоцмандың был сәйәхәте тәүгеһе генә булмаған. Йылғаларҙан барканы ул бик оҫта йөрөткән һәм Митрошканың тос йоҙроғон барканы хеҙмәтләндереүселәргә йыш татырға тура килгән, тип һөйләйҙәр.

Ҡотан ауылы.

Сама менән Ҡотанға Аҡ батшаға барған мәлдәрҙә нигеҙ һалынған булырға тейеш. Тик исеме башҡа – Мәсетле.

Бүгәс килгән мәлдә лә ауылыбыҙға 150-200 йыл тирәһе булыуы көн кеүек асыҡ. Ауылыбыҙҙың өлкән кешеләре һөйләүе буйынса һәм тарихи мәғлүмәттәргә ҡарағанда, Пугачевтың ауыл мәсетен шартлатып китеүе билдәле. Мәсетте тыштан ат һәм ҡул көсө менән тиҙ арала ғына төҙөп булмай. Ауылға нигеҙ һалып, ерен эшкәртеп, баш-күҙ алғанса, кәм тигәндә бер быуаттан ашыу ваҡыыт китә. Етмәһә даны тирә-яҡҡа таралырлыҡ итеп һалыу өсөн тейеүем. Тимәк, ауылыбыҙға 400 йыл самаһы. Тарихсылар киләсәккә был һүҙҙәрҙе кәрәкле сығынаҡтар менән иҫбатлар.

Районыбыҙҙың 16 ауылы, шул иҫәптән Ҡотан Бөрйән ырыуына ҡарай. Нәҫелебеҙ – Монаш, тамғабыҙ ҡапҡа. Аралар исеме: сысҡан, айҡолаҡ, шекәрә, татар, кәкре, ҡуян, сөлсә. (А.Камалов “Башкирские географические термины и технология. Уфа. “Китап” 1997 г.)

Тарихи мәғлүмәткә күҙ һалһаң, ауылыыбыҙ 1811 йылдан ғына Ҡотан булараҡ билдәле. Мәсетле исеме менән һаҡланған документтарҙың бик һирәктәре булһа ла, элекке Берг-коллегияла, Мәскәү, Санкт-Петербургта булырға тейеш.

Быуындан быуынға ҡулъяҙма рәүешендә һаҡланған ауыл тарихы һәм шәжәрә муллаларҙа һаҡланған ауыл тарихы һәм шәжәрә муллаларҙа мәсеттә һаҡланған. Ә Бүгәс һәм уның яуҙаштары Вознесен баҡыр иретеү заводы менән бер рәттән, һыу тирмәнен, алда әйтелгәнсә, Ҡотан мәсетен дә юҡҡа сығарып китә. Билдәле, намаҙ ваҡытына тура килһә, кешеләр ҙә юҡ, документтар яна.

Пугачев, Ырымбур яҡтарында еңелгәс, Белоретҡа барғанда Ырғыҙлыға юлайҡан һуғыла. 1773 йылдың апреленең тәүге көндәренә тура килә. Ул килгәнсе Хлопуша ҡушаматлы иң яҡын ярҙамсыһы заводты ҡулға төшөрә. Уның нәҫелдәштәре әлеге Соколевтар, Бүгәс батша 1774 йылдың июнендә Салауат ғәскәре менән аралаша. Нәҡ шундағы Михельсон отряды менән ҡыйыу алышта легендар геройбыҙға булгадир исеме бирелә. Ярты йылдан һуң, 4 иптәше менән Ҡарата-улы ла тотола. Артабанғы яҙмышының аяныслы булыуы билдәле. Тимәк, ул Ҡотанға килмәгән булып сыға. Ләкин халҡым уның рухында ил азатлығы өсөн яуға күтәрелгән. Йөҙ башы Мотай Айытҡолов, Нәҙерғол Рысаевтар етәкселегендә башҡорттар ҡушылып, ошо яҡын-тирәләге Әүжән Питрауға юл ала. Нәҡ апрелдең 13-өндә барып етә. Дин-ҡәрҙәштәре йәшәгән йорт-ер азатлығы, хөр донъя, ирек, тыныслыҡ өсөн көрәшә улар. Эйе, ул мәлдәр бик алыҫта

кеүек булһа ла, беҙҙең бер нисә быуын ғына элекке ата-бабаларыбыҙҙың күбеһе улар менән бергә онотолоп бара. бәхеткә күрә архив материалдары бар. [2]

Антон ҡаяһы. Иҙел ағымынан һанағанда, Шүлгәнташ мәмерйәһенән 20 - 25 саҡрымдай түбәндә, керешенән тартылған уҡ кеүек текә, кемдер юнып, һыу ситенә мәңгелеккә иҫтәлеккә ултыртҡандай, ап-аҡ ҡая ҡайҡайып тора. Иртәнге ҡояш Селекле тауы аша туп-тура уның стеналарына ҡаҡлыға ла, байығанда ла һуңғы нурҙары ҡайынлыҡтар өҫтөнән нәҡ уны сағылдыра. Уны Антон ҡаяһы тиҙәр. Оҙонлоғо ярты саҡрымдан артығыраҡ. Ҡаяға үрмәләр ярты юлда мәғәрәһе, йәғни ауыҙы өңрәйеп тора. Ул урын тик профессиональ альпинистар өсөн генә. Ағиҙел ошо сағыл ҡая менән осрашып, хәлен һораша ла ары йүгерә. Бирьяҡта һылыу ҡайындар менән биҙәлгән киң яланды бер ҙә Антон яланы тип түгел, шул яҡка арты менән ултырған тауға бәйләп, “Туйбаға аҫты” яланы тибеҙ. Ауыл һыу менән бер тигеҙлектә ултырһа ла, "аҫты" һүҙе бергә әйтелә. Ҙур йыйын-байрамдарҙы үткәрер еребеҙ ошо. Ауыл кетөүен арыраҡ ыңғайлатабыҙ. Ҡаянан түбәнерәк Ҡыңғыр ауылы ла булған. Халҡы утыҙлап өйҙә йәшәгән. Аҡ ҡаяға Антон исеме революциянан һуң ғына бирелгән, тип һөйләйҙәр. Унан да элегерәктер, юғиһә, ҡаяның тәүге исемен иҫләрҙәр ине. Мәмерйәлә йәшенеп ятыусы Ырғыҙлы заводы ҡасҡыһы тигәндәре дөрөҫтөр. Хатта сихырсы булған, имеш, тигән варианты ла бар (Башҡорт халыҡ ижады, II том, "Китап", 1997 й., 83 - 84, 363-сө биттәр). Урындағы төп халыҡ тик башҡорттар ғына булыу сәбәпле, шуға тиклем бейек, мәғрур был ҡаяның башҡаса аталыуы көн кеүек асыҡ. Ә быны кем белә һуң? Әлеге лә баяғы документтар. тибеҙ. Кәрәкле ҡағыҙҙар, шәжәрә һаҡланған Ҡотан мәсетен Бүгәс яугирҙары Боғасы тауынан утҡа тотоп киткән. Мәсеттең дә көлө күккә осҡан, кәрәкле ҡағыҙҙар ҙа янған. Әммә халыҡ хәтере мәңгелек.

... Имеш, революцияға тиклем үк бында ялан яғынан бер монах ҡасып килә. Ул бөтөн (нәмәнән ваз кисеп, диндең ниндәйен дә аҫтын өҫкә әйләндергән зобани кеүектәргә ышанысы алмағас, ошо мәйерйәгә инеп йәшенгән уңынан унда төйәкләнгән. Ашарға үҙе йүнләгән. Кеше малына теймәгән, үҙҙәренә күренергә тырышмаған, һирәк-һаяҡ ҡына ауылдарға барып сыҡҡылаған. Икмәк, тоҙ һораған. Ҡайһы саҡта ҡышҡы һыуыҡта һоҫко тотоп ҡуҙ һорарға ла килгеләгән. Ҡыңғырҙан мәмерйәгә аслы-туҡпы килеш һыуыҡта ҡуҙына өрә-өрә йүгергәндер, бахырың. Иртән иртүк йә күҙ бәйләнгәс кенә күренгән ул алама йөрөгән был әҙәми затҡа хәйер итеп аҙыҡ-түлек тә биргәндәр. Үҙен бигүк дәрүиш итеп күрһәтергә лә теләмәгән. Йәлләтмәгән дә, теләнселәмәгән дә. Алмашҡа арҡан ишеп, сабата үреп килтергән. Кешеләрҙең уға ҡарата яҡшы мөнәсәбәтен шулай үҙ хәленсә ризалаған, күрәһең. Тик уның менән ым-ишара ярҙамында аралашҡандар.

Тимәк, сәйер әҙәм тауышын да сығармаған. Бәлки, кем белә, телһеҙ ҙә булғандыр. Мәйерйәгә инеп-сығып йөрөй торған һуҡмағын да белгәндәр, ләкин эргәһенә барып бимазаламағандар. Үҙе лә кешеләргә ылыҡмаған, башҡаларҙы ла эйәләтмәгән. Уның өсөн заманына күрә шулай ҡулай булған, тимәк.

Шулай ҙа ҡыҙ-ҡырҡын, йәлләп, монахтың йөрөгән юлына әҙ-маҙ кейем, ризыҡ ҡалдырып китер булған. Ярҙамды кире ҡаҡмаған.

Антон ҡартты малай саҡтарында алыҫтан ғына күреүҙәрен Ырғыҙлы урта мәктәбе уҡытыусыһы, хәҙер мәрхүм Тимерйән Әсиғоловтың "Таң" гәзитендә яҙылған иҫтәлектәрендә уҡырға мөмкин.

Был хәл Икенсе бөтә донья һуғышы алдынан була. Ҡыш көнө, ниндәйҙер ҡан эҙен юллап барғанда, үҫмерҙәр Антон ҡарттың болан салып торғанын күрә. Нисек йыҡҡандыр - Хоҙай үҙе генә шаһит. Улар күргән уҙаман, сабынлыҡ эргәһендә ер өй ҡаҙып, ике монах ҡыҙҙы яман күҙҙәрҙән йәшергән Павел атаҡай (отец Павел) булыуы ла мөмкин. Кем белә, Антон үҙен шулай атап та йөрөткәндер. Һәр хәлдә, бола замандан алда, Аҡһыйыр яланында, ер өй ҡаҙып, тәреләрен, дини китаптарын һаҡлап йәшергән Павел атаҡайҙың ҡасып йәшәүе дөрөҫ. Үткән быуаттың 20-се йылдары башында ҡыҙҙарҙың береһе Ырғыҙлы зыяратында ерләнгән, икенсеһе хәбәрһеҙ юғала. Мәгәр ике исемле бер урыҫ, йә ике дәүерҙәге ике урыҫ ошонда йәшеренеп йәшәгән. Икеһе лә - үҙ заманының ҡорбандары.

1768 йылда билдәле тарихсы һәм сәйәхәтсе Иван Иванович Лепехиндың да был мәмерйәгә инеп, тикшеренеү эштәре алып барыуы хаҡында "Шүлгәнташ" ҡурсаулығы хеҙмәткәре В. Лоскутовтың яҙмалары баҫылған ("Бөрйән яғы", 1997 й., ҡурсаулыҡ нәшриәте, 30-сы бит). Тик һуңғы йылдарҙа мәмерйәгә инеү юлы емерелеп, ҡапланған, тиҙәр. Тау башынан, өҫтән генә арҡан һүҙып, эскә төшөү мөмкинлеге бар икән. Юл бикле, үҙ мәнфәғәтен ҡайғыртыусы ят бауырҙарға ябыҡ тиеүгә ишара был. Ә урындағы халыҡ ғорурлығына, фән асышына, тип тикшеренеүселәр өсөн тарихҡа ишек һәр ваҡыт асыҡ. Сөнки асылмаған биттәре бихисап. Эҙләнеүселәре ерле халыҡтан булырға тейеш. Юғиһә, әле лә ҡулдарына махсус ҡорамалдар тотоп, үҙҙәрен генә уйлаған заттар был яҡҡа килә.

Ә Антон ҡарттың артабанғы яҙмышы әлегәсә билдәһеҙ. Сыуалыштарҙан биҙеп бөткән Ырғыҙлы кешеһе имеш, тигән хәбәр ҙә йөрөй. Бәлки дөрөҫтөр ҙә. Ул бит бер ваҡытта ла йөҙөн күрһәтмәгән. Көләпәрәһен битенә батыра кейеп, бөркәнеберәк йөрөгән. Аяҡ кейеме лә булмағандыр. 1888 йылғы Мәрзиә Хәким ҡыҙы һөйләүенсә, ара-тирә Ҡотанға килгәнендә сабаталай ҙур яланғас аяғы ҡышҡы һыуыҡта ҡып - ҡыҙыл булып йөрөгән. Бер үҙе мәмерйәлә йәшәгән, үҙ йүнең үҙе күреп, болан йығырлыҡ көскә эйә кеше мыҡты кәүҙәле ир уртаһы әҙәм булырға тейеш.

Ҡотан ауылы ҡарттары һөйләүе буйынса, хаҡ һүҙ: 1950 йылдар башында ла ул ишкән арҡан-тышауҙарҙы, үргән сабаталарҙы күреп алып ҡайтыусылар булған. Антон ҡарт кәүҙәһен булһа ла табып шул тирәгә ерләү маҡсатында ҡыҙыҡһынһалар ҙа һуңғы тапҡыр күргән-белгән бер кем дә юҡ икән. Бәлки, тағы ла ҡурҡынысыраҡ хәүеф-хәтәрҙе һиҙеп, икенсе яҡҡа күскәндер. Арыраҡ Шүлгән яғына барып сыҡҡандыр. Унда ла ауылдың бер урамы шулай тип аталған тау итәгенә һыйынған. Бәлки, ауырып, ас-яланғас килеш йәнгә талашҡанында мәмерйә үҙе кәшәнә булғандыр. Нимә генә тиһәң дә, Антон ҡарт тип халыҡ хәтерендә һаҡланған урыҫ кешеһе, үҙ халҡын Аллаға ышандырып, иманға ҡайтарыу ниәтенән хаҡ юлға өндәүсе, һуңғы йылдарында ҡара урманға ҡасырға мәжбүр ителеп, тау-таш араһында көн күреп, хәбәрһеҙ юғала. Ә диндең ҡайһыһы ла әҙәм балаһын иманға өндәй.

Хәҙер ҡая ҡаршыһы рәшәткәләнеп алынған тирә-яҡтан бихисап халыҡ ошонда ял итергә килә. Туристар, ауылдың исемен белмәһә лә ҡаяны юллап таба. Шунда ирәйеп, ял итеп ҡайтып китәләр. Карталарҙа был ҡая юҡ, сөнки бәләкәй һанала. Ә тарихы ҙур.

Шулай итеп, матурлыҡ өсөн генә ултыртып ҡуйғандай мәмерйә үҙендә бик күп сер һаҡлай. Тарихҡа өнһөҙ генә шаһит булып, беҙҙе ят бауырҙарҙың яман күҙҙәренән дә һаҡлаған кеүек. Нисә быуат инде ***Антон ҡаяһы*** исеме менән үҙ серҙәрен тик Ағиҙелгә генә сисә ул. [2]

“зобани” - тамуҡта кешеләрҙе яндырып тороусы ғазап фәрештәһе.

Туйбаға. Ҡотан ауылы эргәһендә Туйбаға исемле тау бар. Уның исемен былай аңлаталар: шул тауҙың бик бейек тигеҙ һыртында ҡасандыр туй булған. Тау тәүҙә Туйбулған тауы тип аталған. Ваҡыт үтә килә Туйбаға тип йөрөтә башлайҙар.

Көрәй тауы. Туйбуға тауы эргәһендә Көрәй тауы ауылға йәм биреп тора. уның исемен Туйбаға тауына ла бәйләйҙәр. Туй барған ваҡытта көрәгә күтәрәгәндәр, тип тә һөйләйҙәр. Көрәй исеме шунан булырға тейеш: ул бик ҙур һабан төрәненә оҡшаған, һепертке буран яуған ҡарҙа ауыл өҫтөнә ташлап йәки көрәп торғанға шулай атағандарҙыр.

Бүгәсәү тауы. Көнсығыштан йәки Иҙелдең һул яғында һуҙылған ҙур ғына тау теҙмәһе Боғасы (Бүгәсәү) тип атала. Оло кешеләрҙең һөйләүенә ҡарағанда, был исем Пугачевтан алынған. 1773-1775 йылдарға тура килә. Пугачев Ырғыҙлыла урынлашҡан Вознесенск заводынан Иҙел башына ҡарай киткән. Ә Пугачев отряды килеп туҡтаған тау исеме Боғасы булып ҡалған. (Хәҙер халыҡ телендә Бүгәсәү тип тә йөрөтөлә).

Туңмаçкүл. Ҡотан ауылынан түбәндә Түңмаçкүл исемле күл бар. Күл тигәс тә әллә ни ҙур ҙа түгел ул. Яҙ көндәре бер аҙ киңәйә, тәрәнәйә. Тирә-яғын һыу баса. Ә йәй көндәре бөтөнләй бәләкәсәйеп ҡала. Шуныһы ғәжәп: сатлама һыуыҙтарҙа ла туңмай. Сөнки ҡая аçтынан ғына ҙур булмаған шишмә сығып ята. Һыуҡ, аяҙ көндәрҙә күл өçтөн томан ҡаплай.ҡайһы саҡта унда ҡанаттары имгәнгән ҡыр өйрәктәре ҡалғылай. Шуға ла ул күл халыҡ телендә Туңмаçкүл исеме менән йөрөй.

[1] Әсиғолов Рауил Тимерйән улы

[2] Венера Ситдиҡова

Кейекбай ауыл биләмәһенә ҡараған ер-һыу атамалары

Кейекбай ауылы

Тыуған ауылым - Кейекбай

Ғәфүр Сафин

Низәр генә юҡ һуң ауылымда:
Еләктәре, муйыл, баланы.
Бала саҡтан миңә таныш булды
Ҡаялары, урман, яланы.
Менһәң әгәр серле Мәсемтауға
Алыҫ үткәндәрзе уйлайһың
Килеп китә ошо тауға баҫып
Ауылыма бер йыр йырлайһы.
Ҡайтып китәм тыуған яҡтарыма
Бала сағым үткән йылдарға
Таң алдынан һайрар ҡоштар тауышын
Хискә бирелеп тағы тыңларға.
Ҡайтып китәм тыуған яҡтарыма
Арына алмай татлы уйзарзан
Баҫһам әгәр таныш юлдарыма
Йөрәккәйем баҫылыр ярһыузан.
Сылтырап аҡкан Ҡөргәҫ өҫтәренән
Ҡоштар оса ҡанат ҡағынып
Ауылымдан ҡырға киткән кеше
Кире ҡайтыр уны һағынып.

XIX быуатта хәҙерге Бөрйән районы территорияһында ике волость — Бөрйән һәм Ҡарағай — Ҡыпсаҡ волостары вәкилдәре йәшәгән. Уларҙағы ауылдар 1798-1855 йылдарҙа Верхнеуральск өйәҙенең 6-сы, ә 1855- 1865 йылдарҙа 5-се башҡорт кантонына ҡараған.

Тарихтан билдәле булыуынса, 1773-1775 йылғы Крәҫтиәндәр һуғышы баҫтырылғас, Батша хөкүмәте башҡорттарҙы башҡа баш күтәрмәҫлек итеп тотоу сараһын эҙләй башлай. Ошо йәһәттән 1798 йылда бөтә Башкортостан ерендә 1863 йылға тиклем кантон идара итеү системаһы булдырыла.

1798-1803 йылдарҙа 11 башҡорт һәм 5 мишәр кантоны төҙөлә. Кантондар бер-береһенән иҫәп номеры менән айырылған мәҫәлән, беренсе кантонға Пермь һәм Уҫы (Оса) өйәҙҙәре, икенсе кантонға — Пермь өлкәһенең Екатеринбург һәм Щадрин өйәҙҙәре ингән. Өсөнсө кантонға — Троицк өйәҙҙәре, дүртенсегә — Силәбе, бишенсегә — Бөрө, алтынсыға — Верхнеуральск, етенсегә - Өфө, һигеҙенсегә — Стәрлетамаҡ, туғыҙынсыға — Ырымбур, унынсыға — Бөгөлмә, ун беренсегә — Миңзәлә өйәҙҙәре ингән.

Кейекбай ауылы Аҡбулат, Әтек, Йәрмөхәмәт, Яҡшығол, Миндеғол, Иҫәнғазы, Усман ауылдары менән бергә 6-сы кантондың 10-сы йортонда булған.

Кейекбай ауылына нигеҙ 1834 йылда ***Күргәҫ йылғаһы*** буйына һалына. Был ерҙәргә тәү башлап килеп ултырыусы Кейекбай Юлтимеров була.

Легенда буйынса был ауылдын, икенсе иseме - ***Баштире***. Тәү башлап күсеп килеүсе 23 ғаиләлә 170 кеше иҫәпләнә. 25 йылдан һуң 40 йортта 300 кеше йәшәгән. XIX быуаттың 40-сы йылдарында 28 йортта йәшәгән халыҡ йәйләүгә сыҡҡандар. Уларҙың 117 ат, 61 һыйыр, 15 баш кәзәләре булған. Улар бергәләп 124 бот арыш һәм 184 бот бойҙай сәскәндәр.

Кейекбай ауылында 1812 йылғы Ватан һуғышы ветераны, «Парижды алғаны өсөн» миҙалы менән бүләкләнгән Арыҫланғол Хәмитов һәм Ырымбур генерал-губернаторы Перовский менән 1839-1840 йылдарҙағы Хиуа походында ҡатнашҡан Йәмлиха Байназаров йәшәгән.

Мәндәғол ауылының ер-һыу атамалары

Ульяғол-Рабиға. Мәндәғол ауылында Ульяғол менән Рабиға тигән кеше йәшәгән, уларҙың балалары булмаған. Ульяғол бик һөнәрле, бөтә эш ҡулынан килгән. Ҡурайҙа ла яҡшы уйнаған. Ҡатыны Рабиға ла моңға, уйын көлкөгә ихлас булған. Бик моңло итеп иренең ҡурайына ҡушылып оҙон көйгә йырлаған һәм оҫта бейегән дә. Шулай итеп, икәү араһы бер-береһенең аңлашып татыу ғүмер иткәндәр. Эштән һуң йырлашып, моңлашып күңелдәрен асып, донъя-ғөмөр иткәндәр. Хужалыҡтарында әллә ни артыҡ мал, ҡош-ҡорт һәм умарта булмаған. Үҙҙәре йәшәрлек ғөмөр итерлек кенә тотҡандар.

Яҙ етеү менән ауылдаштары менән бергәләп ағас ҡырҡып ялан яғына Ағиҙелдән һал ағыҙып, ағас һатып, бесән мәленә етерлек ашамлыҡтар һатып алып ҡайтҡандар бесән әҙерләп бөткәс, көҙ етеү менә тағы ла ҡышҡы йәрминкәгә әҙерлек кустарсылыҡ эше: дуға, сана яһау һәм башҡа эшен башҡарған.

Ульяғолдон сабынлығы Баҙал тауының бөткән осонда ауылға яҡын ерҙә бер ҙур булмаған яланында була. Шул яландың ҙур булмаған ер. Хәҙер ***Вышка*** тип атайҙар, ҡаяғында тирә-яҡты пожар ҡурҡынысынан һаҡланыр өсөн эшләнә.

Ульяғол сабыны-яланы төшөп ҡалған. Яландың аҫҡы өлөшөндә, урман эсендә шишмә сыға, ул тау түбәненә ҡарай ағып бер бәләкәй генә йылға булып Мәндәғол менән Иҫке Собханғол ауылы араһында булған юлды ҡырҡып алып ята. ***“Раҡай”*** йылғаһы тип исемләйҙәр. Был йылға ***Өйрәкле тауына*** яҡын ерҙә. Ульяғол менән Рабиға бер-береһенә яратыу, һөйөү, бер-береһенә ҙур ихтирам, хөрмәт йөҙөнән ***“Ульяҡай-Раҡай***” тип атағандар. Уларҙың ошондай матур донъя көтөүҙәренә бөтә ауыл халҡы һоҡланған. Рабиға һыуға төшкәндә Ульяғол ташҡа менеп ҡурайын уйнап торған, Рабиға һыуын көйәнтәләп йырлай-йырлай ҡайтҡан. Шулай итеп, ғүмерҙәренең үтәрен бейеп, бер-берен һөйөп ҡурай уйнап оҙатып, ҡаршы алып йәшәгәндәр.

Был ялан Ульяғол сабынлығы тора-бара исеме үҙгәреп ***Вышкаға*** әйләнгән, ә ***“Раҡай”*** үҙгәрмәй ҡалған.

Мәндәғол ауылының оло йәштәге ҡарттары һөйләүенсә, Абдулла Ваһапов Нөғмән улы, һуғыш ветераны яҙып алған.

Аҡбулат ауылы

Аҡбулат ауылы 6-сы башҡорт кантоны Бөрйән өйәҙе, 10-сы йортҡа ҡарай. 191 метрикала Аҡбулат ауылында мәсет 1843 йылдың 18 ноябрендә Ырымбур губерняһы указы менән № 3802 төҙөлә ауылда йәмғеһе: 183 ир-ат, 168 ҡатын-ҡыҙ йәшәгән. Имам-хатип, мөғәллим Әхмәтша - Ғәбделхалиҡ Ғабдрафик улы № 3278 20 июлдең 1881 йыл раҫланған, Ғөбәйҙуллин Мөхәмәтғәле Әхмәт улы имам-хатип 1910 йыл. Ҡолдырбаев Хафиз Әхмәр улы 1903 йыл, Ғабдрафиков Ниғмәтулла Әхмәтша улы 1911 йыл имам мөғәллим булып эшләгәндәр.

Хәҙер был урында “Шүлгәнташ” совхозының фермаһы. Эргәләге тау битендәге юғалып бөтөп барған зыярат урыны ғына бында ҡасандыр ауыл булыуын раҫлай.

Аҡбулат ауылы кешеләре Баймаҡ районы Таулыҡай һәм Ғәле ауылдарынан булған. Йәшәү һәм мал көтөү өсөн ер иркен була. Юлдан алыҫ булыуын һәм көслө ҡырауҙарҙы сәбәп итеп, өгөтләп, 1949 йыл ауыл халҡын Ямашлы тамағындағы яланға Ағиҙел буйына төшөрәләр. Иң тәүгеләрҙән булып, Ноғоманов Усман күсеп килә. Ғәҙелгәрәй халҡын саҡ ҡына түбәнерәк ***Морат яланына*** төшөп ултырырға көсләйҙәр. Бында инде ер бигерәк тә ҡыҫым була. Көтөүлек, сабынлыҡ та юҡ. Ғариза яҙып, ҡултамға йыйып, юллап бында күсмәйҙәр.

Аҡбулат мәмерйәһе. Ағиҙел йылғаһының эзбиз ташлы ярҙарында бәләкәй мәмерйәләр бик күп. Яңы Аҡбулат ауылының көнсығыш өлөшөндә, тау битләүендә бер мәмерйә бар. Ул Аҡбулат мәмерйәһе. Был мәмерйәнең эсе әкиәттәгеләй матур һәм кеше һоҡландырғыс булғас, уны ***"Әкиәт"*** мәмерйәһе тип тә йөрөтәләр.

Бабсаҡ бей ҡорғаны. Бөрйән ырыуы башлығы Ҡарағөләмбәт бей, ә ҡыпсаҡтарҙыҡы - Бабсаҡ бей булған. Бөтөн ырыуҙар башлығы булып Мәсем хан торған. Бер ваҡыт Мәсем хандың малдарын арыҫлан күпләп ҡыра икән. Йыртҡысты үлтерер өсөн хан батырҙар саҡыра. Тирә-яҡтан батырҙар йыйыла һәм януарҙы эҙләп сығып китәләр. Ҡарағөләмбәт арыҫланды тап итә һәм үлтерә. Ике ҡолағын да киҫеп ала ла Мәсем ханға китә. Бабсаҡ бей ҙә йөрөй торғас, үлгән арыҫланды таба, үҙенә үлтерергә тура килмәгән өсөн бик намыҫлана һәм башын ҡырҡып ала. Икеһе лә ханға килә. Береһендә - ҡолаҡ, икенсеһендә - баш. Кем беренсе үлтергән? Бәхәс тыуа. Ике яҡтың да кешеләре ҡорал менән бәхәсте сисергә әҙер торған була. Ике аралағы бәхәсте үҙ-ара тигеҙләү хөкөмөнә тапшырмаҡсы булалар. Был ысул урта быуаттарҙа киң таралған була.

Бер батырҙы Аҡбулат зыяраты урынлашҡан тау башына, икенсеһен Ямашлы йылғаһы аръяғындағы тауҙың битләүенә баҫтыралар. Бер-береһенә ҡаршы уҡ атыштырырға тейештәр, тик бер генә тапҡыр. Кем хаҡ - шул тере ҡала. Бер үк ваҡытта бер-береһенә тоҫҡап атып та ебәрәләр. Ҡарағөләмбәт Бабсаҡ бейҙе үлтергәнсе ата. (Бик мәргән уҡсы була ул). Бабсаҡтыҡы теймәй. Боронғо йола буйынса һәләк булған кеше ҡаны ҡойолған ерҙә ерләнергә тейеш була. Ләкин бөрйәндәр, эше харам, һүҙе хаҡ булмаған ҡыпсаҡ бейен күмергә ер бирмәйҙәр. Бабсаҡтың ырыуҙаштары аттар, дөйәләр (ул ваҡытта башҡорттар дөйә лә көткәндәр) менән үҙ яғынан ер ташып, ҙур ҡорған өйәләр.

Ул әле лә бар. Совет власы осоронда археологтар ҡорғанды ҡаҙалар. Хатта үҙҙәре лә ҡаҙмай, кеше яллап ҡаҙҙырталар. Әле лә көлөп һөйләйҙәр нисек ҡаҙғандарын. Ләкин кеше һөйәгенән башҡа бер нәмә лә тапмайҙар. Бей һынлы бей булғас, уны ҡәҙерләп, йола буйынса бөтөн әйберҙәрен, байлыҡтарын һалып күмгәндәрҙер. Ләкин урта быуаттарҙа уҡ ҡорған таланған була. Археологтар белемле кешеләр булһа ла - хаслыҡ ҡылалар. Кеше ҡәберен аҡтарыу етмәгән, хатта кире күмеп тә китмәйҙәр. Ҡорған уртаға бүленгән көйө ҡала. Ул әле шулай. Башына ағастар үҫеп бөткән.

Тапҡан һөйәктәргә анализ яһап, был кешенең 18 йәштәр тирәһендәге ир затынан булыуын билдәләйҙәр.

Боронғо йола буйынсалыр инде, Бабсаҡты үлтергәс, унын ҡатынын Ҡарағөлөмбәт ала. Ҡатын ғоманлы була. Улы аҙаҡ тыуып, үҫеп, ир еткәс атаһы ҡотон ҡайтара башлай. Үс алыу ваҡиғалары "Башҡорт халыҡ ижады"нда тасуирланған. Тик, бөтөн ырыуҙы ҡырып бөтөрөп, бер йән ҡалып, шунан үрсеп киткән ырыуға берйән - бөрйән исеме бирелгән тигән һүҙ хәҡиҡәткә тап килмәй.

Бурджан - бөрйән тигән халыҡ тураһында ғалимдар байтаҡ мәғлүмәттәр асты, улар матбуғатта баҫылдылар. Ике ырыу араһында ҡан ҡайтарыу оҙаҡ быуындар дауам итә. Бабсаҡ бей өсөн үс алып йөрөүсе улы Күсәк бейҙе лә һағалап үлтерәләр. Хәҙерге Ҡотан ауылының Ағиҙел аръяғындағы 1 - 2 саҡрым үрҙәрәк ***Ҡыңғыр*** тигән туғайында була был хәл. Ҡорғаны ла бар тип һөйләйҙәр. Ағиҙелгә үҙәк буйлап килеп, бер йылға ҡоя. Шул йылғаға яҡын тиҙәр. Күсәк бейҙең ҡушаматы ***Оҙон Урҙа*** була.

Үсләшеү бик оҙаҡ дауам итеп, халыҡты бик йонсота. Шуға күрә, ике ырыуҙың да старшиналары, йорт башлыҡтары йыйылып 1784 йылда тыныслыҡ солохо төҙөйҙәр.

Ғәҙелгәрәй ауылы

Ғәҙелгәрәй ауылы. Хәҙерге Ғәҙелгәрәй ауылы урынлашҡан ерҙә Ҡотан, Мәксүт ауылдарының мал көтөү өсөн йәйләү, утарҙары булған. Шул осорҙа Ырымбурҙан килгән бер хужа һәр бер хужалыҡҡа 12 сажымдан ер үлсәп биргән. Ауыл булһын өсөн урам өй ултырған ерҙәрҙе планлаштырған. Янғын-фәлән хәүефһеҙлегенән сығып өйҙәр аралыҡлы итеп, үтер өсөн тыҡрыҡ та ҡалдыртҡан. Шулай итеп, йәйләүҙәрҙә ауылдар ҡалҡып сыҡҡан.

Ғәҙелгәрәй ҡарт иң беренселәрҙән күсеп килеп ултырған. Унан яҡын туған-тыумасалары ҡушылған. Ауылдан туғыҙ саҡрым алыҫлыҡта Шүлгән йылғаһы буйында урынлашҡан иҫке ыҙманан 25 өй күсерелгән. Ул ер хәҙер ***Иҫке ыҙма*** тип йөрөтөлә. 1921 йылдағы йотлоҡҡа тиклем Ғәҙелгәрәйҙә 93 өй булып, 33 хужалыҡ ҡына тороп ҡала. Шул осор 60 хужалыҡ ҡырылған. Беренсе донъя, граждандар һуғышы осоронан һуң ауыл бөтөнләй кесерәйеп ҡала. Темәс яғынан Таулыҡай, Этҡол ауылдарынан да хәҙерге Иҫке Аҡбулат ултырған урынды биләп ауыл булып ултырғандар. [1]

Ғәҙелгәрәй

Ғәҙелгәрәй (Шүлгән) ауылы үткән быуат башында билдәле. Ғәҙелгәрәй ауылы 23-сө йортто тәшкил иткән һәм Ырымбур өйәҙенең 9-сы башҡорт кантонына ҡараған. Уны Әҙелғужа тип тә атағандар. 1834 йылда унда - 213, 1859 йылда - 330 кеше йәшәгән, ә беренсе совет иҫәбе - 447 кеше күрһәтә.

Тауҙар, ҡаялар

Аҡҡашҡа тауы *(1 вариант).* Аҡҡашҡа тауы Мәксүт ауылы эргәһенән башланып Ғәҙелгәрәй ауылыының үрге осона үтеп Ҡамшаҡлы тигән ергә етеп туҡтала. Ошо оло Аҡҡашҡа тауының уң яғынан ағып сыҡҡан йылға башы “Шүлгән йылғаһы башы”, ә оло яланың Шүлгән башы яланы тип атайҙар. Йылға көнбайыштан төньяҡҡа ҡарай Ғәҙелгәрәй ауылының түбәнге осонан үтеп “Сумған” тигән соҡорға ҡоя. Унан Ташөй ауыҙы уң яғынан сығып Ағиҙелгә ҡушыла. Шүлгән башы яланында колхоз осоро бер өйҙә эшләп ҡуна ятып эшләп йөрөй торғайнылар. Келәте лә бар ине. Бесән сабып кәбән дә ҡойҙолар. Теге өйҙә төнлөккә ҡалған йоҡлар

кешеләргә ендәр өй баштарында шартта-шорт килеп, стеналарын һуғып ҡуныусыларға ирек бирмәҫ булған.

Аҡкашҡа тауы *(2 вариант).* Борон-борон заманда йәшәгән ти бер бай. Был байҙың, Аҡкашҡа исемле аты ла булған. Берҙән бер көндө бай был атын һыу эсерергә сығарып ебәрә. Аты һыуға киткәндән һуң, бик оҙаҡ ҡайтмаған. Бай атын көткәндән һуң, артынан ҡарарға китә. Ул шишмә эргәһенә килеп еткәс, атының шишмә эргәһендәге һаҙлыкта ятҡанын күрә. Ул атын ҡотҡарыр өсөн шәберәк атларға тырыша. Барып еткәнсе һуң булған була. Ат батып үлерлек булғас, бик ямғырлы яҙ айы булғандыр инде. Шунан байтаҡ был һаҙлыҡ эргәһендәге тауға Аҡкашҡа исеме бирелә. Беҙҙең ауылдың урамынан өҫкә күтәрелһәң, Аҡкашҡа тауы башлана. Был тау бейек кенә. Аҡкашҡа тауынан эскәрәк үтһәң, аҙашырға була. Һыбайлы кеше генә, атты үҙ яйына ҡуйып ҡына, аты ярҙамында тауҙан урман аша сыға ала. [5]

Ташмаяҡ. Оло Майған тип тә йөрөтәләр. Шүлгән күперен сыҡҡас, уң яҡта ятҡан бейек булмаған тау ул. Элек оҙон ғына бер ташын ҡаҙап ҡуйғандар. Шунан ***"Ташмаяҡ"*** тип йөрөткәндәр. Аҙаҡ таш йығылған, юл төҙөгәндә юҡҡа сыҡҡан.

Майған тауы. Элек бында бесән сапҡандар. Кәбән ҡойғанда аҫтына батман менән май ултыртып ҡалдыра торған булғандар. Сөнки май һаҡлар өсөн баҙ-фәлән булмаған. Май ҡуйған тау "Майған" тауы исеме шунан тороп ҡалған. Майҙы Антон яғындағы кәбәндәргә лә ултыртып ҡалдырғандар.

Боланатҡан. Ауылдан Шүлгән башына киткән ваҡытта иң тәүге төшкән тау Боланатҡан тип атала. Исеме үк әйтеп тора - элек был ерҙә ауылдың ниндәйҙер кешеһе болан атҡандыр. Шунан алып был ер "Боланатҡан" тип атала башлаған.

Тирмән тауы. Таш өй урынлашҡан ҡаятау Ағиҙел буйлап түбәнгә һуҙыла. Шүлгән йылғаһын аша сығып, бер 200 м ара киткәс, тура юл (һуҡмаҡ элек арба менән дә төшкәндәр) тау аша үргә артыла һәм Ғәҙелгәрәй ауылына алып бара. Сөнки йылға ҡышын туңмай. Ошо ер "Тирмән" тауы тип йөрөтөлә.

Ҡолағанташ. Яңы Аҡбулат ауылынан Иҙел үре яғында ятҡан ялан Ҡолаған таш яланы тип атала. Ҡасандыр тау битләүенән бик ҙур таш яланға тәгәр(ә)ләп төшә һәм әлеге көндә лә ул шул урында ята. Уның ҡолап төшөүенә яҡынса 100-120 йыл самаһы бар. Сөнки таштың ҡолап төшкән яғында 1980 йылдарҙа 80 йәштәр тирәһендәге ҡайын үҫеп ултыра ине. Хәҙерге көндә ул ҡайын серегән, тик төпһәһе генә ултырып ҡалған.

Ыласын ҡаяһы. Ағиҙел йылғаһының һул яҡ ярында, Аҡбулат ауылы ҡаршыһында Ыласын ҡаяһы урынлашҡан. Элек был ҡаяны ыласындар төйәк иткәндәр. Улар кеше менә алмаҫлыҡ, йыртҡыс хайуандар теймәҫлек урындарҙа оялаған. Был ҡая эзбизташтан тора. Ул бик бейек һәм текә. Уны әле лә ыласындар төйәк итә. Шуға бәйле "Ыласын ҡаяһы" тип атала.

Этаҫҡан тауы. Ҡасандыр, бер ваҡыт, кем икәнен белмәйҙәр, бер кеше үҙенең этен аҫып китә. Шунан бирле был тауҙы "Этаҫҡан" тауы тиҙәр.

Йылғалар, шишмәләр, кисеүҙәр, шарлауыҡтар, ҡойо һәм күпер атамалары

Шүлгән йылғаһы *(1 вариант).* Уның сыҡҡан урыны төньяҡҡа ҡарап 7 саҡрым арыраҡ, 2 саҡрымда, ул шаулап ер аҫтына инеп юғала һәм ҡеүәтле шишмә булып Шүлгәнташ ауыҙында

урғылып сыға. Ошонда диаметры 3 м булған бәләкәй генә күл хасил итә. Мәмерйә ауыҙынан 150-170 м, гөрләп ағып Шүлгән Ағиҙелгә ҡоя. Шүлгән йылғаһына уң яҡтан Күсәй йылғаһы, ауыл эргәһендә Һарыла йылғаһы ҡушыла.

Яр буйҙарында муйылдар ишелеп уңа. Бынан тыш балан, гөлйемеш ҡыуаҡлыҡтары, ҡырағай ҡарағат та үҫә. Ә ағастарында өҙөлөп-өҙөлөп һайраған ҡоштар тауышынан бар тирә-яҡ илаһи моңға күмелә. Шүлгән йылғаһы буйҙары бик күп тарихи урындарға бай. Мәҫәлән, данлы Йылҡысыҡкан күле, донъяға билдәле Шүлгән-Таш мәмерйәһе. Йылғаны кисеп сығыуы бик ауыр һәм унда бер-нисә генә кисеү бар. Уның аша Шүлгән күпере бар. Ул элек өҫтәрәк булған һәм уны яңыраҡ аҫҡараҡ эшләнеләр.

Шүлгән йылғаһы кешеләргә һаман да хеҙмәт итә, күңелдәргә ял, йәм биреп аға ла аға...

Шүлгән йылғаһы *(2 вариант).* Урал батыр эпосынан Шүлгән батша исеменән алынған.

Шүлгән йылғаһы *(3 вариант).* Ауылда бик уҫал бер ҡарт йәшәгән. Унан бөтәһе лә ҡурҡҡандар. Бышылдашып ҡына һөйләшкәндәр. Хатта исемен әйтергә лә ҡурҡып "Шул" тип йөрөткәндәр. Бер ваҡыт был уҫал, яуыҙ бай үлеп киткән. Ауыл халҡы ғәҙәт буйынса һаман да бышылдашып ҡына бер-береһе менән "Шул - үлгән" тип һөйләшкәндәр. Килеп сыҡкан - Шүлгән.

Шүлгән йылғаһы, Ғәҙелгәрәй ауылынан 1,5 км алыҫлыкта, төньяҡ-көнсығышта ер аҫтына инеп юғала. Ошо урынды “Сумған” тип атап йөрөтәләр. Шүлгән йылғаһы артабанғы юлын ер аҫтынан дауам итә. Меңәрләгән йыл дауамында, ул эзбиз ташты эретеп үҙенә юл һалған һәм Шүлгән-Таш мәмерйәһен барлыҡҡа килгән.

Һарыла йылғаһы *(1 вариант).*

Болондарҙан ҡыҙып һарыналар

Килтереп һалдым йылғаға йыумаға.

Һарыналарҙы йыуып, ҡарап ултырам

Һарыналар ятҡан ҡулымда

Күренә һарыһы ла.

Күптән инде исем тапмай инем

Йылға, исемең булыр Һарыла,-

тип ауылыбыҙға башлап нигеҙ ҡороп йәшәгән Ғәҙелгәрәй олатай йырлап ебәрә. Шул ваҡыттарҙан алып Аҡкашҡа тауы аҫтынан, ауылыбыҙҙың һул яғынан ағып ятҡан йылғаны “Һарыла” тип йөрөтә башлайҙар. [2]

.

Һарыла *(2 вариант).* Аҡкашҡа тауы аҫтынан сығып ятҡан саф шишмә, ауылдың төп эскән һыуы. Шишмә башына улаҡ һалғандар һәм һыуҙы шунан алалар. Мал-тыуар һыуҙы бысратмаһын өсөн кәртәләп тә ҡуйғандар.

Бер ваҡыт ошо шишмә башында кешенең һары ала аты батҡан. Ул ваҡытта был урындар һаҙмат була. Шул һары-ала аттың исемен йылғаға “Һарыла” тип ҡушалар.

Һарыла *(3 вариант).* Киндер туҡыманы буяр өсөн шишмә буйлап буяу ташы эҙләгән. Кәрәкле һары ташты табалар. Ул матурлы ғына һоҡланып: “Илла матур һары ла таш икән!"- тип ҡысҡырып ебәрә. Тик таш берәү генә була, бүтән таба алмайҙар.

Һарыла *(4 вариант).* Һарыла йылғаһы яҙ еткәс, балсыҡ иҙелә һәм йылға һары төҫкә инә. Шуға ла уға “Һарыла” исемен бирәләр.

Буйлау. Ғәҙелгәрәйҙән 10 саҡрым көнъяк көнбайышта Аҡкашҡа битләүенән Буйлау йылғаһы башлана һәм көньяҡҡа ҡарай аға. Икенсе исеме Ҡыҙыл яр. Буйлау йылғаһы Бөрйән, Үҫәргән ырыуҙарының сиге булып иҫәпләнгән. Ҡарағөләмбәт Бабсаҡты үлтергәс, ерләргә Бөрйән ырыуынан тупраҡ бирмәгәс, Буйлауҙың уң яҡ ярынан ҡыҙыл мәтеле балсыҡты ат, дөйәләр менән ташып ерләгәндәр. Буйлау башы Мәксүттәрҙең йәйләү урыны була.

Вашаш. Вашаш йылғаһы Ғәҙелгәрәй эргәһендәге Аҡкашҡа һыртынан көнбайышта 2 км алыҫлыҡта башлана һәм көньяҡҡа ҡарап аға. Мәксүт ауылы эргәһендә Ағиҙелгә ҡоя. Башы өс ҡушылдыҡтан тора: Оло Айыры, Урта Айыры һәм Ҡыр Айыры.

Ваҙраш. Аҡкашҡа һыртынан башлана һәм төньяҡ көнбайышҡа ҡарай ағып, Нөгөш йылғаһына ҡоя. Ҡушылдыҡтары: Ҡуштуҡмаҡ, Байталһуйған, Уйтекә йылғалары. Элек йылға яр буйында Ваҙраш һәм Дауыт утарҙары була. Шулай уҡ, ауылдан көнсығышҡа ҡарай, яҡынса дүрт саҡрым алыҫлыҡта Сауҡайорт атамалы аҡландар теҙмәһе бар. Хәҙерге көндәрҙә был ерҙәрҙә кешеләр малдарына бесән әҙерләй. Әйткәндәй, был урында мал көтөү өсөн бик уңайлы. Эргәлә генә ике шишмә аға. Фаразлауҙар буйынса, бында элек сауҡалыҡ булған. Тик хәҙер ул ҙурайып урманға әйләнгән. Моғайын да, шул сауҡалыҡҡа бәйле был урынды ***Саукайорт*** тип атағандарҙыр. Ә "йорт" тип боронғо башҡорттарҙа йәйләү урынын йөрәткәндәр.

Ярыу йылғаһы. Күжә йылғаһының һул ҡушылдығы. Ҡалын урмандар, тау үҙәне буйлап ағып, үҙенә юл ярып төшә. Шуның өсөн йылға “Ярыу” тип, ә Күжәгә ҡойған урыны “Ярыу тамағы” тип атала.

Антон шишмәһе. Сүбәк күперенән ауылға ингән саҡта һул яҡта бейек булмаған ҡалҡыулыҡ ята. Өҫтө тигеҙ. Элек сабынлыҡ булған. Хәҙер ауылдың бер өлөшө. Ошо ерҙе “Антон” тиҙәр. Ҡалҡыулыҡтың арт яғында шишмә сығып ята. Уны “Антон шишмәһе” тип йөрөтәләр. Һыуы һалҡын, тап-таҙа, эсеүгә тәмле. Элек ҡалҡыулыҡта мал көтөп, Антон тигән ҡарт йәшәгән. Шунан ҡалған исем.

Оло күл. Ғәҙелгәрәй ауылының түбән яғынан уң яҡлап Шүлгән йылғаһы буйының уң яғында бер бәләкәй күл бар. Уны Оло күл тип йөрөтәләр. Күлдең айырым сере лә бар: Илгә ҡурҡыныс янаһа, ул йыл ҡорой ҙа ҡуя. Донъяименләнһә күл яңынан һыу менән тула. Оло кешеләр күлдең хәлен һәр саҡ белешеп торғандар. Һуғыш ғәләмәте 1941 йылда башланыу менән бына тап әйткәнсә күл ҡорой ҙа ҡуя. Еңеү йылы күл туп-тулы була. Күлде әле лә халыҡ файҙалана, һалабаш һалалар.

Элек-электән был күлгә кустарлыҡ менән шөғөлләнгән кешеләр йүкә ағасының ҡабығын ҡуптарып алып серетергә һыуға батырғандар. Ошо эш һалабаш һалыу тип атала. Тейешле ваҡыт яҡкас, һалабашын, таҫмаланып яткан йүкәһен һыҙыралар. Һалабаштан төрлө әйберҙәр эшләгәндәр (ҡап, септә, арҡан, сбруй). [2]

Бәләкәй күл. Был күл яҙғы ташҡында хасил була. Ҡуйы ағастар араһында ята. Йәйге эҫелә ҡорой. Атап үтелгән. күлдәр талдар һәм муйыл ағастары менән уратып алынған. Белмәгән кеше күлдең барлығын да белмәй. Ҡомалаҡ менән сырмалған, үтеп сыға алмаҫлыҡ талдарҙы йырып, ҡапыл күлгә барып сыҡһаң, үҙеңде әкиәт донъяһына сумғандай хис итәһең.

Йылкысыккан күле. Шүлгән тауы яланға сығып бөткән генә ерҙә, Таш өйгә барған юлдың уң яғында, ағастар менән уратып алынған ҙур ғына күл ята. Исеме Йылҡысыҡҡан. 79 йәшлек Хәйбулла бабай уның легендаһын түбәндәгесә һөйләне.

Үҫәргән ырыуы кешеһе беҙҙең яҡҡа һунарға килә һәм бик күп итеп мал алып ҡайта. Ҡайтҡас тапҡан малының сығышын һөйләй. Бер күлгә тап булдым. Күл тирәләй ҡаранып йөрөгәндә бер эт килеп сыға. Эт тауышына хужаһы ла килеп сыға: "Егет, ни эҙләнеп йөрөйһөң", - тип һорай. "Ошо яҡтарға кейек тоторға килеп сыҡтым әле", - тип яуап бирә. "Һин, егет, ҡошҡортҡа зыян яһама, һин ҡайтып кит, бының өсөн мин һиңә мал бирәм. Тик артына ҡарама, эште боҙорһоң", - ти. Был кеше (күлдең эйәһе булып сыға), бер ебәк бау бирә лә артҡа ҡарамай сабырға ҡуша. Бер ваҡыт бейә артынан өйөр-өйөр мал сыға башлай, тирә-яҡ шау-шыу ме¬нән тула. Егет түҙмәй артына әйләнеп ҡарай. Малдың сығып бөтмәгәне күлгә кире сума. Ҡоро ергә сыҡҡандары егет артынан эйәрә. Ул шулай маллы була.

Фатима күле. Был күл тирәһендә элек Фатима исемле тол ҡатын бесән сапҡан. Сабынлығына һәм ундағы күленә исеме берегеп ҡалған. Икенсе берәүҙәр был күлгә Фатима исемле кеше батып үлгән тип тә һөйләйҙәр. Ләкин был дөрөҫ түгел.

Ығышма күле. 1933 йылда күл ҡорой. Төбөнә ҡайын, тал үҫә. Аҙаҡ күл һыу менән тула, ә үҫкән ағастары ере менән ҡуша күпсеп сығып йөҙөп йөрөй башлай. Ел ыңғайына яй ғына, ығышып ҡына күсеп йөрөй. Шуға “Ығышма” тигән исем бирәләр. Аҙаҡ күсеп йөрөгән ағаслы ут утрауҙы ярға бәйләп ҡуйып беркетәләр.

Нафиҡ кисеүе. Шүлгән йылғаһы бик бормалы һәм текә ярлы. Уны теләгән ерҙән үтеп булмай. Унда бер-нисә кисеү бар, мәҫәлән, Таш кисеү, Нафиҡ кисеү, Яр кисеү. Шүлгән йылғаһының ярҙары текә булыу һөҙөмтәһендә унан кешеләр арба менән үтә алмағандар. Һәм Шүлгән ауылындағы Нафик тигән кеше Шүлгән йылғаһының эргә-тирәһен ағастан таҙартып унда кисеү эшләгән. Һәм был кисеүҙе оҙаҡламай “Нафиҡ кисеүе” тип йөрөтә башлағандар. Әлеге көндә лә Нафиҡ кисеүе бар һәм унан ат менән йөрөйҙәр. [6]

Ташкисеү. Шүлгән йылғаһы текә ярлы һәм уны теләгән ерҙән үтеп булмай. Шүлгән буйындағы дүрт кисеүҙә ныҡ ҡойоло һәм бата. Тик ошо кисеү булған урында ғына йылға төбә ташлы. Ошоға бәйле был кисеү “Ташкисеү” тип атала.

Һибәт ҡойоһо. Сауҡа йорт яланынан төнъяҡтараҡ “Һибәт ҡойоһо” шишмә, һәм эргәһендә ҙур булмаған яландың исем атамаһы. Сауҡа йорт элек йәйләү урыны була. Унда малдарҙа эсерлек бәләкәй генә йылға аға. Тик йәй уртаһында ағымы көсһөҙләнә һәм һыуы йылына. Беҙҙең яҡта ҡойо тип һаҙлыҡлы, батҡаҡлы урынды әйтәләр. Һибәт исемле кеше ошо ҡойоло урынды ҡаҙып, ер өҫтөнә сыға алмай ятҡан шишмәне сығара. Йылға 50-60 м тирәһе ағып барғас ер аҫтына һеңә. Шишмәнең һыуы һалҡын, таҙа. Хәҙерге ваҡытта йәйге айҙа йылҡы өйөрҙәре ошонда һыулап йөрөй. Бесәнселәрҙе лә өйҙән һыу ҡотҡарып тороусы - Һибәт ҡойоһо.

Үлебар йылғаһы. Был йылға Иҫке Аҡбулат (хәҙер ферма) эргәһендә Ямашлы йылғаһына ҡоя. Ике йылға ҡушылған ерҙә Бабсаҡ бейҙең ҡәбере (ҡорған). Үлгән кешенең ҡәбере булған өсөн йылғаға “Үлебар” тип ҡушҡандар.

Шүлгән тамағы. Шүлгән йылғаһы Сумғанда ер аҫтына инеп юғала һәм юлын ер аҫтынан дауам итә. Бөтә донъяға билдәле "Шүлгән-Таш" мәмерйәһе алдынан урғылып сыға һәм 200 м ара үткәс, Ағиҙел йылғаһына ҡоя. Йылға ҡыш көндәрендә лә туңмай. Шуның өсөн йылғаның йырҙаһын үҙгәртеп унда һыу тирмәне төҙөйҙәр. Ғәҙелгәрәйҙән “Шүлгән-Таш" мәмерйәһенә тураға барған юл хәҙерге көндә лә “Тирмән юлы”, ә Ағиҙел йылғаһы буйына төшкән текә тау битләүен “Тирмән тауы” тип йөрөтәләр. Тирмәнсе булып Ырғыҙлы ауылынан урыҫ кешеһе эшләй. Ул үлгәндән һуң, Ҡотандан Ғәлин Ғәле эшләй. Улар тирмәнде Ҡотанға күсереп алып

ҡайтмаҡ булалар, тирмән ташын кәшмәккә тейәйҙәр. Ләкин кәшмәк түңкәрелеп, таш Ағиҙел төбөнә китә һәм уны һыу төбөнән ала алмайҙар.

Ҡушйылға башы. Ғәҙелгәрәй ауылынан 4 км төньяҡта Ҡушйылға башы яланы урынлашҡан. Был урын революцияға тиклем Ғәҙелгәрәй һәм Ҡотан ауылы кешеләренең йәйләү урыны була. Исеме үк әйтеп тора, ошо яландың урта өлөшөндә ике йылға килеп ҡушыла һәм уның һөҙөмтәһендә "Ҡушйылға" тип атала. Ҡушйылға Күжә йылғаһына алып барып ҡоя. Ҡотан урыны "Ҡушйылға тамағы" тип атала. Был урында июль аҙаҡтарында йәйләү күсеп килә. Ҡотандар йылға тамағында, ә Ғәҙелгәрәйҙәр Күжә буйында Ҡара ер эргәһендә туҡталғандар. Берәйһе вафат булып ҡалһа, ауылға алып ҡайтмағандар, йәйләү урынында ерләгәндәр. Шул осорҙың тарихи шаһиты булып Ҡара ер эргәһендәге ҡәбер урындарының соҡорҙары һаҡлана. Ҡушйылға башында оҙаҡ йылдар Шүлгән-Таш ҡурсаулығының ҡортсолоғо булды.

Сүбәк күпере. Оло Майған менән Кесе Майған уя менән айырыла. Ауылға ингән генә ерҙә Кесе Майған итәге аҫтында Һарыла аша Сүбәк күпере ята. Элек күперҙе ағастан төҙөгәндәр. Өҫтөнә һалған ағас араһы бик эре булып мал тояғы төшкән. Шуға күрә кешеләр ярыҡ араһына сүбәк тултырғандар. "Сүбәк күпере" тигән исем шунан ҡалған.

Хәйбулла йылғаһы. Ғәҙелгәрәй ауылы зыяратының уң яҡ яһы буйлап ағып ятҡан шишмәне шулай атайҙар. Ишморатов Ҡазихан олатайымдың атаһы Шаһиян соҡор ҡаҙып йылға ағыҙып ебәргән. Йылға әле лә аға ла аға.

Тәтәгәс ҡаран яланы, шишмәһе һәм шарлауығы. Тәтегәс башҡорт халҡы араһында киң билдәле шәхестәрҙең береһе. Ауылдан көньяҡҡа ҡарай Шүлгән мәмерйәһе өҫтөндә ҙур яландар теҙмәһен "Тәтегәс ҡараны" тип атап йөрөтәләр. Борон заманда Ағиҙелдең яр буйында Тәтегәс ауылы ла булған. Был яланда, әйтеүҙәре буйынса, Тәтегәс бейҙең йәйләүе булған. Ялан уртаһында ғына һалҡын һыулы шишмә урлығып сыға. Малдарҙы көтөү өсөн бик уңайлы. Яланды борон-борондан "Тәтегәс" яланы тип атайҙар, ә шишмәһен "Тәтегәс ҡаран" тип йөрөтәләр. Ҡаран йылғаһы көньяҡҡа ҡарай аға һәм Шүлгәнташ мәмерйәһе эргәһендә тарлауыҡ буйлап ағып шунда Тәтегәс ҡаран шарлауығын барлыҡҡа килтерә.

Яландар, туғайҙар, сабынлыҡтар, йәйләүҙәр

Бала туғай (Балатуҡай). Ырғыҙлы ауылы яғына барғанда Күлйорт тауын менеп бөткәс, оҙон ғына тау төшөргә тура килә. Уны төшөп бөткәс ҙур булмаған ялан ята. Хәҙерге көндә ул яландың яртыһы Салауат исемендәге колхоздыҡы, яртыһы "Шүлгән-Таш" ҡурсаулығына инә. Яландың, уртаһынан ҙур булмаған шишмә аға, күп тә бармай карст бушлығына инеп юғала. Ошо йылға буйында ҙур булмаған туғайы ла бар, йәғни бала туғай. Һуңғараҡ шишмәһен "Бала туғай" шишмәһе, тауын "Бала туғай" тауы тип атайҙар. Ваҡыт үтеү менән Бала туғай - "Балатуҡай"ға әйләнә.

Тумарлыҡ. Был сабынлыҡта, уйһыу урында яҙғылыҡ һыу йыйылған һәм унда сәсле дүңгәләк үҫкән. Дүңгәләк йылдан йыл үҫкән. Уның башы тумырылған ағасҡа оҡшап ултырған. Шунан һуң был ерҙе "Тумарлыҡ" яланы тип атай башлағандар. Хәҙер ҙә ул яланды "Тумарлыҡ" яланы тип атайҙар. [3]

Ҡыяс туғайы. Элекке замандараҡ беҙҙең ауылда Ҡыяс исемле кеше булған. Ул әлеге Поступаев Сөнәғәт һәм Сәғитов Миҙхәт ағайҙарҙың өйҙәре араһында йәшәгән. Ул ауылда иң оҫта Солоҡ башын осороусы тип һаналған. Солоҡ башын осорғандан һуң, һыңар аяғында баҫып берҙе әйләнеп сыҡҡан. Уның баҡсаһында оҙон ҡолға торған. Ул шунда менеп үҙенең

таһыллығын арттырған. Ҡайһы берҙә баш түбән килеп төшкән. Әлеге Ҡыяс туғайында ул бесән сапҡан. Ундай солоҡсолар бик һирәк булған. [4]

Саҡай сабыны. Ҡотан юлынан барған саҡта уң яҡта ҡала. Ҡырын биттәге ҙур ғына ялан. Элек Саҡай тигән кешенең сабыны булған. Исеме ергә берегеп ҡалған. Элегерәк мал йөрөтәләр ине. Әле 1986 йылдан "Шүлгән-Таш" ҡурсаулығы ойошторолдо.

Ягылбай. “Боланатҡан” шишмәһе Шүлгән йылғаһына ҡойған ерҙән алыҫ булмаған бер сабынлыҡ. Шулай уҡ бында Яғылбай исемле кеше бесән сапҡан булған.

Ҡуштуҡмаҡ. Ғәҙелгәрәйҙән, төнъяҡ көнбайышта, бер саҡрым самаһы алыҫлыҡта Ҡуштуҡмаҡ яланы бар. Мәксүттәрҙең, йәйләү урыны була. Ошо тирәлә солоҡтар күп була. Йыл һайын ҡорт ҡунып торған солоҡ ағасына өҫтәп тағы ла бер умарта юналар. Икеһендә айыуҙан һаҡлау өсөн туҡмаҡтар эләләр. Шуға бәйле был ялан “Ҡуштуҡмаҡ” тип атала.

Райман мороно. Шүлгән йылғаһының һул яҡ ярында Тумарлыҡ сабынлығының ҡаршыһында бик матур киң ялан бар. Был яланды Райман исеме менән йөрөткәндәр. Сөнки элек был ерҙә Райман исемле кеше бесән сапҡан. Әлеге ваҡытта уны “Райман мороно” тип атап йөрөтәләр.

Ҡолоҡ. Ғәҙелгәрәйҙән 5 саҡрым алыҫлыҡта төнъяҡта урынлашҡан ялан һәм урман исеме. Ҡотандар Ғәҙелгәрәйгә күсеп килгәндә, улар араһында Ҡолоҡ Изгинда була. Халыҡ һанын алыу мәғлүмәттәре буйынса 1816 йылда уға 41 йәш була һәм 1824 йылда вафат булыуы теркәлгән. Уның исеме менән аталып йөрөтөлгән сабынлыҡ ҡасандыр уныҡы булған. Хәҙерге көндә был урынды Билалов Барый сабынлыҡ итеп файҙалана. Сабынлыҡ эргәһендә һалҡын һыулы шишмәһе лә бар.

Аптал үлгән. Этаҫкан тауын төшөү менән уң яҡта ялан ята. Уны һәм эргәһендәге сабынлыҡтарҙы “Аптал үлгән” тип йөрөтәләр. Килеп сығыу тарихын белмәйҙәр.

Бикйән сатлығы. Аптал үлгән яланы бөтөп, Таш өйгә киткән юл сатлығында ҙур ғына ялан ята. Уны Бикйән сатлығы тип йөрөтәләр. Был тирәлә ауылдың байы Бикйән ҡарттың сабынлыҡтары булған. Ғөмүмән, бик күп ер-һыу атамалары сабынлыҡтар менән бәйле. Кем сапһа, ергә шуның исемен биргәндәр.

Насрый сабыны. Ауылдан көньяҡҡа, Күлйорт тауының уң яғында урынлашҡан. Элекке ваҡытта унда Насретдин Сәғитов бесән саба. Һуңынан Насретдин исемен ҡыҫҡартып "Насырый сабыны" тип атап йөрөтәләр Насретдин Сәғитов үрәтник Мөхәмәтшәрифтең малайы.

Ҡартүлгән. Транса йорттан үрҙәрәк Күжә йылғаһының яр буйында Ҡартүлгән яланы бар. Был урында революцияға тиклем 17 йорттан торған ауыл була. Был ауыл кешеләрен Дъяков исемле урыҫ кешеһе яллап ағас ҡырҡтыра һәм Күжәнән ағыҙҙыра. Ауыл 1924 йылдар тирәһендә тарҡалып бөтә, кешеләре Ғәҙелгәрәйгә күсеп килә. Хәҙерге көндә был ялан Шүлгән-Таш ҡурсаулығы биләмәһендә ята.

Ҡамшаклы. Ғәҙелгәрәй ауылынан төньяҡҡа ҡарай ун бер саҡрым алыҫлыҡта Ҡамшаҡлы яланы урынлашҡан. Ялан һаҙматлыраҡ, ер өҫтөндә мүкләнгән урындары ла күп кенә. Шуға күрә бында ҡамышҡа оҡшаш үләндәр өҫтөнлөк итә һәм шуға ла был урын Ҡамшаҡлы тип, ә

ялан эргәһенән аҡкан йылға “Ҡамшаҡлы йылғаһы” тип атала. Ҡамшаҡлы йылғаһының Күжәгә ҡойған урыны “Ҡамшаҡлы тамағы” тип йөрөтөлә. [7]

Сыбайялан. Бына нисәмә йылдар инде "Һыбай ҡашҡа"мы әллә, "Сыбай ҡашҡа"мы тип бәхәс алып баралар. Минең уйлауымса, һуңғы варианты дөрөҫ булырға тейеш.

Шулай уҡ, Ғәҙелгәрәй ауылынан төньяҡ көнбайыш йүнәлешендә, дүрт саҡрым алыҫлыҡта Сыбай ялан тигән ер бар. Башҡорттарҙа "сыбай" һүҙе менән маңлайынан эйәк аҫтына аҡ ҡашҡаһы булған атты йөрөткәндәр. Ошо яланда сыбай ҡашҡа төйәк иткән булған. Ошоға бәйле уны “Сыбай ялан” тип атағандар.

Шулай уҡ, Сыба ялан үлән сырмалып, сыбалып (диалект), төрлөсә үҫкәндән шундай исем алған тигән фараз бар. Һәм тағы ла бер вариантты күҙ уңынан ысҡындырырға ярамай. Формаһы буйынса был ялан сыбай ат ҡашҡаһын хәтерләтә. Бәлки, уның исеме ошонан аталғандыр ҙа...

Ҡыҙүлгән яланы. Уя эсенән сылтырап килеп сығып, үҙәндек бейек үләне араһынан, сысҡан эҙерләгән бесәй кеүек, шым ғына ағып Ҡыҙүлгән йылғаһы Күжәгә ҡушыла. Уя буйлап өҫкә күтәрелһәң, Ҡыҙүлгән яланы йәйрәп ята. Унда совхоз бесән саба. Ялан ситендә шәм кеүек төҙ, оҙон ҡарағайҙар үҫә ине. Хәҙер ҡиммәтле ағастар ағас юҡ, алып бөткәндәр.

Граждандар һуғышы осоронда беҙҙең тирәнән дә аҡтар менән ҡыҙылдар һуғышып үткән. Ауылдарҙы талағандар, халҡын язалағандар, ҡатын-ҡыҙҙы көсләгәндәр. Шулай бер ваҡыт, һуғыш яҡынайғас, ауыл халҡы ошо тирәләге бер мәмерйәгә еткән ҡыҙҙарын йәшергән. Беҙҙә эреле-ваҡлы мәмерйәләр, таш ҡыуыштары, ер уйылған соҡорҙар аҙым һайын. Ауыр заманалар булғас, сәбәбе лә булғандыр, ҡыҙҙарҙың береһе үлгән. Ошо тирәлә ерләнгән. Шул ваҡиғалар шаңдауы булып исеме генә ҡалған.

Ҡартүлгән ер. Әүәлерәк был яланды оло быуын кешеләре “Ҡарт үлгән ер” тип һөйләй башлайҙар ине. Аҙаҡ ҡыҫҡарып “Ҡартүлгән” булып китә. *Ҡыҙүлгән яланы.* Уя эсенән сылтырап килеп сығып, үҙәндек бейек үләне араһынан, сысҡан эҙерләгән бесәй кеүек, шым ғына ағып Ҡыҙүлгән йылғаһы Күжәгә ҡушыла.

Уя буйлап өҫкә күтәрелһәң, Ҡыҙүлгән яланы йәйрәп ята. Унда совхоз бесән саба. Ялан ситендә шәм кеүек төҙ, оҙон ҡарағайҙар үҫә ине. Хәҙер ҡиммәтле ағастар ағас юҡ, алып бҡткәндәр.

Граждандар һуғышы осоронда беҙҙең тирәнән дә аҡтар менән ҡыҙылдар һуғышып үткән. Ауылдарҙы талағандар, халҡын язалағандар, ҡатын-ҡыҙҙы көсләгәндәр. Шулай бер ваҡыт, һуғыш яҡынайғас, ауыл халҡы ошо тирәләге бер мәмерйәгә еткән ҡыҙҙарын йәшергән. Беҙҙә эреле-ваҡлы мәмерйәләр, таш ҡыуыштары, ер уйылған соҡорҙар аҙым һайын. Ауыр заманалар булғас, сәбәбе лә булғандыр, ҡыҙҙарҙың береһе үлгән. Ошо тирәлә ерләнгән. Шул ваҡиғалар шаңдауы булып исеме генә ҡалған.

Ошо һөйләп килештереп булмаҫтай матур тәбиғәтле был яҡтар эле булһа төҫлө һүрәт кеүек күҙ алдымда тора.

Ҡартүлгән ер. Әүәлерәк был яланды оло быуын кешеләре “Ҡарт үлгән ер” тип һөйләй башлайҙар ине. Аҙаҡ ҡыҫҡарып “Ҡартүлгән” булып китә. Ошо тирәлә яҙғы ташҡында һыуға батыпмы, әллә башҡа төр сәбәп менәнме, бер ҡарт үлә.

Күлйорт, Туңйорт һәм Сауҡайорт. Ғәҙелгәрәй ауылынан көньяҡҡа ҡарай ике йәйләү урыны булған. Уларҙың береһен - Күлйорт, икенсеһен - Туңйорт тип йөрөткәндәр. Ҡайҙан ул ерҙәр быңдай атама алғандарҙыр, берәү ҙә белмәй. Бары тик фараздар ғына...

Башҡорттарҙың төп шөғөлө малсылыҡ булған. Шул сәбәпле улар ер ҡарҙан әрселә башлау менән малдарын йәйләүгә ҡыуғандар. Беренсе йәйләү урыны булып Күлйорт торған. Өлкән быуын кешеләренең һүҙҙәренә ҡолаҡ һалғанда, шул йәйләү урынында күл булған. Тик, оҙайлы

йылдар дауамында унының һыуы, карст процестарына бәйле, ер аҫты бушлыҡтарыпа китеп бөткән. Күл урынында соҡор ғына тороп ҡалған. Шулай булыуына ҡарамаҫтан, был ер үҙенең матур атамаһын – “Күлйорт” исемен юғалтмаған.

Икенсе йәйләү урыны - Туңйорт. Ул ер ауылдан ни бары ике саҡрым алыҫлыҡта ғына ята. Был урында көҙгә табаныраҡ күсеп килгәндәр һәм шунда аҡкан шишмә туңғансы көн иткәндәр. Ошоға бәйләп тә инде, йәйләү урынын “Туңйорт” тип атағандар.

Трансайорт. Ҡушйылға тамағынан өҫтәрәк урынлашҡан ялан “Трансайорт” тип атала. Йәйләү ваҡытында бурама аласыҡ эшләп, башын транса менән ябыла. Шуға бәйле был урын ошо исем менән атала.

Баҙ мороно. Башҡорттар малсылыҡтан тыш, кәсепселек: арҡан ишеү, батман яһау һәм дегет ҡайнатыу менән дә шөғөлләнгәндәр. Дегет ҡайнатыу өсөн баҙ ҡаҙыла һәм һыҙырылған ҡайын туҙын кәлепләп һалып яндырғандар. Заманында ошо ерҙә баҙ ҡаҙып дегет ҡайнатыуҙан һуң “Баҙ мороно” тигән исем берегеп ҡала.

Мәмерйәләр

Таш мәмерйә. Ғәҙелгәрәй ауылы эргәһендә бик күп мәмерйәләр бар. Уларҙың һәр береһенең үҙенә бәйле атамаһы һәм легендаһы бар. Ауыл эргәһендәге иң ҙур мәмерйә Шүлгәнташ мәмерйәһе. Уны элек халыҡ "Ташөй" тип кенә йөрөткән, ә бәләкәйҙәрен мәмерйә тигәндәр. Шуларҙың береһе “Таш мәмерйә”. Ул ауылдан көнсығышта, 3 саҡрым алыҫлыкта ята. Уның өс яғындағы яландарҙы “Таш мәмерйә һырты”, ә үҙәк эсендәге яландарҙы “Таш мәмерйә” буйы тип атайҙар.



Шүлгән мәмерйәһе

Ташөй. Йылҡысыҡкан күленән һуң юл буйлап китһәң “Һарына” тауына етәһең. Элек, бәлки, һарына ҡаҙығандарҙыр. Ҡайһы берәүҙәр “Һорнай” тауы тиҙәр. Ләкин ул исем дөрөҫ түгел. Ошо текә генә тауҙы менеп, түбән төшһәң, Ағиҙел буйына килеп сығаһың. Унда Морат утары бар. Иҙел буйлап 2 саҡрым түбән төшһәң, яр буйы ҡуйы урман, әрәмәлек менән ҡапланған, ә артында текә ҡаялы һырт һуҙылған. Ошо һырт ҡап уртаға бүленгән ерҙә Таш өй урынлашҡан. Уны белмәгән кеше таба алырлыҡ түгел. Шул тиклем ҙур мәмерйә барлығын башҡа ла килтермәйһең. Текә ике ҡая араһының һул яғынан Таш өйҙөң ауыҙынан Шүлгән йылғаһы ағып сыға. Мәмерйә ауыҙында бәләкәй генә күл ята һәм ул йылғаға әүерелә. Шүлгән йылғаһы ер аҫтына сумғандан һуң ошонан килеп сыға тип һөйләйҙәр. Байтаҡ саҡрымдар ер аҫтынан аға булып сыға. Элекке замандарҙа ерле халыҡ дошмандан ошонда йәшенеп йәшәгән һәм уларҙы берәү ҙә таба алмаған. Юҡҡа ғына халыҡ уны “Ташөй” тип атамай бит.

[1] Сафин Шәрифулла ҡарттан (90 йәш) 1952 йыл Сөләймәнов Мөхәмәткилде яҙмаларынан.
[2] Ишморатов Ҡазихан Шаһиян улы яҙып алған.
[3] Иҫәнғужин Иршат яҙып алды.
[4] Сәғитов Авзал яҙып алған.
[5] Сәғитова Сөмбөл яҙып алды.
[6] Юлчурин Дамир яҙып алған.
[7] Йомағужин Минниәхмәт Ғилмитдин улы йыйған материалдарынан алынды.

Ҡыпсаҡ ауыл биләмәһенә ҡараған ер-һыу атамалары

Әбделмәмбәт ауылы

Ауылға нигеҙ һалған кешене, нинә бында тауҙар араһына, батҡаҡҡа килеп башлаған икән? - тиҙәр. Эйе, "Түгелмә", "Ташморон", 'Ҡарағасты бейек" һ. б. тауҙары араһында шул. Әйҙәгеҙ әле, ололар һүҙенә ҡолаҡ һалайыҡ. 1865 йылда тыуып 1954 йылда мәрхүм булған Килдеғолов Шәрәфулла Ниғмәтулла улы һөйләүенсә, унын олатаһы Ибраһимов Килдеғол Игелек улы (1780 йылғы) 1812 йылда французлар менән һуғышта ҡатнаша. 15-се полкта зауряд хорунжий Килдеғол батыр һуғышып көмөш миҙалға лайыҡ була, 1814 йылдың 19 мартында "Парижды алған өсөн" һәм "1812 йылғы һуғыш иҫтәлегенә" миҙалдары менән наградлана.

Һуғышта Аралбай Йәнекәйев, Йәғәфәр Иҫәнсурин, Мөхәмәтәмин Ҡошьетәров, Килдебай Сырлыбаев, Байрамғол Игелеков тигән кешеләр "Парижды алған өсөн" һәм "1812 йылғы һуғыш иҫтәлеге" миҙалдары менән бүләкләнә.

Миңлебай Вәлитов 1806-1807 йылдарҙа уҡ французлар менән һуғышҡан. Шулай итеп 2-се Әбделмәмбәт ауылы кешеләре тағы ла ике ауылға - Килдеғол һәм Яуымбайға нигеҙ һалған. Беренсеһен 1812 йылғы һуғышта ҡатнашыусы Килдеғол Игелек улы Ибраһимов нигеҙләгән. Икенсе ауыл Яуымбай Ҡошьетәровтын исеме менән аталған. 1859 йылда Килдеғол ауылында 23 өй -153 кеше, 1920 йылда 92 өй - 400 кеше булған. Һуғыштан арыған халыҡ тауҙар ышығына китеп, мал үрсетеп, дошмандарҙан йәшеренеп тыныс йәшәү өсөн, кешеләргә, малдарға һыу, азыҡ етәрлек булған уңайлы урынды һайлағандар. Килдеғолдон улдары - Сәйфулла, Әбделвәхит, Йәһүҙә, Ғәйнулла һ. б. йылҡылар тауҙарға тартыла, йылға-шишмәләре етерлек, шунда күсәйек, - тигәндәр. Килдеғол ауылының тирә-яғындағы тауҙарҙы әйткәндәр. Бына шулай итеп, күсеп ултырғандар тауҙарҙын араһына. Тауҙарға халыҡ исемде есеменә ҡарата биргәндәр. Ә ***"Түгелмә", 'Ҡарағастыбейек"*** тауҙарына аңлатыу кәрәкмәй. Ҡарағастыбейектә сейә, төрлө еләктәр (шартый, турғай, ағас еләге), бөлдөргән һ. б. емештәр бешеп өлгөрөп торған, ҡыҙыл күк көртмәле түшәлеп ятҡан. Янғын сығып шунан һун ғына аҙ ҡала, әле лә етерлек. Малдар иртә яҙҙан көҙгә тиклем шунда туклана. Ауылды тағы ла уратып ***"Ташморон"***, "Оҙонғыр" тауҙары һуҙыла. Ҙур булмаһа ла Һарағы, Оҙонсал йылғалары, Ташморон, Яланайыр, Еректе йылға, Сатра кеүек бәләкәй йылғалары, шишмәләре сылтырап ағып халыҡты һыу менән тәьмин итә. Ауылға яҡын ***"Көрәште"*** тауы һуҙылып киткән, унда сейә бик күп була.

Элек сейә сәскә атҡас, бер нисә һыбайлыны ебәргәндәр һәм сейә һабаҡтары бейек, эре булғандар, шуларҙы һыбайлылар (селек тә күп бейек булып үҫкән) йырып йөрөп сығырға тейеш булғандар шулай итһән тигеҙ, тиҙ бешкән. Һунынан сейә бешеп өлгөргәнен барып ҡарағандар. Бешкәс күмәклəп түҙ һауыттарға (моҙғаларға) йыйғандар унда иҙелмәгән, һытылмаған. Ҡайткас сейәне ауылдын иң ололарына, ғәриптәренә таратып биргәндәр, ҡалғанын ғәҙел итеп бүлешкәндәр. 1960 йыл да ауыл "Ағиҙел" колхозына әйләнде, һарыҡтар үрсетелде, тауҙағы сейәне һарыҡтар ашаны, хәҙер тағы ла сейә үҫеп килә, сейәнен яртыһы ҡыҙарыу менән йыйып

бөтәләр. Элекке кешеләр бик тәртипле, ғәзел булғандар. Көрәште тауының исемен ике төрлө анлаталар. Һуғыш булған (көрәшкәндәр), (икенсеһе) Тау бик текә, юл шунан үтә, тауға йөк менән атларға, кешеләргә күтәрелеүе бик ауыр була, көрәшә-көрәшә менергә кәрәк булған, шуға атағандар, тирә-яҡтағы исемдәрҙе уйлайһың да халыҡ бик аҡыллы, тапҡыр ул, - тип ҡуяһын.

Әбделмәмбәт ауылы

"Ҡыҙҙар киткән", "Таҡыя тапҡан", "Бүреҡырған", "Иҫәнбирҙе", "Үлмәһәк", "Муйыл түбә" һ.б. Башҡа ауылдарҙа ла кеше йәшәй-йәшәй тауҙарға йылғаларға исем биреп бөткән. Үҙҙәре өйөр-өйөр йылҡы, һыйырҙар ваҡ малдар үрсетеп йәшәгәндәр. Ауыл халҡы май урталарында "Һәүәнәк ташына йәйләүгә күскәндәр, хәҙер Сибай кооперативы һәм "Кызыл таң" колхозының йәйләүе урынлашкан ер. Ошонда тирмә (байҙар), аласыҡ (бурап эшләйҙәр), өйсөк (трансанан эшләнгән ҡыуыш) һ. б. кешенең хәленә ҡарап йәшәйҙәр. Мал туйынып, һуйырға эшкенгәс ҡымыҙ бәйләп, ете ауыл бергә йыйынға йыйыла. Һәүәнәк ташы бейек урын, тауындағы таштары тигеҙ була. Ете ауыл: Ҡолғана, Килдеғол, Әбделмәмбәт, Әхмәт, Буҙыкай, Рысҡужа, Ҡаҙмаш ауылдарынан ҡурайсылар, бейеүселәр, йырсылар, һүҙ оҫталары, ҡумызсылар ярышһа, көрәш, ат ярышы, югереү, ҡолғаға менеү кеүек ярыштар ойошторолған.

Йәштәргә бик ҙур иғтибар биргәндәр, сөнки үҙҙәренә алмашҡа кешеләр әҙерләгәндәр. Ҡунакка йөрөгәндәр, туғанлашҡандар. Ҡолғананан Мусин Ғәлимйән (Яҡупов Сәғит, Рауилдарҙын атаһы), Килдеғолдан Йәғәфәровтар, Яхиндар араһынан ҡурайсылар уйнағандар. Оҫта ҡурайсыларҙың ҡурайына көмөш тәңкә таҡҡандар, оҫта бейеүселәрҙең аяҡ аҫтына көмөштән тәнкә һипкәндәр.

Тауҙар, ҡаялар

Ҡаншал (1 вариант). Был ауыл байының бик күп һарыҡтары юғала. Эҙләй торғас, тауҙа бүреләр ҡырғанын белеп ҡалалар. Бай ялсылары менән барып тапҡас, бер ялсыһы: “Канчал, бай”, - тип өндәшә.

Ҡаншал (2 вариант). Ҡаҙаҡтар башҡорт еренә яҡын яткан бит, беҙҙең яҡҡа йыш килгәндәр, һылыу-һылыу ҡыҙҙарҙы урлап, өйөр-өйөр йылҡыларҙы ҡыуып алып киткәндәр… Башҡорттар ҡаршы сыҡҡас, ҙур яуҙар башланып киткән. Таштарға яғылып ҡандар шал* һымаҡ түгелеп ҡалған, шул замандарҙан бирҙе ул тауҙы Ҡаншал тип йөрәтәләр.

Ҙурайғас, ишетәм: күрше ҡолғаналарҙың да ундай тауҙары бар икән. Тик беҙҙекенән арыраҡ һәм Канчал тип атала. Имеш, башҡорт һуңғы дошманын үлтергән дә “Кончал!” тип һөрәнләгән. Әммә миңә ауылыбыҙҙан өс-дүрт саҡрым самаһы көнсығышта ятҡан үҙебеҙҙең Ҡаншал тауҙары һөймәлекле…

Бында башҡорт менән ҡырғыҙ
Алышҡандар тас та тос.
Йәнлек-хайуан ситкә шылған,
Ары осҡан хатта ҡош.
Алышҡандар. Маҡсат берәү:
Кемгә бында хан булмаҡ.
Кеше баштары ҡыйылған,
Ҡандар аҡҡан шал һымаҡ.
Шул замандарҙан был тауҙы
Ҡаншал тип йөрөтәләр.
Елдәр генә ҡылғандарҙың
Башын һыйпап үтәләр.
Сал тарих бик алыҫ ҡалған,
Ҡандар аҡмай шал булып.
Ә тау тора күккә ашып,
Һаман да Ҡаншал булып.
Уҡыусылар менән килдек,
Күрәйек, тип, Ҡаншалды.
Тау, ни, ыжламай ҙа тора,
Ҡосаҡлап ҡаршы алды.
Түбәһендә ҡарағастар,
Күпте күргән ағастар.
Тамырҙары таш аҫтында,
Үҙҙәре хас ҡоростар.
Һалдаттарҙай, йәшен утын
Үҙ иңдәренә һөйрәп,
Торалар хас һәйкәл һымаҡ,
Утта ҡарайып, көйрәп.
Бында ҡырғыҙ менән башҡорт
Бик аяуһыҙ алышҡан.
Тарихта булған был ысын,
Шал һымаҡ аҡҡан ал ҡан.
Ҡырғыҙ-башҡорт алышында
Башҡорт еңгән, әлбиттә.
Сөнки уға ярҙам иткән
Йәнтөйәк – тәбиғәт тә!
Бөгөн бында тынлыҡ бар ҙа,
Ел бар. Бар ялбыр ҡылған.
Сал тарихты изге һаҡлап,
Тау Ҡаншал булып ҡалған.
Бында бөгөн донъя бөтөн,
Ҡоштар иркен осалар.
Йәнлек-януар үрсем бирә,
Үҙәктәргә боҫа ла.
Айыуҙарҙың өңө бында,
Тып - тыныс ҡыш сығалар.
Иң түбәлә бүре олой,
Кәкрәйеп дуғалай.
Ҡаншалдың өс армытынан

Һуҡмаҡ төшә түбәнгә.
Һарғаяға тигән юлың
Тәүҙә төшә Үҙәнгә.
Көнсығышта Ҡолғанаға
Һуҡмаҡ буйлап юл һарҡа.
Ә көн яҡта, уйһыулыҡта
Минең Һарағым ята.
Өс ауылдың уртаһында
Мәғрур Ҡаншал тауҙары.
Гүйә, һалдат һаҡта тора,
Ҡурсалап ауылдарҙы. [1]

Аҡбейек. Битләүҙәренең текәлеге, үҙенең бейеклеге менән хайран ҡалдырған Аҡбейек беҙгә бәләкәй сағыбыҙҙан яҡшы таныш. Шулай уҡ күңелгә бик яҡын тау. Яҙлы-көҙлө юл өҙөклөгө осоронда Яуымбайға, йәғни оло юлға Аҡбейектең тар ғына түбәһенән үткән юл буйлап йөрөр инек. Ике яҡ, әйтерһең дә, упҡын, саҡ ҡына яҙа баҫтыңмы, йәһәннәмгә остоң тигән һүҙ. Армияға киткәнемдә, 1974 йылдың 14 майында, мине шул юл буйлап Сәғит ағай Кирамов кузовлы “УАЗ”ик машинаһында Бөрйәнгә (район үҙәгенә) алып барҙы. Армияла ике йыл буйы Аҡбейек рухы менән йәшәнем, Ҡыпсаҡта интернатта ятып уҡыған саҡтарым, физкультура уҡытыусыһы Рәшит ағай Дауытовтың беҙҙе ҡышҡыһын саңғыла йөрөргә, яҙлы-көҙлө йүгерергә Аҡбейек итәгенә алып сығыуы, тау үренә ҡарай йүгертеп ярыштырыуы күҙ алдынан китмәне, хәтерҙән сыҡманы.

Аҡбейек һуҙымлы ике бейек тауҙан тора. Биргеһен, итәгендә генә һыйынып Әбделмәмбәт ауылы ятҡанын, Бәләкәй Аҡбейек, арғыһын Өлкән Аҡбейек тип йөрөтәләр. Өлкән Аҡбейектең иң ҡалҡыу түбәһендә маяҡ та була торғайны. Кесеһенең түбәһенә “Мегафон” контейнерын ултырттылар…

Түбәһендә ҡар бураны уйнай,
Һырт бирмәгән аҫау ат кеүек.
Бала саҡтан һуҡмаҡ һалған үрем,
Тағы киләм һиңә, Аҡбейек!
Аҡбейек – тау, мәңге
даулы-шаулы,
Һырты, гүйә, елдәр төйәге,
Ир-егетте сәмләндерә генә
Текәлеге, тауҙың бейеге.
Үр ынтылам ҡар дингеҙен кисеп,
Нығыш атлап барам – тау бейек.
Кеше түгел, бынау саҫҡауҙарҙа
Тау яуларға ҡыймаҫ ҡош-кейек.
Көрттәр йырып үр яулағас,
әйтәм,
Маңлай тирем һөртөп:
“Ах, бейек!”
Шул ваҡытта, гүйә, тау теҙләнә
Минең алда үҙе баш эйеп.
Ғорур тауҙың был булмышы
миңә
Ни өсөндөр ғәжәп, ят кеүек.
Ир-егеттең көсөн, саялығын
Танынымы әллә Аҡбейек?!.

Бөрйән тауҙары… Ғөмүмән, уларҙы айырым телгә алыу шартлы ғына рәүештә. Бөрйән − тауҙар

иле. Көньяҡ Урал тауҙары иле. Беҙҙә тауҙар бер-береһенең индәренә таянышып юғары ҡалҡа. Иң бейек тауҙың да түбәндәге битләүе – ябай ғына исем йөрөткән ҡалҡыулыҡ. Ул үҙенең бөйөк тауҙарҙың нигеҙе булып тороуын тоймайҙыр ҙа. Хас ил таянған эшсән, күңеле менән матур ябай кешеләр һымаҡ. Бөрйән халҡының татыулығы, бер-береһен танып-белеп, бер-береһенә таяныс булып, ышанып, хәстәрләнеп йәшәүе ана шул тауҙар рухын күңелдәренә һеңдереүҙән, тауҙарға оҡшарға тырышыуҙандыр… [1]

*Шал − Бөрйәндә ағас, иҙән буяуын ошолай атап йөрөтәләр.

Кәзә ташы. Борон, тәбиғәт бөтөн, ыуыҙ ғына саҡта ҡая ҡырласында ҡыр кәзәләре тулып йөрөгән. Ҡая өҫтөнән ғорур ҡарап торор булғандар. Һуғыш осоронда, унан һуңғы ҡыҫынҡы йылдарҙа ҡыр кәзәләренә килдеғолдар һунарға иркен йөрөгән. Бөгөн иһә ҡоралайҙар күренмәй, тик ер-һыуҙың атамаһы Кәзә ташы булып нығынып, боронғо хәлен күҙ алдына баҫтырырға форсат бирә. Кәзә ташы ҡатнаш урманлы тау, битләүендә рәхәтләнеп селек үҫә. Яҙғыһын ҡаяларынан йүкә йыуаһы йыялар. Түбәһендәге урманлығында көртмәлеһе лә күп. Заманында шул тирәләрҙә бурһыҡ оялары ла байтаҡ булған.

Кәзә ташының ике яғынан ике кескәй йылға ағып төшөп, мөйөштә ҡушыла ла, артабан Оҙонсал булып юлдарын дауам итә.

Көҙҙәрен был тирәлә айыу иркен йөрөүсән. Бер йыуан ҡарағайҙа һунарсыларҙың элекке таҙғағы ла һаҡлана. Бер йылы ошо тирәлә айыу һыйырҙы йыҡҡас, һунарсы ағайҙар таҙғаҡта аңдып ултырып, һөмһөҙҙө атып алған. Килдеғол азаматтары Ғәлимйән Яхин, Әмир Исхаҡов (мәрхүм), улы Хәбир, Хәйҙәр Әйүпов, улы Фәнилдең (мәрхүмдәр) һунарсы даны һаман да халыҡ телендә.

Рәхимйән ташы. Рәхимйән Шәмсетдин улы Яхин 1930 йылда тыуған. Йәшләй генә фажиғәле һәләк булған. Үҙенең 24 йыллыҡ ҡына ҡыҫҡа ғүмерендә исеме бөгөн дә телдән төшмәҫлек нимә эшләгән һуң?

– Бер һөйләм менән быға шулай яуапларға була, – ти Мөнир Абдулла улы, – ирмен тигән ир кеше нимәгә һәләтле – шуны ул үҙенсә иҫбатлаған, йәғни 97 килограмм 600 грамм ауырлығындағы ташты эйәрле аты аша алып ырғытҡан.

Рәхимйән ташы 1994 йылдан алып район һабантуйындағы спорт ярыштары программаһынан төшмәй. Таш күтәреүҙә алдынғылыҡты бирмәгән Салауат Аҫылбаев, Даян Хамматов, Фаяз Әхмәтов, Хәйҙәр Күлбирҙин һәм башҡа бәһлеүән егеттәр – килдеғолдарҙың ғорурлығы. [1]

Маяҡ түбәһе. Өҫкө яғы бер аҙ емерелеп төшкән, ә шулай ҙа мөһабәтлеген юғалтмаған ағас вышка ҡаршылаңы беҙҙе сираттағы туҡталышта. Бындай маяҡтар районда 1958 – 1960 йылдарҙа яҡын-тирәләге Көрәште, Һәүәнәкташ, Мәтәл, Аҡбейек һәм башҡа бейек тау түбәләренә төҙөлгән. Бөгөн тик ошо берәү генәһе ҡалған. Уларҙы биләмәләрҙе кварталдарға бүлеүҙә, ярынты һалыуҙа файҙаланғандар, янғын хәүефһеҙлеге ролен дә үтәгәндәр.

Килдеғолдар, был вышка беҙҙең өсөн Париждағы Эйфель башняһынан да ҡәҙерлерәк, сөнки ул беҙҙең маяҡ, беҙҙең биләмәнең бер үҙенсәлекле күренеше, ти ғорурлыҡ менән. [1]

Йылғалар, шишмәләр, кисеү

Әүҙекте йылғаһы. Һалҡын, таҙа һыулы тау шишмәһе был. Халыҡ шишмәләп тормай, ҙурлап, Әүҙекте йылғаһы, ти ҙә ҡуя. Һыуҙың ҡотоғо (бөрйәндәр ҡоҙоҡто шулай ти) теремек юлын үҙенең айырым һөйләрлек тарихы булған Әүҙекте исемле мәғрур тау ҡуйынынан башлай. Әүҙекте ике үркәсле, был тирәләге иң бейек тауҙарҙан һанала. Яланғас түбәһендә бүтәгә, ҡылған, һарыҡ йыуаһы кинәнеп үҫә. Айыу өңдәре, болан уйындары, һуйыр ҡарағастары шул яҡтарҙа инде. Бер йылы бөркөтөн дә күреп ҡайттылар.

Әүҙекте атамаһы «әүеү», «ауыу» һүҙҙәренә бәйле килеп сыҡҡан. Өс ауылдың уртаһында ятҡан был тауға бағышлап борон йыр сығарып көйләп тә йөрөгәндәр:

Уң яғыма ауһам – Ҡолғанам,

Һул яғыма ауһам – Һарағым.

Тура ғына ауһам – Һарғаям,

Һеҙҙе, дуҫтар, һағынып һарғаям.

Быны 1908 йылғы Ғәлиә Көмөшбаева һөйләгәйне. Әүҙекте беҙҙең ауылға нигеҙ урынын өйрәтеүсе лә. Бынан ике йөҙ самаһы йыл элек күрше ауыл Әбделмәмбәттә Игелек исемле ҡарт йәшәгән (архив материалдары буйынса, ул дәүерҙәрҙә ауыл «Абдулмамбетово-Иглеково» тип аталған). Игелектең алты улы була. Малайҙарының көсөнә таянып, ҡарт йылҡыны күп көткән. Улдары көҙгөһөн йылҡыларҙы Әүҙектегә тибенгә алып килер булған. Бер яҙын аттарын тауҙан көньяҡҡа турараҡ төшөрөп алып ҡайтҡанда, әлеге ауылыбыҙ урынын күреп, бик оҡшатҡандар. Унан, аталарының фатихаһы менән Килдеғол, Миңдеғол, Исҡужа, Һағынбай исемле улдары бында килеп төпләнгән.

Әүҙекте ҡуйынынан бер нисә шишмә урғылып сыға. Беҙ туҡтаған шишмә шуларҙың береһе, ул Оҙонсалға ҡоя. Ҡуҙғалып киткәндә, Мөнир ағай һөйләгән шиғыр һаман ҡолаҡ төбөндә яңғырағандай ине:

Өлкән Әүҙектенең тәрән үҙәгенән,

Табып алдыҡ болан мөгөҙө,

Туғыҙ саталыһын. Ташлап киткән уны,

Боландың боланы – үгеҙе.... [1]

Оҙонсал йылғаһы. Ҡарағасйорт тигән ерҙән, бик оҙон үҙәктән, килә был йылға һәм Һарағыға ҡоя. Элегерәк эре-эре балыҡтары ла булған, тип һөйләйҙәр. Халыҡ телендәге Оҙонсал атамаһы, дөрөҫөндә, Оҙонса ул. Урғылып сыҡҡан ҡотоғонан алып юлы оҙон тауҙар теҙмәһе үҙәненең бер уңына, бер һулына сығып, йыландай һуҙылып ағып ята. Оҙонсал буйында элек бесән эшләгәндәр, түбән яғында ҡымыҙ бешкәндәр, картуф сәскәндәр. Оҙонсалдың Һарағыға ҡойған ерендә етмешенсе йылдарҙа сайыр һыҙыусылар, урман ҡырҡыусылар йәшәгән утар булған. Хәҙер ул утар юҡ. Бәлки берәй заман ауыл йәштәренең берәйһе матур биләмәлә өй һалырға батырсылыҡ итер. Ә әлегә тарих уҡытыусыһында утарҙа йәшәгән һуңғы кешеләр тураһында иҫтәлек-яҙма ғына һаҡлана. [1]

Ташкисеү. Был бәләкәй генә тау шишмәһенең ҡотоғо кисеүҙән саҡ ҡына өҫтәрәк. Матур ғына итеп ағып ятыр ине лә, был яҡ – мал аяғының аҫты, ауыл көтөүҙәре ошонан үтә. Әммә Ташкисеү бирешмәй, тапалыуға ла ҡарамай, аяуһыҙ ҡояш эҫеһенән өтөлөүгә лә ҡоромай, үҙ юлын белеп кенә, тыныс ҡына аға ла аға.

– Өндәшмәй генә ҙур эштәр башҡарған кешеләргә оҡшатам мин Ташкисеүҙе, – шағир йәнле Мөнир Абдулла улы ошондай шишмә-йылғаларға төбәп шиғыр ҙа сығарған:

...Ләкин йылға – моңло бала,

Бер аҙға ла тынмай ғына,

Тын да алмай тыңла ғына:

Йырлай ғына, йырлай ғына....

Иҫтәлекле, тарихи атамалар

Хәмиҙә зыяраты. Сираттағы туҡталҡа бик аяныслы яҙмыш менән бәйле ине. Хәкимйән Юнысов исемле ағай 1943 йылда һул ҡулынан яраланып, һуғыштан ҡайта. Ауылда эш күп, ашарға юҡ. Хәкимйән һунарға сыға, атҡанын ауылдаштары менән бүлешеп, халыҡты аслыҡтан

ҡотҡарырға тырыша. 1930 йылда Башҡорт дәүләт ҡурсаулығы ойошторолғас, күпләп марал килтергән булалар. Үкенескә күрә, бүреләр ҙә ҡотороноп үрсей, маралдарға көн бөтә. Ҡурсаулыҡ хеҙмәткәрҙәре бүреләргә һарыҡ ағыулап һалырға мәжбүр була. Хәкимйән сираттағы һунарына сыҡҡанында шуны күреп ҡалып, өйҙәгеләргә урманда ятҡан һарыҡ хаҡында әйтә. Иртәгеһенә әсәһе Хәмиҙә инәй ҡырпаҡ ҡарҙа эҙҙәрен ҡалдырып, Бертеш яғына сыға. Теге һарыҡты табып ала ла, өтөп бер аҙ итен ашай һәм һарыҡты йөкмәп ҡайтырға сыға. Ошо урынға килеп ҡолап, йән бирә. Ауылдашы Нәғимә Илсеғолова бер-ике ҡатын-ҡыҙҙы эйәртеп килеп, уны ерләп ҡайта.

Һуғыш афәте арҡаһында фажиғәле вафат булған Хәмиҙә инәйҙең зат-ырыуының шәжәрәһе мәктәп музейында бар. [1]

Ете иләү. Тәбиғәттә ғәжәп хәлдәр күп. Уларҙың серен асып та бөтөрлөк түгел. Бына тағы «ғәжәп хәл"гә бер миҫал. Эре-эре ете иләү бер тирәлә генә урынлашҡан. Мөнир Абдулла улы, ауыл көтөүен көтөргә сираты еткәс, ошо урынға килеп сыға. Бәләкәй күбә дәүмәлендәге ете иләүҙе күреп, хайран ҡала: «Әйтерһең дә, башҡортомдоң ете ырыуы... Ҡырмыҫҡалары эре, эшсән». Биләмәлә ундай башҡа иләүҙәр юҡ. Шуныһы ла ғәжәп – айыу теймәй. Ә бит был тирә урман хужаһының аулаҡ мөйөшө һанала. Малдың да иләүҙәрҙе туҙҙырмауына аптырап, «Йәшлек», «Таң» гәзиттәре, «Шоңҡар» журналы, Килдеғол мәктәбе коллективтары иләүҙәрҙе бүлешеп кәртәләп ҡуйҙы. Тарихта ҡалырлыҡ мөһим ваҡиғаны объективҡа индерер өсөн, ҡырмыҫҡаларҙан тешләнә-талана фото төштөк. Мөнир ағай әйтмешләй, «килеп сыҡты эшсәндәрҙең ныҡлы дәүләт-йорттары».

Ҡарағасйорт. Саф һауаға иҫереп, ялбыр ҡарағай үҫкән иркен яланға килеп еттек. Бынан бар тирә-яҡ ус төбөндәге кеүек күренә – тыуған төйәгебеҙ өсөн ғорурлыҡ тойғоһо хатта йөрәкте тулата! Ҡарағасйорт тип атала был урын. 1930 йылда биш ауылды берләштергән «Урал» колхозы ойошторолоп, бригадаларҙа малсылыҡ фермалары төҙөлгәс, ошонда, Ҡарағасйортта, Ҡыпсаҡ фермаһының тәүге йәйләүе була. Йәйләүҙекеләр кистәрен ҡалҡыу ергә, таштар янына килеп ултырырға, төрлө темаларға әңгәмәләр ҡорорға, Сабирйән Мөхәмәтҡоловтың шиғырҙарын, ҡурай моңдарын, халыҡ йырҙарын башҡарыуын тыңларға яратҡан. Таҡмаҡ-көйҙәр аҫтында бейеп тә күңел асҡан халыҡ. Ошо ҡотло урынға килдеғолдар Әбделмәмбәт урта мәктәбе уҡытыусыһы, рухлы егет Зиннур Боҫҡонов ярҙамында яңылыҡ индергән: Ҡыпсаҡ ырыуы тармаҡтарынан композиция төҙөгәндәр. Уйып ырыуҙар исеме яҙылған, ырыу тамғалары һуғылған ябай ҡарағай бүкәндәренән торған бына тигән мәғәнәле урын барлыҡҡа килгән.

Өмөкамал төбәге. Маршрутыбыҙ тағы ла бер фажиғәле урын аша үтте. 1950 йылдың майында егермегә яҡын кеше сайыр эшендә йөрөгәндә, айыу һөжүм итеп, Өмөкамал исемле ҡыҙҙы талай. Мылтыҡтары булмағас, уны ҡотҡара алмайҙар, ҡыҙ тән яраларынан йән бирә. Өмөкамалды тыуған ауылы Янһарыға алып барып ерләйҙәр, ә исеме, әйтерһең дә, кешеләрҙе йыртҡыс хайуандан һаҡ булырға өндәп, атама булараҡ ошонда ҡала.

Бертеш. Бертеш тип аталған сираттағы төйәк тә – үҙенсәлекле. Атаманың килеп сығыу тарихы Муса Фәйзулла улы Исҡужиндың (1908 – 1968) һөйләүе буйынса (Әбделмәмбәттә йәшәгән хаҡлы ялдағы уҡытыусы Зәкиә Муллағолова яҙып алған) былай: бик борон был урында йәйләү тотоп, мал бағып йәшәгәндәр. Йәйләүҙә бик теремек, эшкә бөтмөр әбей була. Уның итексе булараҡ та даны сыҡҡан. Күнде тегер өсөн ныҡ еп кәрәк. Уны малдың арҡа һөйәге буйындағы һеңерҙән эшләгәндәр. Һеңерҙе алып киптергәндәр, унан туҡмаҡ менән туҡмап, төйөп йомшартҡандар. Шунан семтеп-семтеп тетәләр. Урыны менән тешләп тартып та сираталар. Итексе әбей туҡмап йомшартылған һеңерҙе теше менән тартып ултыра икән. Эргәһендә уйнап йөрөгән балаларҙың береһе: «Өләсәй, тештәрең бөтә инде, улайтып тештәп тартҡасың, ана бит ауыҙыңда бер генә тешең ҡалған», – тигән. Әбей ыжламай ҙа: «Тешем берәү генә булһа ла, эшкә

бик ярап ҡала әле», – тип һеңерҙе һаман да һыҙыра ла һыҙыра, имеш. Ана шунан ҡалған да инде Бертеш атамаһы.

Урыҫ юлы. Ауыл аҡһаҡалдарының береһе, 1933 йылғы Сабир Көмөшбаевтың һөйләүе буйынса, улар бәләкәй саҡта был юлдан Әүжән урыҫтары тураға Темәскә йөрөгән: «Кеүәтле пар аттарҙа елеп килеп төшөрҙәр, сабып менеп китерҙәр ине».

Мөнир Абдулла улы 1925 йылғы Менәүәрә Миңдеғолованың да иҫтәлектәрен ҡәҙерләп һаҡлай: «Бөйөк Ватан һуғышы осоронда улар ошо юлдан Әүжән урыҫтарынан серек картуфты күп ташыған». Урыҫ юлы бөгөн дә буш ятмай, халыҡ йөрөп тора. Беҙҙең дә аяҡтар еңел булып, туристар уны артабан да таҡырайтһын әйҙә, тип теләнек.

Кедр урманы. – «Беҙҙең Бөрйән – ҡуйы урман» тип йырҙа йырлана, – тип аңлатты оҙатып йөрөүсебеҙ кедр урманының барлыҡҡа килеүен, – ҡуйы була инде, орлоҡ төшөп тәбиғи үҫеүенән тыш, кеше көсө менән дә урмандар ултыртылғас. Үткән быуаттың урталарында Бөрйәнгә кедр үҫентеләре килтерелә һәм беҙҙең тәбиғәт өсөн ят булған был үҫентеләрҙе районда эксперимент рәүешендә бер нисә урында ултырталар. Беҙҙәгеһе – Бертеш буйында. 60 төп самаһы кедр. Уны ултыртыуҙы ойоштороусы – урмансы булып эшләгән ауылдашыбыҙ Муса Исҡужин.

Кедр йомшаҡ ағас, йәш үҫенте сағында уны маралдар яратып кимерә. Шунлыҡтан уларҙы тимер сым тартып кәртәләп ҡуйғандар. Хәҙер үҙенсәлекле урманлыҡ мандып, матур ғына булып үҫеп килә. Беҙ, тәбиғәт балалары, урманда – Һарына, тау битендә ҡымыҙлыҡ ашаһаҡ, бында йүгереп йөрөп, кедр сәтләүеген эҙләп ҡараныҡ, әммә тапманыҡ. Ә бит кемдеңдер өлөшөнә шул сәтләүектәрҙән ауыҙ итеү ҙә бәхете эләгәсәк.

Сабирйән түңгәге. Уҡытыусы, репрессия ҡорбаны, Әбделмәмбәт ауылы кешеһе Сабирйән Мөхәмәтҡолов – үҙенең яҙмышы менән Бөрйән районының тарихын яҙыусы кешеләрҙең береһе. Мөнир Фәйзуллин уның исемен халҡына кире ҡайтарыуға ҙур өлөш индергән. Сабирйән сәсәндең үҙ ҡулы менән яҙылған «Түңгәккә» тигән шиғыры ҡулына эләккәндән һуң, Мөнир ағай эҙәрмәнлек эшенә тотоноп китә. Түңгәкте – ғәзиз ҡомартҡыны табыр өсөн әллә күпме урман гиҙергә тура килә үҙенә. Йылҡы көтөүсеһе, һунарсы Хәбир Исхаҡов менән бергә Бертеш яланынан сығып килгән ерҙә тап итәләр уны: йыуанлығы ике ҡоласлыҡ, бейеклеге ике метрлыҡ ҡарағас түңгәктә Сабирйән сәсән 1932 йылдың 17 июлендә һыу һәм яҡтылыҡ төшмәҫлек урын этмәләп, шиғырын химик ҡәләм менән яҙып ҡуйған. Был түңгәк хәҙер Килдеғол мәктәбе ҡарамағында.

– 2006 йылда өлкән синыф уҡыусылары менән бергә уны кәртәләп, яҙма ҡуйҙыҡ, – ти Мөнир Абдулла улы. – Данлы зыялы кешеләребеҙҙең исеме ерҙә ятырға тейеш түгел, балалар уларҙы белеп үҫһен.

Матбуғат һабантуйы уҙған ер. Тайфур Шәмиғоловтың сабынлығын үҙебеҙсә шулай атаныҡ. Бында төрлө конкурстар, ярыштар, уйындар күп үтте: футбол, пейнтбол, сыбыҡ ат сабыш, көршәк ватыш... Уйын-көлкө, йыр-моң бер мәлгә лә тынманы. Матбуғат һабантуйы дуҫлыҡ һабантуйына әйләнде – хәрәмләшеүһеҙ ҡайҙа ла дуҫлыҡ еңде. Ҡунаҡҡа саҡырған мәктәп директоры Инсур Үтәбаевҡа, сабынлығында ял итергә рөхсәт иткән Тайфур ағайға, беҙҙе оҙата йөрөүсе ауыл фельдшеры Ғәлиә Исҡужинаға, тарихи маршруттың авторы, гид Мөнир Фәйзуллинға, архитекторы Зиннур Боҫҡоновҡа, мәктәп хеҙмәткәрҙәре Ринат һәм Альберт Яхин, Сабит Билалов, Рафаэль Исҡужин, Радик Ҡорманғолов, Ғәлим Исхаҡовҡа ҙур рәхмәт. Байрамды ойоштороуҙа ярҙам иткән шәхси эшҡыуарҙар Гөлсөм Монасипова, аталы-уллы Кәрим һәм Вадим Исҡужиндар, Раян Шахниязовҡа, ашнаҡсылар Гөлнара Сафина, Гүзәл Ҡорманғолова, Эльвира Миңдеғоловаға, клуб хеҙмәткәрҙәре Резеда Исхаҡова, Ғәзимә Әйүпова, Нәзилә Исҡужинаға, уҡыусылар Гөлфинә һәм Филиә Исҡужиналар, Сөмбөл һәм Рәүилә

Исхаҡовалар, Наҙгөл Билаловаға, Әбделмәмбәт ауыл биләмәһе хакимиәте башлығы Фәриҙә Ҡорманғоловаға ла рәхмәтебеҙ сикһеҙ.

Ғөмүмән, республикала беренселәрҙән булып матбуғат байрамын үткәргән килдеғолдар иң беренсе матбуғат һабантуйын да ойоштороп, тағы ла беҙҙе, журналистарҙы, һоҡландырҙы. Килдеғол маршрутында, «Һуңғы герой» тапшырыуың ситтә торһон, әллә ҡайҙағы утрауҙарға йөрөмәй, үҙебеҙҙең Бөрйәндә лә экстримдың хәтәрен күреп-татып була, тигән фекеребеҙ нығынды. Донъяның хозурлығын йәне-тәне менән тойғандарҙың, Башҡортостаныбыҙҙың гүзәллегенә ғашиҡтарҙың һәр кеме ҡыпсаҡтарҙың тыуған төйәген күреп ҡайта ала. Бының өсөн ни бары Бөрйәнгә генә юлланырға ҡала.

Килдеғол ауылы

Үткән быуат уртаһында Әбделмәмбәт ауылы кешеләре тағы ла ике ауылға Килдеғол, Яуымбайға нигеҙ һалған. Беренсеһен 1812 йылғы һуғышта ҡатнашыусы Килдеғол Игелек улы Ибраһимов нигеҙләгән. Улдары Сафулла, Әбделвәхит, Йәһүҙә һәм Ғәйнулла. Ибраһимхужаның улы Ибраһим уның улы Игелек, Игелектең улы Килдеғол, уның улы Йәһүҙә, бер туғандары Сәйфулла, Әбделвәхит, Ғәйнулла. Йәһүҙәнең улы Ниғмәтулла, улы Шәрәфулла, унан Фауариз, уның ҡыҙы Ғәлимә.

1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашыусылар: Килдеғолдан – зәүрәт-хорунжий Килдеғол Ибраһимов, Мөхәмәтәмин, Үҙәнбай, Шәһивәли Ҡошйетәровтар 15-се башҡорт алайында хеҙмәт итә, Парижды яулап алыуҙа ҡатнашып, ауылдарына икешәр көмөш миҙал тағып ҡайталар. Ҡошйетәровтар аталары Яуымбай ҙа ауыл барлыҡҡа килтерә. Яуымбайҙа 1959 йылда – 27 өйҙә – 160 кеше, 1920 йылда 72 өйҙә – 345 кеше иҫәпләнгән.

Килдеғолда 1859 йылда 23 өйҙә – 153 кеше, 1920 йылда 92 өйҙә – 400 кеше булған. Ауыл халҡы ҡул менән таҡта бысҡан, ҡайнатҡан, малсылыҡ менән шөғөлләнгән, заманына күрә хәлле генә йәшәгәндәр. Ҡайһы бер хужалыҡтар десятиналап (1 га, 0,9 га) арпа, һоло сәскәндәр. Халыҡтың төп шөғөлө: ағас яндырып - күмер, ҡайын туҙынан – дегет ҡайнатҡан һәм малсылыҡ менән булған. Шуларҙы баҙарҙа алып сығып, алмаштырып кәсеп иткеп көн күргәндәр. 1911 йылға тиклем халыҡ хәлле яҡшы йәшәгән.

Әлегә билдәле тәүбабабыҙ – Ибраһимғужа. Ул башҡорт яуында батырҙарса һуғышып һәләк булғас, ауырлы ҡатынынан йәнә ир бала донъяға килә. Әсә ырыуҙаштары тәҡдиме буйынса балаға атаһының исемен ҡуша. Шулай итеп, Ибраһимғужаның улы Ибраһим, Ибраһимдың улдары Иглек (1758 - 1812) һәм Иғасура. Иглектең 6 улы: Нәҙерғол, Килдеғол, Миндеғол, Байрамғол, Исҡужа, Һағынбай нигеҙ ҡорған беҙҙең ауылға. Нәҙерғол менән Байрамғол ауыл урынын яратмай, аталары янына Әмделмәмбәткә ҡайтып китәләр.Ҡалған дүртәүһе беҙҙең яҡтарҙа нығына. Килдеғол Ибраһимов (1780) тап беҙ йәшәгән урынды һайлай. Ошонан алып ауылымды Килдеғол тип йөрөтә башлайҙар. Ауылым Ҡарағасты бейек, Ташморон, Түгәрмә тауҙары араһында урынлашҡан. Уны ҡап урталай бүлеп Һарағы йылғаһы аға. 3 урам (Мөхтәр

Сәғитов, Фәүзиә Усманова һәм Йәштәр урамы) һуҙылған. Ә. Тимерйәр үҙенең «Ҡарағай - ҡыпсаҡтар» китабында яҙыуынса, 1859 йылда Килдеғол ауылында 23 йортта 153 кеше, ә 1920 йылда 92 йортта 400 кеше йәшәй. Хужалыҡтар һаны –105, уларҙа 551 кеше йәшәй. Пенсионерҙар – 44 кеше, эшҡыуарҙар – 5 кеше, 5 – пилорама, ҡорт тотоусылар – 1 ғаилә, фельдшерлыҡ пункты, мәҙәниәт һарайы, мәктәп, балалар баҡсаһы бар, һуңғы йылдарҙа өй һалыусылар – 8 ғаилә, әле беҙ 9 - сыһы булып өй һалып йөрөйбөҙ, бура ултыртыусылар – 7 ғаилә. Беҙҙең ауыл, күрше Яумбай, Ҡыпсаҡ, Бәләкәй Ҡыпсаҡ (Кардон), Ҡолғана ауылдары менән бергә "Урал" колхозын ойошторалар. Килдеғолда тәүге мәктәп 1928 йылдың көҙөндә, әлеге мәктәп 1989 йылда асыла. Быйыл Килдеғол урта мәктәбенә 80 йыл. Килдеғол мәктәбендә 95 бала булып, үткән уҡыу йылында тағы ла тулы булмаған урта мәктәпкә әйләнде. 10-11-се синыфҡа барасаҡ 20 бала ҡайһыһы 132-се һөнәрселек училищеһына, Әбделмәмбәт, Иҫке Монасипта һ.б. урындарға белем алыу өсөн таралды. Мәктәп асылыуға 80 йыл, 61 йыл башланғыс мәктәп, тулы булмаған урта мәктәп булып 16-сы йыл, урта мәктәпкә әйләнеүенә 16 йыл. Тарих өсөн күп һан түгел, ә кеше ғүмере өсөн күп. Бөгөнгө көндә Үтәбаев Инсур Рәмил улы уҡытыусылар коллективын етәкләй. Йәштәр ситкә китмәй, ауылда 5 пилорама, 5 магазин, фельдшерлыҡ пункты, ауыл мәҙәниәт йорто бар, «Урал» АХК-һы, ситтәрәк В. С. Яхиндың пилорамаһы ла эшләп тора. Эшләйем тигән кешегә эш етерлек.

Һарағы йәки Ер-һыу һәм үҙебеҙ хаҡында уйланып

Ни хәлдәһең, һыулар һыуғынам?..
Күргән-кисергәнең, әйтерһең дә,
Күҙ йәшеләй,
Ағын һыуың менән йыуылған.
Зарланмайһың, тыныс ағаһың,
Һарағыҡайғынам, Һарағым….

"Ҡайһы ауылданһың?" – тип һораһалар, беҙ, ғәҙәттә, иң тәүҙә Килдеғолдан, тибеҙ ҙә, өҫтәп, Һарағынан, тип ҡуябыҙ. Сөнки, районда берәүҙәр ауылыбыҙҙы Килдеғол тип белһә, икенселәр уны Һарағы булараҡ таный. Ә ысынында ауылдың рәсми исеме Килдеғол (1812 – 1814 йылдарҙағы Ватан һуғышында 15-се полк составында Парижғаса еңеүле юл үткән, ике көмөш миҙал менән наградланған зауряд-хорунжий Килдеғол Иглек улы Ибраһимов нигеҙләгән). Шулай ҙа ҡайһы бер фараздарға ла ҡолаҡ һалырға мөмкин. Әйтәйек, Бабсаҡ менән Күсәкбей тарихында: "Ҡара һыйырҙан һуң Күсәкбей Ҡарағолөмбәтте, ҡыҙыл һыйырға атландырып, Һарағыға килтерә. Йәйләүҙәге көллө кеше күрһен тип, Өмбәткә алып бара", – тиелә ("Башҡорт халыҡ ижады", Өфө, 1980 й., 155-се бит). Күренеүенсә, был тирәләрҙә алыҫ шул дәүерҙәрҙә лә төбәк атап йәшәгәндәр булырға оҡшай. 1908 йылғы Ғәлиә инәй Көмөшбаева: "Килдеғолдан бик борон алда был урында Һарағы тигән олатай төйәк тотҡан", – ти торғайны. Шулай уҡ оло быуын ауылдаштар:"Һарағы бит ул халыҡ телендә генә ауылдың исеме, ысынында йылғаның атамаһы", – тип алыусан. Улай икән, Һарағының башланғыс ҡотоғо (ҡоҙоғо) ҡайҙа ла, ҡойған үҙәне ниндәй? Ни өсөн йылғаның атамаһы Һарағы? Бына ошо һорауҙар яуап таптыра. Берәүҙәр, йылғаның ауылдан саҡ ҡына өҫтәрәк, Яланайыр менән Сатыра йылғалары ҡушылдығынан бирге өлөшө генә Һарағы тип йөрөтөлә, ти. Был дөрөҫ түгел. Ауылыбыҙҙың арҙаҡлы ир-уҙаманы Нух ағай Көмөшбаев (1930 – 2005): "Һарағы йылғаһы ауылдан ун ике саҡрым самаһы үрҙән, Ҡыҙҙаргиткәндән ары, Ҡараңғы йорт тигән ерҙән башлана, ҡотоғо шунда", – ти торғайны.

Уның һүҙе йылғаның тәбиғи хәл-торошо, ағышы менән дә раҫлана. Ауылға хәтлемге юлында Һарағы уңдан да, һулдан да бик күп инеш-шишмәне һәм ҙурыраҡ йылғаларҙан: Айыусапҡан, Ҡараһыйыр, Бүреғырған, Ереклейылға, Яланайыр, Ҡашҡат, Йәйекҡыуыш, Игенсатлығы йылғаларын ҡушып ала. Ауылдың түбәнендә Оҙонсал, Үрге Ҡарағай йылға, Түбәнге Ҡарағай йылға, Оҙонғыр, Бүреғарт, Ишекалды яр йылғалары һәм күп кенә ҡотоҡ һыуы, шишмә ҡушыла. Ауыл эсендә уға Мәсет уяһы ҡотоғо һәм Ташморон ҡотоғо

һыуҙары ағып төшә. Һарағы тәү ҡотоғонан 28 саҡрым юл үтеп, Ғиззиәт туғайының түбәнге осонда Үҙән йылғаһына барып ҡоя.

Һарағы буйын (ауыл эсендәге хәҙерге хәлен иҫәпкә алмағанда) муйыллыҡ, ереклек һәм таллыҡ ҡаплаған. Урыны-урыны менән ҡарағат, ағас еләге, гөлйемеш ҡыуаҡлыҡтары осрай. Әлбиттә, беҙҙең төбәктең ерле баһадир ағастары – ҡарағай-ҡарағастарһыҙ ҙа булмайҙыр йылға күрке.

Ололар һөйләүенсә, Һарағы элегерәк тулы һыулы, шәп ағышлы ҙур йылға булған. Ҡайһы бер ятыуҙарында, айырыуса Ҡыҙылъяр аҫтында йәй уртаһында ла ат йөҙҙөргәндәр. Һарағы ағымы һал ағыҙыуға ла нык файҙаланылған. Утыҙынсы-илленсе йылдарҙа ҡырҡылған ағас һаллап Үҙәнгә ағыҙып төшөрөлгән.

Йылғаның ауыл тирәһендәге өлөшөндә алтмышынсы йылдар аҙағында ғына ла әле ике яҡ яр бейек һәм бөтөн, матур сиҙәмлек, һыу буйҙары тигеҙ, таҙа туғайлыҡ ине. Төрлө балыҡтар күп булды.

Торғонлоҡ йылдарында иҡтисадты тәбиғәт менән иҫәпләшмәй ҡайғыртҡан дәүерҙәрҙә килеп тыуған тотош илдәге фажиғәле экологик хәл Һарағы йылғаһына ла йоғонтоһоҙ ҡалманы. Баҫыуҙарҙа тәртипһеҙ рәүештә минераль ашламалар ҡулланыу, һыу буйҙарындағы урмандарҙы аяуһыҙ ҡырҡыу, мал тотоу һәм көтөүҙәге битарафлыҡ, һыу буйына ферма, пилорама урынлаштырыу, техника менән йылға ағышын борорға маташыу, балыҡ өйө булған ярҙарҙы емереү, муллыҡ заманында яғыулыҡ-майлау материалдарын әрһеҙ түккеләү, техниканы һыуға төшөрөү – быларҙың бөтәһе лә йылғаның аҡрынлап үлеүенә, бөгөнгө ҡыҙғаныс хәлгә ҡалыуына килтерҙе.

Шамбы, суртандар бөттө, бәрҙе-сабаҡтар, бүтән ваҡ балыҡтар кәмене, һыу эсеүгә яраҡһыҙ тиерлек, Һарағының даны – ҡиммәтле тиреле һылыу йәнлектәр – һыуһар, шәшкеләр юҡ кимәлендә.

Ошоларҙы уйлайһың да йән әрней – һис юғы ярты быуат элекке Һарағыны һағынаһың. Олатайҙар исемде лә яратып, моңло итеп ҡушҡан бит әле үҙенә. Һарағыҡай-Һарағым, тип йыр сығарып йырлап та йөрөгәндәр,ти.

Әйткәндәй, йылғаның исеме ни өсөн Һарағы? Быға ике төрлө аңлатма бар. Берәүҙәр, йылғаға исемде уның тәбиғи күренешенә ҡарап биргәндәр, ти. Йәғни һары һыу аға мәғәнәһендә. Был фаразды раҫлау маҡсатында шундай миҫалдар килтерәләр: яҡын тирәлә Һарығамыш, Һары-ғаулан, Һарғая кеүек төҫкә бәйле атамалы ер-һыу күп. Өҫтәүенә, беҙҙең ерҙең ҡыҙғылт-һары мәтеле, балсыҡлы (Балсыҡ соҡоро тигән ер ҙә бар), һыу төбөнөң һарғылт-йәшел ылымыҡлы булыуы ла йылғаға һары төҫ биреп торғандыр.

Икенсе аңлатманы күберәк һөйләйҙәр. Борон бабайҙар малды күп көткән. 12 – 15-әр һауын һыйыр, 20 – 30-ар башлап йылҡы малы тотҡандар. Ҡуйҙары ла ишле булған. Төйәктең мал тотоуға уңайлығы ла быға мөмкинлек биргәндер. Уралда ятабыҙ бит ни тиһәң дә. Шулай, бер йәй олатайҙарҙың береһенең һарығы һыуға төшә лә ағып китә. Һарыҡ аға, йәғни һарыҡ ағырлыҡ йылға мәғәнәһендә килеп сыҡҡан да инде Һарағы атамаһы, тимәк. Быны миңә 1912 йылғы Нәғимә инәйем Илсеғолова һөйләгәйне, хатта: ”Яҙғыһын аҡһа бер хәл, көпә-көндөҙ йәй уртаһында ағып киткән, ти бит”, – тип үк ҡуйғайны.

Беҙ ике аңлатманы ла ҡабул итәбеҙ. Өҫтәүенә, туған йылғабыҙҙың бөгөнгө хәл-торошона яраҡлаштырып. Ә бөгөн йылғабыҙ ни хәлдә – быны бөтәбеҙ ҙә күреп, белеп торабыҙ. Бөгөн Һарағынан һарыҡ ағырмы-юҡмы – уныһын әйтеүе ауырыраҡ, ә бына һыуының “һарылығы” бар.

Һарағыбыҙ, ярҙам һорап, беҙгә һарыла. Беҙҙән башҡа уны ҡурсалаусы, ҡотҡарыусы юҡ. Быны һуңғы йылдарҙа ауылдаштарыбыҙ аңлап ҡалды: яҙлы-көҙлө йылға буйҙарын таҙалау хәҙер беҙҙә матур йолаға әйләнеп бара, инде һыу буйҙарын ҡыйламаҫҡа ла өйрәнеп алһаҡ, бик мәслихәт буласаҡ. Шунһыҙ ҙа булмайҙыр, исемебеҙҙе бысраҡҡы килмәй ҙә баһа. Сөнки кемдәрҙер өсөн беҙ барыбер һарағылар булып ҡалабыҙ. Йыш ҡына: “Һарағылар – берҙәм халыҡ”, ”Һарағылар эшкә сос”, ”Һарағылар бай йәшәй”, “Һарағылар һәр ерҙә алда”, – тигәнде ишетергә тура килә. Һикһәненсе йылдарҙа райондағы бер түрә, йыйылышҡа саҡырылғандарҙы теүәлләп: ”Ҡайҙа-ҡайҙа, алтмыш саҡрымда ятҡан Килдеғолдан һарағылар килеп еткән, эргәлә ятҡан Яңы

Собханғолдан янһарылар юҡ", – тип тә әйткән ти бит. Быға өҫтәп, тағы ни тиһең… ауылыңа, ауылың ҡосағында назға сарсап иркәләнгәндәй бормаланып-бормаланып ағып ятҡан йылғаңа әйләнеп ҡарайһың да, күңелдә тыуған төйәк, йәшәйеш хаҡында шиғыр шыбырлай башлай…

Был ерҙә борон-борондан
Йәшәгән ата-бабам.
Үҙ затымдың шәжәрәһен
Кинәнеп әйтә алам.

Олатайҙарҙан мираҫҡа
Ҡалған бик матур төйәк.
Уны биҙәп, нурлап йәшәү –
Бына шул минең теләк.

Һәр тарафым: тауҙар, тауҙар…
Урман менән ҡапланған.
Һарағының булды микән
Берәй мәле аҡмаған?..

Юҡтыр, йылға аға, аға,
Ашығып аға алға.
Әйтерһең дә, ғүмер аға,
Быуынға-быуын ялғап… [1]

Тауҙар, ҡаялар, түбәләр

Яланғастүбә. Ауылдың төньяғындағы ҡалҡыу тау. Элегерәк битләүенең һәм түбәһенең яланғасы ҙурыраҡ ине. Йылдар уҙа килә бирге итәгендәге ағастар олпатланып, яланғасы ҡыҫырыҡланды. Ҡырҙан ҡараһаң, түбәтәй дәүмәле генә. Бер йылы шиғыр ҙа сығарғайным:

Яланғастүбә, әйтерһең, күбә,
Ауылдан беҙгә шулай күренә.
Тау түбәһенә менеүсе кеше,
Һайлай ҙа юлын, шунан үрелә.
Өҫтәге юлдан үр һәүетемсә,
Текәлек менән көсөң самалай.
Ынтылһаң тура, ҡырынлығы бар,
Йөрәккенәңде ҡурҡыу ҡамалай.
Яланғастүбә ауылға баҡҡан,
Иң ҡалҡыу түбә - ғорур тау беҙҙә.
Ҡыҙыҡһынһағыҙ, килеп ҡайтығыҙ,
Юл һайлап үргә, менербеҙ бергә.
Яланғастүбә аша ятҡан тауыбыҙ.

Ике үркәсле Әүҙектегә, берәү әйтмешләй, "Кавказ тауҙары менеп тиңләшерлек" армыт-армыт Капчал тауҙарына юл бара. Тауҙың арғы яғы ҡуйы урман. Ә аҫта таҙа һыулы тау шишмәһе сылтырай...

Карағаслы бейек. Ҡарағаслы бейек - ҡаршылағы ғорур тау. Бейеклеген иҫбатлау өсөн ҡышҡы ҡыҫҡа көндәрҙә ҡояштың тау түбәһенән ауылға саҡ-саҡ ҡына күренеп ҡалыуын әйтеү ҙә етә. Гүйә, ике байып, ике ҡалҡҡандай.

Исеме үк әйтеп тороуынса был тау күберәгеп ҡарағас урманы менән ҡапланған. Шуға ла ҡарағастарҙың энәһе һарғайған осорҙа тау усаҡ дөрләткәндәй балҡып тора.

Ҡарағаслы бейектәге урмандың ике тапҡыр ҡырҡылыуына шаһит боронғо ауылдаштар. Тик бүтән делянкалағы һымаҡ уҫаҡ йәки сауҡа ҡаплап алмаған тауҙы, йоҡо ерҙе тишеп ҡарағас үҫентеләре шытып сыҡҡан һәм матур булып үҫкән. Күрәһең, тау битләүе үҙенең ереккән ағасына тоғролоғон ныҡ һаҡлай, ә ҡарағас аҫабалыҡ тамырын тәрәнгә ебәргән!

Ҡарағаслы бейек түбәһенең арғы ауышы яланғас асыҡлыҡ. Унан Байғаҙының Ураҙы тауы, Аҡбейек, Бөрйән тауҙары, үҙебеҙҙен яландар һәм аҡландар, ағасы ҡырҡылған делянкалар, оло юл айырым-асыҡ күренеп тора.

Ҡарағаслы бейектең бирге битләүендә, ҡарттар һөйләүенсә, элегерәк ҡуян, төлкө, ҡоралайҙар тулып йөрөгән. Ә арғы яғында болан, һеләүһен, бүре, айыу иркенләгән.

Һикһәненсе йылдарҙа тауҙын урта тошон ҡырҡып оло юл һалғаны бирле йәнлектәр ауылдан ситләште. Элекке менән сағыштырғанда, ҡоштар тауышы ла һирәкләнде.

Бөгөнгө Ҡарағаслы бейек - еләк, көртмәле, бөрлөгән, бәшмәк кеүек ниғмәттәр төйәге. Ауылда шун- дай ырым йәшәй: Ҡарағаслы бейек битләүендә ҡар бөттөмө - йәйгә аяҡ баҫтыҡ тигән һүҙ.

Түгәрмә. Ауылдың көнсығышындағы ике тауҙан хасил ул. Берейһен Оло Түгәрмә, икенсеһен Бәләкәй Түгәрмә тип йөрөтәләр. Беҙ былай айырып тормайбыҙ, икеһен бергә Түгәрмә тибеҙ ҙә ҡуябыҙ. Биргеһе беҙгә ныҒыраҡ яҡын, бәләкәй саҡтан 1, 9 май көндәрендә баллондар тәгәрәләтеп мендереп, пионер усаҡтары яғып, тауға эҫенеп бөткәнбеҙ. Шуғала һүҙем шуныһы тураһындараҡ.

Түгәрмәне Түгелмә тиеүселәр ҙә бар ауылда. Ҡалай ҙа дөрөҫ. Сөнки исеменең килем сығышы: таш

тәгәрәләп, ололар әйтмешләй, “түгәрмәләп” һәм түгелеп ятыуға бәйле.

Тауға менгән һырты һөҙәк һуҙымлы, ә битләү яғы текә. Әммә ҡыйыу егеттәребеҙ саңғыла ла һәм… трактор(!) менән дә тапҡыр төшкән осраҡтар бар.

Түгәрмәнең ысынға оҡшаш легендаһы йәшәй халыҡ телендә. Имеш, Граждандар һуғышы ваҡытында аҡтар тау түбәһенән, ҡыҙылдар аҫтан пулеметтарҙа атышып ятҡандар. Ҡыҙылдар позицияларын ҡорған урында өй һалған Сәфиуллин Илшат ҡусты, бер йылы картуфы баҡсаһынан пулемет патрондары табып, музейға бирҙе. Шул тирәләрҙә электән окоп ҡа

оҡшаған соҡор-саҡырҙар ҙа була торғайны.

Түгәрмә түбәһе ауылдаштарҙы, ҡунаҡтарҙы, айырыуса балаларҙы һәм йәштәрҙе үҙенә тартып, саҡырып тора. Яҙғыһын тау ҡарҙан эрселеү менән тауға үрмәләй башлайҙар. Өҫтән ауыл ус төбөндәгеләй бик күркәм күренә.

Һил төндә Түгәрмә өҫтөнән Мәғнит шандағы ла һыҙатланып беленә. Элек ауылдаштарыбыҙ Түгәрмә тапҡырында фотоға төшөргә яраткан. Ауылға килеп ингәндә урамдын үрге осонда көҙгөләй яҡтырып иң элек күҙгә ташланған матурлыҡ - Түгәрмә тауы! Үҙәк урамға ҡот өҫтәп тора ул.

Әйткәндәй күрше Ҡолғана, Байғаҙы һәм Яуымбай ауылдарында ла үҙҙәренен Түгәрмәләре бар. Уларҙа нисектер, ә бына беҙҙә иртән торғас иң тәүҙә Түгәрмәгә күҙ һалыу ғәҙәте бар. Сөнки ҡояш беҙҙә Түгәрмә артынан ҡалҡа...

Әүҙәкте. Урал армыттары – яланғас түбәле тау теҙмәләре… Күпте күргән, маңлайҙары һырланған, уйсан аҡһаҡалдарға оҡшатам мин аҡ ҡылғанлы, һуйыр ташлы, яланғас түбәле тау теҙмәләрен. Уларға баҡһаң, бүлкәт-бүлкәт тау ҡуйындарынан аттар кешнәгән, ҡыңғырауҙар сыңғыраған, тауморонондағы киртләс-киртләс таштарға баҫып моңло берәү ҡурайҙы берсә һыҙландырған, берсә ҡыуандырған, тау итәгендәге итле ҡаҙан аҫтына яғылған усаҡ тирәһендә ҡыҙ-ҡырҡын сыуалған, арыраҡ сыр-сыу килеп бала-саға уйын ҡорған, бирерәк күп йәшәгән сабыр инәйҙәр, күгүләнгә йәйелгән балаҫ йәймәгә ултырып, ил хәлдәре, үҙ әхүәлдәре хаҡында һөйләшкән һымаҡ тойолоп китә. Ауылдың төньяҡ-көнсығыш яғындағы яланғас түбәле тау теҙмәләре иғтибарҙы айырыуса үҙенә тарта. Әүҙекте… Ата-бабаларыбыҙ нилектән был түбәлестәргә шундай исем бирҙе икән? Был, моғайын, һәр кемде лә ҡыҙыҡһындыралыр. Бөрйән районы Әбделмәмбәт ауылының хәҙерге тракторҙар гаражы урынында (үткән быуат урталарында) йәшәгән Иглек ҡарттың өйөр-өйөр йылҡылары була. Һәр яҙ һайын Иглек бабай алты улына урман тарафтарына (ҡыш урталарында) таралған йылҡыларын эҙләп алып ҡайтырға ҡуша. Малайҙары һәр яҙҙа ла, һәр эҙләгәндә лә йылҡыларын әлеге Әүҙекте битләүенән килеп табалар. Аттар был яҡтағы яланғас түбәле тауҙарҙа иртә күтәрелгән ҡурпыға киләләр икән. Өҫтәүенә ҡышҡыһын тау түбәһендә ҡар һай була. Йылҡыларын ураған һайын был тирәләрҙән әүҙекләп алып ҡайтҡан малайҙарҙың тәкәте ҡорой. Бер ҡайтҡанда аталарына: “Атай, шул яҡтарҙа ҡурпыһы иртә күтәрелер, түбәһендә ел-ҡар ятмаҫ бейек – бейек тауҙар бар. Аттар шунда тартыла.

Ташморон. Ауылдың төньяғындағы тауҙар теҙмәһенен түбәнге осон шулай атайҙар беҙҙә. Түбәһендә эре-эре таштар өйөмө - алпамышалар ҡоролмаһы тип уйларлыҡ! Шул таштар араһында бер йылы уҡыусылар менән яҙыу таптыҡ. “Исҡужин Муса. 1965.” тиелгән.

Ауылдашыбыҙ Исҡужин Муса Бөйөк Ватан һуғышында була, ҡаты яра ала. Иң ҙур наградалары: III дәрәжә Дан ордены һәм маршал Коневтын Маҡтау ҡағыҙы. 1969 йылда вафат була.

Ташморондоң элекке ваҡыттарын өләсәйҙәр һағынып һөйләр ине. Иҙәндәй тигеҙ ташлы ҡыуышыраҡ ере була. Өләсәйҙәр бала саҡта шунда өй ҡороп уйнай. Эргәләге тарбаҡ ботаҡлы кәрлә ҡарағай, йәнәһе, теген машинаһы.

Ташта ултырғанлыҡтан, буйға үҫмәгән ул ҡарағай 70-енсе йылдар аҙағындала бар ине. Радио һәм телефон сымдарын аша үткәреп, байтаҡ йылдар бағана ролен дә башҡарҙы.

Беҙ малай саҡта ла Ташморон күтәренке, мөһабәт булды. Аҫта Һарағы йылғаһы, тапҡырҙа ғына ике ятыу: Өлкән ятыу, Бәләкәй ятыу, тип йөрөттөк уларҙы. Өлкәненда өлкәнерәктәр, Бәләкәйендә бәләкәйерәк ҡыҙҙар- малайҙар йәй буйы һыу төшөр инек. Һыуҙа баҡалай супылдашып ятабыҙ ҙа, Ташморондоң теге шыма ташында ҡояшта ҡыҙынабыҙ. Был мәлдәрҙә хатта ожмахың да ары торһон һымаҡ.

Ташморондоң арғы яғында зыярат булды. Ҡәберлек буралары һәм таштары хәтерҙә ҡалған. Бесәнлеккә - Оҙонсал буйына беҙҙең юл шунан үтә ине. Беҙ бәләкәс малайҙар: Кәбир ҡустым да мин ағайға эйәрәбеҙ. Атай буралар янында туҡтала: арьяҡҡа сығып булмаған, яҙ үлгәндәрҙе

бында ерләгәндәр, бынығы шул инәйегеҙ, ә бынығы шул апағыҙ ҡәбере, ти. Фазулла олатайҙың улы Исҡужин Хөсәйендең исеме генә иҫкә инеп ҡалған.

Нух ағай Көмөшбаев:

- Ташморон аргында 17 кеше ята, Кордондан да килтереп ҡуйҙылар, - ти торғайны.

1974 йылдың мартында Әбделмәмбәт, Килдеғол бригадалары үҙаллы "Урал" колхозы булып ойошто. Рәйесе - Таштимер ағай Әлибаков. Таштимер ағай үҙе лә тынғылыҡ белмәне, кешеләрҙе лә нығ эшләтте.

Ауылға әрмәндәр килеп тулды. Ферма торлаҡтары һала башланылар. Ситтәрҙең һинең тәбиғәтендә, тарихында эше бармы ни, баяғы зыярат таштары ла, Ташморондоң эре-эре тигеҙ таштары ла юҡҡа сыҡты, төҙөлөш эшенә яраны.

Бригадала техника, мал күбәйҙе. Һарағы йылғаһының ағышы үҙгәрҙе, ярҙар емерелде, һыу һайыҡты, ятыуҙар юҡҡа сыҡты, муйыллыҡ, таллыҡ кәмене, еректәр ҡороно.

Быуаттар буйы ғорур торған Ташморон да һуңғы 30-40 йыл эсендә тарҡалып, сүгеп ҡалғандай. Тик исеме генә үҙгәрмәне. Сөнки уға был яңғырауыҡлы матур исемде иң күркәм саҡтарында ата-бабаларыбыҙ үҙҙәре биргән бит!.. [1]

Ҡышлау. Ҡышлауҙы әллә шул яҡтарҙа үткәреп ҡарайыҡмы?" – тиҙәр. Иглек ҡарт аҡ һаҡалын һыйпап, кеткелдәп көлә: "Минең йылҡыларымды әүҙекләп торған ул ниндәй мөғжизәле, тылсымлы тау һуң ул. Булмаһа, Килдеғол улым, шул яҡтарҙы һыбай ҡарап әйләнәйек әле", - ти. Аттар ылыҡҡан тау ҙа оҡшай Иглек олатайыбыҙға. - Ысынында, бик арыу тауҙар икән был яҡтарҙа. Иркенлектәре ниндәй! Йылҡыларымды тиккә әүҙекләмәгән икән", - ти бабай. Һуңынан 1812-1814 йылдарҙағы Ватан һуғышында йөрөп ҡайтҡас, Килдеғол, ағай-энеһен эйәртеп, малай саҡтарында күңеленә йылы тойғо ҡалдырған әлеге ауылыбыҙға килеп нигеҙ ҡора. Был яҡтарға үҙҙәренең, йылҡыларын әүҙекләп килтергән тауҙы иҫкә төшөрөп "Әүҙекләүсе тау", "Әйҙүктау" тип йөрөтөр булалар. Әүҙекте атамаһы, шул "Әйҙүктау" һүҙенән килеп сыҡҡан да инде.

Түгелмә тауы. Ауылдың һул яғында Түгелмә тауы бар. Ул бик бейек, ауылдың буйынан-буйына һуҙылып китә. Тауҙың бите яланғас, йәшмә ташы күп. Шул таштар аҫҡа тәгәрәй-тәгәрәй түгелеп ята. Шуға күрә лә ул тауҙы "Түгелмә тауы" тип атайҙар. Хәҙерге көндә тауҙы Түгәлмә тип кенә йөрөтәләр. Тауҙа август айҙарында бәшмәк күп була, ә кистәрен йәштәр иң бейек түбәһендә усаҡ яғып, күңел асалар. Ауыл уттарын күҙәтеүе – үҙе бер һоҡланғыс күренеш.

Бүре ҡырған тауы. Был тауҙа бүреләр күп йөрөй, һәм һәр ваҡыт малдар күпләп ҡырылып тора. Быр йылы малдар нығ ҡырыла. Ошонан һуң исеме "Бүре ҡырған" булып ҡала.

Ҡыҙҙар киткән тауы. Был ерҙә йәйләү урынлашҡан. Бер заман бик күп еләккә сыҡҡан ҡыҙҙар аҙашып ошо йәйләүгә килеп сығалар. Йәйләүҙекеләр уларға юл өйрәтеп, сәй эсереп ебәргәндәр. Ҡыҙҙар имен - аман үҙҙәренең тыуған ауылына ҡайтып еткән.

Аҡбалсыҡ ҡаяһы. Ҡаяла балсыҡ күп, ул балсыҡтан ғына тора тиһәк тә яңылышмаҫбыҙ. Ауыл халҡы мейесен аҡларға шул балсыҡты килеп ала. Мейес аҡ ҡына булып китә.

Көрәште тауы. Был тауҙа сейә күп. Элек сейәне ауылдың ҡыҙҙары күмәкләшеп барып йыйып алып ҡайтыр булғандар. Көрәште тауының исемен ике төрлө аңлаталар. Һуғыш булған тау бик текә юл шунан үтә, тауға йөк менән йәйәү күтәрелеүе бик ауыр була, көрәшә-кәрәшә менергә кәрәк булған. Шуға "Көрәште" тип атағандар

Ҡаттансыҡ тауы. Был тауҙы иғтибарлап ҡараһаң, бер ҡаты балсыҡ, бер ҡаты тупраҡ. Шулай ҡатлы-ҡатлы булып урынлашҡан. Шуның өсөн тау “Ҡаттансыҡ” исемен алған да инде. Тауҙа аҡбалсыҡ, ҡыҙыл балсыҡ бигерәк күп.

Ҡашҡат тауы. Бер ир-егеттең яҡшы ғына ҡашҡа аты булған. Шунан быны аты ҡапыл ғына юғала ла ҡуя. Бер үҙе эҙләй-эҙләй тапмағас, тыуған-тыумасалары менән бергәләшеп эҙләйҙәр. Бик оҙаҡ эҙләгәндән һуң, арып-талып ял итергә ултыралар. Үҙ-ара һөйләшәләр. Аттың эйәһе ҡайғырып: “Ҡашҡа ат ҡайҙа икән?” – ти. Шунда бер туғаны: “Һағынбайҙар һаҡҡолаҡ була торғандар, ҡысҡырып һөйләмә, ишетеп ҡалырҙар ҙа лаҡап итеп һөйләрҙәр”. Ысынлап та, шул тирәлә яҡында ғына Һағынбайҙарҙың береһе тыңлап тора. Шунан алып был тауҙы “Ҡашҡат” тип йөрөтә башлайҙар

Йылғалар, шишмәләр, кисеү

Оҙонсал йылғаһы. Был йылға ауылдың башында урынлашҡан. Ул оҙон булып, өйөрөлөп-өйөрөлөп, салынып аға. Әҙерәк бара бирә лә, салынып, кире шул ергә килә һәм Үҙәнгә ҡоя.

Ыласын йылғаһы. Бында йылға буйҙарында кешеләрҙең бесәнлеге күп. Һәр бер ағаста тиерлек ыласын оялары бар. Улар һауала тауыш биреп осоп йөрөйҙәр.

Ялан йылға. Ҙур яланды урталай бүлеп, йылға ағып ята. Эргә - тирәһендә лә яландар күп.

Яландар, туғайҙар

Мулла туғайы. Ауылды сығып, Ҡолғана яғына киткәндә бер туғай үтеп китәһең. Был бесәнлек ере. Элек ғүмер буйы был бесәнлекте Йыһанур тигән мулла сапҡан. Хәҙер ул бесәнлек Билалов Мазһар олатайҙа. Йыһанур мулла үлгәс, был туғайҙы “Мулла туғайы” тип йөрөтә башлағандар.

Иген саттығы яланы. “Иген саттығы” ерендә элек-электән иген үҫтерәләр. Хәҙер бында “Урал” колхозы үҫтерә. Шуға был иген үҫкән ер “Иген саттығы” булып ҡалған

Оло һаҙ яланы. Оло һаҙ бесәнлегендә, ҙур, тәрән батҡаҡлы күл бар. Имеш, төнөн был һаҙҙа шайтандар йөрөй.

Ете баш тамағы. Элек ғаиләләр бесәнде бергә эшләр булғандар. Кәбән ҡойоп, кәртәләп ҡайтҡандар. Ҡыш етеп, ҡар яуғас, ат менән урманға кәбән ташырға барғандар. Кәбән төбөнә еткәс, төбөндә ете һарыҡ башы күреп ҡалалар. Бүреҙар ашап йөрөгән. Һуңынан был тамаҡ “Ете баш” булып ҡала.

Муйыл түбә яланы. Муйыл түбә яланында әрәмә буйында муйыл күп. Шул әрәмәнең түбәһендә генә элек-электән ҙур муйыл ағасы бар. Емеште күп бирә, эре лә.

Караңғыуй (Үргеҙма). Ауылдарыбыҙ рәсми исем алған, халҡының иҫәбе алынған йылдарға тиклем мал бағыуға, донъя көтөүгә уңайлы, аулаҡлығы, иркенлеге, тәбиғәтенең иҫ киткес хозурлығы менән йәндәрҙе арбаған әлеге йәнтөйәгебеҙҙә әллә күпме быуат әллә нисә быуын ғүмер иткән инде. Быны һәр тарафыбыҙҙағы күп һанлы, өҫтәүенә, тәрән мәғәнәле, күбеһе боронғолокто сағылдырған ер-һыу атамаларыбыҙ ҙа иҫбатлай.

Килдеғол ауылынан Һарағы йылғаһы буйлап түбәндә, ете саҡырым самаһы аҫта ята Ҡараңғыуй тигән ер. Ул тирәләге ҙур-ҙур яландар Ҡыпсаҡ бригадаһына ҡарай: элегерәк иген сәсһәләр, хәҙер айырым кешеләрҙең сабынлығы.

Ҡараңғыуйҙың тарихы бик тәрәнгә китә. Уны хатта Әбделмәмбәт, Килдеғол ауылдарын барлыҡҡа килтереүсе төбәк - тәүтөйәк тип тә билдәләйҙәр.

Туҡһанынсы йылдар уртаһында ауылыбыҙҙың аҡһаҡалы, төбәк тарихы буйынса киң мәғлүмәтле Нух ағай Көмөшбаев (1930-2005) мине ата-бабаларыбыҙҙың боронғо ыҙмаһы (был ерҙе Үргеҙма тип тә йөрөтәләр) - Ҡараңғыуйға алып барҙы. «Был изге ер, ниндәй сәбәптәндер боронғо олатайҙар тәүҙә ошо ергә нигеҙ ҡорған, - тип һөйләгәйне шул мәлдә Нух ағай. - Бәлки, урыҫ батшаһының берәй оронсоғо тейеп, күсепме-ҡасыпмы килгәндәрҙер, уныһы беҙгә ҡараңғы инде. Әммә кеше аяғы баҫмаған ергә, ҡараңғы уяға тиккә килеп ултырмағандарҙыр»...

Миңә шуныһы ҡыҙыҡ тойолдо: әлеге ауылыбыҙҙың көнсығышындағы мәғрүр Түгәрмә тауҙарының, әйтерһең дә, күсермәһе ине бында. Шул уҡ теҙемле, яланғас түбәләләр, тик тәпәшерәк булыуҙары менән генә айырылалар. Нух ағай менән, уның элекке самалауы буйынса, боронғо зыяратты, ҡәбер таштарын эҙләнек, әммә таба алманыҡ. Күрәһең, етмешенсе йылдарҙағы коршовка, йәғни яландарҙы киңәйтеү ваҡытында улар ер менән тигеҙләнеп юҡҡа сыҡҡан.

1912 йылғы Нәғимә инәй Илсеғолова: «Олатайҙар, Ҡараңғыуйҙа ҡайын бурама нигеҙҙәре булды, тип һөйләй торғайны» , - тиер ине. Ул нигеҙ урындары ла хәҙер беленмәй инде. Әммә ҡасандыр бында ҡаҡ ҡайын бурамалар булыуы хаҡында әйтеп ҡалдырылыуы-ата-бабаларыбыҙҙың ялан яғынан килгән булыуҙарына, төҙөлөштә, ғәҙәттәренсә, тәүҙә ҡайын ағасына өҫтөнлөк биреүҙәренә дәлил һымаҡ. Әйткәндәй, яуымбайҙар ҙа һуңынан Әбделмәмбәт ауылынан айырылып сыҡҡан. Яуымбай ауылының боронғо атамаһы Ҡайынөй - был да күп нәмә хаҡында һөйләй.

Күп һыуҙар ағып, байтаҡ йылдар уҙғас, XVIII-XIX быуаттар сигендә, ата-бабаларыбыҙ әлеге Әбделмәмбәт, Килдеғол ауылдары еренә күсенеп ултырған. Ә тәүтөйәктәре - Ҡараңғыуй, йәғни Үргеыҙма, ундағы, бәлки, ҡайнап торған боронғо тормош - алыҫ тарих төпкөлдәрендә тороп ҡалған… [1]

Муйылтүбә. Килдеғол ауылынан байтаҡ үрҙә Муйылтүбә исемле киң билдәле, берәү әйтмешләй, ауыл булып ултырмалы ҡотло ер бар. Ололар һөйләүенсә, атамаһы урындың муйылға мул төбәкле булыуына бәйле килеп сыҡҡан. Ҡушма һүҙҙең халыҡ телендә еңеләйтеп яһалыу юлы: Муйыллы төбәк - Муйылтөбәк - Муйылтүбә.

Был төбәккә бәйле шундай хәтирәләр, тарихтар һаҡлана.

Беҙ бәләкәй саҡта, алтмышынсы йылдар аҙағында, бында ҡайынлы- ҡарағайлы урман эсендәге ҙур булмаған асыҡлыҡ ине. Арыраҡ ферма һарайы, ә был яҡта, асыҡлыҡтың ҡалҡыу урта тошонда, ике бүлмәле йорт булды. Атай, әсәй, Кәбир ҡустым һәм мин бесән осоронда был йортта күп йоҡланыҡ. Бер саҡырым тирәһе үрҙә ятҡан Айыуһаҙында атайҙар бесән сапты. Беҙ ҙә, бәләкәс малайҙар, шунда мыштырланыҡ. Бирелейортҡа һыуға барып килергә (һаҙлыҡ булһа ла, Айыуһаҙында эсәр һыу булманы), усаҡ яғып сәй ҡайнатырға эшкиндек. Кис төшөүгә Муйылтүбәләге «өйөбөҙгә»йүнәләбеҙ. Айыуы бар сабынлыҡта, беҙ ҡурҡыр, тип атай ҡыуышта йоҡлатмағанды һуңынан ғына әсәйҙән ишеттек (атай һуғыш яралары ҡуҙғалып, башына яһалған икенсе операциянан һуң, 1971 йылда 53 йәшендә генә вафат булды). Йылдар үткәс, сабынлыҡ ситендәге йыуан ҡарағай төбөндәге ҡыуышта йоҡлаған ваҡыттар ҙа күп булды.

Шулай итеп, ҡараңғы төшөүгә Муйылтүбәгә киләбеҙ. Атай ҙур итеп усаҡ дөрләтеп ебәрә, әсәй Муйылтүбә йылғаһында йыуып килтергән кәзә итен сүлмәк тултырып бешерергә һала. (Әйткәндәй, ул заманда ауылда иң күп кәзә көткән ғаилә беҙҙеке булғандыр, моғайын. Үҙенсәлекле ала кәзәләребеҙ ауылда әллә ҡайҙан айырылып торҙо, айырым көтөү булып тау ҡырлап тулып йөрөрҙәр ине). Кәзә итен хәҙер генә һанламайҙар, ә беҙ кәзә, болан, һуйыр ите ашап үҫкән малайҙар.

Иң тәү көн килгәндә атай йорт тирәһендәге оҙон үләндәрҙе саба, беҙ йүгереп йөрөп уны өй эсендәге урындыҡҡа ташыйбыҙ. Танауҙы ярып барған әскелтем әрем, киндер еҫтәре аңҡып торған йәш үлән өҫтөнә атай йөкмәп килтергән түшәк-ҡаралтылар йәйелә. Тиҙҙән йәш кәзә ите бешеп тә сыға һәм урындыҡ уртаһына түшәлгән ашъяулыҡҡа ҙур булмаған табаҡ менән килеп тә ултыра. Ул арала ҡуйы төн ҡараңғылығы тирә-яҡты ялмай. Йорттоң асыҡ ишегенән шул тапҡырҙа ғына ялбырап янған усаҡ яҡтыһы өй эсенә һүрәнке генә булһа ла яҡтылыҡ төшөрә. Ошо илһамландырғыс ярым ҡараңғы йорт эсендә татлы ыуыҙ итте кинәнеп ашап, һурпа эсеп алабыҙ ҙа әүен баҙарына китәбеҙ. Муйылтүбәләге ошо сихри кистәр күңелем төпкөлөндә бала сағымдың иң сағыу хәтирәләренең береһе булып һеңеп ҡалған.

Атай менән әсәйҙең шул ваҡытта һөйләшкәндәре хәтерҙә. Әсәй был тирәнең атамаһы менән ҡыҙыҡһынып, ә ҡайҙа бында муйыллы түбә тип һорай, ә атай: «Борон Муйыллы төбәк тигәндәр был ерҙе, йылдар үткәс, Муйылтүбәгә әйләнеп киткән», - ти.

Илленсе йылдар аҙағында Муйылтүбәлә колхоз малдары өсөн һарай төҙөлә, ауылға бесән ташыу ауырлығын уйлап, бер-нисә йыл һауын һыйырҙарын бында ҡышлаталар.

- Мал аҫтын санаға тейәп үҙебеҙ сығарып түктек, шул сана менән үҙебеҙ эргәләге кәбәндәрҙән бесән ташып ашаттыҡ. Йылғала алмашлап мәке уйыр, һыйырҙарҙы шунда төшөрөп һуғарыр инек, - тип һөйләй Башҡортостандың атҡаҙанған малсыһы, хеҙмәт ветераны Сәүҙә апай Усманова.

Колхозға тракторҙар ҡайтарылып, хужалыҡ бер аҙ хәлләнгәс, ферма ҡышлауға ауылға күсерелә.

1974 йылда Әбделмәмбәт, Килдеғол бригадалары «Ағиҙел»дән айырылып, «Урал» исемле үҙаллы колхоз булып ойошто. Рәйесе йәш, белемле, энергияһы ташып торған Таштимер ағай Әлибаков ине. Ул тәүҙән үк ең һыҙғанып эшкә тотондо: хужалыҡтың малсылыҡ тармағын үҫтереү өсөн ҡырсылыҡҡа баҫым яһаны, сәсеүлек ерҙәрен киңәйтеү башланды. Ҡеүәтле тракторҙарҙа Муйылтүбәне лә танымаҫлыҡ итеп үҙгәрттеләр, ағастарын тамыр-томоро менән һөрөп, асыҡлыҡтан ҙур ялан яһанылар. Беҙҙе үҙ ҡосағында йылытҡан, күңелдә йылы хәтирәләр ҡалдырған теге изге йортто һәм мал һарайын үртәүҙәре генә күңелде әрнеткәйне ул алыҫ йылдарҙа.

Хәҙер Муйылтүбә колхоздың уңдырышлы иген баҫыуы иҫәпләнә. Быйыл унда һоло үҫтерҙеләр.

Яландың бер яғында битен ҡояшҡа ҡуйған ҡаялы тау. Түбәһендә сейә уңа торған, ә битләүендә, шағир әйтмешләй, »ҡурай еләк тә ер еләк».

Ялан ситендәге үҙәктәрҙә бесән сабалар. Ә аҫта ҡаршы тау ҡуйынынан инеш алған Муйылтүбә йылғаһы сылтырап аға. Элек ул шарлап аҡҡан ҙур йылға ине, матур ғына кисеүе лә булды, һуңынан, оло юл һалынғас, кисеү таш күпер аҫтында ҡалды.

Йылғаның ике яғын ҡуйы муйыл ҡыуаҡлыҡтары ҡаплаған. Исеменә күрәлер инде, муйылы мул, үҙенә башҡа эре һәм тәмле.

Хәҙер яландан ҡайтырға сыҡҡандағы бейек һәм текә ҡаршы тауҙы ла Муйылтүбә тауы тип йөрөтәләр. [1]

Бирелейорт. Бәләкәй саҡтан беҙ ен, убыр, шайтан, шүрәле, мәскәй әбей, бире хаҡында күп ишетеп үҫтек. Шундай заттар барлығына ышандыҡ та хатта, яңғыҙ урманға барыуҙан тыйылдыҡ, төндәрен урамға сыҡмаҫ инек. Был, үҙенә күрә, шаян-шаталаҡ баланы һәр төрлө хәүефһеҙлектән ҡурсалауҙа мөһим алым да булып торған.

Әсәйемдең әсәһенең әсәһе Ғөбәйҙә өләсәйҙе беҙ ҡартөләсәй тип йөрөттөк. Күпте белгән талантлы тел эйәһе ине ул - экиәттәрҙе, бәйеттәрҙе көйләгәндәй генә итеп һөйләп ултырыр ине. Һуңғы йылдарында һуҡырайҙы, әммә беҙ Сәғүрә, Мәрйәм апайымдарға эйәреп, ҡартөләсәйҙең хәбәрҙәрен тыңларға тип йүгерешеп йөрөр инек. Ен, убырлы ҡарсыҡ, биреләр хаҡында тәүҙә унан ишеткәнбеҙҙер ҙә әле. Һуңғараҡ ҡыҙы Хәнифә өләсәйем, әсәйем, күрше-күлән инәйҙәр ҙә

шундай ҡурҡыныс ят заттарҙы ҡыҫтырып күп ваҡиғалар һөйләрҙәр ине. Хатта ауыл тирәһендә Бирелейорт тигән ер барлығын, уның мажаралы тарихы булыуын да белеп үҫтек.

Ауылдан үрҙә, Муйылтүбәнән бейек булмаған ҡалҡыулыҡ аша ята Бирелейорт. Һөйләүҙәренсә, бында борон йәй миҙгелендә ҡыуыштар ҡороп «тотош ауыл булып» ятҡандар, бесән эшләгәндәр. Ҡашҡат, Олоһаҙ буйҙарына ла бесәнгә йөрөгәндәр, әммә төп торған урындары ошо төбәк булған. Ғәҙәттәге бер көндө бесәнселәр арып-талып эштән ялға туҡтайҙар. Былар ашап-эсеүгә көн кискә ауыша, ҡараңғы ла төшә. Усаҡ тирәләй әңгәмә ҡороп, ваҡиғалар һөйләшеп ултырғандан һуң, йоҡларға тип ҡыуыштарға таралышалар. Дөрләп янған усаҡтар һүрелә һәм быҫҡыуға ҡала. Усаҡ төтөнө төн томанына үрелеп - һарҡыуға, ялан ситендәге йылға буйына төшөп ята. Ҡыуыштағылар инде йоҡлап киттек тигәндә генә уларҙы шомло, шау-шыулы тауыштар уята. Бына бер ваҡыт баяғы йылға буйлап үренә ҡарай күҙгә күренмәҫ тотош халыҡ ағымы ығы-зығылы күсенә башлай. Көслө тауыштар йән өшөтә: ҡатындар сеңләп һыҡрана, балалар илай, ирҙәр шаулаша, һыйырҙар, һарыҡтар баҡыра, аттар кешнәй, әйҙә, әйҙә, һәш-һәш, тпрү-тпрү, берә-берә, һәш-һәш, тип мал ҡыуалауҙар башлана. Күсенеү төнө буйы бара, таң һыҙатланыуға ғына уйһыулыҡ тынып ҡала. Ҡыуыштағылар йоҡо әҫәре күрмәйҙәр, ҡурҡыуҙар, ҡот осоуҙар күп була. Эш, ҡыуыш ҡайғыһы китә, иртән торалар ҙа, әйберҙәрен төйнәп, биреләр күсенгән был тирәнән йәһәтерәк китеү яғын ҡарайҙар. Шул замандарҙан бирле был ер Бир(е)лейорт булып йөрөй. Быға са колхоздыҡы ине, хәҙер ауылдаштарҙың пай ере.

Бирелейорттан Муйылтүбәгә ҡалҡыулыҡ аша сыҡҡан трасса - электр линияһы буйы минең сабынлығым. Шуны ла әйтеп китмәй булмай: мәктәп асылып, 1990 йылда ауылға күсеп ҡайтҡас, урындағы түрәләр миңә сабынлыҡ ере «таба алманылар», ул саҡтағы мәктәп директоры менән беҙҙе «ныҡ хәстәрләп», бесән эшләргә Ҡолғана ауылы аша йәһәннәм төпкөлөнә ебәрҙеләр. Бер йыл барып ятып бесән эшләнек тә, икенсе йылына йөрөмәнек, бөтә кеше рәхәтләнеп бесән эшләгәндә беҙ ҡатыным (ул да уҡытыусы) менән трасса таҙаланыҡ, ботаҡ өйөп, усаҡтар яҡтыҡ. Ярай, ул йылы бесәнебеҙ наҡыҫыраҡ булһа ла, уның ҡарауы, бына тигән шәхси сабыным бар хәҙер. Быныһы һүҙ ыңғайы. Ҡыҙыҡ күреп, ҡатын менән бер йылы ошо сабынлығымда бесән эшләгәндә Бирелейорт ситендә ГАЗ-52 маркалы автомашинамдың кузовында йоҡланыҡ. Төн тып-тыныс булды, Аллаға шөкөр, биреләр күсенмәне, тик шуныһы, «замана биреләре» генә мотоциклда, атта һыбай тегеләй-былай үтеп торҙолар, беҙҙең янда туҡтап, тәмәке һорап китеүселәр ҙә булды…[1]

Ахун уяһы. Килдеғол менән Байғаҙы ауылдары араһы 18 саҡрым. Борон-борондан халыҡ аралашып йәшәй: ҡыззарын кейәүгә биреп. килен төшөрөп ҡоҙалашып, туғанлашып бөткән. Ике ауыл араһындағы бер төбәкте Ахун уяһы тип йөрөтәләр. Ул атаманың тарихын ике вариантта һөйләйҙәр.

Килдеғол ауылынан 1930 йылғы Көмөшбаев Нух Исмәғил улынан яҙып алынған буйынса уның тарихы ошолай бәйән ителә.

Ахунйән ағайҙың ҡатыны Хәйерниса еңгә Байғаҙынан булғас. Ағай ҡәйнештәренә ҡунаҡҡа йыш йөрөр ине. Алтмышынсы йылдарҙа була был хәл.Ҡышҡы буранлы бер көндө Байғаҙыға китеп баралар былар. Оло яланға сыҡмаҫ борон Ахунйән ағай бер уяла атын ҡарағайға бәйләп тора ла йәһәт кенә ҙур болан атып ала. Тиреһен һыҙырып күстәнәслек ит бүлеп ала ла ҡалған итте ҡарға күмеп китә.

Байғаҙыла ҡәйнештәр ихлас ҡаршылай еҙнәне, матур ҡунаҡ итәләр. Һый еткәс, еҙнә кешенең теле сиселеп, болан хаҡында һөйләп ташлай.

Ҡәйнештәргә мутлыҡ эшләү мәрәкә бит инде, еҙнә йоҡларға ятҡас, ат егәләр ҙә сабалар боланлы урынға.

Ике-өс көн ҡунаҡ булып туйғас, Ахунйән ағай еңгә менән ҡайтырға сыға. Итте тейәп алырға тип теге төбәктә туктаһа, ит юҡ, тире менән тояҡтар ғына ятып ҡалған. Һай. Шайтан алғыры. Ҡәйнештәрҙең генә эше был, һемәйттеләр асыҡ ауыҙ еҙнәләрен,- тип көлә ахунйән ағай. Ахун уяһы атамаһы шунан ҡалған, ти Нух ағай.

Байғаҙы ауылынан 1932 йылғы Сабитов Яхъя ағай был тарихты үҙенсә һөйләй.

Ул уя байғаҙы ауылы биләмәһенә инә. Беҙең ауыл бесәнселәре оло яланға ҡушып ул ерҙе лә саба торғайнылар. Бер йылы бесән мул булды. Ундай йылдарҙа аҙау кәбән ҡалдырһаң икенсе йылға иркенерәккә килә.

Совхоздан бесән ҡабул итергә комиссия килеп төшә. Урындағы етәкселәр алдағы йылды уйлап бесәнде бөтә иҫәпкә индермәҫкә булалар.

Комиссия Оло яландағы кәбәндәрҙе үлсәгәндән һуң. Теге уялағы кәбәнгә ыңғайлайҙар. Шул саҡ ауылдыҡылар бер тауыштан һөрәнләп ебәрәләр:

-Унығы беҙҙеке түгел, һарағы ауылы Ахунйәндеке!

Шулай итеп Байғаҙылар икенсе йылға запас бесән алып ҡалалар. ә ауыл халҡы ул ерҙе ҡыҙыҡ күреп *"Ахун уяһы"* тип йөрөтә башлай. [1]

Шәрифә туғайы. Килдеғол ауылының үр яғында, уң яҡтан барған юлдан аҫта, һыу буйында ята Шәрифә туғайы –йәтеш кенә бер кәбәнлек сабынлыҡ ер. Элек сабылмай, эре-мары алып, малдың тапандыһы булып ятты. Бер йылдары Ғәлина Бибиғәйшә балалары менән бесән эшләгәйне. Аҙаҡ хаҡлы ялға йәштәре етеп, йәйләүгә йөрөмәй башлағастары Фәниә менән Зөбәйер Шәриповтар был туғайҙы көртәләп, сабынлыҡ итеп тәрбиәләп алдылар. Башҡортостандың атҡаҙанған малсыһы Зөбәир ағай мәрхүм инде, ә ҡатыны, Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены кавалеры, заманында районның данын күтәргән һауынсы, хеҙмәт ветераны Фәниә апай, хәҙер йылда ла кеше ҡушып эшләтеп, һәүетемсә генә бер кәбән ултыртып ҡуя Шәрифә туғайында. Шулай итеп ер-һыуҙың ҡото ҡайтты. Атамаһы ла яңынан терелгәндәй булды.

Был ер элек Шәрифә тигән инәйҙең сабыны булған.

Шәрифә Әбйәлил районының Әхмәт ауылы ҡыҙы. Ауылдашыбыҙ Һағынбаев Можаһитдинға кейәүгә сыға. Бөйөк Ватан һуғышы осоронда йәше буйынса һуғышҡа ярамағас Можаһитдинды ФЗО-ға алалар, Белоретта заводта эшләй. Ҡатыны ауылда ҡала, йорт усағын һүндермәй, балаларын көтә. Малдан өҙөлмәҫкә тырыша, бесәнде ауыл осондағы әлеге туғайҙа эшләй."Бик үткен, сос, баҫҡан урынында ер һелкетеп йөрөгән ҡатын ине Шәрифә еңгә. Үҙе телгә оҫта, шаян кеше булды. Минең бер туған ағайымдың әбейе ул. Һуңынан ағайым янына, ҡалаға барып йәшәп, шунда үлеп ҡалды."—тип һөйләй Хәшиә апай Вәлиева.

Шәрифә менән Можаһитдиндың балалары: Ғәбделхай, Зәкирә, Сәкинә, Ғәбдинур, Кәбир, Нәҙир, Хәбир.

Һуғыштаң һуң Можаһитдин ғаиләһен Белоретҡа күсереп ала, балаларын уҡытырға, кеше итергә тырыша. Баш балалары Ғәбделхай һуғышҡа алынып, яу ҡырында башын һала. Ҡыҙҙары Зәкирә Байғаҙы ауылында, Сәкинә Белоретта йәшәнеләр. Ғәбдинур Белорет заводында маҡтаулы крансы булып эшләй. Өсөһө лә мәрхүмдәр инде. Кәбир менән Нәҙир уҡытыусылыҡҡа уҡып сығалар. Кәбир-- Әбделмәмбәт, Нәҙир Байназар мәктәбендә эшләп китәләр. Белоретҡа күсеп барып йәшәйҙәр, хәҙер хаҡлы ялдалар. Хәбир Башҡортостан ауыл хужалығы институтын тамамлай, яуаплы урындарҙа эшләй. Һуңғы эш урыны-- Өфө янындағы Черниковка ҡасабаһында торлаҡ-йорт хужалығы начальнигы. Ул да хаҡлы ялда.

Шәрифә менән Можаһитдин Һағынбаевтар (икеһе лә 1896 йылғы) татыу, оҙон ғүмер итеп фани донъялыҡҡа күсәләр. [1]

Сатра. 1928 йылғы Хәшиә апай Вәлиеваның һөйләүенән:

-Шәрифә туғайынан арыраҡ ята Сатра тигән ер. Хөсәйендең сабыны. Ана хәҙер ҡатыны Рәзифә саба.

Элек был ерҙә Биби исемле инәй бесән эшләне. Тулы исеме Бибиъямал. Һағынбаев Шаһимырҙандың ҡатыны, Хәйҙәр, Фәриттәрҙең әсәһе.

Биби ти ҙә ҡуя торғайнылар.

Сатрала бесән сапҡан мәленә тура килтереп таҡмаҡ та сығарып ҡуйғандар.

Биби инәй бесән саба,

Сатра тигән туғайҙа.

Биби инәйҙең майына,

Туймай ике турғай ҙа.

Етешһеҙ генә йәшәне ул әбей. Малайҙар ашарға һорай бит, ҡотайтмайҙарҙыр инде, етешһеҙ, ас саҡ бит, ойор-ойомаҫтан эсеп бөтәләр ҙә ҡуяларҙыр. Шуға ойотҡан ойоғансы малайҙарын урманға алып сыҡҡан да әүерәтеп, тау өйрәлтөп алып йөрөп торор ине, бахыр.

Сатра нимә аңлатҡандыр, белмәйем. Ҡыҫынҡы ер, сабынлыҡ, шуға Сатра тигәндәрҙер. [1]

Мулла туғайы. Ауыл үрендә, Ҡолғанаға киткән юлдың уң яғында, Һарағы йылғаһы буйында матур ғына туғай бар. Мулла туғайы тип йөрөтәләр уны. Борон ауылда дин көслө булған. Ауыл уртаһындағы мәсет ҡалҡыу ерҙә тирә йүнгә йәм бөркөп, кешеләрҙе үҙенә йәлеп итеп ултырған. Диндарлыкта Һағынбайҙар заты өҫтөнлөк тотҡан. Һағынбайҙың улы Сабитулла даны сыҡҡан дин әһеле була. 1862 йылда имамлыҡ Указы ала. Ҡустыһы Әхмәтулла ла муллалыҡ итә. Ҡатыны Бәҙеғол менән балаларында ла иман рухы тәрбиәләргә тырыша улар. Улдары: Һиҙиәт--ауылдағы мәсеттең мәҙине була, ә Хәйрулла менән Йыһанур күренекле муллалар.

Р.Н.Мәһәҙиевтың 1916 йылда Ырымбурҙағы “Ваҡыт”нәшриәтендә баҫылған “Дамулла Ғабдулла хәҙрәт Сәйетбаттал уғлы Муллаҡай”исемле китабында беҙҙең диндар ауылдаштарыбыҙ хаҡында ла ҡиммәтле мәғлүмәттәр бар. Муллаҡай мәҙрәсәһендә белем алыусылар араһында улар ҙа булған. 9-сы биттә “Орск өйәҙе Ҡарағай-ҡыпсаҡ волосы Килдеғол (Сарағы) ауылында имам-хатиб Хәйрулла Әхмәт улы, мөъәҙин Һидиәтулла Әхмәт улы”тиелә. Ә “10-сы биттә “Мәҙкүр заттың(бында данлыҡлы хәҙрәт Абдулла(Ғабдулла) күҙ уңында тотола. (М.Ф.) шәкерттәренән имам булмаһалар ҙа, ғилемлеләренән үә әхлаҡлыларынан бәйән итәм,” тиелә, һәм һанап кителгән диндарҙар араһында ауылдашыбыҙ исеме лә телгә алына: “Ҡарағай-ҡыпсаҡ волосы Килдеғол ауылында Йыһанур Әхмәт улы.”

Ауылыбыҙҙың мәсет тотҡан һуңғы муллаһы ла ул—Йыһанур Әхмәт улы Һағынбаев. 1861 йылғы, кустарсылыҡ менән шөғөлләнгән. Үҙ донъяһын үҙе көтөп, халыҡты иманға әйҙәп йәшәһә лә совет власына оҡшамаған, мәсетен ябалар, үҙен совет йәмғиәте алдында ғәйепле һанап 1932 йылда хөкөм итәләр. Төрмәнән ҡайтып һуғыш алдынан вафат була.

Йыһанур мулла тыныс тормошонда бесән сапҡан, намаҙ уҡыған баяғы туғайҙы диндарға ихтирам йөҙөнән һуңынан ауылдаштары Мулла туғайы тип йөрөтә башлайҙар.

1928 йылғы Мазһар ағай Билалов олатаһының сабынлығын кәртәләп бесәнлек итте. Мәрхүм инде. Әммә Һағынбайҙарҙың быуыны ата-олаталары нәҫеле сылбырын дауам итә. Хәҙер Мулла туғайында Мазһар ағайҙың улы Айрат бесән эшләй.

Был күркәм туғай “Шәжәрә”, “Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!” байрамдарында халыҡты үҙенә ылыҡтырып, саҡырып торғандай. Хужаһынан рөхсәт алып, Мулла туғайында - изге урында байрамдар үткәреү - дин әһеле рухына рәхмәт белдереү билгеһелер, бәлки. [1]

Сафый туңы. “Әлеге Сафиуллин Мөхәмә өйө ултырған ҡабаҡты ҡарттар Сафый туңы тип йөрөтөрҙәр ине, - тип һөйләгәйне 1926 йылғы Хәйбулла ағай Миндеғолов, - Был урында борон Сафиулла Көмөшбаевтың йорто булған. Исемен фамилия итеп йөрөткән олатаһы нигеҙендә тора Мөхәмәт”. Ни өсөн туңмы? Ҡаҡ ташлы ҡалҡыу ҡабаҡ бит, шуның өсөн шулай тигәндәрҙер инде, тип тә өҫтәгәйне уҙаман ауылдашым.

Сафиулланың атаһы Әхмәтйән, олатаһы Көмөшбай ауылдығы Көмөшбаевтарҙың етенсе-һигеҙенсе быуыны. 1992 йылда Өфө дәүләт архивынан алып ҡайтҡан мәғлүмәттәәремдән күренеүенсә, Көмөшбайҙың фамилияһы Аҡкужин, 1816 йылда уға 45 йәш була. Ҡатыны Көнбикә-50, ҡустыһы Ҡорманғолға 41 йәш. Улы Ҡылсыҡбайға – 7, ҡыҙҙары Шәрифәгә-10, Шәфиғәгә 6 йәш. 1934 йылғы яҙмала Көмөшбай Аҡкужиндың ике ҡатыны күрһәтелгән.

Көнбикәгә (Кинбикә тип яҙылған) – 68, Ҡормабикә 36 йәш, 1-се ҡатынынан улы Килгибай (шулай теркәлгән) 25 йәштә, 2-се ҡатынынан балалары: Шаһиәхмәт, Әхмәтйән (4 йәштә), Әхтәм, Биасултан.

1930 йылғы Нух ағай Көмөшбаев: "Олатайҙар тәүҙә ауылдан ете саҡырым тирәһе түбәндә ятҡан Ҡараңғыуйҙа торған. Ҡыпсаҡтан Килдеғол ҡарт килеп, әлеге ауылыбыҙ урынына нигеҙ ҡорғас, ауыл булһынтиптер инде, Көмөшбаевтарҙы бында саҡырған", - ти торғайны. Үҙе иҫән саҡта мине борон ыҙма булған Ҡараңыуйға алып барҙы.

Сафиулланың уландары Исмәғил, Сәмиғулла, Ишмөхәмәт

Сөмиғолла (3 балаһы етем ҡала), Ишмөхәмәттең улы Шәйхинур Бөйөк Ватан һуғышында һәләк булалар. Исмәғилдең уландары Шәһит менән Нух, Шәһит (1913-1980) һуғыштан Ҡыҙыл байраҡ ордены менән ҡайта. Колхозда эшләй. Ҡатыны менән дүрт ҡыҙ бер ул тәрбиәләйҙәр. Шәһит бабай улы Мөхәмәткә олатаһы нигеҙенә йорт һалдыра.

Мөхәмәт менән ҡатыны Зөләйха малсылыҡта эшләп пенсияға сыҡтылар. Биш балаларын ир еткереп, һҙаллы тормош юлына баҫтырҙылар. Бөгөн йорт-ерҙәрен ҡотайтып, матур ғүмер итәләр.

Сафый туңы… Сафиуллиндарҙың йорто торған ябай ғына ҡабаҡ һәм уның атамаһы ана күпме тарихты аҡтарырға, кешеләрҙе барларға мөмкинлек бирә. [1]

Хәҙрәт кисеүе. Хәтеремдә, ауыл осонда, Ташморондан ары Һарағы йылғаһы түбәнендә, һыуы күгелйем генә булып йәйелеп ағып ятҡан матур ғына кисеү була торғайны. Унан ат арбаһында ғына аша сығып, түбәндәге сабынлыҡтарға: Тирмән туғайы, Һыйыр төбәге, Ҡырсымәле, Күперауыҙ, Кисеүауыҙ туғайҙарына, Томоз, Сейәле яр тигән ерҙәргә бесәнгә йөрөрҙәр ине. Юл һәр ваҡытта ла матур, таҡыр кисеү таҙа, ике яғындағы ҡуйы муйыл, тал "урмансыға" һыуға еткәнсе башын эйеп, һығылып-бөгөлөп торор ине. Был тирәне беҙ, малайҙар, бик яраттыҡ. Бирге яғындағы Фәтхел туғайында быҙауһар ҙы көтөп йөрөйбөҙ ҙә, балаҡтарҙы төрөп, яланаяҡ кисеүҙе аша сығабыҙ һәм атай-олатайҙар һалабаш батырған ҙур булмаған күлдән барып сыбыртҡы ишергә йүкә "шылдыра" торғайныҡ.

Йылдар үтә килә тормош та, тәбиғәт тә үҙгәрҙе. Тракторҙар һыу юлын борҙо, матурлыҡты боҙҙо һәм юкка сығарҙы, теге кисеү яҡты ғына хәтирә булып тик күңелдә ҡалды.

Ул кисеүҙе Хәҙрәт кисеүе тип йөрөтәләр. Ауылдаштарым хәҙрәттең исемен белә алманылар, совет осоронда дин тураһында һөйләргә ҡушманылар бит, беҙҙән алдағы быуын белгәндер ҙә, һорашып ҡалмағас, беҙ беҙ белмәйбеҙ шул, тинеләр.

Совет власы нығынып киткәнгә тиклем беҙҙең ауылда ла дин көслө була. Ауыл уртаһында биш балҡып ултыра. Дини йолалар теүәл үтәлә. Ауылдашыбыҙ Һағынбаев Сабитулланың 1862 йылда алған иманлыҡ Указын ҡәҙерләп һаҡлайым мин.

Ауылда айырыуса Һағынбаевтар, шулай уҡ Миндеғоловтар, Исҡужиндар, Ҡорманғоловтар һәм башҡалар араһынан да дин тотҡан кешеләр була.

Хәйбулла ағай Миндеғолов янына һуңғы барғанымда: "Һиңә ҡала инде, Мөнир, ер-һыуҙы онотторммау, Хәҙрәт кисеүе урынына "Урыҫ юлы" на ҡуйған һымаҡ яҙыу ҡуй, изге урын бит", - тине (был яҙмаларымды уның яҡты рухына бағышлайым) ошо һүҙҙәрен йөрәгем түренә аманат һымаҡ ҡабул иттем. [1]

Ҡырсынмәле тарихы. Ауылдан Һарағы йылғаһы буйлап түбәндә, Күперауыҙ, Киеүауыҙ туғайҙарынан бирерәк, Ҡырсынмәле тигән ер бар. Ололар һөйләүе буйынса, элек колхозлашыу осоронда, был ерҙәр минең Фәйзулла олатайымдың ата-олаталарынан күсә килгән аҫаба ере булған. Бөгөн ут күршеләремдең сабынлығы.

Ҡырсымғәле атамаһына килгәндә, Ҡырсынмәле йәки Ҡырсүмәлә тип атаусылар ҙа бар. Бер йыл Нух ағай Көмөшбаев (1930-2005) менән олатайҙарҙың борон торған төйәге Ҡараңғыуйға барып ҡайтышлай, был ерҙә туктал ғайныҡ. Шунда аҡһаҡалға туғайҙың

аталышының дөрөҫ варинтын белергә теләп һорау биргәйнем, ул: “Тере атамалар ҙа дөрөҫ, тарихтары тап килә, тик туғай халыҡ телендә еңел әйтелешкә һалынып һәм рәсми яҙмала Ҡырсынмәле булып йөрөй”, тигәйне. [1]

Ҡырсынмәле. Һарағы йылғаһы элек тулы һыулы, көслө ағымлы булған. Яҙғыһын төбөндәге ҡырсынташтарҙы ла урынынан ҡуҙғатып, өйөрөлтөп-өйөрөлтөп ағыҙып, яры буйындағы туғайһарға сығарып һалған.

Һыу ҡуша туңған йылдарҙа яҙғыһын ҡалын боҙ ҡатламы аҡтарылып ағып, йылға үҙәненә һыймай, туғайға сығып ҡайырылып ятып ҡалған. Боҙ ирегән, ә төбөндәге ҡуша туңған ҡырсынташы туғайҙа “төйәкләнгән”.

Һарағының шундай” эшмәкәрлектәренән” һуң ҡырсынташлы ағым мәле иҫтәлегенә “Ҡырсынмәле” атамаһы йоғоп ҡалған, ти оло ауылдаш. [1]

Ҡырҡсүмәлә (1 вариант). Борон олатайҙар биләмәләр тотоп, малға таянып бай йәшәгән. Ҡуйҙары, йылҡылары ер баҫып йөрөгән. Шундай бай олатайҙарҙың береһе, ауылға килеп, ҡайҙа барып баш төртөргә белмәй аптырап йөрөгән бер етем татар малайын үҙенә индерә һәм ялсылыҡҡа ала.

Малайҙың тамағын туйҙырып, өҫ- башын бөтәйтә лә, бесән мәле булғанлыҡтан, уны йәһәтләп Һарағы түбәнендәге сабынлығына алып барып ташлай. “Бына һиңә, улым, салғы, һәнәк. Ҡыуыш ҡороп ал. (Һарыҡ та һуйып килтерергә була бай) итеңде йылғаға таш менән батырып ҡуй, боҙолтмай ашарыңа яҙыр. Ас йөрөмә, урман тулы ризыҡ: эттек, һарына, емеш-еләк, йылғала балыҡ,-ти.

- Йәйеңде ошонда үткәрерһең, малыма бесән эшләрһең, эшеңә ҡарап ҡышында ашатып-эсереп, аһырап сығарырмын”.

Көҙ етә. Ялсы малай һәнәк-салғыһын күтәреп ауылға ҡайта. Бай уны ҡаршылап: “Йә, һөйҙәп ебәр, улым, күпме бесән эштәнең?» - тип һорай. “Ҡырҡ чүмәлә, бай абый, ҡырҡ чүмәлә!”- ти ялсы, бик эшлекле ҡиәфәттә. (Татарса “чүмәлә” беҙҙеңсә күбә була икән).

Ҡыш буйына малай үҙе бесәнде байҙың аттары менән ташып, уның малдарын ҡарай. Үҙенә тәғәйен малдарға (байҙа ялсылыҡта тағы бер-нисә ир-ат була) бесәнде саҡ-саҡ еткерә.

Ҡыш, яҙ етеп, бесән осоро еткәс, ялсы малайҙа тағы шул төбәккә ебәрә бай.

Был юлы ла малай, көҙгөһөн ауылға ҡайтҡас, байҙың һорауына: “Ҡырҡ чүмәлә эшләдем, ҡырҡ чүмәлә”, - тип яуап бирә.

Тағы ла өс –дүрт йыл байҙа ялсылыҡта була хәҙер инде үҫеп килгән егет. Һәр йәйҙә лә шул туғайлыҡта бесән эшләй. Эшенең һөҙөмтәһенә килгәндә, яуап ғәҙәттәгесә: “Ҡырҡ чүмәлә!”. Бай, күрәһең ваҡсыл булмағандыр, һәр ваҡытта ла малайҙың нисә күбә бесән эшләгәнен барып тикшереп тормай, өҫтәәүенә, белеме лә, “йылҡыларының кәртәгә тығыҙ тулып тороуҙарынан сығып ҡына уларҙың теүәл булыуына ышаныуҙан” уҙмаған.

Ялсы ла наҙан булған. Күрәһең, ҡырҡ һанының арыу ғына һан икәнлеген белеп ҡалған да, баға яраү өсөн шуны әйткәндер. Әйтәйек, ҡырылмаһа ҡырҡ эшем ҡырылып ята, тип эштең күп булыуын белдереү халыҡ телендә нығынған бит.

Атаманың икенсе варианты ошондай мәкәрә тарихҡа килеп сыҡҡан, тиҙәр. [1]

Ҡырҡсүмәлә (2 вариант). Көн иткән төйәгебеҙҙең әйләнәһендә генә лә йөҙҙән ашыу ер-һыу атамалары бар. Ғәлимә инәй Шәрәфуллина миңә уларҙы бик тәфсирләп яҙҙырҙы. Ата-олатайҙарыбыҙ һәр төбәккә лә, уларҙың үҙенсәлектәренә, тарихи ваҡиғаларға бәйләп килешле генә исем-атама ҡушҡан. Һеҙҙең менән беҙҙең бурыс – ана шул атамаларҙың килеп сығыу тарихын белә алған тиклем асыҡлау. Әле мин Һарағы йылғаһының түбәндәге ағымында, Кисеүауыҙ, Күмерауыҙ туғайлыҡтарынан бирерәк, түңәрәкләнеп, йәйелеп ятҡан туғай-сабынлыҡтарҙың атамаһының килеп сығыу сәбәптәрен, ололар һөйләүенән сығып, уның бер

вариантын һеҙҙең иғтибарға тәкдим итәм. Борон беҙҙең олатайҙар бик бай йәшәгән. Малдары, бигерәк тә йылҡылары ишле булған. Шундай бай олаталарыбыҙҙың береһе, ауылға килеп, ҡайҙа барып баш төртөргә белмәй аптыранып, өй беренсә теләнселәп, һоранып йөрөгән бер етем малайын үҙенә ялсылыҡҡа ала. Малайҙың өҫ-башын бер аҙ бөтәйтеп, тамағын туйҙырып алғас, бай уны Һарағы йылғаһы буйындағы сабынлығына алып барып ташлай. “Бына һиңә, улым, салғы, һәнәк. Ҡыуыш ҡороп ал. Ашарыңа урман тулы әттек, һарына, емеш-еләк, йылғала балыҡ. Йәйеңде ошонда үткәрерһең, малыма бесән эшләрһең. Эшеңә ҡарап, ҡышын ашатып, аҫрап сығарырмын үҙеңде”. Бай шулай ти ҙә, арбаһына ултырып, ауылға ҡайтып китә. Көҙ етә. Ялсы малай, һәнәк - салғыларын күтәреп, ауылға ҡайта. Бай тупһанан уҡ, уны ҡаршылап: “Йә, һөйләп ебәр, күпме бесән эшләнең?” – тип һорай. “Ҡырҡ чүмәлә, бай бабай, ҡырҡ чүмәлә!” – ти ялсы, бик эшлекле ҡиәфәттә. Ҡыш буйына малай, йәй үҙе әҙерләгән бесәнде байҙың аттары менән ташып, уның малдарын ҡарай. Үҙенә тәғәйен малдарға (байҙа ялсылыҡта тағы бер нисә ир-егет була) бесәнде саҡ-саҡ еткерә. Ҡыш, яҙ үтеп, бесән осоро еткәс, ялсы малайҙы тағы шул төбәккә ебәрә бай. Был юлы ла малай көҙгөһөн ауылға ҡайтҡас, байҙың һорауына: “Ҡырҡ чүмәлә, ҡырҡ чүмәлә”, - тип яуап бирә. Тағы ла өс-дүрт йыл байҙа ялсылыҡта була малай. Һәр йәйҙә лә шул туғайлыҡта эшләй. Эшенең һөҙөмтәһенә килгәндә, һәр ваҡытта ла яуап бер үк: “Ҡырҡ чүмәлә”. Бай бер ваҡытта ла малайҙың нисә күбә эшләгәнен барып тикшереп тормай, сөнки уҡыу-яҙыу танымағас, хисап-һан белмәгән тикшереүҙән ни фәтеүә. Өҫтәүенә, ялсы ла наҙан. Күрәһең, ҡырҡ һанын кемдәндер ишетеп ҡалғандыр ҙа, байға ярау өсөн шуны әйткәндер. Был ваҡиғаны ауылда бер мәрәкә лаҡапҡа әйләндереп, төбәкте “Ҡырҡсүмәлә” тип йөрөтә башлағандар. [1]

[1] Килдеғол мәктәбенең тарих уҡытыусыһы, хеҙмәт ветераны Фәйҙуллин Мөнир Абдулла улы

Яуымбай ауылы

18 быуыт уртаһында Әбделмәмбәт ауылы кешеһе Яуымбай Ҡушъетәров был ауылға нигеҙ һалған. Уның улы Шәһивәли, ҡустылары Үҙәнбай, Мөхәмәтәмин 1812 йылғы Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашалар. 1859 йылда бында 27 йортта 160 кеше йәшәгән. 1920 йылда 72 йортта 345 кеше йәшәгән. Был ерҙәрҙә йылҡы көтөүлектәре өсөн уңайлы була. Билдәле булыуынса, Яуымбай ҡарт бик бай булған. Өйөр - өйөр йылҡыларын ул яланға йыйып иҫәпләр булған. Ялан тулһа, малдар теүәл, ә тулмаһа малына бер - бер хәл булған. Ҡыш көнө улар тибен дә йөрөгән. Яҙ еткәс Яуымбай ҡарт йәйләүгә Үҙән буйҙарына киткән. Үҙе һәр ваҡыт алдан барыр булған. Көтөүе артынан эйәргән атһөйәр ҡарт ауылдан өс саҡырым алыҫлашыуға, көтөүҙең арткы осо саҡ ауылдан сыҡҡан.

Яуымбай ҡартты бөтәһе лә ихтирам иткән. Ул атһөйөүсе генә түгел, оҫта ҡурайсы, йырсы булған. Яуымбай ҡарт уйнаған көйҙәр быуындан - быуынға тапшырылып килгән. Һуңғы кешеләр, Сәлихов Әхмәҙиә, уның улы Сәлихов Ғәлимйән уның көйҙәрен беҙҙең көндә уйнаусылар булған. Ләкин улар мәрхүм инде. Шулай итеп Яуымбай ҡарттың һуңғы иҫтәлеге лә юҡҡа сыға. Ләкин уның исеме мәңгегә ҡала.

Бөрйән райондарындағы ауылдарҙың күпселеге 17-18 быуыттарҙа нигеҙҙә Бөрйән, Ҡарағай-Ҡыпсаҡ, Түңгәүер волостарына ҡараған. Был волостарҙың исеме үҙ сиратында ошонда йәшәгән ырыуҙың атамаһынан алынған.Ҡағиҙә буларак, йыш ҡына ауылдарҙың исемдәре ошо ауылды барлыҡҡа килтереүҙә ҡатнашҡан кешеләрҙең исеме йәки урындағы берәй атама менән бәйләнгән була. Йәки киреһенсә, урындағы халыҡтың кемлеген йыш ҡына тирә-яктағы атамаларға ҡарап та билдәләп була. Ҡарағай-Ҡыпсаҡ ырыуы ауылдарының иң боронғоһо Байназар ауылы иҫәпләнгән. Байназар ауылы нигеҙендә Мораҙым, Яуымбай, Әбделмәмбәт, Һарағы ауылдары барлыҡҡа килә. 1795-1811 йылдар араһында Үҙән йылғаһы буйында Әбделмәмбәт (икенсе исеме Ҡыпсаҡ) ауылы барлыҡҡа килә. Әбделмәмбәт ауылы кешеләре ике ауылға - Килдеғол (икенсе исеме Һарағы) менән Яуымбайға нигеҙ һала.

Беренсе ауылға (йәғни Һарағы) 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашҡан Килдеғол Иглик улы Ибраһимов нигеҙ ҡора. Килдеғолдоң Сәйфулла, Әбделвәхит, Йәһүҙә, Ғәйнулла исемле улдары булғанлығы билдәле.

Икенсе ауыл (йәғни Яуымбай) Яуымбай Ҡошйетәров исеме менән атала. Уның улы Шаһивәли, ағалы-ҡустылы Үҙәнбай, Мөхәмәтәмин Ватан һуғышында ҡатнашҡандар. 1859 йылда бында 27 өйҙә 160 кеше йәшәй. 1920 йылға 72 өйҙә 345 кеше йәшәй, 2010 йылға ҡарата даими йәшәгән урыны булып иҫәпләнгән халыҡ һаны 436 кеше тәшкил итә. (Яуымбай ҡарт был ауылға нигеҙҙе яҡынса 1800-1815 йылдар араһында һалған булырға кәрәк тип фаразлана).

Был ерҙәрҙә йылҡы көтөүлектәре өсөн уңайлы була. Билдәле булыуынса, Яуымбай ҡарт бик бай булған. Өйөр-өйөр йылҡыларын ул яланға йыйып иҫәпләр булған. Ялан тулһа, малдар теүәл, ә тулмаһа малына бер-бер хәл булған. Ҡыш көнө улар тибен дә йөрөгән. Яҙ еткәс Яуымбай ҡарт йәйләүгә Үҙән буйҙарына киткән. Үҙе һәр ваҡыт алдан барыр булған. Көтөүе артынан эйәргән атһөйәр ҡарт ауылдан өс саҡырым алыҫлашыуға, көтөүҙең артҡы осо саҡ ауылдан сыҡҡан.

Яуымбай ҡартты бөтәһелә ихтирам иткән. Ул ат һөйөүсе генә түгел,оҫта ҡурайсы,йырсы булған. Яуымбай ҡарт уйнаған көйҙәр ауылда быуындан – быуынға тапшырылып килгән. Сәлихов Әхмәҙиә, уның улы Сәлихов Ғәлимйән уның көйҙәрен беҙҙең көндә уйнаусылар булған. Ләкин улар мәрхүм инде. Шулай итеп Яуымбай ҡарттың һуңғы иҫтәлегелә юҡҡа сыға. Ләкин уның исеме мәңгегә ҡала. [1]

Тыуған ауылым Яуымбай

Тыуған ауылым Яуымбай
Ҡайнөй буйҙарында.
Һине генә һөйәм мин,
Һин генә уйҙарымда.
Шау сәскәгә төрөнгән,
Алыҫтарҙан күренгән
Аҡбейегемә ҡара,
Болоттарға үрелгән.
Ауыл ҡаршыһына баҫҡан
Һалдат кеүек Сусағым.
Яҙ етһә, гөрләп тора
Ҡабына йәштәр усағы.
Ҡыҙыл ташы, Ташөйө,
Шәрифәһе һәм Һөләй.
Барыһы ла был ерҙәр
Беҙгә сал тарих һөйләй.
Тыуған ауылым Яуымбай
Уйҙарымда һин гелән.
Бәхет тап тыуған ерҙә
Шуны хәҙер мин беләм. [2]

Берҙән - бер бөртөк автобусҡа лыҡа тейәлешеп Яуымбайға килеп төшәбеҙ. Ура, беҙ өйҙә! Шулай тойолор ине. Был яғы үҙебеҙҙең яҡ, ҡалай ҙа ҡайтып була, машина - фәлән дә көтөп тормайбыҙ, автобустан тешөү менән китәбеҙ йүгереп, Килдеғолом, ҡайҙа һин, тип. Яуымбай ауылы, уның кешеләре ғүмер буйы күңелгә яҡын, яҡты сырайлы булды, бына, исмаһам,

үҙебеҙҙең яҡ, үҙебеҙҙең яҡташтар, тиер инек. Оло юл сатында йәшәгән “капитан” бабай — Сәлихов Мөхәмәтйән ҡоҙам автобус көтөп оҙағыраҡ тороп китһәк, өйөнә саҡыра һалып индереп йылындырып сығара, бүтәндәр ҙә әйҙүкләп тора...

Шул саҡтарҙа уҡ Яуымбайҙың тәбиғәте, мәғрүр тауҙары күңелде әсир иткәйне. Нисәмә йылдар үткәс тә ул тауҙар менән ҡыҙыҡһыныу һүрелмәне. Ауылдағы оло кешеләрҙе барланым да, яңыраҡ 1938 йылғы Бирғәле ағай Ғиззәтуллингә барҙым.

Ауыл эргәһендәге ер-һыу, тауҙар менән “танышыуҙы” ***Ташөй****ҙән* башланыҡ. Ауыл түбәнендәге, бейек булмаған ҡая ҡуйынындағы был таш ҡыуыш районда киң билдәле тәбиғәт мөйөшө, унда йыл да әллә күпме туристар туҡтала. “Ташөйгә малай саҡта беҙ иркен инеп йөрөнөк, эсендә сылтырап ағып яткан шишмәһе лә бар,”- тип һөйләй Бирғәле ағай. Ташөйҙән байтаҡ өҫтә, ***Фәйзулла биләне*** тигән ерҙә ятҡан ***Сыңғырауыҡ*** та үҙенсәлекле тәбиғәт мөғжизәһе булып тора. Ҙур ҡаҙанға оҡшаған соҡор үҙәгенең “ауыҙы” ер аҫты мәмерйәһенә алып төшә. Атамаһының мәғәнәһе — ташланған таштың аҫҡа оҙаҡ ҡына сыңғырлап төшөүенән. “Ҡасандыр Сыңғырауыҡтан, имеш, бер этте төшөргәндәр ҙә, ул бер аҙнанан Ташөйҙән килеп сығып, мәмерйә алдында ятып үлгән, тигән хәбәр йөрөй торғайны, шул ысынмы?” - тип һорайым. “Булған ундай хәл, - ти Бирғәле ағай, - Сыңғырауыҡ менән Ташөй эстән тоташҡан. Етмешенсе йылдарҙа бер гео¬лог килеп тикшереп йөрөнө.

Сыңғырауыҡтың арыу ғына тәрәнлектә булыуын, аҫта ҙур залы барлығын, унан Ташөйгә юл китеүен асыҡланы”.

Ташөйҙән ҡояш әйләнеше буйынса ауыл яғына ыңғайлағандағы тәүге ҡаялы тау - ***Аҡташ***. Ташы эзбиз ҡушылмаһынан тора. Аҡташтан өҫтәге асыҡлыҡта борон тары сәскәндәр.

Артабан - ***Олотау***. Был яҡын тирәләге иң бейек түбәле тау. Исеме лә шунан. Өҫтә тамғаһы һымаҡ яңғыҙ ҡарағайы ла бар.

Олотауҙан ары ***Шәшке ҡасҡан үҙәге***. Атамаһына аңлатма ла кәрәкмәй. Элек ата-бабалар ҡиммәтле тиреле йәнлектәргә әрһеҙ һунар иткәндәр. Шәшке, һыуһар, тейен кеүек йәнлектәр аулау, берҙән, мауыҡтырғыс шөғөл булһа, икенсенән, ғаилә бюджетына аҙмы-күпме аҡса сығанағы ла булып торған.

Артабан - ***Саталыүҙәк.*** Ысынлап та, икегә айырылып, саталанып аҫҡа һарҡа был үҙәк. Унан ары - ***Сусаҡ тауы*** һәм ***Сусаҡ үҙәге***. Ә үҙәк аша ятҡаны ***Ҡаршытау*** исемле. Ҡаршытауҙың бер өлөшөн ***Йәйпегир*** тип йөрөтәләр. Артабан - ***Ҡолош үҙәге***. Был үҙәк беҙҙә иң таныулыһы, бөтәһе лә белә уны, ти Бирғәле ағай. Был үҙәктән ары ***Ташморон.*** Ташморондан ары ***Санатөшкән үҙәге***. Артабан ***Ологор***. Унан Аралғыр. Унан бире ятҡаны ***Шәрифә тауы***. Артабан ***Өмөткән.*** Ары ***Ҡоҙаш***. Унан ***Өкө ояһы***. Артабанғы тауҙарҙы икегә бүлеп, ***Бәләкәй Ҡыҙылташ, Оло Ҡыҙылташ*** тип йөрөтәләр. Хайран ҡалмалы, иңгә-иң терәшеп ятҡан бер тирәләге генә тауҙар ана күпме үҙаллы, тәрән мәғәнәле һәм күркәм атамаларҙан тора икән!..

Әбделмәмбәттәрҙең ***Өлкән Аҡбейек менән Бәләкәй Аҡбейек*** тауҙарын да үҙҙәренеке һымаҡ ҡәҙерле күрә яуымбайҙар. Шулай булмай, был мөһабәт тауҙар ауыл эсенән ап-асыҡ күренеп тора. Ә бире ятҡан тауҙы ***Бурама*** тауы тип йөрөтәләр. «Ауылдан сыҡҡас, тау артылып Ҡыпсаҡ яғына һеҙ ҡайтып киткән ҡалҡыуҙы Әрҙәнә үре тип йөрөтәбеҙ», - ти ағай. Исеме ҡалай матур, тип һоҡланыуымды йәшермәйем. Күпме уҙам ошо тау юлынан, ә исемен ишеткән-белгән юҡ ине.

Артабан ***Ситҡыр, Уртағыр, Бурташ, Һырт*** исемле тауҙар теҙелеп китә. Унан аҫта, ауыл түбәнендә ***Иҫке Ыҙма*** ята. Бында борон өйҙәр булған. Ферманың аръяғындағы ҡуйы урманлы бейек тауҙы ***Көнтеймәҫ*** тип йөрөтәләр. Исеме бик таман - бирге битләүенә йәйге оҙон көндәрҙә байыр алдынан ғына ҡояш нурҙары бер аҙ һирпелеп ҡала икән. Көнтеймәҫ бейеклектә Олотау менән бер тиңдә, ти. Көнтеймәҫтән һуң ***Дегәнәк***.

Артабан Майғойған исемле ҡалҡыулык. Аҫта ***Тумарҙыҡ ялан***. Ары ***Ҡарайғыр*** - элекке һабантуй майҙаны, сабынлыҡ. Алда ***Уҫаклыуй, Тарбаҡ,*** ә Тарбаҡтан аҫта ***Ҡайнөй*** йылғаһы... Унан, ана, Ташөй - ауылды урап сыҡтыҡ инде, ти Бирғәле ағай, төбәктең атамалы урындарын ҡулын һоноп бер-бер артлы төртөп күрһәтеп. Өҫтән, ауылдың өс яғынан ағып төшкән ***Арҡырыйылга, Ҡамышаҡ, Аралғыр*** йылғаларын ҡушылдығынан һуң бер исем менән - ***Ҡайнөй***

йылғаһы тип йөрөтәләр. "Әйткәндәй, ауылыбыҙ алты өлөштән тора. Мәһәҙей ягындағыһы Ҡартөй (ул яҡтағы урам да шул исемдә йөрөй), Әбделмәмбәт ягынан килгәндәгеһе ***Ялан осо,*** элекке мәктәп ултырған яҡ ***Баҙ яланы***, Ураҙғолов Әсәнйәрҙәр ултырған ер ***Ҡамышаҡ***, түбән яҡ Ҡайнөй һәм бөтәһе бергә **Яуымбай**", - тип һүҙен йомғаҡлай ошонда тыуып- үҫкән ҙур ғүмер юлы үткән ил ағаһы.

Шулай, ҡайһынаһын ғына алма, ауылдарыбыҙҙың тарихы бай, үҙенсәлекле. Тик уларҙы Бирғәле ағай кеүек рухлы ҡарттарыбыҙ барҙа ынйы-мәрйендәй берәмтекләп теүәлләп яҙып алырға, өйрәнергә генә кәрәк. [3]

Тауҙар, ҡаялар

Аблас тауы. Урыҫтар күпләп башҡорт ерҙәрен һатып алған дәүерҙә Аблас тигән ҡарт йәшәгән. Уның ерҙәре күп була. Аблас ҡартҡа ла урыҫ байы килеп ер һатыуын һорай, ләкин ҡарт ҡырт киҫеп ҡаршы тора. Шунан урыҫ байы хәйлә менән ҡулына төшөрөргә уйлай.

- Миңә күп ер кәрәкмәй бер үгеҙ тиреһе саҡлы ғына ла етә, - тип ҡартҡа ялбара башлай.

- Бик күп тә һорамайһыың икән, - тип Аблас ҡарт ер һатырға риза була. Шуны ғына көткән урыҫ байы тирене бик нәҙек кенә итеп телгеләргә бойора. Ошо үгеҙ тиреһенән эшләнгән еп уратып алырлыҡ ерҙе үлсәп тә ала. Был "үгеҙ тиреһе" эсенә Аблас ҡарттың бөтә ере лә һыя. Аблас ҡарт үҙенең отолғанлығын аңлай, тик әйткән һүҙ атҡан уҡ, килешеү төҙөлгән. Ерһеҙ ҡалған ҡарт хәҙерге Яуымбай ауылы ултырған төбәктә төпләнә. Шуға ла Яуымбайҙы ҡайһы саҡ ***Абласкин*** тип тә йөрөтәләр. Ә Аблас ҡарттың хәйлә менән лған ерендә урыҫ байы Әүжән заводың төҙөй. [4]

Арҡыры ҡыр. Ауылдың төньяҡ-көнсығышында бер саҡрым алыҫлыҡта Арҡыры ҡыр тауы Ҡыҙыл таш тауы менән Аҡбейек тауы араһында ята. Был тау Аҡбейек тауының алдында арҡыры ятҡанлыҡтан Арҡыры ҡыр тип атағандар.

Аҡбейек. Яуымбай ауылын тирә- яҡлап күп тауҙар уратып алған: Олотау, Шәрифә , Сусаҡтау, Ҡыҙылташ, Өкө ҡаяһы, Бурама тауы, Аҡбейек һ.б. Шул тауҙар араһында иң бейек ғорур тау ул Аҡбейек. Был тау исеменең килеп сығышы ике төрлө. Берәүҙәр әйтеүенсә, ул тау алыҫтан бик бейек булып ағарып күренеп торғас, уны Аҡбейек тип исемләгәндәр.

Икенселәр әйтеүенсә, бер ҡарт ике улын алып, урманға сығып киткән. Алдарында ҙур тау торған. Был тауға улдары йүгереп кенә менеп киткәндәр. Ҡарт менә торғас артта тороп ҡалған. Ул бик арыған һәм кәпәсен сисеп, бер ташҡа ултырған да: «Ах, бейек», тип әйткән, имеш. Шунан был тауҙы Аҡ бейек тип атағандар. [9]

Аҡташ. Ташөй мәмерйәһенә барғанда уң яҡтағы тау итәге Аҡташ исемен йөрөтә. Эргә тирәһе аҡташтарҙан тора.

Башарт. Ауылдан төньяҡ-көнсығышында алты саҡрым алыҫлыҡта урынлашҡан тау. Борон ҡаҙаҡтар барымтаға йөрөр булғандар. Ир-ат йәйләүҙәр ҙә һунарға йөрөгән осор ваҡытында ҡаҙаҡтар килеп ауыл халҡын, малын талап, йәш ҡыҙҙарҙы ла алып китәр булғандар. Бер ваҡыт һунарға киткән кеше булалар ҙа урмандан аңдыйҙар. Ҡаҙаҡтар килеп ауылды талай башлағас, уларҙы ҡамап үлтерәләр ҙә береһен генә ебәрәләр, аттарына үлгән ҡаҙаҡтарҙың башын ҡырҡып, кәүҙәләрен атҡа атландырып аҫып ебәрәләр. Шунлыҡтан тауға баш шарт, аҙаҡ Башарт булып аталған да инде. [8]

Бурһыҡ тауы. Был тауҙа бурһыҡ оялары күп булған. Шунлыҡтан тауҙы ла Бурһыҡ тауы тип атай башлағандар. Оло кешеләр һөйләһеүенсә әле лә ул тауҙа бурһыҡ оялары бар.

Бурама тауы. Элек был тауҙа бура бурағандар. Әле лә бура бурайҙар. Шунан алып тауҙы ла Бурама тигәндәр.

Дәгәнәк тауы, күпере, яланы. Был тауҙа, уның эргәһендәге күпер янында һәм яланында дегәнәк күп үҫә. Шунлыҡтан исем ҡушылған.

Дүртсемәле тауы. Ауылдан Мәһәҙей ауылы яғына барғанда беренсе тау шулай атала. Асфальт юлы булмаҫ элек юл дүрт сүмәле булған йәки дүрт тапҡыр боролошло булған. Дүрт сүмәле булғанлыҡтан шулай атағандар. [1]

Шәрифә тауы. (1 вариант). Ауылда элек бик матур Шәрифә исемле ҡыҙ йәшәгән. Уны ата-әсәһе көсләп үҙе яратмаған кешегә кейәүгә бирер булғас, Шәрифә өйөнән ҡасып китә. Тауҙа йәшенеп йәшәй. Шунан бирле был тау ҡыҙҙың исемен йөрөтә. [5]

Шәрифә тауы. (2 вариант). Элек ауылда Шәрифә исемле ҡатын йәшәгән. Төндә уны ендәр осороп алып китә. Ләкин уның балаһы бар икәнлеген белгәс, уны кире осороп бер тауға ташлап китәләр. Ауыл халҡы ҡатындың юғалғанын белгәс, эҙләргә сығалар. Оҙаҡ эҙләй торғас ошо тауҙа табалар. Шунан бирле тау Шәрифә исемен йөрөтә.

Уртағыр. Яуымбай ауылының көньяғында ике саҡрым алыҫлыҡта урынлашҡан. Ике тау Ситҡыр һәм Бурташ араһында ята. Шуның өсөн дә Уртағыр тип атала.

Һылыу түбә. Төньяҡ-көнсығышта дүрт саҡрым алыҫлыҡта был яланғас тауҙың (түбәһе) түбәләс булған. Шунлыҡтан Һылыу түбә тип атайҙар. Хәҙерге ваҡытта түбәләсте яйлап ағаслыҡтар баҫып килә.

Ҡыҙылташ (1 вариант). Элек, граждандар һуғышы осоронда, ҡыҙылдар яғынан бер яралы кеше ҡасып, бер тауға барып ята. Яраһынан аҡҡан ҡан ташҡа һеңә һәм ул ҡыҙыл төҫкә инә. Шунан бирле был тауҙы Ҡыҙылташ тип йөрөтәләр.

Ҡыҙылташ (2 вариант). 1917-1920 йылдарҙа аҡтар менән ҡыҙылдар әлеге Ҡыҙыл таш тауында һуғышҡандар. Мәһәҙей ауылы эргәһендә Яуымбай халҡы аҡтар килһә аҡтарҙы ҡыҙылдар килһә ҡыҙылдарҙы ҡаршы алғандар. Әгәр ҙә ҡаршы алып тормаһалар ауылдарҙы яндырырға тейеш булғандар. Һуғыш барышында пулялар баш осонан геүелдәп осоп торған, шуға күрә баҙҙа йәшенеп ултырғандар. Ҡыҙылдар аҡтарға ҡарағанда ла насар холоҡло булғандар: һәр өйгә инеп әйбер тентегәндәр, талағандар. Һәр кем ит-һөт икмәк башҡа аҙыҡ-түлек бирергә тейеш булған. Йә ҡаршылашһа Совет власына ҡаршы тип аҫып киткәндәр, йә атып үлтергәндәр. Зауыҡ, биҙәнес әйберҙәрен дә талағандар. Яралы һалдаттар менән өй тулаһы булып ашап-эсеп киткәндәр. Һуғыш бөткәс үлгән һалдаттарҙы Яуымбай халҡы ҡыҙыл ташҡа һәм һырт яҡҡа күмгәндәр. Ҡыҙылдарҙы шул таш яғына ҡыҫыраҡлап сигендереп атҡандар, шуға ла тауҙы Ҡыҙыл таш тип йөрөткәндәр. [6]

Ҡыҙылташ (3 вариант). Икенсе вариант буйынса, шул осорҙа ҡыҙылдарҙың ҡулында аҡтарҙың ике һалдаты торған. Бер мәл аҡтар ҡыҙылдарҙан ҡасҡан.Аҙаҡ уларҙы ҡыҙылдар күреп ҡалғандар һәм баҫтыра башлағандар. Аҡтар был мәлдә был тауҙа бер таш артында йәшеренеп тәмәке тартып ятҡандар. Был ике һалдатты табып атып ебәргәндәр. Шул ташҡа ҡып- ҡыҙыл булып уларҙың ҡандары аҡҡан. Аҙаҡ был тауҙы Ҡыҙылташ тип йөрөтә башлағандар.

Көнтеймәҫ тауы. Яуымбайҙан Байназар яғына барған бер саҡрым алыҫлыҡтағы тау атала. Ҡояш тауға төшмәгәнлектән Көнтеймәҫ тип атағандар, сөнки ҡояшлыҡты ҡуйы урманлыҡ ҡаплай, ҡыш көндәре ҡояш төшмәй.

Олотау. Ауылдың көнбайышындағы оло тау. Был тау бейек тә, оҙон да. Ауылдың тирәһендәге тауҙар араһынан иң бейеге һәм иң оҙоно. Шунлыҡтан был тауҙы Олотау тип атайҙар. Элек тау арҡаһында тары сәскәндәр. [13]

Осло ҡая (Пистолет ҡаяһы). Сусаҡ ослайып ҡалҡып сығып торған ҡаяға әйтәләр. Был ҡая әүәл пистолетҡа ла оҡшап торған оло юл өҫтө булғанға ҡая моронон киҫкәндәр. [6]

Олоғор. Ауылдың төньяғындағы иң бейек тау түбәһе шулай атала. Ауылды уратып алған тауҙар араһынан иң бейеге ошо тау. Шуның өсөн Оло ҡыр, Олоғор тип йөрөтөлә.

Өмөткән тауы. Ауылдың төньяҡ-көнсығышында саҡрым ярымлыҡта урынлашҡан. Ошо тауҙа бер ҡарт өмә яһап өйләк ағасын ҡырҡкандар. Шунан алып йылғаһын да, тауын да Өмөткән тип атала башлаған.

Түбәсек тауы. Ауылдың көньяғында бер саҡрым алыҫлыҡта Түбәсек тауы. Түбә берҙән ҡалҡыу, икенсенән яланғас булғанға әйткәндәр.

Үтә тишек. Оҙоной яланынан Бешәке йылғаһына төшкән ерҙә тау үтәнән – үтә тишек. Шунлыҡтан, аталған был тау Үтә тишек тип.

Сусаҡтау. Ауылдың ҡаршыһындағы тау шулай атала. Шул тауҙың сусағы ослайып ҡалҡып сығып торғанға атар булғандар. Яҙ йәштәр ошо тауға менеп төрлө уйындар уйнайҙар.

Сыбала айырыһы. Ауылдан төньяҡ-көнсығышында биш саҡрым алыҫлыҡта бер-береһенә олғашып ятҡан тау теҙмәләре атала. Сыбала исеме тауҙарҙың бер-береһенә олғашып ятҡанлыҡтан килеп сыҡҡан, ә айыры шул тау теҙмәләренән айырылып киткәнгә килеп сыҡҡан.

Ҡоҙаш. Был тау ауылдан ике саҡрым алыҫлыҡта төньяҡ-көнсығышында ята. Элек был ерҙә бер туй була. Туйҙа аш бешереп төрлө уйындар үткәрәләр. Ҡоҙалар яҡлап һый булғас, ҡоҙа ашы һүҙҙәренән Ҡоҙаш тип атап киткәндәр.

Ҡарағас түбә тауы. Мәһәҙей ауылына барғанда икенсе саҡрымдағы уң яҡтағы тау шулай атала. Ошо тауҙың түбәһендә ҡарағас ағасы үҫә. Шуға ла Ҡарағас түбәһе тауы тип атала. [19]

Салышаяҡ тауҙары. Ауылдың төньяҡ-көнсығышында биш саҡрым алыҫлыҡтағы тауҙар теҙмәһе шулай атала. Аҡбейек тауының түбәһенән ҡараһаң был тау теҙмәләре салыш аяҡҡа оҡшап тора. Оҡшатыу формаһында Салышаяҡ тауҙары тип йөрөтөлә.

Әрҙәнә үре. Ҡыпсаҡ ауылына барғанда беренсе тау. Ошо тауҙа элегерәк ҡайын утын әҙерләп әрҙәнәгә өйгәндәр. Шуға ла Әрҙәнә үре тип атала.

Йәйпеғыр һәм Ҡаршытау. Ауылдың ҡаршыһындағы тауҙы Ҡаршытау тип йөрөтәләр, йәғни Оло тауҙың бер бүлкәтен атағандар. Ҡаршы тауҙың итәгендә Йәйпеғыр тип аталған ер бар. Йәйпеғыр исеме йәйелеп ятҡанлыҡтан һәм бер яҡ сите йәки ҡыры менән бергә Йәйпеғыр тип йөрөтәләр.

Ташморон. Ауылдан оло юл буйлап Мәһәҙей ауылына барған яҡта йөҙ метр самаһы алыҫлыҡта һул яҡтағы ҡая Ташморон тип атала. Олоғыр тауы һырты тотошлайға таш менән ҡаплап алынған, шуның өсөн дә Ташморон тип атайҙар.

Әсеү тауы. Ауылдың төньяҡ-көнсығышындағы ике-өс саҡрым алыҫлыҡтағы тау. Был тауҙағы ҡайһы бер таштар әсе тәмле. Ошо таштар ярҙамында ауыҙҙы сайҡатҡандар. Теҙ һыҙлағанда һәм ауыҙ иҙелгәндә ярҙам иткән. Был тауҙа әсе таш булғанлыҡтан яланы, йылғаһы, тауы шундай атама алған.

Өкө ҡаяһы (1 вариант). Ауылдың көнсығышында бер саҡрым алыҫлыҡтағы ҡая атала. Был ҡаяла бөркөт, өкөләр оялағандар. Ауылдан бер әбей уларҙы ашатып йөрөгән. Шунан бирле ул ҡаяны өкө ҡаяһы тип атай башлағандар.

Өкө ҡаяһы (2 вариант). Борон бер өкө таш-ҡая араһында йәшәгән, ти. Ул таш-ҡая араһынан төрлө ҡорттарҙы ашар булған. Бер ваҡыт һунарсы һунарға сыҡҡан. Ул, оҙаҡ ҡына йөрөй торғас, бер мышы атып алған һәм ҡайтыр юлға сыҡҡан. Тағы берәй нәмә осрамаҫмы тип килә торғас, өкөгә тап була. Өкө таш- ҡая араһына инеп китә. Ҡарт был хәлде ауылдаштарына һөйләп бирә. Ауыл кешеләре был урынды Өкө ҡаяһы тип йөрөтә башлайҙар.

Һөләй ҡаяһы. Ошо Шәрифә тауында Һөләй ҡаяһы бар. Борон бер байға Һөләй исемле ярлы мал көткән. Ул ваҡытта дин тәмәке тартыуҙы ҡәтғи тыйған. Һөләй мал көткәндә генә йәшенеп тәмәке тартҡан булған. Ул тәмәкеһен шул ҡаяға йәшереп йөрөр булған.шунан бирле ҡаяны Һөйләйҡаяһы тип йөрөтә башлағандар. [5]

Яландар, туғайҙар, сабынлыҡтар

Байбулат яланы. Ауыдың төньяҡ-көнбайышында алты саҡрым алыҫлыҡта урынлашҡан. Был яланды колхозлашыу осоро иң беренсе булып сиҙәм аҡтарған, ер һөргән тракторист Байбулат исемле кеше менән атала.

Баҙялан. Ауылдың иҫке мәктәп ултырған урыны шулай атала.Элекке ваҡытта ауылға терәлеп ятҡан яланда тәрән баҙҙар ҡаҙып ҡайын туҙынан дегет ҡайнатҡандар. Дегет хужалыҡ эштәре өсөн кәрәкле әйберҙәренән иҫәпләнгән булған. Мал ауырыуҙарына ла дегет яҡшы дауа булған. Шул осорҙан бирле был яланды Баҙялан тип йөрөтә башлағандар. Бөгөнгө көндә лә бында барлыҡҡа килгән урамды Баҙялан урамы тип йөрөтәләр.

Балаган яланы. Арҡа яғында өс саҡрым алыҫлыҡтағы ***Фәйзулла типһәне, Янсаф сабыны, Хәбир сабыны, Нотай сабыны.*** Был ерҙәр кеше сабынлыҡтары булған. Шулар иҫтәлегенә сабынлыҡтары әле лә шулай әйтелә. [21]

Бикбай сабыны. Ауылдан оло юл буйлап Мәһәҙей ауылына барған саҡта уң яҡтағы икенсе ялан Бикбай сабыны тип атала. Был Бикбай ҡарттың сабынлығы булғанға шулай атағандар.

Бурлат. Ауылдың төньяҡ-көнсығышында өс-дүрт саҡрым алыҫлығындағы ялан атала. Бурыл ат көҙ юғалып яҙ ошо ерҙә табып алғанға Бурлат тип йөрөтәләр.

Өмөткән яланы. Борон Яуымбай ҡарт малдарына бесәнде өмә менән саптырған. Гел генә өмә менән саптырғанға ул бесән эшләгән яланды, Өмә иткән тип атағандар. Һуңғараҡ ябайлаштырып телдән - телгә күсә килеп Өмөткән тип үҙгәреп киткән.

Тумарҙыҡ яланы Байназар ауылына барғанда беренсе ялан шулай атала. Был тау битләүендә тумарлыҡ күп булғанға атағандар.

Саптарат. Ауылдан өс-дүрт саҡрым алыҫлыҡтағы ялан шулай атала. Элек был яланда йыйындар, һабантуйҙар үткәрелгән. Ат сабыштары ошо яланда уҙғанға күрә Саптарат тип йөрөтәләр.

Оҙонғош яланы. Төньяҡ-көнбайышта биш саҡрым самаһы алыҫлыҡта ята был ялан. Ялан оҙонсай, һуҙылып оҙон булғанлыҡтан да оҙонғош яланы тип атала. [7]

Тарбаҡтар. Ауылдан Байназар яғына юл сыҡҡан яҡта өсөнсө саҡрымындағы ялан шулай атала. Әүәл был ерҙәр айырым хужалыҡ сабынлыҡтары булған. Һәр сабынлыҡ кеше исемен йөрөткән һәм дә әлеге көндәлә һаҡланып ҡалған. ***Һиҙиәт тарбағы, Сәлим тарбағы, Уйылдан сабыны, Хәбир тарбағы, Муллағәлләм тарбағы, Нуриман тарбағы***. Ялан тарбаҡланып торғанға, кешегә сабынлыҡ бүлеү мөмкинлегенә тарбаҡланып тороуы ла мөһим һаналған.

Сәңгелде (1 вариант). Ҡыпсаҡ ауылына барған саҡта дүртенсе саҡрымында уң яҡтағы яланды, тауҙы, йылғаны шулай атайҙар. Борон бер кешенең ике ҡатыны булған. Бесән мәле еткәс был ҡатындары менән бергә бесәнгә барған. Бер ҡатынының йәш балаһы булған. Шул баланы көтөр өсөн кеше яллап алып сыҡҡандар, был баланы сәңгелдәктә көткәндәр. Шул сәңгелдәк һүҙенән Сәңгелде һүҙе тороп ҡалған. [16]

Сәңгелде (2 вариант). Низам ҡарттың ете улы булған. Ете улы ла һуғыштан имен-аман йөрөп ҡайтҡас, Сәңгелде яланында йыйын үткәргәндәр. Иҫән килде (Иҫәнгилде) һүҙенән Сәңгелде һүҙе килеп сыҡҡан тип аңлаталар. [17]

Сәңгелде яланы (3 вариант). Борон ошо яланда йәйләү тотоп ятҡандар. Низам исемле бик уҡымышлы кеше лә йәйләгән булған. Ошо йәйләүҙән туғыҙ ирҙе иҫән-һау ҡайтыуҙарын теләп һуғышҡа оҙатҡандар. Уларҙың барыһы ла иҫән- һау ҡайтҡандар. Шул хөрмәткә был яланды Иҫәнкилде тип атағандар. Яйлап телдән-телгә күсә килә, Сәңгелде тип атап йөрөтә башлағандар.

Ситҡыр. Ауылдан ике саҡрым алыҫлыҡтағы был яланда бесән сабалар. Сит яҡтараҡ был ялан шуға ла исеме Ситҡыр тип аталып йөрөтөлә.

Һәлим сабыны. Ауылдан Байназар ауылына ҡарай барғанда бер саҡрым алыҫлыҡта уң яҡтағы урман сите шулай атала. Элек был урында Һәлим тигән кешенең сабынлығы булған.

Хәбирә саңдауы. Ауылдың көнсығыш яғындағы ярты саҡрым алыҫлыҡтағы ялан атала. Был ерҙә Хәбирә исемле әбей һарыҡ көткән. Малын саңлауға туплаған. Шунан Хәбирә саңдауы исеме ҡалған.

Ҡырынҡарағас. Ҡырынҡарағас яланы беҙҙең ауылдан биш саҡрым самаһы алыҫлыҡта урынлашҡан ялан. Был яланда ҙур, йыуан ҡырын ҡарағас үҫкән һәм ҡолай. Өс кеше ҡоласы етмәҫ йыуанлыҡтағы ҡарағас булған ул.

Майғайған. Оло юлдан Байназар ауылына ҡарай өсөнсө саҡрымында һулаҡайҙағы ялан атала. Элек бында бер әбей май килтереп йәшереп йөрөгән. Шуның өсөн был яланды Майғайған тип йөрөтәләр.

Мәмерйә яланы һәм соҡоро. Төньяҡ-көнбайышта өс саҡрым алыҫлыҡтағы ерҙә мәмерйә соҡоро һәм яланы бар. Шуға Мәмерйә соҡоро һәм яланы тип аталған. [19]

Ҡара тәкә. Көнбайышта өс саҡрым алыҫлыҡта элек бер бай бесән саптырған. Өмәселәренә ҡара тәкәһен һуйып һыйлаған. Шунан сабынлыҡ та Ҡара тәкә исемен алған. [20]

Уҫаҡ тауы һәм яланы. Төньяҡ-көнбайыштағы ике саҡрым алыҫлыҡтағы тауҙа уҫаҡ ағастары үҫә. Шуның өсөн тауы, яланы ла Уҫаҡ тип йөрөтөлә.

Ялан осо. Ауылдың бер өлөшө Ленинград ҡушаматын йөрөтә. Ауыл осонда әңәл баҫыу булған. Хәҙер өйҙәр һала килә ауыл ҙурая. Шулай Ялан осона ла ауыл килеп сыға.

Ташлы ер. Ауылдың төньяҡ-көнсығышында дүрт саҡрым алыҫлыҡта ялан атала. Ерҙе һөрөп нимә сәсһәләр ҙә уңыш алып булмаған ере ташлы булған. Ере ташлы булғанлыҡтан Ташлы ер тип атала.

Әҙелшә һәм Шәйәхмәт биләне. Элек был урында оҙаҡ йылдар буйы Әҙелшә һәм Шәйәхмәт исемле кешеләр бесән сабҡан. Уларҙың иҫтәлегенә исемдәре ҡалған.

Һаҙ башы, Быҙау үҙәге. Был урында әлеге ваҡытта Тулыбаев Әксән бесән саба. Сабынлыҡ иң башында һаҙлыҡ була. Ауыл быҙауҙары ла ошо үҙәктән үлән эҙләп күтәрелер булғандар. Шуның өсөн Һаҙ башы йәки Быҙау үҙәге тип йөрөтә башлайҙар.

Ҡарайғыр. Яуымбай ауылының көньяғында ике-өс саҡрым алыҫлыҡтағы ялан, йылға, тау шулай атала. Был яланда йыл һайын башҡорт халҡының милли байрамы һабантуй үткәрелә. Элек бында ат көткәндәр. Ә яланға һәр саҡ бүреләр килеп йөрөгән. Улар нисек булһа ла ҡолондарҙы ашарға тырышҡан. Ләкин өйөр башлығы ҡара айғыр ҡолондарҙы бирмәгән, һаҡлап йөрөткән. Шуның өсөн яланы, йылғаһы, тауы Ҡарайғыр исемен алған.

Сәтрәй. Ауылдың көнбайышында дүрт саҡрым алыҫлыҡтағы ер шулай атала. Был ялан ҙур булғанлыҡтан шундай исем алған.

Янсаф туны. Арҡа янында Билалов Кәримдең сабыны шулай атала. Был ерҙә Янсаф исемле кеше мал көткән һәм мал тиреһен эшкәртеп тун теккән. Шуға ошо исем тороп ҡалған.

Йылғалар, шишмәләр, ҡотоҡтар

Арҡыры йылға. Был йылға ауылдың осонан Ҡайнөй йылғаһына тиклем аға. Ауылға арҡыры ятҡанға күрә Арҡыры йылға тип атала.

Балайылға. Был йылға Үҙәнгә барып ҡоя. Бәләкәй генә йылғаларҙың береһе булғанға уны ауыл халҡы Балайылға тип йөрөткәндәр.

Ҡайнөй йылғаһы (1 вариант). Яуымбай ҡарт үҙенә өй һалырға булған. Өй нигеҙен ҡайындан башлаған. Нигеҙ урынын ҡаҙа башлағас, был урындан урғылып һыу сыға башлаған. Һәм үҙенә юл алып, йылға булып ағып киткән. Яуымбай ҡарт тап был һыу урғылған ергә өйөн һалмай, арыраҡ нигеҙ ҡороп ултыра. Ә йылға Ҡайнөй тип атала башлаған. Элекке ваҡытта ауылға терәлеп ятҡан яланда тәрән баҙҙар ҡаҙып ҡайын туҙынан дегет ҡайнатҡандар. Дегет хужалыҡ эштәре өсөн кәрәкле әйберҙәренән иҫәпләнгән булған. Мал ауырыуҙарына ла дегет яҡшы дауа булған. Шул осорҙан бирле был яланды ***Баҙялан*** тип йөрөтә башлағандар. Бөгөнгө көндә лә бында барлыҡҡа килгән урамды ***Баҙялан*** урамы тип йөрөтәләр.

Ҡайнөй йылғаһы (2 вариант). Борон Яуымбай ҡарт ауылға килеп төпләнгәс, өйҙө йылға буйына ҡайындан һалған булған. Тәүҙә йылғаны Ҡайын өй тип йөрөткәндәр. Быуындан быуынға күсә килеп Ҡайнөй булып ҡалған. Йылға буйы бик матур, ҡышын туңмай. Бәләкәй йылға булыуына ҡарамаҫтан балыҡтарға бай. Ҡыҙыл китапҡа ингән балыҡтар ҙа бар: бәрҙе, бағыр һ.б

Шарҡырауыҡ йылғаһы йәки Шар. Был йылғаның сыҡҡан урынын Шар тип атайҙар. Йылға ер аҫтынан бик ҙур тиҙлектә таштар араһынан ағып сыға. Шуға күрә йылғаға Шарҡырауыҡ йәки Шар йылғаһы тип әйтәләр. [5]

Ҡамыш шишмәһе. Арҡыры шишмәгә ҡушылған шишмә шулай атала. Элегерәк ошо шишмәне быуып ҡамыш һалғандар. Ҡамышты серетеп, төрлө әйберҙәр эшләгәндәр. Шунлыҡтан Ҡамыш шишмәһе тип аталған. [10]

Һыусумған. Ауылдан төньяҡ-көнсығышында дүрт саҡрымлыҡтағы ер атала. Йылға ағып барып ҡапыл ер аҫтына юғала, сума. Шуға күрә был йылғаны, Бәҙрикамалуҙы, яланды шулай Һыусумған тип атайҙар. [8]

Ҡотоҡтар. Ауылда биш ҡотоҡ бар. Шуларҙың дүртеһе кем эшләгән шуның исеме менән йөрөй: ***Хисам, Ишбулды, Мөхәмәтҡужа, Мирза ҡотоғо***. Ауылдың һырт яғынан ***Аҡҡотоҡ*** бар. Уның һыуы таҙа, йомшаҡ булғанлыҡтан шундай исем алған.

Билдәле, тарихи һәм иҫтәлекле атамалар

Абласкин. Яуымбай ауылының икенсе ҡушаматы. Аблас ҡарт урта йәштәр самаһында яҡшы ғына йәшәп ятҡан ваҡытта, уға бер ят урыҫ кешеһе килә һәм үгеҙ тиреһендәй генә ер һорай. Ҡарт: “Һы, ул ғына була ул, ярай иртәгә килерһең ер бирермен”,- тип яуаплай. Былар килешеү төҙөйҙәр. Урыҫ икенсе көндө килә лә үгеҙ тиреһен йоҡаҡ ҡына өлөштәргә телеп егерме саҡрым ерҙе уратып үҙенә ала. Аблас ҡартҡа саҡ ҡына булһа ла ер ҡалмай, урыҫ был ергә завод төҙөй. Әүжән заводы шулай барлыҡҡа килгән. Аблас ҡарт екенсе ергә кисеп донья көтә башлаған. [9]

Аждаhа сыҡкан. Аждаhа сыҡкан ауылдан ике саҡрым алыҫлыҡтағы Тумарҙыҡ яланындағы hаҙлыҡты ҡуйы бейек талдар уратып алған. Унын уртаhында бәләкәй генә күл дә булған. Бер көндө шул күл өҫтөндә көслө ҡойон өйрөлә. Ауыл халҡы ҡойондо аждаhа ҡойроғо тип уйлайҙар. Шунан башлап был урынды Аждаhа сыҡкан тип йөрөтәләр. Ләкин hаҙлыҡ бөгөнгө көнгә тиклем hаҡланмаған, ҡороған.

Бәшәр ҡойоhо. Ҡайнөй буйынан ике-өс саҡрым алыҫлыҡта ята. Әүәле Бәшәр исемле ҡарт был ергә килеп йылға буйында киндер hалып сереткән. Шуның өсөн дә Бәшәр ҡойоhо булып ҡалған да инде. Киндерҙән кейемдәр теккән.

Бәҙек күпере. Ауылдың төньяҡ-көнсығышында өс саҡрымлыҡта урынлашҡан күпер. Элек Бәҙрикамал исемле әбей йәшәгән. Йылға аша халыҡ ыҙалап йөрөгән, йә ул урын батҡаҡҡа әйләнер булған. Бәҙрикамал әбей ир-аттарға үс итеп күпер hалып ҡуя. Әбейҙең исемен ҡыҫҡартып Бәҙек күпер тип йөрөтәләр.

Бурташ. Көньяҡтағы дүрт саҡрым алыҫлыҡтағы ер. Был тауҙа эзбизташ сыға, аҡбур ташы күп. Йылға, яланың шуға Бурташ тип атайҙар.

Ҡолош үҙәге. Ауылдан арҡа яланы яғына сыға торған үҙәкте Ҡолош үҙәге тип йөрөтәләр. Был үҙәктә кәкре ҡайын ағасы үҫә. Ололарҙың hөйләүе буйынса, ошо ҡайын төбөндә Ҡолош исемле ҡарт ерләнгән, шуға күрә был үҙәкте Ҡолош үҙәге тип йөрөтәләр.

"Сәфәр соҡоро" (1 вариант). 1980-90 йылдарҙа ат менән ер hөрөп йөрөгәндәр. Унда Назаров Ҡотлоғәлләм олатай менән Сәфәр исемле олатай ҙа була. Улар яланда төнгөләккә йоҡларға ҡалалар. Төндә өшөмәҫ өсөн ҡайын төбөнә ут яғалар. Оҙаҡ эшләп арығас, икеhе лә ҡаты йоҡоға тала. Бер ваҡыт ут ҡайынға күсә. Ҡайын янып Сәфәр олатайҙың өҫтөнә йығыла.Ҡотлоғәлләм олатай Сәфәр олатайҙы көскә ҡайын аҫтынан hөрәп сығара. Шул мажара иҫтәлегенән Сәфәр соҡоро тип йөрөтәләр.

"Сәфәр соҡоро" (2 вариант). Яуымбай ауылы эргәhендә Ташөй мәмерйәhенән 3 саҡырым алыҫлыҡтағы яланды шулай йөрөтәләр. 1937-1938 йылдарҙа Назаров Ҡотлоғәлләм, Ураҙғолов Хәбир, Кинйәкәйев Йәмилха hәм Сәфәр исемле олатайҙар ат менән ер hөрөп йөрөгән ваҡытта булған хәл. Кис еткәс, эштән hуң Ураҙғолов Хәбир hәи Кинйәкәйев Йәмилха балаганға йоҡларға китәләр. Ә Ҡотлоғәлләм менән Сәфәр яланда төнгөләккә йоҡларға ҡала. Төндә өшөмәҫ өсөн ҡайын төбөнә ут яғалар. Аҙаҡ, эшләп арығас, икеhе лә ҡаты йоҡоға тала. Ҡайын ағасы янып, Сәфәр олатайҙың өҫтөнә йығыла. Ҡотлоғәлләм бабай Сәфәр олатайҙы көскә ҡайын аҫтынан hөйрәп сығара. Шул мажара иҫтәлегенән Сәфәр соҡоро тип йөрөтәләр. [5]

Ҡаҙғаняр. Ауылдың төньяҡ-көнсығышында дүрт саҡрымлыҡта ята. Элек Яуымбай йәйләүе Әсеүйорт тигән яланда булған. Ошо йәйләүгә барған саҡта текә генә ярҙы сыға алмай ыҙаланғандар. Шунлыҡтан был ярҙы соҡоп ҡаҙып юл эшләгәндәр. Оҙаҡ Ҡаҙғаняр булып атала башлаған.

Туҡмаҡты яры. Ауылдың көньяҡ-көнсығышында саҡрым самаhы алыҫлыҡта Арҡыры йылға аша сыҡкас уң яҡта Туҡмаҡты яры бар. Борон был ерҙә солоҡ ағасы булған. Солоҡ ағасын айыу тынғылыҡ бирмәй туҙҙырып торған. Солоҡсо туҡмаҡ та бәйләп ҡараған. Быны күреүселәр Туҡмаҡты яры тип йөрөтә башлағандар.

Турат соҡоро. Ауылдың көнбайышында дүрт саҡрымлыҡтағы соҡор шулай атала. Колхозлашыу осоронда булған хәл. Бер ҡарттың өс аты булған һәм уның аттарын һорағандар. Ләкин ҡарт колхозға ике атын ғына биргән. Туры атын үҙендә ҡалдырған. Әлеге шул соҡорҙа йәшереп тотҡанға күрә Турат исемле соҡор булып ҡалған.

«Ҡарасура» ҡәбере йәки «Бабай үлеге». Борон бик уҡымышлы, дин тотҡан Ҡарасура исемле ҡарт йәшәгән. Ул бик изге күңелле , йомарт булған. Үлер алдынан ул: «Мине Яуымбай ауылы менән Байназар ауылы уртаһындағы иң ҡалҡыу ергә ерләгеҙ» тип васыят әйткән. Ике ауыл мәсетенән аҙан тауышын тыңлап ятырмын тигән ул. Уның теләгенә ҡаршы килмәй, бер ҡалҡыу ергә ерләгәндәр. Әлеге ваҡытта был ҡәберлек бар һәм тәрбиәләп тотола. Быуындар алмашынған һайын исемдәрҙә үҙгәрә килеп, хәҙер “Ҡарасура” ҡәбере - “Бабай үлеге”нә әйләнеп киткән.

Пашка балаганы. Ауылдан төньяҡ-көнбайышында өс саҡрым ярым алыҫлыҡта Пашка балаганы бар. Аслыҡ ваҡытында Пашка исемле кеше яланда балаган төҙөгән. Һәр яҙ һайын ул ер һөрөп, иген сәсеп, уны яҡшы ғына итеп тәрбиәләп көҙ мул уңыш алыр булған. Тик һуңға табан ҡырҙан урыҫтар килеп Пашканың ерҙәрен картуфҡа алыштырғандар.

Ирғәле төртөндөһө. Төньяҡ-көнбайыш яҡлап бишенсе саҡрымда Айбикә тауын төшкән саҡта һул яҡлап ҡала. Был ерҙә районның беренсе тракторисы Ирғәле исемле кеше ер һөргән. Шуның иҫтәлегенә атала был Ирғәле төртөндөһө тип. [11]

Ҡартөй. Яуымбай ауылының арьяҡ өлөшө шулай атала. Әүәлерәк Хоҙайназар тигән исемле олатайҙың өйө иҫке бәләкәй генә өйө булған шунлыҡтан был яҡты бөгөнгө көндәлә Ҡартөй тип йөрөтәләр.

Ҡылмый төртөндөһө. Көнсығышта дүрт саҡрым алыҫлыҡта ер шулай атала. Был ерҙә Ҡарачурин Ҡылметдин исемле кеше ер һөргән. Шул исемде ҡыҫҡартып хәҙерге ваҡытта ла ауыл халҡы Ҡылмый төртөндөһө тип атайҙар.

Ҡарабешә. Ҡыпсаҡ ауылына барған юл буйлап дүртенсе саҡрымының һулаҡай яғындағы үҙәк тала. Ҡарағай ағастары әүәл күп булған ға бешәлек тип атағандар ҙа инде.

Ҡыҙылтал. Ауылдың төньяҡ-көнбайышында өс саҡрым алыҫлыҡтағы иҫке балаган эргәһендә ер аталған. Исмәғизәм менән Уйылдан Мәрзиә исемле ҡатын менән йөрөгәндәр. Уйылдан был ҡатынды ҡыҙғанып Исмәғәзәмде көпә-көндөҙ шул ерҙә һыҙма мылтыҡ менән атып киткән. Ҡаны сыҡҡан ерҙә тал ағасы үҫеп сыҡҡан. Шунан алып был ерҙе Ҡыҙылтал тип йөрөтәләр. Бөгөнгө көндә тал ағасы юҡ. [15]

Йәшеренүҙәк. Был үҙәк ауылдан төньяҡ-көнбайышта, өс-дүрт саҡрым алыҫлыҡта. Хәҙерге ваҡытта Вәлитов Дауыт бесән эшләй. Ололар һөйләүенсә был ер кемдәндер ҡасып һаҡланып, йәшеренер өсөн бик уңайлы булған. Шуға күрә үҙәктә Йәшеренүҙәк тип атала.

Кантор үҙәге. Яуымбай ауылынан Ҡыпсаҡ яғына барғанда дүртенсе саҡырымына етмәҫ элек Сәңгелде тауына менер алдынан һулаҡайҙағы Ҡыҫалан үҙәгенең башы Кантор үҙәге тип атала. Колхозлашыу осоронда был үҙәктә ағас ҡырҡҡандар. Уларҙың бәләкәй генә избенкаһы булған. Был избенканы кантор тип йөрөткәндәр. Ошонан тороп ҡалған исем.

Ҡасҡындар үҙәге. Ҡоҙаш тауының бер үҙәге шулай атала. Әүәлге ваҡытта “Халыҡ дошманы” тип эҙәрлек алып барғанға күрә ике кеше ошо үҙәктә йәшеренеп, ҡасып йәшәй. Шуға ла Ҡасҡындар үҙәге булып ҡалған.

Ҡыҫалан үҙәге. Яуымбай ауылынан Әбделмәмбәт яғына барған саҡта Сәңгелде тауына күтәрелмәҫ борон уң яҡтағы үҙәкте атайҙар үҙәк ике яҡлап тау менән ҡыҫылып ятҡанлыҡтан Ҡыҫалан тип атағандар.

Ҡыҙыл армеец үҙәге. Ауылдың төньяҡ көнсығышында дүрт саҡрым алыҫлыҡтағы Бәҙек күперенең һулаҡай үҙәге атала. Был үҙәктә граждандар һуғышы йылдарында бер ҡыҙыл армеецты атып киткәндәр. Шуның иҫтәлегенә был үҙәк Ҡыҙыл армеец үҙәге тип атала.

Ҡолош үҙәге. Ауылдан арҡа яғына мүҙәк буйлап электр линияһы сыға. Был үҙәктә кәкре ҡайын ағасы үҫә. Аҡһаҡалдар һөйләүенсә, ошо ҡайын төбөндә Ҡолош исемле ҡарт ерләнгән. Шуға ла үҙәк исеме уның исеме менән йөрөтөлә. [18]

Саталы үҙәк. Олотау тауының өсөнсө үҙәге. Ошо үҙәктең башы ике сатаға айырылған. Шуның өсөн Саталы үҙәк тип йөрөтәләр.

Шайхан үҙәге. Оло юлдан Мәһәҙей ауылына барған саҡта иҫке юл айырыла. Шул айырылған үҙәк Шайхан исемле ҡарт бесән эшләгән һәм был ер хәҙерге көнгә тиклем Шайхан үҙәге исемен йөрөтә.

Шарҡырау буйы үҙәге. Көнбайышта өс саҡрым алыҫлыҡтағы үҙәк атала. Был үҙәктең түбән яғында Шарҡырау йылғаһы таштар араһынан шарҡылдап ағып сыға. Шуның өсөн был йылға Шарҡырау, ә үҙәге Шарҡырау буйы тип атала.

Шәшке ҡасҡан үҙәге. Олотауҙың беренсе үҙәге шулай атала. Һунарсы бер шәшкене күреп ҡалған. Ошо үҙәккә еткәндә тота алмаған. Шунан алып үҙәк Шәшке ҡасҡан тип атала.

Просик буйы. Элек ауылдан көньяҡҡа ҡарай ағастарҙы ҡырҡып пожарҙан уттан һаҡланыр өсөн просик эшләгәндәр. Хәҙерге ваҡытта ла был ер Просик булып ҡала килә.

Суктал. Ауылдың төньяҡ-көнбайышында ике саҡрым алыҫлыҡтағы ер атала. Элегерәк ялан уртаһында суҡ ҡына тал үҫкән. Әлеге көндә лә яланы, йылғаһы, шишмәһе Суктал тип атала. [14]

Эйәле таш. Төньяҡ-көнбайышта өс саҡрым алыҫлыҡтағы ерҙә Ғөбәйҙуллин Ғызметдиндың сабынлығындағы аҡ төҫтәге ташҡа әйткәндәр. Әүәлдән бесәнселәр ял итеп ошо таш өҫтөндә сәй эсебеҙ тиһәләр, әйберҙәре таш өҫтөнән шыуып төшкән. Шуға ла ташты Эйәле таш тип атағандар. [12]

Яңғыҙкарағай. Ауылдың ҡаршыһындағы Оло тау итәгендә яңғыҙ ҡороған ҡарағай ағасы ултыра. Шуның өсөн дә Яңғыҙкарағай тип атала. Йәшенле ямғыр ваҡытында йыш ҡына был ағасты йәшен ата.

Мәмерйәләр

Сыңғырауыҡ соҡоро. Ташөй мәмерйәһе ауылдан Ҡайнөй йылғаһы буйлап түбәнгә ҡарай ике-өс саҡырым алыҫлыҡта урынлашһа, Сыңғырауыҡ Олотау буйынан алты - ете саҡырым алыҫлыҡта ята. Ололарҙың һөйләүе буйынса Ташөй менән Сыңғырауыҡ ер аҫты юлдарынан тоташ булырға тейешле. Элегерәк Сыңғырауыҡ соҡорона ике эт төшөрөп ебәргәндәр. Бер аҙна тигәндә генә, икеһе лә хәле бөтөп Ташөй мәмерйәһе ауыҙынан килеп сығалар, әммә шунда уҡ һуҡыраялар имеш. Элегерәк Сыңғырауыҡ соҡорона таш ырғытһаң сыңғырлатып, оҙаҡ тауыш сығарып төшөп китер булған, шунлыҡтан был урынды Сыңғырауыҡ соҡоро тип йөрөтәләр. Ташөй мәмерйәһе инде Яуымбай һәм башҡа ауыл халҡын үҙенең матурлығы менән арбап, үҙенә саҡырып торһа ла, бөгөнгө көндә лә асылмаҫ сер булып һаҡлана.

Ташөй мәмерйәһе

Ауылдың көнбайышында бер саҡрым алыҫлыҡта, оло юл өҫтөнән күренеп торған мәмерйә шулай атала. Мәмерйә таш өйгә оҡшап торғанлыҡтан был исем бирелгән. Тәҙрәләргә оҡшаған тишектәре лә бар. Беренсе бүлмәһе өс метр тәрәнлеккә төшә. Икенсе бүлмәһенән эскә биш йөҙ метр самаһы ингәс йылғаһы бар. Һөйләүҙәренә ҡарағанда мәмерйә биш-алты саҡрым өҫтә арҡала урынлашҡан Сыңғырауыҡ соҡорона тоташҡан. Был соҡорҙан ике этте төшөрөп ебәргәндәр, тик береһе генә етенсе көн тигәндә генә Ташөй мәмерйә ауыҙына килеп сыҡҡан һәм яҡтылыҡҡа күҙе һуҡырайған, тип һөйләйҙәр. Ололар һөйләүенсә ташөйҙөң тышында тағы бер ҡат ишеге булған. 1900 йылдар был ҡая емерелгән уны ауыл халҡы мәмерйә алдын яңынан таҙартҡандар. Ташөйҙөң ике үҙәге бар. Улар ***Арғы*** һәм ***Бирге үҙәк*** тип йөрөтәлә. [6]

[1] Мәғлүмәтте Ғизатуллин Бирғәле Сәлмән улынан Мәсәғүтова Айһылыу Сабирйән ҡыҙынан тарих уҡытыусыһы З.Ғ. Ғәбделхаева әҙерләне.

[2] Ләйлә Мырҙағолова

[3] Килдеғол мәктәбенең тарих укытыусыһы, хеҙмәт ветераны Фәйҙуллин Мөнир Абдулла улы.

[4] Бәшәров Әҙһәм олатайҙан 1992 йылда М. Вәлитова яҙып алды

[5] Ф.Ураҙғолов Әхмәтйәнова Маһикамал инәйҙән 1994 йылда яҙып алған.

[6] Ғөбәйҙуллина Нәзиләгә Мырҙағолова Мәстүрә Әфтәк ҡыҙы һөйләүҙәренән Ғөбәйҙуллина Альбина яҙып алды

[7] Назаров Ғәленән Үтәбаева Мәүлиҙә яҙып алған.

[8] Вәлитов Дауыт Нуриман улынан Вәлитова Айзилә Гәрәй ҡыҙы яҙып алған.

[9] Мырҙағолов Сабиттан Мырҙағолова Ләйлә яҙып алған.

[10] Вәлитов Дауыт Нуриман улынан Сәлихова Рәзилә яҙып алды.

[11] Сәлихов Ғәлимйәндән Аҫылбаева Зөлхиҙә яҙып алды.

[12] Аҫылбаева Ғәлиәнән Мырҙағолова Ләйлә яҙып алған.

[13] Назаров Ғәле Сәлмән улынан Сәлихова Рәзилә яҙып алды.

[14] Әхмәтйәнова Рәсимәнән Маликова Земфира Кәбир ҡыҙы яҙып алды.

[15] Назарова Зәбирәнән Ғиззәтуллин Фаяз яҙып алған.

[16] Назаров Ғәленән (1934 йылғы) Ғизәтуллин Фаяз яҙып алды.

[17] Исмәғилова Ғәрибәнән Исмәғилова Флүзә яҙып алды.

[18] Сәлихов Ғәлимйәндән Мырҙағолова Ләлә яҙып алды.

[19] Ғиззәтуллин Бирғәле Сәлмән улынан (1938 йылғы) Ғиззәтулин Фаяз Бирғәле улы яҙып алған.

[20] Назарова Зәйтүнә Нуриман ҡыҙынган (1932 йылғы) Хәйбуллина Розалия яҙып алды.

[21] Кинйәкәев Зиннурҙан Байназарова Нурсидә яҙып алған. Етәксеһе Ғиззәтуллин Фаяз Бирғәле улы.

Ҡолғана ауыл биләмәһенә ҡараған ер-һыу атамалары

Ҡолғана ауылы

Ҡолғана ауылы иҫ киткес матур урында – саф һауалы, һирәк осрай торған бәрҙе һәм башҡа балыҡтарға бай йылғалар буйында, һылыу ағаслы тауҙар ҡосағында урынлашҡан.

Был ауылға 1816 йылда Ярылғап ауылынан 15 ғаилә Үҙән йылғаһы буйындағы хозур тәбиғәтле иң матур урынға – ***Колгана*** ауылына нигеҙ һалалар. Шулай уҡ бында Ярылғаптың улы Нарынбай һәм Зауряд-сотник Байғусҡар һәм Ишбулдылар ҙа йәшәгән. Әлеге көндә уларҙың зат-ырыуынан – Шаһимырҙанов Фауарис.

Ҡолғана тарпаны - ете йыл тыу йөрөгән бейәне һуйҙырып, ауылда йәшәгән ырыу-ҡәбиләләрҙе һый-табынға йыйып, байрам яһап, ырыуҙаштарыран ауылға үҙенең исемен бирергә фатиха, изге теләктәр алып, халыҡты ҡунаҡ иткән, тип һөйләй ауылдың күпте күргән, күпте кисергән аҡһаҡалдары.

1834 йылда ауылда 151 кеше, 1859 йылда – 207 кеше, 1917 йылда-516 кеше йәшәгән. 1812

йылғы Ватан һуғышында Ҡолғана ауылынан Ишкенә Косаҡҡолов та ҡатнаша. Ул ике миҙал кавалеры 14-се башҡорт полкы составында 1812-1814 йылдың 19 мартында Парижды алыуҙа ҡатнаша.

Ул дәүерҙә ауыл халҡы малсылыҡ, урмансылыҡ, һунарсылыҡ, ер эшкәртеү эштәре менән мәшғүл булған. XIX быуаттың 40-сы йылдарында 35 хужалыҡтың 167 кешеһе лә Һарағы, Әңкес йылғалары буйында һәр яҙ һайын йәйләүгә сыға торған булғандар. Был ваҡытта ауылда 144 йылҡы малы, 105 баш һыйыр, 20 баш һарыҡ, 31 баш кәзә булған. Йәйләү осоронда иген дә үҫтергәндәр.

Ҡолғана ауылы тирәһендәге ҙур яландарҙа ***Ҡаҙмаш, Суван, Буҙыкай, Ярылғап, Ҡолҡас, Тирмән ауылдары*** кешеләре лә йәйләүгә килгәндәр. Әле лә ер-һыу атамалары борон ата-бабаларыбыҙ атап йөрөткәнсә һаҡлана. Мәҫәлән, Ҡолаҡашҡа яланында 2 ауыл ултырған: Суван менән Ҡаҙмаш ауылы кешеләре. Шуға был ерҙәрҙе әле лә ***Суван Ҡолаҡашҡаһы, Ҡаҙмаш Ҡолаҡашҡаһы*** тип, йөрөтәләр.

Ҡолғана халҡы ара-тирә булып ултырған. Мәҫәлән, Ҡырҡһуйыл асығында – Ҡарғалар, Һаһыҡҡыуыш асығында – Ишкенәләр араһы. Ауылдың ир-егеттәре 30-сы йылдарҙа Ҡолғана ауылынан Һарғая ауылына барған юл буйындағы бер асыҡта таштан мейес сығарып, Ҡыраҡанан ат менән ташып ҡайын, ҡарағай утындарын мейестә яҡҡандар, эре-эре күмерҙәрен ат йөгөнә тулғас, суйын иретеү заводына ебәргәндәр. Күмерҙе Әбйәлил районы Хәлил ауылы баҙарына алып барып һатҡандар. Ялан яғының кешеләре күмерҙе мейес тоҡандырыуға, самауыр ҡайнатыуға бик теләп һатып алғандар. Мейес яҡҡан урынды бөгөн ерле халыҡ Мейес асығы тип йөрөтә.

1917 йылда Ҡолғанала 92 хужалыҡ, 516 кеше йәшәгән. 1920 йыл ауыл 3 хужалыҡҡа, 16 кешегә кәмей.

1930 йылдың авгусында Бөрйән районын ойошторғанда Ҡолғана ауылы ла ошо районға инә. Ауылда колхоз, ағас әҙерләү кантораһы ойошторола, партия ағзаларына кандидаттар төркөмө, комсомол ойошмаһы, колхоз идараһы һәм урындағы Совет активтары Шәйхитдин Хисмәтуллин, Ғәлимйән Мусин, Мөхәррәм Шәнгәрәев, Динислам һәм Шәйхислам Баһауетдиновтар, Һибәт Мәхмүтов, Әфтән һәм Сөләймән Сөләймәнов, Күжәхмәт Нуретдинов һәм башҡалар синфи көрәштең ул ваҡыттағы киҫкен осоронда халыҡты өгөтләү һәм ойоштороу буйынса бик күп эш башҡарғандар.

1946 йылдың 26 мартына Ҡолғананы Ҡаҙмаш ауыл Советына ҡаратып, Әбйәлил районына буйһондоралар. Кемдеңдер уйлап еткермәүе арҡалы халыҡтың кәртә артына терәлеп торған ерҙәре, урмандары тулыһынса Бөрйән районы ҡарамағында ҡалдырыла.

1984 йылдың 29 декабрендәге Башҡорт АССР-ы Верховный Совет Указы буйынса Ҡолғана ауылы ҡайтанан Бөрйән районына бирелә.

Үҙән һыуын эсеп, Түгәрмә тауы итәктәрендә йөрөп, уйнап үҫкән, ил даны өсөн тырышлыҡ һәм батырлыҡ күрһәткән, яуҙарҙа йәнен ҡорбан иткән, үҙҙәре тураһында яҡты иҫтәлек ҡалдырғандар аҙ түгел. Бөйөк Ватан һуғышында ғына ла Ҡолғана ауылынан Ватанды һаҡлауҙа 55 кеше ҡатнаша: Йәһүҙә Сөләймән улы Ибраһимов Бөйөк Ватан һуғышында рота командиры, үҙ йөрөшлө артиллерия экипажы командиры була. Капитан званиеһында I һәм II дәрәжә Ватан һуғышы, Ҡыҙыл йондоҙ ордены һәм бик күп миҙалдар менән бүләкләнә. Шулай уҡ Ҡолғананан Зәйнетдин Рәхмәтулла улы Рәхмәтуллин да Бөйөк Ватан һуғышында күрһәткән батырлыҡтары өсөн ике Ҡыҙыл йондоҙ, Ватан һуғышы ордены һәм башҡа төрлө миҙалдар менән бүләкләнә.

Әбүталип Сәйетбархан улы Ғәләүетдинов та пулеметсы була һуғышта. Сталинград, Курск, Орел, Воронеж, Кенигсберг ҡалаларын дошмандан азат итеүҙә күрһәткән ҡаһарманлыҡтары өсөн III дәрәжә Дан ордены, ике “Батырлыҡ өсөн”, “Германияны еңгән өсөн” һ.б. орден һәм миҙалдар менән бүләкләнә.

1998 йылдың 29 сентябрь айында закондар сығарыу Палатаһы тарафынан Ҡолғана ауыл Советы ойоштороу тураһында Закон сығарыла. 10 октябрь Вәкилдәр палатаһы тарафынан хуплана һәм Ҡолғана ауыл советы ойошторола.

Ауылдың ҡыҫҡаса тарихы бына ошолай. Ҡолғана ауылын бер районда икенсеһенә күсереп йөрөтөү, әлбиттә, ауылдың үҫешенә кире йоғонто яһай. Төплө генә эш урындары булмай. Социаль объекттар төҙөү – юл эшләү, элемтә, электрләштереү һ.б. нәмәләрҙән халыҡ оҙаҡ ваҡыт мәхрүм булды. Әбйәлилдәр берәй социаль объект төҙөтөп эш асыр ине, ер – Бөрйәндеке. Халыҡ күбеһе Бөрйәндә эшләй (леспромхоз, лесхоз һ.б.) Бөрйәндәр берәй социаль объект төҙөр ине, административ бүленеш буйынса халыҡ – Әбйәлилдеке.

Ҡолғана ерлегендә тыуған Сура батыр тураһында легенда

Был ерҙәрҙә Сура тигән батыр йәшәгән. Уның ике ҡарындашы булған. Улар ҙа уҡтан бик оҫта атҡандар. Уғатар, мәргән данлыҡлы батыр булған ул. Уҡтан мәргән атырға ике ҡарындашын да өйрәткән. Бара-тора тегеләр Суранан да мәргәнерәк атырға өйрәнеп киткәндәр.

Сураның төп кәсебе тау-таш үтеп, алыҫ ерҙәрҙә йөрөп кейек аулау, һунарға йөрөү булған. Ул ай тыуып, ай тулғансы төйәгенә ҡайтмай йөрөгән. Ә ике ҡарындашы, әсәһе, бисәһе ***Түбәнге ыҙма***ла (Хәҙер ***Мейес яланы***, тиҙәр) бейә бәйләп ятҡандар. Ҡышлауҙары ла ошонда булған.

Борон был тирәлә ҡаҙаҡ, ҡалмыҡтар Урал һыуы яғынан килеп башҡорт бисәләрен, ҡыҙҙарын урлап, малдарын алып киткеләп торғандар. Сураның өйҙә булмаған сағы була. Ҡалмыҡтар килеп сыға был яҡтарға. ***Ҡаҙна йылғаһы*** буйында Сураның ике ҡарындашы ултырған була. Ҡалмыҡтар аңғармаҫтан килеп, баһып, тегеләрҙең өҫтәренә кейеҙ ябалар. Ҡаҙна йылғаһы тоноҡ ҡына ағып ятҡан. Кейеҙгә уралған ҡыҙҙарҙы шунда алып баралар ҙа йоҡларға яталар. Ҡәҙимә әбей ҡыҙҙарын эҙләп килеп сыға. Ҡыҙҙарының кейеҙгә уралғанын аңлап ҡала. Шым ғына килеп, кейеҙҙе урталай телеп ебәрә. Кейеҙ эсенән ике ҡыҙҙары килеп сыға ла ҡалмыҡтарҙы ҡырырға тотоналар уҡ менән.

Икенсе тапҡыр Сураның юҡлығынан файҙаланып, уның ҡатынын урлап ҡасалар. Йәйләүгә ҡайтһа, ҡатыны юҡ. Сура ҡалмыҡтарҙың арттарынан ҡыуа төшә. Тегеләрҙең ҡайҙалығын белер өсөн ***Оло Түгелмә*** тауына менеп, тирә-яҡты ҡарай. Тау башынан тирә-йүн ус төбөндәй генә күренеп тора. Тауҙан уларҙы күреп ҡала. ***Тукал асығында*** ҡаҙан аҫып йөрөп ит бешереп яталар икән былар. Ҡалмыҡтарҙың атаманы Сураның бисәһен үҙенә алып, туй үткәрергә уйлаған. Былар бик күп, бер үҙем генә еңә алмаҫын уйлаған Сура. Нишләргә? Кискә тиклем һаҙҙа аңдып ята. Ҡараңғы төшкәс, тегеләрҙең һаҙҙа торған аттарының уң яҡ өҙәнгеләрен ҡыйып сыға ла кире ***Түгелмәгә*** китә. Түгелмә башынан тороп иң беренсе уҡты бисәһенә тоҫҡай ҙа кире уйлай. Шунан тегеләрҙең иттәре бешеп ултырған ҡаҙанды уғы менә яра ата. Был уҡ Сураныҡы икәнен бер Ҡәҙимә генә аңлап ала. Ҡалмыҡтарҙың өҫтөнә уҡ яуа башлай. Ҡалмыҡтар: “Сура, Сура, Сура килә!” – тип ҡысҡырышып аттарына менәйек тиһәләр, ҡолайҙар ҙа төшәләр тей. Ә Сура тегеләрҙе берәм-һерәм сүпләй генә бирә икән. Шунда ҡатынын күреп ҡала, уны атып

үлтерергә уғын тоҫҡаһа, бисәһе мин ғәйепле түгел тип, илап Сураның аяғына йығыла. Ә Сура ҡалған ҡалмыҡтарҙы ҡыра-ҡыра, баҫтырып Яйыҡ аръяғына алып барып сығара.

Сура гел ҡалмыҡтарға ҡаршы яуҙа йөрөр булған. Үҙәндең башланған урынында бер бәләкәй генә һул яҡлап асыҡ бар. Уны ***Әпсәләр туғайы***, тиҙәр. ***Ҡараңғы туғай***, тирә-яғы ҡап-ҡара урман да текә тауҙар. Шул асыҡтың үҙәнең дә йылғаһы бар, ***Ҡыраҡа*** араһынан сығып ята. Ана шул асыҡҡа яуға китер алдынан Сура батыр үҙенең әсәһен, ике ҡарындашын, бисәһен алып барып йәшереп торған. Шуға ла ул асыҡ ***Әпсәләр туғайы*** тип атала. ***Әпсәләр*** – әсәйҙәр тигәнде аңлата. Яуға китәр алдынан былай тигән иҫкәрткән: "Утты төш ваҡытында ғына яғығыҙ. Төшкө утығыҙға кәрәкле тамаҡты бешереп алығыҙ ҙа, кискеһен, иртәнсәк яҡмағыҙ. Төшкө ут көндөҙ күренмәй, уты ла, төтөнө лә,"- тигән. Әпсәләрҙән арыраҡ ***Ҡарауылтау*** тигән тау бар. Ана унан ҡайһы яҡтан яу килә, шуны ҡарауыллап ултырғандар. Шунан арыраҡ ***Туҡмапҡыр*** тигән тау ята. Элек кешенең кейеме лә ҡыҙыҡ булған бит ул. Оҙон еңле нәмәләр кейгәндәр. Шул тауҙа Сураның ун ике йәшлек кенә малайы бер ҡалмыҡтың ике еңенән дә бөрә тотоп, туҡмап үлтергән. Шунан ҡалған исем – Туҡмапҡыр.

Ҡалмыҡтарҙың атаманы Сураны, уның яҡындарын юҡ итергә бойорған. Ҡалмыҡтар Сураны йәйләүе эргәһендә аңдып ятып, Сураның малайын тотоп алалар. малайҙың үксәһенә атып үксә тамырынан ҡайынға элеп китәләр. Сураның Йыуанбатыр тигән яҡын ғына иптәше булған. Уны ике еңенән бөрөп тотоп, баҫып алып, күкрәген иҙеп ултырғанда Сура батыр килеп сыға. Ат өҫтөндә ултырған көйө генә теге атаманды уғы менән үлтерә ата. Ҡалмыҡ атаманының ҡорһағын ярып ебәрә лә, эсмайын алып Йыуанбатырға ашата, атыу эсеңә ҡан төшөр тип. Башын ҡырҡып алып күлгә ташлайҙар. Башының ауырлығы утыҙ ҡаҙаҡ булған тип һөйләй торғайнылар. Шул күлдә ҡамыштар үҫә торғайны. Ҡалмыҡтың сәсенең һанына үҫкән тей торғайнылар. Өләсәйҙәр элек шул күлгә киндер һалдырмай торғайнылар. ***Ҡалмыҡ күле*** тигән исем ана шунан ҡалған ул.

Ҡалмыҡтарға Сураның һарыуы ныҡ ҡайнаған. Осраған берен осраған ерендә үлтереп йөрөгән. Бер ваҡыт ҡарындаштары менән төшкө тамаҡ ашап ултыралар тей, былар.

-"Барығыҙ әле, оло юлда саң күпме икән, төйҙәк ат күпме икән, ҡарап килегеҙ әле,"- тигән Сура ҡарындаштарына. Алыҫта саң урала икән. – "Ағай, һин тик кенә ултыр икебеҙҙән үтмәй,"- тигәндәр ҡарындаштары. Үҙҙәре урман эсенә йәшеренгәндәр. Ҡаҙаҡтар килеп етәләр. Суранан һорайҙар: "Ҡарындаштарыңды бирәңме, әллә йәнеңде бирәңме? Шул саҡ урман эсенән ике уҡ һап тегеләргә! Ошонда ҡаҙаҡтарҙы ҡырып һалғандар. Шуға са ошондағы оҙон туғайҙы ***Ҡаҙаҡбай туғайы*** тигәндәр. ***Ҡаҙмаш йылғаһы*** буйында ул.ҡарындаштары мәргән булған шул.

Аҙаҡ ул ҡарындаштарының береһен Бөрйән яғына кейәүгә биргәндәр. Бөрйән яғына һыбай оҙатып китеп барғанда, элек бит арба булмаған, гел һыбай йөрөгәндәр, ҡәйнә лә, ҡайны ла һыбай бит инде. Ҡайны оҙон бер ҡарағаста ултырған һуйырҙы күреп алып: Эй ата тей, эй ата тей, атһа ла тейҙерә алмай икән. Быны күргән килен: "Ҡәйнәм, ҡайным рөхсәт итһә, мин уғын һорап алыр инем," – тигән. Ҡәйнәһе арҡыры ҡайныһының уғын һорай. -"Ярай, балам, рөхсәт итәм, мә ян, уҡ,"- тей ҡайны. Ҡайны янын бер тартыуҙа уҡ һуйырҙы осора атып төшөрә килен. Ҡыҙ һуйырҙы барып ала ла салып, ҡайнының ҡанъяғаһына бәйләй. Ҡайны: "Еҙ башындағы иң ҙур ҡолон һиңә килен,"-тей.

Туй ваҡытында Сураның ҡарындашы көмөш балдаҡтан да үтә атҡан тип һөйләйҙәр…

"Йәнә ҡалмыҡтар йәйләүҙәге башҡорттарҙы баҫып алған,"- тигән хәбәр ишетелә. Сураның йөрәге түҙмәй, төнө буйы сыҙамай йөрөп сыға. Иртәгәһенә ҡатыны менән әсәһен ҡалдырып, күршеләренә ярҙамға сыға. Ул килгәндә ҡалмыҡтар менә ығы-зығы, ыҙғыш-талаш тағы ла көсәйә төшкән була. Ярһыған Сура бер нисә ырыу башҡорттары менән бер булып, баҫҡынсыларҙы аңдый башлай. Тегеләр көслө була шул. Сура кешеләре уйҙарынан кире төңөлә. Яңғыҙ тороп ҡалған Сура аптырап тормай, уҡ-һаҙағын яңырта ла, ҡалмыҡтарға һөжүм итә. Көс тиң булмай. Ҡалмыҡтарҙы шулай ҙа ҡыра әле ул. Ошо мәлдә өйҙә ҡалған ҡатыны менән әсәһе эҙләп килеп етәләр. Уларҙың өсәүһен дә тотоп алалар. бисәһе менән әсәһен икенсе яҡҡа, ә Сураның үҙен ҡалмыҡ далаларына оҙаталар. Сура оҙаҡ ваҡыт ҡалмыктарҙа һарыҡ көтә. Яңғыҙлыҡтан бик нык ҡайғыра, ер-һыуын һағына, әсәһен, бисәһен уйлай. Ә ҡалмыҡтар Сураға

көсләп бисә алып бирәләр. Ике йыл үткәс уларҙың игеҙ улдары тыуа. Инде әсәһе менән ҡатынының табыуҙарынан төңөлдөм тигәндә, уларҙың ҡаҙаҡтар ҡулында эшләп йөрөүҙәрен ишетеп ҡала. Сура шул көндө үк уларҙы эҙләп далаға ҡасып сығып китә. Эҙләп йөрөй торғас, өсөнсө көн тигәндә бер тирмәгә һуғыла. Ошо тирмә әсәһе менән ҡаҙаҡтарҙың йәшәгән тирмәһе булып сыға. Тирмә алдында атлы ҡаҙаҡтарҙың йөрөүен күргәс, Сура төн етеүен көтә башлай.

Ҡаҙаҡтар йоҡлап бөткәс, уларҙың өс атын тирмә эргәһенән ситкә алып барып бәйләй. Таңға ҡарай әсәһе менән Ҡәҙимәне уятып, тирмәнән алып ҡаса. Иртәгәһенә быларҙың юҡлығын белгәс, ҡаҙаҡтар уларҙың эҙҙәренә төшәләр. Был арала Суралар Ҡушый ауылын үтеп, Әбйәлил районының ауылы, бер биләнгә етәләр, Ҡәҙимә ауырый башлай. Шуға ошо ерҙә туҡтарға булалар. Ҡәҙимәнең хәле насарайғандан насарая барып, ошо ерҙә донъя ҡуя ул. Ҡәҙимәне биләндә ерләп төшөп торғанда, атлы ҡаҙаҡтарҙың яҡынлашыуын күрәләр. Сура әсәһен алға ебәрә лә, үҙе ҡаҙаҡтарға ҡаршы ата-ата алға саба. Сура Ҡолғанаға еткәнсе ҡаҙаҡтарҙы еткермәй. Ауылға ингәс тә әле Сура эҙәрләүселәрҙең байтағының башына етә. Ҡара ҡойон кеүек үс толтоп килгән дошмандар уны яңынан тотоп алып, далаға алып китәләр. Ошо ваҡиғанан һуң Сураның исеме яҡын-тирә башҡорт ырыуҙарына тарала, батыр тигән даны сыға. Сура батырҙың ҡалмыҡтар менән айҡашҡан урынын хәҙер ***Кансура*** тип йөрөтәләр. Сураның тирмәһе эргәһенән аҡҡан йылғаны әсәһе хөрмәтенә ***Ҡаҙна йылғаһы*** тип йөрөтәләр.

Сура батыр хаҡында легенда бына шулай тамамлана. Ләкин Сура үҙе ҡайҙан, ҡайһы яҡтан икәнлеге әйтелмәй. Филология фәндәре кандидаты С.Ғәлиндың Бөрйән ырыуы мәҡәләһендә (Бөрйән районының “Таң” гәзите, 1991 й., № 74-77 ошондай һүҙҙәр бар:

“… Билдәле булыуынса, бөрйәндәр хәҙерге Һамар өлкәһендә Ырғыҙ буйында бер нисә ауылда йәшәй (Ташбулат, Бөрйән, Хәсән) күптән инде, бынан тап 30 йыл элек, 1961 йылда Ташбулат ауылында Хисмәтулла Мусин тигән олатайҙа мин Бөрйән ырыуы шәжәрәһенә юлыҡҡайным. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, йәшлек һәм тәжрибәһеҙлек арҡаһында мин уны тулыһынса күсереп алмағанмын. Күсереп алған хәтлеме шулай килә: “Әүәл башҡорт эсендә Бөржән ырыуының ата-бабаларының исемдәре:

- Әүүәл Думбай бей тыуған, унан тыуған Бөржән, уның улы Уразбахты шәһәре Болгарда. Өс сәхибәгә иман килтергән шул Уразбахты булалыр. Унан Иҫке бей, уның улы Сынбулат, Сынбулаттан Бикән унан тыуған Бейеш …”

- Артабан: “Беҙҙең бабайыбыҙ Һаряҙҙан тыуған Ҡалтырсаҡ, унан тыуған Рамазан, Рамазандың ике улы…

Аралар атамалары

Ишкенә араһы. Бик борон була был ваҡиға. Бер ҡатын бола заманында үҙе йәшәгән ауылдағы ығы-зығынан ҡасып, күрше ауылға – туғандарына ашҡынып юлға сыға. Ул хәтһеҙ юл үткәс (мөҙҙәте етеп) кинәт ауырып китә, хәле бөтөп, юл ситендәге бер ҡарағай төбөнә барып йығыла. Уның күҙ алды ҡараңғылана, йөрәге тулай, башы әйләнә.

Ниһәйәт, ул ошо ерҙә яҡты донъяға бер ир балаға ғүмер бүләк итә. Әсә кеше сабыйҙыңткендеген киҫеп, уны яулығы менән йүргәккә урап имеҙә лә, үҙе менән алып китергә хәле булмаҫтай тойоп, әҙәм аяғы һил булғас килеп алырмын ти ҙә, түңгәк өҫтөнә сабыйҙы һалып китә.

Ләкин йәш әсә ҡарурман эсендә хәле бөтөп донъя ҡуя. Иртәгәһен шул тирәнән үтеп барыусы ирле-ҡатынлы был сабыйҙы осраҡлы ғына күреп ҡалып (улар оҙаҡ йылдар бергә йәшәһә лә балалары булмай) эргә-тирәне эҙләһәләр ҙә сабыйҙың әсәһен таба алмағас, баланы өйҙәренә алып ҡайтып китәләр.

Улар сабыйҙың тиҙерәк үҫеп, үҙҙәренә терәк-таяныс булыуын күргеләре килә. Күктән теләгәнде, Хоҙай, ерҙән бирҙең, тип һөйөнәләр. Сабыйҙы 40 көн буйына тәрбиәләп, көн дә йыуындырып, һөт эсереп, наҙлап көтәләр.

Ғүмер буйы бала көтөп, Хоҙайҙан ялбарып һорап, балаға уҙа алмаған зарлы ҡатын сабыйҙың матурайып, тумалаҡланып үҫеүен күреп, бер мәл иренә:

- Һөйөнсө, атаһы, был бала үҙе теремек, үҙе сос, беҙгә иш кенә, исемен дә Ишкенә тип ҡушһаҡ, нисек булыр? – ти. Ир кеше һөйөклө ҡатынының теләгенә һис ҡаршы килмәй, риза булып исемен дә ҡуштыралар. Ишкенә көн үҫкән, ай үҫкән, үгәй әсәһе менән атаһына иш булып буй еткән, ти. Малай үҫеп буй еткәс, ата-әсәһе уға күрше ырыуҙан иң һылыу ҡыҙҙы кәләш итеп алып бирә.

Оҙаҡламай, Ишкенәнең бер-бер артлы улдары һәм ҡыҙҙары тыуа. Ул эшкә бик егәрле, сос, алғыр һунарсы ла була. Ишкенә ишле ғаиләне туйындырыу өсөн көн дә ете тау артына кейек ауларға йөрөй. Унан ҡалһа, Ҡыраҡа аша үтә һуҡмаҡ һалып Ҡағы, Әүжән урыҫтарына (знакумдарына) барып, иңенә йөкмәп тоҡ менән картуф ташый. Ул Ҡыраҡанын Ҡағыға йөрөгән һуҡмаҡты ауыл кешеләре шул дәүерҙән алып Ишкенә трапаһы (тропинка), ә Ҡолғана ауылында унан таралған ғаиләләрҙе Ишкенә араһы, тип йөрөтә халыҡ.

Әйткәндәй, 1812-1814 йылғы Ватан һуғышында Ишкенә араһының улы Ишкенә Көсөкҡолов Парижды алыуҙа ҡатнашып, ике миҙал кавалеры була. [1]

Тауҙар, ҡаялар

Ҡолғилде. Оло Кәбәс ауылынан төньяғында урынлашҡан бейек тауҙы атайҙар. Ҡолғилде даны таралған, шәп һунарсы була, һунарға гел яңғыҙы йөрөр булған. Бер мәл айыуға һунарға барып өңөнән сығарып һөңгөһө менән сәнсә. Ярһыған айыу һөңгө һабын һындырып һунарсыға йәбешә. Сос, етеҙ һунарсы яртылаш ҡалған һөңгөһөн ала һалып айыуға йәнә сәнсеп үлтерә. Хәлһеҙ һунарсы өс көн һәм кис айыу өңөндә йоҡлай. Ауылдаштары өсөнсө көн табып ауылға алып ҡайталар. Данлыҡлы һунарсының нәҫелдәре Байғазин Миңлеәхмәт ағайҙың (1932 йылғы) әсәһе Гөлмәҙинә яҡлап атаһы Сәйфулланың унық атаһы Ҡолғилде булған да инде. Ҡолғананың улы Ҡолғилде ятҡан айыу өңө тауы унық иҫтәлегенә Ҡолғилде тип йөрөтөлә.

Ҡарауыл түбә тауы һәм йылғаһы. Сура батыр легендаһына ҡайтып ҡала. Ҡалмыҡ-ҡаҙаҡтарҙың ҡайҙан килеүҙәрен ҡарауыллап ултырғандар.

Ат тауы. Байҙың аттары тибендә йөрөгән тау булған. Шунан ҡалған инде “Ат тауы” булып.

Мәсет тауы һәм йылғаһы. Ауылда ике мәсет булған. Береһе йылға аръяғында аҫта, икенсеһе тау башында булған. Аҫтағы мәсетте биштек, ти торғайнылар, ә өҫтәгеһен аяттыҡ, ти торғайнылар. Унынһында аят уҡый торғайнылар. Шул тауҙы “Мәсет” тауы, йылғаһын “Мәсет” йылғаһы, тибеҙ.

Бәрҙебешергән ҡая. Был ваҡиға бик борон була. Түңгәүерҙән Тамъянға юлланған бер мосафир (ул мәлдә Һарғая ауылы булмай), йәйәүләп килә торғас, арый, асыға. Бәхеткә күрә, ул кеҫәһендә ҡармағы барлығын иҫенә төшөрә. Хәҙерге Һарғая менән Ҡолғана ауылы араһында юлға яҡын Үҙән йылғаһы буйында балыҡ ҡармаҡлап, тамаҡ туйҙырып алырға була. Йәйге селләлә көн эҫе. Беләк буй ҡара берҙеләрҙе бер шеш самаһы тотҡас, кәҫәһендә шырпыһы булмау сәбәпле, башына шундай уй килә: балыҡтарҙы таҙалай ҙа, ҡояшҡа ҡаратып, ҡая сусағына теҙеп һала һәм бер аҙ ял итеп алырға була, үҙе тәрән йоҡоға тала. Байтаҡ ваҡыт үткәс, уянып китһә, ҡояш кискә ауышҡан, ә балыҡтар ҡояштың сағыу нурҙарына кетерҙәп бешкән. Тамаҡ ялғап алғас, мосафир тауға һоҡланып ҡарап тора ла: “Вәт, исмаһам бәрҙе бешергән ҡая, рәхмәт һиңә!”- тип артабан юлын дауам итә. Ошо ваҡиғанан һуң ауыл халҡы Үҙән йылғаһы буйындағы был тауҙы Бәрҙебешергән ҡая тип йөрөтә башлай. [1]

Йылғалар, күлдәр

Әңкес йылғаһы. Һарғая менән Ҡолғана араһындағы тауҙы һәм йылғаны шулай атайҙар. Берәү бисәһен Бөрйән яғынан алып ҡайтып килгәндә аяғын ауырттырған. Аяҡтары сәңкеп ҡалған. Шунан Әңкес булып киткән инде был ер. Әңкес йылғаһы таш-ҡая араһынан ағып сыға:

“Буҫтан киткән Әӊкес ҡарап,
Ике бото сәӊкеп ҡалған”, -

тигәндәре генә иҫтә ҡалған. [4]

Әпсәләр йылғаһы. Тирмә тирәләй сыр-сыу килеп уйнаған бала-саға, үҙ эштәре менән мәғшүл булған ҡатын-ҡыҙ, бар донъяһын онотоп тәбиғәттеӊ хозурлығына кинәнәләр ине. Көтмәгәндә Үҙән буйында йәйләүҙә иртәнге тынлыҡты боҙоп ығы-зығы ҡупты. Эт өргән, аттар кешнәгән тауышҡа Сура тирмәнән килеп сыҡты ла, эштеӊ ниҙә барғанын һиҙеп, ир-егеттәргә юлға сығырға (ҡатын-ҡыҙға уяу торорға) ымланы һәм йәһәт кенә уҡ-һаҙаҡтарын алып, тауыш сыҡҡан яҡҡа ҡарай сапты. Улар тирмәнән күп тә алыҫ барманылар, башҡорт ерҙәренә – байлығына ҡаныҡҡан ҡалмыҡ һыбайлылары ***Перистан туғайы***нда иртәнге ысыҡта утлап йөрөгән йылҡы өйөрөн ҡыуып алып ҡасып барғанын күреп ҡалалар.

Ярһыған Сура күп уйлап тормай, тегеләргә бер-бер артлы уҡ яуҙыра, бер нисәһе ат башынан тәгәрәп төшә, ҡалғандары йылҡы өйөрөн ташлап урман эсенә инеп ҡаса. Сура иртәгеһен йәйләүҙә йәшәүсе халыҡты йыйып, Үҙән буйына икенсе урынға күсенергә әмер бирә. Ә ир - егеттәр ҡалмыҡ баҫҡынсыларының хәйлә-мәкерле уйҙарын һиҙеп, Кәртәбар, Тарбаҡ, Үҙән башындағы шырлыҡта уларҙың был яҡтарға килеүҙәрен көн дә сиратлап көтөргә була. Сура ҡатын-ҡыҙға, күпте күргән әсәләргә, бала-сағаға һәм ҡарт-ҡороға уяу булырға, утты төш мәлендә генә яғырға (сөнки был ваҡытта ут төтөнө ҡырға таралмай) әйтә.

Ә ҡатыны Йәмиләгә көн һайын яҡындағы тау түбәһенә менеп тирә-яҡты, баҫҡынсыларҙы күҙәтеп торорға ҡуша.

Ҡалмыҡтарҙан интеккән йәйләү халҡы берҙәм булып ойошоп, һәр йыл һайын йәйләү осоронда үҙҙәренеӊ уяулығын арттырырға һүҙ ҡуйыша. Әллә шуны һиҙепмелер, ҡалмыҡтар был яҡтарға ҡарымтаға бөтөнләй килмәҫ була.

Бола заманы тыма. Йәйләүҙәге халыҡ ҡарауыллап торған теге тауҙы – Ҡарауылтүбә, ә тирмә яғынан аҡҡан (ҡатын-ҡыҙ, әсәләр көн дә һыу алып, һыу инеп йөрөгән) йылғаға Әсәләр йылғаһы тип, (йылдар үтеү менән Әсәләр йылғаһы “Әпсәләр” булып үҙгәрә) атарға була.

Был ер-һыу атамалары ата-бабаларыбыҙ ҡушҡанса әле лә шул исем менән йөрөтөлә. [1]

Ҡолаҡай һәм Ҡолатай йылғалары. Ҡолаҡайҙың бер ҡолағын Иҙрис ҡолағы тип йөрөтәләр. Ауылда бер боҙоҡ, насар әҙәм булған. Сход йыйып уны ауылдан ҡыуғандар. Иҙрис Ҡолаҡайҙа нурҙа һалып балыҡ тотоп көн күргән. Ҡорбанғәле олатай уны яҡшы белгән, уның йырҙарын да йырлап ебәрер ине. Бер аҙын иҫләгәндәрен яҙайыҡ:

Һарғайҙы башы – Ҡолаҡайҙың
Ҡолаҡай башы – Ҡолатай.
Ҡолатайҙы ашап бөткән
Иҙерис тигән олатай.
Иҙерис, Иҙерис.
Аяҡтарын көп- көмөрөс
Иҙерис, Иҙерис.
Ҡолатайҙы ашама,
Ҡоротонҙо иҙеп эс.
Ана шулай, Иҙерис. [4]

Тукал йылғаһы һәм“Тукал асығы”. Ҡалмыҡтар Сураның ҡатынын урлап, туҡал һыйыр һуйып, атамандарына туй үткәрергә булғандар. Ләкин Сура уларҙы шул урында тар-мар иткән. Ошонан ҡалған инде “Туҡал йылғаһы” һәм “Туҡал асығы”.

Большевик күле. 1918 йылдың декабрь айы ҡыҙылдар, йә аҡтар ауылды баҫып алалар. Смоленск полкының Каширин отряды ҡыҙылармеецтары менән Колчаксылар араһында һуғыш була. Алдан нығынып өлгөргән аҡтар һыбайлы ҡыҙылдарға пулеметтан ут асалар. Аҡтар Каркабарҙан орудиенан ут асалар, разведчиктары ҡыҙылдарҙың ҡайҙалығын яҡшы белгән кеше ***Тарбаҡ тауы*** башында тороп ҡайҙа ут асырға икәнен күрһәтеп торған. Ҡыҙылдар ҙә бирешмәй. Көс тигеҙ булмағас, еңеләләр. Тик ҡаса алмай ҡалалар. 18 ҡыҙылармеецты тотоп алып, күл янында аталар. Ҡайһы ерҙә икәнен берәү ҙә яҡшы белмәй. Күл үҙе өс-дүрт күлгә бүленеп ята. Күлде лә “Большевик” күле тип йөрөтәбеҙ. [4]

Яландар, туғайҙар, сабынлыҡтар

Суван ҡолағашҡаһы. Был яланда Суван һәм Ҡаҙмаш ауылдары кешеләре йәйләгән. Шунан тороп ҡалған атамалар.

Ҡаҙмаш ҡалағашҡаһы. Был яланда Суван һәм Ҡаҙмаш ауылдары кешеләре йәйләгән. Шунан тороп ҡалған атамалар.

Иманбаһҡан яланы. Бер бабай ағас төбөндә йоҡлап ятҡанда уны иман баҫа. Шул төшөнән һуң бабай иманға баҫҡан да инде. Яланға ла исеме ҡалған “Иманбаһҡан” яланы тип.

Бәрәс сабыны. Был туғайҙа Бөрйәндән Барасенков тигән урыҫ килеп бесән сабып ятҡан. Халыҡ уның фамилияһын башҡортсалаштырып “Бәрәс сабыны”, - тиҙәр.

Билдәле, тарихи һәм иҫтәлекле урындар

Ҡолғана ауылы. Ҡолғана ауылдары элек Ҡолоҡас, Ярылҡап ауылдарында йәшәгән. Тулыбай йылғаһы буйында, Өйташ тауы эргәһендә Тулыбай тигән бер ҡарт бер үҙе генә йәшәгән. Шунан Ҡолғана бабай ошо ергә өй һалдырта. Бик бай булғандыр инде, алты йыл тыу йөрөгән бейәне һуйҙыртып, Ҡолғана бабай үҙенең исемен ауылға ҡуштырған. Әүәлге исеме Тамъян булған. Анаһын инде аңлата алмайым,- тип һөйләй Сәкинә инәй Ғәтитуллина.

Ҡаҙмаш утары. Башҡорттар борон-борондан йылҡы һәм башҡа малдарын көтөп, яҙ йәйләүгә күсенеп, ҡыш ҡышлауға әйләнеп ҡайтҡан. Бигерәк тә Көньяҡ Урал төбәгендә йәшәүсе Ярлыҡап, Рыҫҡужа (элекке исеме – Суван), Ҡаҙмаш, Ҡолоҡас ауылдары (Әбйәлил яғы) кешеләре һәр йыл иртә яҙҙан малдары менән Бөрйән районының Ҡолғана ауылына яҡын иркен яландарға күсеп килгән һәм көҙгә тиклем йәшәгән. Ҡола ҡашҡа асығын (Ҡолғана ауылына -9, ә күсеп килеүселәр ауылына 20-25 саҡрымдан ашыу) шул замандарҙан алып Суван Ҡолағашҡаһы тип, ә ҡаҙмаштар ултыраҡ иткән ерҙе Ҡаҙмаш Ҡолағашҡаһы тип йөрөтәләр.

Тарихи мәғлүмәттәргә ҡарағанда, Ҡолғанаға Ярлыҡап ауылынан күсеп килеүселәр беренсе булып нигеҙ һалған. Әйткәндәй, Ҡаҙмаш Ҡолағашҡаһында бынан 200 йыл элек булдырылған зыяратты яҡын-тирәлә белмәгән кеше һирәктер.

Ул дәүерҙә йәйләүҙәгеләр мәрхүмде үҙ ауылына алып барып тормаған, уңайлы ерҙе һайлап, шунда ерләгән. Ҡолғана ауылынан Әбйәлил районына сыҡҡан юл буйында ғына ла әллә күпме зыярат, ҡәберлек бар. Революцияға тиклем үк әле Ҡолғана ауылынан 7 саҡрым алыҫлыҡта – Үҙән йылғаһы буйында (Хәмит ауылына барған юлда) Ҡаҙмаш ауылынан килгән Рауил, Билал исемле эшҡыуарҙар эш асҡан. Берәүҙәр соҡор ҡаҙып, күмер үртәгән, ҡарағай утыны күмерен Ҡағы заводына тапшырған. Икенселер ҡайын туҙынан дегет ҡайнатҡан. Ә өсөнсөләр транса, ҡул бысҡыһы менән таҡта ярып, ылау-ылау итеп тейәп, борон-борондан дан тотҡан Хәлил баҙарына (Әбйәлил районы) сығарып һатҡан.

Дегет алыр өсөн ағас үртәүселәр табандарына һәр саҡ ҡаты туҙ бәйләп йөрөр булған, сөнки ул аяҡ кейемен ҡоро тотҡан, бысратмаған, таймаған да. Ана шуға ла инде бында эшләүсе кешеләр яҡындағы бәләкәй генә йылғаны Туҙтабан йылғаһы тип йөрөткән. Ҡаҙмаш ауылы кәсепселәре төйәк иткән урында 20-30-ға яҡын йорт булып киткән.

Ваҡыт үтә. Заманалар үҙгәрә. Гөрләп торған эш тә һүнеп ҡала. Кәсепселәр төрлөһө-төрлө яҡҡа таралыша. Улар йәшәгән урынды Ҡаҙмаш утары тип тә, Үҙән башы тип тә йөрөтә башлайҙар. [1]

Бyҙыҡай йорто. Буҙыҡай (Әбйәлил районындағы бөткән ауылы) ауылы кешеләре Күкбейүлгән һәм Буҙыҡай ерҙәрендә йәйләгәндәр.

Ҡаҙмаш утары (хәҙерге атамаһы Үҙән башы). Хәмит менән Ҡолғана араһында ята. Октябрь революцияһы йылдарында Ҡаҙмаш ауылы ошо ерҙә ултырған. Ауыл статус алғанға тиклем утар тип йөрөтөлгән. Әммә 1930-сы йылдарҙа Башҡорт дәүләт заповеднигы ойошторолғас, таралған. Хәҙерге атамаһы - Үҙән башы. [2]

Үрге ыҙма (Перистан асығы). Мал араһында яман ауырыу таралып китә. “Төртмә ауырыуы” ти торғайнылар әбейҙәр. Шаяртып ҡай берҙәре: “Анау әбей төрттө инде” ти торғайнылар, мал ауыраһа. Ауырыуҙың исемен әйтергә ярамаған, исемен әйтһәң, ул шаша, ҡотора ти торғайнылар. Шунан ҡурҡып ошо асыҡҡа килеп ултырғандар, ауылда тормағандар. Ауылдан күскәс “Үрге ыҙма” булып ҡалған инде. Хәҙер онотола шул атамалар. 1930 йылдарҙа ошонан Үҙән буйлатып һал ағыҙҙылар. Үҙән ул саҡта көслө ағымлы, ҙур йылға ине. Ағасты ҡырҡып Үҙән туғайҙарына төшөргән урын “Перистан” (Пристань) булып ҡалған инде. [3]

Мейес асығы (Түбәнге Ыҙманың элекке атамаһы). Һарғая менән Ҡолғана ауылдары араһындағы Мейес асығы элек Түбәнге ыҙма тип йөрөтөлә ине. 1930 йылдарҙа күмер яндырыу заводы булған. Күмерҙе ялан яҡтарына алып сығып игенгә алмаштырыр булған халыҡ. Үрге мейестә Баһауетдинов Тахау, түбәнгеһендә Ҡәтиәт ҡарт (минең атай) эшләгән. Ә Ҡаратәкәлә (тау, йылға исеме) ям (соҡор) булған. Унда дегет ҡайнатҡандар. Мейес урындары әле лә беленә. [4]

Ишкинә (Эшкинә) тырапаһы. Ишкинәләрҙең олатаһы үҙе кәртүк сәсмәй, заводтан урлап ташыған. Тауҙар аша туранан заводтан көнөнә йөрөгән. Йөрөгән юл шымара бара һуҡмаҡҡа әйләнгән. Шуға күрә “Ишкенә тырапаһы” тигән исеме ҡалған да инде.

Памятник буйы. Большевик күле асыҡлығында 18 ҡыҙылармеецҡа бағышлап Магнитогорск ҡалаһынан килеп обелиск ҡуялар. Шунан алып был туғайҙы “Памятник асығы” тип йөрөтәләр.

Каркабар асығы. Әүжәндәнме, Ҡағынанмы урыҫтар ат малы юғалып килеп төшәләр. Башҡорт ҡунаҡсыл бит инде, бер ҡатын сәй эсерергә саҡырған. Сәй эсеп ултырғанда урыҫтар: “Карка, Карка бармы?” – тип һорағандар. “Карка бар, бар”, - тигән ҡатын. Ярай әле ул заманда урыҫса әйткәнең аңлағас. Урыҫтар аттарын Каркабар асығынан табып алып ҡайтҡандар. Ана шунан ҡалған да инде, Каркабар.

Һаһыҡҡыуыш. Бер бур гел ит урлап ҡыуышына ташыған. Кешеләр тегенең ҡыуышына тап булып, инәйек тиһәләр, ҡыуыш шул тиклем һаһыҡ икән. Урланған ит боҙолоп, һаһып бөткән, ти. Шунан был ерҙе “Һаһыҡҡыуыш” тигәндәр.

Туҡмапҡыр. Сураның 12 йәшлек малайы бер-нисә ҡалмыкты туҡмап үлтергән туҡмаҡ менән. Шунан ҡалған инде, “Туҡмапҡыр”.

Ҡарағайморон йәки фәкирҙәр зыяраты. 1921 йылғы аслыҡ ваҡытында астан үлгән кешеләрҙең икешәрен бер ҡәбергә һалып күмгәндәр. Һәр береһенә тәрбиәләп ҡәбер ҡаҙырға ас халыҡтың хәле булмаған.

Иҙелбай асығы. Иҙелбай тигән кеше – Ҡаҙмаштыҡы бер бай кеше булған. Ҡыҙылдар ваҡытында ла шунда йәшәгән. Мәжит ағай Сәйфуллин (1904 й.) шунда ҡыҙылармеецтарҙы алып барған. Төпкө һарайына барып инһәм, тип хәтерләй бабай, ҡаҙылар тамсылап ағып тора. Сыҡтым да ҡыҙылдарға: “Нету, тинем. “Болею” тип тороп ҡалдым, тигән. Иҙелбай исеме менән асыҡлыҡ атала.

Раҡибә уҫырған үҙәк. Ҡолғананың өләсәһе Рәҡибә әбей йыйып ҡуйған итен алам тип эйелгән ыңғайға уҫырған да ебәргән. Уның эргәһендәге бер кешегә: “Уй, ҡарға!” – тигән. Шунан һуң был ер “Рәҡибә уҫырған ер” тип, ә теге ҡарап торған кешенең затын “ҡарғалар” тип йөрөткәндәр. Ә элек улар мышылар араһы тип йөрөтөлгәндәр. [4]

Һарғая ауылы

Һарғая – Бөрйән районындағы бәләкәй генә бер ауыл. Иллеләп кенә йорт иҫәпләнә унда. Һарғая йылғаһы үҙәнендә урынлашҡан, Иҫке Собханғолдан 49 км алыҫлыҡта Башҡорт дәүләт ҡурсаулығы территорияһында урынлашҡан. 1939 йылда ауылда - 134, 1959 йылда - 148, 1989 йылда - 137, 2002 йылда - 168 кеше йәшәгән. Башлыса башҡорттар йәшәй. Ауылда башланғыс мәктәп, фельдшер-акушер пункты, китапхана бар.

Ауыл ҡалын урман, бейек тауҙар менән уратып алынған. Башты әйләндерерлек ҡарағай, шыршы еҫе тирә-яҡҡа таралған. Ҡурсаулыҡҡа беҙҙең климатҡа яраҡлашҡан маралдаҙыр (эре Себер боландары) Алтайҙан алып ҡайталар. Улар үҫеп нығынғас, иреккә ебәрәләр. Хәҙер Башҡортостан урмандарында уларҙың һаны байтаҡ инде.

Ҡурсаулыҡтың музейында нимәләр генә юҡ! Урман хужаһы – тайыштабан әллә ҡайҙан сәләмләп торған төҫлө. Бүре, һеләүһен, төлкө, йыландың ғына әллә нисә төрө, сысҡандар – барыһы ла бар. Төрлө үлән, сәскә, ҡош, хайуандар тураһында ҡурсаулыҡтың директоры, биология фәндәре кандидаты Вәсилә Әхәт ҡыҙы Яныбаева сағәттәр буйы һөйләй ала. Башҡорт дәүләт тәбиғәт ҡурсаулығы боронғоларҙан һанала һәм федераль статуска эйә. Ул 1929 йылда ойошторолған. Ҡурсаулыҡ Бөрйән, Әбйәлил һәм Белорет райондарына ҡараған ерҙәрҙе биләй. Дөйөм майҙаны – 49 мең 609 гектар. Ул тәбиғәт күренештәренең тәбиғи әйләнешен, үҫемлек һәм хайуандар донъяһының генетик фондын, айырым төрҙәрен, типик һәм уникаль экология системаларын өйрәнеү һәм һаҡлау өсөн булдырылған. Ҡурсаулыҡтың биләмәһе рельеф үҙенсәлеге буйынса бер-береһенән ныҡ айырылып торған ике өлөшкә бүленә: көнбайышҡа (Көньяҡ Ҡыраҡа тау массивының байтаҡ майҙанын алып тора) һәм көнсығышҡа (Уралтау һырты сигендә урынлашҡан).

Башҡорт ҡурсаулығында 76 ғаиләгә ҡараған һигеҙ йөҙҙән ашыу төргә яҡын көпшәле үҫемлектәр булыуы билдәле. Ҡатмарлы сәскәлеләрҙең – 77, ҡыяҡлыларҙың – 58, рауза сәскәлеләренең – 45, кәнәферҙәрҙең – 39, ҡуҙаҡлылар – 33, күрәнләләр – 26, сиражлылар – 24 төр, сатыр сәскәлеләрҙең 21 төрө бар. Әлеге ваҡытта бында япраҡлы-ылыҫлы ҡатнаш урман үҫә. Һыу буйҙарын туғай үҫемлектәре биләгән, урыны менән уны тал, ерек һәм муйыл ағастары алмаштыра. Һөҙәк, һаҡҡыу тау битләүҙәрен ҡайын, уҫаҡ күп булған япраҡлы урман ҡаплаған, аралаш ҡарағайҙар күренә. Был ерҙәрҙә туғай үләндәре, ваҡ

ҡыуаҡлыҡ ҡаплаған аҡландар күп. Текә, ташлы-каялы тау итәктәрен башлыса ҡарағай, урыны менән япраҡлы ағастар баҫҡан.

Башҡорт ҡурсаулығының йәнлектәр донъяһы ла бай һәм төрлө. Умыртҡалыларҙың 250 төрө, шул иҫәптән һөтимәрҙәрҙең 52, балыҡтарҙың 17 төрө һәм өс төр ер-һыу хайуандары менән алты төр һөйрәлеүсе, 192 төр ҡош көн итә. Бөжәктәр араһында күбәләктәр, ҡуңыҙҙар, яры ҡанатлылар, ике ҡанатлылар һәм башҡалар бар. Ағас ҡыуышында йәшәгән яры ҡанатлылар ғаиләһенә ҡараған ҡырағай башҡорт бал ҡорттары айырым ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра. Мышы, болан, марал, урман һыуһары, ҡондоҙ, ҡама, тейен, ҡуян һәм башҡа хайуандар был ерҙәрҙе төйәк иткән. Йыртҡыстарҙан бүре, һоро айыу, һеләүһен, төлкө осрай. Һуңғы ун йылда һеләүһен менән болан һирәгәйгән.

Музейҙа ошо һанап киткән күп кенә үҫемлек һәм хайуан-ҡоштарҙың һындарын күрергә мөмкин.

Башарт һырты. Һарғая ауылына яҡын Башарт һырты тигән ер бар. Риүәйәт буйынса, сапҡынсы ҡалмыҡтар менән урындағы ҡыпсаҡтарҙың бәрелеше була. Ҡалмыҡтар ҡыйратыла. Отряд башлығының башын киҫеп алып, атының эйәренә артмаҡлап эләләр. Әсиргә төшкәндәренән башҡа беҙҙең төбәккә килмәҫкә һүҙ алып, ҡыуып ебәрәләр. Ҡалмыҡтар – көнбайыш монгол ҡәбиләләре ойраттар XVI-XVII быуат сиктәрендә көнсығыштан Көньяҡ Уралға килеп төпләнмәк булалар. Башҡорттар тарафынан ҡыуып ебәрелгәс, Волга буйына барып урынлашып ҡалалар. Ҡаҙаҡ, нуғай, башҡорттар был тынғыһыҙ монгол халҡына "ҡалмаҡ" тип исем тағалар, "ҡалған", "ҡалыу" һүҙе тамырынан. Аҙаҡ ҡалмыҡ булып китәләр. Әле лә хайһы бер ауылдарҙа, яуҙа тороп ҡалған балаларҙан бөгөнгә тиклем "ҡалмыҡ" аралары һаҡланып килә. Ҡалмыҡтарҙы XIII быуат башында килгән монгол-татарҙар менән бутарға ярамай. [5]

Һарғая (һарғайҙы) йылғаһы. Һарғая йылғаһының тарихы былай. Бер бай ғына кеше килеп Һарғайҙы арҡаһында ағас ҡырҡа. Ҡырҡҡан ағасын Һарғая йылғаһына төшөрөп Үҙән аша алып ҡайтырға уйлаған. Һарғая йылғаһы яҙын тиҙ ташып тора ла, тиҙ ҡайта. Ҡырҡылған ағастарҙы төшөрһә лә һыу тиҙ ҡайтҡас, сығарырға мәжбүр була. Шулай итеп сығара алмаған ағастарын: "Ағастарын сығара алмай һарғайҙы бит, бахыр"- тигәндәр, уны йәлләп. Ана шунан ҡалған да инде "Һарғайҙы" йылғаһы.

[1] Сәрүәр Ғәләүетдинов

[2] Баһауетдинов Мөхәммәт апа һөйләүе буйынса яҙылды.

[3] Сәкинә инәй Ғәтиәтуллина һөйләүе буйынса яҙылды.

[4] Ғәтиәтуллин Мортаҙа апа хәтирәләренән (1990 йылда) яҙылған.

[5] Тарих уҡытыусыһы Заһир Дәүләтбирҙин.

Бәләкәй Ҡыпсаҡ ауылы

Үҙән йылғаһы буйында, һөҙәк тау битендә ***Әбделмәмбәт*** һәм ***Килдеғол ауылдары*** араһында үткән быуат урталарында ауыл барлыҡҡа килә. Ул ситтән ҡарағанда соҡор эсендә ултырған төҫлө, тирә-яғын ҡуйы урман ҡаплаған. Ауыл янындағы ер-һыу атамалары бик һуң барлыҡҡа килгән һәм ҡасандыр ошонда йәшәп киткән кешеләр менән бәйле. Ябай халыҡ телендә ауылда ***Кардон*** тип йөрөтәләр. 1950 йылға тиклем Үҙән йылғаһының һул ярында ҡарауылсыһы П.И.Капалов йәшәй. Был тирә Петр Ивановичтың кардоны була. Ауылдан көнсығышта, 200-300 метр алыҫлыҡта ҙур булмаған асыҡлыҡ бар – унда ҡарауылсы бесән эшләгән. Бөгөнгө көндә ошо урын ***Ҡыпыл сабыны*** тип атала.

Һарағы юлы буйындағы һулаҡайҙағы асыҡлыҡта Кочетков Калентий баҡса тотоп картуф сәскән. ***Кәлентий баҡсаһы*** атамаһы шунан ҡалған да инде. Һуңыраҡ был тирә мал саңдауына әүерелә. 1950 йылда Әүжән химлесхозына ҡараған Көньяҡ Үҙән участкаһы асылғас, ағас ҡырҡыу, таҡта ярыу, һал ағыҙыу, сайырсылыҡ эше өсөн ситтән эшселәр йәлеп ителә. Буйҙаҡ эшселәргә һәм ағас ҡырҡыусыларға пекарня асыла. Ҡыпыл сабыны яғындағы ауылдан күренеп торған ҡабаҡ ***Пикарный тауы***, ә үҙәк ***“Пикарный үҙәге”*** тип атала. Ошо тауҙың урта биленән һыу урғылып сыға (яҫы таштар араһынан тау тишеп сыҡҡан һыу – һирәк күренеш), төҫө күгелйем, көйәнтәләһәң, тослоғо менән яурынды баҫа. Халыҡ яратып һыулаған шишмә ҡыҫҡа ғына боролоштар яһап, шундыҡ Үҙәнгә ҡоя. Уны ***Түбәнге котоҡ*** тип йөрөтәләр.

Үҙән йылғаһының ҡаяға һуғылып, киҫкән боролош яһап аҡҡан һулаҡай яры-шау ҡырсын. Арьяҡтағы ҡаршыһындағы ҡая ***Ҡырсынҡая*** исемен алған. Янындағы үҙәктән ***Сукмуйыл котого*** аға. Һөрөп ташлағанға ҡәҙәр шишмә баш алған яланда суғым ғына муйыл ағастары була. Көнсығышҡа ҡарап юл алған шишмәләр халыҡ ырымы буйынса, шифалы һанала (күҙе елһегән кеше таңғы 4-тә өс көн рәттән йыуынһа, сире шундуҡ бөтә).

Элек йәшәп киткән урыҫтарға эйәреп ауыл халҡы туғайҙарҙы исеме менән түгел, ә кисеү һаны менән йөрөтә. “Урал” АХК-һы биләмәһенә ингән туғайҙарҙың үҙ исеме бар.

Аҫҡы урамда ***Бандарка тәңгәле*** бар. Сайыр ағыҙыу – мәшәҡәтле эш. Шуға ла уға әҙерлек ҡыш көнө үк башлана. Ҡыш диләнкәләге ҡарағайҙарҙың ҡабығы әрселә. Ул осорҙа тимер мискәләр булмай. Ағас мискә, ҡатырға воронҡа, ағас сөй әҙерләү өсөн 1952 йылда бондарка асыла. Мискә өсөн бер тигеҙ таҡталар – көлөпкә ярыла. Уны бондарканың сушилкаһында киптерәләр. Елемләп, 6 урындан ҡоршау һуғып, төпләп эшләгән мискәләр бик тиҙ ҡорғаҡһып шаурамаһын өсөн, сайыр диләнкәләрендә ерҙә баҙ ҡаҙып, хронилкаға ултырталар. ***Хранилка*** атамаһы шунан ҡалған. Ҡуйы урман араһындағы ошондай урындар, йылдар үткәс тә, мүкләнеп, кеше күңеленә шом һалып тора. Ә көртмәле тап ошондай ерҙәрҙә үҫә лә инде. Бөгөнгө көнгәсә фән аңлата алмаҫлыҡ тәбиғәттең серле күренештәре, ә урындағы халыҡса, бире күсенеү кеүек кираматтар 70-се йылдар башында ла осрап ҡуя. Үкенескә күрә, хәҙер был ерҙәрҙә һерәйеп торған ҡоро ағас төпһәләре генә ҡалған.

Үҙән үренә табан, ауылдан бер аҙ бүленеп, утар кеүек икешәр фатирлы 4 йорт булған. Эш бөтөп, халыҡ күсенеп киткәс, иң һуңғы булып ошо йорттарҙың береһендә сығышы Яуымбай кешеһе Ҡарасурин Муса Сәлих улы йәшәй. Ул күсенеп киткәс, был тирә *Муса туғайы* исемен алған. [1]

[1] Миңнур Ҡасимова

(Информаторҙар: Мөхәмәтғәлин Зәки Усман улы, Ҡаһарманова Бибикамал Мөхәмәтвәли ҡыҙы (1927 йылғы)

Иҫке Монасип ауыл биләмәһенә ҡараған ер-һыу атамалары

Иҫке Монасип ауылы

Борон-борондан кеше тау, йылға, ялан, ауылдарға исемдәр биргән. Ваҡыт үтеү менән тел дә үҙгәрә, ә атама тороп ҡала. Ҡайһы бер атама - һүҙҙәр ҡулланыштан сығып, архаизмға әйләнеп, икенсе һүҙҙәр менән алышынған. Ошо атамаларҙың мәғәнәһен асып, уға бәйле риүәйәттәрҙе яҙып, киләһе быуынға еткереү беҙҙең изге бурыс.

Беҙҙең атай-әсәйҙәрҙең һөйләшкән теле хәҙерге телдән ныҡ айырыла. Күп һүҙҙәр онотолдо инде, - ти әсәйем, 83 йәшлек Асия Зекриә ҡыҙы. - Илленсе йылдарға тиклем кеше "ауыл" һүҙен ҡулланманы, "ыҙма" тип йөрөттөләр. Бесәндә, йәйләүҙә ятҡанда ла "ауылға ҡайтып киләбеҙ" тимәй, "ыҙмаға ҡайтып киләбеҙ", тип - әйтерҙәр ине. Ауылдарҙы ла боронғо исемдәре менән генә йөрөттөләр: Мораҙым Имес йә Алатау, Мәһәҙей – Түңгәүер, Яуымбай –Ҡайынөй, Ҡолғана - Тамъян, Килдеғол - Һарағы, Әбделмәмбәт - Үҙән, Иҫке Мөсәт - Саҡмағош, Кейекбай - Баштире, Яңы Монасип - Мишәр, Иҫке Монасип – Һарт. Бөрйәндәр менән ҡыпсаҡтарҙың да тел айырмаһы бар ине, хәҙер ул да бөттө. Бөтәһе лә дөйөм әҙәби телгә күстеләр.

Иҫке Монасип (Һарт) ауылының Ағиҙел аръяғында тау итәгендә урынлашҡан өлөшө Кепес тип йөрәтөлә Кепес-хәҙерге төрөк телендә тау бите, тау итәге мәғәнәһен аңлата. Һарт менән Мишәр араһындағы тау - Тәпәнәк. Тәпә - төрөк телендә «тау». Бөтә төрки халыҡтар бер тамырҙан. Ошо ике аңлатма ғына ҡасандыр беҙҙең телдәр бер, йәки бик яҡын булғанлығын дәлилләй.



Кепес, Һарт, Мишәр ауылдары

Һарттар - XX быуат башына тиклем Урта Азияла йәшәгән, мең йыллыҡ бай тарихы, теле, мәҙәниәте булған төрки халыҡ. Һуңғы бер нисә быуат эсендә был ҡәүем, башҡа төрки халыҡтарға ҡушылып, йәғни ассимиляцияға бирелеп, айырым милләт булараҡ юҡҡа сыға. XX быуат башында Үҙбәкстан биләмәһендә 2 млн. самаһы һарт йәшәй. Ташкентта һарт телендә матбуғат та баҫтырыла. Әммә 1937 йылғы халыҡ иҫәбен алыуҙа һарттар булмай, үзбәк яҙылалар. Һарт нәҫелдәре бөгөн үзбәк, ҡаҙаҡ, төркмән, башҡорт, ҡарағалпаҡ, төрки булмаған тажиктар араһында ла бар.

XVII-XVIII быуаттарҙа һарттар Башҡортостанға күсеп килеп ултырып, артабан аҫаба башҡорттар булып китә. Рус этнографы, тарихсы Н. П. Остроумов уларҙы былай һүрәтләй: “Һарттар тиҙ тоҡаныусан, ҡыҙыу тәбиғәтле, намыҫлы, үткер, аҡыллы һәм эшһөйәрҙәр. Фанатик мосолмандар”. Һарт ауылдарын республикабыҙҙың төрлө төбәктәрендә осратырға мөмкин. Хәҙерге Силәбе, Ҡурған башҡорттары араһында, Ҡырмыҫҡалы, Шишмә, Дыуан, Әбйәлил райондарында һарт нәҫелдәре күп.

Беҙҙең Һарт ауылына килгәндә, Ҡарағай-Ҡыпсаҡ шәжәрәһе түбәндәгеләрҙе бәйән итә: “Яуҙан алып килгән ике ул балаға Ишбулды һәм Ишкилде исемдәре ҡушылып, уғылы булмаған Ҡубашҡа бирелде, Сартлар айырылды". Риүәйәт буйынса, һарттар беҙҙең яҡҡа сапҡын яһағандар. Үҙҙәре менән ҡатындары ла, балалары ла була. Ике ир бала яу яланында ташлап ҡалдырылған. Малайҙар үҫеп ир еткәс, уларға туғайҙан ер бүлеп, башлы-күҙле иткәс, Һарттар күбәйә. Шулай итеп, ауылды ***Һарт*** тип йөрөтә башлайҙар. Ҡубаш уллыҡҡа алған малайҙар XVI быуат башында йәшәгән Бабсаҡ бейҙән һигеҙенсе быуынға айырылалар. Тарихта дүрт быуын бер быуат йәки бер йөҙ йыллыҡҡа тиң. Бынан сығып, Һарт ауылы XVIII быуат башында нигеҙләнә тип әйтергә була. Әммә архив материалдарында, Монасип ауылына XVIII-XIX быуаттар сигендә Монасип Юлдашбаев нигеҙ һала, тиелә. Документтар буйынса, Бөрйән район биләмәһендә булған бөтә ауылдар ҙа тиерлек XVIII быуат аҙағы, йә XIX быуат эсендә барлыҡҡа килгән. Был шул осорға тиклем беҙҙә ауылдар булмаған, тигәнде аңлатмай. Утарҙар, бәләкәй ауылдар була, тик һуңыраҡ рәсмиләштереләләр.

Дөрөҫ, байтаҡ ауылдар, шул иҫәптән Мораҙым, Кейекбай, Яңы Монасип, Ғәлиәкбәр һ.б. ҙурайған башҡа ауылдарҙан айырылып сығыу һөҙөмтәһендә, шулай уҡ икенсе яҡтан күсеп килеүселәр тарафынан барлыҡҡа килә. Мәҫәлән, Ғәлиәкбәргә Темәстәр нигеҙ һала. [1]

Ер-һыу атамаларында сапҡынсыларға ҡаршы көрәш сағылышы

Таңбикә яланы.

- Миңә был тарихты 1898 йылғы Хәлитов Шәрәфулла Әбдулҡасим улы һөйләгәйне. Шәрәфулла бабай боронғоларҙы күп белде, - тип һүҙен башлай Һарт ауылынан Ғәлин Рәхимйән Ғүмәр улы.

Барымта ваҡытында була был хәл. Ҡырғыҙҙар көтмәгәндә һөжүм итеп, ҡатын-ҡыҙҙарҙы урлап, малдарҙы ҡыуып алып китә торған булғандар. “Иҙел түбәненән ҡырғыҙҙар килә”, - тигәнде ишеткәс, ауылдың бөтә ир-аты ҡоралланып, атҡа атланып уларға ҡаршы сыға. Ҡатын-ҡыҙ, бала-саға, ҡарт-ҡоро ваҡытлыса урманға йәшеренә. Сапҡынсылар хәйләләшә – ике төркөмгә бүленәләр. Бер төркөм сигенгән булып, беҙҙең ирҙәрҙе үҙҙәре артынан эйәртеп тау араларына алып инеп китә. Икенсе төркөм тау аша урап ауылға төшә һәм эҙ буйлап ҡасҡан халыҡ артынан китә. Ауылдан саҡырым ярым төньяҡҡа, ***Ҡыйрат*** менән ***Атъятҡан тауҙары*** араһындағы бәләкәй ялансыҡта йыйылған кешеләргә сапҡынсыларҙың ат тояҡтары тауыштары ишетелгәс, Гөлбостан исемле ҡыйыу ҡатын халыҡты туплап, урман эсенән Атъятҡан тауына алып менеп китә. Гөлбостандың уктан мәргән атҡан, ҡорал менән оҫта эш иткән Таңбикә исемле батыр ҡыҙы була. Ҡурҡыу белмәҫ ҡыҙ уҡ-һаҙағын әҙерләп, ялан ситендә ауылдаштарының юлын ҡаплап ҡала. Аҡланға килеп сыҡҡан сапҡынсыларҙы Таңбикә уҡ яуҙырып ҡаршы ала. Тиңһеҙ алышта батыр ҡыҙ 11 сапҡынсының йәнен ала, үҙе лә һәләк була. Аҡлан ситендә, ҡарағай араһында сапҡынсыларҙың ҡәбер таштары әле лә һаҡлана.

Гөлбостан яланы. Ҡалған сапҡынсылар етеҙ аттарында Атъятҡанды менеп бара биргәс, халыҡты ҡыуып етәләр. Гөлбостан ҡыршылыҡ күрһәтеп ҡарай, ләкин ярһыған ҡырғыҙҙар ҡатынды тотоп, аҡлан ситендә үҫкән бер ҡарағайға аҫып китәләр. Был түңәрәк ялан хәҙер Гөлбостан исемен йөрөтә. Сәскәгә күмелгән аҡлан уртаһынан шишмә урғылып сыға. Аҡлан

ситендә, башҡа ағастарҙан айырылып, шул ваҡиғалар шаһиты, ҡолас етмәҫлек ҡарт ҡарағай тора.

Үлек арҡаһы. Иҫке Монасип яғынан Тимер ауылына барғанда Мәйғәште йылғаһын сығып, тау менгәс, Үлек арҡаһы тип аталған ҙур ялан асыла. Ауыл аҡһаҡалы Бикмәтов Мәжит Дилмөхәмәт улы һөйләүенән был урында башҡорт менән ҡырғыҙҙарҙың ҙур бәрелеше була. Ике яҡтан да күп кеше һәләк була. Алыш барышында ғәскәр башлыҡтары һуғыш яланынан сығып, уйһыу ергә төшөп: “Хәҙер бер-беребеҙҙе ҡырып бөтәбеҙ”, - тип, ҡан-ҡойошто туҡтатырға ҡарар итәләр. Ҡырғыҙҙарҙың үлгән һуғышсыларын ялан ситендә ерләйҙәр. Үкенескә ҡаршы, 1970 йылдар башында үткәрелгән мелиорация эштәре ваҡытында ***ҡыргыҙ зыяраты*** һөрөлә. Таштары алып ташлана. Ғәскәр башлыҡтары һөйләшкән уйһыулыҡ әле лә ***Мир уяһы*** тип йөрөтөлә.

Сапҡынсыларға ҡаршы көрәшкә бәйле ер-һыу атамалары районыбыҙ биләмәһендә байтаҡ. Иҫке Собханғолдан алыҫ түгел, Сибай юлы буйында, Бетерә йылғаһына Буҙарған йылғаһы ҡоя. Ололар һөйләүе буйынса, йылға буйында башҡорттар барымтасыларҙы ҡамауға алып, ҡырып бөтөрәләр. Аҡҡан кеше ҡанынан йылғаның һыуы болғанып буҙара. Шул ваҡыттан йылға ***Буҙарған*** булып ҡала.

Шулай уҡ Килдеғол аръяғындағы ***Ҡаншал тауы*** ла шул замандан ҡалған атама. Ғәлиәкбәр ауылынан 4-5 саҡырым көньяҡҡа Ҡырғыҙ айыры тигән ерҙә, яуҙа үлтерелгән ***Ҡырғыҙ бейе ҡорғаны*** һаҡлана.

Һарғая ауылына яҡын ***Башарт һырты*** тигән ер бар. Риүәйәт буйынса сапҡынсы ҡалмыҡтар менән урындағы ҡыпсаҡтарҙың бәрелеше була. Ҡалмыҡтар ҡыйратыла. Отряд башлығының башын киҫеп алып, атының эйәренә артмаҡлап эләләр. Әсиргә төшкәндәренән башҡа беҙҙең төбәккә килмәҫкә һүҙ алып, ҡыуып ебәрәләр. Ҡалмыҡтар – көнбайыш монгол ҡәбиләләре ойраттар XVI-XVII быуат сиктәрендә көнсығыштан Көньяҡ Уралға килеп төпләнмәк булалар. Башҡорттар тарафынан ҡыуып ебәрелгәс, Волга буйына барып урынлашып ҡалалар. Ҡаҙаҡ, нуғай, башҡорттар был тынғыһыҙ монгол халҡына “ҡалмаҡ” тип исем тағалар, “ҡалған”, “ҡалыу” һүҙе тамырынан. Аҙаҡ ҡалмыҡ булып китәләр. Әле лә ҡайһы бер ауылдарҙа, яуҙа тороп ҡалған балаларҙан, бөгөнгә тиклем “ҡалмыҡ” аралары һаҡланып килә. Ҡалмыҡтарҙы XIII быуат башында килгән монгол-татарҙар менән бутарға ярамай.

Көньяҡ-көнсығыш Башҡортостанда сапҡынсыларға бәйле топонимик риүәйәттәр бихисап күп. Төньяҡ райондарҙа осрамай.

Беҙҙең данлыҡлы яҡташыбыҙ, Бөрйән олоҫо тархавы Алдар Иҫәнгилдин 1731 йылда Кесе Ҡаҙаҡ Йөҙөндә илселек ағзаһы була. Әбүлхәир хан менән һөйләшеүҙәр алып барып, Кесе Йөҙҙө Рәсәй подданствоһы алдырыуға ирешә. Үҙ сиратында ҡаҙаҡ ханы Яйыҡ казактарына, башҡорт, башҡа Рәсәй подданныйҙарына сапҡындар яһамаҫҡа, карауандар һаҡларға, тыныс йәшәргә һүҙен бирә. Ләкин Рәсәй хөкүмәтенең ханға булған өмөтө аҡланмай, сапҡындар дауам итә. Сапҡынсылар Көнбайыш Себерҙәге урыҫ халҡына ла тынғы бирмәй.

1860 йылдарҙа Ҡаҙағстан биләмәләренең төп өлөшө Рәсәйгә ҡушылғанға тиклем сапҡындар туҡтамай. Барымтасы отрядтары бер нисә тиҫтә кешенән, бер нисә йөҙгә еткән. XIX быуат ҡырғыҙ (ҡаҙаҡ) барымтасылары, шул осор яҙма документтар буйынса насар ҡоралланған. Ҡуптәрендә суҡмар, һуйыл ағас, балта, һирәктәрендә иҫке һыҙма мылтыҡ, уҡ-ян, ҡылыстар була. Башҡорттар ҙа ҡаҙаҡ сапҡындарын яуапһыҙ ҡылдармаған. XIX быуат баштарында далаға сапҡындар яһап, меңәрләгән аттар ҡыуып алып ҡайтып, ҡаҙаҡтарҙы бөлгөнлөккә төшөрөүҙәрен дәлилләгән документтар бар.

Үҙ-ара сапҡындарҙа еңеүсе булмай. Ә инде урта быуаттарҙан ҡалған был традиция XIX быуаттың икенсе яртыһында Рәсәй биләмәләренә цивилизация үтеп инә башлағас әкренләп бөтә.

Ике туғандаш халыҡ бер-береһенә сапҡындар яһап ҡына йәшәгән, тиһәк дөрөҫ булмаҫ. Йәйләүҙәрҙә бергә байрамдар үткәреү: батырҙар көрәше, ат сабыштырыуҙар, сәсәндәр ярыштары булып торған. Халыҡтарҙың туғанлашып яҡынлашыуынан ҡурҡып, батша указы менән ҡатнаш никахтар тыйылһа ла, ысынбарлыҡта иһә үтәлмәгән. “Батыр ул тапҡың килһә, башҡорт ҡыҙына өйлән” тигән әйтем юҡтан булмағандыр. Уртаҡ легендалар “Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу”, “Иҙеүкәй менән Мораҙым” ышаныу, ғөрөф-ғәҙәттәрҙең, телдең яҡын булыуы мәҙәни бәйләнештәрҙең көслө булыуын, тамырҙарҙың дөйөм бер булыуын һөйләй. [1]

Тауҙар

Ҡыҙҙар тауы. Иҫке Монасип ауылын төньяҡ-көнсығыштан ҡаплап торған матур бейек, текә ташлы тау. Башында ҡарағай ҡатыш ҡарағас урманы. Тауҙың осонда ғына матур хәлфә ялансығы ла бар. Шул ялансыҡтан тирә - яҡҡа тауҙар теҙмәһенән торған иҫ киткес гүзәл күренеш асла. Яҙ көндәре йылынғас, үлән ҡалҡып сәскә атҡас Монасип ҡыҙҙары тау башына менгәндәр. Баҡырса менән һыу алып сығып, сәй ҡайнатып эскәндәр. Орсоҡ иләп, бәйләп-бәйләп, йырлап-бейеп күңел асып ҡайта торған булғандар. Беҙ бала саҡта ла ҡыҙҙар менән ошо тауға менән торғайныҡ. Хәҙер был йолала онотолдо, буғай. [2]

Шыуҙырғыс. Беҙҙең Иҫке Монасип ауылындағы тауҙар бик текә. Элек техника булмағас, ағастарҙы ҡырҡып, тауҙан шыуҙырған дар. Ағас шыуҙырған урынды, йәғни тау битләүен таҡырайтып бөтөргәндәр, әле лә ул ерҙең уры ны беленеп ята. Бөтәһе өс шыуҙырма булған. Халыҡ уны “Шыуҙырғыс тауы” тип йөрөтә. Әлеге көндә лә ҡайһы бер кешеләр унан ағас шыуҙыра. [3]

Ослотау. Ослотау ауылдағы иң бейек, текә тау. Уның битләүендә ағастар бик аҙ ғына. Ослотау, гүйә Осло итеп өйөп ҡуйылған кәбәнгә оҡшап тора. Шуға ла уның исеме Ослотау.

Өкө ташы. Борон-борон замандарҙа был ҡаяла өкөләр оялаған булған. Ҡаяның эскәрәк батып өңөрәйеп торған урынында өкөләр көн иткән. Шунан һуң был ҡая Өкө ташы исемен алған. Аҙаҡ аҡтар менән ҡыҙылдар һуғышы башланғас ошо ерҙә кешеләр ҡорал йәшергән булғандар.

Тәпәнәк. Был тау ауылдағы тауҙар араһында иң тәпәш булыуы менән айырылып тора. йыл әйләнәһенә балалар был тауҙан ҡайтышмайҙар. Тауҙы тәпәш булыуы сәбәпле Тәпәнәк тип атағандар.

Кепес тауы. Бер ҡарттың бик күп балалары була. Был бабай улдарын һәр береһен айырым араларға бүлеп ултыртырға булған. Шунан һуң ул ит бешерткән: кемгәлер күҙ, баш, кемгәлер өшә генә эләккән. Ә бер малайына күҙҙең кепсәндән торған өлөшө генә тейгән. Шунан һуң ул кепес араһы булып киткән. Кепес араһы булған улына тау буйында йәшәргә урын бүлеп биргән. Шул ваҡыттан алып тау Кепес тауы тип, ә был кешенән тыуған балаларын кепестәр тип йөрөтә башлағандар.

Ҡыйрат. Элек ҡаҙаҡтар башҡорт ерҙәренә баҫып инеп ауылдарҙың мал-тыуарын, ҡыҙ-ҡырҡынын алып китер булған.ҡаҙаҡтар беҙҙең ауылды ла урап үтмәгәндәр. Аңғармаҫтан ғына килеп баҫып ауыл халҡын ас-яланғас ҡалдырып киткәндәр.

Кешеләр аптырашта ҡалған. Халыҡты нисек тә булһа был бәләнән ҡотолоп ҡалыу тураһында əңәгәмә ҡорғандар. Шул саҡ уларҙың араһында төҫ башҡа оло ғына, әммә ҡыйыу, сәмсел әбей баҫҡанда: “Мин ҡотолоу юлын беләм,”- тигән. Күпте күргән, күпте белгән Гөлөстан әбейҙең кәңәшен барыһы ла хуплап алғандар. Тәүҙә ул ауылды ҡырға күсерттергән. Шунан һуң һәр бер ир-атты ҡоралландырып, ҡаҙаҡтар ауылға килгән саҡта ҡамап үлтереү тураһында кәңәшләшкәндәр.

Ҡаҙаҡтарҙың ауылға килеп инеүе була Гөләстан әбей барлыҡ ғәскәре менән дошманға ябырыла. Был алышта беҙҙең ауыл халҡы еңеп сыға. Иҫән ҡалған ике-өс ҡаҙаҡҡа бер-нисә ҡаҙаҡтын башын да биреп ҡайтаралар.

Ҡайтарған саҡта: “Әгәр тағы ла беҙҙең ергә яу менән килһәгеҙ, ошо һеҙҙе көтәсәк!”- тип әйткәндәр.

Башҡаса был тирәлә ҡаҙаҡтарҙың эҙе күренмәгән. Ҡаҙаҡтарҙы ҡыйратҡан урын Ҡыйрат тип атай башлағандар. Ә яу алдынан халыҡты күсергән урын Һолтанбикә яланы исемен алған. Ул Ҡыйрат тауынан ары 3-4 саҡрым алыҫлыҡта урынлашҡан. [4]

Ялан-туғайҙар

Үрге туғай, йәғни Ҡарағай туғай. Был тирәлә элек ҡарағай урманы булған. Ауыл халҡы мәсет төҙөү маҡсаты менән ошо урындан ҡарағайҙар ҡырҡҡандар. Мәсет төҙөү өсөн оҫталарҙы алыҫ урыҫ ауылдарынан скаҡырғандар.мөсет тә төҙөлгән, ҡарағайҙарҙы төҙөлөш кәрәк-ярақҡа өсөн дә ала килә, урман яланға әйләнә. Шулай Үрге туғай исеме менән ҡала.

Бохмаш туғайы. Был урынды борон Тимерҙәр ултырған булған. Монасип ауылы халҡы күбәйә башлағас, был урындан тегеләрҙе кире ҡайтарып ебәргәндәр. “Үҙебеҙҙең ер былай ҙа тар, яңынан үҙегеҙгә урын эҙләгеҙ?”-тигән улар. Нисектер был урынға Бохмаш тигән исем ҡушып ҡуйғандар. Кешеләр һөйләүенсә, әле лә был урында нигеҙ таштары ята икән.

Туҡмаҡ. Кешеләр, ғәҙәттә, бал ҡорттарына урманда солоҡ юнғандар. Бер яҡтан солоҡ ағаста урынлашҡас ҡош-ҡорт теймәгән, икенсе яҡтан урманда сәскәләрҙең ниндәй төрө генә юҡ.

Бер ваҡыт оло ғына ағайҙың солоғона айыу эйәләшкән. Ҡасан ғына барһа ла, солоғо туҙған, балын ашап бөтөргән була. Шунан һуң был кеше ағасҡа туҡмаҡ эшләп ҡуя.

Айыу ҡарағайға менгән саҡта туҡмаҡ юлында ҡамасаулап тора икән. Айыу шунда уҡ туҡмаҡты ситкә этә-туҡмаҡ уға һуғып ебәрә, асыуланған айыу нығыраҡ һуғып ебәрә, ә туҡмаҡ айыуҙы бөтөнләй ҡолатҡанса һуға.

Шулай итеп, кешеләр туҡмаҡ ярҙамында айыуҙан ҡотолғандар. Ҡорттар ҙа тынысланып ҡалған. Ошо ялан аҙаҡ Туҡмаҡ яланы исеме менән йөрөтөлә башлай. [4]

Иҫтәлекле, тарихи урындар

Ҡамшаҡлы йылғаһы. Иҫке Монасип ауылынан төньяҡлап-көньяҡҡа ҡарай ауылды бүлеп яҙлы-көҙлө генә аҡҡан йылғаға атағандар. Йылға тамағынан өҫтәрәк Ҡамшаҡлы яланы урынлашҡан. Ялан һаҙматлыраҡ, ер өҫтөндә мүкләнгән урындары ла күп кенә. Шуға күрә бында ҡамышҡа оҡшаш үләндәр өҫтөнлөк итә һәм шуға ла был урын Ҡамшаҡлы тип, ә ялан эргәһенән аҡкан йылға “Ҡамшаҡлы йылғаһы” тип атала. Ҡамшаҡлы йылғаһының Ағиҙелгә ҡойған урыны “Ҡамшаҡлы йылғаһы тамағы” тип йөрөтөлә.

Тыранса келәт. Элек кешеләр был тирәлә ағас ярып тырас эшләгәндәр. Ошо тырансаларҙы урлап бурҙар тау башында үҙенә күрә келәт эшләп ҡуйғандар. Урманда ҡарауылһыҙ йөрөгән һыйыр, һарыҡ, аттарҙы һуйып иттәрен ошо келәттә һаҡлағандар. Аҙаҡ был урын “Тыранса келәт” исемен алып ҡуйған.

Ат ятҡан. Борон аттар ҡыш көнө ҡар тәрән булмаған саҡта урманда ҡышлап сыҡҡандар. Ҡар тәрән булмағас аттар ҡар аҫтында ятҡан үләнде сапсып ашап көтөү-көтөүе менән ошо тауҙа йөрөгән. Шул ваҡыттан алып был урын Ат ятҡан исеме менән йөрөтөлә башлай.

Шәреле уй (Шәрифәле уй). Ҡаҙаҡтар ауылды баҫҡан саҡта бик күп ҡыҙҙар урлағандар. Бер әбей менән бабайҙың берҙән-бер Шәрифә исемле ҡыҙҙары булған. Күҙ ҡараһылай итеп үҫтергән был ҡыҙҙың ата-әсәһе нисек итеп йәшереп ҡалырға тип (уй) баш ватҡандар.

Сираттағыса ҡаҙаҡтар баҫҡас ата-әсәһе Шәрифәгә: "Иҙел аръяғына барып йәшенеп ҡал!"- тигәндәр. Ҡаҙаҡтар килеп Шәрифәне эҙләгәндәр, әммә таба алмай ҡайтып киткәндәр. Ә Шәрифә, шулай итепағастар, ҡыуаҡтар араһына йәшенеп ҡотолоп ҡалған. Уның йәшенеп ултырған ерен Шәрифә уй тип атай башлағандар. Ә хәҙер инде бөтөнләй ҡыҫҡартып Шәреле уй тип кенә йөрөтәләр. [4]

Шүрәлде уй. Тимер менән Монасип ауылдары араһында Мәйгәште йылғаһы аға. Мәйгәштенең Ағиҙелгә ҡойған тамағынан үрҙәрәк тауҙан йылға төшкән тәрән генә уйһыулыҡ бар. Уй башындараҡ ҡасандыр урман кешеләре йәшәгән мәмерйәләр ҙә булырға тейеш. Халыҡ борон урман кешеләрен албаҫты, бәрей йәки шүрәле тип йөрөткән. Шунлыктан уй Шүрәлде уй исмен алып ҡала.

Әйткәндәй, был тарихты һөйләгән 77 йәшлек Бикмәтов Мәжит ағайҙың үҙенә лә урман кешеһенең эҙен күрергә тура килә. 1939 йылдың көҙөндә бер төркөм малайҙар Мәйгәште тамағынан йыраҡ түгел тау итәгендә, ҡырпаҡ ҡарҙа ялан аяҡ бәләкәй бала эҙе күрәләр. Малайҙар урман эсенә инеп киткән эҙ артынан бара биреп, ҡурҡып кире боролоп ҡайталар. Элегерәк Шүрәлде уй тирәһендә урман кешеһенең һыҙғырғанға оҡшатып, эсе итеп ҡысҡырған тауыштары ла ишетелгеләгән. Бер нисә йыл элек "Комсомольская правда" гәзите лә Төньяҡ Уралда геологтарҙың алыҫта, ҡая башында бик көслө итеп һыҙғырғанға оҡшатып ҡысҡырып торған ҡырағай кеше затын күреүҙәрен яҙып киткән ине. [1]

[1] Зaһир Дәүләтбирҙин, Иҫке Монасип ауылы.

[2] Ғәлин Рәхимйән һөйләүе буйынса Заһир Дәүләтбирҙин әҙерләне.

[3] Зөһрә Ҡунафина Бикмәтов Факил Нәжметдин улынан 2005 йыл яҙып алды

[4] Ләйсән Хөсәйенова олатайы Хөсәйенов Хафиз Йыһанур улынан яҙып алған

Яңы Монасип ауылы

Ауылдың рәсми исеме - Яңы Монасип. 1917 йылғы революцияға тиклемге административ бүленеш буйынса Ырымбур губернаһы Верхнеуральск өйәҙе Ҡарағай – Ҡыпсаҡ волосына ҡараған. Халыҡ телендә ауылдың исеме – Мишәр.

Ауылдың төп урамы данлыҡлы ауылдашыбыҙ М. Сәғитов исемен йөрөтә, Ағиҙел, Дуҫлыҡ, Ҡаратау урамдары бар. Бөгөнгө көндә ауылда 361 кеше йәшәй.

Яңы Монасип ауылы Ағиҙел йылғаһының уң яҡ ярында урынлашҡан, ошондай матур ҡаялар, тауҙар менән уратып алынған.

Мишәр атамаһы. Яңы Монасип ауылының икенсе исеме – Мишәр. Унын да үҙ тарихы бар. Элек бер мулла-мөғәллим килеп балалар уҡытып йөрөгән. Мишәр булған. Күпмелер йәшәп, өйләнеп, был яҡтарҙа төпләнеү ниәтенән, йорт һалырға урын һораған. Беҙҙә ике Монасип. Хәл Иҫке Монасипта булған. Ике ауылды айырып Ағиҙел аға, теге мулланы килмешәк, арабыҙҙа йәшәмәһен тип, йылға аръяғынан, йәғни, әлеге беҙҙең ауыл урынынан ер биргәндәр. Ошонан килеп сыҡҡан да инде Мишәр атамаһы. Ауыл йылға буйында урынлашҡанға, эргә-тирәһе әрәмәлек булған. Сусаҡ тауы аҫтындағы Ҡыҙылъяр тигән (балсығы ҡыҙыл булып, ямғыр яуғанда Иҙелгә йыуылып төшә) урында Кейәүҙәр үҙәге булған. Бында борон егеттәр ҡыҙ күҙләргә, кейәүҙәр кәләш әйттерергә килгәндә аттарын ҡалдырыр булғандар, йә кеше күҙенә эләкмәҫ өсөн кис еткәнен көткәндәр. Ошо ерҙә Уразбикә юлы ла бар. Ауылда бер хәлһеҙ генә әбей йәшәгән. Яҙға табан бесәне етмәй башлаһа Сусаҡтың һөҙәк һыртын көрәп, юл ярып, ваҡ малын ашатырға алып сығыр булған.

Тауҙары, тау үҙәктәре, уй һәм соҡорҙары

Бәләтар тауы. Бейгилде яланына юл төшкән тау. Ошо тауҙан төшкәндә, Ҡара ҡоләмбәткә һыйыр өҫтөндә артына ҡарап ултырғас, бик ыҙалаптөшөргә килгән. “Уй, ниндәй бәләгә тарыным бит”, - тип зарланған. Шунан тауҙы Бәләтар (Бәләгә тарыу) тип әйткәндәр. [2]

Болаҡ. Ауылдың түбәнге осон шулай атайҙар. Был урын Ҡоръятмаҫ тауының аҫты. 1980-1985-се йылдарға тиклем был ер сабынлыҡ булды. Өйкөм-өйкөм әрәмәлеге бар ине. Әрәмәлек буйы һаҙмат була торғайны. Болаҡ – бәләкәй йылға тигәнде аңлата. Ололарҙың һөйләһе буйынса

бында йылға ла аҡҡан. Хәҙер һаҙ кипкән, әрәмәлек юҡ. Бер уйһыуыраҡ урынға яҙлы-көҙлө, ямғырлы мәлдәрҙә һыу йыйылыуы, әүәле бында һаҙ булыуына ышандыра.

Татар үлеге. Әүәле һарт (Иҫке Монасип) ауылына бер мосафир килеп сыға, ни сәбәптәндер, ҡапыл үлеп китә. Үлекте ерләр кәрәк була. Һарт ҡарттары мосафирҙы – татар, Мишәрҙәр – татарҙар, шунда алып барып ерләйек, тип ҡарар итә һәм быны ерләр өсөн Мишәргә (Яңы Монасип) алып киләләр.

Был хәлде ишетеп ҡалған, мишәр ҡарттары ныҡ ғәрләнә. "Беҙ – татар түгел, беҙҙең зыяратта ерләтмәйбеҙ, һеҙҙә үлеп ҡалғас, үҙегеҙҙә ерләгеҙ, тип күҫәк тотоп, быларға ҡаршы киләләр. Иҙелде аша сығып, күп тә үтмәйҙәр, мәйетте алып килә ятҡан һарттар тап булалар. Китә ҡарттар араһында бәхәс: берәүҙә мәйетте үҙ ауылы зыяратында ерләткеһе килмәй. Оҙаҡ ҡына ғауғалашҡас, "Әйҙә ошонда, 2 ауыл араһынада ерләйек!"- тип килешәләр һәм шулай эшләйҙәр ҙә инде.

Ошо урын хәҙер Татар үлеге тип атала. Иҫке Монасип ауылынын үрге осо бөгөнгө көндә был урынға килеп еткән инде. [4]

Ҡоръятмаҫ тауы. Яңы Монасип (Мишәр) ауылының көньяғындағы бейек текә тау теҙмәһе, Ағиҙелдең уң яҡ ярынан көнсығыштан көнбайышҡа ҡарай һуҙылып киткән. Ауылға ҡараған бите ҡуйы урман менән ҡапланған, ышыҡ урын. Яҙ көнө ҡар оҙаҡ ята, йәй дымлы була. Ололар "Ҡоръятмаҫта ҡар бөтмәй, урман ҡары бөтмәй" тип әйтәләр. Шуға уны "Ҡоро ятмаҫ" – Ҡоръятмаҫ тигәндәр.

Һабансы. Ауылдың көнъяғындағы (Ҡоръятмаҫ тауының дауамы, ошо урында был тау төнъяҡҡа бөгөлөп китә) текә генә тау. Әүәле ауыл халҡы иген сәсер өсөн ошо тауҙан Ипәнәйгә йөрөгән. Бынан юл турыраҡ.

Ҡаратау. Ауылдың ҡояш батышында ятҡан ҙур тау. Бейеклеге Иҙел кимәленән 150-160 м тирәһе. Ауылға ҡараған көнсығыш битләүе байтаҡ текә, ташлы, ағастар юҡ тейерлек, ҡарайып күренә. Шуға ла "Ҡаратау" тигәндәр. Әүәле был тауҙа йәштәр байрамға сыға торған булғандар. [4]

Остотау. Һабансы һәм Ҡаратау араларына ятҡан, түбәләре ослая барып бөткән ике тау.

Сусаҡ. Ауылдан алыҫ булмаған, төнъяҡ ятҡан тәпәш тау, тау түбәһе тигеҙ ялан. Тау Иҙелгә килеп терәлә, шул урыны текә генә, ташлы сусаҡ – башҡорт теленең һүҙлеге буйынса осло түбәле тау башы.

Кейәүҙәр үҙәге. Ауылдың үрге осондағы үҙәк. Әүәле ҡырҙан ауылға килен әйттерергә килгән кейәү егеттәреауылға инергә оялып, кис еткәнсе ошонда ултырып торғандар. [5]

Ҡаҙна уяһы. Аштыҡ уяһынан алыҫ булмаған уя. Колхоз төҙөү осоронда хәлле кешеләрҙең байлығын тартып ала башлағас, бер хәлле генә кеше ошо урынға байлығын, игенен йәшерә. Исеме ошо ваҡиғаға бәйле.

Шәкирә әбей соҡоро. Юлдан тауға менеп барғанда уң яҡҡа ҡайын төбөндә соҡор бар. Шул соҡорҙо "Шәкирә әбей соҡоро" тип йөрөтәләр. Бынан Шәкирә исемле әбей, кешеләрҙән йәшеренеп кенә, ошонан соҡоп аҡ балсыҡ алып, сыуалын аҡлап йөрөгән. [6]

Йыландуй. Ауылдан көнбайышта, оло юлға сыға торған юл буйында ятҡан уй. Әллә ней ҙур булмаған әрәмәһе бар. Әрәмәлектең үрендә өйкөм генә булып энәлек үҫә. Әрәмә урыны-урыны менән батҡаҡ, һаҙмат урындары ла бар. Әүәле бында йылға аҡҡан. Элек йылан күп булған. Ҙур йыландар осраған. [5]

Бүләкташ йәки Бүләкбикә ҡаяһы. Яңы Монасип (Мишәр) һәм Нәби (Ҡуян) ауылдары араһында, Ағиҙелдең уң яҡ ярындағы бәләкәй ҡая. Әүәле ауылда бик матур бер ҡыҙ йәшәгән, унын ата-әсәһе фәҡир генә, байға ялланып көн иткәндәр, өйҙәре лә булмай. Байҙың соланында йәшәгәндәр. Ҡыҙ бик матур булып үҫеп етә. Егеттәр һората башлай. Ата-әсәһе ҡабаланмай, ҡыҙҙың үҙенең ихтыярына ҡуялар. Бүләкбикә ауылдан алыҫ булмаған Иҙел яры буйындағы ҡаяға килеп, йырлап ултырырға яратҡан. Бер көндө ул ошонда бер егетте осрата. Ике йәш йөрәк бер-береһенә ғашиҡ була. Был тау уларҙың осрашыу урынына әйләнә. Егет ҡурай уйнай, ҡыҙ йырлай. Ауылда йәшәгән мулла Бүләкбикәне икенсе ҡатынлыҡҡа һората башлай. Ҡыҙҙың атаһы риза була. Бүләкбикә нишләргә белмәйенсә, тауға ҡаса. Артынан мулла, атаһы килеп тотоп алайым тигән дә генә, ҡыҙ йылғаға һикерә. Мулланың ҡулында ҡыҙҙың сәсе генә тороп ҡала. Егет Бүләкбикәне тауға килеп көтә, тик ҡыҙ юҡ. Ерҙә ятҡан сәсте күреп, егет бөтәһен дә аңлай һәм ул да һыуға ташлана. Шунан алып был тауҙы Бүләкбикә ҡаяһы (Бүләкташ) тип атап йөрөтәләр. [7]

Сылтырбикә тауы. Яңы Монасип, Нәби ауылдарын бүлеп ҡап урталыҡта Айыуҙы йылғаһы аға.

Йылғаның һул яғындағы тауҙы Сылтырбикә тауы тип йөрөтәләр. Был тауҙы үткәндә һәр кем шомлана, шөрләңкерәй. Бигерәк тә кис һәм төндә. Ололарҙың һөйләүенсә, бында Сылтырбикә исемле ҡатын-ҡыҙ ҡиәфәтендә ең-пәрей йәшәй. Кемгәлер унын сылтырап көлгән йәки илаған тауышы ишетелгән, кемгәлер егеүле ат йә трактор булып тауҙан төшөп килгәне күренгән, хатта баҫтырған да, тиҙәр. [4]

Ҡоҙғонташ. Ҡоҙғонташ тип ҡоҙғон ояһы булғанға, йылғаның бөгөлөндәге биш бер иш ҡаяны һәнәккә оҡшап торғаны өсөн ***Һәнәкташ*** тип исемләгәндәр. Шул бөгөлдә күп итеп ҡабырсаҡ йыйылып ятҡанға ***Ҡабырсаҡлы морон*** тип аталған ҡомлоҡ бар.

Яңы Монасип ауылы эргәһендә граждандар һуғышы ваҡытында (1919 йыл)
Иҫке Мөсәт ауылынан сыҡҡан Ғәлийән исемле кешенең
Совет власына ҡаршы көрәшенә бәйле урындар байтаҡ.
Шуларҙың бер нисәһе:

Ғәлийән үҙәге. Был үҙәк Аралбайҙа оло юл буйлап, Бөрйән яғына китеп барғанда һул яҡта, Тимер туҡталышынан аҫҡа төшкән үҙәк. Ғәлийән Темәс төрмәһенән ҡасҡас, совет власына ҡаршы булған кешеләр менән отряд төҙөй һәм ҙур территорияла көрәш йәйелдереп ебәрә. Ғәлийән отрядын ҡыйратыу өсөн Әүжәндән ҡыҙыл отряд килә. Көстәр Аралбай эргәһендә осраша унда ҡаты һуғыш була. Ғәлийәнде, ошо үҙәктән сығып килгәндә, Тимер ауылы кешеһе Яманғолов Айытҡол, Боһондо йылғаһы әрәмәһенән йөшенеп тороп, һыҙма мылтыҡтан атып үлтерә. Ул бер ҡайын төбөндә үлә.аҙаҡ ошо ҡайынға Айытҡол Ғәлийәнгә атҡан пуляның гильзаһын ҡатып ҡуя. Гильза әле лә тора тип әйтәләр. Ҡайһы бер кешеләрҙең әйтеүенсә, һуғышҡа тиклем был ҡайында Ғәлийәндең ҡылысы ла сабыулы торған. [8]

Өкө ташы. Өкө ташы исемле ҡая. Ҡаяла әлләней ҙур булмаған. 5-10 кеше һыймалы мәмерйә бар. Ғәлийән үҙ отряде менән ошонда йәшеренеп йәшәгән. 1950-1960 йылдарҙа ла бында төрлө һауыттар була торғайны, тип хәтерләй Роза Вәлиева апай (1941 й. Аралбайҙа тыуған) Яңы Монасипта йәшәй. Отрядтың ҡалғаны ҡаса. Хәҙер уға Иҫке Монасип ауылынан Аллаяр исемле кеше етәкселек итә. Отряд байтаҡ көс туплай, ауылдарҙы талай. Байназар менән Нәби ауылдары араһында ҡыҙылдар менән ҡаты һуғыш була. Ҡыҙылдар күп юғалтыуҙар менән Әүжәнгә сигенә. Яраланған ҡыҙылармеецтар әсиргә эләгә. Уларҙы Яңы Монасип ауылына алып киләләр. Кейемдәрен систереп, бик ныҡ туҡмайҙар, бер кешенең өйөнә бикләп ҡуялар. Таңға ҡарай 8 ҡыҙылармеецты ҡушарлап бәйләп, кейемһеҙ, ялан аяҡ (1919 йылдың декабрь айы була) ауылдан Тимер яғына алып китәләр. Ҡарттар әсирҙәрҙе яҡлашып та ҡарай. Ҡарттар яҡлашҡанын күреп бер йәш кенә һалдат үҙен үлтермәүҙәрен илай-илай үтенә. Әммә ҡоторған

Ғәлийәнселәр унының һәм карттар һүҙенә ҡарамай, әсирҙәрҙе ҡырға алып китәләр. Мәйгәште йылғаһын буйына алып китеп, ҡылыс менән тураҡлап үлтерәләр. Ошонан һуң тау һыртын ***"Үлектәр арҡаһы"*** тип атайҙар. [9]

Үлектәр арҡаһы. Ҡоторған Ғәлийәнселәр унының һәм карттар һүҙенә ҡарамай, әсирҙәрҙе ҡырға алып китәләр. Мәйгәште йылғаһын буйына алып китеп, ҡылыс менән тураҡлап үлтерәләр. Ошонан һуң тау һыртын "Үлектәр арҡаһы" тип атайҙар.

Йылға-күлдәр

Айыуҙы. Яңы Монасип һәм Нәби ауылдары араһындағы, әллә ней ҙур булмаған, ике километрҙай самаһы оҙонлоҡтағы, һыуыҡ һәм таҙа йылға аға. Әүәле бағыр балығы ла булған. Ҡуйы әрәмәлек ике ҙур, бер-нисә бәләкәй ҡотоғо бар. Әүәле айыуҙар бында күп булған. [5]

Андыҙ яланы, йылғаһы. Ауылдан 4 км алыҫлыҡта ятҡан ҙур ғына ялан. Йылғаһы ла шул уҡ исемдә. Әүәле йылғаһы мул һыулы булған, әрәмә буйҙарында андыҙ – дарыу үләне күп үҫкән. Мин уйпат ерҙән яулыҡ менән һөҙөп бер яулыҡ балыҡ тоттом, иген сәсә инек, тип һөйләгәйне Сәғитова Ғәйниямал Ишбулды ҡыҙы. [3]

Этаяҡ (1 вариант). Ауылдан 2-3 км алыҫлыҡтағы (көнъяҡта бәләкәй, бер-береһенә йәнәш урынлашҡан ике ялан. Уларҙы эт эҙенә оҡшатып шундай исем биргәндәр. [10]

Этаяҡ (2 вариант). Был ялан Аралбай ауылында XIX быуат урталарында йәшәүсе Этаяҡ олатам ере булған. Этаяҡ – Әмирхановтар нәҫеле башы. [11]

Бәләкәй Этаяҡ. Бәләкәй Этаяҡты – ***"Суҫҡа этаяғы"*** тип тә йөрөтәләр, унда 50-се йылдарға тиклем суҫҡасылыҡ фермаһы булған. "Ҡыҙҙарҙы айыу ашаған ер" 1950 йыл Һаһыҡта һарыҡ фермаһы булған. Иҫке Монасиптан Муллуғолова Шәмсехаят, Буранова Шәрифә һәм Муллағолова Маһинурҙар һарыҡ көткәндәр. Ферма ауылдан 20 саҡрым алыҫлыҡта булһа ла, ҡайтып-китеп йөрөгәндәр. Һаулыҡтары ла бик һәйбәттән булмаған. Йыш ҡына ауырып та китеп ҡайтыр булғандар. Фажиғә булыр көндө Шәмсехаят менән Шәрифә бер кемгә лә әйтеп тормайса таң менән ҡайтырға сығалар. Аптырағас, Маһинур ҙа юлға сыға. Кепес юлына етәрәк юлда айыуҙан таланған иптәштәрен күреп ауылға йүгерә. Ике арба менән фажиғә булған урынға килгәндә, айыу ҡорбандарын ҡалдырып, ҡасҡан, әммә ике ҡыҙҙы ла үлемесле яралаған була. Шәрифәнең баш тиреһен һыҙыра тартып алған, башҡа урындарында ла тешләнгән эҙҙәр була. Ул айыуға етер саҡта йән биргән, ә Шәмсехаят унының эсе йыртылған була, ыҙалап төн уртаһында үлә. Ошо ваҡиғанан һуң, ауылдан 2 саҡрым алыҫлыҡтағы юл буйындағы урынды ***"Ҡыҙҙарҙы айыу ашаған ер"*** тип атай башлайҙар. [12]

Риф күле. Туҡалбашҡа инеп киткән юлдан саҡ ҡына өҫтәрәк уйһыу урын. Яҙ – ҡар, йәй – ямғыр һыу йыйыла. Ҡайһы бер йылдары ҡоромай, тирә –яғында екән үҫә. Риф исемле егет мотоциклы менән аңғармай килеп соҡорға осҡан. Исеме шунан ҡалған.

Ялан-туғайҙар

Аштыҡ (ашлыҡ) уяһы. Ауылдан оло юлға сығыусы юл буйындағы урман эсендәге бейек булмаған тау араһындағы асыҡ үҙәк. Әүәле ауыл эргәһендәге һәр асыҡ урынға иген сәскәндәр. Был урынға ла тары сәсә торған булғандар, тары емерелеп уңған.

Ҡаҡсыр. Ҡаратау башындағы ялан. Бында ла иген сәскәндәр, унда ерҙән ҡыйыҡлап көлтә һөйәп киптереү өсөн урын эшләгәндәр. Шуны ҡаҡсыр тип әйткәндәр.

Сибәкәй. Ауылдан 5-6 саҡрым алыҫлыҡта көнбайышта Нөгөш яғына киткән юл буйындағы бесәнлек. Әүәле ауыл халҡы яҙ етеү менән ***Кәлтәгәү*** тигән яланға йәйләүгә күскәндәр. Көҙгә табан, ауылға яҡыныраҡ, ошо яланға күсенгәндәр. Әүәле йәйләүҙә бик сибәр ҡыҙ йәшәгән. унын сибәрлеге тураһында хәбәр күрше йәйләүҙәргә лә тарала. Ҡыҙҙы күрер өсөн егеттәр килә башлаған. Ошонан һуң яланды ***“Сибәркәй”*** тип атай башлағандар, һуңынан ***“Сибәкәй”*** булып ҡалған.

Аҙау. Сибәкәй яланына етәрәк ошо исемге ялан – сабынлыҡ. Әүәле бында Аҙау исемле кеше бесәнлеге булған. Аҙау – Мишәргә ауылына нигеҙ һалған мулланың улы була.

Ҡурғашты (Ҡурғашлы). Нөгөш яғына киткән юл буйындағы ялан, яландан ошо исемле йылға аға, йылға Ҡурғашлы ауылы эргәһендә Ағиҙелгә ҡоя. Революцияға тиклем бында алтын йыуғандар. Исеме моғайын ошо ваҡиғаға бәйлелер. [13]

Йәмилә сабыны. Остотау башында ялан. Унда әсәм Йәмилә бесән саба торған булған. Уның исеме менән Йәмилә сабыны тиҙәр. [4]

Тукалбаш. Ҡыҙҙарҙы айыу ашаған ерҙән алыҫ түгел уң яҡлап Туҡалбаш яланына юл борола. Был ялан бәләкәй, өҫтө тигеҙ түңәрәк. Айыу туҡал һыйырҙы ашаған да, хужаһы тапҡанда башы ғына ятҡан. Шуға исеме “Туҡалбаш” булып ҡалған.

Янған ҡыуыш. Андыҙ йылғаһы буйындағы сабынлыҡ. Һуғыштан һуңғы йылдарҙа колхозсылар ошонда ҡыуыш ҡороп, бесәндә ятҡандар. Бер көндө ҡыуыш янып китә. Ошо ваҡиғанан һуң был урынды “Янған ҡыуыш,”-тиҙәр. [4]

Һыуыҡ ҡолаҡ. “Ҡыҙыл-таң” КФХ-һының оло юл буйында өс ҙур баҫыуы бар. Ауылдан сыҡҡанда: уң яҡта ятҡаны “***Иһәнәй”*** тип атала. Ошо яландың көнсығышы яғында бер асыҡ өлөшө урман эсенә инеп торған. 1960-1970-се йылдарҙа үҫеп ултырған ағастарҙы төпләп, был ерҙе байтаҡ ҙурайттылар. Яландан аҫҡы үҙәгенән һалҡын һыулы шишмә башлана. Саҡрым юл үткәс Айыуҙы йылғаһына ҡоя. Ҡолаҡ тип яландың эскә инеп торған урынын әйтәләр, шунан төшкән ерҙә һалҡын шишмәһе аҡҡанға күрә һыуыҡ ҡолаҡ булып киткән.

Андыҙ. Оло юл буйында өс баҫыуҙың береһе. Һалҡын шишмә йылғаһы буйы әрәмәлек урманында андыҙ үләне үҫкәнгә шулай яланын атағандар.

Ҡарағай сабын. Оло юл буйында өсөнсө баҫыуҙарҙың иң ҙуры ҡарағай сабын. Яландың өҫкө яғындағы тау ҡарағайлыҡ булғанға шулай аталған.

Тукмак яланы һәм йылғаһы. Борон-борон заманда йәшәгән ти әбей менән бабай. Әбей ҡаты ауырып үлеп киткән. Бер көндө бабай үгәй әсәй алып ҡайта. Үгәй әсәйҙең бер ҡыҙы була. Ул бер ҙә бабайҙың ҡыҙын яратмаған, бөтә эште унан эшләтә. Бер ваҡыт әбей бабайҙы саҡырып ала ла былай ти: “Һин был ҡыҙыңды аҙаштыр, күҙемә күренәһе булмаһын” – ти ул. Бабай күнгән. Ашарға аҙыҡ алып утынға китергә булған, ҡыҙын да бергә алған. Барып еткәс ҡыҙына сәй ҡайнатырға ҡуша ла утын йыға китә. Ысынында иһә, ҡарт бер ағасҡа туҡмаҡ бәйләй ҙә ҡайтып китә. Ҡыҙы сәй ҡайнатып көткән-көткән дә балта туҡылдаған яҡҡа атлаған. Барһа атаһы юҡ, туҡмаҡ ҡына ел ыңғайына ағасҡа һуғып туҡылдап тора икән. Ҡыҙ илаған-илаған да, асығып китеп үҙе тамаҡ ялғап алырға булған. Тик ни күрһен: Үгәй әсә ҡорот урынына ат тиҙәге, тоҙ урынына көл һалып ебәргән икән. Сүлмәге лә ярыҡ булып сыҡҡан. Ҡыҙ ҡайҙа китергә лә белмәгән. Ярыҡ сүлмәген ҡосаҡлап илаған:

Сүлмәк-анай, сүл анай,
Ризыҡһыҙлыҡтан йонсоном.

Шул саҡ алдына ризыҡ килеп тулған, ти. Ҡыҙ ашап алған, тик бик өшөгән. Сыҙамай сүлмәгенә зарланған:

Сүлмәк-анай, сүл анай,
Кейемһеҙлектән йонсоном.

Шул саҡ ҡыҙҙың өҫтөндә йылы, матур кейемдәр пәйҙә булған. Ас булмаһа ла, инде йылы кейемдә булһа ла урман араһында аҡ ҡар өҫтөндә ултырыуы ҡыйын булған.

Сүлмәк-анай, сүл анай,
Йортһоҙлоҡтан йонсоном,

- тигән ти.

Шул саҡ ҡураһы тулы мал менән матур йорт ҡалҡып сыҡҡан, ти. Мал-тыуарына әүрәп яңғыҙ үҙенең ҡуралы йортонда йәшәгән дә ятҡан, ти. Тик ҡайһы саҡ бер әҙәм дә килеп сыҡмауы эсен бошорған. Бер мәл тағы зарланған сүлмәгенә:

Сүлмәк-анай, сүл анай,
Яңғыҙлыҡтан йонсоном ,

- тигән ти.

Шул саҡ бер һыбайлы килеп сыҡҡан. Ул бер матур, аҡыллы егет булып сыҡҡан. Бергәләп донъя ҡороп алып киткәндәр. Ҡыҙ атаһына үпкәһен оноҡҡан, уны һағынған. Ҡайтып күрәһе килгән. Бына күстәнәстәр тейәп кейәүе менән ҡайтырға сыҡҡандар. Өйҙәренә етә башлағас ҡапҡалағы эт өрә икән:

Етем ҡыҙ килә,
Байығып килә,
Күстәнәс алып килә!

Үгәй әсә: "Улай тип әйтмә, сәсе ялбырап килә, һөйәге шурап килә тип өр"- тип әйтә икән. Ләкин эт үҙенсә өргән. Ата-әсәһе ҡаршы сыҡҡан. Етем ҡыҙ ысынлап та бик байып ҡайтҡан, мул күстәнәстәр тейәп ҡайтҡан, ти. Бер–ике көн ҡунаҡ булғандар ҙа ҡайтып та киткәндәр. Үгәй әсәгә тынғылыҡ бөткән. Ул бабайҙы урманға ҡыуған. Үҙ ҡыҙын байыҡтырып килтерергә ҡушҡан. Ул юл тоҡсайына барыһын да һалған: етәрлек ризыҡ, йылы кейемдәр, һауыт-һаба. Ҡыҙ ризығын ашап бөтөп, кейемен туҙҙырып, һауыт-һабаһын онтап бөтөп ултырған. Ҡыш килгән, ҡыҙ өшөгән, янына килеп сыҡҡан йәнлектәрҙе лә ҡурҡытып ебәреп торған. Үгәй әсәнең ҡыҙы асығып туңып үлгән ти. Ҡатын бабайҙы ҡыҙҙы алырға ебәргән. Бабай ҡатынынан ҡурҡһа ла унығ асығып, туңып үлгән ҡыҙын алып ҡайтҡан, ти. Ҡапҡала эт:

Сәсе ялбырап килә,
Һөйәге шаурап килә,

- тип өрә икән.

"Ни эшләп һин минең ҡыҙыма улай тип өрәһең,"- тип этен үлтерә һуҡҡан. Шулай итеп ҡомһоҙ ҡатын ҡыҙын байыҡтырам тип үлтергән, ти. Байлыҡ ялҡауҙы яратмай, ялҡау байлыҡты ярата. Бабайҙың ҡыҙы егет менән бәхетле тормош көткәндәр, ти. Бабайҙың туҡмаҡ бәйләп киткән ерендәге йылға ла, ялан да ***Туҡмаҡ*** тип атала. Бабайҙың ҡыҙы донъя көткән ер ***Ҡуралы йорт*** тип йөрөтәләр. [1]

Бейгилде яланы. Был ялан элекке "Ҡыҙыл-таң" колхозы ҡымыҙныйы булған. Оло юл буйындағы ялан (хәҙер "Охоттур" биләмәһе). Бабсаҡ батырҙың улы Күсәк (Көсәп) бейҙең, атаһы өсөн ус алам, тип Ҡарағоләмбәтте Ҡара һыйырға артына ҡаратып ултыртып, Аҡбулат һыртынан ҡарағай-ҡыпсаҡ ерҙәренә алып китә. Килешләй ошо яланда ялға туҡтайҙар. Ҡарағоләмбәтте, соҡор ҡаҙып, шунда төшөрөп, һаҡ ҡуялар.

Ҡарағоләмбәт төндә оло ярау итә, еҫенә түҙә алмай, ярауын алып йылғаға ырғыта. Ошо ваҡиғанан һуң яланды Бейгилде (Бей килде), ә йылғаны – ***Буксырға*** (Буҡсорға) йылғаһы тип атай башлағандар. [2]

Мәрйәкәй яланы. Ауылдан көнбайышта 4 км алыҫлыҡта ятҡан ялан, сабынлыҡ. Әүәле ауылда йәшәгән бер егет батша бойороғо буйынса һалдат хеҙмәтен үтәгән. Ҡырҙан хеҙмәттән ҡайтҡанда үҙенә мәрйә кәләш алып ҡайтҡан. Ошо урынға бесәнгә килгәндәр. Егет ихлас бесән саба, ә кәләшенең был эшкә һис барымы юҡ икән. Шунан егет уға ҡарап торған да: ”Эх мәрйәкәй, мәрйәкәй”, - тигән, ти ошонан һуң был яланды Мәрйәкәй яланы тип атай башлағандар. [3]

Ишбулды баҙы. Ауылдан төньяҡ-көнбайышта 3 км алыҫлыҡта ятҡан урман эсендәге әллә ней ҙур булмаған ялан. Революциянан алда колхозлашҡанға тиклем ошо яланда минең атам Ишбулды баҙ эшләп, дегет ҡайнатҡан. Дегетте Әүжәнгә, Темәс баҙарына алып барып һатҡан. Үҙе үлгәндән һуң, был яланды шулай атай башлағандар. [3]

Юлдар

Рәмзи юлы. Оло юлдан ауылға төшә торған юл килә биргәс, Иҫке Монасиптың Кепес яғына боролған, урман юлы. Бынан Мишәргә төшмәйенсә, Кепескә юл тура. Ошо юлды хәҙер “Рәмзи юлы” тиҙәр. Рәмзи Рахманғолов 1980-се йылдарҙа Иҫке Монасипта ауыл Советы рәйесе булып эшләне. Сельсовет биләмәһендәге учреждениеларға утын әҙерләү компанияһы ойоштороп, ошо юл буйындағы ағастарҙы ҡырҡтыра. (был юлдан юғары вольтле электр линияһы үтә), юл киңәйә, бер-нисә батҡаҡ урындарына таш түктерә. Рәмзи Мансур улы үҙе Кепестә йәшәне. Юл рәтләнгәс, үҙ машинаһы менән эшкә ошо юлдан йөрөй ине.

Күс юлы. Ауылдың урта өлөшөнән Ҡаратау итәге буйлап ҡыя киткән юл. Әүәле ошо юлдан Кәлтәгәү тигән ергә халыҡ яҙ көнө йәйләүгә күскән. [3]

Юл буйындағы урындар

Йыландуй. Ауылдан сыҡҡан юл буйында иң тәүҙә Йыландуйҙы үтәһең. Бында әүәле ҙур ғына әрәмәле йылға ла аҡҡан. Йылан күп булғанға, шулай атағандар.

Энәлек. Әрәмәнең өҫкә, урманға килеп тоташҡан урынын өйкөм ағастары үҫкәнгә шулай тиҙәр. Уҡыусылар энәлекте кәртәләп тә ҡуйғайнылар. Кәртәләгәс, энәлек тә бик унды. Берәүҙәр суғын киҫеп алды, икенселәр өй баҡсаларына күсереп ултырттылар.

Уртән буйы. Энәлектән юл аша уңға сыҡҡас, ҡарағайлыҡ башлана. Көҙөн унда бәшмәк уңа. Ололарҙың әйтеүенсә, бында элек янғын булған. Шуға үртәлгән ерҙе “Үртән буйы,”-тиҙәр.

Ыстакада. Үртән буйын үтеп тауға үрелгәс тә, һул яҡта урман эсендә, әллә ней ҙур булмаған ҡая-ташлы урынды ”Ыстакада”-тиҙәр. Юл ремонтлау өсөн махсус ҡоролма төҙөгәндәр. Исем шунан ҡалған.

Химзавод. 1970-1980-се йылдарҙа колхоздың ашлама һаҡлаған склады була бында. Буранбаев Әхмәтгәрәй ағай ҡарауылсы. Урманда ятып оҙаҡ күренмәй торғандан һуң, ҡайһы бер кешеләр: “Әхмәтгәрәй ағай, ҡайҙа юғалдың, күренмәйһең дә?”- тигәнгә ул “Химзаводҡа эшкә индем,”- тип мәрәкәләй икән.

Ҡунаҡбай ҡотоғо. Ауылдан һабансы яғынан Этаяҡ яғына киткән юл буйында үҙәк бар. Үҙәктең битләүендә әүәле Ҡунаҡбай исемле Ҡарт бесән сапҡан. 1964-1965 –се йылдар Тимер ауылы яғына электр бағаналары ултыртыу өсөн соҡор ҡаҙалар. Бер соҡорҙа урғылып һыу сыға.

Бабай улаҡ эшләп, ошо шишмә башынан һыу ала башлай. Әле лә бынан яҙ көндәре һыу ағып сыға, ямғырлы йыл һаҙмат була. [14]

[1] Хөсәйенова Ғилмисафанан яҙып алынған

[2] Әмирханова Өмөгөлсөм Мостафа ҡыҙы, 1920 йылғы, элек Аралбай ауылында йәшәгән. Сәғитова Нәсимә Ғилман ҡыҙы яҙып алған.

[3] Сәғитова Ғәйниямалдан (1915 йылғы), Сәғитова Нәсимә Ғилман ҡыҙы яҙып алған.

[4] Йәғәфәрова Шәмсениса Ғәлиәхмәт ҡыҙы, 1927 йылғы, Яңы Монасип ауылы Сәғитова Нәсимә Ғилман ҡыҙы яҙып алған.

[5] Көмөшбаева Гөлнәҙектән (1913 йылғы) Көмөшбаева Сөмбөл 1990 йыл яҙып алған.

[6] Көмөшбаев Әхтәр Яңыбай улынан (1946 йылғы) Көмөшбаева Дилбәр яҙып алған.

[7] Сәғитов Ғәззәле Сәйфулла улынан (1926 йылғы), Сәғитова Нәсимә Ғилман ҡыҙы яҙып алған.

[8] Вәлиев Ҡылысбай Мансур улы (1931 й.) һөйләне.

[9] Әсәһе Буранбаева Йәмилә һөйләүҙәре буйынса Йәғәфәрова Шәмсениса Ғәлиәхмәтовна (1927 й.) яҙҙырҙы.

[10] Йәғәфәров Ғәбиттән (1952 йылғы) Сәғитова Нәсимә Ғилман ҡыҙы яҙып алған.

[11] Баймырҙина Хаяттан Баймырҙин Ильяс Рәис улы (1960 йылғы) яҙып алған.

[12] Көмөшбаева Гөлнәҙектән (1913 йылғы), Сәғитова Нәсимә Ғилман ҡыҙы яҙып алған.

[13] Ҡыуандыҡов Афзал Ҡунаҡбай улы (1932 йылғы) һөйләгәндәрҙән.

[14] Мөхәмәтйәнова Шәмсинур Әхмәтйән ҡыҙынан (1951 йылғы) Сәғитова Нәсимә Ғилман ҡыҙы яҙып алды.

Аралбай ауылы тарихынан

Тимерҙәрҙең Боһондо йылғаһында өс утары (УТФ, Һолайҡа, Аралбай йәйләүе) була. Кантонлыҡ осоронда, күсенеп йәшәү тыйылғас, уларҙың бер өлөшө ерҙәрен һаҡлап ҡалыу өсөн утарҙарға күсә, ауыл статусы ала.

1753 йылдың 13 октябрендә губернатор И.Неплюев тәкдиме менән Ырымбур губернаһында тимер юлдар һәм баҡыр рудниктар төҙөү тураһында сенат ҡабул иткән. Указда ла: "Башҡорттар үҙҙәренең ерҙәрен һәм ялан-туғайҙарын ҡәҙерләгән тиклем башҡа бер нәмәне лә ҡәҙерләмәйҙәр", - тип әйтелә.

Боһондо йылғаһының башындағы утар Аралбай Мөхәмәтовтың исемен йөрөткән. Ауылдың кешеләре тураһындағы тулы мәғлүмәттәр 1816, 1834, 1850, 1859 йылдарҙағы рәүиздә (Архив № 231, 138-се бит, № 135, 360-сы бит) Тимер ауылында теркәлгәндәр. Профессор Ә.З.Әсфәндиәров 1834 йылда 20 йортта 100 кеше йәшәй, тип күрһәтә.

1850 йылғы рәүиздә 1-5-се ихатала команда старшинаһы Ҡунаҡбай Ҡарабаевтан алда ҡуйылған старшина Teләүғол Ялсин нәҫелдәре, 11-17-се ихатала зәүрәт есаул Иҙел Сүрәбаевтың, 23-36-сы ихатала зәүрәт есаул Аралбай Мөхәмәтовтың, ҡалған йорттарҙа Язағол Тиябирҙиндар, Сәйетйәғәфәр Зыянбаевтар, Мансур Ырыҫбаев, Буранбай Тимишевтар, Әмирхан Абыревтар, Һағынбай Ҡарашаев, Ҡотлобай Ғөбәйҙуллиндар ғаиләләре тәшкил иткән. барлығы 41 йортта 110 ир-ат, 87 ҡатын-ҡыҙ заты йәшәгән.

1859 йылда 41 йортта 197 кеше йәшәй. 1920 йылда кеше һаны кәмей, сөнки империалистик граждандар һуғыштары, аслыҡ йылдары сәбәпле, 33 өйҙә 162 кеше ҡала.

1930 йылдарҙа аралбайҙар Тимер мәктәбендә белем алалар.

1936-1937 уҡыу йылдары Аралбай башланғыс мәктәбе булдырыла. Тәүге уҡытыусылары Әмирханов Межәүер Зекрия улы, Ҡонафин Хисаметдин Сиражетдин улы (Монасип) уҡыта (аҙаҡ Сәрмән педучилищеһын тамамлай).

1942 йыл Дәүләтбирҙин Сәлихйән Хафиз улы үҙ тиҫтерҙәрен (сөнки 14-15 йәшлек уҡыусылар уҡый) уҡыта. Унан Әхмәтова Ғәйниямал (Байназар), Хәлитов Рәхим (Ғәлиәкбәр), Әмирханова Мөнирә (Аралбай), Вәлиева Роза (Мишәр), Бакирова Хаят (Маҡар), Әмирханова Зөһрә (Аралбай) һ.б. уҡыттылар.

1960 йылдар тирәһендә12 йорт ҡына һанала, ауыл тарҡала башлай.

1965-1966 йылға йылдарҙа балалар белем алыуҙы Мишәр ауылында дауам итәләр.

Колхозлашыу осоронда тәүҙә Иҫке һәм Яңы Монасип, Тимер, Аралбай ауылдары 1936 йылға тиклем бер колхоз булып берләшеп эшләйҙәр. Коллектив хужалыкта эштәр йылдан-йылға ыңғайлай бара.

Ат һабандары, тырмалар, сәскестәр, косилка, молотилка, ҡул көсө менән елгәрткес машиналары үҙ заманы өсөн ҙур техника яңылыҡтары итеп ҡабул ителде.

Тимер ауылы айырылып, айырым "Ҡыҙыл таң" колхозы ойошторола. Аралбайҙа "Маяҡ" колхозы үҙеге ойошторолоп, тәүге колхоз рәйестәре Иткарина Әминә (Байғазы) оҙаҡ йылдар эшләй, Көмөшбаев Яңыбай, Йәғәфәров Ниғмәт (Мишәр) – рәйес, Сәғитов Әхмәт (партком секретары) булып эшләнеләр. Колхоз малдарын Этаяҡта (ҡышлау), Ҡарағошто ла (йәйләү) көткәндәр. Һуңынан ауылдар ҡайтанан "Ҡыҙыл таң"колхозына берләшә.

1950 йылдағы "эрелетеү" сәйәсәте "перспективаһыҙ" ауылдарҙы тарҡатыуға килтерҙе лә инде. Районда әҙме ни тарҡалған ауылдар?

Ауылдан күп кенә арҙаҡлы шәхестәр ҙә сыҡты. Рамаҙан Ҡондоҙбаев "Таң" гәзитендә мөхәрир булып, районда, аҙаҡ Өфөлә өлкә комитетында эшләне.

Бөрйәндең ғәжәйеп матур тәбиғәтенең, өҫкә ишелеп килгән урман-тауҙарының, саф һыулы йүгерек йылғаларының һәр береһенең үҙ тарихы, легендаһы бар.

Иҫке Собханғол-Байназар юлының ҡап урталығында Исламбай, Тимер юлдары ҡушылған аралағы битләүҙә урынлашҡан ине Аралбай ауылы.

Хөкүмәтебеҙ етәкселәренең тырышлығы менән тау-таш араларын ярып, бына тигән асфальт юл һалынғас, тимер-бетон күперҙәр төҙөлгәс, юлда йөрөү, әйтәһе түгел, нык үҙгәрҙе.

Юлдан һул яҡлап ***Аҡбейектау теҙмәһе***, уң яҡлап ***Ҡараһыйыр, Ҡарағастыбейек тауҙары*** ята. Армыт-армыт мөһәбәт тауҙар араһында көмөштәй йылтырап ятҡан кескәй генә ***Боһондо йылғаһы*** аға ла аға…

"…был изге төйәктә кешеләрҙең йәшәү сығанағы инем", - тигәндәй, көмөштәй йылтырап аға ла аға ул. Йылға ***Бохар урманы уйһыулығынан*** килә. Ҡаршы тауҙы ***Өкө ташы*** тиҙәр.

Ваҡытында мәктәбе, магазины, колхоз үҙәге лә булған Аралбай ҙур ауыл ине.

Ата-бабаларыбыҙ төйәкләнеп, ғүмер баҡый донъя көткән илаһи үә изге йорт-ерҙе уҙғас, Өкө ташы уяһынан юлдан алыҫ түгел ***әрүәхтәрҙең ҙур йортто*** ла күренеп ҡала.

Ошоға тиклем бер ғаилә кеүек көн иткән ауыл 1960-1970 йылдарҙа тарҡала башлай. Күбеһе Мишәр ауылына күсә. Унда 17-25-ләп йорт ине.

1975-1980 йылдарҙа Моратша бабай нәҫеле, Наҡыя Аралбаева 2-се йортта йәшәүҙәрен дауам иттеләр. (Һуңынан инәй һыу алырға төшкәндә генә, аяҡтары батҡаҡҡа убып, тартып ала алмай донъя ҡуйҙы). Моратша бабай район үҙәгенә күсергә мәжбүр булды. Улы Зәки Яңы Мөсәт ауылында йәшәй.

…Ә хәҙер оло быуынға иҫләп, тарихи урынға баш эйеп уҙаһы ғына ҡалды Моратша бабайҙың ағастары ла ҡороно инде. Сөнки ғүмер буйы ошо ауыл аша йөк ташығандар, үткенселәр уҙған, юлдар төҙөгәндәр, граждандар һуғышы ла ситтә ҡалмаған. Ир-егеттәрҙең күбеһе Бөйөк Ватан һуғышында ла ятып ҡалғандар.

Аралбайҙың нәҫелдәрен дауам итеүселәр бөгөнгө көндә нигеҙҙә, Яңы Монасип, Тимер, Исламбай, Яңы һәм Иҫке Мөсәт һәм Иҫке Собханғол ауылдарында йәшәй.

Ата-бабаларыбыҙҙың рухын һәм шәхесен ҙурларға, үҙебеҙҙә көс-илһам табып, быуындар бәйләнешен, Тимер, Тәүлин, Һөйөндөк, Йәнһөйәр, Ҡыуат, Ҡалҡаман, Яманғол, Мишәр ауылында Заһит, Теләүғол, Абыр нәҫелдәрен, яҡын туғанлыҡты онотмайыҡ!

Иң мөһиме – дәртле, эшсән Тимер халҡын бәйләүсе кешеләр Мишәрҙә йәшәй, хәҙер күптәре бер-береһе менән ҡоҙа-ҡоҙағыйҙар булып бөттөләр.

Аралбай ауылы

Был ялан оло юл буйында, Яңы Монасиптан һигеҙ саҡрым көньяҡ-көнбайышында урынлашҡан. Бында элек ошо исемле ауыл булған. Есаул Аралбай Мөхәмәтов беренселәрҙән булып нигеҙ һалған.

Заманында ҙур ғына булған. 1960 йылдарҙа хөкүмәт ауылды перспективаһыҙ тип, тарҡатты. Иң һуңға тиклем Моратша олатай йәшәне. Унең баҡсаһында алмағастар үҫте, улар ғына кеше йәшәгәнлеген әлдән әле белгертеп маяҡ булып үҫә.

Ер-һыу атамалары

Йот йылында үлгәндәр зыяраты. Йот йылы 1921-1922 йылдар. Ҡыш айҙары Аралбайҙа кеше аслыҡтан күп ҡырылған. Ас кешенең туң ерҙе ҡаҙып мәйеттәрҙе ерләргә хәлдәре булмаған. Мәйеттәрҙе бер кешенең соланына өйөп барғандар, көндәр йылынғас, бер зыяратҡа ерләгәндәр. Моратша олатай зыяратты кәртәләп тә ҡуйған ине. Хәҙер кәртә сереп ҡолаған.

Ҡарағасбейек. Аралбай яланында ҡаршы тау, йылғаның һул яғында. Әүәле ошо тауҙа ике бейек ҡарағас үҫкән. Исеме шунан килеп сыҡҡан.

Быҙауүлгән. Боһондо йылғаһының түбәнендәге ялан. Һуғыштан һуң Аралбайҙа колхоз фермаһы була. Ошо ерҙә колхоз быҙауҙары үлгән. [2]

Бейгилде яланы. Был ялан элекке “Ҡыҙыл-таң” колхозы ҡымыҙныйы булған. Оло юл буйындағы ялан (хәҙер “Охоттур” биләмәһе). Бабсаҡ батырҙың улы Күҫәк (Көҫәп) бейҙең, атаһы өсөн ус алам, тип Ҡарағоләмбәтте Ҡара һыйырға артына ҡаратып ултыртып, Аҡбулат һыртынан ҡарағай-ҡыпсаҡ ерҙәренә алып китә. Килешләй ошо яланда ялға туҡтайҙар. Ҡарағоләмбәтте, соҡор ҡаҙып, шунда төшөрөп, һаҡ ҡуялар.

Ҡарағоләмбәт төндә оло ярау итә, еҫенә түҙә алмай, ярауын алып йылғаға ырғыта. Ошо ваҡиғанан һуң яланды Бейгилде (Бей килде), ә йылғаны – ***Буҡсырға*** (Буҡсорға) йылғаһы тип атай башлағандар. [3]

[1] Аллабирҙин Дамир Зиннәт улы, тарих уҡытыусыһы.
[2] Вәлиев Ҡылысбай Мансур улынан (1936 йылғы) яҙып алынған.
[3] Әмирханова Өмөгөлсөм Мостафа ҡыҙы, 1920 йылғы, элек Аралбай ауылында йәшәгән.

Сәғитова Нәсимә Ғилман ҡыҙы яҙып алған.

Нәби ауылы



Нәби ауылы бик матур урында, Ағиҙел йылғаһының ике яҡ ярында урынлашҡан. Тәүҙә кешеләр иҙелдең һул яҡ ярына урынлашалар, һуңынан уң яҡ ярға ла күсеп ултыра башлайҙар. Ауылда өйҙәр һаны арта, тик ауылдың исеме булмай. 6-9- кантондарҙың попечителе Филатов ошо ауылға ла килеп сыға. Ауылға килгәс, ауыл исемһеҙ икәнен белә. Исем бирергә кәрәк була.

Бер тиҫтер малайҙарҙы йыя ла уларҙы йүгертеп ярыштырырға була. Кем алдан килә, ауыл шуның исемен йөрөтәсәген әйтә. Нәбиулла исемле малай беренсе булып килә. Шунан бирле ауыл ошо исем менән йөрөтөлә башлай. [1]

Тарих фәндәре кандидаты Ә.Әсфәндиәров ауылдың барлыҡҡа килеү тарихын түбәндәгесә аңлата. Байназарҙар Йәүгәзе йылғаһы буйындағы утарҙарын ауылға әйләндергәндәр. Беренсе булып Нәбиулла Мәрәсов (1787 йылғы) шунда күсеп ултырған. Уның улдары Әсәтулла, Ғәлиулла, Зиннәтулла һәм Хисмәтулла, Нәбиулланың ҡустылары Фәтҡулла (1790 й.) һәм Рәхмәтулла (1793 й.) шунда күсә.

1848 йылда Филатов ауылда була. Башҡа эштәр менән бер рәттән ауылдарҙа өйҙәрҙең хәрби губернатор 1843 йылда раҫлаған типовой буйынса төҙөлөүен күҙәтеү ҙә уның бурысына ингән. Ул өйҙәрҙең бер-береһенән 10,15 сажин алыҫлыҡта тороуын, ә ихаталарҙың араһында янғын хәүефһеҙлеге өсөн 12 сажин (24 метр) буш йылға, күл һәм йырын буйҙарында урынлаштырылыуын күҙәткән.

1845 йылда башҡорттарға ағас әҙерлеге, ишле ғаиләләргә икешәр өй төҙөргә бойорған. Яңы өйҙәр иҙәненән түбә таҡтаһына тиклем кәмендә өс аршин бейеклектә, урам яҡ стенаһына ике-өс тәҙрәле булырға тейеш була. Бынан тыш сыуал урынына мейес сығарырға тейеш була. Сыуалға утын күп китә һәм кешеләрҙең күҙенә ыҫ зарарлы (төтөн) тип иҫәпләгәндәр. Филатов ауылдарҙы ҡарап сыҡҡан да тиҙ арала ҡапҡалар эшләүҙе талап иткән. Ауыл барлыҡҡа килгән ваҡытта унда 10 өй, 1920 йылда 79 өй була.

Нәби ауылының халҡы ҡарағай-кыпсаҡ ырыуына ҡарай. Ағасы – ҡарағай, ҡошо – ҡарсыға, тамғаһы – даға.

Ауылда йәшәгән кешеләр бер-нисә араға бүленә. Иң киң таралғаны – Һатыбалдар. Уның килеп сығыу тарихы түбәндәгесә. Ҡәнзәфәр исемле кешенең ике улы була. Тик уларҙың бер ҙә ир балалары тормай икән, гел үлеп тора. Шуға күрә ир бала донъяға килгәс, уны тәҙрә аша һатып алалар. Шунан был бала үлмәй, үҫеп ир етә. Ошонан һуң таралған кешеләр Һатыбалдар араһы тип йөрөтөлә.

Ә икенсе ир балаһы тыуғас та уны йүргәге-ние менән эткә аш һала торған һауытҡа (этаяҡҡа) һалып эт алдына бирәләр. Эт балаға теймәй. Был кешенән таралған затты Эталмаҫтар тип йөрөтәләр. Был араға Ҡотлоғәлләмовтар инә.

Бынан тыш ауылда Ҡара табандар араһы бар. Был араға Хисаметдиновтар, Мөфтәхетдиновтар инә. Йәнсуриндар һаҫыҡ бесәй араһы тип йөрөтәләр. Улар ҡара табандарҙан көлгәндәр. Быға яуап итеп, Йәнсуриндар йәйләүгә күскәс, ҡара табандар улар йәшәгән өйгә үлгән бесәй тараҡкандар. Йәйләүҙән ҡайтҡансы улар һаҫыған. Исем шунан килеп сыҡҡан да инде.

Абҙайҙар араһын икенсе төрлө Йәшел кәртүктәр араһы тип йөрөтәләр. Ул араға Теләүбаевтар инә. Көҙәндәр араһы – Сөләймәновтар, Туҡтамышевтар инә.

Нәби ауылының исеме (1 вариант). Ауыл бик матур урында Ағиҙел йылғаһының ике ярында урынлашҡан. Тәүҙә кешеләр Иҙелдең һул яҡ ярына урынлашалар, һуңынан уң яҡ ярға ла күсеп ултыра башлайҙар. Ауылда өйҙәр һаны арта, тик ауылдың исеме булмай. Алтынсы, туғыҙынсы кантондарҙың попечителе Филатов ошо ауылға ла килеп сыға. Ауылға килгәс, ул ауылдың исемһеҙ икәнлеген белә. Исем бирергә кәрәк була. Бер тиҫтер малайҙарҙы йыя ла уларҙы йүгертеп ярыштырырға була. Кем алдан килә, ауыл шуның исемен йөрөтәсәген әйтә. Нәбиулла исемле малай беренсе булып килә. Шунан бирле ауыл ошо исем менән атала башлай. [2]

Нәби ауылының исеме (2 вариант). 1840 йылда Филатов тигән бер кантон беҙҙең яҡтарға килеп төшә. Иң беренсе Һатыбал олатайҙы осрата. Кантон унан фатир һораша. Һатыбал олатай уны үҙе өйөнә алып ҡайта тамаҡ ялғап бер аҙ ял иткәс, Филатов ни өсөн килгәнен әйтә: “Бабай, мин хөкөмәт эше менән килдем. Тирә яҡта халыҡ тулған. Шуларҙы күсереп бер ергәрәк ултыртырға кәрәк ине. Уларҙы, ауылдар төҙөп, халыҡты өйрәтергә кәрәк ине”- ти. Халыҡты ике көн эсендә йыйып бөтәләр һәм йыйылыш уҙғаралар. Филатов нисек ауыл, урамдар төҙөргә ауыл ҡарттары менән кәңәшләшә, өйрәтә. Шулай итеп, ошо ерҙе ауыл төҙөү өсөн һайлайҙар ҙа, һәр кешегә урын бирә башлайҙар. Иң беренсе булып Һатыбал ала. Унан һуң улдары ер алып, рәт-рәт булып теҙелешеп китәләр. Хәҙер инде күмәкләшеп ауылға исем уйлай башлайҙар. Ҡайһыһы, Һатыбал олатайҙың исемен ҡушайыҡ, ти. Ләкин Һатыбал олатай ризалашмай һәм: “Уландар, мин инде ҡартайғанмын. Әйҙә Нәбиулла исемен бирәйек”, ти. Бөтәһе лә риза була. Шул ваҡыттан алып Нәбиулланың исемен ҡыҫҡартып, ауылды Нәби тип йөрөтәләр.

Нәби ауылының барлыҡҡа килеүе һәм бер нисә ер-һыу исемдәре. Күскәнбейҙән (ҡарағай-ҡыпсаҡ) тыуған ир балаларҙың етенсе быуыны Ишкилденән (250-300 йыл элек) һарттар айырылған. Ун беренсе быуыны Ильястың улы Байназар – Байназар ырыуы, шулай уҡ беренсе быуын Ҡәнзәфәрҙең улы Һатыбалдан ҡуяндар ырыуы барлыҡҡа килгән.

Ҡәнзәфәр ҡарт Ҡыҙылъярға (ауылдан 5 км) утар һатып алып мал көткән. Уның тыуған бер балаһы үлә торған булған. Ҡарт аптырауға ҡалған.һуңғы ир бала тыуғас уны инә булған ҡатынға биргән һәм унан ат биреп кире һатып алған. Малайға Һатыбал тип исем ҡушҡандар. Һатыбалға 3 йәш тигәндә тағы бер ир бала донъяға килгән. Бала тыуғас уны эткә биргәндәр, ләкин эт балаға теймәгән. Уны Этәлмаҫ тип атағандар. Һатыбалдан Фәйзулла һәм Бабич тыуған, Фәйзулланан Ғилметдин, Ғилметдиндән Мөхәрәм, Мөхәрәмдән Ғәззәле, Ғәззәленән Әбүбәкәрәм һәм Ғәликарам Һатыбаловтар, ә Бабаичтан Йәғәфәр, Йәғәфәрҙән Рәхмәт, Рәхмәттән Мөҙәрис Йәғәфәров тыуған. Һатыбал ҡарттың зат-ырыуҙары Иҙелдең уң яҡ туғайында, ә һул яҡ туғайында Нәбиулла ҡарттың зат-ырыуҙары йәшәгән.

Ошо ваҡытта Иҙел буйындағы башҡорттар араһына Филатов тигән урыҫ кешеһе килгән. Ул хәҙерге ауылдың көньяҡ-көнбайышындағы текә бәләкәй уянан, атын етәкләп, Иҙел туғайына төшкән уяны элек Филатов уяһы тип йөрөткәндәр. Заманалар үтеү менән был исем үҙгәргән һәм хәҙер тауҙы ***“Клатуй”*** тип атайҙар. Һатыбал ҡарт Филатовты өйөнә алып ҡайтҡан.

Уның бойороғо буйынса яҡын тирәләге бөтә халыҡты йыйҙырған. Филатов теләһә ҡалай урынлашҡан өйҙәрҙе бер рәткә теҙеп урам төҙөп ултырырға өйрәткән. Һәр ғаиләгә 12-шәр сажин ер бүлеп биргән.

Һәр ике өй араһында тыҡырыҡ ҡалдырылған. Кантон ауылға, үҙенә тәүге осраған оло кеше хөрмәтенә Һатыбал тип исем ҡушмаҡсы булған. Ләкин Һатыбал ҡарт риза булмаған. Ауылға ауылдың икенсе кешеһенең исемен – Нәбиулланыҡын ҡушҡандар.

Һатыбалдың улы Фәйзулла ҡарт һунарсы булған. Ул ҡуян тиреһенән тегелгән ап-аҡ тун кейеп йөрөгән. Уны бала-саға ҡуян бабай тип атаған. Ошо ваҡыттан алып Иҙелдең уң яҡ ярында ултырыусыларҙы ҡуяндар тип йөрөтә башлағандар. Иҙелдең һул яҡ ярында йәшәүселәрҙең күбеһе ялбыр, ҡуйы ҡашлы булғандар. Шуға күрә лә уларҙы “байҡаштар” тип атап йөрөтә башлағандар.

Ауыл кешеләре Нөгөш, Кәлтәгәү һәм Ҡыҙылъяр тигән ерҙәрҙә күсеп йөрөгән. Нәби ауылында, “йәшел кәртүктәр”, “иместәр”, “этәлмаҫтар”, “һатыбалдар”, “көҙәндәр”, “ҡара табандар” аралары бар.

Ауылдың көнбайышында ***Йәүгезе йылғаһы*** буйында ***Исәкәй тауы*** урынлашҡан. Исәкәйҙең төньяҡ битләүе ***Ҡабырый*** тип атала. Йәйгеһен бында турғай еләге бик уңа. Йәүгәзе буйында үрҙәрәк кисеү бар. Уны ***Ҡарабулат кисеүе*** тип йөрөтәләр. Кисеүҙән йылғаның һул яҡ ярына сыҡһаң, ат юлы китә. Юл ***Тирмән үҙәге***нән ***Суһаҡҡа*** алып бара. Суһаҡ “суҡ уҫаҡ” һүҙенән алынған, ул уҫаҡлы тау булған. Хәҙер бында иген сәсәләр. Суһаҡҡа яҡын ғына ***Бурәнә сборы*** тигән ер бар. Унда һал ағыҙыусылар ҡырҡылған ағасты әҙерләп, өйөп ҡуйыр булғандар. Суһаҡ аръяғындағы ялансыҡ-сабынлыҡ ***Таңбикә*** тип атала.

Һуғыштан һуңғы йылдарҙа ауыл халҡы звено менән бесән әҙерләп ҡырҙа ятҡандар. Сатрала ла ятып бесән эшләгәндәр. ***Сатра*** бергә килеп ҡушылған ике йылға араһы тигәнде аңлата. Сатрала Йәүгәзегә ***Ҡоро Йәүгәзе*** килеп ҡушыла. Ҡоро Йәүгәзе йәйге эҫе көндәрҙә ҡорой. Был йылға буйында муйыл бик уңа. Ҡоро Йәүгәзенең уң яҡ ярында урынлашҡан ерҙе ***Ялануй***, ә һул яғындағыһын ***Янтыҡ*** тип атайҙар. Янтыҡ – бер яҡҡа ауыш, ҡырын тигән мәғәнәне аңлата. Янтыҡта ла бесән әҙерләйҙәр.

Төп арҡа – тау башындағы ялан (арҡа). Элек иген сәскән төп яландар шунда була. Хәҙер уны ***Түбәрҡа*** тип тә йөрөтәләр. Шунда уҡ ***Тимер соҡор*** тип аталған үҙәк тә бар. Түңәрәк яһап ҡарағай үҫкән яланды ***Түңәрәк ҡарағай*** тип тә йөрөтәләр. ***Рәһәй яланы***ның атамаһы рәһ (фарсы теленән – “юл”) һүҙенән сыҡҡан тип фараз итеп була. ***Ыхмайыл- ул*** ыҫмала һүҙенәндер, сөнки ауылға яҡынырaҡ урманда ҡарағай һирәк, йәки бөтөнләй юҡ. Ә Ыхмайылдың тирә-яғында ыҫмалы биреүсе ҡарағай ғына үҫә. [3]

Тауҙар

Бесәй ояһы. Нәби ауылының һул яғында урынлашҡан тауҙарҙың береһенең битләүенә бер заман бер бесәй килеп сыҡҡан. Ул бик сос, һиҙгер булған. Кеше килеп сыҡһа ҡасҡан, саҡырғанға килмәгән. Бесәй кеше-ғаранан ҡасып-боҫоп ошонда йәшәгән, үҙе тотарлыҡ йән эйәһенә һунар иткән. йөрөй торғас, бесәйҙең бик күп балалары тыуып үҫеп киткән. Улары ҙурыйып, тағы үрсегән. Бесәйҙәр шул тиклем күбәйеп киткән, төндәрен талашып, кешеләрҙең маҙаһына тейгән. Кешеләр, хатта был урынға килергә ҡурҡҡа башлаған. Сөнки ҡырағайға әйләнгән бесәйҙәр, был тирәгә килергә сыҡҡан ваҡ бәрәстәргә лә ташлана торған булған. Мал эҙләгән кешеләр тау битләүенә таяҡ тотоп ҡына килә торған булған. Аҙаҡтан был тау битләүен кешеләр “Бесәй ояһы” тип аталған. Ул әле лә шулай йөрөтөлә. [9]

Ахун һарайы. Ауылыбыҙҙы көнсығыштан ҡаплап торған бер тауҙың башын Ахун һарайы тип йөрөтәләр. Уның исеме лә үткән замандарға ҡайтып ҡала. Ахун тигән бер кеше урманда ҡасып, йәшеренеп ятҡан. Шунда бер аҡланда үҙенә һарай эшләп алған. Ошо төбәкте Ахун һарайы тип йөрөтәләр. [4]

Билтер тауы. Ауылдың төньяғында Билтер тауы менән сикләнгән. “Билтер” һүҙе аяҡтың йөҙләк тәңкәленән аҫҡы нәҙегерәк өлөшө тигәнде аңлата. Билтер, бәлки “Билән” һүҙенән алынғандыр. Билән – ике тау аралығындағы тәпәшерәк ер, нәҙек билле тигәнде аңлата.

Бүләкташ. Элекке замандарҙа ауылыбыҙҙа һылыуҙарҙан-һылыу Бүләкбикә исемле ҡыҙ булған. Егеттәр үҙҙәренең мөхәббәттен ҡыҙға аңлатырға баҙнат итә алмай аптыраған арала бер мулланың күҙе төшөп йөрөгән. Мулла күптән ғаиләле, бер нисә бисәһе булған инде. Ҡыҙҙың ата-әсәһе фәҡир генә йәшәгән. уларҙың ошо фәҡирлеген мулла үҙ өҫтөнә алмаҡсы була һәм ҡыҙығыҙҙы миңә бирһәгеҙ, һеҙҙе ярлылыҡтан сығарам тип вәғәҙә итә. Күп баш ватҡандан һуң ата-әсәһе ризалашалар. Ҙур байлыҡтар вәғәҙәләгән муллаға ҡыҙҙарын бирмәксе булалар. Был ҡарарҙы ишетеп ҡалған ҡыҙыҡай бисәһе, балалары булған муллаға өҫтәлмә бисәлеккә барырға

риза булмай, тау-таштар араһына ҡаса. Айыуҙы йылғаһын аша сығып Мишәр ярына йүгергән. Ата-әсәһенең:"Ҡыҙым-ҡыҙым, балаҡайым, ҡайҙа ҡасаһың, тыңла беҙҙе, ҡасма инде туҡта, беҙҙе харап итәһең бит!"-тип етеп килә. Ҡыҙ әйләнеп ҡараһа, һөймәлекһеҙ мулла ла эргәһендә генә икән. Бүләкбикә бер аҙға юғалып ҡала ла, йүгереп барып Ағиҙел өҫтөндәге суҡайып торған ҡаянан һикерә. Ташҡа бәрелеп хәрәкәтһеҙ ҡалған кәүҙәне Ағиҙел тулҡындары үҙ ҡосағына ала. Был фажиғәнән ҡоттары осҡан ата менән әсә кеше: "Ҡыҙыбыҙҙан иҫтәлеккә, бүләккә ошо ҡая ғына ҡалдымы инде, ә? - тип иренә боролоп ҡарай. Ошо ваҡиғанан һуң был ҡаяны "Бүләкбикәташ" тип йөрөткәндәр. Ул ҡая Нәби ауылы менән Яңы Монасип араһында Айыуҙы йылғаһын аша сығып бер тауға күтәрелгән урында, юлдың һул яғында Ағиҙел өҫтөнән ҡалҡып тора. [4]

Елдәрҡа. "Елдәрҡа" тауы оло юлды аша сығып күтәрелгән тау. Бейек булғаны өсөн шундай исем бирелгән. Елле-ҙур, бейек тигән төшөнсә. Был тауҙа ике маяҡ булған. Был маяҡтан Белорет ҡалаһы ла күренеп торған. Һуңынан ике маяҡ та янған.

Имес тауы. Битлер тауын төшкәс Ағиҙел аръяғында Имес тауы урынлашҡан. Бында 1954 йылдарҙа ҡайҙандыр эшкә килгән халыҡ (иместәр) төйәкләнгән. Ләкин урындағы халыҡ, сабынлыҡ, көтөүлек ерҙәре аҙ булыу сәбәпле иместәрҙе был ерҙән ҡыуып ебәргәндәр. Улар әлеге Мораҙым еренә барып урынлашҡандар. XX быуат башында имес туғайында Ҡурғашлы ауылы барлыҡҡа килгән.

Ҡырынер. Был урын тау битләүенең ҡырынлығы тураһында һөйләй. Ҡырын битләүҙән юл һалғандар.

Клатуй (1 вариант). Нәби ауылының көнбайышында ауыл эргәһендәге тауҙы Клатуй тип атайҙар. Нәби ауылының типовой план буйынса төҙөүен күҙәтеү кантондың попечителе Филатовҡа йөкмәтелгән була. Ул ауылға бер нисә тапҡыр килеп киткән ваҡытында һыбай килгән дә оло юлдан ошо тауҙан атын етәкләп төшөп йөрөгән. Тауҙан аҫҡа ҡарай текә юл төшкән. Ауыл халҡы тауҙы Филат уйы тип йөрөтә башлаған, һуңынан ул үҙгәреп Клатуй тип атала башлаған. [5]

Клатуй (2 вариант). Беҙҙең ауыл тауҙар араһында урынлашҡан. Шул тауҙарҙың береһен Клатуй тип йөрөтәләр. Был тауҙың исеме 1840 йылда беҙҙең ауылға килеп төшкән Филатовҡа бәйле. Был кантон ауылыбыҙға тауҙың бер текә еренән килеп төшкән. Шул тирәне Клатуй тип атағандар. Ата- бабаларыбыҙ был кантондың фамилияһын боҙоп, үҙҙәренә әйтергә уңайлы булырлыҡ итеп үҙгәртеп алғандар.

Филатов йәки "Клатуй тауы" (3 вариант). Ауылдан көньяҡ-көнбайышта ҙур тау бар. Оло юлға сығыу өсөн был тауҙы урап сығарға кәрәк. 1840 йылдарҙа Филатов тигән кеше төҙөлөш эше буйынса ауылға килгән. Ул тауҙы урап йөрөмәй, ә аты менән тура менеп йөрөй. Шуға күрә уның хөрмәтенә тауҙы Филатов йәки Филат тауы тип йөрөтә башлайҙар. Телдән күсә-күсә был исем "Клатуй" тип йөрөтөлә башлай. Тауға менгәс, һул яҡта "Калын ҡарағай" баҫыуы башлана. Был урында элек ҡарағай сәселгән кеүек үҫкән. Аҙаҡ ҡарағайҙарҙы ҡырҡып сәсеүлек әҙерләгәндәр. Йыл да был яланға иген сәсәләр.

Тәкәоскан. Ҡыҙылъяр яғында элек йәйләүҙәр урынлашҡан булған. Ололар моғайын, берәйһенең һарыҡ тәкәһе ҡаянан ҡолап төшкәндер, ти. Ул ерҙәр көртмәлегә бик бай. Халыҡ был урынды ***Кұктәкә*** тип тә йөрөтә. [6]

Йылғалар

Айыуҙы. Нәби менән Яңы Монасип ауылдары араһында көнбайыш яғынан данлыҡлы Ағиҙелебеҙгә ҡойоусы бәләкәй бер йылға Айыуҙы тип атала. Халыҡ хәтерендә йәшәгән легендаға ҡарағанда, был йылға буйы ҡуйы әрәмәлек булған. Йәйге селләләрҙә серәкәй-

күгәүендәрҙән ҡасып, ҡуйы әрәмә ышығына, ҡалын лапылыҡтарға айыуҙар төшөп ята торған булған. Йылға буйы айыу ине тип һөйләгәндәр әүәле ололар. Айыуҙар күп булһа ла кеше менән татыу йәшәгәндәр, бер-береһенә зыян килтермәгәндәр. Муйыл, ағас еләгә, балан, мышар уңған йылдарҙа, айыуҙар малға теймәгән. Тик емеш-еләккә наҡыҫ саҡтарҙа ғына әрәмәгә килеп сыҡҡан малды һуҡҡылаған. Айыуҙы буйында хәҙер айыуҙар юҡ инде. [8]

Йәүгәҙе. Ағиҙелдең һул яғынан бәләкәй йылға ҡоя. Элек ошо йылға буйында Байназар ауылы кешеләре йәйләгән. Бына ошо урынға Байназарҙан Яуғаҙы исемле кеше килеп ултырған. Өйө йылға эргәһендә битләүҙә булған. Һул яҡта ҡуйы ҡарағай урманы, ә уң яҡта йылға аҡҡан. Йылғаның исеме лә булмай. Һуңынан ошо тәүге күсеп кеше хөрмәтенә йылғаны ***Яуғаҙы*** тип атағандар. Ваҡыт үтеү менән ул исем үҙгәргән һәм бөгөнгө көндә ул Йәүгәҙе тип йөрөтөлә. [9]

Ҡужан шишмәһе. Кәмә сығышындағы йырын буйлап бәләкәй генә шишмә ағып төшә. Элек тау бите урманлыҡ булған. Шул тирәлә бер кеше йүкә һыҙырып йөрөр булған.Уны Ҡужан тип йөрөткәндәр. Шуның исеменән шишмәне Ҡужан шишмәһе тип йөрөткәндәр. [6]

Күперҙе йылғаһы. “Күперҙе йылғаһы”. Был урындан оло юл үткән. Аттар сығып йөрөрлөк итеп йылға аша күпер төҙөгәндәр. Аҡтар, ҡыҙылдар ошо күпер аша сығып йөрөгәндәр.

Ялан-туғайҙар

Ҡайын туғай. Ағиҙел йылғаһының һул яғында ауылдың төньяҡ-көнбайыш яғында ҡуйы ҡайынлыҡ булған. Был ҡайынлыҡ Иҙел ярына тиклем барып еткән. Ауыл ҙурая барған, халыҡ яйлап ҡайындарҙы утынға ҡырҡҡан. Һуғыштан һуңғы йылдарҙа инде бөтөнләй ағас ҡалмаған. Шулай булһа ла кешеләр был яланды “Ҡайын туғай” тип йөрөткәндәр. Хәҙер был урында өйҙәр ултыра, ә Иҙел буйы сәсеүлек ялан булып ҡалған.

Һыйыр башмағы. Бер һыйыр башмағы менән сығып китеп үлгән урынды шулай атағандар.

Көтөүсе яланы. Баҫыуҙың дауамы сабынлыҡ итеп көтөүсегә бирелгән өсөн шундай исем ҡушҡандар.

Янтык . “Яндыҡ” исеме янсыҡ кеүек бәләкәй урын булған өсөн аталған.

Ҡайынтуғай. Ағиҙел йылғаһының һул ярында, ауылдың төнъяҡ-көнбайыш яғында ҡуйы ҡайынлыҡ булған. Был ҡайынлыҡ Иҙел ярына тиклем барып еткән. Ауыл ҙурая барған, халыҡ был ҡайынлыҡтарҙы утынға ҡырҡҡан. Һуғыштан һуңғы йылдарҙа унда бөтөнләй ағас ҡалмаған. Шулай булһа ла кешеләр был яланды “Ҡайынтуғай” тип йөрөтәләр. Хәҙер унда ауыл халҡы йорттар төҙөп, бик матур урам барлыҡҡа килтергән. [6]

Малайүлгән. Оло юлдан Иҫке Собханғолға барған саҡта уң яҡта ҡала. Һатыбалов Таһир сабынлығы. Тарихы ошолай: әсәһе район үҙәгенә йомаш менән киткәс бер бала оло юл буйлап илай-илай ҡәҙерле кешеһен эҙләп китә. Улар Ҡурғашлы ауылында йәшәгән булалар. Бала юғала. Көн бик йонсоу, ямғырлы көн. Халыҡ эҙләп ҡараһа ла эҙенә төшә алмай. Уң яҡҡа сабынлыҡ яғына инеп һәләк булған малайҙың мәйетен яҙғыһын ғына табып алалар. Мырҙағолова Хәмиҙә Сәләхетдин ҡыҙынан яҙып алынды 1926 йылғы. Байназар ауылында тыуып үҫкән. [4]

Мулла түше. Ҡыҙылъярҙа урынлашҡан тау битләүен “Мулла түше” тиҙәр. Бәләкәй генә йылғаны сыҡҡас, ҡалҡыуыраҡ урын бар. Нәби ауылынан Мәхмүт мулланың йәйләү урыны булған.

Ауылдың тарихи, иҫтәлекле урындары

Ауылда мәсет. Ауылда иҙелдең уң яҡ ярында, хәҙерге клубтан төньяҡтараҡ мәсет төҙөлә. Уны 1914 йылда халыҡтан йыйылған игәнә аҡсаһына Ғәзитулла исемле кеше төҙөтә. Ул ҙур, бейек манаралы була. Яҙлы-көҙлө иҙел аша юл өҙөлгән мәлдә ауылдың һул яғы өсөн Тләүбаев Ғимадисламдарҙың өйө урынында биш намаҙлыҡ йорт була. Ауыл кешеләре намаҙға шунда йөрөйҙәр. Шулай итеп ауылда ике мәсет була тип әйтеп була. Мөһим ауыл мәсьәләләрен хәл итеү өсөн халыҡ мәсет янына йыйыла торған булған. Ул мәсет 1936 йылға тиклем ултыра. Уҡытыусы Ҡөнәфин Хисаметдин етәкселегендә манараһын алып ташлайҙар. Ул уң яҡҡа ҡолап төшә. Йортон мәктәп итәләр, ә 1965-се йылдарҙа иҫкергән был йортто емерәләр һәм утын итеп яғалар. Ауылда указлы мулла булып Мораҙым ауылынан килгән Үтәбаев Мәхмүтдин тигән кеше йөрөй.

Ауылда тирмән. Ауылда халыҡты хеҙмәтләндереү өсөн Йәүгезе йылғаһы буйында һыу тирмәне ҡоралар. Уны Фәтҡуллин Ғүмәр исемле кеше 1915 йылда төҙөтә. Ауыл халҡы ошо тирмәндән он һалдыра. Хаҡы килтерелгән ашлыҡҡа ҡарап алына, ул кәрсе тип атала. Тирмән 1928 йылға тиклем эшләй. Әле лә Йәүгәзе йылғаһы буйында быуылған быуа эҙҙәре һаҡланып ҡалған. Һуңынан 1939 йылдарҙа “Маяҡ” колхозы Айыуҙы йылғаһында тирмән төҙөтә. Ул тирмән 1957 йылға тиклем эшләгән.

“Оло соңғор” һәм “Бәләкәй соңғор”. “Оло соңғор” һәм “Бәләкәй соңғор” ауылдан көнбайышта урынлашҡан. Был урын соҡор эсе булған өсөн шундай атама алған. Ҡасандыр ағасҡа бай урын булған. Туғайлығында ер еләге, ҡайын еләге, ағас араһында ҡурай еләге өлгөрә.

“Ҡуян” һәм “Байҡаш”. Нәби ауылы Ағиҙелде ике яҡлап ултырған. Һәр ике яҡтың борондан килгән үҙ исеме бар. Уң яҡ ярҙа урынлашҡан ауыл Ҡуян, һул яҡтағыһы Байҡаш тип атала. Был исемдәр тарихын былай тип аңлаталар: йәй көндәрендә ике яҡтан да малайҙар ҡырсын буйына йыйылышып, Ағиҙел аша таш сәпәшеп уйнағандар. Таш тейеп имгәнгәндәр ҙә булған. Һул яҡ ярҙа йәшәүсе малайҙар тырабыҙыраҡ булған, уң яҡтағыларҙы ныҒыраҡ сәпләгән. Ундағылар ҡурҡып сигенә, унан ҡасып таралышып та бөтә торған булған. Шуға күрә тегеләр быларын:”Ҡурҡаҡтар! Ҡуяндар!”- тип үсекләгәндәр. Үҙ сиратында “ҡуяндар” һул яҡтағыларҙың зитына тейерлек сифаттарын табырға тырышҡандар. Әмәлгә ярағандай, һул яҡтағыларҙың барыһы ла ҡалын, яҫы ҡара ҡашлылар булған. Ошонан сығып инде “ҡуяндар” тегеләрҙе әрәмә араһында боҫоп ҡына “байҡаштар” тип үсекләр булғандар. Шулай итеп, балалар араһында сыҡҡан ығы-зығы ике яҡ ауылға исем биргән тип раҫлай халыҡ хәтере. [4]

Яңғыҙ ҡарағай (1 вариант). Ағиҙел йылғаһының һул яғында “Байҡашта” “Ҡыя юл” тауы урынлашҡан. Ошо тауҙың Йәүгәҙе йылғаһы яғына урынлашҡан битендә элек матур-матур ҡайынлыҡтар, йөҙйәшәр ҡарағайҙар үҫкән. Был ҡуйы урман, әлбиттә, кешеләр өсөн хазина булған. Ҡарағайынан өй һалғандар һәм Иҙел буйлап ағыҙғандар. Беҙҙең яҡтарҙың шәп бүрәнәләрен Ағиҙелдең түбәнге ярындағы ауылдарҙа, урманһыҙ райондарҙа көтөп ала торған булғандар. Ҡайынлығын утынға ҡырҡҡандар. Тиҫтәләрсә йылдар буйы ҡырҡа торғас, ҡарағайлыҡ бөтөп, ҡайындар араһында яңғыҙ ғына ҡарағай ултырып ҡалған әлеге көндә ул мөһәбәт ҡарағай булып үҫеп ултыра. [7]

Яңғыҙ ҡарағай (2 вариант). Ҡыяюл тауының бер яҡ битендә элек матур-матур ҡайындар, йөҙйәшәр ҡарағайҙар үҫкән. Был ҡуйы урман, әлбиттә, кешеләр өсөн хазина булған. Ҡарағайынан өй һалғандар, һал ағыҙғандар. Ҡайынлығын утынға ҡырҡҡандар. Тиҫтәләрсә йылдар буйы ҡарағай ҡырҡа торғас, ҡарағайлыҡ бөтөп, ҡайындар араһында яңғыҙ ҡарағай ултырып ҡалған. Был ҡарағай йылдың бөтә миҙгеленә лә ҡайынлыҡҡа ниндәйҙер йәм биреп, әллә ҡайҙан күренеп торор булған. Элекке ҡарағай урманынан хәҙер яңғыҙ ғына ҡарағай торған ошо ерҙе “Яңғыҙ ҡарағай” тип йөрөтә башлайҙар. Бөгөнгө көндә был ҡарағай юҡ.

Сания соҡоро. Ҡыҙылъярҙа йәйләүҙәр урынлашҡан ерҙә элек Сания тигән инәйҙең балсыҡ ала торған урыны булған. (Ул Сәфәрғәлин Ғилмандың апаһы) Бәрәкәтле балсыҡ соҡоронан башҡа йәйләүселәр ҙә файҙаланған. Һуңыраҡ колхоз ҙур саҡта ла силос соҡоро хеҙмәтен үтәгән.

Һыусыҡҡан. Нәби ауылында Ағиҙелдең бөгөлөндә урынлашҡан ерҙәрҙе һыу баҫа. Был хәл йыл да ҡабатланмаһа ла, халыҡ уны "Һыусыҡҡан" тип йөрөтә. [5]

[1] Хәйрулла олатаһы һөйләгәндән Хисмәтуллин Зиннур яҙып алған.
[2] Мырҙағолова Хәмиҙә Сәләхетдин ҡыҙынан (1926 йылғы Байназар ауылыныҡы)
Хисаметдинова А.А. яҙып алды.
[3] Нәби мәктәп музейындағы мәғлүмәттәрҙән.
[4] Мырҙағолова Хәмиҙә Сәләхетдин ҡыҙынан (1926 йылғы, Байназар ауылында тыуып үҫкән) Һатыбалова Флүрә яҙып алды
[5] Һатыбалова Ғылмикамал инәйҙән Һатыбалова Флүрә яҙып алған.
[6] Һатыбалова Заһита Хәйбулла ҡыҙынан яҙып алынды, 1917 йылғы, Нәби ауылында тыуып үҫкән.
[7] Ибәтуллина Фәриҙә инәйҙән Һатыбалова Флүрә яҙып алған.
[8] Һуғыш ветераны Теләүбаев Хәлфетдин олатайҙан Теләүбаев Рөстәм яҙып алды
[9] Ҡотлоғәлләмова Файҙа инәйҙән Һатыбалова Флүрә яҙып алды.

Иҫке Собханғол ауыл биләмәһенә қараған ер-һыу атамалары

Иҫке Собханғол ауылы



Иҫке Собханғол ауылының барлыҡҡа килеүе, исеме Яңы Собханғол ауылының барлыҡҡа килеүе һәм исеме менән тығыҙ бәйләнгән. Собханғол утары 1750-1760 йылдарҙа Ағиҙел буйындағы туғайҙың үрге осонда ***Иҫке Ыҙма*** тип аталған урында барлыҡҡа килгән. Утарға, легенда буйынса, Янһары исемле кеше нигеҙ һалған. Иҫке Ыҙмала ысынлап та утар булыуын раҫлаусы дәлилдәр бар. Иҫке Ыҙманан ярты саҡрым үрҙә, Ағиҙел буйында, ***«Кәмә ҡарай торған таш»*** исемле ҡая бар. Был ҡаянан Ағиҙел буйы асыҡ күренеп тора. Ул осорҙа Белоретта, Үҙәндә, Үрге Әүжәндә, Ҡағыла суйын иретеү заводтары булған. Урыҫтар суйын иретмәләрен ҙур кәмәләрҙә (баржаларҙа) Ағиҙел буйлап түбәнгә – Стәрлетамаҡҡа, Өфөгә төшөргәндәр. Утарҙа йәшәгән кешеләрҙе баржаларҙа килгән урыҫтар йәберләгәндәр. Шуға күрә урыҫтарҙың ағып килеүен алдан белеп тороу өсөн Кәмә ҡарай торған ташҡа күҙәтеүселәр ҡуйылған.

Икенсе дәлил. Яңы Собханғол ауылы зыяратында боронғо ҡәбер бар. Уның ташына «1765 йыл. Ҡарағол бей» тип яҙылған. Шулай булғас, утар 1750-1760 йылдарҙа уҡ булған тип әйтергә тулы нигеҙ бар.

Легендала әйтелгәнсә, Янһары бик ныҡ ҡартайғас, атҡа атланып тирә-яҡты байҡап ҡайтырға булған. Хәҙерге Яңы Собханғол ауылы ултырған урынға еткәс, атынан төшөп, ауылды төньяҡтан ҡамап торған ***Бәйет тауы*** итәгендә ял итергә туҡтаған. Ҡарттың улы Собханғол уны эҙләп сыҡҡан һәм ошо тау итәгендә тап иткән. Улын күргәс, Янһары ҡарт: «Мин итәгендә ятҡан тау Бәйет, ә итәге аҫтында мәйет булыр», тигән дә йән биргән. Собханғол, Ҡарағол һәм башҡа улдары ҡартты Бәйет тауы итәгендә ерләгәндәр. Урыҫтарҙың йәберләүенән һәм һыу баҫыуҙан ҡасып, ҡарттың балалары, туғандары хәҙерге Яңы Собханғол ауылы торған урынға күсеп ултырғандар.

Архив документтарына ҡарағанда ла, Собханғол ауылын атай мираҫына эйә булған йөҙ башлығы Собханғол Килдекәев нигеҙләгәне билдәле. 1760-1770 йылдарҙа сотниктар Собханғол Килдекәев һәм Мотай Айыҡколовтар Яңы Собханғолдан алып Ырғыҙлыға тиклемге арала Ағиҙел буйындағы ерҙәргә хужа булғандар. Аҙаҡ был ерҙәрҙе Вознесенский баҡыр иретеү

заводына файҙаланыу өсөн һатҡандар. Собханғол Килдекәев – Икенсе Этҡол ауылыныҡы, ә Мотай Айытҡолов – Иҫке Сибай ауылыныҡы булғандар. Собханғолдоң уландары – Мырҙабай, Мәүлет, Тулыбай. Мырҙабайҙың уландары: Бирҙеғол, Ғәбдел, Моталлап, Ғәбделманап, Ғәбделвәли. Тулыбайҙың уландары: Ғәбделбәшәр, Ғәбделнасир, Ғәбделғазы.

XIX быуат башында 5 ғаилә кире Икенсе Этҡолға күсеп ҡайта: Ишбай Ябаҡов, Ишбулды, Күлбай, Мораҡтол Ахиковтар, Ҡунаҡкужа Йомағужин. Икенсе Этҡолға күсеп ҡайтыусыларҙың ҡайһы берәүҙәренең туғандары Собханғолда ҡалған. Уларҙан Ишбаевтар, Күлбаевтар, Йомағужиндар, Ҡолдәүләтовтар таралған.

1850-1859 йылдарҙа яңы ауыл барлыҡҡа килә. Яңы Собханғолдан Алағуян тамағына Ишбаевтар, Вәлиевтар, Ҡондоҙбаевтар, Күлбаевтар һәм башҡалар күсеп ултыра. Был ауыл Иҫке Собханғол тип атала.

10-сы ревизия буйынса, Яңы Собханғолда һәм Иҫке Собханғолда икешәр йөҙ кеше йәшәгән, һәр ауылда 33-әр хужалыҡ булған. Яйлап Иҫке Собханғол йәки ***Алағуян*** ауылы үҫә барған.

Ауыл халҡы малсылыҡ менән шөғөлләнгән.

Бөрйән районы барлыҡҡа килгәнгә тиклем Бөрйән волосы үҙәге булып Мәндәғол ауылы һаналған, һуңынан волос үҙәге Яңы Собханғолға күсерелгән. Яңы Собханғол ауылының волость үҙәге булыуы тураһында таҡмаҡ сығарғандар:

Янһары ауылы ҙур ауыл,
Волость тотоп тора ул.
Әтәсте тауыҡтан айырмаған
Дурактар ҙа була ул.

Һуңғы волость старшинаһы Байғаҙы ауылы кешеһе Хафиз Байморатов булған. 1930 йылда Бөрйән районы төҙөлгәс, Иҫке Собханғол ауылы район үҙәге булып китә.

Кемдеңдер яңылыш фекер йөрөтөүе арҡаһында Яңы Собханғолдан һуң барлыҡҡа килгән ауылды Иҫке Собханғол тип йөрөтә башлағандар. [1]

Һәр атама үҙе тарих һөйләй

Халыҡ элек-электән ерҙең баһаһын белгән, уны иң ҙур байлыҡтар рәтендә йөрөткән, ер биләмәләренә исемдәр биргән. Был бик аҡыллы эшләнгән. Сөнки ерҙәрҙе исемдәре буйынса табыуы еңелерәк. Ләкин хәҙер күп йәштәр ер-һыу атамаларына иғтибар биреп еткермәй. Шуның арҡаһында төрлө низағтар килеп тыуырға мөмкин. Шуға күрә мин ***Баҙал, Мәсем*** тирәләрендәге ер-һыуҙарға, сабынлыҡтарға байҡау яһарға булдым. Бәлки, кемгәлер кәрәге тейер.

Көргәҫ йылғаһы Мәсем тауы менән Баҙал тауы араһынан аға. Уның буйында яландарҙан (сабынлыҡтар) иң беренсе ***Ялан Көргәҫ башы*** ята. Ә йылға ағышы буйынса ***Иҫке утар урыны*** һәм ялан ҡырынан, Мәсем тауы яғынан, бәләкәй генә ***Сыбарташ йылғаһы*** Көргәҫкә ҡоя. Шунан бер аҙ килгәс, ***Саралйын яланы***. Уның ҡаршыһында, йылға аша, ***Тумарлы яланы***. Саралйынға төкәлеп ***Бикһултан яланы*** ята. Уға ҡаршы йылға аша ***Ҡарагол яланы***. Бикһултанға күрше Ҡолдәүләтов ***Мәхмүт сабыны***, унан Ишмөхәмәтов ***Мөжәүир сабыны***. Бер 500 метр үткәс, ***Ҡараһыйыр йәйләүе***. Унда Иҫке Собханғол ауылы халҡы йәйләгән. Был ялан йылға буйлап һуҙылған. Ҡараһыйыр йылғаһы Мәсем тауынан ағып төшөп, яланды ике өлөшкә бүлә. Үрге осо Собханғолдар ултырышы, түбәнге ултырышы ***Ишдәүләт*** ауылының ***йәйләүе***. Яландың осонан ***Һары бейә*** тигән бәләкәй генә йылға ағып барып, Көргәҫкә ҡоя. Шунан һуң сама менән 6-7 саҡырым дауамында урманлыҡ. Унан - ***Ирләнде тамағы*** яланы. Артабан ваҡ-ваҡ асыҡтар һәм ***Соҡорйорт яланы***. Унда элек Мәндәғол ауылының бер бәләкәй ҡышлау утары булған. 10-15- ләп йорт була торғайны.

Кейекбай ауылына барып еткәнсе бүтән яландар юҡ. Ауылға инер саҡта ***Иҫкеыҙма яланы*** бар. Хәҙер ул яланға ла йәштәр өй һалған, тотош урам барлыҡҡа килгән. Мәсем менән Баҙал тауҙары ныҡ ҡыҫҡан ул тирәне, урман да ҡая, йәйәү үтеүе ауыр. Мәсем тауы яғынан ***Ҡотоҡ*** тигән тәрән ***уяһы*** бар һәм ***йылғаһы*** ағып төшә. Был яландар элекке «Марс» колхозының сабынлыҡтары. Баҙал тауынан башлап ***Бәләкәй Нөгөш йылғаһы*** буйлап Исламбай ауылының үрге осонда тәү башлап яландар юҡ. Ҡуйы урманлыҡ буйлап бер аҙ килгәс, ***Оло ялан*** йә ***Мөжәүер яланы***. Ул Яңы Собханғол ауылының ере. Бер аҙ килгәс, ***Аҡбейек яланы, Кәзәташ яланы һәм ҡаяһы***. Шунан Баҙал тауынан ике яҡлап яландар башлана. Мәсем яҡлап - ***Әбдрәш.*** Бер аҙ урманды уҙғас, ***Талды-ҡойо яланы.*** Унан - ***Ялпаҡташ ҡаяһы*** һәм ***яланы.*** Унан инде ике яҡлап аҡландар башлана. Алағуян йылғаһы яҡлап ***Ярлыйылға башы яланы*** ята.

Өмөт ҡыуылдаған яланының исем тарихы түбәндәгесә. Иҫке Собханғол ауылы кешеһе Торсонбаев Өмөтҡужа Баҙалда бесән сапҡан. Уның тауышы бик көслө булған. Берәй нәмә кәрәк булһа, шунан һөрәндәгән. Уның тауышын ишетеп, ***Янган бесән***дә йәйләүҙә йәйләүселәр кәрәк нәмәһен сығарып биргәндәр. Ул йәйләү ***Баҙал тауы*** аҫтында ғына.

Артабан - ***Хәҙрәт ҡотого***. Был яланда Иҫке Собханғол ауылы хәҙрәте Әбүсәитов Әбделғәней тигән кеше йәйләгән. Шунан килеп сыҡҡан атамаһы. Ул хәҙрәттең ҡәберлеге ауылдың иҫке зыяратында. Ул заманында бик дәрәжәле, белемле, данлыҡлы кеше булған.

Хәҙрәт ҡотоғо яланына тоташып ***Туктамыш ҡаяһы*** һәм ***яланы*** ята. Унан ары ***Ҡымыҙэскән түбә*** һәм ***яланы***. Бик күп ер, урман үткәс, Мәндәғол ауылы кешеһе ***Улъягол яланы*** һәм ***ҡаяһы.*** Хәҙер уны ***Вышка*** тип тә атайҙар. Уның аҫтынан ***Ыраҡай*** тигән ***йылга*** ағып төшә. Шунан ары Баҙалда яландар бөтә.

Баҙал тауы буйлап, ***Мәсем тауы*** яҡлап беренсе ялан ***Хәбир сабыны*** тип атала. Унан тағы урман башлана. Бер нисә саҡырым ер үткәс, ***Сәхип үлеге*** тигән оҙон тар ялан. Ялан уртаһында Сәхиптең ҡәбере бар. Ул эле лә беленеп ята. Аҡһаҡалдар һөйләүе буйынса, йәйләүгә күсеп китеп барғанда бер ҡатын ауырып китеп үлә һәм уны шунда ерләп китәләр. Заманында кеше ҡайҙа үлә, уны шунда ерләгәндәр. Шундай дини тәртип булған.

Ул яландың аҫ яғында ***Ирләнде башы яланы*** һәм ***йылғаһы*** бар. Ул йылға ***Кәргәҫкә*** ҡоя. Был үрҙә әйтелгән яландар бөтәһе лә сабынлыҡтар, Иҫке Собханғол ауылы кешеләренең

бесәнлектәре. Баҙал тауы аҫтында Иҫке Собханғол ауылы урынлаша һәм ***Баҙал биҫтәһе*** барлыҡҡа килде. Унда элек ***Сәсеүлек яланы*** ине. Баҙал тауына табан - ***Бүлмәле йорт*** яланы. Уның шишмәһе лә бар. Ә атаманың килеп сығыу тарихы былайыраҡ. Иҫке Собханғолдан Әбделғәней хәҙрәт бүлмәле йорт төҙөп, шунда йәйләр булған. [7]

Алағуян тамағынан Алағуян йылғаһы башына тиклемгe ер-һыу атамалары

Иҫке Собханғол ауылының 1-се күпер эргәһендә ***“Баҙал”*** тауы яғынан ***“Аҡ ҡар”*** үҙәге төшөп ята, шуның ҡаршы тауҙы ***“Урта тау”*** тип йөрөтәләр. Уның асыҡ өлөшөн ***“Ялан туғай”*** тип атайҙар. Алағуян йылғаһының һул яҡ ярында ***“Ҡайынтуш”*** тип аталған урын, хәҙер унда Мөхтәр Сәғитов урамы. Ошо ерҙә ***“Тимәш”*** йылғаһы аға, уға һул яҡтан ***“Бүлмәле йорт”*** йылғаһы килеп ҡушыла. Алағуян яҡлап унда ***“Билән тауы”,*** һул яҡлап ***“Туңмаған”*** кисеүен сыҡҡас, һул яҡлап ***“Суҡмуйыл”*** йылғаһы ҡоя. Уның ҡойған урындың өҫ яғы “***Үрге ыҙма”*** яланының бирге яғынан ***“Ала ат үлгән”*** йылғаһы ҡоя. Уң яҡлап ***“Янған бесән”*** йылғаһы ҡушыла. Үрге ыҙма яланының үрге яғынан бер бәләкәй генә шишмә аға, унан бер йөҙ метр юғарынан ***“Баландыҡ”*** йылғаһы ағып төшә. Үрге ыҙманан Баҙал тауына юл сыға. Яландан бер саҡрым үрҙә һул яҡлап ***“Янған бесән”*** яланы, унан ары ***“Ала ат үлгән башы”*** яланы ята. Юлдан уң яғынан ***“Септәле үгеҙ”*** яланы. Алағуян буйлап бер аҙ үрҙә уң яҡтан ***“Уй буйы”. “Уй тамағы”*** яланын үткәс ***“Ҡаран йылға”***, ары ***“Тауыҡ фермаһы”*** тигән ялан. Унан ары ***“Бәләкәй ҡаран”*** йылғаһы, бер аҙ алда Баҙалдан ***“Ярҙы йылға”*** ағып төшә. Үрҙә йөҙ метр һул яҡлап ***“Ком һөргән”*** йылғаһы. Алда үрге ялан ***“Тараҡан”*** туғайы унан үрҙәрәк кенә ***“Айыу атҡан”*** йылғаһы һул яҡлап ағып төшә. Шунан һуң Яңы Мөсәт ауылы. Ауылдың үрге осонан һул яҡтан ***Иҫке ыҙма*** йылғаһы ағып төшә. Ары юл Ғәлиәкбәр ауылына китә. Алағуян буйлап уң яғынан туғай, һул яҡлап ***“Синкә”*** йылғаһы ағып төшә һәм шул уҡ яҡтан ***“Завод”*** йылғаһы ағып төшә. Уның тамағында ***“Скипидар”*** заводы булған, шуға йылғаһында ***“Завод”*** тип атайҙар. Ары ***“Сыуаҡбикә”*** яланы һәм ҡаршы уң яҡтан ***“Серәкәй”*** йылғаһы ағып төшә, ә өҫ яҡта ***“Серәкәй” яланы*** ла бар. Үрҙә ***“Ҡыҙыл ер”*** яланы һәм шул исемле ***“Ҡыҙыл ер” йылғаһы*** аға. Ары ***“Шәмиғол түше”*** яланы һәм йылғаһы, унан үрҙә ***“Оло ялан”***, унан ары ***“Суҡракты”*** яланы һәм ***“Ҡара һөбә”*** йылғаһы ***Кесе Нөгөш*** йылғаһына ҡоя. Аҫҡар һәм Исламбаҙарҙың оло юл өҫтө ***“Йәйпе утары”***, ***“Йәйпе кисеүе” күпере***, “Кесе Нөгөш” йылғаһы ағып ***“Оло Нөгөшкә”*** ҡоя. Ике яҡлап та ***“Йәйпе кисеүе” яландары***. [2]

Иҫке Собханғол ауылының Баҙал бисҭәһенә тирә-яғы ер-һыу атамалары

Иҫке Собханғол ауылының Баҙал биҫтәһенә күтәрелгән өс кәштәне менеп һуң Баҙал һыртына сығабыҙ. Тау башында уҡ ***“Оло йылға баш”*** яланы. Яландар үткәс ***“Ҡымыҙ эскән”*** түбә, уны төшкәс ***“Туктамыш”*** яланы һәм шул исемдәге ҡалҡып торған ҡаяһы. Унан ары ***“Сәхиб үлеге”*** тауын уҙғас “Хәҙрәт ҡотоғо” һәм яланы. Шул уҡ ерҙә ***“Ярҙы йылғаһы башы”***. Арыраҡ ***“Өмөтҡол ҡыуылдаған***” яланы, үрҙә һыулы ***“Ярҙы йылға башы”*** яланы уны уҙғас “Әбдрәш” яланы күренә. Уны төшкәс ***“Көргәҫ”*** яланы. Оло йылға башынан сыҡҡас ***“Баҙал мороно”***. Баҙал морондоң көнсығыш, көньяҡ һәм төньяҡ битләүҙәре сабынлыҡ алып тора. Уның көнбайыш битләүендә ***“Сәхибүлек”*** яланы, ***“Талды ҡойо”*** яланынан ***“Көргәҫ”*** яланына юл төшә. “Сәхибүлек” яланының уртаһынан бер аҙ аҫҡа төшкәс ***“Ирләнде баш”*** яланы һәм “Ирләнде баш” йылғаһынан түбән ***“Ирләнде тамаҡ”*** яланы “Көргәҫ” йылғаһы. Йылға буйлап түбән ***“Айытбай утары”***, ары ***“Караһыйыр”*** йылғаһы тамағы һәм Көргәҫ яланы. Көргәҫ яланынан бер саҡрым үрҙә яланды урталай бүлеп ***“Көргәҫ” йылғаһы*** аға. Уға ***“Ирләнде” йылғаһы*** һәм ***яланы***, түбән Мәндәғол ауылының ***“Соҡорйорт”*** һәм ***“Үтәкәй”*** яландары. Йылға 5 саҡрым түбән Кейекбай ауылынан үтеп Ағиҙелгә ҡоя. Юл Ирләнде тамаҡ яланынан ***Бәләкәй Мәсем тауы*** аша ***“Үтәкәй” яланы***на төшә, унан һыулы ***“Мәйгәште”*** башынан ***“Һуаҡ”*** ыҙмаға төшә. Һуаҡ ыҙмаһынан ярты саҡрым һыулы Мәйгәште буйында ***Ябаҡ*** (Ишдәүләт) ауылының ***“Соҡорйорт” утары*** яланы. Мәндәғол ауылына юл ***“Сей түбә”*** тауынан “Бәләкәй сей түбә” тауы аша “Ашбиргән” яланы аша “Ҡоро Мәйгәште” йылғаһы буйлап ***Мәндәғол ауылы*** күренә. [2]

Мәндәғол ауылынан Ағиҙел йылғаһы буйлап үргә табан

"Мәндәғол туғайы", ***"Бертором"*** туғайы, уға ҡаршы ***"Өйрәкле"*** яланы һәм йылғаһы, ары ***"Төлкөоскан ҡаяһы"***, ***"Йәйен ятыуы"***, ***"Йүкәле туғай"***, ***"Аҡбикә туғайы"*** һәм ***йылғаһы***, ***"Туктамаҡ"*** туғайы ҡаршыһында ***"Маҙалы" туғайы*** һәм ***йылғаһы***, ***"Маһатуғай"*** яланынан ***"Оло йылға"*** йылғаһы төшөп ағып ята. Унан ҡаршы ***"Ишдәүләт"*** ("Ябаҡ") туғайы. ***"Урта туғай"*** һәм ***Ағиҙел ҡасабаһы***. Үрге туғай, ***"Күҙәмбәт"*** менән ярыш ***"Саҡмағош"*** йылғалары Ағиҙелгә ҡоя. ***"Инсебикә таш"*** йәки ***"Инсебикә ҡаяһы"***, ***"Ҡараңғы туғай"***. ***"Янһары"*** туғай, "Һыуыҡ колоҡ" Ағиҙелгә Үҙән йылғаһы ҡойған ер "Үҙән тамағы" тип йөрөтөлә. Ҡаршы ялан ***"Тәмәк" туғай***, ***"Оҫконлотуғай*** һәм ***"Бәләкәй"*** туғай тип аталған урындар бар. [2]

Иҫке Собханғол ауылынан Мәндәғол ауылына барған оло юл буйлап

Тау башына сыҡҡас Баҙал биҫтәһе, тәүгеһе ***"Исҡужа"*** туғайы - әүәл ике яҡлап та бәрәңге баҡсалары булды. ***Көргәҫ яланының*** түбәнге осонда ***"Һарыбейә"*** йылғаһы Мәсем аҫтынан ағып төшөп ята. Уның һул яҡ ярында һәм ***"Ҡараһыйыр"*** йылғаһының уң яҡ ярында бер ялан бар – ул ***Ябаҡ*** (Ишдәүләт) ***йәйләүе***.

Көргәҫ яланынан юл менән Мәсем тауына күтәрелгәс ***"Собханғол мәсеме"*** яланы ята. Яландың уртаһынан ***"Хәҙрәт котоғо"*** ағып сығып ***"Беткәсек"*** йылғаһына ҡоя. "Беткәсек" йылғаһы ***"Кайраҡлы"*** йылғаһына, ул ***"Кужә"*** йылғаһына ҡойоп ***"Оло Нөгөш"***кә ҡушыла. Оло Мәсемдән юл икегә айырыла. Береһе – Беткәсек йылғаһына төшә. Мәсем тауы һыртындағы һаҙлыҡтан ағып сыҡҡан ***"Кезәй"*** йылғаһы ***"Көргәҫ"*** йылғаһына ҡоя. Ул ерҙәрҙе Иҫке Собханғолдар сабынлыҡ иткән. Һыулы ***"Саңлы"*** йылғаһы ла ***"Кужә"*** йылғаһына ҡушыла. Ул тирәләге сабынлыҡтарҙы Яңы Собханғолдар биләгән. "Саңлы" яланынан түбән яғын ***"Туңҡарағас"*** тип йөрөтәләр. Һыулы Саңлы эргәһендә ***"Коро саңлы"*** үҙәге, уның да тирәһен Иҫке Собханғол үҙ иткән. Туңҡарағастың беренсе яланың ***"Ветлечебница"*** хужалығы бесәнен сапты. Уның янында ***"Ерекле"*** йылғаһы башланып ***"Кайраҡлы"***ға ҡоя. [2]

Оло Мәсемдән юл Мәндәғол Мәсеменә, Кейекбай ауылына киткән юл тирәһендәге атамалар

Һул яғында ***"Ҡараһыйыр"*** башы ***яланы***, ***"Кыҙҙар ташы"***, ***"Коҙғон ташы"*** (1042 м.) тау һыртындағы таулыҡ. ***"Коҙғон таш"*** аҫты ***яланы***. Мәндәғол ***Мәсеме йәйләүе***. Унан ***"Аҡһолтан"***, ***"Сыбар ҡонан"***, ***"Имән йорт"***, ***"Кейекбай Мәсеме"***, ***"Кунаҡбай"***, ***"Билялан"***, ***"Үгеҙ һуйған"***, ***"Кабрый йорт"*** яландарын үтеп Киекбайға юл төшә. [2]

Иҫке Собханғол ауылының тирә яғындағы ер-һыу исемдәре

"Карат" йылғаһына ***"Мәскәй котоғо"*** ҡушыла. Йылға аша ***"Карат" яланы***. Уны уҙғас та ***"Бирҙекәй талашкан"*** яланы, ары ***"Карама күпер"*** ҡотоғо һәм яланы. ***Карама котоғы йылғаһы*** ағып ***"Корткарал"*** йылғаһына ул "Карат" йылғаһына ҡушылып Иҫке Собханғол ауылының түбәнге осонда Ағиҙелгә ҡоя. Һабантуй яланын ***"Арҡа ыҙма"***, тип, белмәгәндәре ***"Арғыҙма"*** тиҙәр. ***Арҡа яланы*** Ябаҡ (Ишдәүләт) ауылының йәйләүҙәрҙән күсеп килгән туҡталыш урыны. 1946 йылға тиклем Арҡа ыҙмала колхоз келәте булған, аҙаҡ яндырып ҡуйғандар. Ялан уртаһындағы йылға ***"Оло йылға"*** тип атала. Уға бер аҙ алыҫтараҡ ***"Ракай" йылғаһы*** ҡушыла. [2]

Ябаҡ (Ишдәүләт) ауылынан Арҡа ыҙма юлында

Ябаҡ (Ишдәүләт) тауы ***"Сана колай"*** тип тау текә, ҡырын булғанға атайҙар. ***"Салтыр кашҡа" яланы***, уны уртаға бүлеп ***"Бәлхес" үҙәге*** ята, ул яғы ***"Ябаҡ" арҡаһы***, уң яҡтан

“Хәҙрәт” яланы. ***“Арбаҙый яланы”***, ***“Һабаҡ ырҡкан”***, ***“Алтын күрә***” төп ***яланы***. Һул яҡтан ***“Ҡужағол”*** яланы. ***“Ауыш”***, ***“Ҡунарбар”*** төп яландары. Ҡужағолды үҙәген үткәс тә ***“Ант иткән” ялан*** һәм ***йылғаһы***, ***“Кәзә талы***” яланы. ***“Уҫаҡ”*** төп яланы ***Арҡа ыҙма*** яланына килеп ҡушыла. [2]

Иҫке Собханғол ауылының һул яҡ өлөшөнән Ағиҙел ҡасабаһы, Әтек ауылына киткән юл буйында

Әтек яғына киткәндә, иҫке юл менән ***“Ҡоро Маҙалы”*** йылғаһы Иҫке Собханғолдан өс саҡрым алыҫлыҡта, унан һыулы ***Маҙалы баш яланы*** һәм ***йылғаһы***. Ары уҙғас ***“Бәләкәй Салажы” йылғаһы*** яланды урталай бүлеп ағып ята. ***“Әлмөхәмәт”***, ***“Правитель”*** яландарының уң яғында ***“Байғоток”*** йылғаһы ***“Ҡана”*** йылғаһына ҡоя. Бер аҙ алда ***“Ҡарасәс”*** йылғаһы ***“Бәләкәй Салажы”***ға ҡушыла. Уның һул яғында ***“Яҙғыйорт”***, ***“Һимеҙтай”*** йылғалары ***“Ҡарлуғас”*** йылғаһына ҡоя, шул исемдәге ялан да бар. Эргәһендәге йылға ***“Туҡмаҡ”*** менән ***“Мусағәле”*** йылғаһы ла ***“Ҡана”*** йылғаһына ҡоялар. Ара-тирәһендә ***“Торнатҡан”***, ***“Яҙғыйорт”***, ***“Ҡарлуғас”***, ***“Һимеҙтай”*** һәм ***“Ҡарасәс” яландары*** бар.

Бәләкәй Салажынан ***“Бәләкәй эт үлгән”***, ***“Оло эт үлгән”***, ***“Мыршым”***, ***“Һоролат”***, ***“Бурылат”***, ***“Ерекле йорт” йылғалары*** Оло Салажы йылғаһана ҡоялар һәм шундай исемле яландар ҙа бар. Оло Салажы йылғаһы буйында ***“Баштау”***, ***“Денис күпере”***, ***“Оло ялан”***, ***“Ҡырынйорт”***, ***“Ҡабаҡйорт”***, ***“Түбәйорт”***, ***“Соҡорйорт” яландары*** бар. [2]

Иҫке Собханғолдан Яңы Усман һәм Байғаҙы ауылдарына киткән юл буйлап

“Туғай” йылғаһы, ***“Айыулы баш”***, ***“Быҙаулы баш” йылғалары*** һәм ***яландары*** бар. Унан ары ***“Бетерә”*** йылғаһы. Уға ҡойған йылғалар бихисап: ***“Ике ҡотан”***, ***“Туғыҙбай”***, ***“Алдаш”***, ***“Сибел”***, ***“Шарат”***, ***“Ҡыҙылбалыҡ”***, ***“Бәләкәй туры”***, ***“Оло туры”***, ***“Беләү”***, ***“Быҙаубаш”***, ***“Буҙбейә”***, ***“Күкбүре”***, ***“Саптар үлгән”***, ***“Ҡыйрат”***, ***“Дүрт ҡарағай”***, ***“Әсебар”***, ***“Йәнбәт”***, ***“Сусҡа”***, ***“Ҡашҡайғыр”***, ***“Буҙарған”*** һ.б һәм яландары ла шул исемдәрҙә һәр бер үҙәк аша төшкән йылғалар Бетерә йылғаһына ҡойоп ***“Үҙән”*** йылғаһына барып ҡушыла. [2]

Иҫке Собханғолдан – Иҫке аэродром яҡлап

“Быҙаубаш”, ***“Һыуыҡ йылға”***, ***“Һыуыҡ ҡолаҡ”***, ***“Кәбәнташ” йылғаһы*** һәм ***яландары***. Иҫке аэродром элек-электән “Марс” колхозы ере булды. Промартелгә әйләнгәс был яланды “Яңы юл” совхозына беркеттеләр. [2]

Тауҙар, ҡаялар

Мәсем тауы. Мәсем тауы Бөрйән районы ерлегендә тарихҡа бай, әле лә күп серҙәрҙе үҙендә һаҡлаған бейек тауҙарҙың береһе. Уның бейеклеге диңгеҙ кимәленән 1048 метр. Тау итәгендә бер-береһенә терәлеп ятҡан ҙур-ҙур яландар, сабынлыҡтар күп. Мәсем тауы географик төҙөлөшө, һауаһы, үҫемлектәр донъяһы яғынан үҙенсәлекле тау ул. Йәйен еләҫ, һалҡынса, томанһыҙ. Ләпәкәй, серәкәй кеүек бөжәктәр унда булмай, булһа ла, бик һирәк. Урманында ағас еләге, муйыл, мышар, балан кеүек емеш ағастары бар. Иҙел буйында был емештәр бешеп өлгөрһә, Мәсемдә әле өлгөрмөгән була. Ә инде Иҙел буйында емештәр, бешеүҙән үтеп, ҡойола башлаһа, Мәсем тауында һутҡа тулышып

бешә. Һаҙ йыуаһы, яландарында шартый, урыны менән турғай еләге бар. Бында Собханғол, Мәндәғол ауылы йәйләүҙәре булды. Собханғол Мәсеме ҙур ялан, ҡап уртаһында тәрән генә шишмәһе лә бар. Яландың бер яҡ осонда – Собханғол, икенсе яғында - Ишдәүләт ауылы йәйләгән ерҙә уртаҡ бер шишмәһе булған. Мәсемдең Мәндәғол яҡлап бейек ҡаялы өлөшө ***Текәтау*** тип йөрөтөлә. Мәсем түбәһендә ***Ҡыҙҙар ташы***, ***Ыласынташ***, ***Ҡоҙғон*** ташы тип йөрөтөлгән ҡаяташтар бар. Аҫта яланда шишмәһе лә бар. Был тирәләге йәйләүҙәрҙең кешеләре килеп уйнап-көлөп, күңел асыр булғандар. Ҡыҙҙар тауының башы тигеҙ, шыма.

Төлкөосҡан ҡаяһы (1 вариант). Йәрмөхәмәттән “Маҙалы” түбәнерәк “Йүкәле” туғайының түбәндәге осонда, “Бертором” туғайына Иҙел аша ҡаршы бик бейек ҡая бар. Шул ҡаяны “Төлкөосҡан” ҡаяһы тип атайҙар. Мәндәғол ауылында ара-тирәгә данлыҡлы һунарсы Бәхтийәр тигән кеше йәшәгән. Ул һунарға айыу атырға ла бер кемде лә, хатта яҡын туғандарын да алмаған, һәр ваҡытта яңғыҙы йөрөгән. Ул ҡыш буйы һунарсылыҡ менән яҙ башланыу менән ағас ябыу – солоҡсолоҡ менән шөғөлләнгән. Бер һунарға сыҡҡанда бик оҙаҡ бер төлкөнө баҫтырып йөрөй торғас, Иҙел ҡаяһына ҡыҫтай. Төлкөнөң бер ҙә ситкә китерлек урыны булмағас, төлкө ҡаянан оса. Шунан шул ҡаяны “Төлкөосҡан” ҡаяһы тип атайҙар. Был хәлде Ишкилдин Ваһап олатай һөйләгәйне. [3]

Төлкөосҡан ҡаяһы (2 вариант). Һунарсы Иҫке Собханғол ауылынан сығып бөҫкаҡлы саңғыһын кейеп Баҙал тауҙары буйлап һунар итә. Килә торғас, төлкө эҙенә юлығып ҡыйа төшә. Төлкө Өйрәкле тауы башына яҡынлағас һулға боролоп Мәндәғол ауылына киткән. Оло юлды арҡыры сығып урманға инеп китә. Һунарсы: “Арыным, һуңланым да, кис кә ҡалам, уңайлы урынды ҡарап төлкө эҙенә ҡапҡан һалайым да ҡайтайым. Төлкө киткән юлынан кире ҡайтыр әле”-тип уйлай. Ҡапҡанын ҡороп ҡайтып китә. Ике көндән һуң һунарсы ҡапҡанын ҡарарға килһә, төлкө эләгеп, ҡапған һөйрәпалып киткән. Һунарсы төлкө эҙенән ҡыуа. Төлкөгә яҡынлашҡас, билендәге балтаһын алып өҫкә күтәреп бара. Төлкөгә яҡынтотайым тигән дә һунарсы ҡаянан ҡолап төшә. Шунан һуң ҡаяны “Төлкөосҡан ҡаяһы” тип атай башлайҙар. [6]

Баштире. Беҙҙең Бөрйән районының ҡарттары, йәғни аҡ һаҡалдары һөйләүенсә һәм тарихи документтар күрһәтелеүе буйынса, район халыҡтарының төп йәшәүесе булып малсылыҡ, һунарсылыҡ, ҡортсолоҡ, солоҡ юныу, айырым кустарсылыҡ – һөнәрселек булып торған. Иген сәсеү бигүк отшло булмаған. Бик аҙ ғына бер нисә генә сутый, гектарлап та булмаған. Юғарыла күрһәтеүенсә халыҡ үҙенең етештергән тауарҙарын ялан яғына йәрминкәләрҙә һатып иген, он алып ҡайтҡандар. Һунарсыларҙа атып алған йәнлек тиреләрендә һатҡандар. Кейекбай ауылында ла һунарсылыҡ менән күп кешеләр шөғөлләнгәндәр. Шуларҙың береһе көҙ көнө һунарҙа төлкө баҫтырып оҙаҡ ҡына йөрөгәс, саҡ атып алған. Көн ҡапыл һыуып киткәс, төлкөнө урманда һуйып, башына ҡаплап ҡайтҡан икән. Ул һунарсыны кейекбайҙар тире баш, Баштире тип әйтә башлағандар. Һуңынан бөтә ауылды шулай тип атай башлағайнылар. Элек оло ҡарттар ауылды гел Баштире тип йөрөтәләр ине, тик һуңғы ваҡытта Баштире исеме үҙгәреп Кейекбай исеменә күсте. [5]

Йылға-шишмәләр

Төмәнәй. Мәндәғол ауылының һыу ағышы буйлап, Иҙелдең бер саҡрым түбәндә Арал бар. Уны түбәнге Арал тип атайҙар. Шул Аралдан бер, йә ярты саҡрым тирәһе Иҙелдең һул яғынан ҡая аҫтынан шишмә сығып аға. Ул шишмәне “Төмәнәй” тип атап йөрөтәләр. Шуныһы менән иғтибарҙы үҙенә ҡарата, Иҙел ҡушылған еренән алып, ике-өс саҡрым тирәһе һыуы ҡарараҡ булып Иҙел һыуынан айырылып тора. Ҡышын туңмай, йәй һыуы һыуыҡ, ағын ерендә балыҡ булмай. Мәндәғол ауылы халҡы, был һыу ҡайҙан тип ҡыҙыҡһынғандар һәм төрлө уйҙарға килгәндәр. Шулай, Әтек ауылы ҡарттарына ла әйткәндәр ике ауылдың ҡарттары ризалашып Әтек ауылының үрге осондағы Ҡана йылғаһына ағып төшкән Мусағәле йылғаһына буяу һалғандар. Мәндәғол ауылы ҡарттары “Төмәнәй” шишмәһен күҙәткәндәр, баяғы буяу шул шишмәнән килеп сыҡҡан. Икенсе бер йылғанан ҡушылмаған микән тип “Байғотоҡ” һ.б йылғаларҙы самалағандар, ләкин булмаған. Бына ул ниндәй тәбиғәттең мөғжизәһе. [4]

Баҙал тауы. Тауҙың исеме ҡайҙан килеп сыҡҡанын бер кем әйтә алмай. Республика кимәлендәге ер-һыу атамалары тураһындағы китаптарҙа ла, гәзит биттәрендә лә күренмәй. Тауҙағы ҡаяларҙың, итәгендәге яландарының исемдәре борон-борондан йәшәгән башҡорттарҙан киләлер. Баҙал Мәсем тауынан ҡала районндағы ҙур, мөһабәт тауҙарҙың береһе. Уның бейеклеге 878 метр. Баҙалдың көнсығыш битләүендә Иҫке Собханғол, Яңы Собханғол, Иҫке Мөсәт, Яңы Мөсәт ауылдары урынлашҡан. Тау итәктәрендә йәйләүҙәр, сабынлыҡтар күп. ***Улъягол яланы***, Мәндәғол ауылы сабыны. Түбәндәрәк ***Раҡай*** тип аталған бәләкәй генә йылға бар. Был исем Улъяғолдоң ҡатыны Рабиғаны иркәләп, Раҡай тип әйтеүенән барлыҡҡа килгән. Шул ерҙәрәк таш ҡутарған тәрән уя бар. Ошондағы таштан тирмән ташы эшләгәндәр. Мәндәғолов Камил тигән кеше тирмән ташы менән тирә-яҡты тәьмин иткән. Тауҙы икенсе яҡлап Хәбир сабыны тигән ялан һуҙылған. Баҙал тауының бер яғынан (Мәсем яҡлап) ***Көргәҫ йылғаһы***, икенсе яҡтан ***Алағуян йылғаһы*** ағып төшә. Ике яҡлап та бик күп ваҡ яландар бар. Алағуян йылғаһы яҡлап ***Арғыҙма йылғаһы***, ***Ҡаран***, ***Ярҙы*** йылғалары ағып төшә. [7]

[1] С. Хәлилов, ветеран уҡытыусы, Яңы Собханғол ауылы.

[2] Ишбаев Иҙрис Сәхи улы, Иҫке Собханғол ауылы.

[3] Был хәлде Ишкилдин Ваһап олатай һөйләгәйне.

[4] Был серле шишмәнең тарихын Мәндәғол ауылы аҡһаҡалы Ишкилдин Ваһап һәм Әтек ауылы аҡһаҡалы Айытбаев Йомағужа һөйләүенән яҙып алынды.

[5] Был ваҡиғаны Кеекбай ауылының аҡһаҡалы Зәйнуллин Хәйбулла бабай һөйләүе буйынса яҙып алынды.

[6] Ишморатов Ҡазихан Шаһиян улынан яҙып алынды.

[7] Һуғыш һәм хеҙмәт ветераны Абдулла Ваһапов яҙмаларынан.

Яңы Собханғол ауылы

Яңы Собханғол. Собханғол Килдекеев һәм Мотай Айытҡолов нигеҙләнгән Иҫке Ыҙма утарынан хәҙер ауыл торған урынға күсеп ултырғас Собханғол ауылы барлыҡҡа килә. Утарҙың ауылға әүерелеүе 1765-1800 йылдарҙа була. 1816 йылда яһалған ревизия буйынса ауылда 53 хужалыҡ булған. 1850-1859 йылдарҙа яңы ауыл барлыҡҡа килә. Алағуян йылғаһы тамағында уны Иҫке Собханғол ауылдарында 200-шәр кеше йәшәгән. Янһарынан күсеп ултырыусылар нигеҙләгән. Иҫке Собханғол ауылының икенсе атамаһы Алағуян. Алағуян йылғаһы “Биреле һаҙ” исемле урындан башлана. Был урын Яңы Мөсәт ауылынан 11 -12 км самаһы алыҫлыҡта, ***“Оло Ялан”*** исемле сабынлыҡ янында урынлашҡан. ***“Биреле һаҙ”*** исеме есеменә тап килә, һаҙлыҡ ҡуйы әрәмәлек менән ҡапланған, унда йәй көнө һыбайлы ла йырып үткеһеҙ бейек үлән үҫә. Ололарҙың иҫләүенсә бында йыш ҡына “биреләр күсеүе” булған. “Биреләр күсеүе ” ололар һөйләүенсә ошолай башлана: ҡапыл көслө ел иҫә. Алыҫтан аттар кешәнәгән, ҡолондарҙың соролдап кешәнәүе, һыйырҙар мөңрәүе, ҡатын-ҡыҙҙар һәм балалар илаған тауыштар, ирҙәрҙең һайтлап мал ҡыуғаны, хатта гармун тауыштары барыһы бергә бутала, мәхшәр тыуған кеүек була.

Алағуян “Биреле һаҙҙан” башланып көнсығышҡа табан аға. Уға ***“Баҙал” һырты***нан ағып төшкән бәләкәй йылғалар ҡушыла: беренсе йылға ***“Бер төлкө”***, икенсеһе – ***“Дөйә һуйған”***. Был йылғаның тарихы түбәндәгесә: граждандар һуғышы бара, был һуғышта фронт линияһы булмай. Аҡтар отряды үтеп китә, уларҙы ҡыуып ҡыҙылдар килә. Аҡтар отрядының береһендә дөйә егелгән 16 дюймлы пушка булған. Дөйә һибелмә ҡомда ғына йөрөй ала, ә беҙҙең яҡта ослo, ҡырлы ташлы юлда уларҙың тояҡтары яралана һәм хайуан бөтөнләй алға бара алмай. Шуға күрә дөйәне ошо бәләкәй йылға Алағуянға ҡойған урында һуйғандар. Ысын булған хәл, сөнки ошондағы сабынлыҡта бесән әҙерләүсе звенола булған малайҙар 16 дюмлы пушканың снаряд гильзаһы таптылар. Үҙҙәренең килгәнен белдереү өсөн пушканан ата-ата барғандар күрәһең.

3-сө йылға ***“Ҡыҙыл Ер” йылғаһы***. ***“Ҡыҙыл Ер”*** Яңы юл колхозының ҡышлау фермаһы, уның да тарихы бар. Граждандар һуғышы осоронда ошо йәйләү аша аҡтар ҙа, ҡыҙылдарҙа үткән. Стәрлетамаҡ юлына сығыу өсөн Яңы Собханғол, Яңы Мөсәт, ***“Ҡыҙыл Ер”***, ***“Оло ялан”***, ***“Ҡарағошто”***, ***“Сукраҡты”***, ***“Йәйпе кисеү”*** аша Исламбай, Аҫҡар, Брәтәк аша үтергә кәрәк булған. Әхмәтзәки Вәлиди ҙә үҙенең отряды менән ошо юлдан үткән, Яңы Мөсәт ауылында ул туҡтаған өйгә таҡтаташ та ҡуйылды.

4-се Мөсәт йылғаһы, 5-се ***“Айыу атҡан”***, 6-сы ***“Ағасаҡ ҡасҡан”***, 7 –се ***“Ҡаран йылға”***, 8-се ***“Ярҙы йылға”*** - бына ошо йылғаларҙың һыуы менән туйына ***Алағуян***. Элек йылға мул һыулы ине. Яңы Мөсәттә промартель эшләне, унда һалабаш һалыу, септә, ҡап һуғыу, арҡан ишеү менән шөғөлләнделәр, күп өйҙәрҙең ҡыйығы һалабашы алынған йүкә ҡайыры, ҡабыҡ менән ябылған ине. Хәтеремдә: 60–сы йылдарҙа Алағуяндан ағас ағыҙып та маташтылар. Алағуянға ***“Завод” йылғаһы*** ла ағып төшә, ул ***“Завод туғайынан”*** үрҙәрәк башлана. Бөйөк Ватан һуғышы осоронда был туғайҙа ағас күмере, скипидар, дегет етештереүсе завод эшләгән. Ағас күмерен Белорет металлургия заводына юғары сортлы ҡоростан бронза етештереү өсөн оҙатҡандар. Алағуян буйындағы әрәмәлектәрҙе ҡырҡыу, йылға һыуын бысратыу, йылға буйында күп халыҡ йәшәүе, һәр йорт алдында ҡоҙоҡтар ҡаҙыу кире эҙемтәләргә килтерҙе, ҡоро йәйге осорҙа йылға түбәнге ағымында ҡорой башланы. Яңы Собханғол ауылы кешеләре. үрҙә әйтелгәнсә, Стәрлетамаҡ юлына сығыу өсөн беҙҙең ауыл аша үтергә кәрәк булған. 1918 йылдың йәйендә Янһарыға аҡтар отряды инә. Отрядта әсиргә эләккән ике ҡыҙыларменц була. Уларҙы ауыл эргәһендә урынлашҡан “Ғәйшә һаҙы” тип аталған урында аталар. Ауыл кешеләре аҡтар киткәс кенә ҡыҙыларменцтарҙы ерләйҙәр. Ауылда йәшәгән 4 егет аҡтар үҙҙәре менән отрядҡа яҙып алып китерҙәр тип ҡурҡып ауылдан ҡасып киткәндәр һәм ***Оҫҡон туғай*** менән ***Ҡаршы туғайҙы*** ҡамап торған тауҙар араһындағы үҙәктә землянка төҙөп йәшеренеп йәшәгәндәр. Аҡтар ауылдан киткәс, улар ауылға ҡайталар. Аҡтар ауылға ингәс, эргә-тирәлә ниндәй ауылдар барлығын һорашҡандар. Алыҫ булмаған Тимер ауылы барлығын белеп, шул йүнәлештә пушканан атмаҡсы булғандар. Хоҙайбирҙин Тимерйән бабайҙы тотоп алғандар, ул әле малай ғына булған.

Малай эштең нимәлә икәнлеген һиҙеп, Тимергә түгел, ә бөтөнләй икенсе йүнәлеште күрһәткән. Аҡтар бер нисә снаряд осороп тынысланғандар. [1]

Ауылыбыҙҙың барлыҡҡа килеү тарихы бай һәм ҡатмарлы. Был тарихтың ике варианты бар: беренсеһе-легенда, икенсеһе-рәсми документтарға нигеҙләнгән ауыл тарихы.

Легенда түбәндәгесә һөйләнелә. Бик күп йылдар элек Ағиҙел буйында ***“Иҫке ыҙма”*** тип аталған урында, дала яҡтарынан килеп Янһары исемле ҡарт үҙенең улдары менән утар ҡороп ултырған. Утар урыны Янһары ҡартҡа оҡшап етмәгән, уның сәбәптәре лә бик күп: туғайҙы яҙғы осорҙа һыу баҫҡан, Ағиҙелдән урыҫтар ағас ағыҙған, ҙур баржаларҙы Ағиҙел үрендәге Үҙән, Әүжән, Белоретта ағыҙған суйынды түбәнгә ағыҙғандар, ауыл халҡын баҫымсылыҡ иткәндәр. Ныҡ ҡартайғас, Янһары ҡарт улдарына ауыл төҙөп ултырыр өсөн уңайлыраҡ урын эҙләргә булған. Берҙән-бер көндө ул һыбай утарҙан сығып хәҙерге ауыл ултырған урынға килгән. Бәйет тауы итәгендә ул атынан төшкән һәм хәл алыр өсөн ергә ятып торған, бәйет әйткән:

Бәйет тауы бигерәк бейек
Күктәргә тора тейеп,
Бәйет тауы итәгендә
Йәшәй күп төрлө кейек!

Аталары оҙаҡ ҡайтмай торғас, улдары хафаланып эҙләргә сыҡҡандар һәм Янһары ҡартты Бәйет итәгендә тапҡандар. Ҡарт: “Мин яткан тау Бәйет, итәге – мәйет булыр” - тигән. Ысынлап та, әле лә Бәйет тауының итәгендә Янһары ауылының зыяраты.

Тау-таш, ҡаялар

Йөҙөкәй тауы (1 вариант). Имеш, Инсебикә исемле ҡыҙҙы көсләп кейәүгә бирергә булғастар, ул өйөнән ҡасып китә: Тау аша Ағиҙелдең бейек ҡаяһына йүгерә. Тауҙан йүгереп барғанда Инсебикәнең йөҙөгө төшөп ҡала. Ул яратҡан йөҙөгөн эҙләп ҡарай, ләкин таба алмай. Йөҙөктө таба алмағас, Инсебикә: «Йөҙөккәйем юғалды», - тип, үкһеп-үкһеп илаған, тиҙәр. Шунан һуң тауҙы Йөҙөккәй - Йөҙөкәй тауы тип атағандар.

Йөҙөкәй тауы (2 вариант). Янһары ҡарттың бер ҡыҙы булған. Ҡыҙ һомғол буйлы, зирәк, аҡыллы, бик тә һылыу ҡыҙ булып үҫеп етә. Ун һигеҙ йәше еткәс, әсә-атаһы ҡыҙын кейәүгә бирергә була. Ә уның һөйгән егете уға йөҙөк бүләк иткән була. Атаһы ҡыҙын йыуантаҡ, ҡомһоҙ ҡарт байға бирергә йыйынған. Күп уйлап тормаған ҡыҙ ҡасып сығып киткән. Тауға менгәс, егет биргән йөҙөк төшөп ҡалған. Шунан бирле был тауҙы “Йөҙөкәй” тип атап йөрөтәләр.

Инсебикә ҡаяһы (1 вариант). Бөрйән районындағы Яңы Собханғол һәм Иҫке Собханғол араһында, Ағнҙел ярында, бер хәтәр ҡая бар. Уны «Инсебикә ҡаяһы» йәкн «Инсебикә ташы» тип йөрөтәләр. Легендала һөйләнеүенсә, Яңы Собханғол ауылынан Инсебикә исемле йәш ҡатын, көнсөл һәм ҡанһыҙ иренән ҡасып китеп, ошо ҡая башына килеп ултыра. Ире ат менеп, ҡамсы тотоп ҡая башына менеп килгәнде күргәс, Ағиҙелгә ташланып һәләк була.

Инсебикә ҡаяһы (2 вариант). Бәлиғ тә булмаған ҡыҙ-бала ҡасып, сығып киткән ҡыҙҙың исеме Инсебикә булған. Ул шулай өсөнсө кәләшлеккә алам тигән байҙан ҡасып бейек ҡая башына килеп сыҡҡан һәм айырымыраҡ торған суҡыһына менеп ҡайғыһынан ҡайғыһынан үкһеп илаған. Артынан эҙәрләп килгән сығыусылар ҙа ҡыҙ ултырған ергә килеп сығалар. Ошо мәлдә ғорур ҡыҙ бала бер ни уйламай түбәнгә ташлана. Әле генә тормош тәмен

дә татымаған, бәхет иленә ышанған Инсебикәнең ғүмере шулай өҙөлөп ҡала. Шул ваҡыттан бирле ташланған ҡаяһына исемен биргәндәр. Исеме лә бит, Инсебикә!

Әфәнде тауы. Янһары ҡарттың Әфәнде исемле малайы булған. Ул өйөн тау итәгенә һалған ға күрә тауҙы ла уның исеме менән "Әфәнде" тауы тип атағандар.

Бейеш тауы. Янһары ҡарт бик ныҡ ауырып китә. Шулай оҙаҡ ауырып ятҡандан һуң, ул үҙенең улдарына әйтеп ат алдыра һәм көс хәл менән атҡа атланып менеп ултыра. Шунан малайҙарына: "Мин ҡайһы ерҙә аттан ҡолайым шул урындың өҫтөн "Бейеш", аҫтын "Мәйет" тип аталыр" тигән ҡарт килә торғас, хәҙерге Бейеш тауы итәгендә атынан ҡолап төшә һәм шунда йән биргән. Ҡарттың әйтеүе буйынса тауҙың өҫтөн "Бейеш", аҫтын "Мәйеш" (зыярат) булып ҡалған. Янһары ҡартты ла шунда күмгәндәр. Шул ваҡыт тауҙан ҙур таш тәгәрәп килеп төшкән һәм уның баш осона барып ятҡан. Ул таш әлеге көн дә лә бар. [6]

Бесәй ташы. Янһары ауылының төньяғында Ғәле тауына төкөлөп Үҙән йылғаһы Ағиҙелгә ҡушыла. Төньяҡ-көнсығышта тәпәш кенә тау бар. Ул тауҙың ҙур-ҙур таштары ла бар. Ошо ташлыҡты яҙлы-көҙлө бесәйҙәр төйәк итә. Улар ошонда тоҡомдарын дауам итеү өсөн пар таба. Бесәй тауыштары ҡайһы саҡ ауылға яңғырап тора. Шуға ла инде был ташлыҡты "Бесәй ташы" тип атайҙар.

Ғәле тауы (1 вариант). Был хәл һуғыш барған мәлдәр булған. Ауылда Ғәле исемле бер кеше йәшәгән. Ул тәбиғәтте яратҡан.Шуға күрә лә ошо тауға көн һайын еләк йыйырға, йә бәшмәккә менгән. Ул был тауға һәр көн менеп ултырыр булған, шуға күрә лә был тауҙы " Ғәле тауы" тип атайҙар. [9]

Ғәле тауы (1 вариант). Янһары ауылының үҙәк урамыныың төньяҡ осонда урамдың уртаһына тура килеп бер тау бар. Ул тауҙың итәгенән генә урам башланып китә, ошо урамдың тәүге өйөндә Ғәле тигән малай ҙә йәшәй. Малайҙар тауға сығып уйнарға йөрөй. Ғәле уйындарҙа һәр саҡ алда йөрөргә теләй. "Тау минеке, беҙ уның эргәһендә йәшәйбеҙ, мин беренсе булырға тейешмен", ти ул һәр саҡ тиҫтерҙәренә. Шунан ул "Ғәле тауы" тигән исемен алған. [9]

Ҡыҙҙар ташы. Был ҡыҙҙар ташы борондан уҡ билдәле тау. Уның аҫтында Иҫке Мөсәт ауылы урынлашҡан. Йәш ҡыҙҙар, ьегеттәр уйын-көлкө, күңел асырға шунда йыйылғандар. Улар тауға сығар алдынан әҙерлек алып барғандар: матур кейемдә, ҡашмау, милли кейемдәр кейгәндәр. Сит кешеләрҙен күҙенән һаҡланыу өсөн беләҙек, алҡа, йөҙөк, балдаҡтарын кейгәндәр. Ҡайтыр алдынан иҫтәлек өсөн тинлек аҡсалар һипкәндәр. [14]

Йылға-шишмәләр, ҡоҙоҡтар

Ҡомйылға (1 вариант). Борон-борон заманда беҙҙең ауыл Ағиҙелдең матур ярында урынлашҡан булған. Яҙ көндәре Ағиҙел ярҙарынан сығып аҡҡан. Шуға ла, ауыл ултырған урынды, яҙ көндәре һыу баҫыр булған.. бында йәшәүсе кешеләргә бик ауыр булған. Иң беренселәрҙән булып Янһары исемле ҡарт Ҡомйылға исемле йылға башындараҡ өй һалған, унан күреп башҡа кешеләр өҫкә сығып Ҡомйылға йылғаһы янына күсеп ултырғандар. Ауылды ла "Ҡомйылға" тип йөрөтә башлағандар.

Ҡомйылға (2 вариант). Суҡмуйыл әрәмәлеге бөткәс тә, суҡмуйыл шишмәһе үҙенең юлын дауам итә. Ул Ағиҙелгә ҡойғансы ике саҡрым самаһы ара үтә. Уға түбән төшкән һайын яҙлы-көҙлө сыҡҡан тау шишмәләре ҡушыла.йылға ташҡан осраҡта ләм, ҡом ағыҙған. Шуға Суҡмуйыл шишмәһе, әрәмәлеген үткәс тә "Ҡомйылға" тигән икенсе исем менән аға ла аға. [5]

Саҡмағош (1 вариант). Бер көндө бер бабай урманға утынға киткән. Ул оҙаҡ эшләп-эшләп ут яғырға булған. Оҙаҡ эшләгәс бабай асыҡҡан һәм уның яғырға саҡматашы бөтә. Һәм ул оҙаҡ уйлап тормай саҡматаш эҙләп сығып китә. Эҙләй торғас бабай саҡматаш табып ала. Ул

саҡматашты алһа, шул урындан һыу сыға. Һәм шунан башлап ул йылғаны “Саҡмағош” тип йөрөтә башлайҙар.

Саҡмағош (2 вариант). Иҫке Мөсәт ауылынан Иҫке Собханғол ауылыына табан саҡрым ярым аралыкта юл үткәс, Сейәле морон һәм ҙур ғына яланы бар. Был ялан Саҡмағош йылғаһы буйында берҙән-бер ҙур ялан. Ошо бер ҙур яланға “Саҡмағош” яланы тип атап йөрөтәләр. Хәҙер ҙур сәсеүлек ере булып тора, йә тулы малдар иркен йөрөр ялан. [4]

Саҡмағош (3 вариант). Был хәл әлеге Иҫке Мөсәт ауылында була. Ауыл ике тау араһында урынлашҡан. Саҡмағош йылғаһы былай барлыҡҡа килә. Йәш малайҙар уйнап йөрөгәндә саҡма таштар күреп ҡала. Былар ҡыҙыҡһынып ут, осҡон сығарып ҡарайбыҙ тип бер-береһенә һуғып ҡарайҙар. Араларынан берәү ҙур саҡма ташҡа ныҡ итеп икенсеһенә һуға. Ул янып китеп һыу атылып сыға. Малайҙар аптырап китәләр. Был һыу тәүҙә шишмә, һуңғараҡ йылға былып аға башлай. Ауыл халҡы бик ныҡ ҡыуана. Улар йылғаға ниндәй ҡушамат ҡушырға белмәйҙәр. Саҡма таштар был ерҙә күп була. Бер олораҡ кеше: “Саҡмағош” тип ҡушһаҡ нисек була?”-тип һорай. Был исем ауыл халҡына оҡшай һәм шул йылғаны Саҡмағош тип йөрөтә башлайҙар. Шулай итеп, әлеге көнгәсә Иҫке Мөсәт халҡы Саҡмағош йылғаһының һыуын яратып эсә. [9]

Мираҫ ҡотоғо (1 вариант). Ауыл халҡы Ағиҙел буйындағы туғайға һыу сыҡҡас, хәҙерге йәшәгән ауыл урынына күсеп ултырған. Улар һыуҙы тик бер шишмәнән ала торған булған. Ләкин уның һыуы ғына халыҡҡа етмәгән. Шуға халыҡҡа икенсе һыу сығанағы кәрәк булған. Ғәлемырҙа бабай үҙенен туғандары менән өйҙәренән алыҫ булмаған урында сығып ятҡан бәләкәй шишмәне таҙалап, шунан һыу ала башлайҙар. Бабай уландарына: “Шишмәне мин һеҙгә мираҫ итеп ҡалдырам”, - тигән, имеш. Шунан алып шишмә «Мираҫ ҡоҙоғо» тип атап йөрөтөлә. [2]

Мираҫ ҡотоғо (2 вариант). Элек Янһары ауылы Ағиҙел буйында урынлашҡан була. Тик яҙ көндәре һыу баҫыу ҡурҡынысы булғас, халыҡ хәҙерге урынға күсеп ултырған булған. Ләкин бында һыуға ҡытлыҡ булған. Ошо ауыл кешеһе Мырҙабаев Ғәлемырҙа олатай үҙҙәре ултырған ерҙән алыҫ булмаған урында сығып ятҡан бәләкәй генә шишмәне туғандары менән ҡаҙып, таҙартып шунан һыу ала башлағандар. Ғәлемырҙа олатай уландарына: “Шишмәне мин һеҙгә мираҫ итеп ҡалдырам”, тип әйткән. Шул замандан алып шишмә “Мираҫ” тип аталып киткән. Әле лә ул шишмә кешеләрҙе ҡыуандырып, тоғро хеҙмәт итә. Ҡышын һис тә туңмай, ә йәй көндәре теште ҡамаштырырлыҡ һалҡын була. Һуңыраҡ шишмә эргәһенә Мырҙабаев Ғабсабир олатай өй һалып инган. Тирә-яғын төрлө ағастар, емеш-еләк ҡыуаҡлыҡтары ултыртҡан. Ә өҫтәрәк Хәлилов Мөнир бабай өй һалған. Уның да өй тирәһе ҡыуаҡлыҡтар менән уратып алынған. Йәй көндәре шишмә тирәһе бигерәк тә йәмле була: моңло шишмә тауыштарына ҡушылып ҡоштар һайрай, сихри бер моң брлыҡҡа килтерә. [7]

Һыуыкколаҡ. Элекке телевышка урынлашҡан тауҙың аҫтындағы үҙәктән бәләкәй генә шишмә сығып аға. Бер аҙ аға биргәс ергә һеңеп юғала. Был шишмә тауҙың төньяҡ битләүендә ағып сыға һәм эргә тирәһе ҡуйы шырлыҡлы ағаслыҡшишмә һыуы шундай саф, таҙа һәм һалҡын. Шуға күрәлер инде был үҙәкте халыҡ “Һыуыҡколаҡ” тип йөрөтә. [11]

Сатра. Янһары ауылы Иҫке ыҙманан яңы урынға күсеп ултырған. Ағиҙел йылғаһының яҙғы һыуы ыҙалатҡанға күрә, аҡһаҡалдар кәңәшләшеп, йыйылышып бер фекергә килеп яңы урынға күсенгән. Яңы урында һыуға ҡытлыҡ булған. Кемдер Ағиҙелгә, кемдер Саҡмағош йылғаһына, кемдер Ҡомйылғаның үре, урталығына, түбәненә йөрөп малына һыу эсергән. Ауыл әкеренләп ҙурая килә. 1977 йылда колхоз рәйесе Билалов Айрат менән бригадир Теләүбаев Мозауар һыу мәсьәләһен хәл итергә булып геологик ҡаҙыныу, тикшеренеү эштәре алып барған геологтарҙан һыу скважиналарға тотоналар. 50 метр тәрәнлектә, торба төшөрәләр. Бура ултыртып электр сымы һуҙыла. Насос алыуға һыуы үҙенән үҙе ҡалҡып саптырып һептерә башлаған. Шуның өсөн дә “сатыра” исеме менән ҡыҫҡартылып “Сатра” тип йөрөтөлә. Халыҡ һыуға иркенләп йөрөй, ҡоҙоҡ та ауыл уртаһында ҡалды. [9]

Ҡойонсаҡ шишмәһе. Иҫке Мөсәт һәм Янһары ауылы араһының ҡап урталығында ғына шишмә сығып аға. "Ҡойонсаҡ" шишмәһе был. Шишмә ҡомло, бер ниндәй ҙә таш та күренмәй. Ҡабаҡ аҫтынан ғына аға ла аға. Тик ул йылғаның ғүмере ҡыҫҡа ғына, сыға ла ҡиблаға табан 300-400 м ағып барып Саҡмағош йылғаһына ҡоя. Яҙлы – көҙлө мал күп йөрөүҙән батҡаҡланып китә. Шуға ла уны "Ҡойо" һүҙенән алып "Ҡойонсаҡ" тип йөрөтәләр. Ул шишмәнең даны бөтә яҡҡа таралған, уны изге һыу тип тә атап йөрөтәләр. Ауыылда бер әүлиә бабай йәшәгән. Ярҙам һорап килгән халыҡҡа барыһына ла ярҙам ҡулы һуҙған, ауырыуҙарҙы дауалаған. Ошо "Ҡойонсаҡ" шишмәһенә йөрөп һыу алған, шунда тәһәрәтләнгән. Ошо шишмәнең һыуын эскән. Әүлиә бабай үлгәс тә был шишмә үҙенең шифаһын юғалтмаған, ә арттыра ғына, сөнки әүлиә бабай үлер алдынан халыҡҡа шишмәне һаҡларға һәм һыуы менән дауаланырға була, тип әйтеп ҡалдырған. [5]

Ялан-туғайҙар, йәйләү-сабынлыҡтар

Аҡбейек. Баҙал һыртында урынлашҡан был сабынлыҡ ҙурлығы менән таң ҡалдыра. Аҡбейектән көнбайышҡа табан бейек - бейек тауҙар теҙмәһе һуҙыла, тауҙар урмандар менән ҡапланған. Аяҙ көндә бында еләҫ, ҡоро була, ысыҡ төшмәй. Ә инде болотло көндә үҙенде болоттар өҫтөндә йөрөгән кеүек тояһың. Бейектә ятҡанғалыр инде бында яҙ ҡар һуң иретә, көҙ бик иртә ята. Ауыл тирәһендә, түбәндә, тау итәгендә ҡар иреп бөтһә лә бында ағарып ҡар ята, шуға күрә ул «Аҡ бейек"- тип атала.

Буҙбейә яланы. Борон заманда булған был хәл. Бер ауылда бур кеше йәшәгән. Көн һайын берәй кешенең берәй йорт хайуанын урлар булған. Бер көн ул күрше ауылға барып буҙ бейә урлаған. Уның ҡолоно булған. Ҡолонон һуйып ашаған ти был бур. Ә үҙе буҙ бейәгә ултырып ҡасҡан. Күп ер барған. Төрлө ауылдар урман-яландар үтеп, һыуҙар кисеп, арып - талып, асығып бер ҙур яланға ял итергә туҡтаған. Ахырҙа буҙ бейәһен һуйып, тиреһен тунап итен айырып бешерергә һалған, ти. Ошо мәлдә бер кеше бурҙы күреп ҡалғауҙарҙы күреп ҡалҡалға барып етәкселәренә әйткән. Бер-нисә кеше һыбай яланға барып сыҡһалар, теге бур ит ашап ултыра, ти. Был бурҙы тотҡандар, ә буҙ бейә һуйылған был урынды «Буҙбейә яланы» тип йөрөтә башлағандар. Был ялан ҙур сабынлыҡ булып киткән, йыл һайын кешеләр Буҙбейә яланында ҡышҡылыҡҡа бесән әҙерләйҙәр. [8]

Ғәле яланы. Ғәле ир ҡорона етеп үҙ аллы донъя көтә башлағас ауыл эргәһендә генә бер аҡланда бесән сабып малына ҡышлыҡ бесән әҙерләй. Уның сабынлығы булғас исеме лә уға йоға. Шуна "Ғәле яланы" булып киткән. [9]

Мортаҙа яланы. Теләүбай баҙына етеп барған ерҙә бер бәләкәй генә ялан булған. Ошо яланда Мортаҙа исемле бабай бесән әҙерләр булған һәм ялан уның исемен алған. [9]

Кәртәле яланы. Борон бер юлаусы кәртәле яланы аша үткән саҡта хәл йыйырға була. Икмәген сығарып тамаҡ ялғарға була. Һәм икмәгенең валсығы ергә үлән араһына ҡойола. Ул икмәк валсығын сүпләп алып тормай һәм уны ҡәҙерләп кәртәләп китә. Шунан бирле был яланды Кәртәле тип йөрөтә башлайҙар.

Ҡараңғы туғай. Ағиҙел йылғаһының Инсебикәгә ҡаршы туғайҙы "Ҡараңғы туғай" тип йөрөтәләр. Өлкәндәр һөйләүе буйынса туғайҙы ҡояш ҡалҡҡан яҡтан бейек, текә тау ҡаплап тора. Ҡояш бик һуңлап, төш ауғас ҡына төшә был туғайға. Шуға күрә лә уны "Ҡараңғы туғай" тип атағандар.

Тәкә һуйған буйы. Борон ул ерҙә ялан булған. Ауыл халҡы унда бесән сапҡан. Мөсәт ауылы халҡының шундай бер йолаһы булған. Һәр йәй еткән һайын тәкә һуйып байрам итә торған булғандар. Шунан бирле был ерҙе Тәкә һуйған буйы тип атап йөрөтәлә.

Ҡарағасйорт. Был йәйләү Ғәлиәкбәрҙән көнсығыш яҡлап сама менән 15 км самаһы алыҫлыҡта. Йәйләүҙәге аласыҡ ҡарағас ағасынан буралған булған, шулай уҡ был тирәнән өй нигеҙе өсен ҡарағас ағасы ла ала тора булғандар.

Ҡаршы туғай. Элек Иҫке ыҙма Ағиҙел буйында туғайында урынлашҡан булған. Ауылдан иҙел аша ҡаршы тағы бер туғай булған. Ҡаршыла ғына урынлашҡанға туғайға ла "Ҡаршы туғай" тип йөрөткәндәр. [9]

Ҡотлобулат түше (1 вариант). Иҙел туғайында тау битләп урынлашҡан матур ялансыҡ. Ауыл туғайҙа урынлашҡан саҡ та шул һыртта Ҡотлобулат тигән бай өй һалып йәшәгән. Шул һырт буйлап барғанда арҡыс - торҡос урынлашҡан таштар теҙмәһен Зөбәй ҡаралдыһы тип йөрөтәләр. Әрпешлеге менән танылып ҡалған Зөбәйлә исемле ҡатын сәбәпсе булып ҡала.

Ҡотлобулат түше (2 вариант). Янһары ауылынан көнсығышҡа табан барғанда Иҙел туғайына төшкәс битләүендә ҙур ғына асыҡлыҡ бар. Был асыҡ "Ҡотлобулат түше" тип атала. Янһары ауылы Иҫке ыҙмала йәшәгән саҡта Булат исемле кеше шул урында өй һалып донъя көткән. Яҙ көндәре һыу ҡалҡып ярҙан – ярға сығып туғайҙы һыу баҫҡанда түш өҫтөндә ултырған Булаттың өйөнә һыу барып етмәгән берҙән-бер урын икән. Шуға күрә халыҡ телендә "Ҡотлобулат түше" тип атала. [4]

Оҫҡон туғай. Янһары ауылының Ағиҙел буйынан бер ни тиклем үрҙәрәк бер ялан бар. Был яланға терәлеп торған ҡаяһында оҫҡон йыуаһы үҫә. Халыҡ йыуаға шунда йөрөгәнгә күрә "Оҫҡон туғайы" тип йөрөтөр булған. [9]

Ҡара бейә. Борон ауыл халҡы ырыу-ырыу булып күсеп йөрөгән булған. Йәйләүҙән ҡышлауға, ҡышлауҙан – йәйләүгә, йә утарға. Былар бер күсенгәндәрендә ҡара бейә үлеп ҡала, шул асыҡлыҡты "Ҡарабейә" тип йөрөтәләр. [13]

Өсуй. Иҫке Мөсәт ауылынан ике саҡрым тирәһе алыҫлыҡта бер ялан бар. Ул "Өсуй" тип атала. Был яланға өс яҡтан төньяҡтан, көньяҡтан, көнбайыштан үҙәктәр ишелеп ҡушыла. Үҙәк халыҡ телендә лә шулай атала. [5]

Сейәлеморон (1 вариант). Сейәлеморон – ул әлеге көндә кеше сабынлығы. Элек - электән был урында бик күп сейәләр үҫер булған. Бөтә ауыл халҡы ошонда сейә йыйырға килер булған. Бөгөн бында сейә юҡ инде, ләкин халыҡ телендә уның исеме Сейәлеморон исеме менән һаҡланып ҡалған. [3]

Сейәлеморон (1 вариант). Иҫке Мөсәт ауылынан Иҫке Собханғол ауылына ҡарай юл буйынса барғанда боролоштоң уңлап бер морон тора. Был Сейәле морон тип атала. Сәйәһе күп булған. Ауыл малдары күбәйеү сәбәпле хәҙер ағаслыҡтары ла ҡалмаған, тапанды ергә һәм юл һалғанда таш алыу өсөн ҡулландылар. [4]

Сейәлеморон яланы (3 вариант). Сейәлеморон – ул беҙҙең сабыныбыҙ. Йыл һайын беҙ күмәкләшеп – гөрләшеп унда бесән эшләйбеҙ. Хәҙер мин һеҙгә ошо сабыныҡтың тарихын һөйләйем. Йәмле салт аяҙ көндә беҙ бөтә ғаиләбеҙ менән бесәнгә киттек. Был сабынлыҡ үҙенең күккә олғашып торған ағстары, зифа буйлы һылыу ҡайындары менән беҙҙе ихлас күңелдән ҡаршы ала. Эй, ниндәй матур тирә-яҡ. Йәшел хәтфә болондары күҙҙең яуын алып тора. Ошо матурлыҡҡа тағы ла йәм өҫтәп төрлө-төрлө төҫтәге күбәләктәр бер сәскәнән икенсе сәскәгә ҡуна-ҡуна осоп йөрөй. Ҡайҙалыр ҡоштар һайрашав. Бесән эшләп ял итергә ултырғас, мин атайымдан: "Атай, ниңә был ерҙе Сейәлеморон, тип атағандар?" – тип һораным. Был һорауыма атайым былай тип яуап бирҙе: "Элек-электән был ерҙә бик күп сейәләр үҫер булған. Бөтә ауыл халҡы сейәгә килгәндәр ине. Тәүҙә был урындың исеме бөтөнләй юҡ ине, шунан һуң ғына уны "Сейәлеморон" тип атап өйрәткәндәр. Тик әлеге көндә сейәләр юҡ тиерлек" – тип һүҙен

тамамланы атайым. Бына дуҫтарым һеҙ “Сейәлеморон” тарихын белдегеҙ. Һеҙҙә бесәнгә, юлда йөрөгәндә ололарҙан ер-һыу атамаларын һорашып йөрөгөҙ. [9]

Шыйыҡ бутҡа (1 вариант). Иҫке Мөсәт ауылын үтеп Байназар юлында һул яҡ ялан. Һаранлығы менән даны сыҡҡан байҙың сабынлығы булған. Эшкә ҡушҡан кешеләрен шыйыҡ бутҡа менән һыйлаған.

Шыйыҡ бутҡа (1 вариант). Иҫке Мөсәт ауылынан төньяҡ көнбайышҡа табан саҡрым ярым алыҫлыҡта “Шыйыҡ бутҡа” тигән ялан бар. Уның тарихы былай: борон заманда байҙар эштәрен өмә яһап күберәк кеше ҡушып эшләтергә тырышҡан. Ауылдың бер һаран ғына байы йәйгелек өмә яһап бесән саптырырға була. Ул эшселәрен ашатыу өсөн ризыҡ йәлләп шыйыҡ ҡына итеп бутҡа бешерә. Эшселәр ризаһыҙлыҡ менән генә бесән сабып бөтәләр һәм ошо яланды “Шыйыҡ бутҡа” тип атай башлағандар. [9]

Тарихи, иҫтәлекле урындар

Ҡыҙҙар ҡасҡан үҙәк һәм кәмә ҡарай торған таш. Ауыл Иҙел туғайында ултырғанда һыу буйлап һалсылар бик күп йөрөгән. Ырғыҙлы заводына үтеүсе урыҫтарҙан ауыл ҡыҙҙарын йәшереп, бәлки берәйһен алып киткән осраҡ булғандыр инде. Ҡыҙҙарҙы үҙәктән өҫкә үрмәләткәндәр. Кәмә ҡарай торған ташҡа баҫып биржа күренһә, тимергә һуғып тауыш биргәндәр. Иҙел булып яңғыраған тауышҡа халыҡ малын ҡыуып, ҡыҙҙарын эйәртеп шул үҙәктән өҫкә менеп тау башында йәшенеп ҡалған.

Хәйрулла кисеүе. Бөрйәнгә Саҡмағош яланынан китеп барған юлдың уң яғындағы кисеү. Һуғышҡа тиклем Берлек ауылы беҙҙең колхоздың бер бригадаһы булып торған. Хәйрулла игенлекте, сабынлыҡты ҡарап тормай тәртипһеҙ рәүештә тапап шунан тура килеп ауылға инер булған. Кисеү “Хәйрулла кисеүе”- тип атала.

Тарбаҡ бәшә. Кинйәбаев Факилдың өйө ултырған ерҙә йыуан тарбаҡ ҡарағай булған. Ике ауыл йәштәре шул ағас төбөндә осрашып күңел асҡан.

Тарбаҡбешә. Элек-электән Янһары һәм Иҫке Мөсәт ауылы халҡы бер-береһен ҡунаҡҡа саҡырышып күңелле, атыу йәшәгәндәр. Олораҡ йыйындар булһа бер-береһен Ҡолонсаҡ шишмәһе тапҡырында, юлдан өҫ яҡта, (хәҙер Манапов Самат Сабир улы йәшәгән урында) тарбаҡлы, йыуан ҡарағай төбөндә ҡаршы алғандар. Йыйын, табын ҡороп ултырғандар. Ҡарағай тарбаҡлы булғанғалыр инде ул урынды “Тарбаҡлыбешә” тип йөрөткәндәр. [10]

Монаш араһы. Аслыҡ йылдарында ағайлы-ҡустылы икәүләшеп яҙ көнө ашарҙарына бөткәс, ашарға эҙләп сығып китәләр. Әлеге Иҫке Мөсәт ауылы ултырған ерҙән ҡаршы тауға менеп китә береһе. Тау аҫтында ҡалған үлгән болан табып ала һәм ағаһына: “Мына аш!” тип ҡысҡыра. Улар шул урында тамаҡланып алалар. ағалы-ҡустылы ошо урынды оҡшатып йәшәргә тороп ҡалалар һәм ыҙманы “Монаш” тип йөрөтә башлайҙар. [11]

Зөбәй ҡаралдыһы. Хәҙерге ауылды үтеп Иҙел туғайына төшкәс, һулаҡай яҡлап тау битләүендә ҡатлы-ҡатлы булып йыйыштырып ҡуйылған ҡаралдыға оҡшаған таш бар. Уны Зөбәй ҡаралдыһы тип йөрөтәләр. Уның килеп сығыу тарихы былай. Вәлеев Шәмсетдин тигән кешенең Зөбәйлә исемле ҡыҙы булған. Атаһы, тыуған-тыумасалары менән бесәнгә китеп барғанда Зөбәйлә: “Атай ҡарале, бынауы таш ҡуйылған ҡаралдыға оҡшаған” – тигән. Шунан алып ул таулы-ташлы урынды туғандары шул тирәнән үткәндә сакта Зөбәйләгә: “Ҡара, Зөбәлә һинең ҡаралдың” тип мәрәкәләгәндәр. [12]

Ҡыҙҙарҡасҡан үҙәк. Туғай яланын үтеп һулаҡай боролған ерҙә элек ауыл булған. Шул тирәне Иҫке ыҙма тип йөрөтәләр (хәҙер ауыл һабантуйы шунда үтә). Шул тирәлә бер үҙәкте ҡыҙҙар ҡасҡан үҙәге тип йөрөтәләр, ә килеп сығыу тарихы ошолайыраҡ. Борон-борондан ҡҙҙарҙы

кейәүгә биргәндә ҡыҙҙарҙы йәшереү йолаһы башҡарылған.кәләшлеккә алған егет уны эҙләп табып атай әсәйенең ризалығын алырға тейеш булған. Ҡыҙ иптәш ҡыҙҙары менән тәрән үҙәктән тау башына сығып эҙләр егетен күҙәтеп торғандар. Шулай итеп егетенән йәшеренгән урынды "Ҡыҙҙырҡасҡан үҙәк", тип йөрөтәләр.

Тирмән тамағы. Колхозлашыу осоронда Янһары ауылы халҡы Саҡмағоштоң Ағиҙелгә ҡойған урынында һыу тирмәне эшләгәндәр. Ул оҙаҡ ҡына халыҡҡа хеҙмәт иткән. Шул урынды "Тирмән тамағы" тип йөрөтәләр.

Тәкей. Мөсәтте үткәс, хәҙерге юл айырмаһы аша Берлек (Яңы Мөсәт) ауылына тура барып төшкән юл бар. Урау йөрөгәндә 4-5 тапҡыр Алағуян йылғаһын кисергә кәрәк булған. Шуға халыҡ текә булһа ла ошо юлдан йөрөгән. Юл берҙән ике-өс тапҡырға тура, тик Яңы Мөсәт ауылына төшкән тау яғы бик текә шул. Өс яғына күтәрелгән юл буйын "Текә уй", тауын "Текәй" тиҙәр.

Теләүбай баҙы. Мөсәт менән Янһары араһында Ҡойонсаҡ шишмәһенән бер саҡрым самаһы төньякта Теләүбаев Мозауар бабайҙың икенсе быуын олатаһы Теләүбай үҙенең ғаиләһе менән туҙ йыйған шунан дегет ҡайнатҡан. Уны ҡайнатыу өсөн баҙ ҡаҙып шунда ҡайнатҡан. Шуға күрә лә был урынды "Теләүбай баҙы" тип атайҙар. [9]

Тәкә һуйған. Элек-электән Мөсәт халҡы бик татыу йәшәгән. Уларҙың йәшәү девизы булып: "Берәү бөтәһе өсөн, бөтәһе берәү өсөн" тигән әйтем булған. Ысынында ла был тап шулай. Улар нимә генә эшләмәһен, бөтәһен дә бергә хәл итеп эшләгәндәр. Шуға миҫал итеп, Мөсәт халҡының нисек тау артында тәкә һуйғандарын килтерәйек. Улар берләшеп унда тәкәләрен һуйғандар. Тора-бара был ерҙе "Тәкә һуйған" тип тә әтә башлағандар. [9]

Баржа (кәмә) ҡарай торған тау бите. Элек беҙҙең ауыл Иҫке ыҙмала Ағиҙел туғайында булған. Урыҫтар Тирлән, Әүжән, Белорет яҡтарынан баржаларҙа ҡойолған тимер, суйын, баҡыр (металл) ағыҙғандар. Бик йыш ҡына улар урындағы халыҡты баҫмаҡлағандар. Темәк тауы башында бер асыҡ урын булған, шул урындан Ағиҙел йылғаһы бер нисә саҡрымдан ап-асыҡ күренеп торған. Ауыл халҡы көн дә алмашлап шул тау башында һаҡта торған. Әгәр урыҫтар баржаһын күреп ҡалһалар тау башына ҙур итеп усаҡ яҡҡандар һәм ауыл халҡы бәлә килгәнен белеп йәшеренгәндәр. Һуңынан аҡһаҡалдар кәңәшләшеп тынысыраҡ урын эҙләп өҫкәрәк күсенгәндәр. [9]

Суҡмуйыл. Янһары ауылының төньяҡ осонда әрәмәлек бар. Элек үтеп булмаҫлыҡ булған тип һөйләйҙәр. Уның башынан ғына шишмәлә сыҒп ағып төшә. Ошо әрәмәлек тик муйыл ағасынан ғына торғанға, муйылы уңған, күп булыуына ишаралап "Суҡмуйыл" тип йөрөтәләр. [5]

[1] Хәлилов Самат-пенсионер, элекке география уҡытыусыһы Янһары ауылы

[2] Рафаэль Сиражетдинов яҙмаларынан.

[3] Был мәғлүмәттәрҙе Көсәпова Гөлназ яҙып алды. Етәксеһе- тарих уҡытыусыһы Ҡолдобаева Гөлдәр Рәхимйән ҡыҙы.

[4] Кинйәбаева Мөнирәнән (1937 й.) яҙып алынған.

[5] Кинйәбаев Талха (1935 й.) бабайҙан яҙып алынған.

[6] 1983 йылда Башҡортостандың һәм РСФСР-ҙың атҡаҙанған уҡытыусыһы Йомағолова Ғәйшә Ниатша ҡыҙы Йомағолова Таһира инәйҙән (1902-1991 йй.) яҙып алған.

[з] Олатаһынан 9-сы синыф уҡыусыһы Мырҙабаева Гөлсәсәк яҙып алды. Етәксеһе Манапова Тамара Хәсән ҡыҙы.

[8] Был легенданы Мырҙабаев Хәсән Атаулла улынан (73 йәш) ейәне Мырҙабаева Миләүшә яҙып алған. Етәксеһе Манапова Тамара Хәсән ҡыҙы.

[9] Йортбағышев Мозауар бабайҙан (1934 й.) һорашып яҙып алынған.

[10] Манапов Йосоп Әнеүәр улынан (1932 й.) ейәнсәре Ҡөсәпова Лилиә Флюр ҡыҙы яҙып алған.

[11] Иҫәнғужин Ғариф Заһит улынан (1935 й.) Ҡөсәпова Лилиә Флюр ҡыҙы яҙып алған.

[12] Иҫәнғужин Ғариф Заһит улынан (1935 й.) Айытбаева Айзилә Мөҙәрис ҡыҙы яҙып алған.

[13] Балдыбаева Заһита инәйҙән яҙып алынған.

[14] Йортбағышева Бибиямал инәйҙән яҙып алынған.

Иҫке Мөсәт ауылы

Бик борон ер-һыу биләнеп бөтмәгән саҡтарҙа Саҡмағош йылғаһы буйына Темәс ауылы кешеләре килеп сыға. Һәм был яҡтарҙы оҡшатып Саҡмағош ауылына нигеҙ һала. Күсеп ултырған ауыл халҡы Нөгөштә (Ярыу йылғаһы тамағында), Буҙбейәлә (Алағуян буйы), Ҡара һыйырҙа утар ҡора. Бер көндө ҡырғыҙҙар утарҙы килеп баҫа. Улар бөтә малды һәм Әлеш исемле олатайҙы ҡоллоҡҡа алып китәләр, беҙҙең Мөсәт олатайыбыҙ тегеләрҙән ҡотолоп ҡала. Ҡырғыҙҙар бысып алған малын Баҙал аша ҡыуып, хәҙерге Әлеш йәйләүендә йоҡларға туҡтайҙар. Ҡырғыҙҙарҙың бик шәп ерән юрғалары була. Йоҡларға ятҡанда уларҙы арҡанлап һаҡлайҙар. Әммә һаҡсы таңға ҡарай йоҡлап китә. Был саҡ Мөсәт олатайҙын ғәйрәтле сағы була. Ул шым ғына килеп тегеләрҙең бер уҡ-һаҙағын һәм арҡандан ерән юрғаһын сисеп ала. Әммә күк юрғаға яҡынайғанда уныһы өркөп, ҡапыл бышҡырына башлай һәм ҡырғыҙҙарҙы уята. Мөсәт олатай ерәнгә һалып баяғы уҡ-һаҙаҡты алып ҡаса. Ҡырғыҙҙарҙың йоҡо ҡайғыһы китә, тамаҡ туйҙыра һалып, урлаған малдарын ҡыуып юлға сығалар. Имән йортто үтеп, Бүтәгәле ҡырға урала башлағас, бер уҡ күк юрғаның ҡырлы арҡаһын тишеп сыға, икенсеһе бер ҡырғыҙҙың эйәр ҡашына ҡаҙала. Уларҙы ҡурҡыу ала. Ә тау бышынан Мөсәт ҡысҡыра: “Баҫып алған беҙҙең малдың дүрттән өс өлөшөн, кешене ҡалдырығыҙ! Ҡалдырмаһағыҙ барығыҙҙы ла уҡ менән сүпләйем!” - ти.

Ҡырғыҙҙарҙың күк юрғаһына етер йүгерек булмай. Шуға Мөсәт олатай уны үлтерергә ҡарар итә. Хәҙер уны ерән юрға ла, бер кем дә ҡыуып етә алмай. Ҡырғыҙҙарға риза булыу әмәле ҡалмай. Әлеш олатайҙы һәм малдың дүрттән өс өлөшөн ҡалдырып, юлға сығалар. Ә Мөсәт олатай күренмәйенсә генә ҡырғыҙҙарҙы хәҙерге Ғәлиәкбәрҙең үрьяғындағы Оло Нөгөштө сыҡҡансы оҙатып бара һәм Буҙбейәгә кискә генә ҡайтып инә. Мөсәт барымтасыларҙың байтағын берәм-берәм атып бөтөрөр ине, ләкин ҡырғыҙҙар теүәл ҡайтмаһа, улар оло яу булып кире килеүе бар, тип уйлап теймәй. Бер өлөш мал биреп ебәреүе шул-баяғы ике юрға хаҡы була. Ошо батыр хөрмәтенә ауылдын исемен Мөсәт, ҡырғыҙҙар йоҡлап киткән урынды Әлеш тип йөрөтә башлайҙар.

Ауыл ерҙәрен ҡараһаң, районда Мөсәт биләгән тиклем ер берәүҙә лә юҡ. Саҡмағош башынан үр яҡҡа ике саҡрым үткәс Тарҡайҙан Боһондоноң уң ярына, Ярыу тамағы, Бәләкәй Нөгөш ике туғай, Суҡраҡты, Яңы Монасип һәм Янһары Ҡарағоштоһы, Серәкәй һәм баяғы Тарҡанайға тиклем булған Мөсәт ерҙәре. Яңы Монасип Ҡарағоштоһы уларға нисек киткәндер, мин уныһын белмәйем.

1966 йылда Яңы Монасипта бесән эшләп яттым. Малайҙарға ике саталы һәнәк эшләп бирҙем дә бесән йыябыҙ. Мораҙым ауылынан Моратшин Талха ағай мәрхүм тай-тулағын эҙләп килеп сыҡты. Сәй эскән саҡта теге ике саталы һәнәкка ҡарап ул:

- Боронғо олатайҙын ерендә боронғо һәнәк менән йыяһыңмы? Беҙ малай саҡта, һалдаттан ҡайтҡанда янһарылар ошонда йәйләүҙә була торғайнылар, беҙ туҡтап сәй эсеп йөрөнөк-тип һөйләне.

Алағуян башы (Яңы Мөсәт) Саҡмағош айырыу шулай килеп сыға. Алағуян ҡарттары ауылдарын бүлеү өсөн йылға бышынан ер һорай. Әммә ҡарттар ауыл халҡы менән кәңәшләшеп, ер уртаһынан , йәғни Алағуян башынан ер бирмәҫкә булалар.Унда үҙҙәре бүленеп ултыра. Ә Алағуян тамағыларға ерҙе хәҙерге Яңы Собханғол (Янһары) ултырған урынды бирәләр. Беҙҙең зыярат шуға ла уртаҡ ул. Йәйләү урыны итеп Янһарыларға биләмәсиктәренән яландар бирәләр. Ул саҡта Бөрйән һәм Ҡыпсаҡ ырыуҙары араһында ыҙғыштар булғылып торған һәм Мөсәт ҡарттары биләмә сиктәренә башҡаларҙы ултырта.

Ул хәҙерге заманда Сатра йылғаһының тамағы. Ул бик күп итеп ҡом, ҡырсын-таш ағыҙып алып килгән. Әлеге көндә лә Сатраның ҡойған ере шул килеш. Хәҙер ҙә өлкән быуын кешеләре уны Ҡомйылға тип йөрөтәләр. Ҡомйылға ауылынан иң беренсе булып Янһары исемле ҡарт

күсеп килеп ултырған һәм йәшәй башлаған. Янһары ҡартттың улдары ла булған. Ҡарттың Әфәнде исемле улы ла булған. Уға әлеге Әфәнде тауының итәгендә өй һалып бирә. Ул шунда йәшәй башлай һәм был тауға Әфәнде исеме бирәләр. [1]

Тирмән таш тауы. Иҫке Мөсәт ауылынан асфальт аша Алағуян тауын Тирмән таш тип йөрөтәләр. Сөнки борон заманда беҙҙең олатайҙар шунан таш алып тирмән эшләп, бойҙай тартып, он һалдырып ашағандар. Был таш йомшаҡ таш, нисек тишһәң дә ярылмай, йәғни, ватылмай. Шулай итеп, ошо морон Тирмән таш тип йөрөтөлә.

[1] Был мәғлүмәт Муса Шәмиғоловтан яҙып алынған.

Яңы Мөсәт ауылы

Яңы Мөсәт ауылы Бөрйән районы үҙәгенән 9 саҡрым алыҫлыҡта Алағуян йылғаһының уртансы ағымында, Көньяҡ Урал тауҙарының көнбайышында урынлашҡан. Ауылды тағы ла Алағуян башы, Берлек һәм Япония тип йөрөтәләр. Яңы Мөсәт ауылының тарихы Иҫке Мөсәт ауылы менән тығыҙ бәйле. Тәүге мәғлүмәттәрҙе беҙ Әсфәндиәров А.З. «Башҡортостандың ауылдары тарихы» китабынан ала алабыҙ. V –се ревизия мәғлүмәттәре буйынса 1840 йылдың аҙағында Иҫке Мөсәт аулынан бер нисә ғаилә айырылып сығып Яңы Мөсәт ауылына нигеҙ һалалар. Хужалыҡтарҙа мал иҫәбенең үҫешеүе, халыҡ һанының артыуы, яңы ерҙәрҙе үҙләштереүҙе талап итә. Иҫке Мөсәт ауылы кешеләре Кесе Нөгөш һәм Алағуян йылғалары буйлап яландарҙы йәйләүҙәргә әйләндерәләр. Ошо йәйләүҙәрҙең береһендә, хәҙерге көндә Сыуаҡбикә тип йөрөтөлгән ерҙә 5-10 хужалыҡтан торған ыҙма барлыҡҡа килә һәм Алағуян башы тигән исем аҫтында билдәле була. Ләкин янғын сығып китеп ауыл тулыһынса яна, мәсет тә янып юҡҡа сыға. Ауылдың ҡарттары йыйылышып был ерҙән китергә ҡарар итәләр. Йылғаның түбәнге ағымы буйлап килеп хәҙерге ауылдың территорияһын үҙ итәләр. Был ерҙә яҡын ғына арауыҡта Оло Ялан, Иҫке Ыҙма һәм Айыуатҡан йылғалары Алағуянға килеп ҡушылалар. Х-сы ревизия Яңы Мөсәт ауылында 33 хужалыҡ һәм 176 кеше йәшәгәнлеген билдәләй. Ауылдың тәүге кешеләре булып Бөрйәндәр араһынан Кинйәбулат, ҡалмаҡтар араһынан Дәүләтша, Нурмөхәммәт, Ғүмәр, Кәндерәстәр араһынан Ҡаһарман, уның улы Иштуған, Һалдаттар араһынан Ҡасҡын булыуы билдәле. 1920-се йылдағы халыҡ иҫәбен алыу ауылда 63 хужалыҡ һәм 289 кеше йәшәгәнлеге тураһында мәғлүмәт бирә. Колхозлашыу осоронда 1930-сы йылда промартель «Берлек» ойошторола. Устав буйынса ул ауыл хужалығы эшмәкәрлеге менән шөғөлләнергә тейеш була. Артель үҙаллы хужалыҡ булмай, ул Яңы юл колхозының бригадаһы булып иҫәпләнә. 1930-1936 йылдарҙа тәүге председателе булып Ҡасҡынбаев Ғизетдин эшләй. 1936-1941 йылдарҙа Бүләкбаев Мөхәммәткилде етәселек итә. Ләкин Бөйөк Ватан һуғышы сығып китеп ул 1942 йылда һәләк була. 1943 йылдан промартелде һуғыштан яраланып ҡайтҡан Ҡасҡынбаев Садиҡ Сафа улы етәкләй. Ауылдан һуғышҡа 38 ир-ат яуға китә, шуларҙың 19 яу яланында ятып ҡала. 1936-1942 йылдарҙа промартель “Берлек» үҙаллылыҡ ала. 1942 йылда ул яңы устав буйынса кәсепселеккә күсә һәм 1957 йылға тиклем ошо йүнәлештә эшләй. Ауыл эргәһендә ҙур сәсеүлектәр юҡ, ләкин йүкә, ҡарағай һәм ҡайын ағастары күп була. Продукцияның төрлөлөгө лә ошоға бәйле етештерелә. Һалабаш әҙерләү, арҡан ишеү, септә һуғыу, ҡап (тоҡ, рыбник) һуғыу, арба, сана, тәгәрмәстәргә туғын бөгөү, дуға эшләү, көрәк сабыу, дегет ҡайнатыу, артель аттарына бесән әҙерләү кеүек эштәр яйға һалына. Хужалыҡ эштәрендә төп ярҙамсы аттар күпләп тотола. Юғарынан килгән план ваҡытында һәм теүәл үтәлә. 1946 йылда промартель Бөрйән райлесхимпромсоюз ҡарамағына күсерелә. Был ойошма “Ҡыҙыл юл”, “Ҡыҙыл байраҡ”, «1 май», «Марс», «Чапаев», “Салауат”, “Молотов” артелдәрен берләштерә. Ауыл промартеленең төп эшмәкәлеге ҡарағай һәм ҡайын ағастарын яҙғы ташҡында ҡыуғын менән Бөрйән ағас әҙерләү комбинатына тиклем алып барыу тора. 1957 йылда промартель “Берлек” тарҡала һәм уның урынына ағас эшкәртеү комбинаты асыла. 1958 йылда леспрохоз күсеп килә һәм ауыл халҡы күпләп ошо ойошмала эшләй башлай. Эшселәр һаны күсеп килеүселәр иҫәбенә арта һәм уларға күпләп квартиралар төҙөлә башлай. Әлеге көндә ауылдың яртыһын тиерлек ошо төҙөлгән өйҙәр алып тора. 1965 йылда тәүге электр станцияһы ултыртыла. Т-4 тракторрының двигателе нигеҙендә эшләнгән станция 1985 йылға тиклем эшләй. 1985-1986 йылдарҙа реконструкция үткәрелә һәм электр сымдары Байназарҙан Тәкей тауы аша ауылға төшөрөлә. 160 квт ҡеүәтлелелегендәге бер трансформатор ултыртыла. 1990 йылдарҙағы ил эсендәге үҙгәрештәрҙән һуң электр хужалығы Белорет электр селтәрҙәре ҡарамағына ҡушыла һәм 2000 йылда ағас бағаналар бетонға алыштырыла, 160 квт ҡеүәтлелегендә ике трансформатор ултыртыла.

Ауылдың тарихи урындарының береһе булып ауыл зыяратын индерергә кәрәктер. Унда бөйөк ғалим, сәйәсмән Зәки Вәлидиҙең яҡын дуҫы Ибраһим Ҡасҡынбайҙың атаһы Шәмсетдин мулла ерләнгән. Алағуян башына килеп йөрөүе тураһында Зәки Вәлиди үҙенең хәтирәләрендә тасуирлап яҙып үтә. Ул туктап киткән йорт әле лә бар, ололар һөйләүе буйынса был йортто

мәсет бураған ағастың осонан эшләгәндәр. 2004 йылда беҙҙең ауылда З.Вәлидиҙең туғандары, профессор Иҫәнбикә ханым һәм ейәнсәре Сара атай юлдарын юллап, булып китте.

1935 йылда Яңы Мөсәттә элекке мәсет бинаһында 4 йыллыҡ башланғыс мәктәп асыла. 1-се класска йәштәренә ҡарамай бөтәһен дә алалар. Беренсе уҡытыусы булып Иҫке Монасиптан Буранов Һаҙый эшләүе билдәле. Ҡыҙыл армия сафына алынғас, унын урынына Ғафури районы Янғыҙҡайын ауылынан Исмәғилев Әхәт килә. 1939-1942 йылда Уразаев Сәйетғәле уҡыта, уҡыу йылы бөтөүгә уны ла һуғышҡа ебәрәләр. Иҫке Мөсәт ауылынан Ҡулбирҙина Ғөбәйҙә апай уҡытыусы булып килә. 1951-1952 йылдарҙа Сөләймәнов Зәки Мөхәмәтвәли уҡыта. 1954-1958 йылдарҙа БАССР атҡаҙанған уҡытыусыһы Юлсурина Гөльямал Солтангәрәй ҡыҙы балаларға белем бирә. 1956 йылда леспромхоздың участогы асылыу сәбәпле күсеп килеүсе йәштәр һаны арта һәм өҫтәлмә рәүештә рус кластары асыла, уларҙы Ишкинин Азат Халфетдин улы уҡыта. 1966 йылда мәктәп 8 йыллыҡҡа үҙгәртеп ҡорола. Леспромхоз мәктәп яңы мәктәп зданиеһын төҙөтә. Тәүге директоры булып Ишбулатов Мөнир Сибәғәт улы эшләй. 1968-1970 йылдарҙа мәктәпте Сәғитова Ғәшүрә Шәрип ҡыҙы етәкләй. 1970-1988 йылдарҙа етәксе вазифаһын Уразаев Хәмит Сәйетғәле улы башҡара. Унын хеҙмәте юғары баһалана һәм БАССР-ҙың мәғариф отличнигы исеме бирелә. 1988-1994 йылдарҙа директор булып Әбдрәхимов Әхәт Абдрахман улы эшләй. 1994-2001 йылдарҙа мәктәптең етәксеһе булып Ҡасҡынбаев Мөхәррәм Абдразаҡ улы эшләй һәм яңы мәктәп зданиеһы төҙөлә. Мәктәп төҙөүгә ауыл халҡы ҙур көс һала, 2000-2001 уҡыу йылын уҡыусылар яңы мәктәптә башлайҙар. 2001-2005, 2006-2008 йылдарҙа етәксе ролен Ғүмәрова Гәүһәр Зиннур ҡыҙы, 2005-2006 йылдарҙа Әхмәтова Нәфисә Абдулла ҡыҙы, 2008-2010 йылдарҙа Ҡаһарманов Сабит Сәйғәфәр улы, 2010-2011 йылдарҙа Зәйнәғәбдинов Марат Айытбай улы эшләй. Әлеге көндә мәктәпте 2011 йылдан алып Ҡасҡынбаев Мөхәррәм Абдразаҡ улы етәкләй. Яңы Мөсәт мәктәбе Иҫке Собханғол урта мәктәбенең филиалы итеп үҙгәртелде.

Әлеге көндә ауылда 571 кеше йәшәй, 127 хужалыҡ теркәлгән. 9 йыллыҡ мәктәп, балалар баҡсаһы, фельдшер акушер пункты, ауыл мәҙәниәт йорто эшләп килә.

Йылға-шишмәләр

Ҡарасәс (Ҡарас) йылғаһы. Ауылдың ҡап урта өлөшөндә Алағуян йылғаһына Ҡарасәс йылғаһы ҡоя. Ҡасандыр баҫҡынсыларға ҡаршы һуғышҡа киткән яугир, ҡатынын йәш балаһы менән әлеге йылға буйындағы әрәмәлеккә йәшереп киткән. Ире китеп оҙаҡлағас, ҡатыны сыҙамай балаһын йүргәккә урап ағас төбөнә ҡалдырған да, ирен эҙләп киткән. Барһа, ире яраланған була. Кире килһәләр, бала ҡалдырып киткән ерҙә юҡ икән. Йылға буйлап эҙләп килә торғас баланы табып алалар, ыҫмала һымаҡ ҡара сәстәренең бер өлөшө һыуға төшкән була. Йылғаның исеме шунан тороп ҡалған.

Зәмбикә шишмәһе. Алағуян йылғаһын кисеп сыҡҡас тау итәгенән бер шишмә ағып сыға. Һыуы таҙа, йәй көндәре лә теште зыңҡытып һыуыҡ, ҡыш көнө лә туңмай. Элегерәк кешеләр шул ҡотоҡтан бесәнгә киткәндә сәй ҡайнатыу, айран эшләү өсөн һыу алып киткәндәр. Тәү башлап был ҡотоҡто Ҡасҡынбаев Исрафилдың ҡатыны Зәмбикә соҡоп һыу сығарған тиҙәр.

Тарихи, иҫтәлекле атамалар

Партизандар ҡыуаҡлығы. Ауыл эргәһендәге ҙур ғына ҡаяташ бар. Шуның көнсығыш битләүендә бер әрәмәлек сауҡа ҡайындар һәм ерктәрҙән тора. Шул ҡыуаҡлыҡта ҡәберлек бар. Тарихына күҙ һалһаҡ Граждандар һуғышы ваҡытында аҡтар менән ҡыҙылдар араһында ҡаты ғына һуғыш була. Ҡыҙылдар Аралбайға тура сыҡҡан Беләтәр юлы буйлап һөжүм итәләр. Аҡтар ауылдың бейек нөктәһе, Һырт яҡта окоптар ҡаҙып оборонаға күсәләр. Ләкин көстәр тигеҙ булмай. Аҡтар тиҙ арала сигенәләр, үлгән кешеләрҙе күмеп өлгөрә алмайҙар. Ауылда йәшәүсе Ғүмәров Фәтҡулланың өйөнә аҡ офицер килеп инә һәм иң яҡшы атын эйәрләтеп алып сығып

китә. Фәтҡулла ҡустыһының Ғүмәров Рәхмәтулланың аҡтар яғында офицер булып йөрөгәнен белгән була. Һуғыш ауылдан ситкә киткәс ул шул ятып ҡалған кешеләр эргәһенә бара, өс һуғышсыны шул тау итәгенә Зәмбикә шишмәһенең өҫ яғына күмәләр.

Эстакада. Бөрйән районына леспрохоз күсеп килгәс Яңы Мөсәт ауылы яғынан бик күпләп ҡарағай ағасына делянкалар алалар. Шул ағастарҙы тәгәрләтеп тейәп ебәреү өсөн ҡырсынташтан бейегәйтеп эстакадалар эшләйҙәр. Был эстакадаларҙың урыны әлеге көндә лә беленеп ултыра. Шуларҙы төҙөгән саҡта, ҡырсынташтарын өйгәндә, күпләп граждандар һуғышынан ҡалған патрондар сыҡты тип әйтәләр.

Арыҫлан ҡарт соҡоро. Ауылдан алыҫ түгел ситтәре таштан бурап эшләнгән соҡор бар. Халыҡ уны Арыҫлан ҡарт соҡоро тип йөрөтә. Был кеше Вахитов Арыҫландың дегет ҡайнатҡан соҡоро булған. Ваҡытында ул ауылда оҫта дегет ҡайнатыусы, көрәк сабыусы, арҡан ишеүсе булараҡ билдәле булған. Әлеге көндә соҡор эргәһендәге шишмә ҡороған, ә соҡорҙоң эсә күмелеп бөтөп бара. Уның улы Йәнғәле Вахитов бик оҫта бейеүсе булараҡ билдәле.

Ҡатайғошҡан (Ҡатай һуғышҡан), Ҡыҙыл ер, Тарҡын туғайы. Өсөһө өс ерҙә урынлашһа ла был атамаларҙы бер үк тарихи ваҡиғалар бәйләй. Борон ырыуҙар үҙ-ара һуғыштар алып барғандар. Ҡатайҙар ҙа Бөрйән ырыуы менән һуғыштары сығып торған. Шуларҙың берәүһенә бәйле Тарҡын туғайында һуғыш барғанда һуғышсыларҙың берәүһе «Ҡылысҡа, ҡынға тар урында һуғышмайыҡ, яланға сығып һуғышайыҡ» тип тәҡдим яһай. Тау башында ла ҡатай һуғышҡан тигән урында ла асыҡ ялан бар. Ҡыҙыл ер тигән урын Алағуян йылғаһының башында урынлашҡан, ҡатайҙар менән һууғыштан һуң ер ҡып - ҡыҙыл ҡан менән ҡапланғаны билдәле булған.

Завод. Алағуян йылғаһының көнбайыш битләүендә Завод тигән урын бар. Әлеге көндә бында сереп бөтөп барған тимер киҫәктәрен күрергә була. 20 – се быуат башында Атаманов тигән инженер бында спирт, скипидар, дегет ҡайнатыу өсөн завод төҙөтә. Әҙер продукцияны Стәрлетамаҡҡа ылау менән ташығандар. Бында күпләп Әүжәндән урыҫтар килеп эшләүе билдәле. Кирбесен колхозлашыу башланғас ташып алып бөткәндәр.

Атаман. Ошо уҡ Завод тип аталған ерҙә ҙур ғына бер асыҡлыҡ бар. Шунда заводтың хужаһы Атаманов ерләнгән булыуы билдәле. Ваҡытында бик йомарт, бай кеше булған тиҙәр. Тәкей тауын менеп барғанда атынан ҡолап төшөп үлеп ҡала. Уразаева Ғилминиса тигән апай табып алып ҡайтып, йәйге эҫелә таш аласығына һалып тороп туғандарын эҙләтеп ҡарай, ләкин тапмайҙар һәм үҙенең төҙөткән заводы эргәһенә алып барып күмәләр.

Майсерегән. Граждандар һуғышы ваҡытында хәрби коммунизм осоронда ауылдарға артыҡ аҙыҡ - түлек запастарын халыҡтан йыйып алыу өсөн продотрядтар килә. Ауылдың бер хәлле кешеһе үҙенең йыйған майын бирмәҫ өсөн урманға алып барып күмеп йәшерә. Ләкин үҙен кулак тип ҡулға алып ауылдан алып китәләр. Майҙың йәшерелгән урынын үҙе генә белгәс уны алыусы булмай. Май ултырып иҫкерә, серей.

Мөжәүер утары. Мөжәүер олатай* заманына күрә бик хәлле, йүнсел кеше булған. Күпләп һыйыр малы, өйөр-өйөр йылҡыһы йөрөгән. Етмешләп солоҡ ҡараған. Бик иртә өйләнеп, ике ҡатыны булған. Береһе - Сафия, икенсеһе Сәмсикамал өләсәйҙәр. Сафия өләсәйҙән - Батыр бабай, Шәмсинур апай, Ғәфүр ағай, Сәрүәр апай, Сәмсикамал өләсәйҙән Маһинур, Маһизата, Ғәйниямал инәйҙәр, әсәйем Ғилминур, Ғәле, Ғүмәр бабай, Вафир ағай, Кинйәбикә апай тыуған. Мөжәүер олатайҙың Алағуян башы Суҡраҡлы яланында, Шаҡмамай тигән ерҙә йәйләүе булған. Ҡыш етеп, ауыр ҡар ятмайынса, ауылға ҡайтмаған олатай. Утары ике бүлмәле булып, кәртә-ҡураһы әллә ҡайҙан балҡып күренеп ултырған. Уң яғынан Ҡарағошто йылғаһы ағып килеп Алағуян йылғаһына ҡушыла, ары китһәң, Кесе Нөгөш буйына барып сығырға була.

Мөжәүер олатай бәһлеүән кәүҙәле, киң яурынлы булған. Атҡа һыбай менһә, аяҡтары ергә тейә яҙып торған. Бик шуҡ, батыр йөрәкле, мут ҡарт булған ул. Бик йыш ҡына Әүжәнгә алыш-биреш итергә йөрөгән. Юлда йөрөгәндә ҡаршыһына урыҫтар осраһа, аттарын көрткә йыға төртөп, санаһын юлдан ситкә һелтәп киткән саҡтары күп булған. Бер мәл быны урыҫтар юлда аңдып тороп туҡмап та ҡайтарған. Бик оҙаҡ ҡына тора алмай ятты, тип һөйләй торғайны өләсәй.

Мутлыҡтары ла күп булған олатайҙың. Йәйләүҙән китеп бер аҙ юғалып тора ла, арбаһына йәш ҡатын ултыртып ҡайта торғайны, тип һөйләй ине әсәйем. Алып ҡайтып бер аҙна тирәһе тота ла, өләсәйҙәргә ымлап ҡына, быныһын ҡайтарығыҙ инде, ти башлай икән олатай. Шулай ҙа береһен дә буш ҡайтарып ебәрмәгән. Бер мәл Мишәрҙән Ҡанифа исемле ҡатынды ултыртып алып ҡайтҡан. Бер аҙна үткәс, бер һыйыр биреп, Сафия өләсәй күндән ситек тегеп биреп, Ғүмәр бабай алып барып ҡалдырып килгән. Ҡыҙыҡтары күп булған уның. Колхозлашыу осоро башланғас, малдарын колхозға алалар бит инде. Ғүмәр бабай ҡыуана-ҡыуана ҡыуып алып китә торғайны, ти ине әсәйем. Күп малды ҡарауы еңелдән булмағандыр инде, күрәһең. Шунан сират ҡорттарына еткән бының. Ни әмәл менәндер инде был, эргә-тирәһендәге ҡорттарын, ай, осоп китте, ти ҙә осороп ебәрә икән. Хәйләкәр ҡарт белгән, ҡорттары барыбер солоғона ҡуна бит инде.

Зәки Вәлиди ҙә һуғылып йөрөгән олатайға. Ул килер булһа, барыһын да төпкө бүлмәгә индереп, урталағы ишекте бикләп ҡуя торған булған. Таңға ҡәҙәр ҡымыҙ эсеп, мөңгөр-мөңгөр һөйләшеп сыға торған булғандар.

Өләсәйҙәр, ҡарамаҡсы булып, бүлмә араһындағы мүкте төртөп төшөрһә, йәһәт кенә кире тығып ҡуйғандар. Тимәк, Мөжәүер олатайҙы Зәки Вәлидиҙең теләктәше, рухташы, фекерҙәше булған, тип әйтергә урын бар һымаҡ. Әле Мөжәүер олатайҙың ейән-ейәнсәрҙәре Яңы Мөсәттә, Әбделмәмбәттә, Иҫке Монасипта, Ғәлиәкбәрҙә йәшәйҙәр.

Алағуян буйы кисеү-кисеү,
Суҡраҡлыһы уның киң ялан.
Кисеүҙәрҙә туктап ялдар иткән,
Ат эсергән Зәки уҙаман.

Алағуян буйы кисеү-кисеү,
Кисеүҙәре тулы селбәрә.
Үҙ илкәйҙәрендә тәҡәт тапмай,
Зәки киткән сит-ят илдәргә.

Алағуян буйлап бер үтәйем,
Кисеүҙәрен мин дә кисәйем.
Сылтыр шишмәләрҙән услап алып
Зәки эскән һыуҙы эсәйем. [1]

*Тулыбаев Мөжәүер Хөсәйен улы 1902 йылда Яңы Собханғолда (Янһарыла) тыуған.

[1] Дамир Ғүмәров яҙмаларынан, Яңы Мөсәт ауылы.

Зәки Вәлидиҙең үҫмер сағы Бөрйән районы Алағуянбашы
һәм Ҡарағасйорт йәйләүҙәрендә:

Аҡбейеккәй тауҙы Тәңре биргән,
Аҡ тирмәләр ҡороп йәйлә тип,
Үрешендән уйнап ҡолон килә,

Ҡороҡһоҙ уҡ елгә бәйлә тип.

Көҙәй ауылы халҡы сығарған йырҙан өҙөк.

*Ғалим үҙенең бала һәм үсмер саҡтарын ҙур йылылыҡ менән иҫкә ала һәм былай тип яҙа: «Мин үҙемдең тыуған Көҙән, **Ғәлиәкбәр**, **Алағуянбашы** һәм **Аҡбейек** йәйләүҙәрен бик яраттым”.*

Ярайһы уҡ ҙур майҙанға таралған яҡын һәм алыҫ туғандары менән осрашыу өсөн алыҫ араны һыбай үтеү Әхмәтзәки өсөн ҡыйынлыҡ тыуҙырмай. Ғалим былай тип хәтерләй: «Тау һәм йәйләүҙәрҙә ябай тормош кисереүебеҙ, тарихи риүәйәттәр, уларҙың халыҡ күңелендә әле лә тере булған шаңдауы бала саҡтан минең аңыма шул тиклем ныҡ һеңде, һуңынан, азатлыҡ өсөн көрәш барышында улар миңә иң киҫкен хәл иткес эштәргә тотоноғға ярҙам итте, тюркология һәм исламды өйрәнеү фәндәренең бөгөнгөһө һәм киләсәге тураһында иң ҡыйыу пландар төҙөргә илһамландырҙы. Ошонан минең яҙмышым бөгөн дә халҡымдың күңелендә тере булған тарихи иҫтәлектәр дауамы һәм һөҙөмтәһе буларак ҡабул ителергә тейешлеге аңлашыла»- тип “Хәтер” китабында яҙып ҡалдырған.

Әхмәт Зәкиҙең атаһының йылҡылары яҙын ата-бабаларыбыҙ заманынан бирле йәйләгән ***Аҡбейек*** йәйләүҙәренә күтөүсеһеҙ ҙә барыуы, Көҙәйҙәрҙең дә йәйен эҫе көндәрҙә йылҡыларын ҡыуып Аҡбейеккә китеү ғәҙәттәрен миңә һөйләй торғайнылар һәм шул дәүерҙән йәшәп килгән йырҙарҙы йырлап ишеттерерҙәр ине. Был йәйләү Көҙән ауылынан йөҙ саҡрым тирәһе алыҫлыҡта. Уларҙың ата-бабалары береһе икенсеһенән бик алыҫ булған йәйләү һәм ҡышлауҙар араһында күсеп йәшәр булғандар.

Иртә яҙ менән мәҙрәсәнән ауылға мал ҡарарға ҡайта инем. Сөнки әҙерләнгән бесән март баштарында бөтә, йыла ағасының ботаҡтарын урмандан ҡырҡып алып ҡайтып, малға ашата торғайныҡ. Ҡар ирегәнгә тиклем үк, малды ҡарҙан асылған ерҙәргә ҡыуып килтереп, утлата инек. Үҙебеҙ ҙә яңы асылған ерҙәрҙә сыҡҡан һарына һәм ҡайһы бер башҡа тамырҙарҙы йыйып, бешереп ашай торғайныҡ. Тәбиғәт ҡосағында мал көтөп яңғыҙ йөрөүҙе мәҙрәсәлә булыуға ҡарағанда өҫтөнөрәк күрә инем.был заман йылҡыларыбыҙҙы (дүрт ҡырағай өйөрҙән тора), күп булыу сәбәпле, йәйләүҙә тота торғайныҡ. Ерҙәребеҙ һәм көтөүлектәребеҙ рус хөкүмәте тарафынан ҡаҙнаға тартып алынғанлыҡтан, беҙҙекеләр йәйләү тормошон күптәре ташлағайны. Малдарыбыҙ йәйләү тормошонан әле булһа ваз кисмәгән. Улар апрель баштарында уҡ беҙҙән рөхсәт – фәлән һорап тормаҫтан, ***Мәсем*** һәм ***Аҡбейек*** йәйләүҙәренә китә һәм унда көҙгә тиклем ҡала торғайны. Иҫке йәйләүҙәребеҙ Ибраһим Ҡасҡынбайҙарҙың, йәғни Алағуян тигән (беҙҙең Яңы Мөсәт ауылы) ауылының ере ине.

Был эштәр бөткәс, бесән ваҡыты еткәнгә тиклем, бәләкәй Зәки йәнә мал артынан Аҡбейек тарафтарына йәйләүгә китеп, малдарҙы ҡарап, тоҙ биреп, ҡатындар әҙерләгән ҡымыҙҙы эсеп, башҡа кешеләргә ҡымыҙ эсергә ҡунаҡҡа барып, йәйләүҙәге уйындарҙа ҡатнаша инем. Мал өсөн бесән сабыу минең өсөн зауыҡ булды.

Йылҡыбыҙҙы һыуыҡ төшкәнгә ҡәҙәр тауҙарҙа көткән саҡта ике йөҙ саҡрымдан кәм булмаған араны ат өҫтөндә үтә инек. Ибраһим менән икәүебеҙ ҡымыҙ мәжлестәрендә сығатайса (сығатай теле) ҡатмарлы шиғри әҫәрҙәр уҡыр инек, ҡымыҙ башҡа сыҡһа, халыҡ йырҙарына күсә торғайныҡ.

Ҡарағас йорт йәйләүендә Ҡасҡынбайҙар ат өҫтөндә сабып килешләй ерҙә ятҡан ҡамсыны эләктереү уйынын уйнай торғайны. Таһылы етмәгәндәргә ныҡ итеп ҡамсы һуғалар, уларҙы һуғылмаҫ өсөн ҡаса, икенселәре һыбай ҡыуалап китә, етә алмаһа, ҡамсы үҙҙәренә эләгә.

Йәштәр араһында егет менән ҡыҙ һыбай ҡыуышып уйнай торғайны, ҡууып етә алмаған егеткә ҡыҙҙан ҡамсы тәтеүе, ҡыуып еткәне ҡыҙҙы үбергә хаҡлы булыуы – беҙҙән алда йәшәгән быуындарҙан ҡалған ғәҙәт. Ибраһимға әкрәбә тейеш Өрҡиә исемле бер ҡыҙ тап шундай ҡыйыу ҡыҙҙыар иҫәбенән ине. Ибраһимдың Аҡ килен тип йөрөтөлггән ҡатыны был ярыштарҙа тамашасы буларак ҡатнаша торғайны. Зәки һуңынан ғына быны айышына төшөнә. Ярыштар ваҡытында ҡайсаҡ Өрҡиәне ҡыуып етеп беләгенән тотар ҙа, әммә үпмәй инем, сөнки беҙҙең нәҫелебеҙҙә ҡыҙҙы кеше күҙе алдында үбеү ғәҙәте булманы. Тамаша итеп тороусы өлкәндәр,

беҙ үбер инек, һин дә үп, тип көлөшөрҙәр, мине шаяртырҙар ине. Ҡайһы ваҡыт Өрҡиә, мине ҡыуып етеп, атты ҡамсылай торғайны. Ул саҡ Аҡ килен, “һыҙыр шул татарҙы”, йәғни “ҡамсы менән арҡаһындағы тиреһен һыҙыра һуҡ шул татарҙың”, тип ҡысҡырыр ине. Сөнки беҙ татарҙар өсөн башҡорт, ә бөрйәндәр өсөн татар инек. Бөрйәндәрҙә иһә урыны менән боронғо ғәҙәттәр оҙаҡ йәшәп килде.

Ҡасҡынбайҙарҙың ғаиләһендә ҡымыҙҙың иң яҡшыһы эселер, көҙөн иһә ***Алагуян йылғаһы*** Ағиҙелгә ҡойған урында ыҙма тиелгән ҡышлауға күсенгәс, эсе бал эселер һәм бик күңелле бейеүҙәр ойошторолор ине. Намаҙҙы ҡалдырыу юҡ. Рамазанда ураҙа тотмаған кешене күҙ алдына килтереүе лә ҡыйын. Ибраһимдың егеттәр һымаҡ ҡыйыу әсәһе лә, ҡатыны ла, мулла ҡыҙҙары булғанлыҡтан, уҡый-яҙа белеләр ине.

Зәки Вәлиди ҡола атына атланып, ***Ҡарағас йәйләүенә***, Ибраһим Ҡасҡынбайҙарға килгән. Ибраһимға ни ҡәҙәр тәрән һөйөү менән бәйле булыуына берйылға һуҙылған айырылышыунан һуң аңлай. Юлда оҙаҡ ваҡыт Навоиҙың “Йөҙө фәрештәнеке кеүек булған һәм кешеләр араһында тине булмаған бер егет күңелемде әсир итте” мәғәнәһендә шиғырын иҫләп, яттан һөйләп барҙым, тип яҙа Зәки Вәлиди. ***Ғәлиәкбәр ауылы*** *менән* ***Яңы Мөсәт ауылы*** уртаһында урынлашҡан ***Ҡарағас йортона*** килгәс, Ибраһим, һарыҡ һуйып, дуҫтарыбыҙҙы саҡырҙы. Улар миңә йәштәш булһалар ҙа, барыһы ла өйләнгән, әммә кис ҡатындары янына ҡайтып китмәй, ошо бер йыл эсендә ниҙәр күреп, ниҙәр уҡыуым хаҡында хәбәрҙәрҙе тыңлайҙар ине. Тумыртҡа аулағанда, биләм ҡарағанда һыбайлап тауҙарҙа йөрөп, төрлө йәйләүҙәргә китеп ҡымыҙ эсеп, ваҡытыбыҙҙы бик күңелле үткәрҙек. ***Нөгөш йылғаһы***нда сыраҡ яҡтыһында һалдау менән төндә балыҡ сәнскән саҡта ныҡ өшөнөм. Үпкәгә һыуыҡ тейеп ҡуймаһын тип ҡурҡтым, йәйләүҙе ташлап, арбаға яҫтыҡтар өҫтөнә ятып ауылға ҡайттым. Бер айға тиклем ауырып яттым. Ауырыу ятҡан килеш, китап күп уҡыным. Күҙемә көс төшөрөү сәбәпле күрәш булып ҡалдым. Һуңыраҡ та урманға ҡош ауларға барып, алыҫтан насар күреүемә тамам ышандым, тип яҙған ***Зәки Вәлиди*** үҙ хәтирәләрендә.

Дамир Аллабирҙин әҙерләне.

Иҫке Собханғол ауылы менән Яңы Мөсәт ауылы араһындағы ер-һыу атамалары (Тикшер)

Биләп тауы. Белорет районы Иҫке собханғол оло юлынан районға төшкән бейек булмаған тауҙы биләп, тиҙәр. Шуға исеме Биләп тауы.

Электросеть. Иҫке собханғол ауылын сығыу менән ул яҡлап Алағуян йылғаһы (оҙонлоғо 35 саҡырым) уң яры яҡлап электростанция урыны биләп тора. Шуға ла туҡталыш ҡаршыһын Электросеть, тип ебәрәләр.

Туңмаған кисеү. Иҫке Собханғол ауылынан төньяҡҡа Алағуян йылғаһы һуҙыла. Тәүге кисеүҙе шулай атайҙар. Леспромхоз хеҙмәткәрҙәренең күпселеге Яңы Мөсәт ауыл кешеләре булды. Шул осорҙа ағастан күпер нығыталар. Ә 1994 йылдарҙа Ғәлиәкбәр Иҫке Собханғол ауылы араһында юл төҙөлә башлау менән күпер бетондан нығытылып эшләнелә. Әле лә халыҡҡа хеҙмәт итә. Күпер аҫтындағы һыу туңмай аға ла аға.

Бәхет шишмәһе. Был изге шишмә Бөрйән халҡы яратҡан урынға әйләнде. Иҫке Соханғолға алыҫта түгел, ни бары Яңы Мөсәткә айырылған юлдан 500 метр ғына. Шишмә һыуы таҙа, саф сылтырап ағып ята. Күперен яҙ йылға ағымы алып китә. Йылдан йылы күперен матур семәрләп эшләп ҡуялар. Иҫке Собханғол халҡы бында машиналары менән һыуға киләләр. Кесаҙнан – ял көндәренәсә йәштәр ЗАГС- тан һуң ошо шишмәгә килә, ни тигәндә лә бәхет теләргә генә ҡала.

Һабантуй яланы. Әлеге һынап киткән Бәхет шишмәһенән һуң ул яҡлап бәләкәй генә ике йылға араһында иркен, киң ҙур ялан күренә. Ошо урында яҙ сәсеүҙән һуң һайын Бөрйән район һабантуй ойошторола торғайны. Районға газ үткәс, һабантуй Баҙал биҫтәһе аръяғындағы Арғыҙма яланына күсерелгән.

Ишдәүләт (Ябаҡ) ауылы



Баймаҡ районының Дубин ауылы һәм Баймаҡта алтын приискылары асылып урыҫ байҙары ундағы башҡорт халҡын бушлай көсләп, ҡурҡытып прискаларҙа бушлай эшләргә ҡушалар. Баймаҡ һәм Бөрйән башҡорттары Бөрйән ырыуынан бит инде. Дубин һәм Баймаҡ алтын приискыларынан ҡасып Бөрйән яҡтарына килергә мәжбүр булалар. Бына шул ҡасып килгән башҡорттарҙың береһе Ябаҡ исемле кеше Ағиҙел йылғаһының уң яҡ ярында, хәҙерге Ябаҡ ауылы урынына килеп тәү башлап урынлаша. Уның артынан башҡалар килеп ауыл барлыҡҡа килә. Ауылдың исеме лә тәү башлап килеп урынлашҡан Ябаҡ исемле кешенең исеме менән йөрөтөлә башлай. Беҙҙең шәжәрә буйынса минең иң тәүге олатай Ябаҡ исеме менән башланып китә. Уның схемаһын күрһәтеп үтәм. Ябаҡ - Ишбай - Ишмурза - Аҫылбай- Маһиян - Сәхиулла - Исмәғил .

Ишмурза Ишбаев 1812 йылдағы Ватан һуғышында ҡатнашҡан яугир. Ул үҙе аты һәм ҡоралдары менән һуғышҡа барып Францияның баш ҡалаһы Парижды яулай ҙа, иҫән-һау тыуған ауылына әйләнеп ҡайта. Һуғышта күрһәткән батырлыҡтары өсөн ике көмөш миҙал менән наградланған була. Ишмурза олатайҙың биш малайҙары булған, шуларҙың иң бәләкәйе Аҫылбай исемле.

Ябаҡ ауылы ике урамдан тора ине (мин иҫ белгән йылдарҙа). Оло урам сана ҡолай тауы яғында, бәләкәй урам Иҙел яғында. Бөтә ауылда 32 өй бар ине.

Ябаҡ ауылынан Бөйөк Ватан һуғышында 24 кеше ҡатнаша, шуларҙың 10 кеше һуғышта еңеү яулап ҡайталар.14 кеше һуғышта үлеп ҡала һәм хәбәрһеҙ юғалалар.

Ябаҡ ауылы эргәһендәге ер-һыу атамалары

Зәңгәртау. Санағолай тауының Ишдәүләт ауылына ҡараған көньяҡ һырты Зәңгәртау тип атала. Ул эре-эре зәңгәр төҫлө таштарҙан торған. Әлеге ваҡытта ул һырт транспорт юлы эшләү өсөн шартлатылып танымаҫлыҡ хәлгә килгән.

Һалауат тауы. Күсеү уйынан өҫкә күтәрелһәң “Һалауат тауы” күренә. Яңыса уны “Курилка” тип тә йөрөтәләр. Иҫке аңлатмаһы нимәне аңлатҡандыр, ә бына яңы атамаһы шунан ғибәрәт: кешеләр оҙон үҙәктән тауға менеп еткәс, шул тау башында ултырып, тәмәке көйрәтеп, ял итер булғандар. Ул тау башынан уңға боролһаң, Әтек ауылына юл ята.

Санағолай тауы. Санағолай тауы ҡасаба тапҡырында, Ағиҙелдең икенсе яҡ ярында урынлашҡан. Ул тауҙы хәҙер Аэропорт тауы тип тә йөрөтәләр, сөнки тауҙың башында ысынлап та аэропорт урынлашҡан. Һуғыш йылдарында ошо тау буйлап Һатыбал тигән малай үгеҙ менән утын ташыған саҡта, утын санаһы менән шул тауҙан ауа. Һатыбал үҙе ныҡ имгәнә – аяҡтары һына, тубығы сыға. Шунан башлап был тауҙы Санағолай тип йөрөтәләр. Һатыбал бабай Күлбаев әле иҫән. Ул Сибай ҡалаһында йәшәй. Ғүмер буйы уҡытыусы булып эшләгән, хәҙер хаҡлы ялда. [2]

Һандыҡташ. Күсеү уйының һул яғынан бейек кенә тау күтәрелә. Уның башында ҙур-ҙур һандыҡҡа оҡшаған өс таш ята. Иҙелдән ағып барғанда ла күренеп тора ул. Шул урынды “Һандыҡташ” тип йөрөтәләр.

Ер шыуған. Иҙелдең боролоп Ишдәүләт ауылына йүнәлгән ерендә “Ершыуған” тип йөрөтөлгән ҡая-таш бар. Ҡасандыр бик борон тауҙың был тапҡырында ысынлап та ер (ҡая таш) шыуған булған. Әле лә был урынды танып була.

Ҡапҡаташ (Три брата). Ағиҙел йылғаһының ҡасабаны үтеп, Ябаҡ ауылына ыңғайлаған ерендә ике ҙур һыу ташы ята. Ҡапҡаташ тип йөрөткәндәр уны, сөнки ул таштар һыу эсендә ҡапҡа яһап яталар. Бик күптәрҙең башына еткән был таштар. Элек, йөктәрҙе һал менән ағыҙып ташыған саҡта, һалсыларҙың да тик шул ҡапҡаташ аша үтеп китә белгәндәрен генә һайлап алыр булғандар, сөнки таштар һыу өҫтөнән күренеп тормай, килгән һалдарҙы көслө ағым түңкәрә лә һала икән. Ошо быуат башында Әүжәндән тимер рудаһы тейәп килгән һал шунда һәләкәткә осрай. Һалды ҡыуған 3 бер туған егет шунда һәләк була. Шунан был тапҡырҙы ҡыуғынсылар русса “Трибрат” тип йөрөтә башлайҙар. “Ҡапҡаташ” тигән атамаһы хәҙер ололар хәтерендә генә тороп ҡалған.

Күсеү уйы. Кисеүҙе үтеп сығып, ҡасаба яғынан өҫкәрәк тауға күтәрелгән ерҙәге үҙәк Күсеү уйы тип атала. Ябаҡ (Ишдәүләт) ауылы кешеләре йәйләүгә ошо юлдан күсер булғандар. Шунан тороп ҡалған да инде был атама.

Һәлимә үҙәге. Трибраттан түбәнерәк бер үҙәк бар. Ул үҙәкте “Һәлимә үҙәге” тип йөрөтәләр. Борондан ҡалған атама ул. Һәлимә (Хәлимә) тигән кеше бар ваҡытын шунда йөрөп үткәргән була. Шуға был үҙәккә “Һәлимә үҙәге” тигән исем бирелгән.

Таштуғай. Ағиҙел аша ятҡан ҡаршы туғай Таштуғай тип атала. Йыл һайын Иҙел ташҡын һыуы менән был туғайға таштар алып килеп тултыра. Ысынлап та, Таштуғай эреле-ваҡлы таштарҙан тора.

[1] Ишбаев Исмәғил Сәхиулла улы яҙмаларынан. Был яҙмала бер ниндәй ҙә архив материалдары ҡулланылманы.

[2] Әнисә Илһаметдин ҡыҙы Хәсәнова Оморҙаҡ Күлбаевтан 1992 йыл яҙып алған

Тимер ауыл биләмәһендәге ер-һыу атамалары

Тимер ауылы

Тимер – Бөрйән районының иң боронғо ауылдарының береһе – 1786-1790 йылдар араһында барлыкка килә, шулай уҡ 1834-1850 йылдарҙа Аралбай, Байғазы, Бикташ ауылына, Көлөбә йәйләүҙәренә, Боһондобаш утарҙарына 1834 йыл үҙҙәренең аҫаба ерҙәрен һаҡлап ҡалыу маҡсатында әүелдерелә, статус ала.

Тимер ауылы ҡыпсаҡ ырыуының ҡарағай тармағына ҡарай. Ауыл йырҙарҙа данланған Ағиҙел буйында урынлашҡан. Боронораҡ уның ерҙәре бик киң булған. Кесе һәм Оло Нөгөш, Ағиҙел, Үҙән, Һәүәнәк, Боһондо йылғалары буйында йәйҙәрен йәйләп, ҡыштарын ҡышлаған. Тимер ауылының урынлашҡан ере, тәбиғәте бик матур, хозур. Уның Бейек-бейек тауҙары, ҡаялары, киң матур сәскәле туғайҙары һәр кемде үҙенә тарта, арбай.

Ҡарағай-ҡыпсаҡ волосына ҡараған Тимер ауылын хәҙерге Әбйәлил районынан күсеп ултырғандар. Республикабыҙ Үҙәк Хөкүмәт тарихи архивында 1816 йылда ауылдың кешеләре тураһындағы тулы мәғлүмәттә рәүзидә (урыҫса ревизская сказка) Архив (231, 138-се биттәр) йорт йылда Мораҙым Байғусҡаров, Ишҡол Ҡалҡаманов һәм уның улы Зиганша Хәлил ауылынан барщина хеҙмәтенә ебәрелә, 1815 йыл Кульчукбай Һөйөндөкөв ғаиләһе өҫтәлә. Улар нәҫеле 1834 йыл Бикташ ауылына күсә, әлеге ваҡытта Кульчиковтар Исламбайҙа йәшәйҙәр. Һығымтала, ҡарағай-ҡыпсаҡ волосына ҡараған ауылдар Әбйәлил районынан күсеп, 11-се һәм 12-се йортто тәшкил иткән.

Ерҙәрҙе ҡаҙна, помещиктар һәм завод хужалары тартып ала һәм көтөүлектәр бик ныҡ кәмей. Башҡорттарға йәйләүгә күсеүҙе лә тыялар. Администрация хатта йәйләү урындарын ағыулауға тиклем барып етә.

Теләүғол Ялчин һуңынан Ҡунаҡбай Ҡарабаев йорт старшиналары, зәүрәт-есаул Ғайса Тимеров, Иҙелбай Сүрәбаев, Есаул Аралбай Мөхәмәтов, Өмөтҡол Ишмөхәмәтов, сотник (йорт йөҙ башы) Ишмөхәмәт Буранғолов, Байғаҙы Ҡунаҡбаевтар берҙәм, яҡшы эш итеү, аҫаба ерҙәрҙе һаҡлау ниәтендә, тимерҙәрҙең бер өлөшөн утарҙарға күсереп, ауыл статусын алыуға өлгәшкәндәр.

Ауылда Ҡаһарман һәм Миңлебай Сирбаевтар, Һатлыҡ Күбәков 1806-1807 йылдарҙағы һуғышта, Мырҙағол Өмөтҡужин, Юлдыбай Түләбаев, Аҡназар Иҫәнгилдин Парижды алыуҙа ҡатнашып, миҙал алған, ә Һағынбай Ҡурамшин, Күсәрбай Ҡотлогилдин, Ишбирҙе Ҡыуандоҡов, Баяс Күлсәрин, Нөғмән Һикһәнбаев 1828 – 1829 йылдарҙағы рус-төрөк һуғышында ҡатнаша.

1812 йылғы Ватан һуғышында үрәтник Дәүләтҡол Ҡулаҡаев, Динмөхәмәт Бикташев, икешәр көмөш миҙал менән бүләкләнгән, рядовой Тавлин, Истан Ишмөхәмәтов 1806-1807 йылдарҙа Пруссияла һәм Польшала французға ҡаршы һуғыша. Динмөхәмәт Бикташевтың улдары Рәхим (1817 йылғы), Сөләймән (1831 йылғы), Ғилман (1833 йылғы), Бирғәле (1835 йылғы), Мөхәмәтхәниф (1839 йылғы), Бикташ Тойғоновтоң улы Юлмөхәмәт, уның улы Әбүсуфийән, Күжәхмәттең улы Ирғәле (1843 йылғы), Хажиәхмәттең улы Мөхәмәтғәли.

Тимер ауылы шәжәрәһенән Тимерҙең улы олоһо Ишкилде (1748-1812 й.й.) уның улдары Ишбирҙе, Йәнбирҙе (1790 йылғылар – игеҙәктәр), Янабирҙе – 1787 йылғы, Баубәк (1804-1812 й.й.). Икенсе улы – зауряд-есаул Ғайса Тимеров – 1782 йылғы, кесе улы – Дәүләтбирҙе (1787-0841 й.й.). Дәүләтбирҙенең улы Аллабирҙе – 1806 йылғы, уның улдары Шахморат – 1836 йылғы (Шаҡым араһы беҙгә, ошо Шахморат олатайҙан килә),

Шаһиморат – 1838 йылғы, Ғәләүетдин – 1843 йылғы. Шаһимораттың улы Иблейәмин, уның улы Әхмәтзата, уның улы Әхмәтғәле, Әхмәтғәленең улы Марат һ.б. Иблейәминдең ҡыҙҙары Йәнбикә, Мәрйенбикә. Мәрйенбикәнең улы Сәлих Дәүләтбирҙин, Йәнбикәнең улы Салауат, Әбүзәр, ҡыҙы Сәмәрә.

Ғәләүетдиндең улдары Нәжметдин, Ғәләмитдин, Хажнитдин, Ибраһим, Зекериә, ҡыҙҙары Фәхерниса, Фәрхениса. Хажнитдиндың (1893 йылғы) улы Зиннәт, Уның улы (автор Д.З.Аллабирҙин) һ.б. Шулай итеп, Тимер олатайҙан Ишкилдин, Дәүләтбирҙин, Аллабирҙин, Йәнбирҙин, Иҫәнбирҙин, Шахморатовтар һ.б. таралған.

Тимер халҡының аралары:

Шаҡым – Тимер ҡарттың заттары булған;

Һәйетбайҙар – Бикмөхәмәтовтар, Арыҫланғужиндар, Балапановтар (ҡыш өҫтөнән тары сәскәнгә әйткәндәр, Һәйетҡол ҡарттан ҡалған);

Ҡышыҡ – Алтынбаев, Күҫәпҡолов, Аҡназаровтар (улар бергә-бергә ҡушылып ярҙам итешеп йәшәгәндәр);

Бәзмән – Мырҙағоловтарға әйткәндәр (һәр нәмәне, әйберҙе үлсәгәндән килеп сыҡҡан);

Бохмаштар – Яубаҫаров, Үлмәҫбаев, Ҡолдобаевтар (йыуаш, әҙ һөйләп, боҫоңҡорап йәшәгәндәр), ер-һыу атамаһы Бохмаш яғынан күсеп килгәндәр, Бохмаш туғайы ла бар;

Һармаҡ – Исхаков, Дауытовтар (тау төшкәндә аттың үҙенә тышау һалып төшкәндәр, ялан яғынан күрәһең күсеп килгәндәр);

Ҡоҙғон – Бәҙәмшиндар (Бәҙәмшиндарҙың өләсәһе Белорет ауылы Аҡбалсыҡ тигән ауылдан килен булып төшкән, ауылдың икенсе төрлө исеме Ҡоҙғон, ырыуы Ҡатай). Яуабы үҙе үк әйтеп тора. Улар һунарсылар, күрәһең. Бирғәле ағайға: “Ғүмереңдә нисә айыу алдығыҙ?” тигән һорауға ла 125 тип кенә яуап бирә;

Ишҡара – Алтыншин, Баймырҙин (үҙ яуабы үҙендәлер, моғайын);
Яманһары – Нәҙершин, Яманғолов (сей һары булғандарҙыр инде).

Ара, әлбиттә, туғандарҙы айырыу өсөн дә кәрәктер, сөнки әүәл атай исеме фамилияға күскән. Уларҙы ололар әйтеүҙәренән яҙып алынды, үпкәләмәҫтәр моғайын, был һүҙҙәргә өҫтәүҙәр ҙә барҙыр әле.

1834 йылда Тимер ауылында ир-ат заты 305, ә ҡатын-ҡыҙ заты 259, барыһы 664 кеше була. Был йылдар урыҫтар тарафынан башҡорт ерҙәрен талаусыларҙың көслөк, алдау, һатып алыу юлы менән эш итеүҙе дауам иткән. Янау, ҡурҡытыу юлы менән башҡорттарҙы ошо бөлдөргөс алыш – бирешкә күндергәндәр. “Артыҡ” биләгән ер майҙандарын тартып алдырмау маҡсатында, ерҙәрен һаҡлап Тимер халҡы ла урыҫтарҙың төбәкте колониялаштырыуға тырышыуы арҡаһында төрлө ауылдар – Аралбай, Бикташ – барлыҡҡа килтергән.

Тимерҙә 1850 йылда ир-ат затынан 162, ҡатын-ҡыҙ затынан 149 кеше, барыһы 311 кеше йәшәгән. Был йылдарҙа Байғаҙы ауылына 102 ир-ат, 85 ҡатын-ҡыҙ күсеп ауыл барлыҡҡа килтергән.

1859 йыл – 368, ә 1920 йылда – 453 кеше йәшәгән. Элекке утарҙың береһе – Аралбай ауылы есуал Аралбай Мөхәмәтовтың исемен йөрөткән. Ауылға 1834 йылда 20 йорт айырыла. Теләүғол Ялчин, Уның улдары, зәүрәт – есуал Иҙелбай Сураевтар – туғандары, Үҙәнбай Мөхәмәтдинов – улдары, Ғөбәйҙулла Айыҭҡолов, Аралбайҙың улдарынан Сәйфетдинов, Теләүбаев, Үҙәнбаев, Ҡондоҙбаевтар, йәмғеһе 100 кеше рәүиздә теркәлгән. Аралбайҙың атаһы Мөхәмәт Заһитов (1728 – 1816 й.й.) 88 кеше йәштә төп ауылда – Тимерҙә ерләнгән.

1920 йылға кеше һаны кәмей, сөнки 1-се бөтә донъя һуғышы, граждандар һуғышы, аслыҡ йылдары сәбәпле 33 өйҙә 162 кеше ҡала.

Аралбай Мөхәмәтовтарҙың шәжәрәһенән Сәйетбатал улдары Заһит улы Мөхәмәт, Мөхәмәттең улдары Сәйетбатал, Теләүғол, Аралбай, Үҙәнбай, Ҡондоҙбай. Сәйетбаталдың улы Ишдәүләт, Байморат, Мырҙабулат, Ишморат, Аралбайҙың улдары Шәмсетдин (27 йәштә 1850

йылда үлгән) улы Мутал, улдары Абрахман,Әбделйән, Әбделгәлим, ҡыҙҙары Шәмсисәмәрә, Шәсиямал, Хәбиямал. Аралбайҙың икенсе улы Хәйретдин – улы Ғәйнетдин (1844 йылғы), Зәйнетдин (1850 йылғы). Өсөнсө улы Мөхәмәтдин - улдары Әбделшәрифйән (1845 йылғы) , Әбделхәйер (1847 йылғы). Үҙәнбайҙың улы – Дәүләткилде улы Шамғол – улдары Ибраһим, Фазылетдин. Ҡондоҙбайҙың улы Дәүләтсура Ҡондоҙбаев – улдары Бүләкбай, Үлмәҫбай, Айытулла, Хисмәтулла һ.б., икенсе улы Шәрәфетдиндән – Исламбай, Хисаметдиндән – Ҡурбанбай һ.б..

Ауылда мәктәп, магазин, мәсеттә була. Ауыл 1975-1980 йылдарҙа тарҡала, алдағы йылдарҙа Мишәргә, Тимер ауылына, район үҙәгенә күсәләр.

1816 йылда Тимерҙә Байғаҙы Ҡунаҡбаевтың бер туғандары Әбделғазы, Бикмөхәмәт, Килмөхәмәт, уның улдары йәшәй. Байғаҙының улы Алмағол – улы Тәңребирҙе (1844 йылғы), Шаһимырҙан (1833-1839 й.й.), Шаһигәрәй (1834-1837 й.й.), икенсе улы Ишмырҙанан (1803 йылғы) Хөбитдин (1831 йылғы), Ғәйнетдин (1833 йылғы), Ҡаһарман, Ибраһим. Өсөнсө улы Шәрәфетдин улы Зәйнетдин (1835 йылғы), Баһауетдин (1831 йылғы), Мөхәмәтдин (1846 йылғы), Рысҡол (1842 йылғы). Бикмөхәмәт Ҡунаҡбаевтың улынан Килдеғолов, Ишҡолов, Исламғолов, Юнысов, Юлдыбаевтар. Килмөхәмәттән – Шамғоловтар һ. Б. тарала.

Тимерҙәр Оло Нөгөш йылғаһы буйында Бикташ ауылына 1834 йылда нигеҙ һалалар. Уны 76 йәшлек Бикташ Тойғонов нигеҙләй. Улдары Динмөхәмәт, Күжәхмәт, Хажиәхмәт тә шунда йәшәй. Ауылда 1834 йылда 117 кеше, 1859 йылда – 124, 1920 йылда 185 кеше, 1960 йылдарҙан һуң тарҡала башлаған.

Бикташ янында Ҡыҫыҡ, Көләбә, Ураһай, Ҡараһөбә утарҙары барлыҡҡа килә. Һуңғы йылдарҙа Мырҙағолов, Ибраһимов, Хәйбуллин, Кәримовтар йәшәй, һәм улар Исламбай ауылына күсеп ултыралар. Бикташтан Исламбай ауылына Кульчиков, Әҙелбаев, Үтәғоловтар, Брәтәк ауылына Хөсәйенов, Байморатов, Юлмөхәмәтов, Йәһүҙиндар һ.б. күсеп ултырғандар. Ғәлиәкбәр ауылына ла Байморатов, Үтәғолов, Һөйөндөкөв, Кульчиков, Ҡотлоғужин, Түрәбәков, Бикмөхәмәтов, Хөсәйенов, Ҡунаҡбаев, Килдеғолов, Тойғонов, Бикташевтар йәшәгән ир-ат затынан 59, ҡатын-ҡыҙ затынан 53 кеше иҫәпләнгән. Һуғыш йылдары Стәрлегә төп юлдар Бикташ аша булған.

Тимерҙәр Ағиҙел, Оло һәм Кесе Нөгөш һыуын һыулаған, йәйләүҙәр булдырған, мал көткән. Ауылдарҙа төп шөғөл – малсылыҡ булған. Игенселек өсөн уңайлы ерҙәр ҙә булмаған, һәм климат ҡаршылыҡтарынан иген аҙ сәселгән. Шуға күрә күбеһенсә ағас эше, күмер яндырыу, дегет ҡайнатыу, аусылыҡ, умартасылыҡ менән көн күрә.

Ер-һыу атамаһы ла Тимер кешеләренең исеменән ҡалған- Ҡалҡаман, Баймырҙа, Ҡалмаҡай, Үҙән, Баҡҡол, Бохмаш, Яңыл аралы, Ҡарағол, Лоҡман соҡоро, Йәнсалай ҡоҙоғо һ.б. [1].

Аралар атамалары

Биреләр араһы. Олатай ҡарт Бабсаҡ бей – Ҡыпсаҡ ырыуының батыры. Уның улы Күсәк бей. Күсәк бейҙән тыуған Тимер ҡарт булған. Тимер ҡарттан тыуған Ҡалҡаман, Ҡалҡамандан тыуған Түрмән ҡарт.

Бер ваҡыт Түрмән һунарға сығып китә. Бер тау төшкәс тә һыңар саңғы эҙе күрә. Артынан бара был, абайлап ҡарай. Был заттың аяғы икәү булып сыға, ә ул үҙе бире затынан икән. Бирене баҫтырып килеп етә, теге бире болан һуйып торған була. Ҡурҡышынан боландың яртыһын Түрмәнгә бүлеп бирә был.

Көн кисәйеп (кисләп китә). Ҡарағай ботағын яғалар ҙа былар ошонда кисләргә (йоҡларға) булалар. Түрмән ит бешереп ашай. Йоҡларға яталар. Бире тимер шеште утҡа һала. Бире

һорай: “Түрмән, һин ҡалайтып йоҡлайһың?”- ти. Түрмән әйтә: “Мин тыш- тыш итеп йоҡлайым, ә үҙең нисек йоҡлайһың?”-ти. Мин йоҡлағанда ауыҙымдан ут сәсрәп, осҡондар борҙап тора,”- тигән икән Бире.

Бире йоҡлап киткәс, Түрмән үҙенең урынына бер сөрөк киһкә (киҫкә) килтереп һала ла Биренең йоҡлауын күҙәтә. Бире һикереп тора ла:

- Түрмән ағай, “тыш” итә, тимер шешем “пыш” итә, - тип һамаҡлай-һамаҡлай, сөрөк киһкәне бешекләй. Шул саҡ Түрмән Бирене атып ебәрә. Ул яралана һәм тау тишегенә инеп китә. Түрмән ҡырҡ ҡосаҡ сыра әҙерләй ҙә унын артынан инә. Тау тишегендә өс ҡыҙы менән бер әбей ултыра икән. Әбей Түрмәндән: “Һин нишләп килдең, ниндәй һөнәрең бар?”- тип һораған. “Мин ауырыу кешеләрҙе йүнәлтәм,” – тигән Түрмән. Әбей Түрмәнгә: “Ат башындай алтын бирермен, минең ирем ауырый, шуны дауала” – тигән.

- “Миңә өс ҡыҙыныдың береһен бирһәң, шәбәйтәм,”- тигән Түрмән. Әбей риза булған. “Минең дауам килешер булһа, ул аҡырыр ҙа баҡырыр, ә һеҙ ҡамасаулап йөрөмәгеҙ,” – тигән Түрмән. Түрмән Бирене сәнселәп-бешкеләп үлтерә. “Ул талып йоҡлай, өс көнһөҙ ҡарамағыҙ,” ти ҙә был, ҡыҙҙарының береһен үҙе менән алып сығып китә.

Түрмән шул үҙе алып ҡайтҡан Бире ҡыҙы менән оҙаҡ ҡына ғүмер итә. Шул ҡатындан тығыҙ ул тыуа. Тимер ауылында йәшәгән кешеләр ана шул Бире нәсәбенән йәйелгәндәр. Шуға Тимерҙә йәшәүселәрҙе биреләр тип йөрөтәләр. [2]

Юламан. Ен – пәрейҙең артынан ҡыуа, саңғы менән йәнлекте бүлеп ултырған быныһы Юламанға: быныһы миңә, ти икән. Минең исемде ҡайҙан белә икән, аптырауға төшә. Йоҡлайҙар. Тимер шеште ҡыҙҙыра һала пәрей.. юламан түмәр һала. Юламан ағай беш – беш, ти һалып сәнсеп ебәрә. Йәшеренеп, күҙәтеп торған Юламан мылтығы менән атып ебәрә. Пәрей һыңар саңғыһын ала һалып ҡаса. Мәмерйәгә инә был. Артынан Юламан да юллана. Мәмерйә аҫҡа төшкәндән төшә бара, төпкә яҡынлаша: ни күҙе менән күрһен бер ҡатын бала бәүетә, эргәһендә ире бының. Күп тә уйлап тормай Юламан ирен үлтереп ҡатының алып ҡайта. Ҡатындың имсәге һалынып үк тора, ҡатын имсәген арҡаһына һалып ҡаса башлай. Шулай юламандар тимер заттарынан сыҡҡандар. Тимерҙән Мәндәғол ауылына күсә, унан Ямаш ауылына, һуңынан Ғәлиәкбәргә күсеп ултырғандар. [1]

Тау-таштар, ҡаялар

Тимер ауылы ерендә һәр таш тарих һөйләй. Тауҙар, таштар, ҡаялар-тыуған тәбиғәттең илаһи матурлығы ла. Ниндәй генә уй-кисерештәр тыуҙырмай кеше күңелендә ана шул тауҙарға менеп баҫыуҙары.

Окоп тауҙары. Граждандар һуғышы осоронда Тимер ауылында ла ҡаты алыштар була. Ауыл эргәһендә, Ағиҙел йылғаһы арьяғында, тау башында окоптар төҙөлгән булған. Баймырҙина Ғәлимә инәй һөйләүе буйынса, был окоптар ҡыҙылдарҙыҡы булған. 50-80-се йылдар осоронда был урындан бик күп патрондар, хатта винтовка - штыҡ табылған. Окоптар булған тауҙы халыҡ окоп тауҙары тип атай.

Аласыҡташ. Тимер ауылының үр яғында Ағиҙел йылғаһында бик ҙур яҫы таш бар. Ул йылға эсендә аласыҡтай булып ята. Йәй көндәрендә бала - сағалар ҙа, йәштәр ҙә, ололар ҙа шул тирәлә ял итәләр, һыу инәләр.

Сыбарайғыр. Ауыл халҡы йылҡысылыҡ менән шөғөлләнгәс бик күп ер-һыу атамалары ат исемдәрен йөрөтә. Ауыл эргәһендәге ҡаяны Сыбарайғыр йөрөтәләр. Оло кешеләр һөйләүенсә йәйге эҫе көндәрҙең береһендә бер кеше сыбар айғыры менән сабып килеп ошо ҡаянан осҡан тиҙәр. Сыбар айғыр осҡан ҡаяға уның исемен биргәндәр.

Һыйыр шыуған. 1925 йылда бер бейек тауҙан Баймырҙин Хажи тигән кешенең һыйыры ҡаянан шыуған. Шунан алып был тауҙы "Һыйыр шыуған" тип атайҙар.

Йәйен ташы. Баймырҙин Әҙеһәм балыҡсылыҡ менән шөғөлләнергә яратҡан. 1930 йылда бер ҙур таш эргәһенән йәйен тотҡан. Шул ташты хәҙер ҙә йәйен ташы тип атайҙар. 1938 йылда Баймырҙин Әҙеһәм ялған ошаҡ буйынса репрессияға эләгә һәм хәбәрһеҙ юғала.

Костёр тауы. 1950 йылдан алып был тауҙа уҡыусыларҙы пионерға алып костёр яҡҡандар. Сбор үткәргәндә төрлө ярыштар үткәргәндәр. 1992 йылда пионер ойошмаһы бөтөрөлгәс костёр яғыу туҡтатыла, ләкин атамаһы бөгөнгө көнгә тиклем тороп ҡала.

Ҡаһарман тауы. Тимер ауылына төшкән юлдың ике яғындағы тауҙарҙың - береһе Аҡтау, үргеһе Ҡаратау тип атала. Шул тауҙарҙың ҡайһы бер урындарының үҙ исеме бар. Аллабирҙин Ҡаһарман тракторист булып эшләгән сағында ирҙәр менән бәхәсләшеп Аҡтауға тракторы менән менгән. Ныҡ текә булғанлыҡтан алды менән менә алмаған (двигатель май ала алмай икән) һәм арты менән тауға менеп етеп кире төшкән. Аҡтауҙың шул ерен "Ҡаһарман тауы" тип әйтәләр. [1]

Үмәр тауы. Үр яҡта ла Ҡәҙерғолов Ғүмәр ағай тракторы менән үҙ тапҡырынан тау башындағы яланға эшкә тура сығып йөрөгән юл. Уныһын Үмәр тауы, ә мәсет тәңгәлендәгеһен Мәсет тауы тип йөрөтәләр. [1]

Ҡарағол, Ҡарағол ҡаяһы, Ҡарағол мәмерйәһе, Ҡарағол күпере. Тимер ҡарттың малы бик күп булған. Уның улы Ҡарағол Тимеровтын да мал көтөү урыны йәйләүе була. Ауылдың көньяғында ике саҡрым алыҫлыҡта иҙел арьяғында урынлашҡан туғай исеме. Тимер ҡарт мал көтөү уңайлыҡтарынан сығып йәйләүҙәр булдырған. Ағиҙел йылғаһын сыҡкан кисеүҙе Ҡарағол кисеүе, һул яклап ауылдан уҡ күренеп торған тигеҙ бейек ҡаяны Ҡарағол ҡаяһы, ундағы мәмерйәләрҙе лә Ҡарағол мәмерйәһе тип йөрөтәләр. Колхоз осоро мал күбәйеү сәбәпле бында ҡуралар, колхозсыларға йәшәр өйҙәр булдырылып ферма булдырылды. Аҫмалы күпер һалынды. [1]

Йылға-шишмәләр, ҡоҙоҡтар

Боһондо йылғаһы. Территорияла ҡаҙаҡ теленән ингән атамалар ҙа осрай. Мәҫәлән, Боһондо йылғаһы, Яугилде тауы, Ҡасуй (Ҡасҡын уяһы) кеүек топонимдар ҡаҙаҡ һәм башҡа халыҡтарҙың башҡорттар төйәгенә яһаған яу эҙемтәһе булып тороп ҡалғандар. "Боһондо" исемле йылға атамаһы ҡаҙаҡ телендәге "босу" һүҙе менән тоташа. Босу - "Покидать насиженное место", "Разбежаться" төшөнсәһен бирә. Баҫҡын – беженец (башҡортса "ҡасаҡ, ҡасҡын"). Яуҙан ҡасып барыусылар ике яғы ла ҡуйы әрәмәлектәр, тауҙар менән уратып алынған йылға буйына килеп урынлашалар. Ана шул яуҙан боһоп (боҫоп) ҡалған халыҡтар был йылғаға "Боһондо" исеме биргәндәр. Шул уҡ исем менән йөрөтөлгән тау ҙа, арҡа ла бар. Яугилде тауы, Ҡасуй (Ҡасҡындар уяһы), Боһондо йылғаһы Тимер ауылынан ике-өс саҡрым түбәнендә Ағиҙелгә ҡоя. Был атамалар бер тирәләге (бер-береһенә яҡын) ер-һыу исемдәре тороп ҡалыуы, һис шикһеҙ, ҡаҙаҡ яуы ваҡытынан тороп ҡалған булыуына ышаныс тыуҙыра. [3]

Йәнсалай ҡоҙоғо. Йәй көндәре бесәнселәр, ураҡсылар барыһы ла яланда эштә була. Арҡала (тау башында) бесән сабыуы иң ҙур ҡыйынлыҡтар тыуҙырған. Халыҡ тау башында йылға булмау сәбәпле, бәләкәй генә бысраҡ бер күлдән һыу алып йөрөгән. Был күлде "Яхъя күле" тип атағандар, аттар ҙа ошо күлдән һыу эсеп йөрөгән булған. 1963 йылда Ҡолдобаев Салахетдин

менән Баймырҙин Йәнғәле исемле кешеләр ҡоҙоҡ ҡаҙырға (Иҫке Монасип ауылы менән Тимер ауылы сигендә) булғандар. Бәхеткә күрәлер инде ҡоҙоҡтан һыу сыҡҡан, халыҡҡа оло шатлыҡ бүләк иткән. Аҙаҡ был ҡоҙоҡто Йәнсалай ҡоҙоғо тип йөрөтәләр.

Фәтхулла ҡоҙоғо. Фәтхулла исемле ҡарттың һыуһыҙ ерҙә сабынлығы бар. Сәй ҡайнатып эсеү һәм атын һуғарыу өсөн тирә-яғы әрәмә менән уратып алынған уйһыу урындан ҡоҙоҡ ҡаҙа. Яҙ көнө генә аҡҡан уйһыулыҡ үҙенең сабынының аҫтында ғына. Һыуға барыр өсөн 500 метр аҫҡараҡ Суҡраҡтыға төшөргә кәрәк. Үҙ сабынлығ янындағы һыу яҡында, ат эсереүгә уңайлыла. Был ҡоҙоҡто Фәтхулла ҡоҙоғо тип йөрөтәләр. Алтынбаев Фәтхулла бабай ғүмер буйы урман ҡарауылсыһы булды. Бөйөк Ватан һуғышында батырҙарса көрәшкән. Тәбиғәтте ҡыйырһытыуға юл ҡуйманы. [8]

Ялан-туғайҙар, сабынлыҡтар

Яҙҙауар һәм Кәмәше. Яҙ көндәре, апрель урталарында уҡ, ауыл халҡы малдары менән Ҡалҡаман мәмерйәһе аҫтындағы яҙлауға күсер булған. Ә яҙлау туғайына барыр өсөн Ағиҙел йылғаһын ике тапҡыр аша сығырға кәрәк. Яландың “Яҙҙауар” тигән исеме ошо ваҡыттан ҡалған. Ул яландан Һуң “Йүкәле туғай” килә. Ә “Йүкәле туғай” ҙан һуң ауылға табан тағы бер кисеү аша сығырға кәрәк. Был кисеүҙе “Кәмә сығышы” тип атағандар. Сөнки, йылғаның башҡа урындары ташҡын ваҡытында бик көслө аҡҡан, ә был урын тәрән, ләкин тоноҡ булған.

Яҙҙауар. Мал аҙығы наҡыҫ булыу сәбәпле борон-борондан башҡорттар малдарын иртә яҙлатырға алып барыр булғандар. Ҡайһы бер малдары ишле булған ғаиләләр апрель баштарында уҡ малдары менән Ҡалҡаман мәмерйәһе аҫтындағы туғайҙа Яҙҙауар туғайы тип , ә тауын Яҙҙауар тауы тип йөрөтәләр. Был туғайға йәй көндәре ауылдың үрге осонан Иҙелде ике тапҡыр кистереп һыу буйлап барып була. Ошо урынды иртәнән алып кискә тиклем ҡояш үҙенең нурҙары менән ҡойондора. Тау бите һәм туғай ҡарҙан тиҙ әрселә, үлән иртә ҡалҡа, малдар тиҙ туйына. Хәҙерге көндәрҙә лә ауыл халҡы йылҡы малдарын иртә яҙҙан шунда ебәрәләр.

Кәмәше. Яҙ көндәре Ағиҙел ярҙан-ярға таша. Ямғыр күп яуған осорҙа йәй һәм көҙ көндәре кисеүҙән Иҙел аша Йүкәле туғайға сығып булмай. Яҙғы сәсеү ваҡытында һәм бесән әҙерләү осоронда сабынлыҡтары Иҙел аръяғында йәки Үҙән буйында булған кешеләр һыу аръяғына тик кәмә менән сығырға мәжбүр булалар. Зыярат эргәһендәге ҡая төбөнән Йүкәлегә сыҡҡан урынды кәмә сығышы тигәндәр. Сөнки башҡа урындар ташҡын ваҡытында көслө аға. Ә был урын тәрән һәм тоноҡ. Кәмә сығышы – “Кәмәше” тип йөрөтөлә. [5]

Ҡыйрат.

Ҡалмаҡай яланы һәм йылғаһы. Беҙҙең яҡта йәшәүсе халыҡҡа дала яғында йәшәүсе ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ, монгол, ҡалмыҡ, үзбәк һәм башҡа ҡәбиләләрҙең һөжүме булып торған. Башҡорттар йәшәгән Көньяҡ Урал бай тәбиғәте менән борон-борондан күрше ҡәбиләләрҙең иғтибарынүҙенә йәлеп итеп тартып килгән. Тулы һыулы йылғалары, сәскәле киң туғайҙары һалҡын булмаған континенталь климаты мал көтөүсе ҡәбиләләрҙе ҡыҙыҡһындырған. Ҡалын урмандары, бейек тауҙары, тау үҙәндәре ҡыйыу һунарсыларҙы үҙенә саҡырған. Көньяҡ Уралда ситтән килеүсе ҡәбиләләр күп булған. Ваҡ ҡәбиләләр, башҡорттар менән аралашып, улар менән һуғышып киткәндәр, ә ҙурҙары башҡорт ҡәбиләләре менән оҙайлы һуғыштар алып барғандар. Ошо ваҡыттан башлап башҡорттар быуаттар буйына үҙ иленең азатлығы, тыныслығы өсөн көрәшеп килгәндәр. Улар ҡайһы ваҡытта урындағы халыҡтың мал – тыуарҙарын һәм ҡатын – ҡыҙҙарын ҡыуып алып киткәндәр.

Ҡайһы бер сапҡынсы ҡәбиләләрҙең исемдәрен урындағы ер-һыу атамаларына бирелгән. Тимер ҡарт үҙенә ерҙе теләгәнең алған. Бер осо Брәтәк Оло Нөгөш яғында булһа икенсе осо Иҫке Тарауыл яғында булған. Ауылдың урта өлөшөнән Иҙелде аша сығып, текә тауҙы менһәң,

Ҡалмаҡай яланы бар. Ул ерҙә башта ҡырҙан күсеп килгән ҡалмыҡтар йәшәгән. Тимер ҡарт ерҙе тартып алғас, икенсе яҡҡа күсеп китәләр. Ана шул ваҡыттан алып был яланды Ҡалмаҡай тип йөрөтәләр. Ҡалмаҡай исеме аҫтында йылға ла бар. [4]

Яңыл аралы һәм "Сыбарайғыр". Элек Тимер ҡарттың Яңылбикә исемле оҫта йырсы, бейеүсе бер килене булған. Яңылбикә төрлө ярыштарҙа, йыйындарҙа гел беренселекте алған. Бик көслө, ҡыйыу ҡатын ат ярыштарында ла ал бирмәгән. Бер ваҡыт яҙғы ташҡын ваҡытында, Яңылбикә үҙенең ярыштарҙа ал бирмәгән аты менән иҙел аша сығыуға бәхәсләшкән. "Әгәр ошо һыуҙы сыбар айғырым менән йөҙөп сыға алмаһам исемем Яңылбикә булмаһын!" – тип һыбай һыуға төшкән. Иҙел уртаһында ат һөрлөгөп, икеһе лә ағып киткән. Йәй көнө Иҙел буйындағы бер ауылда кәүҙәһен тапҡандар.

Шул аралды "Яңыл аралы" тип атай башлағандар. Тимер ауылы менән Янһары ауылдары – араһында, Иҙелдең уң яҡ ярында, "Темәк" тапҡырында урынлашҡан был арал. Элегерәк Тимер ауылы кешеләре боҙҙан ат менән барғанда шул арал эргәһенән үтеп йөрөгәндәр. Ат һөрлөгөп ағып киткән кисеүҙе әле лә ***"Сыбарайғыр"*** тип йөрөтәләр. "Сыбар айғыр" ауылдың көньяғында урынлашҡан.

Ырым сабыны. Ырым сабыны тигән ер тәүҙә Исхаков Рамаҙан бабайҙың таҙа, матур, ҡуйы ағаслы сабынлығы булған. Ауылға ҡайтып килгән кешеләр шунда ял итеп ала торған булғандар. Һуңынан ул ерҙе, колхоз яландарын киңәйтеү маҡсатында, ағастарын ҡырҡып ҡола яланға әйләндергәндәр. Халыҡ телендә ул ер әле лә "Ырым сабыны" тип йөрөтөлә. (Рамаҙан исемен ҡыҫҡартып Ырым тип әйтәләр). Тәрәнуйға төшкән ерҙә лә Әсмә инәй юлдың ике яғында ла бесән әҙерләгән. Ул ерзе Әсмә ҡабағы тиҙәр.

Сәхи сабыны. Яубаҫаров Сәхи Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан. Хәрби батырлыҡтары өсөн бик күп миҙалдарға лайыҡ булған. Тормош иптәше Бәҙеғол инәй менән 5 бала тәрбиәләп үҫтергәндәр. Бәҙеғол инәйҙең ата-әсәһе репрессиға эләгеп, Себергә ебәреләләр, унда шахтала эшләп, һуғыш бөткәс кенә тыуған яҡтарына әйләнеп ҡайталар. Сәхи бабай ауылдан алыҫ булмаған ерҙә йәй һайын бесән сапҡан. Шул тәбиғәттең матур урынын Сәхи сабыны тип атайҙар. Сәхи Яубаҫаров 1963 йылда, һуғыштан алған яралары төҙәлмәү сәбәпле, үлеп ҡала.

Айыуатҡан. Үҙән йылғаһы буйындағы иң ҙур яландарҙың береһен Айыуатҡан тип атайҙар. XX быуат башында бер кешене старшина итеп ҡуялар, ләкин ул быға риза булмай. Үҙән буйына китеп шунда йәшәгән. Һунарсылыҡ менән шөғөлләнгән. Айыу атҡан яланға Айыуатҡан тип исем бирәләр.

Исмәғил яланы. Тимер ауылы халҡы бесәнгә, йәйләүгә бөтә ғаиләһе менән йөрөгән. Үҙән буйында бесән ваҡытында бер ҡатындың бәпәйе тыуа. Уға Исмәғил исем бирәләр. Яланға ла халыҡ был исемде ҡуша.

Тарихи атамалар, тарихи урындар

Бохмаш утары. Бохмаштар (ара) – Бохмаш яланында йәйләгәндәр, оҙаҡ үҙ ерҙәрен үҙ-ара килешеп һарт ауылына ҡалдырғандар. Утарҙың нигеҙ урындары әле лә беленә. Йәнһөйәр ҡарттың улы Яубаҫар (1764 йылғы), Үлмәҫбай (Яубаҫаров,Үлмәҫбаевтар нәҫеле), ике туғаны Кинйәғол Тимеров, Байғужа Теләүбаев, Бикташ Тойғоновтың аралары төйәкләгән утар булған. [1]

Иҫке Аралбай (Күсмәҫ төбө). Тимер ауылынан 2 саҡырым түбән көньяҡта Боһондо йылғаһы тамағына Аралбаевтар күсенен ултырғандар. Улар ҙа ҙур ғына ауыл барлыҡҡа килтерә. Күсмәҫ ултырышындағы өй урындары әле лә беленә. Ауыл булғанлығын тиреҫлектәр ҙә дәлилдәй. Был

турала тау битләүендәге утарҙың үҙ зыяраты ла тарихи ваҡиғаны һөйләй. Үкенескә ҡаршы, заманында бик ҙур булған рәүәхтәр йорто, уның ҡалҡып сығып торған ғәрәп телендә яҙылған таштары ергә һеңде, мал һуҡмағына әйләнде, юҡҡа сыҡты. Ер-һыу атамаларында ла сағылыш тапҡан был изге урын халыҡ хәтерендә Күсмәҫ төбө булып ҡалды. Боһондо йылғаһынын тамағы ла тап ошо ерҙә урынлашҡан. Утар халҡы яңы утарға Боһондо башына күскәнгә шулай Күсмәҫ төбө тип аталалыр. [1].

1816 йылда Боһондо тамағы - Иҫке Аралбай утарында Мөхәмәт Заһитов (88 йәш), ҡатыны Илбикә (80 йәш) йәшәй. Мөхәмәт Заһитов үлгәс, уны Тимергә килтереп ерләйҙәр. Улы Сәйетбаталға был ваҡытта - 22, уның ҡатыны Илсебикәгә - 25, улдары Ишдәүләткә 2 йәш була. Теләүбай Мөхәмәтовҡа 53 йәш була. (Уның улдары - Ғәле, Әхтәм). Аҙаҡ Аралбаевтар, Ҡондоҙбаевтар, Сәйетбаталовтар, Мөхәмәтовтар нәҫеле тарала. Есаул Аралбай Мөхәмәтовҡа был ваҡытта — 42, уның ҡатыны Көнһолтанға 45 йәш була. Уларҙың улдары - Шәмсетдин, Сәйфетдин, Үҙәнбай. Үҙәнбай Мөхәмәтовҡа — 42, ҡатыны Муллаһолтанға 44 йәш була (уларҙың улдары - Дәүләткилде, Йәләлетдин, ҡыҙы - Зөлхизә). Уларҙан Үҙәнбаевтар, Мөхәмәтовтар нәҫеле тарала. Ҡондоҙбай Мөхәмәтовҡа - 37, ҡатыны Ҡотлобикәгә - 34, улдары Дәүләтсураға - 15, Шәрәфетдингә - 11, Хисаметдин 8 йәш була. 1816 йылғы рәүиздә үрҙә яҙылған халыҡ Тимер ауылында иҫәпләнә. [1]

Ҡарағол. Тимер ҡарттың малдары бик ишәйеп китә. Ул малдарын көтөү өсөн Ағиҙел арьяғын биләгән. Тимер ҡарттың улы Ҡарағол малдарға ҡуралар төҙөтөп, малды шунда тотҡан. Шул туғайҙы Ҡарағол, тауын – Ҡарағол тауы һәм һырты, ҡаяһын – Ҡарағол ҡаяһы тип йөрөтә башлайҙар. [1]

Тәрәнуй. Ауылға төшкән юл ике тау араһынан һалынған. Элек ауыл ойошторола башлағас, юл һалынғанға тиклем, ошо үҙәктә бер һыйыр ҡазаға юлығып, үлеп ятҡан. Күп балалы ғаиләнең күҙ терәп торған берҙән-бер һыйыры булғас, хужабикә малын эҙләп тапҡандан һуң бик нык ҡайғырған, тәрән уйға ҡалған , Аҙаҡ ошо үҙәк аша ауылға юл һалғандар һәм “Тәрәнуй” тип йөрөтә башлағандар.

Шүрәле уй. Элек аттар өйөр-өйөр булып йөрөр булған. Бер ваҡыт өйөрҙәге бер ат көн һайын ҡара тиргә батып ҡайта башлаған. Был хәл көндә ҡабатланғас, халыҡ аптырауға ҡалған. Күмәкләшеп һөйләшеп, аттың һыртына сайыр һылап ебәргәндәр. Теге ат кисен башҡа аттарҙан ҡалып, арттараҡ ҡайтҡан. Ат өҫтөндә бер шүрәле ҡатыны ултырып килгән. Ул, ат һыртына һыланған сайырға йәбешеп, аттан төшә алмаған. “Нисек тә үҙе ысҡынып китер әле”, - тип уйлаған халыҡ. Бер нисә көн үтеп киткән, шүрәле илай башлаған. Уның янына килгән кешеләр, шүрәлене күргәндәр ҙә: “Әй, бисараҡайҙың йәш балаһы ҡалған икән, ебәрергә кәрәк, гонаһы булыр,” – тигән фекергә килгәндәр. Был һүҙҙәрҙе ишеткәс шүрәле ҡатын сәпәкәйҙәр һуғып, ҡыуанған. Май һөртөп, кәрәсинләп был ҡатынды төшөрөп ебәргәндәр. “Ҡайһы яҡҡа китер икән?!” – тип ҡыҙыҡһынып ҡарап торғандар. Шүрәле Ағиҙел йылғаһы аша сығып, туп-тура үҙәк (уя) буйлап тау башына сығып киткән. Шул уяны “Шүрәле уй” тип йөрөтә башлағандар. Ваҡыт үтеү менән шүрәле һүҙе онотолоп “Шәреле уй” исеме ҡалған. Ҡышҡы, яҙғы ҡар-һыуҙары, йәйге, көҙгө көслө ямғырҙар ошо уянан шәре булып ағып ята, уяның ысын исеме “Шүрәле уй” Ағиҙел йылғаһы ағымының һул яҡ ярында урынлышҡан. [10]

Яңыл аралы (1 вариант). Элек Тимер ҡарттың Яңылбикә исемле оҫта йырсы, бейеүсе бер килене булған. Яңылбикә төрлө ярыштарҙа, йыйындарҙа гел беренселекте алған. Бик көслө, ҡыйыу ҡатын ат ярыштарында ла ал бирмәгән. Бер ваҡыт яҙғы ташҡын ваҡытында, Яңылбикә үҙенең ярыштарҙа ал бирмәгән аты менән иҙел аша сығыуға бәхәсләшкән. “Әгәр ошо һыуҙы сыбар айғырым менән йөҙөп сыға алмаһам исемем Яңылбикә булмаһын!” – тип һыбай һыуға төшкән. Иҙел уртаһында ат һөрлөгөп, икеһе лә ағып киткән. Йәй көнө Иҙел буйындағы бер ауылда кәүҙәһен тапҡандар. Шул аралды “Яңыл аралы” тип атай башлағандар. Тимер ауылы менән Янһары ауылдары – араһында, Иҙелдең уң яҡ ярында, “Темәк” тапҡырында урынлашҡан был арал. Элегерәк Тимер ауылы кешеләре боҙҙан ат менән барғанда шул арал эргәһенән үтеп йөрөгәндәр. Ат һөрлөгөп ағып киткән кисеүҙе әле лә “Сыбар айғыр” тип йөрөтәләр. Сыбар айғыр” ауылдың көньяғында урынлашҡан. [6]

Яңыл аралы (2 вариант). Борон башҡорт халҡы йәйләүҙән йәйләүгә күсеп йөрөр булған. Ҡалмаҡай йәйләүендә ятҡанда Яңылбикә исемле әбейҙәрҙең бер өйөр йылҡылары юғала. Ҡарты бер нисә көн буйына эҙләп таба алмағас, Яңылбикә әбей, өйөр айғырын менеп, йылҡыларҙы эҙләй китә. Әбей атта бик оҫта йөрөй белгән була. Ул йылҡыларҙың юлын юллап Оһҡон (Оҫҡон) туғайға килеп төшә. Йылҡылар Оһҡон туғай ҡаршыһындағы Түбәнге туғайҙа йөрөйҙәр. Аҙналар буйына яуған көслө ямғырҙан һуң, Иҙел һыуы бик ныҡ ташҡан була. Яңылбикә йылҡылар яғына сығырға була. Ҡаршы яр текә булыу сәбәпле, айғыр ярҙы сыға алмай. Көслө һыу уларҙы ағыҙып алып китә. Әбей аты һороғоп сумып башын күтәрә алмай үлә. Улар Оҫҡон туғайҙың түбәнге осондағы аралға һағып ятып ҡалалар. Яңылбикә әбей һағып ятып ҡалған аралды исеме менән Яңылбикә аралы тиҙәр. [7]

Үлектәр арҡаһы. Был урын элек яҡын-тирә ауылдарының зыяраты булған. Ат еккән бөтә ерҙән дә унда абруйлы кешеләрҙе алып килеп күмер булғандар. Элек бында имән башында солоҡ (түңгәк) умарта булған. Ошо имән эргәһенә бик алыҫтан алып килеп бик уҡымышлы (белемле)

мулланы ерләгән булғандар. Ошо зыярат булған арҡаны “Үлектәр арҡаһы” тип йөрөтәләр. Ағастарҙы төпләп, ерҙе тракторҙар менән һөрөү сәбәпле ҡәберлектәр ер менән тигеҙләнгән.

Өмөс күпере. Ысын исеме Өммөниса. Башҡорттар электән үк бөтә малдары менән күсенеп йәйләүҙәрҙә йәшәгәндәр. Яҡын тирәләге сабынлыҡтарҙы малдан тапатмай ҡышлыҡҡа сабып алғандар. Һалҡындар төшөү менән ҡурпы ашатырға (“Ыҙма” йәғни, ыҫма – ауылды шулай атағандар) күсеп ҡайтҡандар. Ҡурпы майы, ҡурпы балы йыйғандар. Ыҫмаға ҡайтып килгәндә Нөгөш юлы буйында Өммөниса исемле ҡатын бәпәйгә ауырып китә. Бер батҡаҡ урында юл буйында малайы тыуа. Бәләкәй генә ағастан күпер һалып үтеп йөрөгәндәр. Шул күперҙе “Өмөс” күпере тип атағандар. Әле лә ул урынды шул исем менән йөрөтәләр. [6]

Тәрәнуй. Ауылға төшкән юл ике тау араһынан һалынған. Элек ауыл ойошторола башлағас, юл һалынғанға тиклем, ошо үҙәктә бер һыйыр ҡазаға юлығып, үлеп ятҡан. Күп балалы ғаиләнең күҙ терәп торған берҙән-бер һыйыры булғас, хужабикә малын эҙләп тапҡандан һуң бик ныҡ ҡайғырған, тәрән уйға ҡалған. Аҙаҡ ошо үҙәк аша ауылға юл һалғандар һәм “Тәрәнуй” тип йөрөтә башлағандар. [10] Тимер ауылында йәшәүсе Байсарина Йәмилә Ишбулды ҡыҙынан Мырҙағолова Раушания Ниязбай ҡыҙы яҙып алды

Студент үҙәге. 2003 йылда ауыл хакимиәте ҡарары менән студенттарҙың ата-әсәләренә ярҙам йөҙөнән 5-әр кубометр ағас бүленә. Был ағасты ҡайһы ерҙән алырға тип техник (ағас сүкеүсе) менән студенттарҙың аталары урман буйлап күп йөрөй, әммә оҡшашлы урын таба алмайҙар. Был бәхәсте шул ваҡыттағы главный лесничий Хайбуллин Рәфис үҙе килеп хәл итә: ауылдан 5-6 км алыҫлыҡтағы Боһондо йылғаһына төшкән үҙәк эсенән делянка үлсәп бирә. Ағасы ла бик шәптән булмай, транспорт менән алыуға ла шул тиклем уңайһыҙ. Был ағасты эшкәртеп алыу халыҡтың хәтерендә ныҡ ҡала. Шул ваҡыттан алып был үҙәкте “Студент үҙәге” тип йөрөтәләр. [11]

Юл буйы. Оло юлдан ауылға тиклемге ара 9 км. Оло юлдан бер саҡырым самаһы килгәс Һаҙый батҡағы тигән ер бар. Унда Һаҙый исемле шофер машинаһы менән батып ултырған. Элек ауылда көтөү булған саҡта оло юлға сыҡҡансы юл эштәрендә халыҡтың сабынлыҡтары булған.

Ҡалҡаман утары. Ағиҙел ярының ике яҡлап төрлө туғай-яланлыҡтарын үҙ итеп, тимерҙәр донья көтөр утар барлыҡҡа килтергәндәр: Ҡалҡамановгар Яҙҙауар туғайына нигеҙ ҡороп йәйләгәндәр. Был осорҙа Ҡотлогилде Ҡалҡаманов (91 йәшендә 1813 йылда үлгән) улдары Байъегет, Сәғиҙулла, Һәйетҡол, Күсәрбай менән йәшәгән. 2-се йортта Иҫәнғол Ҡалҡаманов һәм улдары Бәшәрғол, Исламғол, Солтанғол, Иҫәнбай йәшәй. Иҫәнбай Ҡалҡамановтың ҡыҙҙары - Йомабикә, Миңлебикә, Назбикә, Һөйөрбикә. Иҫәнбайҙың нәҫеле Тимер һәм Байғаҙы ауылдарына тарала. (Һәйетбайҙар араһы). [1]

Тирмән. Ауыл халҡы артҡас, икмәк еткереү ҡыйын булған. Быға, игендең уңышы бик һәйбәт булыуға ҡарамаҫтан, ауылда тирмән булмау сәбәпсе булған. 1940 йылда Боһондо йылғаһы буйында Тирмән төҙөйҙәр. Тәүҙә тирмәнсе булып татар милләтенән булған Сафый тигән кеше эшләгән. Тирмән ауылды юғары сифатлы он менән тәьмин иткән һәм 1950 йылдарға тиклем эшләгән. Хәҙер ул урынды Тирмән тип кенә йөрөтәләр.

Шахталар. 1930 йылда Тимер ауылы эргәһенән төҙөлөш өсөн таш ала башлайҙар.Таш аҡтарып алған ерҙән шахталар барлыҡҡа килгән. Был эштәрҙә ситтән килгән урыҫтар етәкселек итә. Эш шарттары бик ауыр була. Халыҡ борон ошо таштар менән өй баштарын япҡан. Таштарҙы Ағиҙел йылғаһы буйлап биржаларҙа ағыҙалар. Шахталар ауылда өс урында булған. 1940 йылда был эште туҡтаталар. Был таш менән Тимер ауылында йәшәүсе Исхаков Рамаҙан өй башын япҡан. Алып бөтөлмәгән таштарҙы әлеге ваҡытта «Ҡарағол»да осратырға була.

Ҡасыу юлы. Был хәл 1920 йылдарҙа Граждандар һуғышы осоронда була. "Ҡыҙылдар еңә башлағас, аҡтарҙың ике офицеры тау башына менеп ҡасҡандар. Улар "Ҡасҡан юл, Ҡасыу юлы, халыҡ телендә ҡыҫҡартып "Ҡасуй" юлы тип атала.

Балаган. "Ҡыҙыл таң" колхозының Тимер бригадаһы районда иң алдынғыларҙан һаналған. Бер нисә тапҡыр күсмә Ҡызыл Байраҡ менән бүләкләнгән. Бигерәк тә игенселек алға киткән, ләкин баҫыу эшсәндәренә яланда эшләүе бик ауырға төшкән. Шуға ла улар уңайлы шарттарҙа тамаҡ ялғап, ял итеп алһындар өсөн 1970-се йылдарҙа ялан ситендә өй эшләгәндәр һәм балаган тип атайҙар. Колхоз тарҡалғандан һуң да ауыл халҡы был урынды Балаган тип йөрөтә.

Ярыш. Тимер ауылы халҡы электән ат көтөргә яратҡан. Һәр бер хужалыҡта колхозланыу осорона тиклем ат булған. Сөнки бөтә хужалыҡ эштәрендә ат кәрәк. Бигерәк тә малайҙар атта йөрөргә яратҡан. Ауылдан 4 км саҡырымтағы урында һәр ваҡыт малайҙар ат менән ярышҡандар. Ат урыны булған ерҙе Ярыш тип атағандар.

Олоҡман соҡоро. Ҡолдобаев Олоҡман колхозда һуғыш алдынан бригадир булған. Бик һәләтле, тырыш үҙ эшенә яуаплы ҡараған. Ул бригадир булған осорҙа колхоз алға киткән. Яҙ көнө бригадирҙың аты соҡорға батып үлгән. Хәҙерге халыҡ был соҡорҙо Олоҡман соҡоро тип йөрөтә.

Һаҙый батҡағы. Иҫке Собханғол ауылында йәшәүсе Билалов Һаҙый шофер булып Тимер ауылына йыш килгән, аҙыҡ-түлек ташыған, сөнки ул ваҡытта йөк ташыусылар бик аҙ, юлдар насар булған. Был хәл 1957 йылда булған. Билалов Һаҙый Тимерҙән ҡайтып барғанда батҡан, машинаһын трактор менән сығарғандар. Халыҡ был урынды Һаҙый батҡағы тип йөрөтә.

Утыфы. УТФ. Бөйөк Ватан һуғышынан һуң әкренләп колхоздар аяҡҡа баҫа башлай. Тимер ауылынан 4 км алыҫлыҡта 1950 йылдарҙа һарыҡ фермаһы булдыралар. Ун йыл тирәһе эшләгәс, һарыҡ фермаһын бөтөргәндәр. Халыҡ был урынды утыфы тип атай башлай, ул Тимер фермаһы тигәнде аңлатҡан.

Үлектәр үҙәге. Тимер ауылының түбән осондағы бер үҙәкте халыҡ Үлектәр үҙәге тип йөрөтә. Сөнки бында XVIII быуаттар тирәһендә бында зыярат булған. Бында боронғо яҙыуҙар менән ҡәбер таштары бик күп булған. Һуңғы осорҙа бер генә ҡәбер ташы тороп ҡала, ләкин был ташты кемдер алып китә.

Үлек урманы. Тимер ауылы халҡы Ҡалмаҡай яланында йәшәгән. Йәйләүгә бөтәһе лә ғаиләләре менән күскәндәр. Йәйләү ваҡытында бер кеше ат урлаған. Урлаған өсөн был кешене береһелә яратмаған, яңғыҙ йөрөгән. Ул үлгәс уны айырым бер урында ерләгәндәр. Был кеше ерләнгән урынды үлек урманы тип йөрөтә башлағандар.

Комбайн юлы. Боһондо арҡаһы яланында ер бик уңдырышлы булған, шуға күрә уңыш юғары булған. Тау бейек һәм текә булғас бында комбайн менән 1960 йылдарҙа конбайн менер өсөн яңы юл һалғандар. Был юлды халыҡ комбайн юлы тип атаған.

Мәмерйә

Ҡалҡаман мәмерйәһе. Ҡотлогилде, Иҫәнғол Ҡалҡамановтар ошо Яҙҙауар туғайына нигеҙ ҡороп йәйләгәндәр. Күп итеп мал аҫырағандар. Йәйге осорҙа һалҡын мәмерйәгә боҙолмаҫ өсөн ит һәм башҡа нәмәләрҙе арҡанлап аҫҡа төшөргәндәр, кәрәк саҡта алғандар. Ҡалҡаман нәҫелдәрен, уларҙы ғына түгел тотош Тимер халҡын мәмерйә тирәһен дә йәшәйеш алып барғанға күрә, бире заттары тип йөрөтәләр. [1]

Ауылымдың ер-һыу атамалары

Кәмәше мәмерйәһе, тауы. Ағиҙел аша кәмә менән сығыу урыны тәрән һәм тоноҡ. Кәмә сығышы – "Кәмәше", тауын – "Кәмәше тауы", һыртындағы мәмерйәләрен дә (өс урында) "Кәмәше мәмерйәләре" – тип кенә йөрөтөләр.

Ауылдың тирә-ягындагы йылгалар: Ағиҙел, Боһондо, Үҙән йылғалары.

Оло һәм Бәләкәй Ҡарамалы. Үҙән йылғаһы буйындағы сабынлыҡтар. Ҡарамалы ағасы булғанға күрә әйтелгән.

Үҙән йылгаһына ҡушылган йылгалар. Үҙән йылғаһы буйындағы Тимер ауылы сабынлыҡтары. Бәрҙейылға, Һәүәнәк, Сәйтуған йылғалары Үҙәнгә йылғаһына ҡоя.

Боһондо йылгаһы һәм тамагы. Тимер ауылынан өс саҡрым түбәндә Боһондо йылғаһы Ағиҙелгә ҡушылған урын Боһондо тамағы тип йөрөтөлә. Йылғала бәрҙе, бағыр балыҡтары ла заманында күп булған.

Шишмәләр: Ҡалмаҡай шишмәһе, Һары сәсле ҡыҙ шишмәһе, Һары бейә шишмәһе, Суҡраҡты (Соҡор аҡты) шишмәһе.

Тимер кешеләренең исеменән ҡалган ер-һыу атамалары. Ҡарашай, Ҡалҡаман, Баймырҙа, Ҡалмаҡай, Үҙән, Баҡкол, Бохмаш, Яңыл аралы, Ҡарағол, Исмәғил, Зиннәт сабыны, Лоҡман соҡоро, Йәнсалай ҡоҙоғо, Хөсәйен үҙәге, Фәтхулла ҡоҙоғо һ.б.;

Тауҙар: Ослотау, Сейәлетау, Шәмсекәй тауы, Аҡтау, Ҡаратау, Ҡарағол ҡаяһы һәм тауҙары ауылды уратып алған. Тимер ауылы ҡаҙан эсендә ултырған кеүек. Яугилде тауы, Ҡараһыйыр тауы.

Тау һырттары: Оло юлға сыҡҡан юл буйында Арҡа тауы башындағы ҙур ялан, Арҡа, Түбәнге, Үрге арҡа, Боһондо арҡаһы, Үлек арҡаһы, УТФ тауы һәм үҙәге..

Ҡаялар, таштар: Ҡарағол ҡаяһы, Аҡташ, Сыбарайғыр, Өсташ, Бетекәй таш, Кәмәше ҡаяһы, Һәйетбай ташы, Күбәташ.

Урмандар: Ҡараһыйыр урманы, Суҡраҡты, Ҡалмаҡай, Оло юлға башы, Сәйтуған урманы, Үҙән тауы, Вышка торған ер.

Үҙәктәр (кулдар): Тәрәнуй, Нәшеруй, Шәреле уй, Шүрәле уй, Тоҡан, Хөсәйен үҙәге, Көтөүсе үҙәге, Бүреяҡкан үҙәк.

Юл исемдәре: Ҡасы(у) юлы, Оло юл, Ҡасҡындар уяһы, Ҡыя юл;

Сабынлыҡ, бесәнлек: Сығанаҡты, Буҙ бейә, Серәкәй, Ҡарағошто, Һары бейә, Оҙон ялан, Үҙән буйы яландары: Айыуала, Хәнйәр, Баҡкол, Ҡаҙыякты, Айыуатҡан, Әсебар башы, Күкбесән, Ҡарашай буйы, Исмәғил, Мүкте, Баймырҙа, Оҙон ялан, Әсебар буйы, Әсебар башы, Күбәташ.

Күпер исемдәре: Ҡарағол күпере, Өмөс күпере, Ғәлемырҙа күпере.

Ҡойо, ҡоҙоҡ (ҡотоҡ): Йәнсалай ҡотоғо, Ҡалмаҡай ҡотоғо, Суҡраҡты ҡойоһо.

Кисеү исемдәр: Түбәнге туғай кисеүе, Кәмәше, Яҙҙауар, Бохмаш, Үрге кисеү, Ҡарағол кисеүе.

Игенлек исемдәре: Йүкәле, Боһондо арҡаһы, Яҙҙауар, Бохмаш, Түбәнге туғай.

Зыярат исемдәре: Күсмәҫ ҡабағы, Үлекбар, Үлектәр арҡаһы, Тәрәнуй урыҫ ҡәберлеге.

Баҫыу, аҡлан, ялан исемдәре: Өс йылға аҡланы, Иҫәнъюл,Ҡарамалы, Ишкилде, Айыуатҡан, Олотау яланы;

Һаҙ, һаҙлыҡ: Дөйә һуйған,Ҡалмаҡай һаҙлығы, Атбатҡан һаҙы, Мүкте һаҙы (Нөгөш буйында)..

Соҡор исемдәре: Лоҡман, Яхъя соҡоро, Гөлйөҙөм соҡоро, Аҡбалсыҡ соҡоро, Суҡраҡлы, Нөгөш Суҡраҡлыһы (соҡор аҡты һүҙенән).

Ташөй, мәмерйә, мәғәрә исемдәре: Кәмәше, Ҡалҡаман, Тимер шахтаһы, Үрге кисеү шахтаһы, Сыбарайғыр шахтаһы.

Үҙән, ҡыҫыҡ, туғай, төбәк исемдәре: Тәпәшәк башы, Бохмаш туғайы, Түбәнге туғай, Баймырҙа, Ерексә башы, Сәйтуған, Ҡыҫыҡ утары.

Ҡабаҡ, яр исемдәре: Әсмә ҡабағы, Ҡараһөбә (Нөгөш буйында), Суҡраҡты, Йәйпе (Нөгөш буйында), Баҡкол ҡабағы, Текә ҡабаҡ яры, Күл яры, Ҡултыҡ яры, Боһондо яры.

Дегет ҡайнатҡан баҙҙар: Зыя баҙы (Нөгөш буйында), Ыхмайыл баҙы (Үҙән буйында) Боһондо яры баҙы.

Аралдар: Бохмаш аралы, Яңыл, Темәк аралдары, Эстакада аралы.

Шыуҙырғыстар: Үрге шыуҙырғыс, Сыбарайғыр янындағы шыуҙырғыс.

Юлдар: ***Бөрйән юлында*** Түбәнге ос, Күсмәҫ төбө, УТФ, Бөрйән йылғаһы һәм үҙәге, Темәк-Янһары ауылы

Нөгөш юлы: Тимер арҡаһы, Аралбай, Аҡбейек, Һаһыҡ яланы, Ҡарағошто, Нөгөш суҡраҡтыһы, Ҡараһөбә, Баҡкол, Күбәташ, Текә ҡабаҡ башы, Оло Айыуала, Бәләкәй Айыуала, Мүкте, Баймырҙа, Әсебар юлы, Әсебар башы. Баймырҙа - Оҙон ялан. [13]

[1] Дамир Зиннәт улы Аллабирҙин, 1962 йылғы.

[2] 1966 йылда Тимер ауылы Алтыншин Ғибаҙетдин Баймырҙа улынан (1886 йылғы) әҙәбиәт уҡытыусыһы Бикмөхәмәтов Шәһиғәле Зәйнәғәле улы яҙып алды.

[3] Әҙәбиәт уҡытыусыһы Бикмөхәмәтов Шәһиғәле Зәйнәғәле улы.

[4] Өләсәһе Бикмөхәмәтова Гөльямал Фәттәхетдин ҡыҙынан (1902 йылғы) Бикмөхәмәтова Фроза Шаһиғәле ҡыҙы яҙып алған.

[5] Олатаһы Яубаҫаров Ғәлимйән Һибәтулла улының (1908 йылғы) һөйләүе буйынса Яубаҫарова Земфира Хәкимйән ҡыҙы яҙып алды.

[6] Яманғолов Ҡорбанғәле Ташбулат улы 1904 йылда Тимер ауылында тыуған. Уның һөйләүе буйынса иҫтә ҡалғандарҙы Буранова Хәмиҙә Моталлап ҡыҙынан (1936 йылғы) улы Арҫланғужин Рөстәм Азат улы яҙып алды.

[7] Тимер ауылы Алтынбаев Ниғмәтулла Кәлимулла улы (1898 йылғы) һөйләүе буйынса туған тел һәм әҙәбиәт укытыусыһы Бикмөхәмәтов Шәһиғәле Зәйнәғәле улы яҙып алған.

[8] Ололарҙың һөйләүе буйынса Фроза Бикмөхәмәтова яҙып алған.

[9] Өләсәһе Баязитова Ғәйнихаят Хәлфетдин ҡыҙы (1911 йылғы) һөйләүе буйынса Баязитова Гөлсәсәк Рауил ҡыҙы яҙып алды.

[10] Тимер ауылында йәшәүсе Байсарина Йәмилә Ишбулды ҡыҙынан Мырҙағолова Раушания Ниязбай ҡыҙы яҙып алды

[11] Шул осорҙағы бер студенттың атаһының һөйләүҙәре буйынса яҙып алынды.

[12] 2008 йылда Иҫәнаманов Шәйхислам Исхаҡ улы һөйләүенән Байғазин Миңлеәхмәт Хаммат улы һөйләүенсә Аллабирҙин Дамир Зиннәт улына яҙып алған.

[13] Информанттар: 1. Бикмөхәмәтов Шаһиғәле Зәйнәғәле улы, 1939 й.

2. Аллабирҙин Таһир Зиннәт улы, 1955 й. Язағолова Миңзәлә Таһир ҡыҙы яҙып алды.

.

Йөкмәткеһе

Авторҙан……………………………………………………….. 7

Атамалар нимә һөйләй?... 11

Бөрйәндәрҙең хужалығы һәм көнкүреше тураһында тарихи мәғлүмәттәр…12

Ер-һыу атамалары араһында кеше исемдәренә бәйлеләре ……………………15

Бөрйән районы халҡында ат культы, уларҙың ауыҙ-тел ижадында һәм район-дың топонимикаһында сағылышы………………………………………………16

Уртаҡлыҡ исемдәрҙән күскән Бөрйән районы топонимикаһы өлгөләре……20

Бөрйән районының фаунаһы һәм уға бәйле топонимдар………………………21

Бөрйән районы топонимикаһында гидронимдар, оронимдар, ойконимдар һәм микротопонимдар……………………………………………………………… 25

Аҫҡар ауыл биләмәһенә ҡараған ер-һыу атамалары……………………………29

Әтек ауыл биләмәһенә ҡараған ер-һыу атамалары……………………………54

Байғаҙы ауыл биләмәһенә ҡараған ер-һыу атамалары………………………67

Байназар ауыл биләмәһенә ҡараған ер-һыу атамалары………………………81

Ғәлиәкбәр ауыл биләмәһенә ҡараған ер-һыу атамалары……………………..103

Ырғыҙлы ауыл биләмәһенә ҡараған ер-һыу атамалары………………………118

Кейекбай ауыл биләмәһенә ҡараған ер-һыу атамалары ………………………127

Ҡыпсаҡ ауыл биләмәһенә ҡараған ер-һыу атамалары…………………………140

Ҡолғана ауыл биләмәһенә ҡараған ер-һыу атамалары………………………..183

Иҫке Монасип ауыл биләмәһенә ҡараған ер-һыу атамалары…………………195

Иҫке Собханғол ауыл биләмәһенә ҡараған ер-һыу атамалары………………219

Тимер ауыл биләмәһенә ҡараған ер-һыу атамалары…………………………..245